

НОҒМАН
МУСИН

# МӘҢГЕЛЕК УРМАН



НОҒМАН
МУСИН

# МӘҢГЕЛЕК
# УРМАН

РОМАН

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1976

М 87

Нугман Сулейманович Мусин

# ВЕЧНЫЙ ЛЕС

РОМАН

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Т. Б. Сәғитов*
Рецензенте *Ә. М. Мирзаһитов*
Художество редакторы *А. А. Астраханцев*
Рәссамы *Б. Ә. Хәйбуллин*
Техник редакторы *М. С. Асылбаева*
Корректорҙары *Р. Л. Ҡаһарманова, Ә. Ғ. Мәғәсумова*

Наборға бирелде 15|XII 1975 йыл. Баҫырға ҡул ҡуйылды 31|III 1976 йыл. Ҡағыҙ форматы 84×108¹|₃₂. Тип. ҡағыҙы № 3. Шартлы баҫма таб. 17,22. Учет.-изд. таб. 17,67. П00004. Тиражы 12000. Заказ № 355. Хаҡы 63 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса идаралығының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.

$M\frac{0763-308}{M\ 121\ (03)-75}$ 65—76

## БЕРЕНСЕ КИҪӘК

— Ҡурай!
— Әү.
— Ҡайҙа үҫтең?
— Урманда үҫтем.
— Кем ҡырҡты?
— Оҫта ҡырҡты.
— Ни эшләргә?
— Уйнарға.

Тау битләүен икегә телеп туғайға табан һуҙылған уялағы тубылғып үҫкән үләндәр араһында йыллаған ҡараһыу ҡуңыр төҫтәге ҡыу ҡурайҙы күргәс, Кеше уны имгәтмәй, иләп кенә йолҡоп алды, тамыр яғын ҡырҡып ташланы һәм, бына шулай һамаҡлай-һамаҡлай, уның оҙонлоғон үлсәне, һигеҙенсе тотамы тәңгәленән осон үткер бәкеһе менән тип-тигеҙ итеп киҫте; шунан, һәр береһенең араһын өс иле ҡалдырып, бармаҡ биттәре йәпләшеп торорҙай итеп, тәпейләп ҡурайҙың һыртынан дүрт, аҫ яғынан бер тишек яһаны; ярылып-фәлән ҡуйманымы икән тигәндәй, уны әкрен генә сирткеләп, унан өрөп, ауырлығы бөтөнләй тойолмаған ҡыу ҡурайҙы ике усында һикерткеләп ҡараны. «Уйнауҙан башҡа һис нәмәгә лә эшкинмәйем мин, Кешем», тигән төҫлө, ҡурай уның устарында ишетелер-ишетелмәҫ кенә дыңғырҙап ҡуйҙы. Кешенең алдында ғына, һылыу ҡыҙҙың майлап үргән

сәс толомо кеүек, ишелеп-сылтырап, өс-дүрт ҡарыш киңлектәге ҡаран ағып ята. Ул шунан услап һыу алды, ауыҙына уртланы һәм ҡорғаҡһыған ҡурайҙың эсенә бөрктө. Шунан ҡурайын йәпләп тотоп, осон тешенә терәне, көсәнмәй генә өрөп, уның тауыш-моңон самаланы. Ошонан аҙаҡ ҡына, үҙ тырышлығының юҡҡа китмәүенә ышанғас ҡына, аяҡтарын киреберәк баҫты, киң күкрәген ҡайҡайта төшөп, башын артҡа саңҡайтты, һәм әле генә уя буйындағы йәм-йәшел үләндәр араһында етемһерәп ултырған таҡыябаш ҡурай тирә-юнгә сихри моң сәсергә тотондо. Елдәр киҫкеләгән түшен ғорур киреп торған Төлкөсура ҡаяһы ла, уның һыртындағы бүтән ағастарҙан үргә ашып, йәшен йәшәгән болан мөгөҙөндәй тырпайған ҡыу ботаҡтары менән күкте тишерҙәй булып ултырған ике ҡолас етмәҫ йыуанлыҡтағы солоҡ ҡарағайы ла, яр буйҙарындағы тәрилкә башлы томбойоҡтарҙы ҡалтыратып, үҙ һыуҙарын тынғы белмәй әллә ҡайҙарға ҡыуалаусы Норош йылғаһы ла, һайрар ҡоштарға бай әрәмәлектәр ҙә — бөтә донъя шымып, уйсанланып ҡалды. Ҡеше ҡулындағы ҡурай иһә, берсә яҙғы ташҡындарҙағыса ярһыу көс менән, берсә эргәлә шым ғына сылтырап ағып ятҡан ҡаран тауышындай һәүетемсә көй һуҙып, бөтә тирәне моңонда бәүелтә бирә. Әйтерһең, тауҙар, урмандар, йылғалар, барса тереклек ишетелер-ишетелмәҫ кенә тауыш менән уға ҡушыла:

Күккә олғашыр ирәбә солоҡтарға
Менәм тимә, кирәм булмаһа,
Яңғыҙ егет ҡурай, һай, һыҙҙыртмаҫ,
Уй-моңдарға күңеле тулмаһа...

Ҡеше, ҡурай моңона тәбиғәттең бына шулай берҙәм яуап биреүен ишетеүҙән кинәнес тапҡандай, уйҙауынан туҡтаны. Сүкәйеп, ҡарандан бер ус һыу эсте, аяҡтарын һуҙып, үләнгә ултырҙы.

Эйе, Ҡешенең күңелендә әллә ни тиклем уйҙар ҡайнаша ине. Бөгөн таң һарыһы менән тороп, итек йөҙләгенә ысыҡ һирпелдереп, урманға сығып китте ул. Әллә нисә саҡрым юл үтте, үҙе гиҙгән ерҙәр, урман-һыуҙар хаҡында осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарға сумды; ер күрке урмандың үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген күҙ алдына килтерергә тырышты.

Бына әле ҡурай тартып алғас, унын ошо уйҙары асыҡлана төшкәндәй тойолдо, улар бер епкә теҙелеп ағырға кереште.

Һай, урманым, урманым, күпте күргән урмандарым минең. Һинән башҡа — ерҙе, һинән айырып һыуҙы, үҙем һулаған һауаны күҙ алдына килтереп буламы? Һин юҡ икән — ерҙең йәм-күрке юҡ; һин туплаған дым бөттөмө — йылғалар ҡорой; һин шифалы һутыңды сәсмәнеңме — тыны ҡурылыуҙан ерҙә әҙәм заты ҡалмаç ине. Эйе, һин әҙәм балаларын утлы, һыулы, ризыҡлы, йортерле иткәнһең. Ер йөҙөндә тереклек башланғандан бирле кешеләр һинән ни саҡлы изгелек күрҙе икән? Иçәпләп бөткөһөҙҙөр. Ләкин бына улар бөгөн ошо хаҡта ныҡлап уйлап ҡарайҙармы? Үткәндәрҙе иçкә алып ҡына ҡалмайынса, алдағы ғүмереӊ тураһында ла хәстәрлек күрәләрме?

Ғүмер тигәндәй, был ер йөҙөндә кем йәки нимә иң оҙаҡ йәшәгәне икән? Таумын тигән тауҙармы әллә ер күкрәген тишеп сыҡҡан йылғалармы? Улай тиһәң, «үлгән» тау урынында тау ҡалҡмай, ҡороған йылға үҙәнен шыр ҡаплай, — оҙаҡ йәшәһәләр ҙә, улар мәңгелеккә китә был донъянан. Тереклек донъяһындағы йән эйәләренең иһә һәр ҡайһыһының үҙ ғүмер юлы: яҡты донъяға килә торалар, яңы быуынға яңы ғүмер бүләк итеп, китә торалар. Бер ҡараһаң, улар, йәшен ялтлауындай, бик аҙ йәшәй; ентекләберәк уйлаһаң, үҙ быуындары алмашыныуға үҙҙәре сәбәпсе булғас, был һис тә фажиғә түгел, ә яңырыш икәнен аңлайһың...

Ҡулына ҡурайын тотҡан Ҡеше бына шулай уйлана һәм, үҙ алдына ҡапыл: «Ә урман ғүмерен ни менән үлсәргә һуң?» — тигән һорау ҡуя. Бына мин бөгөн генә күпме юл үттем, урмандың ҡартайып муртайғандарын да, күкрәп үçкәндәрен дә, яңы үргенләп кенә килгәндәрен дә күрҙем. Эйе, урмандар ҙа бөтөнләйгә ҡоромаçҡа тырыша, мәңгелек йәшәйешкә ынтыла. Ләкин уларҙың был ынтылышында ниндәйҙер көсһөҙлөк тә һиҙелә түгелме? Ана бит, әҙәм ҡулы киçкән юҡә урманы урынында ҡотороноп уçаҡтар үçә, ҡасандыр ҡарағайҙар буй ебәреп, ҡыуанышып ултырған биләмәне сауҡалыҡ баçып алған; ә ағасы киçелгән ҡайһы бер диләнкәләр етемһерәп, хатта юнле-башлы үлән дә үçмәç ер булып, ҡаҡ яланға әүерелеп ҡалған. Үҙ урынына үҙ затын ҡалдырып китергә һәр ағастың үҙ көсө генә етеп бөтмәй шул.

Тәбиғәттең үҙ вайымы менән ағышын ситтән генә күҙәтеп торһаң, ер йөҙөн иң әрһеҙ, бер үк төрлө ағастар ғына ҡаплап алмаҫ тимә. Әгәр шулай була ҡалһа, бер төрлө генә ағас үҫкән урмандың ни йәме? Уның хәҙерге төҫө лә, хуш еҫе лә, хозурлығы ла булмаясаҡ бит. Матурлыҡ — төҫтәр, еҫтәр төрлөлөгөндә. Уларҙы беҙ, кешеләр, һәр ҡайһыһын үҙ урынына ҡуйырға, үҙенсә балҡыта белергә тейешбеҙ. Имәнгә — имән, ҡарағайға — ҡарағай, уҫаҡҡа — уҫаҡ, ҡайынға ҡайын алмашҡа килһен. Юғиһә мәғрур имәнһеҙ, зифа ҡайынһыҙ, мәңге йәшел ҡарағайһыҙ, ут ҡыҙыл миләшһеҙ урмандың ни йәме? Бал тамыҙған юкә сәскәһеҙ, балыҡ ҡарпытыр муйыл сәскәһеҙ урмандың ни еҫе? Туғайҙағы әрәмәләр урынында өйәнкеләр генә һерәйешеп ултырһа, һандуғастар уны төйәк итерме? Шулай уйлай Кеше һәм күптән ишеткән хикәйәтте хәтерләй.

...Әүәлге замандарҙа бер хандарҙың ханы, яҡын-тирәләге бөтә халыҡтарҙы буйһондороп, ҡол итеп бөткәс, артабан үҙенең ҡөҙрәтен кемгә күрһәтергә белмәйенсә, йыйын йыйған да былай тип яр һалған: «Минең барлыҡ биләмәләремдәге башҡа төрлө ағастар ҡырҡылып бөтөп, тик һәр саҡ йәшел ҡарағайҙар менән шыршылар ғына ҡалырға тейеш. Мин йыл әйләнәһенә йәшел урман эсендә йәшәргә теләйем!» Хан, ҡул аҫтындағы бөтә кешеләрҙе ҡушып, ҡарағай менән шыршынан башҡа ағастарҙы киҫтереп бөткән, ти. Иң ҙур ҡарағай урманының уртаһына алтын-көмөштән ғәжәйеп шәп һарай һалдырып йәшәй башлаған. Тәүге мәлдә уйым-уйым ултырған ҡарағай, шыршы урмандары, ысынлап та, харап матур тойолған. Ләкин йылдар үтеү менән, кешеләр тормошона бер-бер артлы ҡытлыҡ килә: йәйә бөгөргә — саған, уҡ юнырға — ҡайын, суҡмар, һөңгө һабы эшләргә — имән, ашарҙарына муйыл, балан, сәтләүек таба алмай яфа сигәләр икән. Бер-бер артлы йылғалар ҡорой, кешеләрҙең тыны тарыға. Өҫтәүенә, һауала ылыҫ еҫе үтә күбәйеп киткәнлектән, яман еҫ ауырыуы таралып, тәүҙә мал-тыуар ҡырыла, шунан төбәге-төбәге менән кешеләр үлә башлай. Ул да булмай, ҡарағай, шыршы урмандары ла ҡорой, ылыҫтары һарғая. Әйтерһең, яңы ғына гөлтләп ултырған урмандарҙы утлы ел ялмап үткән. Хан үҙе лә сәсрәп ауырып китә, ти, бер заман. Тәғәм ризыҡ, йотом да һыу һеңдерә алмай икән был. Ул, аптырағас, муллаларҙың өшкөрөү-төкөрөүҙәренән һис кенә лә файҙа бул-

мағас, ниндәй сир менән ауырығанлығын белеү өсөн, ил ағаһын — йөҙ йәшәр аҡһаҡалды саҡыртып алған. Әй, тәңре ханым, тигән ил ағаһы, бер төрлө генә йыныстан торған мәмләкәттең ғәме, бер иш ағас ҡына үҫкән урмандың йәме юҡ. Ир ирҙән быуаҙый, тип халыҡ хаҡ әйткән. Йыныс йынысты байыта, бер төрлө ағас тамыры икенсеһенә йәшәү һуты өрә, ханым. Әгәр биләмәләреңдәге әүәлге урмандарҙы тергеҙергә бойорһаң, мин һине был сиреңдән ҡотҡарыр инем. Боғаҙына әжәл тырнағы йәбешкән хан түҙмәгән, баш вәзирен саҡыртып алып, бар халыҡты һәр төрлө ағастан урман ултыртырға ҡуш, тигән. Ил ағаһы ошонан аҙаҡ ханға үҙе йылдар буйына һаҡлап йөрөткән юкә сәскәһен сайҡатып, балан ҡағы ҡушып, мәтрүшкә ҡатыш ҡарағат сәйе эсергән, ҡаҙаяҡ, аҫҡорһаҡ, мәтрүшкә ҡушып бәйләнгән ҡайын миндеген парлап, күкрәгенә ҡуйған да муйыл сәскәһен еҫкәткән. Һәм ханыбыҙ һин дә мин шәбәйгән дә киткән, ти. Ошонан аҙаҡ хан олю йыйын йыйған, халыҡҡа ер йәннәтенә ҡул күтәрмәҫкә васыят әйтеп ҡалдырған, имеш, ти...

Ошо хикәйәтте хәтерләгәс, күңеле ауыр уйҙарҙан арынғандай булып, Кеше урынынан күтәрелде, ултырған саҡта ҡатынҡып киткән тәнен яҙыу өсөн, ҡолас ташлап киреләде һәм, ике ҡулын да биленә ҡуйып, һыҙа буйынан юғарыға атланы. Бер аҙ барғас, уңға боролоп, өҫтөндә ике ҡолас етмәҫ йыуанлыҡтағы солоҡ үҫкән Төлкөсура һыртына күтәрелде.

Был тирәләге, Норош буйындағы, иң бейек ҡая ине Төлкөсура. Уның ҡояшҡа ҡараған, меңәр йылдар буйы ел-дауылдар телгеләгән күгелйем таш битләүе, хас яңы ғына төҙөлөп бөтөп, стапелдән һыуға төшөрөргә әҙерләнгән гигант океан карабы шикелле, түшен ҡайҡайтып һауаға ашҡан. Уның һыртына, Төлкөсураның таш моронона тамырҙарын хәтәр тәрән ебәреп үҫкән, нисәмә быуат ғүмер кисереп, иҫәпһеҙ күп тарихи ваҡиғаларға шаһит, ҡайыры-тәңкәләре һыҙырылып төшкәнлектән, олоно күгелйем төҫтәге ҡоросҡа, осондағы ботаҡтары әкиәттәге болан мөгөҙөнә оҡшап ҡалған мәғрур солоҡ иһә шул ғифриттәй ҙур караптың күперсәһенә сығып баҫҡан капитанды хәтерләтә ине. Ҡаяның көнсығыш яҡтағы һөҙәгерәк битләүен бер тиң еткән, уҙыша-уҙыша буйға үҫкән, остарындағы йәйектәрен сатыр иткән, олондары балауыҙ һары тәңкә менән сыбарланған ҡарағайҙар ябып алған. Һырт өҫтөндәге ҡарағайҙар араһында-

ғы ап-аҡ ҡулдәктәренә сыйҙым-сыйҙым ҡара биҙәк төшкән ҡайындар, йәшел еләндәре уңа башлаған уҫаҡтар, егеттәр ҡосағындағы ҡыҙҙар шикелле, оялсан ғына йылмайышып ултыралар.

Төлкөсура ҡаяһына ҡаршы яҡта, Норош йылғаһының аръяғында, ҡола ялан йәйрәп ята. Уның дүңгәктәр менән сыбарланыуынан бында ла күптән түгел шаулап урман үҫкәнлеген аңларға мөмкин. Кеше, был яҡтан ҡарар күҙгә күренмәһә лә, ағасы һыпырып ҡырҡылған диләнкәнең ярты самаһында өс-дүрт быуын ғына һиккерткән ҡарағайҙар теҙелеп үҫеп килгәнен белә. Белмәй һуң, яҙ көнө генә уларҙың нисек ҡышлауҙарын тикшереп, ентекләп ҡарап сыҡҡайны бит. Ҡасан шулар буй еткереп, әле ҡотһоҙ ятҡан ҡола ялан тағы нисә йылдан шаулап үҫкән урманға күмелер? Ай-һай, күп ваҡыт кәрәк шул бының өсөн. Урман — сабынлыҡ түгел. Үлән шикелле, яҙ һайын морон төртөп, гөлтләп үҫеп китә һалмай. Бер ҡырҡтыңмы, яңынан өлгөрөрөн алтмыш-етмеш йыл, хатта быуат буйына көтәһең...

Солоҡ төбөнә килеп баҫҡан Кеше, тирә-яғына күҙ һалып, бына шулай уйлана. Үҙен маҙаһыҙлаған уйҙарҙан аҙ ғына ҡотолоп торор өсөнмө, ул солоҡтоң ике-өс ҡолас етмәҫ олонона боролоп ҡараны. Олон, төбөнән алып кеше буйы етер кимәлгә хәтлем, һәр төрлө тамғалар менән сыбарланғайны. Кемдәр ҡулы ғына һалмаған был тамғаларҙы?! Ниндәй төрлөләре генә юҡ уларҙың! Даға, уҡ, йәйә, һөңгө, суҡмар, һәнәк сатаһы, ҡул суғы, йөрәк, йондоҙ, ай һымаҡтары ла, ниндәйҙер хайуанға оҡшатып төшөрөлгәндәре лә бар. Былары — бик күп йылдар элек һалынған тамғалар. Ғәрәп, иҫке төрөк, латин, рус хәрефтәренең балта һағағы йәки үткер бысаҡ менән ҡасан уйылып яҙылыуын самалауы ҡыйын түгел. Йәшәрен йәшәгән, суйын төҫлө тәненең ҡайһы бер сатнаған ерҙәренән гәрәбә кеүек ялтлап торған сайыр һығып сығарған был солоҡ үҙе йөҙәр йылдар һуҙымына күргәндәрҙе буйына һеңдереп ҡалыу менән сикләнмәйенсә, быуындар яҙмышын тәненә лә уя барыусы ғәжәйеп бер йылъяҙмасыны хәтерләтә ине.

Кеше, ошо олондағы яҙыуҙарҙы тергеҙергә, уларға тел биреп, оло тарих һөйләтергә теләгәндәй, тамғаларҙы һыйпаштырҙы, уларҙың һәр береһенә оҙаҡ-оҙаҡ төбәлеп ҡарап торҙо. Шул саҡ Кеше ҡолағына һәр һүҙе асыҡ итеп әйтелгән тауыш килеп бәрелгәндәй тойолдо.

«Эй әҙәмем! Ергә хужа булған Кешем минең! Бына һин, әллә ни саҡлы уйҙарға сумып, төбөмдә баҫып тораһың. Ер яҙмышы — беҙҙең яҙмыш — тураһында хәстәр күреп, шулай болоҡһоуың ҡайһылай шәп! Уйлан һин, ҡартлас Ер тормошон йәшәртеү өсөн, ҡулыңдан килгәндең барыһын да эшлә. Ә һуң һинең ҡулыңдан ниҙәр генә килмәй, Кеше?! Ер-әсәбеҙҙең өҫтөндәге генә түгел, уның тәрән ҡуйынындағы һәммә хазина, бөтә тереклек һинең рәхимеңә тапшырылған. Беҙ, ерҙең барлыҡ йән эйәләре, һиңә күҙ төбәгәнбеҙ. Әгәр беҙҙең баштан үткәндәрҙе, бөгөнгө хәлебеҙҙе, киләһе көндәребеҙҙе асығыраҡ төҫмөрләргә теләһәң, тарихҡа күҙ һал, бөгөн һәр аҙымыңды уйлап баҫ, айыҡ баш менән килер йылдарҙы байҡа, әҙәм балаһы. Тарих елдәре минең сал башымдағы ботаҡтарыма, сайырҙарым һарҡыған олонома уралған. Күңел һалып тыңлар булһаң, әллә ни тиклем хәл-ваҡиғалар байән итә алыр инем мин һиңә. Бөгөнгөң — үҙ ҡулыңда, киләсәгең иһә — аҡылыңда. Минең менән һинең, һинең кеүек үк бүтән әҙәм балаларының һүҙҙәрен аҡҡа теркәп барыр кеше булһа, бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирәйексе, әҙәм балаһы!..»

Солоҡ төбөндәге Кеше ҡолағына килеп бәрелгән был һүҙҙәрҙән тетрәнде, маңлайын усы менән баҫып, башын артҡа саңҡайтты; аҙыраҡ шул килеш өндәшмәй торғас, әкрен атлап, ҡаяның моронона килеп баҫты.

Ошо күренешкә ирекһеҙҙән шаһит булдым мин һәм, ҡартлас солоҡтоң шартын үтәп, ошонан аҙаҡ бөтә ишеткән-күргәндәремде аҡҡа теркәй барырға ҡарар иттем.

* *
*

Ҡыҙҙарҙың майлап үргән сәс толомондай ишелеп-үрелеп, сылтырап ағып ятҡан ҡаран эргәһендә, унан ҡартлас солоҡ төбөндә осратҡан, әле иһә ҡая морононда баҫып торған кеше беҙ һүҙ ҡуҙғатҡан мең туғыҙ йөҙ ҙә етмеш беренсе йылда егерме дүрт йәшен тултырған, йыйыр аҡылын әле йыйып бөтөңкөрәмәһә лә, үҙенә кәрәк көс-ҡеүәтте буйына һеңдереп өлгөргән Ғилман Төлкөсурин була. Ул әле генә, донъя ҡуласаһын үҙ ҡулында тотҡандай, харап тәрән уйҙарға батып торһа ла, тарих, тормош ағышын үҙенсә бороп ебәрерҙәй көс-ғәйрәте лә юҡ, ни теләһә шуны эшләр хаким дә түгел. Ни бары Ҡаратау лесничествоһының лесниге, беҙҙең һымаҡ уҡ,

өлөшөнә төшкән көмөштө үҙ ғүмер юлы буйынса йөкмәп үтәсәк ябай бер эш кешеһе. Ул оҙон буйлы; һәр яғына бер тулы ток һалып ебәрмәле киң яурындарынан, арба тәгәрмәсенең бүкәне төбөндәй шыҡһыҙ ныҡлы муйыны-нан, һәр хәрәкәтенән самаһыҙ көс аңҡып тора. Тик бына тәү ҡарашҡа тәбиғәт унан төҫ-киәфәтте йәлләгән һымаҡ: ирҙәрсә ҙур, тура танау, дүрткеллэнеп торған бит, остарын ҡырып ташлаған кеүек тойолған түйөрөм ҡаштар. Сөм-ҡара сәсе лә бит әле терпе һырты шикелле тырпайған. Ләкин бына көлөп ебәргән сағында ҡалын ирендәр аҫтына йәшеренгән тигеҙ, ап-аҡ тештәре күренгеләме, бөтә йөҙөндә нур балҡып киткәндәй тойола. Ә күҙҙәре һуң, күҙҙәре! Уларҙа бөркөт ҡарашындай ҡыйыулыҡ та, ҡыҙҙар күҙендәге наҙлылыҡ һәм тыйнаҡлыҡ та, бәйгелә көрәшкә сығыр алдынан ҡулына таҫтамалын ҡыҫып тотҡан көрәшсе күҙендәге дыуамаллыҡ та — бөтәһе бергә тупланған. Әллә ни ҡәҙәр ер-һыу гиҙҙе ул бөгөн. Ана бит, күн козыреклы фуражкаһына үрмәксе ауы йәбешкән, ҡырҡ дүртенсе үлсәүле кирза итегенең моро-но үләнгә һыпырылыуҙан ағарып бөткән, петлицаһына ике йондоҙ ҡаҙалған зәңгәр гимнастеркаһының иҙеүен ысҡындырған. Ҡая ишелеп китеүҙән ҡурҡҡан шикелле, бер ҡулы менән солоҡҡа таянып, кеше аҫҡа — ике-өс аҙымда ғына ятҡан төпһөҙ упҡынға төбәлгән. Ә дөрөҫөндә һис ниндәй шик-шөбһә юҡ унын күңелендә, иртәнән бирле йөрөгәнгә, бер аҙ талсыҡҡан ғына. Күптән түгел ошонда ҡолағына салынған һүҙҙәр уны уйҙарға тарытҡан...

Ҡая моронона тамырҙарын батырған мең йәшәр солоҡ, бөгөнгөнө асығыраҡ төҫмөрләү өсөн, тарихҡә күҙ һалырға кәңәш иткәйне бит. Әле беҙгә күренеп кенә ҡалған, яҡындан танышырға ла өлгөрмәгән урмансы кейемендәге кеше үҙ уйҙарына сумып баҫып тора бирһен. Беҙгә ул киләсәктә ер-һыу, урман тураһындағы үҙенең уй-фекерҙәрен дә һөйләр. Тәүҙә иһә, уҡыусым, бер ни тиклем ваҡытҡа Төлкөсура ҡаяһының һыртындағы солоҡ төбөнә туҡталайыҡ та уның ошо тирәләге тарихҡә ҡағылышлы хикәйәтенә ҡолаҡ һалайыҡ.

## I

Тарих мең дә һигеҙ йөҙ ҙә етмеш бишенсе йылында...

Сентябрь урталары. Көҙ үҙ хөкөмөнә керә башлаған мәл. Ауылға терәлеп тиерлек үҫкән урман тымып, һаға-

йып ҡалған. Ергә ялпашҡан яртылаш ҡыу үләндәр өҫтөнә шыптыр-шыптыр итеп һары, ҡыҙғылт япраҡтар яуа. Ел көслөрәк иҫкән саҡта, улар ауылдың тәпәшәк, һалабаш ҡабығы менән ябылған өй ҡыйыҡтарын да сыбарлай.

Ҡойма буйҙарын кесерткән, алабута баҫҡан урамдарҙа әҙәм заты һирәк күренә. Йәй буйына эшләп, ҡыш сығырлыҡ ризыҡ йыйған кешеләр, күрәһең, тыныслана төшөп, быуынын яҙа, күҙ асҡыһыҙ бурандарҙы, бүрәнә сатнатҡыс сеплә һыуыҡтарын, аҙабын күреп, нисек тә үткәреп ебәрергә әҙерләнә.

Өҫкө урамдың урта тирәһендә киң тәҙрәләрендә көҙгө ҡояш нурын уйнатып, ирәйеп ҡалҡынған һигеҙ мөйөшлө, тыранса ҡыйыҡлы өй генә, ҡыш тынынан һис тә ыжламағандай, маһайып, күкрәк киреп ултыра. Ҡотлоғужа байҙың өйө был. Унан алыҫ түгел мәсет манараһы, осондағы ай ҡыйпылсығын үргә сөйөп, тынып ҡалған. Урам ашаһындағы өй Ҡотлоғужа байҙыҡынан ҡайтышыраҡ, — Низам мулланың көн иткән төйәге. Ауылдағы башҡа өйҙәр бер-береһенән әллә ни айырылмай ине: ҡыйыҡтары һис ҡасан-да юнләп ябылмағанлыҡтан, гел һыу һарҡып торған стеналары бурһыған, кескәй тәҙрәләрҙең бик һирәге генә быяла, күбеһендә — ҡарындыҡ. Ихаталарында — мал ябырлыҡ түбәлек, әрсегән ҡабыҡтан ҡыҫып эшләнгән аласыҡ. Ҡайһы бер ихатаға инер юлда ауышып бөткән ҡапҡа күренә, икенселәрендә уныһы ла бөтөнләй юҡ. Мал-тыуар урманға иртәнсәк үҙе сығып китә, кис үҙе әйләнеп ҡайта. Мир малын көтөүсе юҡ, ул үҙ ихтыярына урманда һибелеп йөрөй.

Ҡотлоғужаның өйөр-өйөр йылҡыһы, көтөү-көтөү һыйыры, һарыҡ-кәзәләренең һәр башы иҫәпле. Байҙыҡы — тауҙа, ярлыныҡы — ҡайҙа тигәндәре шулдыр инде. Һыйырҙарҙы, һарыҡ-кәзәне Ҡотлоғужа кис кәртәгә яптырта; йылҡылар иһә йәй буйы урманда, ҡар тәрәнәйгәнгәсә тау битләүҙәрендә тибендә.

Төш ваҡыттары булыуға ҡарамаҫтан, ауылда һис ниндәй йәнлелек һиҙелмәй. Көнө лә ауыр шул. Ике-өс көн буйы ямғыр яуғайны, бөгөн дә томанһып тора, Ҡаратау башынан, һүнеп барған янғындан һуң күтәрелгән ҡуйы төтөн шикелле, болоттар һөйрәлеп күккә олғаша һәм итәктәрен йыя-йыя ялбырҙашып ауыл өҫтөнә табан ығыша. Әлегә ямғыр яумаһа ла, кешеләр өйҙәренә бикләнгән; яуындарҙан һуң һаман һурҡмаған батҡаҡта быс-

тырҙап, бынауындай күңелһеҙ көндә ни эшләп йөрөмәк кәрәк?

Торомтайҙың өйөндә генә һиллек юҡ бөгөн. Ихатаһына сығып ни тотоп, ни эшләргә белмәй тишек-тошоҡ түбәлеге, бүрәнәләре йымланмай ғына һалынған бурама аласығы тирәһендә тертәңләп йөрөй бирә лә тағы өйөнә инә. Унда ҡатыны сәсрәп ауырып ятҡан дүрт йәшлек Бикморат тирәһендә урала, кәзә һаҡалын һыйпаштырып ишек төбөндә баҫып торған иренә ҡарап:

— Үлеп кенә әрәм булыр инде, төпсөгөмдө, — тип һөйләнә.

Төпсөгөмдө, ти, сөнки, илле йәшкә яҡынлап килгәнлектән, ирен ҡабат бала табып ҡыуандырырына өмөтө юҡтыр инде. Һай, уның тапҡан бер балаһы имен-аман үҫһә, ошо көндә өйгә һыймаҫтар ине. Иң тәүге өс балаһы тыуа торҙо, үлә торҙо, шунан Төлкөсура менән Миңлегөлдәре арыу ғына үҫеп китеп ҡыуандырғайны, уларҙан аҙаҡ Ғәрифәнең ауырға ҡалып ҡорһаҡ күтәреп ыҙаланыуҙары юҡҡа ғына: нисәмә йыл тағы тыуған бер балалары үлә. Бынау Бикмораттары арыу уҡ мандып килә ине, бына хәҙер ни эшләп китә инде. Низам муллаға күтәреп алып барып өшкөртөп тә ҡайтҡайны ла, һаман рәтле алға киткән ере юҡ.

— Әллә Бәҙеғолъямал әбейҙе килтереп, имләтеп ҡарайыммы икән? — тине Ғәрифә, иренә хәсрәтле күҙҙәрен төбәп.

Торомтай ауыр көрһөндө, уның эргәһенә килеп баҫты, биттәре ҡыҙара янып торған, керпеген күтәреп тә ҡарай алмаған бәләкәсенә күҙ ташланы.

— Әллә инде, теге үлгән балаларға им-томоноң бер ҙә файҙаһы теймәне бит... Шул ҡәһәр һуҡҡыры ҡыҙылсалыр инде, тәненә ҡалҡһа, былай ҙа шәбәйеп китер.

Иренә ҡаршы һүҙ әйтмәне Ғәрифә, уның өшкөртөүтөкөртөү, им-томға әллә ни иҫе китеп бармауын да, балалары күп үлгәс, өмөтһөҙлөккә төшөүен дә аңлай.

Шул саҡ ишектән Төлкөсура атылып килеп инде. Осҡор күҙҙәре маңлайына менгән, төлкө бүрке елкәһенә табан шыуышып, башында саҡ-саҡ эләгеп тора. Югереүҙән бышлығып, хәбәрен һалды.

— Атай... Ҡотлоғужа байҙың йылҡы көтөүен бүреләр баҫҡан!..

Торомтай ялп итеп улына боролоп ҡараны.

— Бар, аласыктан эйәрҙе, минең суҡмарҙы алыҫ сыҡ, үҙеңә һыҙманы ҡороп ал. Йәһәт кенә ҡылан.

Ауылда әүәл-әүәлдән килгән шундай ғәҙәт бар: айыу кемдең малын йыға, бүреләр ниндәй көтөүҙе баҫа — быңдай саҡта төпсөнөп һорашып тороу юҡ. Ҡул аҫтында ниндәй ҡоралы бар, шуны ала ла бөтә ауыл күтәрелә; сөнки бәләләр: ул йыртҡыстарҙың өҫтөнә үҙҙәренән яман ябырылмаһаң, бөгөн булмаһа, иртәгә үҙеңдең һуңғы малыңдан яҙасаҡһың. Йылы ҡан тәмен бер тойоп алдымы — йыртҡыс тиҙ генә китешмәй. Торомтай бисәһен йыуатырға мәлле һүҙ тапмайынса:

— Ярар, бисәкәй, һин ултырып тор инде, — тине лә, туҙа башлаған ҡырма бүркен батырыбыраҡ кейеп, тышҡа сыҡты.

Төлкөсура ҡола бейәне эйәрләп бөтөп тә бара ине инде, үҙенә быйыл ғына менгегә өйрәтелгән тайын югәнләп, үңлек һалып әҙерләп ҡуйған. Улы еткән шул инде — ун һигеҙен тултыра, бүре һуғыу түгел, айыуҙы югәнләп менер сағы етә.

— Атай!.. — Урамдан яулыҡ остарын елпелдәтеп йүгереп инеп килгән Миңлегөлдөң тауышы уларҙың икәүһен бер юлы боролоп ҡарарға мәжбүр итте. — Атай, мин дә барам!..

— Кит, юҡты һөйләмә, ҡыҙым, бар, әсәйең эргәһенә ин.

Бөтә торошонан, нескә буй-һынынан йәшлек, сафлыҡ бөркөлөп торған ҡыҙ, үҙһүҙләнеп, итек үксәләре менән ергә тып-тып бәреп алды.

— Барам, атай, барам! Бүре һуҡҡандарын күргем килә. Мылтыҡ тота белмәйемме ни мин?

Миңлегөл ун алты йәштә инде, тик бына ҡыҙҙарса инсафлылыҡ, тыйнаҡлыҡ тигән нәмә юҡ. Берәй һүҙ йә берәй эш сыҡтымы, ырғый ҙа төшә, ҡатын-ҡыҙ эшеме, түгелме — уйлап тормай. Йыш ҡына, һыҙма тотоп, урманға сығып китеүе лә, ҡайһы саҡта ҡор йә һуйыр алып ҡайтыуы ла ошондай холҡо арҡаһында инде.

— Атай, ебәр инде! Барайымсы...

Улын ярата, улынан бигерәк ҡыҙын үлеп ярата шул Торомтай. Әллә йөрөп ҡайтһынмы икән? Үҙе ауырыу бала эргәһендәге Ғәрифәһе янында уралыр.

— Бар әтеү. Тик, ҡара уны, ағайыңдан айырылма!

Миңлегөл шәльяулығы аҫтынан күренеп торған сәс



үрмесендәге сулпыларҙы сылтырата-сылтырата ҡола бейәгә атланып та алды.

— Төлкөсура ағай, һыҙманды миңә бир, үҙең суҡмар ал.

Торомтай урамға елеп сыҡҡан улы менән ҡыҙына һоҡланып ҡарап ҡалды. Балаларының тәүге һунарға киткәнен күҙәткән ата бөркөтмө ни!

Ауыл осонда бер төркөм һыбайлы, аттарын бейетеп, бүтәндәр йыйылып бөткәнде көтөп тора ине инде. Төлкөсура алыҫтан уҡ уларҙың:

— Туғайҙан арттарына сығып, ауыл яғына ҡыҫырыҡларға кәрәк!

— Эйе шул, тауға ебәрмәйек!

— Урманға инһәләр, уларҙың ҡойроғо ҡыҫҡа! — тип бүреләрҙе ҡайһылайыраҡ итеп ҡамау тураһында кәңәшләшкәндәрен ишетте.

Ҡатын-ҡыҙҙың һыбай йөрөүе, бәйгеләрҙә ҡатнашыуы был яҡта ғәҙәти хәл ине. Шулай ҙа бүре һуғыу кеүек хәтәр эштә уларҙың ҡатнашҡаны юҡ. Шуғалыр инде, Миңлегөлдө күргәс, кемдер:

— Һин буталып йөрөмә, ҡыҙыҡай. — тине.

— Ниңә уны эйәрттең, Төлкөсура? — тип икенсеһе уны яҡлауын белдерҙе.

— Ҡалмай бит, барһын әйҙә.

— Барһын-барһын! — тине, ярһыу атының башын сак тыйып тотоп торған Уйылдан. — Һиңә ни зыяны тейә уның.

Ҡотлоғужа бай улының һүҙен йығырға батырсылыҡ итеүсе булманы. Тағы бер нисә кеше килеп ҡушылғас, туғай буйына ҡарай елдерҙеләр. Йылҡы көтөүенең ауылдан ике саҡрым тирәһе ерҙәге яланда йөрөүе билдәле ине. Көтөүсенең һөйләүенә ҡарағанда, бүреләр күмәк, йылҡыларҙы өркөтөп, берәй яры ҡыуып алып китмәһәләр ярай ҙа. Бына аланғырт ҡайынлыҡ артта ҡалды. Үҙәнен ерек әрәмәһе ҡаплаған кескәй йылға аша сыҡҡайнылар, тау битләүендәге оҙонса ялан күренде. Әһә, йылҡылар яланда, буғай, уларҙың кешнәгән, бышҡырған, тупылдап сапҡан тояҡ тауыштары ишетелә. Һәр кем белә: бүреләр, айыу шикелле, бер атты йығыу менән ҡәнәғәтләнмәй, бигерәк тә ҡолондар артынан ҡыуалар. Ҡолон итенең тәмен улар ҙа белә. өйөр айғырының, бейәләрҙең ярһып ҡаршы тороуына ҡарамаҫтан, ҡолон ҡанын һурырға тырышалар.

Ҡулдарына суҡмар, һөңгө, һәнәк, ҡайһылары һыҙма тотҡан кешеләр бер-береһенән ун сажин самаһы ара ҡалдырып таралышты. Миңлегөл ағаһынан йыраҡ китмәне, һыҙмаһын ҡул осона алып, башҡаларҙан ҡалышмай сабырға әҙерләнде. Ул менгән ҡола бейә, ҡарап тороуға ҡойто ғына күренһә лә, етеҙ хайуан ине, бирешмәç әле. Бына һыбайлылар туғайҙан яланға елеп килеп сыҡтылар. Ә ялан уртаһы ысын алыш майҙанын хәтерләтә ине: өйөр туҙышҡан, бер урында бүре ҡолон баçтыра, уның артынан бейә саба, барып етеп, бүрегә тибергә самалай, ләкин йыртҡыс сос — ҡапыл ситкә ялтана һәм яңынан ҡорбанына ташлана. Бер яҡ ситтәрәк өйөр башы ерән айғыр ике бүрене алмаш-тилмәш зыҡ ҡуптарып, ажарланып баçтыра. Уның тирәһендә иң хәйләкәр бүреләр ҡыялғаны тәжрибәле һунарсыға сер түгел: улар өйөр айғырының көсөн белә, шуға күрә унан ҡасып та китмәй, ярһып һөжүм дә итмәй, әүрәтеп, көтөүҙән ситтәрәк тотоу яғын ҡарайҙар; башлыҡһыҙ ҡалған йылҡылар иһә, туҙышып, бер тирәлә өйөрәлөп-сөйөрөлөүҙән уҙа алмай.

Миңлегөл, эйәр ҡашына эйелә биреп, атының ҡабырғаһын төйгөсләй, уң яҡ эргәһенән суҡмарын юғары күтәреп сапҡан ағаһынан ҡалышмаçҡа тырыша, үҙе яландағы хәтәр алыштан күҙен айырмай. Бер аттымы, һыҙманы ҡабат яһап тороуға ваҡыт булмаясаҡ. Шуға күрә күңелендә бер атырға, берәгәй атырға тигән фекер төйнәлгән. Уйылдан менән Төлкөсура аттарын туп-тура ерән айғыр алышҡан ергә борҙо. Миңлегөл дә һуҙылып сапҡан ҡола бейәнең теҙгенен шулай табан тартты.

Ҡанға ҡаныҡҡан бүреләр ҡурҡыныс яҡынлауын һуңлабыраҡ һиҙҙе — туғай буйына, унан урманға һыҙыу өсөн юл бикле ине инде. Уйылдан ерән айғыр тирәһендә һикерәндәгән бүреләр янына алданыраҡ барып етте. Ситкә ынтылған бүрегә һелтәнгәйне, тегеһе унан йылғырыраҡ булып сыҡты: ҡапыл ялтанып ергә ялпашты ла, атының артынан төшөү өсөн, ситкә һикерҙе.

— Әһә, эләктеңме! — тип уçал бышылданы Уйылдан, сөнки белә: бүре үҙен әҙәрләүсене тәүҙән үк байтаҡ ара ҡалдырып ҡаса алманымы, тура тороп сапмай, кешенең ҡыуып етәсәген, башына суҡмар төшәсәген һиҙә һәм һәр төрлө хәйләләр менән, дошманына һөжүм итә-итә, ысҡыныу яғын самалай. Бында инде бүренең үҙенән яман хәйләкәр, йылғыр булыу кәрәк, шул саҡта бүре ҡотола

алмаясаҡ. Уйылдан, теҙгенен ҡаты тартып, ярһыу атын бүрегә ҡаршы бороп өлгөрҙө.

Ғыл саҡта Төлкөсура унан алыҫ түгел ерҙә икенсе ҡарт бүре менән алыша ине. Тайының, өркөп, ҡарышып, баш бирмәй маташыуы уға бүрене һуғырға уңайлыраҡ яҡынлашыу өсөн ҡамасаулай ине. Миңлегөл килеп етеп, ике яҡтан ҡыҫымға алғас, бүре, хәле мөшкөлләгән һиҙеп, ары-бире ташланды, күҙ асып йомған арала туҡтап ҡалып, ҡанһыраған тештәрен ыржайтты. Миңлегөл дә һыҙмаһын ҡул осонда тота, ләкин бүре бер туҡтауһыҙ ырғаңлап йөрөгәнлектән, төҙәп атыр мәл таба алмай.

— Ағай! Һин уға ҡасырға ирек бир! Ә мин арттан...

Асыуы ҡабарған Төлкөсура күҙе аларған, ярһыған, шуға өркөүен дә онотҡан тайын тешен шаҡылдатып бер мәлгә туҡтап ҡалған бүре өҫтөнә ҡыуаланы. Йылҡ итеп эргәһенән үтергә уҡталған бүре тәңгәленә етмәҫ борон суҡмарын һелтәне: хәйләһе барып сыҡты — йыртҡыс суҡмарҙан ҡотолоу өсөн ергә ялпашҡан ыңғайы икенсе тапҡыр һелтәнеүендә уның мейеһен сәсрәтә һуҡты.

Уларҙан туғайға табан алыҫлаша төшкән Уйылдан, бүрене урман яғына ыҫҡындырмаҫҡа тырышып, һаман алыша ине әле. Ағаһы һуҡҡан бүренең бүтәнсә баш ҡалҡытмауын күргәс, Миңлегөл атын Уйылдан яғына ҡыуаланы, аҫтанырак уратып үтеп, һуғыш менән сигенеүсе бүренең артынан төштө. Йыртҡыс ҡурҡыныстың кәсәйеүен һиҙҙе шикелле, Миңлегөлдән ҡасып, Уйылдан эргәһенән артҡа үтеп торҙо ла күҙ асып йомған арала егеттең арҡаһына һикерергә уҡталды. Атының шәплеге ҡотҡарҙы Уйылданды — ялтанып өлгөрҙө, алданған бүре иһә үҙенә мылтыҡ көбәге тоҫҡап килгән ҡыҙға йомолдо: уға хәҙер барыбер ине — йә үлә, йә ҡала. Мылтыҡ шартлағаны ишетелде, ләкин үлемесле яраланған бүре, йәнтәстемгә ырғып, үткер тырнаҡтары менән Миңлегөлдөң балитәкле күлдәген бүҫеп ебәрергә өлгөрҙө. Хәлһеҙләнеп йығылған, шулай ҙа һаман торорға көсәнгән бүрене Уйылдандың суҡмары тамам дөмөктөрҙө.

Миңлегөл башын тегеләй-былай күп тартҡылауҙан билендәгән ҡола бейәне тынысландыра алмай аҙаплана, бүҫелгән күлдәк итәге ялп-йолп килә. Ыштан балағының сандыры тәңгәленән ҡанға буяла башлауын күргәс, уның ҡото осто: яраланған! Ярҙам көткән ҡиәфәт менән ағаһы ҡалған яҡҡа күҙ һалды — ул, үҙе һуҡҡан

бүрене лә алып тормай, бүтәндәргә ярҙам итергә сапҡан, ахырыһы, күренмәй. Уйылдан атынан һикереп төшөргә өлгөргән:

— Әһә!.. Эләктеңме?!. — тип бүрене типкеләй. — Миңлегөл! — Әйләнеп ҡараһа, Миңлегөл һыҙма мылтығын эйәренә арҡыры һалған да сандырын күлдәк итәге менән ябып маташа, йөҙө сытыйған. Әллә бүре уны яралап өлгөргәнме? Уйылдан уның эргәһенә ҡүгереп килде.

— Ни булды?!.

— Әҙерәк тырнағы эләкте шикелле...

— Ҡайҙа әле, ҡарайыҡ. Ҡайһы ерең?

Ботондағы яранан ҡан Миңлегөлдөң ҡыҫып тотҡан күлдәге тышына уҡ һарҡып сыға башлағайны инде.

— Төш, Миңлегөл, бәлки, урарға кәрәктер.

Һы, әйтте хәбәрҙе, Миңлегөл, уға ботон асып күрһәтеп, бәйләтеп тора буламы? Ул арала Төлкөсураның елеп килгәне күренде. Ул, туҡталып, бая үҙе һуҡҡан бүрене атының мундаһы аша һалды ла былар эргәһенә ыңғайланы.

— Иллә-мәгәр уҡыттыҡ бит тегеләрҙе! — тип ҡысҡырҙы ул килеп етмәҫ элгәре үк. — Ете бүре! Етәү!..

— Килә һал әле, кил! — тип ҡабаландырҙы уны Уйылдан.

Төлкөсура эйәрҙә бөршәйә бирен ултырған Миңлегөлдө яңы күрҙе, ниҙер һиҙенде һәм атын саптырып килеп етте.

— Ни булды?

— Саҡ ҡына яраланы шикелле. — Һеңлеһенең матур алһыу сырайы ағарған, һоро күҙҙәрендә — ғазапланыу.

— Ҡайһы ерең?

— Ботом...

— Уйылдан, әйҙә тиҙерәк ҡайтыу яғына! Бүреңде ал. Миңлегөл, әйҙә ҡуҙғал.

Ул арала бүтәндәр ҙә артабанырак бер тирәгә йыйылғайны. Шуларҙың эргәһенә барҙылар.

— Һеҙҙә — икәү, беҙҙә — бишәү!

— Туғыҙ ине, икәүе генә ҡасып ҡотолдо!

— Улары ла хәҙер был тирәгә яҡын юламаҫ! — тип ҡаршыланылар уларҙы.

Бер егеттең дә ҡулы яраланған икән, күлдәк итәген йыртып бәйләгәндәр. Һәр кемдең йөҙөндә еңеү шатлығы балҡый. Ярһыған аттар, бер урында тороп сыҙамайынса,

шайыҡтарын ҡойоп, ауыҙлығын сәйнәй, тыпырсынып, артҡа сигенә йә алға ынтыла, танауҙарын боршолдата. Был күренеш Миңлегөлдө лә дәртләндерҙе, ул да бер бүренең башына етте бит, Уйылдан уга йыгылгас ҡына һуҡты. Ошо уй уның һыҙланыуын онотторop торҙо. Егеттәр:

— Уйылдан, һиндәгеһе иң ҡарт бүре, ахырыһы, бер һоро йөнө лә юҡ, күм-күк, — тиеүгә ҡаршы, Уйылдан:

— Уны Миңлегөл атып йыҡты, — тигәс, ҡыҙ хатта шатлығынан тыйнаҡ ҡына йылмайҙы, ә бүтәндәр:

— Ҡитсе!

— Шулаймы ни! — тип ах итте.

Уйылдан Миңлегөл эргәһенә килде.

— Бир мылтығыңды. Бүрене алдыңа һал.

— Ҡуйсы. Ҡурҡам мин унан.

Егеттәр берҙәм көлөп ебәрҙе.

— Тере сағында ҡурҡмаган, үлгәс — ҡурҡа!

— Иллә-мәгәр һинең өнөңдө тыҡты Миңлегөл!

— Ниңә?

— Уға, буталып йөрөмә, тигәйнең бит...

Уйылдан бүрене Миңлегөлдөң эйәре алдына аша һалды. Йыртҡыстың тәне һыуынып та бөтмәгән әле, ят еҫ тә килеп тора үҙенән. Нисек кенә булмаһын, Миңлегөл шатлығынан бер ҡарышҡа үҫеп киткәйне. Атаһы менән әсәһе ҡыҙҙарының кем икәнен күрһен инде бына!

Уйылдан көтөүсегә өйөрҙө барлау өсөн бөгөн һырттағы йәйге кәртәгә алып ҡайтып ябырға, бүреләр тамаҡлап өлгөргән өс ҡолондо соҡор ҡаҙып күмергә ҡушҡас, еңеү ҡыуанысынан гөрләшеп-шаулашып ҡайтырға сыҡтылар.

Әүәлдән килгән ғәҙәт буйынса бындай һунар ваҡытындағы табыш кемдең малы зыянлаған — шуға була ине. Был юлы ете бүре лә Ҡотлоғужа йортона тапшырыласаҡ. Байға һаман зыян юҡ: өс ҡолон урынына — ете бүре, ете тиренән — ике толоп. Насармы ни!

Шулай ҙа Уйылдан үтә ҡомһоҙлоҡ күрһәтмәне, ауыл осона еткәс, Төлкөсураға яҡынайып:

— Миңлегөлдәге бүрене үҙегеҙгә алып ҡайтығыҙ, — тине. — Үҙеңдәген беҙгә алып бар, бергәләп тунарбыҙ. — Шунан бөтә кешегә бер юлы өндәште: — Ағай-эне, аттарығыҙҙы ҡуйығыҙ ҙа беҙгә килегеҙ. Бүреләрҙе тунап, тиреләрен киргәс, мәжлес ойоштораббыҙ! Атайым, моғайын, бер-ике көрәгәһен йәлләмәҫ.

Әле һаман ишек алдында тертәңләп йөрөгән Торомтай, ҡыҙының эйәре аша бүре һалып ҡайтып ингәнен күргәс, теле тотлоҡто. Етмәһә, Төлкөсураһында ла бер бүре.

— Ҡурҡеңме, атай! — тип ҡысҡырҙы Миңлегөл. — Төшөрөп ал да — туна. Тиреһе — һиңә, даны — миңә.

Аптырап торған ҡартҡа ауыҙы ҡолағына еткән Төлкөсура аңлатыбыраҡ һөйләп бирҙе.

— Уны, ысынлап та, Миңлегөл атып йыҡты, атай. Шуғалыр инде, Уйылдан үҙебеҙгә бирҙе. Ә быныһын, — ул алдындағы бүрене лап иттереп ергә төшөрҙө, — уларға алып барам.

Торомтай ҡарттың төпсөк улы ауырығанға хәсрәт ҡаплаған йөҙө ҡапыл асылып китте, Миңлегөл алдынан күм-күк йөнлө, йәшен йәшәгән, башмаҡ ҙурлыҡ бүрене көскә күтәреп төшөрҙө.

— Һай, ыласындарым минең! Һай, йәшәгерҙәрем минең!.. Төш, ҡыҙым, төш, ни эшләп ултыраһың.

Миңлегөл төшөргә ынтылды ла бото ауыртыуҙан ыңғыраша биреп ҡуйҙы. Төлкөсура, югереп килеп, уға ярҙам итеште. Ҡыҙының йыртылған, ҡанға буялған итәген күргәс кенә, Торомтай хәлде аҙағынаса аңланы, сырайында хәүефләнеү сағылды.

— Их ҡыҙым, ҡыҙым... ныҡ түгелме?

— Әлләсе... ингәс ҡарармын әле.

Уның яраланып ҡайтыуына әсәһе бигерәк ныҡ борсолдо. Яра артыҡ ҡурҡыныс түгел, бүренең өс тырнағы тубығынан өҫ яғын һыҙырып ебәргән. Әсәһе ємшеү һыу менән уның уҡмаш ҡанын йыуҙы, дегәнәк япрағы ҡуйып, һәйбәтләп ураны ла:

— Аяҡһып йөрөмә инде, йә бөтәү яраға әйләнеп китер, — тип киҫәтте. — Эй ҡыҙым, ҡыҙым, ниндәй генә бала булып китерһең инде һин, бигерәк дыуамалһың. Шунда ирҙәр менән барып йөрөймө ни аҡыллы кеше. Анау атайың да әйтмәне бит әле, кире бороп ҡайтарыр инем мин һине.

— Ярар инде, әсәй, әрләмә. Шәбәйер әле. Ана бит, бүре алып ҡайттым.

— Уны, һин бармаһаң да, алырҙар ине инде.

— Әллә шул, Уйылдан ағай, һуға алмайынса, әллә ни хәтлем ҡыялды әле уның менән.

— Ярар, телеңә һалышма, икенсе улай йөрөһәң тегеләй... Ағайың ҡайҙа?

— Ул Ҡотлоғужаларға бүре тунарға киткәндер. Атайым үҙебеҙҙекен тунай микән...

Ғәрифә ишекте асып ҡысҡырҙы:

— Ҡара әле, һиңә әйтәм, сәй эсергә ин!.. Бына хәҙер ауырыу баланы тәрбиәләү ҙә, аш-һыу әҙерләү ҙә бер үҙемдең өҫкә ҡалды инде. — Ғәрифә табын әҙерләй башланы.

— Бикморатты мин үҙем ҡарармын, әсәй. — Миңлегөл, сатанлап, һике түрендә ятҡан туғаны эргәһенә килде. Әсәһен аҙ ғына булһа ла йыуатырлыҡ һүҙ әйткеһе килә ине уның. «У-у-у, туғанҡайымды, башың ауыртамы?» — тип һөйләнде.

Ҡуптән түгел генә телдәрләнеп һөйләнеп, туҡтауһыҙ йүгереп йөрөгән малай күҙен көсәнеп кенә асты ла тағы йомдо.

— Ғәрифә, башҡа бер уй килде әле минең, — тип ишектән үк һөйләнә-һөйләнә килеп инде Торомтай. — Әллә бүрене йәһәт кенә тунайым да малайҙы шуның йылы тиреһенә төрөп ҡарайыҡмы?

— Әллә инде, берәй зәхмәте һуғылып ҡуймаһа...

— Ҡайҙа, сәй эсәйек тә, ни булһа ла әтмәләп ҡарайым әле. Яңы һуйған мал тиреһе ҡырҡ төрлө сиргә дауа, ти торғайны атай мәрхүм.

Ҡатыны, ауырыу баланы юҡҡа ғына ыҙалатмайһыңмы икән, тип ҡараһа ла, Торомтай ошо һүҙендә торҙо. Бикморатын йылы бүре тиреһенә урап һалып ҡуйҙы.

* *
*

Был мәлдә Ҡотлоғужа байҙың иркен ихатаһында геүҙә шау килешеп шулай уҡ бүре тунайҙар ине. Үҙенә файҙалыраҡ эш эшләгәндә, Ҡотлоғужаның йомартланып китә торған холҡо бар: егеттәргә тәүҙә үк бирәр каса әсебал һемертте. Шуға хәҙер егеттәрҙең ҡулдары ла, телдәре лә тик тормай.

— Уйылдан, атайыңдың төлкө толобо бар, был тиреләрҙән үҙеңә тектер инде. Кейәү егете булып барғанда кейерһең.

— Ниндәй кейәү егете ти ул? — Уйылдан аңламағанға һалыша.

— Мутлашма, беләбеҙ!

— Атайың Ҡыпсаҡ старшинаһының быуаҙ ҡыҙын белешеп ҡайтҡан да инде.

— Юҡ, егеттәр, быуаҙлыҡҡа быуаҙ түгел, ти ул. Ну һөтлө, ти!

— Үҙе әй һимеҙ, ти!

— Түлкә үҙ ауылдарының бер егете эшен хәртәйтеберәк ташлаған, ти, бит әле ул ҡыҙҙың!

— Хөртәйһә һуң, яңы бүре толопҡа төрһәң, ҡырҡ йәшлек бисәләр ҙә ҡыҙға әйләнә, ти!

— Ха-ха-ха-ха!..

Һүҙҙәрендә бер ни тиклем дөрөҫлөк тә булғанлыҡтан, алдарына сыға алмаҫын белеп, Уйылдан ҡыҙарына-бүртенә, ләкин егеттәргә ҡаршы һүҙ әйтә алмай. Ҡаршы өндәшеү уларҙы оторо ҡотортоп ҡына ебәрәсәк. Атаһы былтыр көҙ Ҡыпсаҡ старшинаһына барып, ҡунаҡ булып ятҡанында, мин һинең менән, биллаһи, ҡоҙалашам, ҡыҙыңды улыма алып бирәм, тип, эскән башы менән аң-тоңдо белмәй яусы ебәрергә алдан вәғәҙәләшеп, эште хөртәйтә биреп ҡуйғайны шул. Ҡайтып, ныҡлабыраҡ уйлаша башлағас, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа йөрөгән хәбәр ишетелеп ҡалды: Ҡыпсаҡ старшинаһының ҡыҙын бер егет менән тотҡандар, шунан был хәлде старшина, гөнаһлы эшкә шаһит кешеләрҙең ауыҙын йомдороп, тауыш-тынһыҙ ғына баҫып ҡалдырған; шуға хәҙер тиҙерәк кейәүгә биреү яғын самалай икән. Ҡотлоғужа ҡыҙмаса баш менән дә артыҡ хәбәр ысҡындырып бара торған кеше түгел. Ҡыҙы барлығын белгәс, Ҡыпсаҡ старшинаһы менән ысынлап та туғанлашырға уйлағайны. Үҙең ише хәлле кеше менән аралашыу насар эшме ни? Тик бына әлеге имеш-мимеш хәбәр килеп ишетелгәс, икеләнеп ҡалды. Үҙ нәҫеле исеменә аҙ ғына сүп төшөүҙе лә ғәрлек һанаусы сәмсел кеше ине Ҡотлоғужа. Уйылдан баш-аяғы менән ҡаршы торғас, уны димләмәне, Ҡыпсаҡ старшинаһына, улымды күндереп булманы, әлегә сабыр итәйек, тип хәбәр ебәрҙе.

Әлбиттә, быларҙың бөтәһе лә бик шым ғына эшләнгән һымаҡ ине, утыҙ теш араһынан сыҡҡан — утыҙ миргә етә тигәндәре дөрөҫтөр инде, әллә ҡайҙан бөтә ауыл белеп өлгөрҙө. Ошонан аҙаҡ тиңдәштәре Уйылдандың күҙен астырмай, шул Ҡыпсаҡ старшинаһының ҡыҙын килтерә лә ҡыҫтыралар.

— Дә-ә, ул старшинаны яман бай, тиҙәр. Ярты байлығын бирһә, Уйылдандан элек әллә ул ҡыҙҙы сәлдереү яғын ҡарайһы инде, — тип һүҙ ялғай бер егет, елкәһен тырнап.

— Бар, бар, ул байға һинең кеүек таҙҙар ғына етмәгәйне, ти! — Ҡотдостоң был һүҙенә бөтә егеттәр ҡушылып көлдө.

Һүҙгә әллә ни әүәҫлеге булмаған Төлкөсура:

— Ул ҡыҙға хәҙер таҙ ни, ҡаҙ ни — ир генә булһын, — тип һүҙ ҡыҫтырғайны, ҡырма бүрке аҫтынан ысынлап та таҙының ҡутырҙары күренгеләп торған Сәхи, этәсләнеп, уға табан атланы.

— Көлгән булаһың! Үҙең кем?!

— Ҡыҙма әле, Сәхи, шаяртҡанды белмәйһеңме ни?

— Шаяртырым бына мин һине... Тағы ауыҙыңды асып ҡына ҡара.

Төлкөсура — тиңдәштәре араһында иң көслө, бәһлеүән егет. Хатта уға:

— Шул өтөк кенә Торомтайҙан ошондай егет тыуһын әле! — тип аптыраусылар ҙа бар. Атаһы иһә:

— Олатайыңа оҡшағанһың, улым, көс-ҡеүәтеңдең ҡәҙерен бел, — ти, ғорурланып, хәстәрлекле итеп.

Әле лә Төлкөсура, Сәхиҙең үҙенә килеп бәрелергә батырсылыҡ итмәҫенә ышанғанлыҡтан, ҡылт та итмәне. Ҡотлоғужа байҙың ҡулын биленә ҡуйып, олпат ҡиәфәттә һалмаҡ атлап үҙҙәре эргәһенә яҡынлап килгәнен күргәс, һүҙҙе икенсе яҡҡа һуҡтырҙы.

— Әленән ҡыҙып бараһың, Сәхи, Ҡотлоғужа ағай ысынлабыраҡ һыйлай башлаһа, ни эшләрһең икән?

Ҡотлоғужа һүҙҙең бер осо үҙенә төртөлгәнен һиҙҙе, тамағын ҡырғыланы, түп-түңәрәк ҡара һаҡалын һыйпаштырҙы.

— Эшегеҙҙе генә тиҙерәк бөтөгөҙ, һыйы ҡасмаҫ, егеттәр. Тиреләрҙе бер юлы килеп тә ҡуйырға кәрәк. Берегеҙ кирге әҙерләй торһа, арыу булмаҫмы?

Төлкөсура үҙенең бүреһен тунап бөткәйне инде, утынлыҡҡа барып, кирге эшләргә тотоноп китте. Ҡотлоғужа уның балта менән дә таҫыллы эш итеүенә һоҡланып ҡарап торҙо. «Торомтай был малайынан унды», — тип уйланы, ошо егеттең үҙенә эшләргә килмәүенә үкенеп ҡуйҙы. Быйыл йәй атаһы менән байтаҡ бесән сабып бирҙеләр биреүен. Төлкөсураның күңелен ауараландырыу өсөн, уларға хаҡын да йәлләп торманы — уға анау әле менеп йөрөгән тайын етәкләтеп ҡайтарҙы. Үҙенең был йомартлығы өсөн Ҡотлоғужа хәҙер үкенә биреп тә ҡуя. Уйламайыраҡ эшләне шикелле: Торомтай ике атлы булып китһә, уға икенсе йыл бесән сабырға ла сыҡмауы

бар бит. Әле лә ана үҙалдына көн итергә, итәген ҡырҡып, еңен ямаһа ла, Ҡотлоғужаға тегене-быны һоранып бик үк килеп йөрөмәҫкә тырышып ята. «Был егетте ҡулға эйәләштергәндә, бер үҙе өс кеше өсөн эшләй инде». — Ҡотлоғужа Төлкөсура эргәһенә килде.

— Иллә-мәгәр ҡулың килешеп тора ла инде, — тип бер түмәргә сүгәләне ул. Шунан иплән кенә үҙ яғын ҡайырҙы: — Төлкөсура ҡустым, был арала ни ҡыйратырға уйлайһың?

Төлкөсура эшенән туҡтамай ғына яуап бирҙе:

— Әллә инде. Атайым, бер-ике баҙ күмер үртәйек, тип һөйләнгәйне.

— Һәй, һинең атайың һөйләр инде ул. Ҡөҙгө ҡауҙанда кеше күмер үртәйме ни? Ут-күҙ сығып китеүе бар бит.

— Уныһы шулай инде.

— Төлкөсура ҡустым, мин ҡышҡылыҡҡа кәрәк сабыу өсөн ағас әҙерләтмәксе инем. Хәҙер ҡырҡып, ярып ҡуймаһаң, ҡышын туң уҫаҡ ярғанда ҡыйпылып сығып тик тора бит ул.

— Хәҙер әҙерләүгә етмәй инде ул, Ҡотлоғужа ағай.

— Шуны әйтәм, Төлкөсура ҡустым, әллә әҙерләшергә сығаһыңмы? Минең эштең хаҡына ҡарап тормағанды беләһең.

Төлкөсура киргегә арҡыры ағастарын ҡағып бөткәс кенә яуап бирҙе.

— Атайыма әйтеп ҡарармын әле, Ҡотлоғужа ағай.

«Йәш булһа ла, аҡыллы, суҡынғыры. Тиҙ генә ысҡынып бармай», — тип уйлап, урынынан күтәрелде Ҡотлоғужа.

— Ярар, ярар, ҡабаландырмайым. Кәңәш иткәс, килеп әйтерһең.

Егеттәр ҡояш байымаҫ элек үк эште бөттө. Алты бүре тиреһен киргегә тартып, урам яҡ ҡойма буйына теҙеп күтәреп ҡуйҙылар: эштәрен бөтә ауыл күрһен әйҙә, йәнәһе. Йыуынып, Ҡотлоғужаның урта өйөнә инеп тулдылар. Урындыҡ уртаһына бер кәрәгә бал килеп ултырғас, уларҙың танау тишектәре киңәйҙе. Бал, өҫтө бызмырҙап, энә күҙәүендәй генә бөрсөктәрен сәсрәтеп, һаман әсеп ултыра, күңелдәрҙе ҡытыҡлағыс һитә еҫе бөркөлә.

— Һыубәрәкәт!..

— Аҙаҡҡыһы булмаһын! — тип ҡысҡырышып алдылар.

Шаяра-көлә һөйләнеп, май бөрөштөргән күҙҙәрен уйнаҡлатҡылап, Ҡотлоғужа бай тәүге аяҡты үҙе йөрөтөп сыҡты. Был егеттәргә баһаны белә ине ул. Ҡиләсәк — ошолар ҡулында. Уларҙы йәш саҡтарынан уҡ үҙ яғына ылыҡтырып ҡалған яҡшы; был егеттәр эшкә тотонһа, Торомтай кеүек кәре ҡайтҡандар ишеме ни?

Табынды бер әйләнеп сыҡҡас, Ҡотлоғужа:

— Ярар, балалар, һеҙ үҙегеҙ йәштәрсә иркенләп ултырығыҙ. Уйылдан, ҡунаҡтарыңды һәйбәт итеп һыйла, — тине лә төпкө өйөнә инеп китте.

Йәштәр, ҡыҙмаса булып алғас, ҡурай тартып, йырлашырға, бейешергә тотондолар. Шулай шаулашып, буталыша башлағас, Уйылдан, әйҙә сығайыҡ әле тигәнде белдереп, Төлкөсураға күҙ ҡыҫты. Сығып, утынлыҡ өсөн эшләнгән түбәлек аҫтына инделәр. «Ни йомошо төштө икән бының?» — тип уйлай Төлкөсура. Уйылдан, старшина улы булһа ла, артыҡ танауын күтәреп, бүтәндәргә юҡҡа-барға бәйләнеп йөрөй торған егет түгел ине. Атаһы уны шулай танышмаҡлы, кешегә йомшаҡ һүҙле итеп тәрбиәләргә тырышты. Үҙе ана кеше менән һөйләшә белеүе арҡаһында утыҙ дүрт йәшенән бирле старшина булып тора. Ҡурҡаҡ кешене генә ҡысҡырып еңергә мөмкин, аҡыллы, көслө кешеләрҙе улай алдырып булмай. Ә донъяны ана шул аҡыллы, көслө кешеләрҙе тыңлата алғанда ғына гөрләтеп алып барырға мөмкин.

— Төлкөсура, һинән сер юҡ инде ул, әй, — тип башланы Уйылдан. — Күптән әйтергә йөрөгән бер һүҙем бар ине.

— Әйт һуң.

— Беләһеңме, һинең һеңлеңә, Миңлегөлгә, күптән бирле күҙ төшөп йөрөй бит минең.

— Һәй, йәш бит әле ул.

— Әйттең һүҙ. Ун алтылағы ҡыҙ йәш буламы ни? Бөгөн ана бүре атып йыҡҡанын үҙең күрҙең.

— Айыу ҙа атырға мөмкин дә ул.

— Әллә минең кеүектәргә биргең килмәйме?

Төлкөсура көлдө.

— Үҙең дә хәбәр һөйләп тораһың. Уға мин хужамы ни? Атай менән әсәй бар, үҙе лә йәнһеҙ кеше түгел.

— Шулайын шулай инде. Ата-әсәң нисегерәк ҡарар икән?

— Һин, Уйылдан, миңә үпкәләмә. Был турала әҙә генә бер һүҙ ҙә әйтә алмайым. Мин дә шул һинең кеүек үк былдай эштәрҙе аңлап бөтмәгән кешемен бит инде.

Төлкөсураның был эшкә ҡатнашҡыһы килмәгәне күренеп тора. Малай-шалай кеүек һөйләшкән була бит әле. Уйылдан уның шикелле солоҡтай кәүҙәле, көслө, йылғыр булһа, атаһы менән иҫәпләшеп торор ине ана...

Уйылдан башын эйеп аҙыраҡ һүҙһеҙ торҙо ла һаман ныҡышты.

— Үҙен күреп һөйләшһәм, нисек булыр икән?

— Арыу булыр.

— Ҡайҙа осратырға икән һуң уны?

— Уныһын үҙең самала инде. Шунан, Уйылдан, тағы бер нәмәне алдан аңғарып эш ит: үҙеңдең ата-әсәйең риза булырмы?

— Һәй, Миңлегөл кеүек ҡыҙға риза булмай тиме ни!.. Ярар, Төлкөсура, мин һине яҡын күреп әйттем дә ҡуйҙым инде. Эш барып сыҡһа, һиңә...

— Миңә бер ни ҙә кәрәкмәҫ, — тип Төлкөсура түбәлектән сыҡты. — Әйҙә инәбеҙ, юғалтҡандарҙыр.

Уйылдан уның артынан эйәрҙе. Әллә ниңә ҡырыҫ ошо Төлкөсура. Миңлегөлгә өйләнһәм, өр-яңы мылтығымды бирәм, тип әйтмәксе ине бит Уйылдан, тыңлап та бөтмәне.

Егеттәр төнләтеп кенә таралды. Төлкөсура балды самалап ҡына эскәйне, аҡылы теүәл, уйланып ҡайтып килә. «Һе, Уйылдандың Миңлегөлгә күҙе төшөп йөрөй икән. Матур булып үҫеп килә шул һеңлем. Ҡылығы, эшсәнлеге менән дә егеттәрҙе ҡыҙыштырмаҫлыҡ түгел. Уйылдан да арыу егет һымаҡ та, ата-әсәһе Торомтай кеүек ярлы балаһын әҙәмгә һанармы? Уйылданға ҡатын булып барһа, ялсы урынына тотмаҫтармы? Унан килеп, атайымдың Миңлегөлдө биреүгә ҡаршы төшөүе лә бар. Ҡотлоғужаны, асыҡтан-асыҡ әселешле булып йөрөмәһә лә, әллә ниңә яратып бөтмәй бит ул... Һә-ә-әй, кеше ҡайғыһын ҡайғыртып килгән булам. Үҙемә лә ул көн килер бит әле...» Әлегә Төлкөсураның ныҡлап күҙе төшкән ҡыҙы юҡ, анау Низам мулланың ҡыҙы матур ғына ла, берҙән, бик ыҡый күренә, унан ары Низам мулла Төлкөсураға бирә буламы. Әле атаһын урамда осратҡан һайын Низам мулла: «Мәсеткә һирәк йөрөйһөң, Торомтай, донъяң шуға ырап алға бармай һинең», — тип һуҡранып китә...

Туҡта! Туҡта әле, Төлкөсура...

Төлкөсура үҙҙәренең ҡапҡа ауыҙына етеп килгәнендә шып туҡтаны. Әйтерһең, был һүҙҙәр уның үҙ йөрәгенән килмәй, ә артынан баҫтыра төшкән кеше ҡысҡыра ине. Ул, ана шул кешене күрергә теләгәндәй, артына әйләнеп ҡараны, тирә-яғына күҙ һалды. Әлбиттә, бер кем дә юҡ ине. Ауылды көҙгө ҡараңғылыҡ йотҡан. Яҡын-тирәләге өйҙәрҙең ҡайһы берәүҙәренең тәҙрәһенән генә сыра йә сыуалдың тоноҡ яҡтылығы төшә. Шылт иткән тауыш та юҡ. Шулай ҡараңғылыҡҡа төбәлеп, байтаҡ һүҙһеҙ баҫып торғас ҡына, Төлкөсураның ҡолағына Норош туғайы яғынан берәм-һәрәм ишетелгән ҡыңғырау тауыштары килеп бәрелде. Төнгө ҡыңғырау тауышын тыңларға ярата ине егет. Төлкөсураға ул ҡайҙандыр, бөтөнләй икенсе бер сихри донъянан, үҙе һис тә күҙ алдына килтерә алмаған бәхет һәм шатлыҡ донъяһынан, ишетелгән һымаҡ тойола. Хатта ҡайһы саҡта, бала-саға кеүек, ҡайҙа икән шул донъя, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғылыҡты ярып бар-бар инең дә ҡапыл ана шул ялтлап торған бәхет иленә кил дә сыҡ инең, тип уйлап ҡуя.

Тик әле ул бындай хыялдарға бирелмәне. Йөрәге уға ни өсөн туҡтарға бойороҡ бирҙе һуң әле? Нимә ҡапыл ғына иләҫ-миләҫ булып китте күңеле?

Ошо һорауына яуап эҙләп торһа, ҡапыл төн пәрҙәһенең бер генә сите күтәрелде лә унда осҡондар һикергеләгән зәп-зәңгәр күҙле бер ҡыҙ пәйҙа булды. Төлкөсура терт итеп ҡалды, хатта артына сигенде, ҙур усы менән йөрәген баҫты, тын алыштары йышайып китте. Әйтерһең, уның алдында ҡәҙер төнө асылды ла ул ошо мәлдә үҙенең иң кәрәкле теләктәрен әйтә алмай ҡалды.

Бына ҡыҙыҡ, Уйылдандың Миңлегөл тураһында һөйләнеүе уның хәтер ҡапҡасын шулай асып ебәрҙеме икән ни? Ҡайҙан ап-асыҡ булып күҙ алдына килде лә хас теге саҡта ҡунаҡхананың ишек алдында торғандағы кеүек итеп ҡараныса...

Бынан бер ай самаһы элек Төлкөсура ялан яғына атаһы менән күмер һатырға сыҡҡайны. Оҙон юлда йөрөргә ярата ине ул. Ә ялан яҡтар Ҡаратауға яҡын түгел. Нисәмә тау артылып, нисәмә кисеү кискәс кенә, соҡор-саҡырлы юлда ике көн буйы атыңды арытып, саҡ барып сығаһың ул яҡтарға.

Борма-борма юллы оҙон тауҙарға артылғанда, Торомтай, битараф кешеләй, артҡараҡ ҡалып, ҡулдарын биленә ҡуйып, бөксәйә төшөп, әкрен генә атлай; ә Төлкөсура арба эргәһенән ҡалышмай, һайт-һайтлап ат ҡыуа, юлға һуғылып үҫкән ағасҡа күсәр башы эләгеп, ҡола бейә туҡтап ҡалдымы, күкрәксә ағасынан тотоп арбаны күтәрә лә ситкәрәк ултырта. Был эште шул тиклем еңеллек менән башҡара, әйтерһең, арбаға егерме бот күмер тейәлмәгән, буп-буш. Атаһы быны күрә килә, әлбиттә.

— Ипләп, улым, биленде биртендереп ҡуйма, — титән була, үҙе иһә, улының ғәйрәтенә ғорурланып, тамағын ҡыра, хәсрәт баҫҡан күҙҙәре ҡайһылыр мәлгә яҡтырып киткәндәй тойола.

Юл түбәнләскә киткән урындарҙа улар аталы-уллы арбаға менеп ултыра. Торомтай дилбегәне үҙе тота, Төлкөсура иһә юл эргәһендәге, ауыр ҡар баҫып имгәткәнлектән, тарбаҡ-торбаҡ булып үҫкән ағастарға йә юл ситенән генә шылтырап ағып ятҡан йылғаға ҡарап бара. Әллә ни оҙон-оҙаҡ уйҙарға сума торған мәле түгел шул әле уның. Торомтай, дилбегә тотоп ултырһа ла, күмеренең биҙрәһен нисә тиндән һатыу, нисә тәңкә аҡса төшәсәге, уға күпме он, нисә әсмүхә сәй, нисә ҡаҙаҡ кәнфит-шәкәр, нисә аршын ситса алып буласағы хаҡында иҫәп-хисап һалып бара. Ә былар Төлкөсураның башына ла инеп сыҡмай. Йыр тыуа уның күңелендә, әллә ниндәй дәртле көйҙө ҡысҡырып йырлап ебәргеһе килә. Тик йырламай. Килә торғас, тиктәҫтән йырлай башлаһа, атаһы әллә ни уйлар. Шулай ҙа Төлкөсура түҙмәй, һәр саҡ эргәһендә йөрөткән ҡурайын ала ла күңеленә тулышҡан көй-моңдо шуның аша түгергә тотона. Тулы күкрәгенә түгел, әкрен генә, һыҙҙырып ҡына уйнай ул ҡурайын. Кешеһеҙ тып-тын юлда шулай моң сәсеп барыуының, үҙ һыуһынын ғына ҡандырып ҡалмайынса, атаһына ла әллә ни хәтлем илаһи бер рәхәтлек биреүен беләме икән Төлкөсура?..

Бына шулай, ат ашатып туҡтай-туҡтай, ялан яҡтарына килеп сыҡты улар. Ағиҙел киңлектәрендә йәйрәп ятҡан, унда-һанда ғына ыбыр-сыбыр ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған, итәктәрендә ҡылғандар ялпылдашҡан ҡаҡ түбәле ҡалҡыулыҡтар киҫкеләгән шыр ялан Төлкөсураға мәрәкә лә, ят та тойола. Ә ауылдары һуң, ауылдары! Һалам түбәле, тыштан балсыҡ менән һыланған өйҙәр шул тиклем ҡыҫылышып, йыш ултырған, әй-

терһең, киң яланда ер етмәй. Күңеленә иң ятышһыҙы — ҡоҙоҡ һыуы. Әллә нисек инде, хас тоҙһоҙ аш кеүек. Шуға күрә һыуһаған сағында ла уны бер йотом ҡапмай, Төлкөсура тағы бер нәмәгә аптырай: игендең баҫыуҙа үҫкәнен күрә йөрөй, башаҡты ыуып, орлоғон сәйнәп ҡараған ла бар, тик бына уны ҡайһылай итеп шул тиклем башаҡтан ҡойоп алып бөтәләр ҙә нисек онға әйләндерәләр икән? Тирмән һүҙен ишеткәне бар атаһынан, уныһы ниндәйерәк ғәләмәттер инде.

Башҡа саҡтағы кеүек үк, Торомтайҙың, күпме юл үтеп тә, һис онталмаған, дыңғырҙап торған имән күмерен тәүге ауылда уҡ бик тиҙ алып бөттөләр. Торомтай арбаһының ҡабығындағы күмер саңын һеперен төшөрҙө, аҡсаһын шутлап, бөрмәләп тегелгән кескәй кәшөләтөнә һалды ла, эшләй белһәң бына шулай ул тигән кеүек, улына ҡарап ҡуйҙы.

— Тауарың бәҫле булһа, юлың ырыҫлы, — тип һөйләнде. Шунан, аҙ ғына уйланып ултырғас, өҫтәне: — Әллә Кинйәкәү баҙарында туҡтап тормайынса ыңғай Стәрле һуҡтырабыҙмы, улым? Унда он да һәйбәтерәк, сәйшәкәр ҙә осһоҙораҡ була торған.

— Шулай итәйек, атай! — тип арбанан һикереп төштө Төлкөсура.

Уның, Кинйәкәү баҙарында бер нисә тапҡыр булһа ла, Стәрлетамаҡҡа уҡ барып етә алғаны юҡ ине. Ҡала, тиҙәр, ҡайһылары маҡтайҙар, ҡайһылары яманлап телгә алалар, нисегерәк икән ул? Ҡала һынлы ҡаланы күрергә күптән ҡыҙыша ине Төлкөсура, ләкин ошоғаса тура килмәне. Әле, атаһының ауыҙынан һүҙ ысҡынғанда, был осраҡты һис кенә лә ҡулдан ысҡындырғыһы килмәй ине.

— Атты ек, әләйһә, — тип урынынан ҡуҙғалды Торомтай.

Йөк бушағас ни, тигеҙ ялан юлында ҡола бейә уларҙы ҡалаға табан елдерҙе. Имән туйыралары юлға һуғылып үҫкән тәңгәлдә ситкәрәк боролоп инеп, бесән сабып, арбаларына һалып алдылар ҙа ары ҡуҙғалдылар. Бер ҡалҡыуға күтәрелгәс, Торомтай кәзә һаҡалы менән билдәһеҙ алыҫлыҡҡа ымланы.

— Ан-а-а-а, күрәһеңме? Шул инде Стәрле.

Төлкөсура алға төбәлде. Ҡояш байышы яҡтағы йыртыҡ-бортоҡ болоттарҙың сите көйгәнлектән, офоҡто алһыу көңгөрт яҡтылыҡ ҡаплағайны. Төлкөсура тәүҙә шу-

нан башҡа бер ни ҙә күрмәне. Ҡаҙалып ҡарап бара торғас, шыйыҡ күгелйем төтөн сайҡалған тәңгәл күҙенә салынды. Тора-бара иһә шул төтөндө тишеп сыҡҡан бер нисә нәҙек оҙон торбаны, шунан ҡалҡыуыраҡ өйҙәрҙе абайланы. Ул ҡаланы бүтәнсәрәк итеп — ғәләмәт ҙур таш диуарҙары, күккә ашҡан йорттары, ут-ялҡын сәсеп торған заводтары булыр һымағыраҡ күҙ алдына килтерә ине. Ә ул ергә һылашып, шым ғына ята икән дә.

Урамына ингәс кенә, Төлкөсура ҡаланың шулай ҙа ауыл түгеллеген күрҙе: бер нисә урында мәсет манаралары күккә тишә, сиркәү көмбәҙҙәре ялтлап күренә; икешәр ҡатлы бейек кенә өйҙәр ҙә осраштырғылай, тәҙрәләр, ҡапҡа баштары семәрләп-селтәрләп эшләнгән; әлләни ҡыландырып көймә ҡоролған арбаларға егелгән оҙон тороҡло йылҡылдап торған шәп аттарҙы күргәс, ул түҙмәне:

— Вәт былар ат, исмаһам! — тип һоҡланды.

— Һәй улым, улым, уларҙың бишәүһенә лә бирмәйем мин ҡола бейәмде, — тине атаһы, артыҡ иҫе китмәйенсә. — Улар менән утын-бесән ташып буламы ла Ҡаратауға артылып буламы.

— Барыбер шәп, атай.

— Знамы шәп. Ҡала байын ғына йөрөтә бит улар... Әй-ҙә-ә-ә, ҡола бейә! — Торомтай, үҙ атының да насар түгеллеген күрһәткеһе килгәндәй, дилбегәһен ҡаҡты. Етер ергә еткәнен һиҙенгән малҡай күңелле генә юртып китте. Бәхеттәренә ҡаршы, атаһы элек килгәндәрендә төшөп йөрөй торған ҡунаҡханала юлаусылар артыҡ күп түгел ине. Һыҙма мыйыҡлы, туҫтаҡтай тулы йөҙлө хужа ҡапҡаһы алдында кем менәндер һөйләшеп тора ине. Торомтай эргәһенә барып һүҙ ҡушҡас:

— Ҡаратауҙан бит әле һин. Үт әйҙә, үт, урын етерлек, — тип ихласлыҡ күрһәтеп үк һөйләште.

Ҡунаҡхананың Төлкөсуралар ингән бүлмәһенән тир, тәмәке, әсикмәк, бешкән картуф һәм тағы әллә ниндәй еҫтәр аңҡып тора ине. Биш-алты кеше бар. Ҡайһыһы стена буйына эшләнгән оҙон һикелә һуйҙайып ята, беркәүһе мейес эргәһенә сүкәйеп ултырған да тәмәке быҫҡыта. Торомтай, ваҡ-төйәк әйберен урынлаштырғас:

— Сәй ҡайнаттырып эсмәйенсә булмаҫ, — тип һөйләнә-һөйләнә, ишектән кире сығып китте.

Ул әйләнеп инеп, юл хәрездәрен ҡутарырға ла өлгөрмәне, ишектә боҫрап торған самауыр күтәргән берәү

күрендe. Ун дүрт-ун биш йәштәрҙәге йоморо ғына кәүҙәле ҡыҙ ине ул.

— Кем сәй ҡайнатырға ҡушҡайны? — тип русса өндәште.

Торомтай уға башҡортса яуап бирҙе.

— Бында әпкил, ҡыҙым. Мин һорағайным.

Ҡыҙ, ҡоралайҙай туҡ-туҡ баҫып килеп, самауырын оҙон өҫтәл башына ултыртты, үҙенә төбәлеп ҡарап ултырған ныҡ, ләкин ҡупшы кәүҙәле, төлкө бүркен елкәһенә табанырaҡ саңҡайтып кейгән Төлкөсураға күҙ атып алды ла етеҙ атлап сығып та китте. Шәмдең тоноҡ яҡтыһында ҡайһылыр арала ялтлап үҙенә төбәлгән ошо ҡараш Төлкөсураны тертләтте, йөрәгенә уҡ үтеп ингәндәй булды. Тик ашап-эсеп бөтөүгә Төлкөсура был хаҡта онотҡайны инде. Атаһы ат һуғарырға ҡушҡас, Төлкөсура аптырабыраҡ ҡалды.

— Йылғалары яҡынмы һуң? — тип һораны.

— Ниндәй йылға ти бында. — Торомтай көлөмһөрәне. — Хәйер, беренсе килеүең шул, белмәйһеңдер. Бая сәй керткән ҡыҙҙан биҙрә һорап ал. Ә ҡоҙоҡтары өйҙөң артында ғына.

Төлкөсура бүлмәнән сығып, өлкән ишеккә юнәлгәйне, әрбәк-һәрбәк тар коридорҙа аңғармаҫтан кемгәлер бәрелде. Ә ҡолағы төбөндә:

— Бә-ә-әй, абый, күзеңне ауылыңда калдырып килгәнсеңме әллә? — тип көйләберәк әйткән һүҙҙе ишеткәс, аптырабыраҡ ҡалды, ни әйтергә белмәйенсә, ыҡ-мыҡ итте.

— Йә, үтсәң үт. Ниңә ушың китте?

— Ни... теге... һылыу... Һин теге һылыумы әле?

Ҡыҙ кеткелдәп көлдө:

— Ай мескенкәй, сылудан салдырып мәтәшә!..

Ҡыҙ Төлкөсураның танау төбөнән күләгә шикелле йылҡ итеп үтте лә артабанғыраҡ бүлмәнең ишегенә инеп юғалды. Төлкөсура ни ҡылырға белмәй аҙыраҡ тапанып торҙо, ҡыҙ артынан ҡабат барырға батырсылығы етмәне, ахырыһы, атаһы эргәһенә кире инде.

— Атай, мин теге ҡыҙыҡайҙы ла, биҙрә лә тапманым.

— Ай эттәгенәһе, — һикегә һуҙылып төшөп ятҡан Торомтай ыңғыраша-ыңғыраша урынынан ҡуҙғалды. — Тәнем нык ҡаҡшаған, билем һыҙлап тора... Ярар, үҙем сығып әйләнәйем, әлегәс.

Төлкөсура турпыша түшәлгән һикегә ауҙы ла бүркен башы аҫтына ҡыҫтырҙы. «Ҡайһылай үткер ҡыҙыҡай, ут бөрсәһе кеүек, — тип уйланы ул, һаман албырғауы үтмәгән көйө. — Ошо йорт хужаһының ҡыҙымы икән ни?.. Ҡайһылыр яғы менән беҙҙең Миңлегөлгә оҡшаған...» Ул күҙен йомдо. Ике урыҫ үҙ-ара һаман көңгөр-ҡаңғыр һөйләшә, бер нисә юлаусы ғор ҙа шар килеп йоҡлай. Танауҙы һаҫыҡ тәмәке төтөнө ҡытыҡлай, тамаҡҡа тығыла. Бында нисек йоҡламаҡ кәрәк, тын алғыһыҙ бит.

Төлкөсура торҙо ла тышҡа сыҡты. Атаһы эшен бөтөрөп, кире инеп килә ине инде.

— Ҡайҙа бараһың, улым?

— Эй, бигерәк һаҫыҡ та унда. Тыным тарыға. Әллә арбала ятып йоҡлайыммы икән?

— Әлләсе... Өшөрһәң бит, улым. Унан бында ауыл ере түгел...

— Булмаһа, миңә кем тейә? Һинең сәкмәнеңде ҡатлап ябынам да...

— Ярар һуң. Өшөй башлаһаң, өйгә ин. Ишектәрен элмәй улар.

Төлкөсура атҡа һалғандан ҡалған бесәнде арба төбөнә тигеҙләп түшәп урын әҙерләне, ләкин ятҡыһы килмәйенсә, киң ихатала ары-бире һуғылып, байтаҡ йөрөнө. Ҡала төнөн дә бөтөнләйгә шымып ҡалмай икән. Урамдан кемдәрҙер арба тәгәрмәстәрен шалтырҙатып елеп үтә, ҡысҡырып һөйләшкән, көлөшкән, һүгенгән тауыштар ишетелеп ҡала. Бына берәүҙең ҡарлыҡҡан тауыш менән йырлағаны ҡолаҡҡа килеп бәрелде. Ҡайҙалыр һис өҙлөкһөҙ гөп-гөп-гөп иткән тауыш сыға, әйтерһең, көбөләй оло килелә ниндәйҙер ғифрит ғәжәп ҙур төйгөс менән киндер төйә.

Өс көн буйы юлда йөрөү йонсотҡайны. Төлкөсура ҡулдарын юғары ташлап килелде, аяҡ остарына күтәрелеп, зыңҡылдатҡансы ергә кире баҫты һәм арбаһына табан йүнәлде. Менеп ятҡас, яңы сабылған бесән аңҡытҡан еҫ уның болоҡһоған күңелен баҫа төштө, тәненә рәхәт бер һиллек таралды. Тик әлеге ят тауыштар уға йоҡлап китергә һис тә ирек бирмәй ине. Ул әйләнде, тулғанды, ахырҙа тағы тороп ултырҙы. Әллә теге һаҫыҡ бүлмәгә инеп ятаһымы икән? Бәлки, унда йоҡлап булыр? Ике ҡатлы ҡунаҡхананың өҫкө ҡатындағы бер нисә тәҙрәлә генә ут күренә, аҫта иһә берәүһендә генә тоноҡ шәм шәүләһе. Йоҡлайҙар, күрәһең. Кешеләрҙе борсоп,

ҡабат кереп йөрөүе лә инде... Теге ҡыҙ ҙа йоҡланымы икән? Ҡайһылай үткер һөйләшә. Туҡта, «һылыу» тигәнгә ниңә асыуланғандай итте әле ул? Төлкөсура бит уны үҙенән байтаҡҡа кесе күренгәнгә шулай һүҙ ҡушҡайны...

Урамдарҙағы төрлө тауыштар һирәгәйә төштө, түбәлек аҫтына бәйләнгән аттарҙың гөршөлдәтеп бесән ашағаны, танауҙарын хурылдатҡаны хәҙер айырым-асыҡ ишетелә ине. Төлкөсура өсөн ниндәйҙер ят, сәйер төн ине был. Башына төрлө-төрлө өҙөк-йыртыҡ уйҙар тығыла, йөрәге һис тыныслана алмай. Ахырҙа, ул арба төбөндәге ҡабыҡ ҡатынан ҡурайын һурып алды. Тәүҙә, ошо ят төндән шикләнгәндәй, ярпы-йорпю көйҙәрҙе әкрен генә быжҡылдатты, тик был ғына уның күңеленә һиллек бирә алмай ине. Ахырҙа, «Урал»ды һыҙҙырып ебәрҙе. Көй, бик алыҫтан килгәндәй, йөрәк майын һыҙып ҡына, әкрен генә ишетелә, ләкин ундағы һағыш, юҡһыныу шул тиклем көслө, Төлкөсура тыуған тупрағынан йылдар буйы айырылып тороп, уны бер күрергә зар-интизар тиерһең.

— Китче-китче, бигерәк матур уйныйсың икән лә...

Ҡулынан ҡурайы төшөп китә яҙҙы Төлкөсураның, ялт итеп артына боролдо. Ҡулына биҙрә тотҡан теге ҡыҙ арба эргәһендә тора ине. Ул тыйнаҡ ҡына көлдө.

— Әллә ҡурҡыттым инде?

Төлкөсура ни әйтергә лә белмәне, ахырҙа үҙе лә һиҙмәҫтән тупаҫ ҡына һораны:

— Ни эшләп йөрөйһөң бында?

Ҡыҙ тағы ла баяғы кеүек тоноҡ ҡына сылтырап аҡҡан шишмә тауыштары сығарып көлдө.

— Әллә йөрөтмәҫ тә инеңме, абый? — «Абый» тигәнен нисектер һуҙып, көйләп әйтте, хатта егеттең күңеле ҡапыл тынысланыу ғына түгел, ебеп үк төштө. — Бына һыу түгергә сыҡҡан инем, ҡурай тауышын ишеткәс, аптырап ҡалдым... Абы-ый, тағы бер генә уйнаһаңсы?

Төлкөсура, уның һүҙҙәрен ишетмәгәндәй, бер килке өндәшмәй ултырҙы. «Тауыштары ҡайһылай яғымлы. Хас та йыр шикелле... Беҙҙең ауылда шулай һөйләшкән бер ҡыҙ ҙа юҡтыр. Ошолай ҡара төнгә тиклем йоҡламайынса, һаман эшләп йөрөймө икән ни? Уғата йәш бит әле. Атаһы шул саҡлы хаяһыҙмы икән?..»

— Абы-ый, йә инде...

Төлкөсура ҡурайын ипләп кенә ауыҙына терәне һәм «Ашҡаҙар»ҙы уйнарға тотондо. Хәтәр ҙур ихласлыҡ менән уйнай ине ул, хатта ҡыҙҙың: «Уй, хоҙайым, «Аш-ҡа-

ҙар...» — тип үҙәктәре өҙөлгәндәй бышылдауын да ишетмәне, яҡынлап, арбаға терәлеүенә лә иғтибар итмәне. Көйҙө уйнап бөткәс иһә, үҙ моңона үҙе әҫәрләнеүҙән һаман ҡотола алмай, шымтайып ултыра ине, эргәһендәге ҡыҙҙың мыш-мыш килеп үкһеүенә һиҫкәнеп китте, хатта ҡурҡа төшкәндәй итте.

— Ни булды, һылыу?..

— Бер ни ҙә булманы... Минең ауылым да Ашҡаҙар буйында бит...

— Нинә илайһың һуң?

— Ә һин ҡайһы яҡтан? — Ҡыҙ, тыныслана төшөп, яуап биреү урынына үҙе һораны.

— Беҙ алыҫтан. Ҡаратау тигән тауҙы ишеткәнең бармы?

— Юҡ.

— Уралдағы ана шул иң ҙур, иң матур тауҙың аръяғында беҙҙең ауыл. — Ҡыҙ алдында бына шулай үҙ ауылының бәҫен арайһы уҡ күтәрә алыуынан ниндәйҙер кинәнес тапты Төлкөсура, шунан ҡапыл ғына һораны: — Ә һин бындағы... ҡалалағы түгелме ни?

— Ю-у-у-ҡ. Ауылдан мин... — Ҡыҙҙың тауышы моңһоу ғына сыҡты. — Күңелемде әллә ни эшләттең, абый...

Ҡыҙ биҙрәһен алды ла, сихри шәүлә кеүек, шым ғына өй яғына ҡарай атланы. Төлкөсура иһә таңға тиклем йоҡлай алмай, болот йыртыҡтары араһында йымылдашҡан йондоҙҙарҙы күҙәтеп ятты. Ана шул йыһан киңлегенән, алыҫтан-алыҫтан, әллә ниндәй таныш, күңелгә яҡын ауаздар һарҡып ишетелгәндәй тойола уға: «Күңелемде әллә ни эшләттең, абый...» Ниндәй моң, ниндәй яңы көй был?

Таңға ғына серемгә киткән Төлкөсура атаһы яурынынан һелкеткәнгә уянды.

— Ай-бай, улым, бигерәк ҡаты йоҡлағанһың. Әйҙә, ҡапҡылап алайыҡ та баҙарға иртәрәк сығайыҡ.

Булмәгә ингәс, Төлкөсура үҙе лә аңғармаҫтан ишектән күҙен алманы. Унан бына-бына ниндәйҙер изге йән килеп инер төҫлө ине. Ләкин унда өҙлөкһөҙ керепсығып йөрөгән юлаусыларҙан башҡа кеше күренмәне. Атаһы фатир өсөн аҡса түләп, әйберҙәрен алып, тышҡа йүнәлгәс, ул, ошонда иң кәрәкле әйберен онотоп ҡалдырғандай, бошондо, тағы аҙ ғына тороп торғоһо килде. Ә инде ат егеп йөрөгән сағында солан күтәрмәһендә аҡ алъяпҡыс быуған, яулығын артҡа ҡайтарып ябынған

ҡыҙ һыны күренгәс, терт итеп ҡалды. Ике ҡулына ике биҙрә тотҡан ҡыҙ, икеләнгәндәй, саҡ ҡына туҡталып торҙо ла, шунан ҡыйыу ғына атлап, Төлкөсура эргәһенә килде.

— Китәсезме ни?

Төлкөсура уға боролдо ла, ҡуйы ҡара ҡаштарының өсон юғары сөйөп, шаҡ ҡатты. Әллә ни тиклем сер, моң, һөймәләклелек йәшеренгән ике зәп-зәңгәр күҙ төбәлеп тора ине уға. Бындай ҡараштың, бындай саф зәңгәрлек һирпеүсе күҙҙәрҙе бер ҡасан да күргәне юҡ Төлкөсураның. Әллә егеттең ҡуҙҙай янған күҙҙәре ҡыҙҙы ла болоҡһотто, оҙон керпектәре зәңгәр нур бөркөүсе зәңгәр күҙҙәрен япты.

— Исемең кем һинең, һылыу? — Төлкөсураның тауышы ишетелер-ишетелмәҫ кенә сыҡты.

— Исемем?.. Китсе, мин бит... — Ҡарашы менән егет йөрәген тағы бер өтөп алғас, ҡыҙ боролдо ла ҡоҙоҡҡа табан китеп барҙы.

Миңрәүләнгән Төлкөсураны атаһының тауышы айнытып ебәрҙе.

— Йә, улым, атыңды дилбегәлә лә ҡуҙғалайыҡ.

Төлкөсураны баҙар шау-шыуы ла, хатта атаһының бер нисә тапҡыр:

— Һиңә ни булды әле? Ниңә һиңмайланып йөрөйһөң? Бында алдыңды-артыңды ҡарабыраҡ йөрөмәһәң тегеләй, — тип һуҡраныуы ла өр-яңы бер тойғо әсирлегенән ҡотҡара алманы. Хатта ҡала күреү ҡайғыһы ла киткәйне унда. Зәңгәр нурҙар бөркөүсе зәңгәр күҙҙәр, йөрәген дерелдәтеп, ҡаршыһында тик тора.

Бүтән саҡта ялан яғына сығып, дүрт-биш көн йөрөнөләрме, Төлкөсура ауылын, Норош буйҙарын, урмандарын, тауҙарын һағынып ҡайтыр ине. Был юлы иһә ул үҙен күмгән юкһыныу тойғоһонан ҡотола алмай яфаланды, ауылына ҡайтып ингәндә лә, вайымһыҙ ҡараштарын алыҫтарға төбәп тик килде.

Көн һайын табыла торған донъя мәшәҡәттәре, бер ни тиклем ваҡыт үткәс, уның был сәйер ҙә, рәхәт тә кисерештәрен онотторған һымаҡ иткәйне. Әле бына улар яңы бер көс менән тышҡа бәреп сыҡты, бөтә тәнен, йөрәген ялмап алды, тыныслығын бөтөрҙө. «Их һин, зәңгәр күҙле исемһеҙ ҡыҙ! Яҡын булһаң, эргәңә хәҙер осоп барып етеп, күҙҙәреңә, нур бөркөп торған ыуыҙҙай саф,

аҡ йөҙөнә бер генә ҡарар инем!..Ниндәй онотолмаҫ йән булдың һин? Ҡабаттан тағы осраһыңмы? Ҡасан?..»

Төлкөсураның әллә ниҙәр эшләгеһе килә ине был мәлдә. Ул бөгөн ҡола бейәнең ситкә тышалмауын, түбәлектә тороуын хәтерләне һәм уны кәртә артына етәкләне. Үңдекһеҙ-ниһеҙ менеп, күҙе ҡараған яҡҡа төн ҡараңғылығын йыртып сабып сығып китте.

## II

Өфөнөң Ханыковский урамы Голубинный урамына барып төкөлөр саҡта юлдан эстәрәк, кәрниздәре семәрләп эшләнгән, яҡты тәҙрәләре төбөнә һәр төрлө ағастар ултыртылған бик йыйнаҡ, матур йорт күҙгә ташлана. Пермь яғынан күсеп килгән икенсе гильдиялы купец Артем Дмитриевич Лапшин быйыл ғына һалдырып инде уны. Хатта иркен бүлмәләр тәртипкә килтереп тә бөтөлмәгән. Залға ҡуйылған йомшаҡ диван, креслолар ялан-ғас. Иҙәнгә күҙ яуын алып тормалы иран келәме йәйелгән, ҙур түңәрәк өҫтәлгә йәшел бәрхәт япма ҡапланған.

Өй эсе үҙ яйы менән тәртипкә инер тип, Лапшин иң тәүҙә урман һатып алыу мәсьәләһен хәл итмәксе булды. Кострома губернаһының Ветлуга, Пермь тирәһендә Чусовой, Буй йылғалары буйындағы ағастарҙы ҡырҡтырғандағы тәжрибәһенән белә: бүрәнәне ҡыуғын өсөн көҙҙән үк әҙерләтә башламаныңмы, ҡышҡы тәрән ҡарҙа, бигерәк тә яҙын юл йомшарғас, ыратып булмай. Әле Лапшиндең ҡырҡырға урманы ла юҡ. Шулай ҙа ер, урман һатыу эштәрендә тамаҙа булып йөрөүҙе кәсеп иткән кешеләрҙән Башҡортостан урмандары тураһында байтаҡ нәмәләр белергә өлгөрҙө. Һал ағыҙырға бик уңайлы Ҡариҙел буйҙарындағы ярға яҡын урмандар һатылып бөткән, Дим тирәһен әйтеп тораһы ла юҡ, Ағиҙел башындағы бөтә урман Белорет, Ҡағы, Әүжән-Петровск заводсыларының ҡулында. Берҙән-бер уңайлыраҡ урын — Ҡирәй волосенең Норош буйындағы бығаса кеше ҡулы теймәгән ҡарағай урмандары. Ҡыуғын ҡыуыу өсөн Норош йылғаһы бынамын тигән; Ағиҙелгә алып төшкәс, бүрәнәләрҙе һаллайһың да теләгән ереңә оҙатаһың.

Артем Дмитриевичтән бүрәнә көтөүселәр иһә бик күп. Уны Ҡама буйында ғына түгел, артабаныраҡ та

яҡшы беләләр. Унының Саратовта, Царицында, Әстрхандың үҙендә, хатта Дон пристандәрендә лә ағас һатыу конторалары бар. Уларҙы тәьмин итеү өсөн аҙ ағас кәрәкмәй, эштәрҙе йәһәтерәк башлап ебәрәһе ине.

Бына ошо уйын тормошҡа ашырыу өсөн, ул бөгөн өйөнә урман менән алыш-биреш итеүҙә күҙе сыҡҡан Каргов тигән кешене саҡырғайны. Был ниндәй милләттән икәне аныҡ ҡына билдәле булмаған, русса ла, татарса ла, башҡортса ла һыу кеүек белгән, хатта немецсә лә һупалаған әҙәмде уға әүәлге бер яҡын танышы тәҡдим итте. Алдына алған эште аҙағына еткермәйенсә туҡтамай, ти. Каргов иһә үҙенә иптәшкә Артем Дмитриевичтең улы Роман Артемьевичтән тыш тағы бер кешене алырға теләүен әйтте. Бөгөн улар икәүһе лә килергә тейеш.

Билдәләнгән сәғәт үтеп барғанға Артем Дмитриевич борсола уҡ башлағайны, ишек шаҡыныла̄р. Алдан ҡарағусҡыл йөҙлө, көмөрө йоҡа танаулы Каргов инде, билен бөгөп, яһалма йылмайып иҫәнләште. Унының артынан ингәненең мосолман кешеһе икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора: төпкә батҡан күҙле ябыҡ ҡына бер әҙәм.

Уларҙы Лапшин залға саҡырҙы, улына ла инергә ҡушты. Каргов һүҙҙе хужаны маҡтауҙан башлап ебәрергә самаланы.

— Был өй хужаһының заман сәнғәтен тәрән аңлауы йорттоң тышынан уҡ күренеп тора, — тине.

Ләкин унының ғәжәп ярамһаҡ, ләкин күңелгә ятышһыҙ нәҙек тауыш менән тырышып-тырышып һөйләүе көткән һөҙөмтәһен бирмәне.

— Беҙ бында йортто тикшерер өсөн йыйылманыҡ бит, Лазарь Моисеевич. Минең Саратовтағы йортом эргәһендә был тауис янындағы тауыҡ себеше кеүек кенә,— тип унының һүҙҙәренә иғтибар итмәне Лапшин. — Ғәфү итегеҙ, был әфәнденең исеме кем әле? Әһә, Сәлимме ни? Әйтергә бик уңайлы. Оҙон-оҙон мосолман исемдәрен енем һөймәй. Ярар, һөйләшеүҙе башлайыҡ. Минең һеҙгә шарттарым: миңә урман кәрәк, осһоҙло урман. Башҡорт урманын үҙ заманында ҡайһы берәүҙәрҙең дисәтинәһен бер тиндән дә кәмерәккә төшөрөп һатып алғандарын да беләм. Ләкин хәҙерге дәүер икенсерәк икәнен дә аңлайым. Ҡыҫҡаһы, урмандың дисәтинәһе етмеш тиндән дә артыҡҡа төшөргә тейеш түгел. Тәүге осорға миңә ун мең дисәтинә самаһы етеп торор. Шуға аҡса түләп, бөтә до-

кументтәрҙе ҡулығыҙға алып ҡайтаһығыҙ. Аҡса менән документтәр минең ошо улдың — таныш булығыҙ, Роман Артемьевич — ҡулында булыр. Алдан мин һеҙгә ун бишәр һум аҡса бирәм, ҡалғанын, эштең нисек барып сығыуына ҡарап, урман һатып алыу тураһындағы бөтә документтәр минең ҡулға килеп ингәс алырһығыҙ. Хәҙер һеҙ үҙ шарттарығыҙҙы, эште уңышлы алып барып сығарыу өсөн ниндәй уй-фекерҙәрегеҙ бар — шуларҙы әйтегеҙ.

Ҡаргов креслоның бер яғына янтайҙы, арҡаһына һөйәлде, икенсе яғына янтайҙы, — әйтерһең, уға хужа менән ни рәүешлерәк ултырып һөйләшеү иң мөһим нәмә ине. Ахыр килеп, үҙен бәйһеҙ күрһәтеү өсөндөр инде, ҡулдарын түшенә ҡаушырып, артына саңҡая бирҙе лә өҫтәлгә ҡарап һөйләргә тотондо:

— Шарттар тураһында беҙ алдан уҡ сама менән һөйләшкәйнек инде, Артем Дмитриевич. Бөтә эш уңышлы килеп сыҡһа, етмеш бишәр һум. Шулай бит? Хәҙер вағыраҡ мәсьәләләрҙе ентекләп һөйләшәйек. Мин алдан уйланған план буйынса һәм унан бер аҙым да тайшанмайынса эш итергә өйрәнгәнмен. Ҡирәй волосендәге урманды һатып алыуҙы бына былайыраҡ тормошҡа ашырайыҡ. Бында иң тәүҙә урындағы халыҡтың тик урмансылыҡ менән генә кәсеп итеүен, шуға ла уларҙың үҙ урмандарын еңел ҡулдан һатып ебәрмәҫен онотторға ярамай. Унда һәр ағастың ҡәҙерен беләләр. Шуға күрә уларҙы бик һәйбәт кенә итеп тишек шоманға ултыртыу кәрәк. Бының өсөн, беренсенән, яңы йыл башынан губернала бөтә ергә яңы земство законы кертеләсәк. Уның буйынса һеҙҙең волостәге йөҙ ҙә ун дүрт мең дисәтинә ергә (мин был һанды губерна земствоһындағы документтән алдым) бик күп һалым түләргә тура киләсәк. Беҙ һеҙҙе ошо бәләнән ҡотҡарырға килдек тигән хәбәр һалабыҙ. Икенсенән, урындағы старшина, мулла кеүектәргә төртөү өсөн улығыҙға аҡса бирергә онотмағыҙ. Өсөнсөнән, бер мискә араҡы кәрәк булыр. Башҡортто иҫертһәң, бисәһен дә һатып алырға мөмкин...

— Ха-ха-ха!.. — Лапшин эйәк аҫтын киртмәсләндереп, һимеҙ битен йәйрәтеп көлдө. — Ну һөйләйһең һин!..

— Артабан, беҙ уларға, һеҙгә кәсеп артасаҡ, беҙҙең хужа бик йомарт кеше, ағас ҡырҡыуға, үҙ атығыҙ менән бүрәнә тартыуға һәйбәт хаҡ түләйәсәк, тигән һүҙҙәрҙе лә әйтһәк, артыҡ булмаҫ кеүек, Артем Дмитриевич.

— Пландарың арыу төҫлө һинең, Лазарь Моисеевич. Бүтәненә фатиха бирәм, тик эш хаҡы түләү тураһында...

— Аңлайым, аңлайым, Артем Дмитриевич, — ауыҙын йәйеп йылмайған ыңғайына Ҡарговтың көмөрө йоҡа танауы бер яры ҡыйшайҙы, — ныҡлап эш башлағас, күпме эш хаҡы түләү — һеҙҙең ҡулда, уны бер кем дә тартып ала алмаҫ. Бер ҡатлы башҡорттарҙың күңелен иретеү өсөн генә әйтергә кәрәк бит.

— Ярар, тик тағы бер киҫәтәм: документтәр еренә еткереп төҙөлһөн. Был эштә минең уңғаным да, туңғаным да бар. Юлға сығыу өсөн иртәгә сәғәт унда аттар егеүле торасаҡ.

— Туҡтағыҙ әле, туҡтағыҙ, Артем Дмитриевич, мин иң кәрәкле деталдәрҙең береһен әйтергә онотҡанмын. Берәй йөк сәй-шәкәр, ваҡ-төйәк ситса, сатин тейәтеп ебәрһәгеҙ, бигерәк шәп булыр ине.

— Уныһы нимәгә тағы? — Урынынан күтәрелгән Лапшин умарта ярҡаһындай кәүҙәһен көскә бороп һораны.

— Аҡса иҫәбенән башҡорттарға бирергә. Таҡта сәйен, сепрәк-сапраҡты ике хаҡына ебәрергә мөмкин.

— Бигүк алйот кеше түгеллегеңә тамам ышандым мин һинең, Лазарь Моисеевич. Быларын да эшләрбеҙ. Әйҙәгеҙ аш бүлмәһенә.

Тамаҙаларҙы һыйлап оҙатҡас, Лапшин бер рәхәтләнеп, кәйефләнеп килелде.

— Эштәр ыңғайларға самалай бит, Марфуша, — тине ҡатынына. — Һөйләүҙәренә ҡарағанда бик хозур яҡ, тиҙәр. Алдағы йәйгә үҙеңде Мария менән бер алып барып күрһәтермен, алла бойорһа.

* *
*

Күкрәктәре пружинаға ултыртылған, тимер күсәрле арбаларға егелгән дүрт атлы Өфөнән сыҡҡандарының бишенсе көнөнә Ҡаратауға килеп ингәндә, эңер төшә башлағайны инде. Ҡаргов уйлап тапҡан тағы бер хәйлә буйынса эш итергә булдылар: старшина, мулла йә староста өйөн эҙләп йөрөмәйҙәр, тәүге тура килгән кешегә борола ла инәләр. Урман ауылдарын күп гиҙгән Ҡаргов башҡорттарҙың фатир һорап ингән теләһә ниндәй юлсы-

ны ла кире бороп сығармауын яҡшы белә. Роман уның был тәҡдименә:

— Беҙҙең сәй-шәкәр, тауарҙар ҙа байтаҡ. Рәтле ихата булмаһа, урламаҫтармы? — тип шикләнгәйне, көлдө генә.

— Беренсенән, башҡорттоң береһенең өй тирәһендә лә бур керә алмаҫлыҡ ҡойма, ҡапҡа юҡ. Икенсенән, урам уртаһына ҡалдырһаң да, улар һинең әйбереңә теймәйәсәк.

Сәлим дә уның һүҙҙәрен хупланы. Был кеше Лапшиндең өйөндә бер ауыҙ артыҡ һүҙ ысҡындырмаһа ла, телгә бөткән, шул беләк буйындай теле менән көн иткән әҙәм ине. Ер һатыу буйынса сход йыйылғас, телмәр тотоу мәсьәләһен Каргов шуға күрә уға йөкләтә лә. Сәлим был яҡтан уны ошоға тиклем хур иткәне юҡ.

Ауыл осона еткәс, Роман ҡолас ташлап кирелгәйне, Каргов уға тағы бер иҫкәртеү яһаны.

— Стәрлетамаҡта артығыраҡ эстегеҙ һеҙ, Роман Артемьевич, һаман төҙәлеп етә алмайһығыҙ. Теге Осипов тигән майорҙың ҡыҙы бик шәп икән шул. Төнөн уның бүлмәһенә һыпыртҡанығыҙҙы һиҙеп яттым, сос егет икәнһегеҙ.

Роман уға ҡарап көлдө.

— Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә беләһеңдер һин, Лазарь Моисеевич!..

— Ярар, ярар, ауыҙыңа төшкәнде ҡапмай үтеү ҙә харам. Тик бында бер йотом эсмәйһегеҙ. Беренсенән, бөтә аҡса һеҙҙә, икенсенән, бында ла ҡыҙҙар бөтмәгән. Шундайҙары бар, һеләгәйҙәрең ағыр. Һаҡ булығыҙ, эште боҙоп ҡуймағыҙ.

— Һин әйткәнсә булыр, Лазарь Моисеевич.

Урамға инеп, бер аҙ барғас, һәр өйгә ҡаҙалып ҡарап килгән Каргов һул яҡҡа төртөп күрһәтте:

— Анау өйгә боролабыҙ.

Алғы арбала ултырып килгән Сәлим атының башын шулай табан тартты.

* *
*

Бөгөн Ғәрифәнең йөҙө асыла төшкәйне. Иллегә яҡынлап килһә лә, күҙ төптәрендәге сырыштар һирәгәйгәс, улы ауырығандан бирле тешләнеп йөрөгән ирендәренә

ҡан югергәс, уның йәш саҡта һылыу булғанлығын төҫмөрләргә мөмкин. Хас Миңлегөлө һымаҡ яныл торғандыр инде. Өйҙәге ғаиләнең кәйефен белгең килһә, әсә йөҙөнә ҡара, тип белмәй әйтмәйҙәр шул. Башҡаларҙың да күңеле күтәренке күренә. Миңлегөлдөң яраһы, бәхеттәренә ҡаршы, ярһып шешеп китмәне, әллә ни һыҙламай ҙа. Өйҙәренең ҡыуанысы Бикморатты ана шул уны яралаған бүренең тиреһенә урау үлемдән ҡотҡарманымы икән? Таң атыуға бөтә тәненә ҡыҙылса ҡалҡҡайны, тәненең эҫелеге ҡайта төштө, күршеләренән алып ингән кәзә һөтөн эсте лә тыныс ҡына йоҡлап алды, төштән һуң апаруҡ һөйләшеп ята.

Бүре тиреһен бөгөн иртәнсәк киргегә ҡаҙаҡлап, түбәлек башына беркетеп ҡуйҙы Төлкөсура. Кирге әҙерләп йөрөгәндә атаһына Ҡотлоғужа байҙың кисә эш тураһында ҡуҙғатҡан һүҙен әйткәйне, Торомтай риза булманы.

— Уға ун биш, уҙа барһа — егерме тингә көнләккә йөрөгәнсе, күмер үртәйек. Сана юлы төшөү менән ике атҡа тейәп яланға һатырға алып сығырбыҙ ҙа ҡышҡылыҡҡа он апҡайтырбыҙ, — тине.

Атаһының был уйына ихлас ҡушыла Төлкөсура. Сөнки уның күңелендә үҙе лә һаман аңлап еткермәгән өмөт осҡоно баҙлай. Әгәр ялан яғына күмер һатырға сыҡһалар, бәлки, тағы Стәрлетамаҡҡа уҡ барып етерҙәр әле. Шунда теге ҡунаҡханалағы зәңгәр күҙле татар ҡыҙын да күрер... Бына шуға ла айырата мөкиббән эшләп йөрөгән көнө.

Бөгөн ана күмер баҙы эргәһенә ике йөк ҡоро имән алып барып ауҙарҙылар. Ут-фәлән сығып китмәһен өсөн, тирә-яғындағы ҡауҙанды ҡырып таҙарттылар. Иртәгә барып бысҡылап, ярып, шул имәндәрҙе үртәргә әҙерләмәкселәр. Ләкин был теләктәре улар уйлағанса барып сыҡманы, эш башлауҙы бер нисә көнгә кисектереп торорға тура килде.

Кискелеккә ашарға ултыртырға Ғәрифә ашъяулыҡ ҡына йәйгәйне, өй эргәһенә өс-дүрт атлы кеше килеп туҡтағаны күренде. Улай-былай иткәнсе, берәү ишекте асты ла:

— Хужалар өйҙәме? — тип тауыш бирҙе.

— Өйҙә, өйҙә, төклө аяғың менән үт.

— Әссәләмәғәләйкүм.

— Вәғәләйкүмәссәләм.

Ишек алдында ҡаҡса битле, көмөрө йоҡа танаулы ят кеше баҫып тора ине. Ул ары-бире уйнаҡлаған туптай күҙҙәре менән бик йәһәт кенә өй эсен һәрмәп сыҡты. Шунан ишек төбөндәге бәләкәй урындыҡҡа ултырып, ҡалын ирендәрен нығ ҡыбырҙатып, доға ҡылды.

— Донъялар, мал-тыуар, бала-сағалар именме, ҡорҙаш?

— Аллаға шөкөр, — тип һораулы ҡараны уға Торомтай. — Үҙегеҙ ҡайһы яҡтарҙан киләһегеҙ?

— Беҙҙең юл башы алыҫтан, ҡөтдәһе — ошо һеҙҙең ауылда.

— Алай икән...

— Ҡунырға фатир бирмәҫһегеҙме икән, тип ингәйнем.

Торомтай Ғәрифәгә ҡараны. Бүтән ваҡыт булһа, бер һүҙһеҙ әйҙүкләр ине, Бикморат ауырып ята, Миңлегөл аяғы менән ултыра. Күҙ төбәп ингән кешене тағы нисек кире бороп сығараһың?

— Нисә кеше һуң һеҙ?

— Дүртәү.

— Ярар, инегеҙ әйҙә. Тере һөйәк һыйыр әле. — Торомтай һүҙгә ҡатнашмай ултырған Төлкөсураға боролдо. — Бар, улым, мосафирҙәрҙең аттарын туғарыш, урынлаштырырға ярҙамлаш. — Ғәрифәгә әйтте. — Һин, бисәкәй, ашъяулығыңды алыбыраҡ тор инде. Бергәләп ултырырбыҙ.

Ылауҙарҙы түбәлек эргәһенә үткәреп, аттарҙы туғарҙылар. Төлкөсура, тирләгән аттарҙың көрләгәнә, сбруйҙарының еҙ тәңкә менән биҙәрләп эшләнеүенә, арбаларҙың тимер күсәренә ҡарап, юлаусыларҙың ваҡ-төйәк кешеләр түгел икәнен шәйләне. Икәүһе мосолман, йәше менән иң ҡарты — көрәктәй һаҡаллыһы — урыҫтар тигән һығымта ла яһап ҡуйҙы. Бөтәһе лә бик итәғәтле тойола. Атаһы менән бәләкәй сағынан уҡ Әүжән баҙарына, ялан яғындағы ауылдарға күмер, дегет, көрәк һата йөрөгән сағында рустар менән аралашырға тура килгәнлектән, Төлкөсура русса апаруҡ һупалай ине. Йәш рус егете менән әҙ-мәҙ һөйләшеп тә, бер-береһенең исемдәрен белеп, танышып та алдылар.

Төлкөсура, уларҙың ауылда яйлабыраҡ торасағын аңғарғас, аптырабыраҡ: «Земләмерҙәр түгелме икән былар?» — тип уйланы, ләкин төпсөнөп һорашырға батырсылыҡ итмәне.

Ғәрифә кискелеккә бөгөн Төлкөсура юл ыңғай ғына атып алып ҡайтҡан һуйырҙы бешергәйне, юлсылар ашты маҡтай-маҡтай ашанылар. Үҙҙәре лә, бик йомарт ҡыланып, Ғәрифәгә оло карауай аҡ ҡалас, бер таҡта сәй тотторғандан тыш ашъяулыҡҡа шәкәр, кәнфит, күҙләнеп бешкән ғәжәп тәмле еҫ аңҡытҡан бойҙай икмәге телеп һалдылар. Үҙен «Мирсай» тип таныштырғаны менән Сәлим тигәне, алсаҡланып, һәр төрлә хәбәр һөйләнеләр; һүҙ араһында, хәҙер күп урында урман һаталар бит, һеҙҙең урмандар бик яҡшы күренә, һатып алырға килеүселәр булманымы, тип ипләп-ипләп үҙ яйҙарын ҡайырырға ла онотманылар.

Һаҡалтай ҡарт урыҫ менән Роман артыҡ һүҙ ҡыҫтырманы. Өйгә инеп, итеген сискән саҡта уҡ, Роман түрбаш яҡ урындыҡта аяғын һуҙып, йыуаш ҡына ултырған Миңлегөлдө күргәйне. Ҡыҙ табын эргәһенә лә килмәй, шул урынында ултырған көйө хужабикә менән айырым ашағас, өйгә юлаусы төшкәндә ҡатын-ҡыҙҙың дөйөм табынға ҡушылмау ғәҙәтен белмәгәнлектән, Роман әле лә шул яҡҡа ҡыҙыҡһынып күҙ атҡылай. Ғәжәп матур ҡыҙ икән, ҡап-ҡара ҡаштары ҡарлуғас ҡанатымы ни! Тик бына ул ауырыумы әллә зәғифме? Ниңә ултырған еренән бер ҙә ҡыбырҙамай? Хатта әсәһе менән дә бышылдап ҡына һөйләшә бит әле...

Ашағандан аҙаҡ ишек алдына сыҡҡайнылар, Роман түҙмәне (һылыу ҡатын-ҡыҙ күрҙеме, уның бөтә донъяһын онота, үҙ тойғоларын йәшерә алмай торған холҡо бар), Төлкөсуранан һораны:

— Ҡәрендәшең ауырыймы әллә?

Төлкөсура, түбәлек башына күтәреп ҡаҙаҡлаған бүре тиреһенә ымлап күрһәтә-күрһәтә, өҙә-йолҡа эштең ниҙә икәнен төшөндөргәс, Романдың күҙе түбәһенә менде, ай ҙа вай килде.

— Башҡорт ҡыҙҙарының ҡыйыу икәнен ишеткән бар, тик был тиклем үк түгелдәрҙер, тип уйлай инем, — тине. Шунан ҡапыл ғына һораны. — Бүре тиреңде миңә һатмайһыңмы?

Йәшкелт күҙле, алсаҡ йөҙлө, һарғылт сәсен артыҡ оҙон итмәйенсә, бик бөхтә итеп алдырған уртаса кәүҙәле егет Төлкөсураға оҡшай уҡ башлағайны. Үҙенең бер юлы өҙә генә яуап ҡайтара алмауына үкенә биребераk әйтте:

— Атайым менән һөйләшермен әле.

Ҡалала йәшәп өйрәнгән Романға, ҡараңғы төшһә лә, бер өйҙә лә ут күренмәүе, ауылдың төн пәрҙәһенә уранырыуы, шымып ҡалыуы бик сәйер тойолдо. Ә инде өйгә ингәс, ғәжәпләнеүҙән ишек алдында уҡ туҡтап ҡалды. Сыуал мөрйәһенә һөйәп ҡуйып яғылған уттан һәм тәҙрә эргәһендәге саталы ағас башына ҡыҫтырып яндырылған сыраларҙан төшкән тоноҡ яҡтылыҡ өй эсен әкиәттәге һымаҡ итеп күрһәтә ине. Түрьяҡтағы ҡыҙ урын һалып ятҡан, хужабикә сыуал тирәһендә булашып йөрөй, ирҙәр әкрен тауыш менән көңгөр-ҡаңғыр һөйләшәләр. Өй эсен ҡайын сыраһынан сыҡҡан әскелтем төтөн еҫе тултырған, ул рәхәт иттереп танауҙы ҡытыҡлай. Роман ошо күренештәргә ғәжәпләнеүенән айный алмайынса йоҡлап китте.

* *
*

Иртәнсәк көмөрө танау Мирсай ауыл старшинаһында йомошо барлығын әйткәс, Торомтай, урамға сығып, уға Ҡотлоғужаның өйөн күрһәтте. Мирсай менән Роман, бер ҙур ғына төйөнсөк алып, шулай табан киттеләр.

Ҡотлоғужа уларҙы һағайып ҡаршыланы: «Йылҡы һатыулашырға килгәндәрме әллә һалабаш юкәһе кәрәкме икән?» Уға ситтән күберәк ошондай йомош менән киләләр ине. Мирсай-Ҡарғов иплэп-иплэп кенә йомошон төшөндөрөп биргәс иһә, ул аптырабыраҡ ҡалды. Әлбиттә, күршеләге Ҡарағай Ҡыпсаҡ волосендә заводсыларға урман һатыуҙарын да, арендаға биреүҙәрен дә белә ине ул. Ләкин үҙенә туранан-тура бындай эш менән шөғөлләнергә тура килгәне юҡ.

— Беҙгә бынан бүрәнәне ҡыуғын менән ҡыуырға тура киләсәк, шуға күрә Норош буйына яҡыныраҡ ерҙәге урман кәрәк беҙгә, — тип һүҙенең тәүге өлөшөн осланы Мирсай.

Был эштең бик ҡатмарлы икәнен белгертеп, Ҡотлоғужа байтаҡ ваҡыт башын баҫып уйланып ултырҙы.

— Мин бит уны яңғыҙым ғына һата алмайым. Бөтә волость — йәмәғәт ере бит ул.

Мирсайҙың күҙҙәре хәйләкәр йылтыраны.

— Уныһы билдәле инде. Ләкин көтөү башы ҡайҙа атлаһа, ҡалған малдар шунда борола бит, ҡәҙим.

Ҡотлоғужаның ялбыр ҡаштары ҡапыл юғары сөйөлдө.

— Һин шулай беҙҙе мал көтөүенә һанап килдеңме ни әле? Улай уҡ булмай торһон!

Каргов һүҙҙе уйламайыраҡ ысҡындырып, сәпкә ҡыйыш атҡанын һиҙҙе. Етди ҡиәфәт алды, ауыр көрһөнгән булды.

— Мин улай тип әйтергә уйламағайным. Бында бит һеҙ хужа. Һеҙҙең халыҡ менән аңлашып, килешеп йәшәүегеҙ, уны үҙ ҡулығыҙҙа тота алыуығыҙ хаҡында беҙгә бында килеп етмәҫ элек үк һөйләгәйнеләр.

Баҫалҡы ғына әйтелгән был һүҙҙәр Ҡотлоғужаның күңелен йомшартты. Уның күҙҙәренә ҡарап, быны Каргов та һиҙеп алды һәм ҡапыл ғына әйтеп һалды:

— Унан ары, Ҡотлоғужа әфәнде, беҙ һеҙҙе ҙур бәләнән ҡотҡарыу уйы менән дә килдек.

Ҡотлоғужа иләп кенә башын күтәрҙе, үҙенең ҡаршыһындағы туптай күҙле кешегә һынаулы ҡарап ташланы. Ҡотлоғужа айт тигәнгә тайт тип тороусыларҙан, ҡапыл-ғара ҡаушап төшөүселәрҙән дә түгел ине. Килеүсенең, «беҙгә урман кәрәк» тип һөйләшһә лә, төп хужа булмауын, димсе-тамаҙа ғына икәнлеген дә абайлап алғайны. Шуға күрә уның әле генә әйткән ҡыҙыҡтырғыс һүҙен ишетмәгән кеүек, был әҙәмдең үҙен дә әҙерәк ҡаҡшатып алыу уйы менән, уға туп-тура ҡарап әйтте:

— Минең аңлауымса, һин, Мирсай әфәнде, димсе — кемгәлер урман һатыулашырға килгән кеше. Тураһын ғына әйт әле, кем исеменән һөйләшәһең һин?

Һорау ҡапыл һәм уҫал ҡуйылғайны. «Бәләнән ҡотҡарыу» тураһында әйтеп, төп козырен сығарып һалғас, старшинаның ҡапыл һынырын көткәйне, ә ул үҙе тепсенеп ҡылана. Шулай ҙа Мирсай борсолоуын һиҙҙермәне.

— Бик урынлы һорау, Ҡотлоғужа әфәнде, — тине, йылмайып. — Мин Өфөнөң икенсе гильдия купеце, урман промышленниге Артем Дмитриевич Лапшиндең ышанысл ы кешеһе. Эргәмдәге һеҙгә мәғлүм Роман Артемьевич — уның улы.

— Шунан, шунан?

— Артем Дмитриевич — губернатор хәҙрәттәре даирәһенә яҡындан ҡатнашып йәшәүсе бик абруйлы кеше. Ул тиҙҙән һеҙҙең губерналағы бөтә ерҙәргә земство законы индереләсәген ишеткән. Был яңы закон буйынса, Ҡотлоғужа әфәнде, һеҙҙең волостәге бер йөҙ ҙә ун дүрт мең дисәтинә ергә лә бик күп һалым түләргә тура килә-

сәк. — Ҡарғов старшинаның күҙ ҡарашынан уға был һүҙҙәрҙең ныҡ тәьҫир итеүен һиҙҙе, ләкин тауышын үҙгәртмәйенсә, баҫалҡы ғына һөйләүен дауам итте: — Үҙегеҙгә мәғлүм, халыҡтан һалым йыйыу — үтә ауыр эш, ул беҙгә әллә ни тиклем мәшәҡәттәр тыуҙырасаҡ. Икенсенән, былай ҙа мул йәшәмәгән халыҡты бөлгөнлөккә төшөрәсәк. Әгәр ки ҙә беҙҙең тәҡдим иткән хеҙмәттән файҙаланып, тәккә исрафланып ятҡан урмандарығыҙҙы ун мең дисәтинә самаһына кәметеп ҡалһағыҙ, һеҙҙең хәл байтаҡҡа еңеләйәсәк.

Ҡотлоғужаның башында төрлө уйҙар ҡайнаша ине. Хәйләкәр димсенең ҡапҡаны ғына түгелме был? Хәйер, һуңғы ваҡытта ер мәсьәләләре бик йыш үҙгәреп тора. Урядник үткән килгәнендә недоимка өсөн Юрматы башҡорттарының илле ете мең дисәтинә ере ҡаҙнаға тартып алыныуын һөйләгәйне. Белмәҫһең был заманды.

— Һы, — тип һаҡал төбөн семеткеләне Ҡотлоғужа,— әйткән һүҙең хаҡ булһа, төптәнерәк уйлап ҡарарға кәрәк.

— Мин теләһә ни хәбәр һөйләп йөрөргә малай-шалай түгел, — тип үпкә белдерҙе Ҡаргов. Шунан үҙ кәңәшен өҫтәне: — Ҡотлоғужа әфәнде, бәлки, кәңәшкә үҙең теләгән кешеләрҙе — мулланы, старостаны, башҡа ғәйри кешеләрҙе саҡырырһың?

— Дөрөҫ әйтәһең, Мирсай әфәнде.

Ҡотлоғужа тышҡа сыҡты ла Уйылданға волость писарен табырға, уның аша Низам мулла менән старостаны саҡыртырға ҡушты. Ул әйләнеп ингәнсе, Ҡаргов старшинаның үҙҙәре ултырған төпкө өйөн байҡай һалып алды. Йыуан ҡарағайҙарҙан буралған һап-һары шыма стеналар, иҙәнгә, түбәгә берәр аршын киңлектәге таҡталар йымлап түшәлгән. Бер яҡта иркен урындыҡ, уның һул яҡ ситенә бик сағыу биҙәктән һуғылған кейеҙ эсле балаҫтар, эре биҙәкле тауарҙан тышланған юрғандар, ә уң ҡулдағы ялтыр тимер менән сатрашлап биҙәкләнгән, күгәнендә ҙур ғына йоҙаҡ һәлберәгән һандыҡ өҫтөнә яҫтыҡтар, мендәрҙәр өйөлгән. Түбә таҡтаһынан аршын ярым самаһы түбәнгә төшөрөп эшләнгән урҙаға һәр төрлө кейемдәр, сепрәк-сапраҡ бик бөхтәләп теҙеп эленгән. Стеналар яланғас тиерлек: тәҙрә араларында, мөйөштәрҙә аҫалы таҫтамалдар ғына элеүле. Ишек эргәһендәге имән шкафтың быяла ишеге артында һәр төрлө

һауыт-һаба күренә. Ғөмүмән, башҡорт байҙарының ғәҙәттәге өйө. Ошоларҙы күҙҙән кисергәс:

— Был бик ҡаты әҙәм күренә, — тип бышылданы Каргов Романға. — Күстәнәстәрҙе, бер утыҙ һум аҡса йомдорайыҡ.

— Утыҙ һум?!.

— Шаулама. Ул һинең биш, ун тәңкәңә төкөрөп бирҙе.

Ишектә Ҡотлоғужа күренгәс, Каргов күҙҙәрен майландырып йылмайҙы, урынынан күтәрелде.

— Ҡотлоғужа әфәнде, ғәфү итегеҙ, һүҙгә һалышып, Артем Дмитриевичтең ебәргән күстәнәстәрен тапшырырға онотҡанмын. — Ул ике беләгенә һалған бер нисә киҫәк затлы тауарҙы, яртышар ҡаҙаҡлы ун ҡап бөртөклө сәй һондо. — Рәхим итеп ҡабул ҡылығыҙсы.

Ҡотлоғужа быныһын бөтөнләй көтмәгәйне. Урыҫ-улаҡ йомош менән килгәнендә, «знакум» тигән булып, араҡы сығарып ултырта торғайны; ә ул шайтан һыуын тәмләп-тәмләп кенә эсеп, буйына һеңдерә белә Ҡотлоғужа.

— Бына быныһы мәсеттә хәйергә таратыу өсөн булыр.

Утыҙ һум аҡса ла кеҫәһенә инеп ятҡас, нык ҡына үҙгәрҙе Ҡотлоғужа. Ул төшәмлө генә эш ҡуҙғалып тороуын һиҙеп алды. Бер-бер артлы Низам мулла, староста, писарь килеп ингәс, бисәһенән берәр каса бал һоратып алды, урындыҡҡа түңәрәкләп ултырған ҡунаҡтары алдына ҡуйҙы һәм Өфө кешеләренең ниндәй йомош менән килгәнлеген әйтте. Ҡотлоғужа дилбегәне үҙ ҡулына алғанлыҡтан, һөйләшеү бәхәстәр ҡуҙғатманы. Эш ыңғайланып барғанын тойоп, Каргов бүтәндәргә һиҙҙермәй генә Романға күҙ ҡыҫҡайны, тегеһе:

— Бына быныһы һеҙгә минең күстәнәс, — тип, ҡуйынынан билендәге ҡағыҙға әллә ниндәй һүрәттәр төшөрөлгән ике шешә ят хәмер сығарып ултыртты. Берәрҙе эсеп алғас, Ҡотлоғужа:

— Ярар, һеҙҙеңсә булһын, дисәтинәһе алтмыш тин, — тине, Низам муллаға беҙҙең өсөн барыбер түгелме ни тигән һымағыраҡ ҡараш ташланы.

— Неустойкаларҙы күпменән тәғәйенләйбеҙ? — Каргов үҙ һорауына яуап ишетмәгәс, үҙә генә әйтте: — Бәлки, һеҙ уның тәртибен белеп етмәйһегеҙҙер, ул саҡта аңлатайым. Һатыласаҡ урманды бүлгәндән аҙаҡ тикше-

реүҙәр үткәрелеп, биләм йә артыҡ, йә кәм килеп сығыуы мөмкин. Шул саҡта һәр төрлө низағ, ығы-зығы килеп тыуымаһын, йә берәй яҡ һатыуҙан, икенсе яҡ алыуҙан баш тартҡан осраҡта алыш-бирештәге һәр төрлө сығымдарҙы ҡаплау өсөн, яҙыласаҡ килешеүҙә һәм мирауай посредник бирәсәк танытмала бына ошолар ап-асыҡ итеп күрһәтелергә тейеш. Йәғни ҡайһы яҡ һатыу йәки алыуҙан баш тарта, шул билдәләнгән неустойканы түләй. Аңлашыламы, ағай-эне?

— Әллә, минең ишеткән-белгән нәмәм түгел был, — тип ҡул һелтәне Низам мулла.

— Мирсай әфәнде, һин бит үҙең бындай эштәр менән таныш кеше. Нисегерәк уйлайһың? Ул хаҡ нимәнән сығып билдәләнә?

Ҡаргов уйға батҡан, уңға-һулға самалаған кеше ҡиәфәтендә башын ҡырын һала биреп, уйланып ултырҙы ла ҡабаланмай ғына әйтте.

— Минеңсә, бер-беребеҙҙе һис тә алдарға йыйынмағанлыҡтан, һатыласаҡ ерҙең ҡаҙна кешеләре тикшереү һәм уның артыҡ йә кәм сығыу осрағына неустойканы артыҡ ҙур билдәләү кәрәкмәй. Һәр хәлдә ул урмандың һатылыу хаҡынан ҡиммәтерәк булырға тейеш. Минең фекер шундай, хөрмәтле аҡһаҡалдар: тикшереүҙә урман артыҡ сыҡһа — беҙҙән һеҙгә, әгәр кәм булһа — һеҙҙән беҙгә дисәтинәһенә етмешәр тин көмөш. Һатып, бөтә ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйылғас, бер яҡ кире ҡайтауыллаһа, баш тартҡан өсөн ун ике мең неустойка.

Ҡаргов туптай күҙҙәрен был һүҙҙәрҙең үҙенә күрә хәйлә менән ҡоролған ҡапҡан икәнен аңламай, баштарын түбән эйеп ултырған башҡорттарға югертеп алды. Ҡаргов артыҡ йә кәм сығасаҡ урманға неустойканы күп ҡуйманы, сөнки ул урман бүлгәндә, яйын табып, артығыраҡ эләктерергә тырышасаҡ. Кире ҡайтауыллау осрағына неустойканы бик юғары ҡуйҙы, сөнки Лапшин урмандан бер ваҡытта ла баш тартмаясаҡ, ә башҡорттар ерҙе һаталар ҙа аҙаҡтан осһоҙ булған, алданғанбыҙ, фәлән-фәсмәтән тип низағ ҡуптарыусан. Әгәр былар ҙа шулай итергә уйлай икән, тәүҙә ун ике меңде сығарып һалһындар!

— Мин риза, — тине Ҡотлоғужа. — Һеҙ нисек ҡарайһығыҙ, ағай-эне?

— Аллаға тапшырайыҡ, — тип ҡаршы төшмәне Низам мулла ла.

Староста иһә был эштә үҙенә файҙа самалап алғайны: әгәр ергә һалым төшһә, уны халыҡтан йыйыу бәләһен тағы уның елкәһенә ауҙарасаҡтар.

— Шулай итәйек, — тине, — анау яңы һалым тигәне килеп сыҡмаҫ борон тәүәккәлләйек.

— Беҙ, хөрмәтле аҡһаҡалдар, төпкөлдә йәшәгән кешеләргә кәрәк булыр тип, тауар, сәй-шәкәр ҙә алып килгәйнек, әгәр ҙә мәгәр хуп күрһәгеҙ, үҙҙәренә тейәсәк аҡса иҫәбенән халыҡҡа бүлеп бирергә мөмкин.

Быныһына инде Ҡотлоғужа ҡуш ҡуллап йәбеште: алырға кәрәк, халыҡҡа үҙе бүлеп бирер. Ат аунаған ерҙә төк ҡала, тип әйткәндәрен онотора ярамай, үҙенә лә өлөш сығарыр.

— Иртәгә бик һәйбәт көн: йома уҡығандан аҙаҡ, сход йыйырбыҙ, — тип һүҙен йомғаҡланы ул.

— Килештек, — Ҡаргов урынынан ҡуҙғалды. — Сход ҡарарынан һуң мәгәристе үҙем ҡуям.

Бына шулай итеп, Норош урмандарының яҙмышы бер нисә сәғәт ваҡыт эсендә Ҡотлоғужа байҙың төпкө өйөндә хәл ителде.

* *
*

Иртәгеһен халыҡ, йоманан һуң өйҙәренә таралмайынса, староста өйө тәңгәленә урамға сходҡа йыйылды. Уны староста асты, шунан Ҡотлоғужаға һүҙ бирҙе. Ҡотлоғужа тормоштоң йылдан-йыл ауырайыуына зарланды (әйтерһең, үҙенең елкәһенә төшә был ауырлыҡ!), Бөрйән-Түңгәүер, Ҡыпсаҡ волостәрендәге хәлдәрҙе, Юрматы башҡорттарының недоимка өсөн ере тартып алыныуын һөйләп бирҙе. Шунан аҙаҡ ҡына бөгөн халыҡты ни өсөн йыйғандарын әйтте, урман һатыуҙың ниндәйерәк тәртиптә үтәсәген, хаҡын, алынған аҡсаның дүрттән өс өлөшө ер һалымына түләнәсәген, ә бер өлөшө халыҡҡа таратып биреләсәген аңғартты.

— Миңә ҡалһа, — тип осланы ул һүҙен, — тик ятҡан ерҙе һатыуҙан беҙ зыян күрмәйәсәкбеҙ, халыҡҡа, аҙ булһа ла, файҙаһы тейәсәк. Бына хәҙер ошо хаҡта һөйләшәйек. Мин һеҙҙән башҡа бер ни ҙә хәл итә алмайым.

Халыҡ шымып ҡалыуҙан файҙаланып, Сәлим һүҙ һораны һәм шундай итеп һайрарға тотондо, теле телгә йоҡмай.

— ...Һеҙҙең тау, урман яҡтарында ер ҡәҙерен белмәйҙәр. Ялан яғында ана һәр аҙым ер иҫәптә. Алла биргән шул ҡәҙәр хазинаны ниңә бушҡа ятҡыраһығыҙҙыр, ағай-эне. Байлығығыҙ артып бара, тиер инең, ауылығыҙға бер күҙ ташлауҙа уҡ ауыр көн иткәнегеҙ күренеп тора. Мин һеҙҙең күҙ төбәп торғанығыҙ урман икәнен дә яҡшы беләм, ул һеҙҙе ашата, кейендерә. Ә үҙегеҙгә яҡын ерҙә ағас ҡырҡыу, уны ташыу, яҙ көнө ҡыуғын ҡыуыу кәсебе асылып китһә, насар булырмы ни? Аҡса үҙе эҙләп килә һеҙҙе, ағай-эне, кеҫәгеҙгә яуып ҡына торасаҡ ул. Унан ары баяр лавкалар асып ебәрер, бөтә кәрәкяраҡ ҡул аҫтығыҙҙа булыр. Уйлашып ҡарағыҙ, ағай-эне. Әҙәм рәтле йәшәй башларға теләһәгеҙ, ауыҙығыҙға төшкәнде ысҡындырмағыҙ...

Тағы шундай байтаҡ хәбәр һөйләне ул. Был арала халыҡ аңына килеп, фекер төйнәй башлағайны инде.

— Кем, Ҡотлоғужа, әйтеүеңә ҡарағанда, һатыласаҡ урмандар биләгән ергә беҙҙең йәйләүҙәр, бик күп сабынлыҡтар ҙа эләгә бит әле, — тине Торомтай. — Улары үҙебеҙгә ҡаламы һуң?

Был турала Ҡотлоғужа үҙе лә башына килтермәгәйне, хәҙер ҡапыл ғына яуап таба алмай, аптырап ҡалды. Үҙенең йәйләүе лә шунда бит инде. Ул эргәһендәге Низам мулла, староста менән ниҙер һөйләште лә Мирсай димсегә боролдо, халыҡҡа ишеттермәй генә һүҙ ҡушты:

— Һүҙ тик урман тураһында ғына барҙы бит. Йәйләү, сабынлыҡтарҙы беҙ бирә алмайбыҙ.

— Юҡ, Ҡотлоғужа эфәнде, беҙ ер үлсәгәндә һәр яланды, һәр биләм урманды айырым үлсәп йөрөмәйбеҙ. Һатылған ерҙәге урмандар яланы-фәләне менән баярға күсә...

Ул арала халыҡ ғауғалаша башланы.

— Йәйләү, сабынлыҡ үҙебеҙҙә ҡалыу менән генә лә эш теүәлләнмәй. Унда аласыҡ-фәлән эшләргә ағасты, яғырға утынды ла ауылдан ташырбыҙмы икән ни?

— Ниңә Норош буйына ынтыла әле ул урыҫ, алһын ана Биғанаш урмандарын!

— Әйттең һүҙ, урыҫ тигәс тә, дүрәк тиһеңме әллә уны. Уға ҡыуғын ҡыуырға һыу буйы кәрәк...

— Эй-й, аптырағанһығыҙ икән! Ул урмандарҙан былай ҙа файҙа юҡ!.. Алһын әйҙә!

— Үҙеңдең бер баш малың булмағас та...

— Һинең бер атыңа күп сабын кәрәкме ни?..

— Юҡ, юҡ, йәйләү, сабындарҙы һатмайбыҙ!..

Староста халыҡты тынысландырырға тырышҡан арала, Ҡотлоғужа димсе-тамаҙа менән һөйләшеүен дауам итте.

— Халыҡтың ни һөйләгәнен ишетәһеңме?

— Ишетәм дә... әле генә әйттем бит әле, был беҙҙең эштә ҙур ауырлыҡ тыуҙырасаҡ.

— Бер нәмәне яҡшы бел: халыҡ йәйләү, сабынлыҡтарын бирмәйәсәк. Унан һуң беҙ һиңә ул яландар урынына артығы менән урман бирербеҙ. Баярға ялан түгел, урман кәрәк бит. Межа бүлеүселәргә сикте фәлән ерҙән төгән ергәсә билдәләгеҙ, тип әйттем — бөттө. Купчий ҡағыҙға ун мең дисәтинә тип күрһәтәбеҙ.

— Тик, Ҡотлоғужа әфәнде, һүҙегеҙҙә тороғоҙ.

— Мин ике һөйләй торған кеше түгел. — Ҡотлоғужа тамаҡ ҡыра-ҡыра халыҡҡа боролдо. — Ағай-эне, бына беҙ әле Мирсай әфәнде менән һөйләшеп алдыҡ һәм йәйләү ерҙәрен, сабынлыҡтарҙы әүәлгесә халыҡҡа ҡалдырырға тигән килешеүгә килдек.

— Ә кәрәк-яраҡҡа, утынға ағас киҫеү?

Ҡаргов урманды үҙ ҡулына төшөргәс тә, Лапшиндең ныҡлы ҡарауыл ҡуясағын, үҙ ерендәге бер төп ағасты ла сит кешенән киҫтермәйәсәген белә ине. Шуға күрә был турала һүҙ оҙайтып торғоһо килмәне.

— Беҙҙең хужа — ваҡлана торған кеше түгел. Уға утынлыҡ урман, нимәгә һәйбәт төҙөлөш ағасы кәрәк, — тип халыҡты тынысландырҙы.

Староста урман һатыуҙың бөтә шарттарын әйтеп, халыҡты ҡул күтәртте, күпселек ризалыҡ белдергәнлектән, ҡаршыларҙы һорап та торманы. Ошонан аҙаҡ:

— Йәмәғәт, беҙгә баяр ғали йәнәптәре мәгәрис ҡуймаҡсы, кем дә кем зәмзәм һыуынан ауыҙ итергә теләй, сынаяҡ, кәсә кеүек нәмә алып, Торомтайҙың өй алдына йыйылығыҙ, — тип ауыҙ йырҙы.

Халыҡ гөр килеп таралыша башлағас, Низам мулла уның еңенән тартты.

— Һин мине лә онотма, бер-ике һауыт өйгә ебәрт, — тип бышылданы, күҙен алмаш-тилмәш ҡыҫҡылап.

Староста уның был һүҙен Мирсай димсегә еткергәс, униһы ауыҙын кәүшәйтеп көлдө.

— Әйтмәһә лә, беләм инде, мине ул тиклем аңра кеше тип уйлаймы икән ни...

Был көндө ахшам намаҙына мәсеткә барыусы бул-

маны. Эскәне лә, әсмәгәне лә Торомтайҙың ихатаһында буталды. Сәлим арбалағы мискә эргәһенә тороп алған да, крандан ағыҙып, һәр кемдең һауытына хәмер ҡоя. Йоманан һуң өйҙәренә ҡайтып ашарға ла өлгөрмәгән кешеләр тиҙ үк иҫерешә башланы.

— Был урыҫ баярының кешеләре ҡайҙан килеп сыҡты әле?

— Һөйләмә лә инде!..

— Тағы берәй урман һатып алыусы килеп сыҡмаҫмы икән?

— Әптерәй, һин ниңә янтау тотоп килдең? Көбөндәгенә тәгәрләтеп килтерергә ине!..

— Ха-ха-ха-ха-ха!..

Бөтә был күренеш Романға ғәжәп ҡыҙыҡ тойола. Өйҙән соланға сығып, кешеләрҙең дыу-ғәләмәт килгәнен ҡыҙығып ҡараған Миңлегөлгә йыш-йыш күҙ ташлай. Яулыҡ аҫтына ҡашмау ҡуйып, балитәкле күлдәге өҫтөнән бик матур итеп сигеп, мәрйендәр менән биҙәп эшләнгән түшелдерек кейеп алғас, бөгөн ул бигерәк һылыу күренә. Ахырҙа Роман түҙмәне, йөк эргәһенә барып, бер шешәне һурып алды ла түбәлек аҫтында ғына ауыҙынан һемерҙе. Ярты самаһын эскәс, уны кире урынына алып барып тыҡты, бер тоҡтоң бәйен сисеп кеҫәһенә кәнфит тултырҙы һәм, аҙ ғына халыҡ араһында буталып йөрөгәс, соланға ҡарай юнәлде. Миңлегөл уға артыҡ иғтибар итмәгән кеүек тора ине, рус егетенең:

— Ни эшләп тораһың, сибәркәй, — тип өндәшеүенән бер ни аңламайынса, артына сигенде; ул бер ус бик матур ҡағыҙға төрөлгән кәнфит һонғас иһә, ҡайһылай итергә белмәй аптырап ҡалды.

— Ал, ал, минән һиңә күстәнәс! — тине егет, йәшкелт күҙҙәрен уйнатып. Уның был һүҙҙәре Миңлегөлдөң аңына барып етте, ҡуш усын тотто; кәнфиттәрҙе алғас, йылҡ итеп өй ишегенә сумды.

Һаман ишеккә ҡарап торған Роман арыу уҡ ҡыҙмаса хәлгә килгән Уйылдандың үҙ эргәһенә яҡынлауын да абайламаны. Бер нисә йыл ситтә уҡып ҡайтҡан Уйылдан русса оҫта уҡ белә ине. Уның:

— Чауа, знакум, — тип өндәшеүенә Роман артына боролдо. — Ул ҡыҙға ни бирҙең?

Һорау ҡырыҫ ҡына итеп ҡуйылғайны, Роман ҡаушай төштө, ҡапыл ғына нисек яуап ҡайтарырға ла белмәне.

— Ну... күстәнәс бирҙем мин уға...
— Ниндәй күстәнәс?
— Ну... кәнфит...

Был һөйләшеү ни менән бөтөр ине, улар янына Төлкөсура килеп етте. Уны күргәс, Романдың сырайы асылды. ай-вайҙарына ҡарамай, Уйылдан менән икәүһен арбалар яғына етәкләне. Барып, арбанан баяғы ҡалдыҡты, тағы бер тулы шешәне шыпырт ҡына кеҫәһенә тыҡты ла түбәлек артына ымланы. Шунда сығып, һарғайған сиҙәмгә ултырҙылар.

— Миңә лә бынан һуң һеҙҙең яҡҡа килергә тура килә бит инде, — тине Роман, уларға ихлас ҡарап. — Һеҙ минең иң яҡын дуҫтарым булырһығыҙ.

Шешәләге хәмер мискәнән ағыҙған кеүек түгел ине, харап һәйбәт, эскәндә әсеһе лә ул ҡәҙәр беленмәй, үҙе башҡа сыға. Һөйләшеп ултыра торғас, Уйылдан да яңы ғына Романға әтәсләнеүен онотто. Бүтән кешеләр ихатанан таралышып бөткәндә лә, улар, көрмәлгән телдәрен саҡ-саҡ әйләндереп, һаман ниҙер һөйләшәләр, көлөшәләр ине әле. Эргәләренә Каргов килеп баҫҡас, Роман ырғып торҙо.

— Лазарь Моисеевич, йәнем, ғәфү ит мине, — тип уны ҡосаҡларға маташты. — Ҡабат эсмәйем, бына дуҫтар таптым бит, Лазарь Моисеевич...

Романдың ни һөйләгәнен ныҡлап аңғармаһа ла, Төлкөсура уның «Лазарь Моисеевич» тигән һүҙҙәрен асыҡ ишетте һәм аңҡы-тиңке башына: «Бәй, был димсе беҙҙең халыҡ түгелме икән ни?» — тигән уй төштө, ләкин ул шундуҡ был турала онотто, тамам иҫергән Уйылданды ерҙән күтәреп торғоҙҙо ла, ҡултыҡлап, өйҙәренә алып китте.

Иртәгеһенә Каргов, Роман, Сәлим, ауылдың биш ирен эйәртеп, Лапшинға һатылған ерҙе межаларға сығып киттеләр. Каргов төркөмгә Төлкәсураны ла алды. Роман межа үткән йылға, тау, ялан исемдәрен яҙып йөрәй, сикте билдәреп ултыртылған бағаналарға тейешле һанды һуға; бүтәндәр сәп юналар, юлдағы ваҡ-төйәк ағастарҙы йыға баралар. Байтаҡ ваҡыт талап иткән мәшәҡәтле эш ине был. Дүрт көн тигәндә саҡ осона сыҡтылар. Ошонан аҙаҡ Роман межа бүлеүҙә ярҙам итеүселәр менән иҫәпләште, Төлкөсураға аҡсанан тыш ун ике аршын самаһы ситин тауар ҙа сығарып тотторҙо.

— Әсәйең менән ҡәрендәшеңә күлдәклек, — тине һәм: — Һинең ҡәрендәш бик матур ҡыҙ, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Уның был һүҙҙәренә Төлкөсура артыҡ иғтибар итмәне, ихлас күңелле урыҫ егетенең Миңлегөлдө маҡтауы һис тә ғәжәп тойолманы.

Ҡупчий яҙҙылар. Уға Ҡотлоғужа үҙе, писарь, икенсе яҡтан Ҡаргов менән Роман ҡул ҡуйҙы. Ҡаргов, пүнәтәйҙәрҙән дә ҡул ҡуйҙырырға кәрәк, тигәс, Ҡотлоғужа старостанан, тағы ике кешенән, улар яҙыу танымағанлыҡтан, ырыу тамғаларын һуҡтырҙы.

Хәҙер инде өйәҙгә — Стәрлетамаҡҡа барып, мировой посредниктән танытма алаһы һәм уны купчий крепость менән нығытаһы ғына ҡалды. Эште аҙаҡтан ығы-зығы сыҡҡыһыҙ итеп ослап ҡуйыу өсөн, Ҡотлоғужа унда үҙе барырға булды. Иртәгеһенә юлға сығыр кис ул Өфөнән килеүселәрҙе өйөнә саҡырып алып, бик һәйбәтләп һыйланы. Ҡарговтың бүре тиреләренә күҙе төшөп йөрөй ине, шул турала һүҙ ҡуҙғатты, һатмайһыңмы, тип һораны. Ҡотлоғужа икеләнгән төҫ менән:

— Үҙемә бик кәрәк ине бит әле, — тине, баҙарын күтәреү өсөн генә.

Бүре тиреһенә Өфө байҙары йығылып барғанын белә Ҡаргов, шуға һаман нығышты.

— Өсәүһен булһа ла һатмайһыңмы?

Ҡыйынһынған һымаҡ ҡына ризалашты Ҡотлоғужа, Ҡаргов хаҡында тормағас, алтауһын да һатып ебәрҙе.

Юлға әҙерләнеүселәр иртәнсәк аттарын егеп йөрөй ине, Роман эргәһенә ҡултыҡ аҫтына әйбер төрөп ҡыҫтырған Төлкөсура килде.

— Бына һиңә бүләккә бүре тиреһе, дуҫ.

Роман аптыраны ла, шатланды ла. Ҡарговтың өлгәрләгәнә асыуы килеп, Ҡотлоғужаның бүре тиреләрен үҙе эләктерә алмағанға үкенеп йөрөй ине, Төлкөсура бушлай бирер тора лабаһа!

— Мин һиңә аҡсаһын бирәм, — тип кеҫәһенә тығылғайны, Төлкөсура:

— Ул саҡта тирене бирмәйем, — тип ҡырт киҫте.

— Ярар, улай булғас, — тип уның ҡулын ҡыҫты Роман. — Был бүрене ҡәрендәшең атҡан бит әле? Икегеҙҙең... юҡ, бөтә ғаиләгеҙҙең бүләге итеп алам. Килгән саҡта мин һәр саҡ һеҙгә кереп йөрөрмөн, Төлкөсура.

Урамға сығып барғанда, Роман өй яғына күҙ ташла-

ны һәм, тәҙрә ситенә боҫоп ҡына ҡарап торған Миңлегөлдө күргәс, йылмайып, ҡул болғаны.

## III

Атаһы Стәрлетамаҡҡа киткәнендә әллә ни тиклем эш ҡушып ҡалдырһа ла, Уйылдан был турала бик ҡайғыртмай. Ҡаты ҡуллы әсәһенең донъя эштәрен теүәлләп алып барасағына ышана, икенсенән, башы ҡаңғырыбыраҡ йөрөй. Йылҡы көтөүселәре эргәһенә барғанда ла, мал һуғылмаймы, ауып-фәлән ятмаймы тип, ҡырҙағы кәбәндәрен ҡарап йөрөгәндә лә башында бер генә уй: Миңлегөлдө нисек осратып һөйләшергә? Ауыҙ асып, бик үк яйлап йөрөргә ярамай. Уның кеүек һылыу ҡыҙҙарға уйламаған ерҙән яусы килеп төшә лә алып та китәләр. Әллә Торомтайҙың ҡылын тартып ҡарайһымы икән? Ул, йомоҡ, әллә ни әйтеп, ауыҙыңды ҡаплап ҡуйыуы бар. Ни булһа ла, ҡыҙҙың үҙен әүрәтеү ягын самалайһы; ләкин нисек, ҡайһылай итеп? Бүре һуга барғанда аяғы яраланғаны бирле рәтле-башлы сығып йөрөгәне лә күренмәй бит әле уның. Шунан Уйылдан Өфөнән килгән рус егетенең теге саҡта Миңлегөлгә йылмая-көлә кәнфит биреп торғанын хәтерләй. Был уны хәүефләндермәй. Урыҫ ни килгән дә киткән. Унан ары башҡорт ҡыҙҙарының урыҫҡа кейәүгә сыҡҡанын ишеткән юҡ әле. Әй-й булмаҫтайҙы!.. Башына әллә ниндәй уйҙар тығыла ла торасы.

Ҡискә, Төлкөсура эргәһенә тигән булып, өйҙәренә барырға кәрәк әле. Исмаһам, бер күреп сығырмын үҙен тигән ҡарарға килде Уйылдан.

Эңер төшкәс, яңы итеген, ҡара бишмәтен кейеп алды ла Уйылдан Торомтай өйөнә юл тотто. Ике яҡтан ҡабыҡ ҡыҫылған, алды асыҡ соланға менеп баҫҡас, тамаҡ ҡырған булды, итек табанына йәбешкән бысраҡты төшөрөү өсөн, ҡаты-ҡаты баҫты. Ишекте асты ла, ыңғай инмәйенсә:

— Әссәләмәғәләйкүм! Өйҙәләрме? — тип туҡтабыраҡ ҡалды.

Бәй, өй эсендә Миңлегөл менән бәләкәй малайҙарынан башҡа кеше күренмәй шикелле бит?

— Уйылдан ағай, һин түгелме? Ниңә инмәйһең?

Ололар ысынлап береһе лә өйҙә юҡ ине. Уйылдан тупһа төбөндә тапанды. Ахырҙа, әйтер һүҙ тапмағас:

— Төлкөсура ҡайҙа? — тигән булды.

— Ул атайым менән урманға ҡуна киткәйне. Иртәгә ҡайтырҙар инде. Урындан ултыр, Уйылдан ағай.

Их, тауыштары суҡынмыштың! Сулпы шылтырауымы ни! Уйылдан ишек төбөндәге кескәй һикегә ултырҙы ла нисек итеп булһа ла һүҙҙе ялғарға тырышты.

— Ҡуна ятырлыҡ ниндәй эштәре бар икән һуң?

— Әлләсе... барҙыр инде.

— Был малайығыҙ, Бикморатты әйтәм, ауырый ине түгелме?

— Атайым шәбәйтте уны, — Миңлегөл һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайғандай итте. — Анау һин һуҡҡан бүрәнең тиреһенә урап һалғайны, ҡыҙылсаһы тәненә ҡалҡҡас, шәбәйҙе лә китте.

Их, үлтерҙе был шайтан ҡыҙ Уйылданды! Һин һуҡҡан бүрәнең тиреһенә, ти бит әле! Миңлегөл атып йыҡҡас, ниңә шул саҡта, ярһыуын тыя алмайынса, йығылғанды — түбәлә тигән шикелле, барып һуҡты икән бүрәне? Өйҙөң мөйөштәренә ҡараңғылыҡ һыйына башлағайны инде, Уйылдандың битенә ҡыҙыллыҡ югергәне күренмәне.

— Улай тимә инде... көлмә, Миңлегөл! Ул саҡта мине үлемдән ҡотҡарҙың.

Ҡыҙ ауыҙын ышыҡлабыраҡ көлөп ебәрҙе.

— Уй аллам, бигерәк шаштырып ебәрәһең, Уйылдан ағай. Бер ҙә үлергә йыйынмай инеңсе.

— Мин һине барыбер шул саҡта... эйәреңдә яраланып ултырған ереңдән... ҡосаҡлап алғым килгәйне!..

Бына, ултыра торғас, әйтте бит хәбәрҙе!

Ҡүңелле генә һөйләшкән ҡыҙ ҡапыл шымтайҙы, һағайҙы, күлдәк еңдәрен тартҡыланы, шунан үҙалдына ни менәндер булашҡан Бикморатҡа өндәште:

— Ҡил әле, туғанҡайым. — Малай, шуны ғына көткән кеүек, уның алдына югереп килеп менде. — Өшөмәнеңме?

— Апай, минең матул ашығым ҡайҙа?

— Әлләсе... Аҙаҡтан эҙләп алып бирермен, йәме.

— Алҡам ҡысыта, апай, — малай, сытыйып, арҡаһын апаһының түшенә тызырға тотондо.

— Ярар, түҙ инде, туғаным, шәбәйәһең инде хәҙер.

Бөтөнләй Уйылданды онотто бит былар, әйтерһең, ул сығып киткән. Их, тупһыҙыраҡ хәбәр әйтеп, хәтерен ҡалдырҙы шикелле Миңлегөлдөң...

— Миңлегөл...

Тышта ишетелгән аяҡ тауыштары Уйылдандың һүҙен бүлде. Ғәрифә инеп, уны күрмәйенсә:

— Сыуалға һаман ут яҡманыңмы ни, ҡыҙым? — тине. — Ашарға әтмәләргә кәрәк ине... — Ошонан аҙаҡ ҡына ишек төбөндәге һикелә шымтайып ултырған кеше күҙенә эленде. — Бәй, күрмәй ҙә торамсы. Һин түгелмеһуң, Уйылдан?

— Мин, Ғәрифә инәй... Төлкөсураға тип килгәйнем дә...

— Улар урманда шул.

Ғәрифә килеп инеп, һүҙҙе бүлдереүенә үкенә ине Уйылдан. «Миңлегөл, бөгөн әллә берәй ергә ултырмаға барабыҙмы?» — тип әйтмәксе ине бит. Ни эшләһен, ипләп кенә урынынан торҙо.

— Ярар, ҡайтайым әле. Хушығыҙ. — Ул сыҡҡанында тупһаға эләгеп саҡ-саҡ йығылманы, ниҙер мығырҙап һөйләнде; Миңлегөл иһә рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе.

— Ипләп, Уйылдан ағай! Берәй ерende ауырттырһаң, бүре һуға алмаҫһың!..

Тышта аяҡ тауыштары тынғас, әсәһе ҡыҙына асыуланды.

— Ниңә юҡҡа көләһең? Шуны бел, хәҙер бәләкәй бала түгелһең, тыйнағыраҡ булырға кәрәк. Кешенең әллә ни уйлауы бар. Теләһә кем балаһы түгел бит.

— Әй, әсәй, һөйләмә инде, бүтәндәрҙән әллә ни артыҡ ере юҡ.

Әсәһе йыш ҡына ошо Уйылданды: «Старшина улымын тип ҡупырайып йөрөмәй, тәртипле бала», — тип телгә алыусан булып киткәйне һуңғы ваҡытта. Миңлегөл был һөйләнеүҙә ниндәйҙер хикмәт барын һиҙә һәм баш бирмәйерәк яуап ҡайтара ине.

— Улай тимә, ҡыҙым, ҡайһы берәүҙәр ана яңы ҡата алып кейһә лә, әллә кемдәй йөрөй.

— Был да инде әллә кем булып, ҡып итеп кейенгән.

— Кейенһә ни... Нимә һөйләй һуң?

— Бер ни ҙә әйтмәй, ағайымды һорай.

— Атайың менән ағайыңды әйтәм, өшөмәй генә ятып йоҡлаһалар ярар ине. Көндө һыуытып тора.

Ғәрифә сыуалға ут тоҡандырып ебәрҙе, самауырына һыу ҡойҙо, тоҡандырырға тип сыуал буйынан ҡайын сыра алғайны, саҡ ҡына уйлап торҙо ла кире һалды.

— Ярар, әллә ни эш юҡ, сыуал яҡтыһында ла ултырырбыҙ әле. Анау урыҫтар барҙа сыра былай ҙа күп бөттө. Ҡана әле, ҡыҙым, аулаҡта аяғыңдың яраһын ҡарайыҡ, уңаламы икән.

Миңлегөл йөн ойоғон сисеп, киң балаҡлы аҡ ыштанын бот төбөнәсә һыпырып, урындыҡҡа ултырҙы ла күлдәгенең итәген ҡайтарҙы. Әсәһе иплəп кенә урауҙы тағатып, япҡан япраҡтарҙы алды. Яра өҫтөндәге ҡутырҙар күбеп, ҡупсып тора ине.

Миңлегөл сытыя-сытыя бармаҡ остары менән генә яраһын таҙартырға тотондо. Тәүҙә, ауыртыр һымаҡ күреп, бик һаҡ ҡыланғайны, ултыра торғас, мауығып уҡ китте.

Әсәһе уның шөғөлөнә ҡарап ултыра, күңелендә иһә һәр әсәлә тыуа торған уйҙар: «Бигерәк матур булып үҫеп килә балам. Үҫеп килә тип, бөтөнләй еткән инде. Ана бит, сандырҙары, балтырҙары ҡайһылай тығыҙайып киткән. Тик уғата үҙһүҙлерәк, йәшәгер ҡыҙыҡай. — Шунан ошо арала ауылда Миңлегөлдө телдән төшөрмәй маҡтап һөйләүҙәрен хәтерләй. — Үҙем дә былай төҫ яғынан байтаҡ егеттәрҙе ымһындыра торғайным да, ҡыйыулыҡҡа был уҙҙыра. Йә инде, ошо йәшендә бүре атып алһын икән! Ҡайҙарҙан ғына яусы килер ҙә кем ҡулдарына тоттороп ебәрермен инде ошо алма кеүек ҡыҙымды... Анау урыҫ биргән сатиндең дүрт-биш аршынын үҙенә күлдәк итеп тегәйем дә, атаһы ҡалаға барғанда дөйә йөнө алдырып, һигеҙ аршыны менән юрған тышларға кәрәк. Үҙем сатин күлдәкһеҙ ҙә йөрөрмөн әле. Ми-ңә-ә-ә инде хәҙер...»

— Әсәй, ҡара әле, ярам урыны бөтөнләй таҙарҙы.

— Әйттем бит ана... Хәҙер урап та тормайыҡ инде.

— Әй, аяғым йәмһеҙләнде лә! Был сыйылған урындарҙың эҙе бөтмәһә, ни эшләйем инде?

— Бөтөр, балам, бөтөр, йәш тән бер туҡтауһыҙ үҫә, яңыра тора бит ул.

Ғәрифә Өфө кешеләре биргән ярты ҡаҙаҡлы бөртөк сәйе һалып, сәйнүгенә һыу ағыҙып, самауыр өҫтөнә бешерергә ҡуйҙы. Шул саҡта ғына Бикморатының мендәргә башын төртөп йоҡлап ятҡанын күрҙе.

— Эй, балаҡайымды, ашамайынса йоҡлап китте бит инде.

Уның өҫтөнә япҡас, һаман үҙенең аяғы менән булашҡан Миңлегөл эргәһенә килде.

— Шуны уйлап ултырҙым әле, ҡыҙым. Анау урыҫ биргән ситиндән һиңә күлдәк тегәйек тә ҡалғанынан юрған тышларбыҙ, тим.

— Ниңә, әсәй, үҙеңә күлдәк текмәйбеҙме ни?

— Тәүҙә юрған һырыйыҡ әле. Атайың, күлдәгеңдең алмашы иҫкергән, күмер һатҡас, алып ҡайтырмын, тип һөйләнгәйне. Алыр әле шунда ситса-фәләндән!

Ғәрифә түрбаш яҡҡа ғына сәй ултыртты. Табын эргәһендә өйҙәге кешеләр теүәл булмаһа ла, күңелһеҙ бит ул. Анау Өфө кешеләре барҙа бигерәк күңелле һымаҡ ине. Миңлегөл ҡырын яғалы күлдәк, еҙ төймәле, бик килешле тегелгән ҡыҫҡа бишмәт, ялтыр итек кейгән егетте күҙ алдына килтерҙе. Кит инде, урыҫ та шулай һөйкөмлө булыр икән. Мәгәрис көнөнән аҙаҡ ул эсеп тә йөрөмәне, Миңлегөлгә һүҙ ҡушырға ла ынтылманы, үҙен бик тыйнаҡ тотто. Китер көндәрендә иртәнсәк ирҙәр сәй эскәндә бөтөнләй түрбаш яғында ултырған Миңлегөл уны үҙенә ҡарағандай тойҙо һәм иплэп кенә шул яҡҡа күҙ һалғайны, ҡапыл аҙ ғына ваҡытҡа уларҙың ҡараштары осрашты. Егеттең йәшкелт күҙҙәрендә моң, һағыш, ынтылыш — бөтәһе лә бар ине. Миңлегөл ул күҙҙәрҙән ҡурҡты, башын тиҙ генә түбән эйҙе... Әле иһә әсәһенә бөтөнләй уйламаған хәбәр әйтеп һалды.

— Урыҫтарҙың да һәйбәттәре була икән, ибет, әсәй.

Әсәһе уға сәйерһенеберәк ҡараны.

— Урыҫтың — бөтәһе лә урыҫ була инде.

Ай-һай, һиҙгер була шул әсә йөрәге!

* *
*

Ауыл осондағы ҡыразда, юлдан ситтәрәк, түбәһе кәҫ менән ябылған бер ҡаралты ерҙән ҡалҡып сығып тора. Яҡынырак барып ҡараһаң, уның түбәһенән тырпайған тимер мөрйәне, ерҙән саҡ ҡына ҡалҡыу стенаһындағы кескәй тәҙрәне, тар ишекте күрәһең. Унан йылғаға һуҙылған берҙән-бер һуҡмаҡтың таҡыр уҡ булыуынан был ҡырын битләүгә өңөп эшләнгән балаганда йән эйәһе барлығы аңлашыла.

Балаган тәңгәлендәге туғайға, дүрт бағана ҡағып, ат дағалау станы эшләнгән. Унан йыраҡ түгел йыуан имән бүкән ергә ҡаҙып ултыртылған да уның өҫтөнә осло моронло ҙур ғына суйын түш беркетелгән, шунда уҡ эре-

-ле-ваҡлы сүкештәр ята, тимер-томор киҫәктәре өйөп ҡуйылған.

Бында ауыл ҡарттары «Гөргөрөй», йәшерәктәр «Гриша» тип йөрөткән кеше йәшәй. Самаһына ҡарағанда, ҡырҡ йәштәр тирәһендә булыуына ҡарамаҫтан, уға бер кем дә, хатта ыштанһыҙ малайҙар ҙа, «ағай» тип тә, «бабай» тип тә өндәшмәй. «Гөргөрөй» йәки «Гриша» — шуның менән вәссәләм. Үҙе лә кешегә бик үк бығып бармағанлыҡтан, ауыл халҡы ла уның менән ҡатнашып йәшәү тураһында уйламай. Бында килеп, сходтың рөхсәтен алғандан аҙаҡ ошо балаганды һалып йәшәй башлауына дүртенсе йыл инде. Бер ниндәй тауыш-өнһөҙ кеше булып сыҡты, ә ауыл өсөн файҙаһы ҙур: аттарҙы оҫта дағалай, арба тәгәрмәстәренә шин тарта, самауыр, ҡомған кеүек нәмәләрҙе ямай; йәштәр иһә унан йөҙөк һуҡтырыуҙы үртеш итеп алған. Көмөш аҡса килтерһәләр, Гриша уларға бынамын тигән йөҙөк эшләп бирә, хатта ҡайһы берҙәренә ҡашына тиҡлем йәбештереп ҡуя. Ғөмүмән, уның йомош менән килеүсене кире бороп ебәргәне юҡ. Шул уҡ ваҡытта эше өсөн бер кемдән дә хаҡ һорамай, кем күпме теләй — шулай ҡалдыра, һөт, май килтерһәләр ҙә, ҡаршы түгел.

Рәтле тимерлеге лә юҡ бит әле. Ҡотлоғужа, тимерлек өсөн бер бурама һалдырып бирәм, тип әллә нисә тапҡыр әйтте, тик һаман ҡыл да ҡыбырҙатҡаны юҡ. Гриша ла ныҡышлыҡ күрһәтмәй, балаганы алдындағы туғайҙа, зәңгәр күк аҫтында үҙе әтмәләп алған шул күреге менән күмер өрҙөрөп үҙ көнөн күрә бирә.

Григорий — урта буйлы, баҙыҡ кәүҙәле кеше, һаҡалы сиҡә сәсенә тоташып тора, әммә, рус булһа ла, сәс йөрөтмәй, башы һәр саҡ тап-таҡыр. Уның салғы бәке менән үҙ сәсен үҙе ҡыра алыуға бөтә кеше аптырай. Ул үҙе иһә быны бер ни урынына ла күрмәй: иртәнсәк һайын күпертеп башын һабынлай ҙа, һә тигәнсе, көҙгөһөҙ-ниһеҙ, бармаҡ бите менән һыпырғылап ҡарап, ялт иттереп ҡырына ла ҡуя. Башы шулай яп-ялтыр булғанғалыр инде, уның ҡуйы ерән һаҡалы йәбештереп ҡуйылған һымағыраҡ күренә.

Ҡаратауға үҙ теләге менән дә, осраҡлы рәүештә лә килмәгәйне Григорий. Белорет заводында ун ете йәшенән башлап, егерме йылдан ашыу тир түкте ул. Суйын иретә торған кактуаз күрекле бик ҙур мейестәрҙән бәрелгән ялҡын уның битендәге ете ҡат тирене һыҙырып

төшөргән, күрек тотҡаһын әйләндерә торғас, устарында ғүмере бөтмәç һөйәлдәр хасил булған. Көн һайын хәлдән тайғансы эшләһә лә, уның өçтө — кейемгә, тамағы ашҡа туйманы. Ҡыйын ине заводта эшләүселәрҙең хәле. Өçтәүенә, заводсылар һәр төрлө һалымдар менән йәнде ҡыялар. Бынан дүрт йыл ярым самаһы элек, мең һигеҙ йөҙ етмеш беренсе йыл йән башына һалынған һалым тағы арттырылғас, завод крәçтиәндәре түҙмәне, бөтә эште туҡтатып, завод управляющийенең Ағиҙелдең ҡалҡыу ярындағы ҡарағайҙар араһында урынлашҡан йортона юнәлделәр. Уларға ағас ҡырҡыусылар, әрҙәнә ташыусылар, күмер яндырыусылар — йөҙәрләгән кешеләр ҡушылды. Управляющий, заводтар хужаһы Сергей Владимирович Пашковтың ҡурайына бейеүсе әҙәм, тәүҙә өйөнөң балконына сығып:

— Мин — хөкүмәтебеҙҙең урындағы бер кескәй вәкиле генә, батша хәҙрәттәре сығарған закондарға ҡаршы бара алмайым, — тип, өйөнән ҡабат сығып йөрөмәйенсә, ҡотолмаҡ булғайны ла, улай тура килмәне. Ярым яланғас, ас, ярһыған кешеләр:

— Көлөн күккә осорайыҡ!

— Өйөн генә түгел, бөтә заводты яндырайыҡ! — тип үтә аяуһыҙ ҡылана башлағас, яңынан балконына сығып баçты. Һәм, халыҡ тынысланa төшкәс:

— Миңә, завод хужаһына нимдәй талаптарығыҙ бар? — тип һорарға мәжбүр булды.

— Барщина недоимкаларын тулыһынса юҡҡа сығарығыҙ!

— Һалымдар бер тингә лә артмаһын!

— Йәмәғәт, — управляющий ҡысҡырмай, итәғәтле генә мөрәжәғәт итте, — ул закондарҙы мин сығара алмайым.

— Ә беҙ ул саҡта барлыҡ һалымдарҙы түләүҙән баш тартабыҙ!

Эштең яҡшыға бармаçын һиҙә ине управляющий һәм халыҡты, Сергей Владимирович менән кәңәшләшергә форсат бирегеҙ, ике көндән яуап алырһығыҙ, тип тараттыла, шул көндө үк, ярҙамға ғәскәр һорап, Верхнеуральскигә сапҡын ебәрҙе. Ике көндән эшселәрҙең байтағы үҙ талаптарына ыңғай яуап алыу урынына эштән ҡыуылыуы тураһында белдереү ишетте. Егерме һигеҙ кешене ғаиләһе-ние менән Себергә оҙаттылар, байтағын, әгәр яңынан ошондай баш-баштаҡлыҡ ҡабатланһа, та-

ғы ла ҡатыраҡ яза аласаҡһығыҙ, тип иҫкәрттеләр. Заводтағы тәүге ҙур ҡуҙғалыш тулыһынса уңышһыҙлыҡҡа осраны.

Утыҙ ете йәшенәсә ғаилә тормошо ҡора алмаған Григорий ошо боланы башлап йөрөүселәрҙең береһе ине. Этап менән Себер яғына оҙатылғас, ул юлда уҡ нисек тә ҡасыу яғын самаланы. Сөнки һөргөн урынына барып еткәс, ысҡыныу үтә ҡыйын буласағын һиҙә. Ғаиләле кешеләр был турала уйлай алмай: бала-сағаһын яҙмыш ҡосағына ташлап, ҡайҙа китһен инде улар? Һәм, яйын тура килтереп, ҡасты Григорий. Мең бәләләр менән тыуған яҡтарына яҡынлашты. Башҡа берәй заводҡа йә шахтаға ла урынлашып китер ине, бәлки, Белореттәге өйләнергә тип йөрөгән ҡыҙы күңелен тартты; ғауға баҫыла төшкәс, шыпыртын ғына ҡайтып, уны алып китергә самаланы. Шуға күрә Себер яғынан ҡасып килгән ыңғайы уҡ Белоретҡа барырға уңайлыраҡ, шул уҡ ваҡытта сағыштырмаса аулаҡ ошо Ҡаратау ауылын һайланы. Бер йылға яҡын ваҡыт үткәс, хыялын тормошҡа ашырыу — һөйгәнен алып китеү уйы менән, ҡасып-боҫоп Белоретҡа барҙы ул, ләкин башына яңы хәсрәт ишелеп төштө: уның нисәмә йыл яратып йөрөгән ҡыҙы, Григорийҙең башы Себерҙән әйләнеп ҡайтыуға өмөтөн өҙөп, тормошҡа сыҡҡайны. Осраштылар улар шулай ҙа, Ҡараһаҙ йылғаһы ярындағы урманда ике тәүлек буйы бергә булдылар, ләкин һөйгәне уның менән баш һуҡҡан яҡҡа сығып китергә теләмәне...

Григорий Ҡаратауға кире әйләнеп килде. Хәҙер иһә йәй һайын ҡасып-боҫоп Белорет яғына бара; ҡасанғылыр һөйгәне, хәҙерге һөйәркәһе менән бер нисә көн урманда осрашыуға ризалашып, шунан күңел йыуанысы табып, Ҡаратауҙа йәшәй бирә.

Өфө баярының урман һатып алыуын ишеткәс, уның күңеленә йылы югерҙе. Баяр яңы ерҙә, моғайын, эшселәр йыйыр, шунда барып урынлашһа, үҙенә яңы дуҫтар ҙа табыр, әҙәм рәүешлерәк йәшәй ҙә башлар әле...

* *
*

Торомтай менән Төлкөсура, килеп еткәс тә, аттарын туғарып, ҡола бейәне арҡанланылар, тайҙың юғәнен һыпырып, шул көйө ебәрҙеләр; сөнки ул ҡола бейәгә

шул тиклем әйәләшкән, унан айырылып бер ҡайҙа ла китмәйәсәк. Һәм аталы-уллы ең һыҙғанып эшкә тотондолар. Ҡаҡ имәнде бысыуы еңел түгел, суйындай тағырҙап тора. Уның ҡарауы, нисек тә бысҡылап бөтһәләр, ярыуы еңел буласаҡ — балтаңды күтәреп сапҡан һайын имән шартлап ярыла, бик шараҡ ағас.

— Көндәр яуынлап китмәһә, тағы бер-ике йөк имән килтереп үртәй алһаҡ, эште шөйлә рәтләр инек, улым,— ти Торомтай, туҡтап хәл йыйған арала.

Төлкөсура эшкә талымһыҙ, ҡайһы урындан тотһа, — шунан һындыра торған егет.

— Булдырабыҙ уны, атай. Быныһын өйөп, ут төртәбеҙ ҙә, ул янып бөткәнсе, тағы бер үртәрлек әрҙәнә ҡырҡабыҙ.

Төлкөсураның айырыуса дәрт менән, арыу-талыу белмәй эшләп йөрөүенең үҙ сәбәбе бар: бына күмер үртәп бөтөлөр һәм улар ике ылау менән ялан сығып китер. Тик бына Стәрлегә үк барып етерҙәрме, юҡмы? Әле, һүҙ уңайы килгәндә, Төлкөсура, күңелен өйкәп торған ошо һорауҙы ла асыҡлау өсөн, атаһының ҡылын тартып ҡарамаҡсы итте.

— Был юлы ла ҡалаға барып етәбеҙҙер бит, атай?

Хәбәрҙе алдан алып һөйләргә яратмаған Торомтай асыҡ ҡына яуап бирмәне.

— Тәүҙә күмерҙе апарып һатайыҡ әле, унан күҙ күрер, — тип кенә ҡуйҙы.

— Һуң бит, атай, ҡышҡылыҡҡа күберәк он алып ҡайтырға кәрәк. Стәрле оно һәйбәтерәк тә, осһоҙораҡ та...

— Уныһы шулай инде...

Эй ошо атаһының, һис асылып китеп, өҙә генә һөйләшмәҫ. Төлкөсураның йәне көйә биреп ҡуя, күңеле ҡайта төшә. Ә бына атаһы Стәрлегә барасаҡтарын өҙә генә әйттеме, уның башы күккә тейер, тағы ла аяуһыҙыраҡ эшләргә тотонор ине. Стәрле һүҙен ишеткән һайын уның күҙ алдына аҡ алъяпҡыс бәйләгән, шлапурлы күлдәк кейгән исемһеҙ татар ҡыҙы килә лә баҫа. Ошо алыҫ һәм яҡын, билдәле һәм билдәһеҙ ҡыҙ уны йыш ҡына тынғыһыҙлай, үҙе сәйер, үҙе татлы тойғо Төлкөсураны йә осондора, йә башын әйеп, һис тә юҡтан бошоноп йөрөргә мәжбүр итә, ҡалаға барғыһы, шул ҡыҙҙы күргеһе килә башлай. Атаһы белмәй шул уның ниңә Стәрле тип ныҡышҡанын. Ана бит, һаман үҙ хәбәрен һөйләй.

— Унан ары, улым, яҙға табан үртәү өсөн, анау Өфө баяры килеп эш башламаҫ элгәре ошо урмандан тағы биш-алты йөк имәнде ауылға яҡынлатып ҡуйыу ҙа зыян итмәҫ ине.

— Ниңә атай?

— Яңы хужа әллә ниндәй тәртип урынлаштырыр, тим.

— Уға ҡороған теләһә ни имәндең ни ҡәрәге бар?

— Ышаныс бармы ни, улым, эттән һөйәк артамы? — Торомтай ауыр көрһөндө. — Ай-һай, ул баярға ерҙе һатып хаталанманыҡмы икән? Бына ул килер ҙә йыл әйләнәһенә урман киҫтерергә тотонор. Ун мең дисәтинә урман күпкә сыҙар тиһеңме? Бөттөмө, яңы биләмә һатығыҙ, тиер, бер ҡаныҡҡас, һатмайбыҙ, тиһәк тә, юлын табып алыр. Байҙар нәфсеһе — көтөүгә ҡаныҡҡан бүренекенән һис тә кәм булмай торған. Тирә-яҡты ҡола яланға әйләндереүе бар уның.

— Әле килеп киткән кешеләре бик арыу күренә бит, атай. Баяр үҙе лә әллә ни насар әҙәм түгелдер әле.

Торомтайҙың һәр саҡ уйсан йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу сағылып ҡалды.

— Әйттең, улым, хәбәрҙе. Улар килеп киткәндә, үҙ йомоштарын йомошлағансы һәр саҡ шулай, аҙаҡтан ете ҡат тиреңде һуялар. Үҙебеҙҙең Ҡотлоғужаны ла маҡтарһың әле, ә?

Нимә тиһен Төлкөсура? Ҡотлоғужа — бай, улар — ярлы. Ҡотлоғужа эшләтә лә хаҡын түләй, ә уларға йәшәү өсөн аҡса кәрәк.

— Әлләсе, атай, эшләһәң, хаҡын бирә инде.

— Әле һин күп нәмәне аңламайһың шул. Икәүләп уға йәй көнө туғыҙ кәбән ут йәшел бесән әҙерләнек. Былай хаҡында тормаған ҡеүек ҡыланды Ҡотлоғужа, — икебеҙгә бер ябаҡ бирҙе, хәҙер ана тай булып йөрөй. Бүтәндәргә көнләк хаҡын ун икешәр тиндән арттырмай бит ул. Беҙгә хаҡты мулыраҡ ысҡындырыуының хикмәте бар, минеңсә. Һине ныҡлап үҙенә эләктерергә самаламаймы икән ул, хәйләкәр.

— Нисек итеп, атай?

— Аңғармайыраҡ йөрөһәң, нисек ҡапҡаныңды үҙең дә һиҙмәй ҡалырһың. Берәй ваҡыт, йомартланып, ярар, берәй ярҙам итерһең әле тип, бер нисә аршын тауар, унан, яйын тура килтереп, онон, сәй-шәкәрен тотторол ҡайтарыр. Шунан күҙеңде тупайтҡансы әйтер: Төлкөсу-

ра, һинең минә фәләнсә һум бирәсәгең бар, түгәнсә йыл бына шундай эштәремде эшлә инде, тиер. Һай, улым, хәйлә менән беҙҙе тереләй һуйып мал йыя бит ул. Беҙгә бер ябаҡ биреп эшләткән бесәне менән ун баш йылҡыһын аҫырап сығара ла уларҙы һамар яғына ҡыуалатып, һаттырып, кеҫәһен ҡалынайта... Ярар, улым, быны төшкә тиклем бысып бөтәйек әле, ашағас, ярырға тотонорбоҙ.

Төлкөсура үҙе бысҡы тарта, үҙе әле генә атаһы һөйләгәндәр тураһында туктауһыҙ уйлана: бөтәһе лә бик ябай кеүек, шул уҡ ваҡытта буталсыҡ та. Был донъяла барлыҡ кеше бай булып бөтә алмайҙыр бит? Ә байыу өсөн, Уйылдан кеүек, ни теләһәң, шуны эшләп йәшәү өсөн, ни әмәле бар икән һуң? Ҡотлоғужа ла ҡапыл ғына байып китмәгәндер...

Тырыша торғас, имәндәрҙе бысып бөттөләр. Ярыуы сыҙаманы. Әңер төшөүгә әрҙәнә бер яҡ ситтән ут төртөү өсөн усаҡ ауыҙы шикелле өң, урталыҡтан төтөн сығыу өсөн тишек ҡалдырып, шартына килтереп өйөп тә ҡуйылғайны инде. Хәҙер күбәгә оҡшатып өйөлгән әрҙәнәне тупраҡ менән ҡаплайһы ғына ҡалды. Төлкөсура малай сағында аптырай торғайны: ниңә уны ер менән ҡаплаталар икән? Хәҙер белә, шулай итмәһәң, янған әрҙәнә асыҡ һауала тулыһынса күмергә әйләнмәй, көлгә әүерелә бара. Уның атаһының ауылда тиктәҫкә генә, иң оҫта күмерсе, тигән даны таралмаған. Күмерҙең ни тиклем сығыуы, онталмай нык көйө тороуы әрҙәнәне ҡайһылайыраҡ итеп сатрашлап өйөүгә, өҫтөнә тупраҡты ниндәй ҡалынлыҡта һалыуға, ағасты ҡайһы ерелектә ярғылауға, тағы ла шундай әллә ни ҡәҙәр «ваҡ-төйәккә» бәйле. Торомтай ана шул «ваҡ-төйәктәрҙе» энәһенән ебенәсә белә, уларҙың бөтәһен дә күҙ уңында тота. Шуға күрә ялан ауылдарында уның күмер тейәп килеүен күрҙеләрме, шәм кеүек ҡатҡан, дыңғырҙап торған күмерен талашып алып бөтәләр. Атаһының күмер яндырыу оҫталығын, уның серҙәрен Төлкөсура ла белә инде хәҙер. Тик үҙалдына күмер үртәп ҡарағаны юҡ әле.

Бына шуның өсөн дә Ҡотлоғужа Торомтайҙы «үҙ кешеһе» итергә әллә ни ҡәҙәр тырышты. Ашҡа, хатта бал мәжлесенә саҡырыу тиһеңме, эшләгәне өсөн хаҡты ҡуберәк түләүме, яҡты йөҙ күрһәтеп ҡыланыуымы — береһе лә ҡалманы. Анау бер йыл: «Торомтай ағай, күмер үртәүҙе төп кәсеп итергә, тигән уй бар ине. Әллә минә

дисәтник һымағыраҡ кеше булып эшкә ялланаһыңмы? Бүтәндәрҙе өйрәтеп ҡенә йөрөрһөң», — тип тә ҡарағайны, Торомтай уның ҡапҡанына тағы эләкмәне. Һиҙҙе Торомтай: Ҡотлоғужа күмер үртәүҙең серҙәренә төшөнөү менән, уны ҡыуасаҡ, ул саҡта ҡарап, өйрәтеп йөрөүсенең кәрәге үҙенән-үҙе юҡҡа сыға бит инде. Шуға күрә:

— Ҡуй, Ҡотлоғужа, нәсәлник булып йөрөү миңә килешә торған эш түгел, — тип кенә ҡуйҙы.

Хәҙер ана Төлкөсураны ҡулына төшөрөргә самалай. Йәш һәйәктең үҙ яғына ыңғайларына ышана. Уйылданының үҙе яратмаған Торомтай малайы — Төлкөсура менән дуҫлашып йөрөүенә лә шуға күрә ҡаршы түгел...

Торомтай улының көрәк һабы йыуанлыҡ ҡайын ҡолға башын дүрткә ярып, шул ярыҡтарға эре-эре туҙҙарҙы арҡыс-торҡос ҡыҫтырғанын ҡарап тора ла ҡыуана — тамам эшкә өйрәнде Төлкөсура, таҫыл менән, еренә еткереп эшләй. Бына Төлкөсура туҙҙарға ут төрттө һәм ялпылдап яна башлаған ҡолғаны усаҡ ауыҙы һымаҡ итеп ҡалдырылған өңгә тыҡты. Усаҡ ауыҙын алдан әҙерләнгән әрҙәнәләрҙе һөйәп, уның өҫтөнә тупраҡ һибеп, тиҙ генә томалап ҡуйҙылар. «Ҡубәнең» үҙәгендә ҡалдырылған тишектән төүҙә быҫҡып ҡына, нәҙек кенә төтөн юлаҡтары күренде, тора-бара ул шәбәйҙе һәм оҙаҡламай урмандағы көҙгө ямғырҙар бәҫәрткән үләндәрҙең, серек киҫкәләрҙең еҫенә әскелтем төтөн еҫе ҡатнашты. Алла бойорһа, бер тәүлектән ике йөклөк күмер әҙер буласаҡ.

Киске лекте ай яҡтыһында ғына ашанылар. Көн буйы бил яҙмай эшләүҙән ныҡ арыған Торомтай ашап бөткәс тә арбаға йәйелгән бесән өҫтөнә ауҙы ла өҫтөнә сәкмәнен ябынды. Төлкөсура иһә йылғаға алып барып аттарҙы эсереп килде, мөрйәһенән төтөн бөркөп ятҡан урт тирәһендә әйләнгеләп йөрөнө лә бер түмәр өҫтөнә ултырҙы.

Кискә табан шар аяҙ булып киткән күктә ун бишен тултырған ай йөҙә. Ел өрөп, урттән сыҡҡан төтөндө уның таңғаленә алып барһа, ай, баҡыр таңкә төҫөнә инеп, үтә моңһоу күренә. Көҙгө урман шып-шым. Һыуыҡ төшкәнлектән, ябалаҡ менән ярғанаттың да ҡаптырҙап осоп үткәндәре ишетелмәй, ағас ҡыуышына боҫҡандар, күрәһең. Бөтөнләй яланғасланып барған урман эсен тулы ай апаруҡ яҡтырта һәм уны серле бер донъя итеп күрһәтә.

Ҡайһы бер саҡта ҡапыл шул әкиәттәгесә серле урман эсенән аҡ алъяпҡыс быуған ҡыҙ килеп сығыр ҙа зәңгәр күҙҙәренән зәңгәр нур һирпеп төбәлер, сихри ҡарашы менән генә үҙенә саҡырыр һымаҡ тойола. Төлкөсураны әлеге сәйер тойғо тағы биләп алды ла, үҙ ҡанаттарына ултыртып, әллә ниндәй донъяға талпынды. Төлкөсураның үҙен ашҡындырған сәйер тынлыҡтан ҡотолғоһо килә ине. Ул, тороп, урман эсенә атланы, ҡурай эҙләп табып, уны тамыры менән йолҡоп алды. Салғы бәкеһе менән тамыр яҡты тигеҙләп ҡырҡҡас, үлсәргә тотондо:

— Ҡурай!

— Әү.

— Ҡайҙа үҫтең?

— Урманда үҫтем.

— Кем ҡырҡты?

— Оҫта ҡырҡты.

— Ни эшләргә?

— Уйнарға...

Үткер бәкеһе менән ғыршлатып өс яғын киҫеп ырғытты, самалап, һырт яҡтан дүрт, аҫтан бер тишек уйҙы ла, уртыһн ҡабартып, ҡурай эсенә өрҙө. Ҡаратауҙа төпһөҙ ыштан кейеп йөрөгән малай-шалайҙан алып аҡһаҡалдарға тиклем — бөтә ир заты ҡурай тарта ине. Тик бына Торомтай ошо һөнәргә өйрәнеүҙе дәрт итмәне. Ғәрифәһе өндәшмәҫ, юҡҡа-барға тел сарламаҫ иренә йәшерәк сағында:

— Исмаһам, ҡурай ҙа тарта белмәйһең бит, — тип зарланып та алғылай торғайны хатта.

Бына Төлкөсура ла малай саҡтан өйрәнде. Өйрәнде генәме, ауылдағы иң шәп ҡурайсы хәҙер! Ауыл эргәһендәге һырт өҫтөнә менеп уйнап ебәргән саҡтарында бөтә Норош буйы яңғырап тора, ҡыҙҙар йөрәге урынынан ҡуҙғала. Бик күп ауылдаштары һымаҡ, ғәҙәти ҡурайсы түгел ине, тәбиғәт тарафынан күкрәк тә, күс тә, моң да бирелгән ысын мәғәнәһендәге оҫта ине.

Әле ул, дүңгәк өҫтөнә ултырып, урмандың серле тынлығын боҙорға теләмәгәндәй, әкрен генә уйнай; ҡурай моңо, ялан, тигеҙ ерҙән беленер-беленмәҫ кенә тулҡынланып ятҡан йылға шикелле, әкрен генә ағыла ла ағыла. Ошо моңға тирә-яҡтағы ҡайындар һағышҡа тарып ойоған, тулы ай, иһә, йөҙөшөн туҡтатып, ғәжәпләнеп, ергә баҡҡан төҫлө тойола.

Ҡулына ҡурай алдымы — Төлкөсураның хыялдары ҡанат йәйә, йөрәге ярһып тибә башлай, күңелендә тулышҡан яңынан-яңы көй-моңдар, баш бирмәгән аҡ кеүек, тышҡа сығыу өсөн осоноп талпыныrға тотона. Әле лә шулай булды. Әкрен генә башланған ҡурай тауышы көсәйгәндән-көсәйҙе, һәм бына ул, тыйып тотҡоһоҙ хыял ҡошондай, ай яҡтыһы ҡараһыу күк төҫкә буялған, иҫәпһеҙ күп йондоҙҙар менән сыбарланған бейеклеккә сирғылды. Ойоп ултырған ағастар, ҡапыл тертләп, ҡотороноп бейергә, күктәге ай, күсәренән ысҡынған шикелле, тәкмәс атырға кереште, бөтә төн йыһаны хәрәкәткә килгәндәй булды ошо мәлдә!..

— Улым?..

Моң ҡапыл өҙөлдө, донъя әүәлге хәленә ҡайтты.

— Әү, атай?..

— Йоҡламайһыңмы ни әле? Арығанһыңдыр, ят. — Атаһының тауышы йоҡо аралаш сыҡмай, — наҙлы, хәстәрлекле, ул, күрәһең, йоҡламайынса, улының ҡурай моңон тыңлап кинәнгән. Төлкөсура эргәһенә килеп ятҡайны, малай сағындай күреп, ҡыҫып ҡосаҡлап алды, арҡаһынан дөпөлдәтеп ратты.

— Үҫтең, улыҡайым... — Әҙерәк тынып ятҡас, тағы телгә килде. — Бикморат ҡабатлап ауырып китмәһә ярар ине... Сәкмәнде ҡымтыбыраҡ ябын, өшөмә...

Иртәнсәк торҙолар ҙа, аттарын егеп, ҡоро имән эҙләргә урманға инеп киттеләр. Йөк менән әйләнеп ҡайтһалар, түтөн бөрккән үрт эргәһендә Уйылдан ултыра. Ниңә килеп сыҡты икән ул? Бында икәндәрен ҡайҙан белгән? Әллә ауылда берәй көтөлмәгән хәл килеп тыуғанмы?

— Әссәләмәғәләйкүм! — тип ырғып торҙо ул. — Мин һеҙҙе ҡайтып киткәндәрме икән тигәйнем.

— Шәпме, улым, — Торомтай уға ҡоро ғына өндәште. — Ни эш ҡыйратып йөрөйһөң?

— Һеҙгә ярҙамлашырға килдем.

Торомтай уға тағы шикләнеберәк ҡараны. Ни һөйләнә был? Үҙҙәренә рәтле эшләмәгәнде, ниндәй ярҙам булһын инде. Башҡаса эш барып сыҡмағас, күмер үртәү хикмәттәрен белергә атаһы ебәрмәнеме икән? Уның уйҙарын һиҙгән һымаҡ, Уйылдан килеүенең сәбәбен асыҡлабыраҡ һөйләп бирҙе.

— Атайым тегеләр менән Стәрлегә китте бит. Өйҙә әллә ни эш юҡ. Кисә кис һеҙгә ингәйнем, урманға ҡуна

киткәнегеҙҙе ишеткәс, бөгөн иртүк торҙом да, туҡта әле, мин әйтәм, моғайын, ҡүмер үртәй киткәндәрҙер. Тик йөрөгәнсе, барып ярҙам итешәйем, тинем.

Торомтай уның был һүҙҙәренән аҙаҡ та ихласлыҡ белдермәне. Бай малайы ниҙер әйтеп еткермәгән һымаҡ тойҙо ул.

— Әлләсе... Беҙ үҙебеҙ ҙә икәү бит.

— Булһа ни, икәүҙән өсәү яҡшы. Һеҙ бысҡанды мин ярып торормон.

Торомтай мыйыҡ аҫтынан ғына көлдө.

— Һин ярған әрҙәнә яңырмы икән һуң?

— Улайһа, Төлкөсура менән бысырбыҙ.

Быға тиклем әрҙәнәлек утынды бушатҡан Төлкөсура һүҙгә ҡушылды.

— Ысын әле, атай, Уйылдан килеп шәп иткән. Беҙ бысайыҡ, һин әкренләп яра тор. Ул саҡта бөгөн турап бөтөп, иртәгә иртүк ут төртөргә өлгөрәбеҙ.

— Шулайын шулай ҙа... Ярар, әләгәс...

Йәштәр эшкә ҡыҙыу тотондо, бешеп алып баралар, туҡтап та ҡарау юҡ, хәбәрҙәрен дә көләшә-көләшә эш араһында ғына һөйләшәләр. Әммә ләкин Торомтай Уйылдандың шулай ярҙам итергә килеүенең сәбәбен үҙенсә юрай, бының ысын ихласлыҡ булыуына шикләнеп ҡарай. Бай малайын ниндәй уй килтерҙе икән? Улар халҡына ят «ярҙам» тигән һүҙ артына нимә йәшеренгән?

Торомтайҙың шиге ысынлап та дөрөҫ ине. Уйылданды бында икенсерәк уй, башҡа төрлө маҡсат алып килде.

Ҡисә Төлкөсураларҙың өйөнән сыҡҡас, байтаҡ баш ватты ул. Миңлегөлдөң тәүҙә шаяртыбыраҡ һөйләшә башлап та, аҙаҡтан шымтайып ҡалыуы нимә аңлата? Уның атаһының, Ҡотлоғужаның, яратҡан бер һүҙе бар: «Ярлы — яһил булып тыуа, яуыз булып үлә». Уйылдан иһә Миңлегөлдөң үҙенә төрттөрөбөрәк һөйләшеүендә лә, аҙаҡтан шымып ҡалыуында ла яуыҙлыҡ ишараты күрергә теләмәй, ҡыҙҙың үҙенә ниндәй мөнәсәбәттә булыуын билдәләргә тырыша. Ахыр килеп, ул: «Бер ауыҙ һүҙгә иреп барырҙай тойолмай, берәй ҡиммәтле генә бүләк йомдорорға ине үҙенә, — тип уйланы. — Икенсенән, нисек кенә итеп булһа ла, Торомтайҙың күңелен йомшартыу яғын ҡарарға, уға ярамһаҡланыу әмәлен табырға кәрәк». Ләкин Миңлегөлгә ниндәй бүләк бирергә? Үҙһүҙле, кирегә бөткән Торомтай күңеленә асҡысты

нисек табырға? Әгәр атаһына кәңәш итһә, бөтә тормошон майлап-көйләп, хәйләләп алып барыуға ҡорған, осраған һәр ауырлыҡты бәлә-ҡазаһыҙ ситләтеп, улай мөмкин булмағанда, йыға бәреп үтергә өйрәнгән Ҡотлоғужа бер әмәлен табыр ине табыуын. Ләкин унын, иҫең киткән икән иҫке тунға, мин һиңә бынамын тигән кешенең ҡыҙын алып бирәм, тип, һүҙен ҡыра һуғып, әллә ниндәй байҙың әллә ниндәй ҡыҙы ҡуйынына илтеп тығыуы ла бар. Анау Ҡыпсаҡ старшинаһы менән эскән баштан һөйләшеп, әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдырыуы етмәгән...

Уйлана торғас, икенсе һорауына яуап тапҡандай булды ул: Торомтай менән Төлкөсура, моғайын, күмер үртәй киткәндер. Уларҙың төйәге ҡайһы тирәләрәк икәнен белә, иртәгә шунда һыҙырға кәрәк. Көн буйы ярҙам итешер, унын «аҡһөйәк» егет түгел икәнен күрһен әйҙә Торомтай.

Ярар, быныһы шулай булыр, бер көн эшләшкәндән уҡаһы ҡойолмаҫ әле. Тик бына Миңлегөлгә ниндәй бүләк бирергә? Яулыҡ йәки ҡулдаҡлек тауармы? Унын, ярлы тигәс тә, кейемем юҡ тиһенме әллә, тип сығынсылауы бар. Өр-яңы ҡата, түшлек йәки ҡашмаумы? Берҙән-бер ҡыҙын Торомтайҙың былдай әйберҙәргә аптыратмауын белә. Алҡа, беләҙек йәки йөҙөкмө? Быларынын ҡыҙ иҫен китмәлеһен ҡайҙан табаһын? Туҡта, туҡта, атаһының һандыҡ эсендәге кескәй һандыҡсаһында алтын аҡсалар барлығын белә бит ул. Әгәр шунын берәйһен алып, Гришанан шәп иттереп алтын йөҙөк һуҡтырғанда?.. Елле килеп сығасаҡ бит! Ауылда бер кем бармағында ла юҡ ундай йөҙөк, Миңлегөлдөң күҙе шарҙай буласаҡ! Тик бына ул алтын аҡсаның берәүһен генә нисек итеп ҡулға төшерергә? Тышҡы һандыҡтын да, эскеһенең дә асҡыстары әсәһенең сәс үрмесенә тағыулы икәнен белә Уйылдан. Атаһы ҡаты ҡуллы, ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ әсәһенә бөтә нәмәһен ышаныр тапшыра ине. Әсәһе асҡыстарҙы күҙ ҡараһындай һаҡлай, сәсен тарағанда ла алдына ғына һалып ултыра, кисен шул көйө йоҡларға ята, һандыҡты үҙенән башҡа бер кемдән астырмай.

Уйылдандың бөтә уйы хәҙер һандыҡтарҙың асҡыстарын ҡулға төшөрөүҙә ине. Кисә кискелекте ашағанда ла ошо хаҡта ғына баш ватты, әсәһенең сәс үрмесенә бер нисә тапҡыр күҙ һалды. Нескә сыйыр бауға икеһе ҡуша тағылғайны улар. Әлбиттә, был эште саҡ ҡына ла

һиҙҙермәй эшләргә кәрәк. Әсәһе аҫкыстарҙың сәс үрмесенән сисеп алынып, ҡабат тағылыуын белеп ҡалһа ла, һандыҡ эсен, иң тәүҙә кескәй һандыҡтағы аҡсаларҙың теүәллеген тикшерә башлаясаҡ. Икенсенән, быны атаһы өйҙә юҡта эшләп ҡалыу уңайлыраҡ булыр кеүек тойола.

Уйылдан, һәр ваҡыттағыса, урта өйгә йоҡларға ятты, ләкин күҙенә аҙ ғына ла йоҡо ҡунманы. Әсәһе алғы өйҙә ҡыштыр-ҡыштыр йөрөштөрҙө лә шымып ҡалды. Әллә шунда йоҡларға яттымы икән? Атаһы өйҙә саҡта иң төпкө өйгә ята торғайнылар. Алғы өй менән ике араларағы асыҡ ишектән әсәһенең еңелсә хырылдауын ишеткәс, ул үҙ уйының дөрөҫлөгөнә ышанды; шулай кенә урынынан торҙо ла ишектән күҙ һалды. Әсәһе стена буйына арлы-бирле урын йәйгән дә йығылған. Көн оҙоно сабыуыллап йөрөп арығандыр инде. Уғата тынғыһыҙ шул, бөтә нәмәгә ҡыҫыла, һәр кемгә бойороҡорға, өйрәтергә ярата.

Уйылдан шулай кенә уның эргәһенә килде, саҡ ҡына ҡыйыуһыҙланып торғас, әсәһе ябынған юрғанды һаҡланып ҡына үргә ҡайтарҙы. Шул саҡ әсәһе, танау осона ҡунған себенде ҡыуалағандағы шикелле, пефф тип алып, ҡуҙғала биреп ҡуйғайны, таш һындай ҡатып ҡалды. Юк, уянманы әсәһе, тағы ла тигеҙ генә мышылдарға тотонДо. Уйылдан сәс үрмесендәге аҫкыстарҙы ай яҡтыһында бик асыҡ күрә, ләкин уларға ҡағылырға батырсылығы етмәй. Ҡапыл бер-береһенә бәрелеп шылтырарҙар ҙа әсәһе уянып китер кеүек. Ләкин бынан да уңайлы мәлдең башҡаса булмауы ла бар. Тәүәккәлләргә кәрәк. Аҫкыстарҙы ай яҡтыһында ғына сисеп алыу мөмкин түгел ине, әсәһе уларҙы тиҙ генә сисерлек итеп бәйләгән тиһеңме ни? Уйылдан шым ғына барып, мейес кәрнисе буйында ятҡан ҡайсыны килтерҙе, үрместе ҡалҡыта төштө лә аҫкыстарҙы ҡырҡып алды. Булды!

Төпкө өйгә инеп, урта ишекте әкрен генә япты, ваҡтөйәккә тотонола торған балауыҙ шәмде яҡтыртты. Тәүҙә аҫкыстарҙың сылбыр бауы үрмескә нисегерәк бәйләнеүен тикшерҙе (шуның кеүек үк итеп, кире тағырға кәрәк тә инде), шунан ҙур һандыҡты асты. Яңы тауарҙар, сепрәк-сапраҡ аҫтынан тимер һандыҡты эҙләп тапты. Бына ул алтын аҡсалар! Балауыҙ шәмдән төшкән тоноҡ яҡтылыҡта, баҙлауыҡ кеүек, ялтырашып яталар. Әллә бер ҡулға эләккәндә икене эләктерергәме? Был тиклем аҡса араһынан өстө алһа ла, беленмәҫ әле. Шулай уй-

лап, өстө алды, тимер һандыкты бикләне, өҫтөнә сепрәк-сапракты әүәлге тәртип менән өйөп ҡуйҙы. Аҫҡыс бауы менән бергә ҡырҡылған үрмес осон сисеп, уны иҙән ярығынан ҡыҫтап, баҙҙың нигеҙ буйына төшөрҙө лә, аҫҡыстарҙы әсәһенең сәс үрмесе осона әүәлгегә оҡшатып таҡты. Тимәк, эш барып сыға тигән һүҙ, әсәһе бер ни һиҙмәне!

Иртүк уянды Уйылдан. Ҡөтөүселәргә һыйырҙарҙы, кәзә-һарыҡты ихатанан ҡыуып сығарып, тауға ыңғайлатышты. Шунан әсәһенә:

— Һалабаш быуалары яғына барып, киптерергә элгән юкәләрҙе ҡарап ҡайтырға кәрәк. Тамаҡҡа бешкәнсе, атты алып ҡайтайым әле, — тине лә, югән тотоп, ауыл осона ыңғайланы.

Атҡа барыуҙан элек Гришаның балаганына һуғылды ул. Гриша ниндәйҙер туҙып бөткән еҙ ҡомғанды ҡургаш ҡойоп ямарға маташып йөрөй ине. Старшина улын күргәс:

— Аттар дағалатырғамы, шин тартырғамы, — рәхим итегеҙ, — тине, эшенән туҡтап.

— Икенсе эш бар әле, Гриша, ләкин бер кемгә лә һиҙҙермәй ҡыландыра торған әйбер.

— Йә-йә, әйт, ҡурҡма. Кемгә хәбәр һөйләйем мин, бер кемем дә юҡлығын белмәйһеңме ни?

Уйылдан кеҫәһенән ҡулъяулығын сығарҙы, уның мөйөшөнә төрөлгән аҡсаны алып, усында һикертте.

— Бына ошонан бик шәп иттереп йөҙөк һуғып буламы?

Григорий уның усынан бармаҡ остары менән генә ҡымтып аҡсаны алды, уның ысын алтын икәненә ышанмағандай, күҙ алдында әйләндереп-әйләндереп ҡараны, шунан ғәжәпһенгән ҡарашын Уйылданға төбәне.

— Алтынданмы? — Уның тауышы тамаҡ төбөнән ҡыҫылып, шыйылдап сыҡты.

— Эйе, Гриша. Булдыра алырһыңмы? Уртаһынан уйып алынған өлөшөн ҡаш итеп йәбештерһәң, бигерәк яҡшы булыр.

Гриша алтын аҡсаны тағы иғтибар менән ҡарарға тотондо. Йөҙөктө баҡырҙан, еҙҙән, көмөштән һуҡҡаны бар уның, ләкин алтынды ҡулына ла тотоп ҡарағаны юҡ.

— Әллә шул, ышандыра алмайым, быға аса алтындан мәтәштерергә тура килмәне.

— Ә һин тот та эшләп ҡара! Хаҡында тормам, Гриша. Бына...

Уйылдан биш һум сығарып тотторғас, Григорий тағы ғәжәпләнде. Уға аҡсаның бишәр һумлап ингәне юҡ ине әле.

— Бик күп булмаҫмы һуң, егет?

— Тик еренә еткереп эшлә генә.

— Һы... Ярар, самалап ҡарармын. Әгәр боҙоп ҡуйһам, ни тиерһең?

— Их һин, Гриша, алтын бер ваҡытта ла боҙолмай, тигәнде ишеткәнең юҡмы ни?

— Иртәгә килерһең. Хәҙер үк тотонам, — Григорий теге туҙған еҙ ҡомғанды ситкә алып ҡуйҙы...

Атын алып ҡайтып, ашағас, Уйылдан, әсәһенең бер ни һиҙмәй йөрөүен күреп, шатланды һәм туп-тура Төлкөсуралар күмер үртәргә тейеш ергә сапты.

Алтын аҡсаны ҡулға төшөрөү — Уйылдандың үҙ ғүмерендә иң ҡатмарлы эш булды. Шул уҡ ваҡытта ул бының кеше күңелен һатып алыуға үҙенең тәүге ынтылышы ғына икәнлеген, ошо йөҙөк арҡаһында иҫ китмәле ваҡиғалар буласағын һис тә башына килтермәй ине, әлбиттә.

Төлкөсура менән утын бысҡанда ла алтын йөҙөк, уны Миңлегөлгә бүләк итәсәген уйлап кинәнде. Төшкөләккә ашағандан аҙаҡ, тирләгән тәндәрен йыуырға һыу буйына төшкәйнеләр, шунда:

— Кисә һеҙгә барғайным, Миңлегөл менән ҡустың ғына, әсәйең өйҙә юҡ, — тип кисәге хәлде һөйләргә тотондо ул. — Башҡа ҡыҙҙарҙан бөртөк тә тартынып тормайым, шул һинең һеңлеңде күрһәм, йомшарам да төшәм. Көлмә әле... Ысын әйтәм бына, Төлкөсура. Ниңә икән?

— Әллә шул... Үҙемдең дә башым ҡата әле һуңғы ваҡытта...

Төлкөсура был һүҙҙе әйтеп ыҫҡындырыуына үкенә биреп ҡуйҙы, тик һуң ине инде.

— Әллә һинең дә берәйһенә күҙең төштөмө? — Уйылдандың күҙҙәре ҡыҙыҡһынып йылтыраны.

— Юҡ та... — Ниндәйҙер ҡыҙҙы бер күреп, иҫәр кешеләй, шуның менән һаташып йөрөүен Төлкөсураның һис тә һөйләргә иҫәбе юҡ ине. Шуға күрә: — Бына һин, исмаһам... — тип көлөп ебәрҙе, Уйылдандың яурынына шапылдата һуғып алды.

— Ауыҙыңды йырма әле, мин һине дуҫ күреп һөйләйем... Ныҡлап ғашиҡ булдым мин уға, биллаһи!

— Дә-ә, егет, эштәр ҡатмарлы һинең.

— Ниңә улай тиһең? Миңлегөлдөң йөрөгән егете юҡтыр ҙа инде?

— Унан әйтмәйем дә. Мөхәббәтте бик ҡатмарлы нәмә, тиҙәр бит. — Шулай тине лә Төлкөсура Уйылданды ҡосаҡлап алды, шарҡылдап көлөп ебәрҙе. — Ну, кейәү булһаң, бейетер инем мин һине!..

Уйылданда көлкө ҡайғыһы юҡ ине.

— Бөтәһенә лә риза, дуҫ, тик ҡулыңдан килгәнсе ярҙам ғына ит. — Шул саҡ уның башына дыуамал бер уй килде, эргәһендә ятҡан бишмәт кеҫәһенән әлеге ҡулъяулығын килтереп сығарҙы ла уның осона төйөлгән ике алтын аҡсаны алды. — Мә, Төлкөсура, йом усыңа, мәңгелек дуҫлыҡ өсөн!

Төлкөсура усында ялтырап ятҡан алтын аҡсаларға аптырап, өндәшмәй ҡарап ултырҙы.

— Ни эшләтәйем икән мин уларҙы?

Хәҙер инде Уйылдан шарҡылдап көлдө.

— Алтынды ни эшләтә тиме ни кеше? Байлыҡ бит ул!

Төлкөсураның сырайына уйсанлыҡ югерҙе, аҡсаларҙы бер усынан икенсеһенә шыуҙырып төшөрөп, һәлмәкләгән самалағандай, һелкеткеләп ҡараны. Шунан асыуланмай, ипләп кенә әйтте:

— Әгәр ысын дуҫ икәнһең, һин уны алтынға алмаштырма, Уйылдан. Һеңлемде лә алдан уҡ улай һатыулашҡым килмәй. Мә...

Уйылдандың күҙе тәүҙә түбәһенә менде, шунан ҡапыл бөршәйеп төштө. Төлкөсуранан һис тә былдай һүҙ көтмәгәйне ул.

— Ҡурҡма, әгәр үҙе, атайымдар риза икән, Миңлегөлдөң һиңә барыуына риза мин.

— Ысынлап әйтәһеңме?! — Уйылдандың ҡиәфәтенә йән керҙе, ырғып торҙо ла аҡсаларын көҙгө буръяҡ һыуға бырағтырҙы. — Миңә лә кәрәге юҡ уларҙың! Һине мин дуҫ күреп кенә... Миңә Миңлегөлдән башҡа һис ни кәрәкмәй был донъяла!

— Шулай ҙа дыуамал кеше һин, Уйылдан! Әйҙә, киттек...

Уйылдан кискә табан ҡайтып киткәс, Төлкөсура атаһына:

— Һәйбәт егет ул, — тине.

Торомтай, уның был һүҙен ишетмәгәндәй, яуап бирмәй йөрөнө, эш менән байтаҡ булашып туҡтағас ҡына әйтте:

— Әй улым, улым, йәшһең шул әле, ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлап бөтмәйһең. Ҡотлоғужа ла ана урамда бергә уйнап үҫкән саҡта шулай харап һәйбәт һымаҡ ине. Донъя көтә башлап, байлыҡтың тәмен татығайны, өҫтәүенә, старшина ла булып алғас, йәш ваҡыттағы дуҫтарына әйләнеп тә ҡарамай. Беләһең бит, анау Харисте, исправник ҡатнашҡан сходта үҙен яманлап һөйләгән өсөн, өйөмә урт һалырға килде тигән нахаҡ бәлә тағып, тәким Себер ебәртте. Йыртҡыс балаһы тәү тапҡыр тере малды тотоп ашағас ҡына ысын йыртҡысҡа әйләнә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Уйылданды ла күрерһең әле бына... Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай, ти... Ярар, улым, байҙың эше фарман менән, ярлы эше — дарман менән тигәндәй, тағы ҡуҙғалып ҡарайыҡ әле.

Нисек тә донъя көтөү ярауын күргән иҫке әҙәм балаһы тағы эшкә тотондо.

* *
*

Григорийҙең бер сәйер ғәҙәте бар: ғүмере баҡый кешегә эшләне бит инде, хатта уның ошо балагандан башҡа йәшәр төйәге лә булманы. Белореттә лә гел ҡаҙна барағында торҙо. Әгәр эшләй башлағаны бирле түккән көстәренең бер өлөшө генә байлыҡ булып үҙенә кире ҡайтһа ла, ул күптән әҙәм рәтле йәшәр ине. Ерҙә йәшәргә тулы хоҡуғың булмағас, ҡулың һөнәр белеү менәнме ни ул... Йыш ҡына шулай үкенһә лә, эшкә тотондомо, бөтә донъяһын онота ул, яһаған нәмәһенә бөтә йөрәген һала; эшләгәне эш булманымы — үҙен-үҙе өҙгөләп ташлар сиккә етә, уйлағанынса һәйбәт килеп сыҡтымы — ҡыуанып бөтә алмай. Донъялағы берҙән-бер ҡыуанысы ла ошо шул.

Уйылдандың алтын аҡсаһынан йөҙөк һуғыу эшенә иһә ул айырыуса ҙур ихласлыҡ менән тотондо. Шулай итмәй, бәлки бына ошо алтын йөҙөк быға ҡәҙәр ул эшләгән әйберҙәр араһында иң хозуры, оҙон ғүмерлеһе, кемгәлер ҙур шатлыҡ килтерәсәк нәмә булыр. Ул тәүҙә алтын аҡсаны һаҡ ҡына һуҡҡылап, ҡатылығын самалап

ҡараны. Ҡаты тойола ҡәһәрең! Шунан ипләп кенә аҡсаның ситен әйләндереп-әйләндереп яҫмаҡлап сүкергә тотондо. Әкрен барҙы эш, шулай ҙа төш ауыуға ул аҡсаның ситтәрен байтаҡ яҫмаҡлатты. Тик бына Уйылдандан йөҙөктө ҡайһы дәүмәлерәк итергә кәрәклеген һорап ҡалмаған. Уйланы ла, моғайын, үҙенә түгелдер, берәй ҡыҙға бирергәлер, юғиһә ул тиклем атаҡлап йөрөмәҫ ине, тип, бәләкәсерәк итергә булды. Көмөш йөҙөктө ул көнөнә биш-алтыны һуға ала, ә бөгөн, көн буйы туҡтауһыҙ эшләһә лә, алтын аҡсаның эсен эҙерләтеп кенә көскә тишеп, саҡ йөҙөк рәүешенә кертеп ҡуйҙы. Әле уны йоморо тимергә кейҙереп тағы байтаҡ сүкейһе бар. Етмәһә, уртаһынан тишеп алғанын ҡаш итеп ҡуй, тине бит әле бай малайы. Уныһын ҡайһылай итеп рәтләр?

Төшөндә лә ошо йөҙөк менән һаташты Григорий. Бына ул йөҙөктө һуғып бөткән дә, имеш, усына һалып, һоҡланып ҡарай .Шундай шәп килеп сыҡҡан ул: түп-түңәрәк, өҫтө бүртә биреберәк тора, үҙенән күҙ сағылдырғыс саҡҡылар сәселә. Ҡашы һуң, ҡашы ниндәйерәк! Әллә гәүһәр, әллә яҡут; күҙ сағылдырып, йылҡылдап, баҙлап яна! Шул саҡ әллә ҡайҙан ғүмер буйы һөйгән, ләкин үҙенә насип булмаған Настяһе эргәһенә килде. Настяһе, уның усында ятҡан йөҙөктө күргәс, шул тиклем ҡыуанды. «Һиңә ул, Настя, — тине Григорий, — мин уны һөргөндә саҡта егерме йыл буйы яһаным». Настя сәпәкә итергә, һикергеләргә тотондо: «Миңә йөҙөк яһаған! Миңә йөҙөк яһаған! Уй, Гришаҡайым, матурлыҡайҙары!» «Мин уны егерме йыл буйы яһаным», — тип ҡабатлай Григорий. Йөҙөктө Настянең бармағына кейҙерергә ынтылайым тигәйне, ҡулын күтәрә алмай ҙа ҡуя. Бәй, уның усында йөҙөк түгел, — тәгәрмәс бит. Ауыр тәгәрмәс ҡулын шул тиклем ныҡ баҫҡан, ҡыбырҙата ла алмай... Эргәһендә Настя түгел, туҫтаҡтай һыңар күҙле, кәкере ҡойроҡло шайтан малайы таҡмаҡлап һикереп йөрөй: «Вәт-вәт-вәт инде... Ҡулын ҡыҫтырҙым инде...» Григорий уға һелтәнәйем тип йән асыуына көсәнгәйне, уянып китте.

Уфылданы, һүгенде; ҡыбырҙамай тәпәш балаганының түбәһенә төбәлеп ятты. Тороп тышҡа сыҡты — яҡтырып килә. Әле генә күргән төштән аҙаҡ айныу өсөн, йылға ярына барып, ялтыр башын, битен йыуҙы. «Йыңғыҙлыҡта йәшәп, аҡылымдан шашыуым бар. Өфө баяры килеп, шунда урынлашып китмәһәм, берәй алыҫтағыраҡ

заводҡа олағырға кәрәк... Настя, Настя... Кеше яҡҡан утҡа ҡыҙынып йөрөү ҙә ирлек түгел», — тигән уйҙар үтте уның башынан. Балаганына инеп, сепрәк киҫәгенә һөртөнгәс, баш аҫтына һалып яҡҡан алтын йөҙөктө алды ла тышҡа сыҡты. Иртәнге тынлыҡты Григорийҙең кескәй сүкеше сыңҡылдаған тауыш боҙҙо.

Йөҙөктө һуғып йоҡартҡас, ипләп кенә тышын шымартырға тотондо. Йөҙөк матурыраҡ төҫ алған, нығыраҡ йылтыраған һайын, уның күңеле яҡтыра барҙы. Тимәк, эше килеп сығасаҡ! Кемде ҡыуандырыр икән ошо йөҙөк? Кемгә әләкһә лә, ғүмеренә шатланып кейһен инде, икенсе быуындарға тапшырһын... Йоморо игәү менән эсен шымартҡас, эргәләрен тигеҙләргә тотондо.

Уйылдан килгәндә, ул йөҙөктөң ҡашын үҙенсә биҙәп ултыра ине. Ҡаштың уртаһына ҡояш һымаҡ дүңгәләк һыҙылған, унан тирә-яҡҡа нурҙар сәселә... Йөҙөк шул ҡәҙәр оҡшаны егеткә, ҡыуанысының сиге булманы.

— Онотмам, Гриша, берәй нәмәгә мохтажлығың төшһә, әйт, — тип йылмая-көлә, усындағы йөҙөктән күҙен айыра алмай китеп барҙы ул.

Ә Григорийҙе ниндәйҙер моңһоу тойғолар баҫты, күңелендә бушлыҡ хасил булды, эшкә артабан ҡулы күтәрелмәне. Әйтерһең, кемдер уның ғүмер буйы үҙе сүкегән бәхет ҡояшын тартып алды. Балаганына инде лә төш ауғансы ятты ул. «Әйе, бында боҫоп ятһам, бәхетемде бер кем дә килтереп тоттормаясаҡ миңә. Ни булһа ла, кешеләр араһына сығырға, улар менән бергәләшеп көрәшергә ине яңы тормош өсөн», — тигән һығымтаға килде ул.

...Уйылдан иһә был көндө аяғы ергә теймәй йөрөнө, әйтерһең, иң ҙур маҡсатына ирешкән. Уның ауыҙы йырылып, күҙе йылтаңлап йөрөгәнен абайлағас, әсәһе хатта:

— Һиңә ни булды бөгөн? Аһ-аһ, иҫәр кеше кеүек ни, — тип аптыраны.

— Бер ҡыҙыҡ иҫкә төштө, әсәй.

— Китсе, малай-шалай кеүек...

Шулай итеп көн үткәргәйне Уйылдан, кис булғас: «Йөҙөктө нисек бирергә һуң?» — тигән һорау килеп баҫты. Ҡыуанысынан был турала уйларға бөтөнләй онотҡан икән дәбаһа. Өйҙәренә барһаң, әсәһе гел өйҙән сығып китәме. Кеше аша эшләй торған нәмә түгел. Унан ары үҙен күреп, бер-ике һүҙ әйтергә лә кәрәк бит әле.

Ниндәй әмәлен табырға икән? Ҡараңғы төшкәнсе, ул урамдан үтеп-һүтеп йөрөнө, Миңлегөл берәй ергә барырға сыҡмаҫмы, тип өмөтләнде. Ҡараңғы төшкәс, бесәй кеүек кенә атлап, уларҙың тәҙрә төбөнә барҙы. Ләкин ҡарындыҡ тәҙрәнән ни күрәһең? Шулай ҙа эстә көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеүҙәренән Миңлегөлдөң яңғыҙ түгел икәнен, әсәһенең өйҙәлеген белде һәм күңелһеҙләнеберәк ҡайтып китте.

Иртәгеһенә ҡыҙҙың иртүк, көйәнтәһенә элгән күнәктәрен бәүелдереп, һыуға китеп барғанын күргәс, һис ни уйлап тормаҫтан, кәртә арттарына сыҡты ла һыуалғысҡа йүгерҙе. Миңлегөл тыҡрыҡтан килеп сыҡҡанда, ул йылғала бите́н йыуған кеше булып таш баҫмала ултыра ине инде. Ҡыҙ, уны күргәс, саҡ ҡына туҡтап торҙо, шунан тағы алға ҡуҙғалды. Бына Уйылдан артына боролдо, уны күрҙе, ҡулындағы һыуын һелккеләй-һелккеләй, килеп еткәнен көтөп торҙо.

— Шәпме, Уйылдан ағай... — Миңлегөл яулыҡ осо менән битен ҡаушырыбыраҡ эргәһенән үтеп китмәксе булғайны, Уйылдан һаҡ ҡына уның көйәнтәһенә ҡағылды.

— Миңлегөл!..

— Әү һуң?

— Һине бик күргем килде, Миңлегөл!..

— Күр һуң... Бына бит ҡаршыңда баҫып торам.

Ҡыҙ күбәләк ҡанаттарындай керпеген бер һирпеп алғайны, Уйылдандың йөрәге терт итеп ҡалды.

— Миңлегөл... Мин һине яратам, Миңлегөл!..

Ҡыҙ өндәшмәне, башын ныҡыраҡ эйә төштө.

— Көйәнтәмде ебәрсе, Уйылдан ағай...

Уйылдан бишмәт кеҫәһенән алтын йөҙөктө алды.

— Бына һиңә минең бүләгем, Миңлегөл!..

Ҡыҙ аптырабыраҡ торған арала, егет уның көйәнтәлә ятҡан ҡулын ҡапыл ғына ҡалҡыта бирҙе лә урта бармағына йөҙөктө кейҙереп тә ҡуйҙы.

— Таман, һиңә тап-таман!

Миңлегөл иртәнге ҡояшҡа йылҡылдаған затлы йөҙөккә ҡарап торған арала ул:

— Бөгөн ошо тыҡрыҡҡа сыҡ. Мин һине көтәрмен, — тине лә, кире яуап алыуҙан ҡурҡҡан һымаҡ, йүгерә-атлай китеп барҙы.

Ул күҙҙән юғалғас, Миңлегөл яр буйына күнәктәрен ултыртты, йөҙөктө бармағынан алып, ҡарап торҙо. «Ма-

тур. Алтынмы икән әллә? Шулай уҡ ысынлап уның тирәһендә ураламы икән ни Уйылдан? Эй хоҙайым, йөҙөгөн кейҙереп китте лә, ҡайҙа ҡуяйым икән? Әсәйемә лә, бүтән кешегә лә күрһәтеп булмай бит инде уны».

Ун өс-ун дүрт йәшлек сағында Миңлегөл ағаһы эргәһенә килгеләп йөрөгән Уйылдандың яңы кейемдәренә, бигерәк тә түбәһенә ҡара буҫтау ҡуйып тегелгән ҡырма бүркенә һоҡланып ҡарай ине. Шунан уның урамдан үткәнен күрһә лә, йөрәге елкенеп ҡуя торған булып китте. Бына хәҙер үҫә төшкәс, был тойғоһо һүрелгәйне, хатта уға ниңәлер үҙҙәре шикелле үк ярлы егеттәр яҡынырак һымаҡ, Уйылдандан иһә ниндәйҙер һалҡынлыҡ һирпелеп торғандай, араларында ниндәйҙер бушлыҡ ятҡанын һиҙгән кеүек. Хәҙер килеп иһә йөҙөк кейҙереп китте... Нисек була әле был?..

Һыуҙан ҡайтҡас, ул усына йомған йөҙөктө әсәһенә һиҙҙермәй генә ҡалын таҡтанан эшләнгән һандыҡтың бер мөйөшөндә ятҡан үҙ әйберҙәре араһына йәшерҙе, ләкин йөҙөк һис тә иҫенән сыҡмай йөҙәтте. Әсәһе күршеләргә киткән арала, уны һандыҡтан ҡабат алып, төрлө бармағына кейеп ҡараны. Уйылдан «таман» тиһә лә, ҙурыраҡ ине йөҙөк, бер бармағына ла ярамай. Шулай ҙа матур, ниндәй ялтырап тора, алтындыр ул! Кейеп сығып, ҡыҙҙарға күрһәтһә, күҙҙәре дүрт булыр ине әхирәттәренең. Юҡ инде, былай ярамай. Туҡта, Уйылдан кис тыҡрыҡҡа саҡырҙы бит. Ни эшләргә икән? Эй илаһым...

Атаһы менән ағаһы күмер тейәп урмандан ҡайтып төшкәс, уларға күмерҙе түбәлек аҫтына бушатышып йөрөп, был хаҡта онотоп торғайны, кискә табан Уйылдандың һүҙҙәре тағы иҫенә төштө. Уйланды-уйланды ла Миңлегөл, егеттәр саҡырған бер ергә югерә башлаһаң, тип, тик ун алты йәшлек ҡыҙҙарҙа ғына була торған тиҫкәрелек менән өйөнән сығып йөрөмәне. Ул да һылыу ҡыҙҙарҙа була торған тәкәбберлектән мәхрүм түгел ине.

## IV

Ҡала урамдары лыстырҙап ятҡан бысраҡ. Кешеләр тар тротуарҙарҙан лас-лос баҫып, баштарын түбән эйеп атлай. Йәй көндәре гөжләп торған ҡала ҡотһоҙланып ҡалған төҫлө. Ҡапҡалары нығыт бикләнгән ихаталарҙа

эстәре үткәшкән һыйырҙар мөңрәй, урам яҡ тәҙрәләр ҡапҡас менән ябылды.

Был күңелгә ятышһыҙ күренештәргә Ҡотлоғужа әллә ни иғтибар итмәне. Үткән кис юлда ҡунған дуҫында апаруҡ һыйланғайны, башы сәңкеберәк тора. Ул Лапшиндең кешеләре менән иртәгә өйәҙ земствоһында осрашырға һүҙ ҡуйышты ла Стәрлеләге иң һәйбәт ҡунаҡханаға юл тотто. Уны бында ихаталағы дворниктән башлап бөтәһе лә белә. Был юлы ла ябыҡ сырайлы, һепертке тотҡан ир уны күреү менән эргәһенә югереп килде, эйеләп-бөгөлөп иҫәнләште, бер нисә тин өмөт итеп, уның атын туғарышырға тотондо. Дворниккә үҙе көткәндән дә күберәк эләкте. Ҡотлоғужа уға ун тин сығарып бирҙе лә:

— Һыуынһынҡырағас, атҡа бесән һал, кискә торо эсереп, һолоға ҡушырһың, — тип үҙе ҡунаҡханаға атланы.

Хужа уны йылмайып-көлөп ҡаршыланы, көтөп торған кеүек, етәкләп тигәндәй аулаҡ бүлмәгә тиклем оҙата барҙы.

— Бына үҙегеҙҙең ятаҡан бүлмәгеҙ, Ҡотлоғужа әфәнде. Ни кәрәк бөтәһен дә эшләрбеҙ, — тип күҙен бөтәштереп көлдө.

— Хәҙергә бер шешәнде килтер, ҡалғанын аҙаҡ әйтермен, — тип сисенергә кереште Ҡотлоғужа.

Битен-ҡулын йыуып, стаканды тултыра яҙып араҡы эскәс, йылынып, күңеле күтәрелеп китте, башы сәңкеүе лә бөттө. Бына ул, ирәүәнләп, йомшаҡ креслола ултыра. Бүлмә иркен, ҙур көҙгөһө, туҡмаҡлы сәғәтенә хәтлем бар.

Ҡалаға килгәндә бер рәхәтләнеп йөрөп ҡайтырға күнеккән Ҡотлоғужа. Көн һайын әллә ни тиклем мәшәҡәттәр табылып торған өй тормошонан аҙаҡ, ошонда килдеме, үҙен ожмахта һымаҡ һиҙә. Әйтерһең, донъя йөгө бөтөнләйгә елкәһенән төшә, бер кемгә, һис нигә бәйһеҙ кешегә әүерелә, хатта йәшәреп киткәндәй була.

Ауылдағы ҡайһы бер хәлле кешеләр кеүек, еңел генә уйлап, йәш кәләштәр һайлап маташманы ул. Донъяны нығ тотҡан, ҡаты ҡуллы бисәһе эргәһенә бер ҡатын да һыймаҫын, өйҙә ыҙғыш ҡубып, тормош йәме китәсәген белә Ҡотлоғужа. Унан килеп, нимәгә әле ул йәш бисә? Низам мулла ана, нәфсеһен тыя алмай, ҡыланды ла хәҙер шул бисәләре менән эт күрмәгәнде күрә — көн дә ыҙғыш. Ҡотлоғужа иһә йәшерәк бисәләр менән кети-

мети уйнағыһы килдеме, йомош табып, Стәрлегә сыға ла китә. Бында Низам мулланың иң йәш ҡатынынан да биш артыҡтары бар.

Аҙыраҡ хәл йыйғас, ул, кеҫәһендәге аҡсаһын иҫке сепрәккә төрөп, юл тоҡсайының төбөнә — ваҡ-төйәк араһына ҡуйҙы. Йылмаяҡтарға ышаныс юҡ, иҫереберәк китһәң, ыштанһыҙ ҡалдырыуҙары бар. Шунан ҡунаҡхана хужаһын саҡырып индерҙе, уға күстәнәскә ҡаҡлаған ҡаҙы тотторҙо ла араҡы, һәр төрлөһөнән ашанты индерергә ҡушты һәм:

— Аръяғын үҙең беләһең инде, тик, ҡара уны, ҡолон кеүек уйнаҡлап торғаны булһын, — тип күҙ ҡыҫты.

Эңер төшөүгә, бүлмәһенә нескә билле, оҙон буйлы, ҡалҡыу түшле йәш кенә бер ханым килеп ингәс, күҙҙәре уттай янды Ҡотлоғужаның, бөтә донъяһын онотто, уның тирәһендә орсоҡ кеүек әйләнде.

Иртәнсәк торғас, нәҙекәй билле ханыма өс тәңкәне тотторҙо, түңәрәк һаҡалы менән битен ҡытыҡлап, ирендәрен супылдатып үпте лә:

— Мин бында тағы ике көн булам әле, кил, аҫыл ҡош, — тип оҙатып ҡалды.

Өйәҙ земствоһына барып ингәндә, уның сырайында бындай тыйнаҡһыҙлыҡтың остоғо ла юҡ ине инде. Йәшел тышлы, эсе һырыулы, яғаһына ҡама тиреһе югертелгән сапанының төймәләрен ыҫҡындырып ебәреп, ҡап ҡорһағын тағы ла кәпәйтә төшөберәк хәтәр атлап, мировой посредник бүлмәһенә барып инде. Бында ултырған кеше күптән таныш ине, шуға күрә Лапшиндекеләрҙән алдараҡ килеп, уның менән кәңәш-төңәш итергә ашыҡты. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас:

— Күстәнәскә бал килтергәйнем үҙеңә, һерәңләтеп, бында уҡ апкилеп йөрөмәнем, ҡунаҡхананан инеп алырһың, — тине, шунан иплән кенә хәлде төшөндөрөп бирҙе.

— Ҡабаланыңҡырағанһығыҙ, осһоҙ һатҡанһығыҙ, — тигән һүҙҙе ишеткәс, Ҡотлоғужа:

— Яңы земство законы сыға, ергә һалым арта шикелле бит? — тине, һораулы ҡарап.

— Ул закон беҙҙең ҡулға килеп тә керҙе инде, — тине мировой. — Ләкин унда һалымды бик аҙ ғына арттырыу ҡаралған. Юҡҡа ҡуррҡанһығыҙ, хәҙер бит ерҙе һатыу хаҡы нык күтәрелде.

Лапшин кешеләренең үҙен һемәйткәнен тик шунда ғына аңлай башланы Ҡотлоғужа.

— Ни кәңәш бирәһең, дуҫ кеше? Улай булғас, ни эшләп ҡарарға һуң беҙгә?

Мировой ялтыр башын һыпырғылап, уйланып ултырҙы, бер әҙәмде саҡыртып индереп, Ҡирәй волосенең землемерҙәр төҙөгән картаһын кертергә ҡушты. Уны Ҡотлоғужа биргән купчий ҡағыҙы менән сағыштырып ҡарағас, хәҙер эштең ҡатмарлы икәнен белдереп, башын сайҡаны.

— Күреүемсә, һеҙ ул промышленниктең эсен тишкәнһегеҙ.

— Нигә?

— Бына был карта буйынса һеҙ һатҡан биләмә кәмендә ҡырҡ мең дисәтинә булырға тейеш.

— Ҡырҡ мең?!.

Ҡотлоғужаның күҙе шарҙай аҡайҙы.

— Эйе, бәлки, артығыраҡтыр ҙа әле.

— Ай эттә-ә-ә... Үҙем сыҡмағайным шул урманға. Ни эшләп ҡарайһы икән?

Мировой башын тызығыланы ла эйәген усланы.

— Юл берәү генә: хәҙер һеҙ, купчийгә ҡул ҡуйылғас, уны һатыуҙан баш тартһағыҙ, ун ике мең неустойканы түләргә тура киләсәк. Шуға күрә һатылған ерҙең күләмен тикшереү өсөн землемер ебәреүҙәрен һорап, крәҫтиән эштәре буйынса губерна присутствиеһенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ул саҡта инде, минең әйткәндәр дөрәҫләнһә — унын дөрөҫ икәненә шигем юҡ — һеҙ Лапшиндән утыҙ мең дисәтинә самаһы артыҡ ер өсөн дисәтинәһенә етмешәр тиндән йәмғеһе егерме бер мең һум неустойка түләтәһегеҙ.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Ҡотлоғужаның ҡыҙыҡһыныуы арта төштө, аяғүрә үк тороп, мировойҙың өҫтәленә эйелде.

— Был эште алып барып сығарыу өсөн ни эшләргә кәрәк һуң?

Унын күҙҙәренән, ярҙам итһәң, буш ҡалмаҫһың, тигән мәғәнәне аңлауы ҡыйын түгел ине. «Неустойка эләктерһә, үҙенең кеҫәһенә аҡса керәсәкте тиҙ һиҙҙе, ҡоҙғон, — тип уйланы мировой. — Ләкин был бәләле эшкә бәйләнергә минең баш ике түгел. Ул Лапшин тигәндең кем икәнен ишеттек инде. Петербургка етер, әммә үҙ һүҙен һүҙ итер».

— Ҡотлоғужа әфәнде, тураһын ғына әйт әле. һеҙгә дөрөҫләк кәрәкме әллә артыҡ мәшәҡәтһеҙ генә үҙ кеҫәгеҙгә аҡса инеп ятһа, шул етәме?

Ҡотлоғужа һағайҙы:

— Был ни тигән һүҙең була тағы?

— Әле мин әйткәнсә, неустойка юллаһағыҙ, эштең ике осло килеп сығыуы бар. Әгәр ул Лапшин файҙаһына бөтһә, землемер барған өсөн һәм башҡа ғәйри сығымдарҙы бушҡа түләйһегеҙ булып сыға.

— Башымды ҡайнатма, дуҫ кеше, тураһын әйт.

— Тауыш-тынһыҙ ғына үҙ кеҫәңә аҡса инеүен теләһән...

Ҡотлоғужа уны бүлдерҙе.

— Икәүебеҙҙең кеҫәгә, тиң!

— Ярар, шулай ҙа булһын... Мин ер һатыу тураһындағы танытманы бирмәй торам. Лапшиндең үҙен саҡыртып алабыҙ ҙа берәй мең һумын сығарып һалдыртабыҙ. Минеңсә, бына ошо юлдан да шәбе юҡ. Ниңә тикшереү саҡыртырға? Урман йәлме ни?

— Хоҙай үҫтергән урманды инде... Ярар, мин хәҙер ни эшләргә тейеш?

— Лапшин кешеләренә минең янда булғаныңды һиҙҙермә. Уларға үҙем һатылған ерҙең күләме картала ғына тура килмәүен, был кейө танытма биреп булмауын аңғартырмын. Хужаның үҙе кәрәк, тиермен. Арьяғына һин ҡыҫылма, үҙем яйлармын.

Ҡаргов менән Роман Лапшинде Ҡотлоғужа земство бинаһының иркен коридорында ҡаршыланы. Быға хәтлем бер ни булмағандай, мировой посредник эргәһенә ингәс тә уның менән күрешеп иҫәнләште, хәл-әхүәл һорашты. Мировой ҙа ҡағыҙҙарҙы бик ентекләп, оҙаҡ уҡ тикшереп ҡыланды, аҙаҡтан беҙгә мәғлүм үҙ хөкөмөн сығарҙы.

Ҡаргов тәүҙә бик йомшаҡ телләнеп, унан уҫалланып һөйләшеп ҡарағайны ла, мировой шырт та итмәне. Купчий ҡағыҙҙарын өҫтәл тартмаһына һалды һәм:

— Мин закон һағында торам, Ҡаргов әфәнде. Йә Артем Дмитриевич үҙе килеп һөйләшһен, йә, яңынан тикшереү һорап, губернаға яҙам. Аңлашыламы? — тип ҡырт киҫте.

Урман һатыулашып күҙе сыҡҡан Ҡаргов һатып алынған ерҙең ысынлап та бик күпкә артыҡ икәнлеген самалағайны. Бының өсөн Лапшиндән өҫтәмә рәүештә тама-

сағын да белә ине. Был мировойы ҡайҙан килеп картаһын тикшереп ултыра һуң әле? Әгәр Артем Дмитриевичкә утыҙ мең дисәтинәгә неустойка түләргә ҡушһалар, артабан Ҡарговҡа кем ышанып ошондай эштәрҙе тапшырһын? Уғата шымарған димсе-тамаҙа тәүге тапҡыр ошондай ауыр хәлдә ҡалды һәм:

— Мин бында эште рәтләү яғын ҡарай торам. Артем Дмитриевич күберәк итеп аҡса алырға онотмаһын, — тип Романды Өфөгә саптырҙы. Ҡотлоғужа иһә:

— Ярар, ни эшләйһең бит, хужаның килгәнен көтәйек, — тине, артыҡ төҫ бирмәйенсә.

Ҡотлоғужа кеҫәгә юҡтан ғына биш йөҙ һум килеп инһә, эсте тишмәҫ ине тигән уй менән урамға сыҡты, бер-ике магазингә һуғылды ла, бисәһенә бер шәльяулыҡ алғас, ҡунаҡханаға юл тотто. Теге ханымды саҡыртып алып, тағы йәннәттә йөҙә башларға ҡабалана ине ул.

Ҡаргов иһә төштән һуң тағы мировой эргәһенә инде. «Эште ғауғаһыҙ, тикшертеүһеҙ генә көйләһәгеҙ, Артем Дмитриевич буш итмәҫ, ундай саҡта егет кеше ул», — тине. Мировой:

— Һин уға бына ошо аҡыллы фекеренде аңғарт, — тине, хәйләкәр йылмайып. — Минең өсөн ул урманды кем ҡырҡһа ла барыбер.

Ошонан аҙаҡ Ҡарговтың эсенә лә йылы югерҙе.

Шулай итеп, Ҡотлоғужа өс көн буйы ҡунаҡхананан сыҡмай típтерҙе; Ҡаргов Осипов өйөндә әкиәт һатты, ә мировой ҡулға керергә торған аҡсаны ҡайһылай итеп мулыраҡ сумырыу тураһында баш ватып ыуаланды. Өсөнсө көнөнә кис ниндәйҙер рустың уға килеүен әйткәс, һөйәркәһе менән ашап-эсеп ултырған Ҡотлоғужа, шешмәкләнгән күҙҙәрен ыуалай-ыуалай, беренсе ҡатҡа төшөп, ҡунаҡхана хужаһының үҙ бүлмәһенә инде. Унда бик шәп кейенгән, лөпөш, йыуан кәүҙәле, май бөргән күҙҙәре уйнаҡлап торған кешенең ҡатланып-ҡарталанған елкәһендәге тирҙе ҙур ҡулъяулыҡ менән тырышыптырышып һөртөүен күрҙе.

— Ә-һә, ошомо ни инде киләсәктә минең иң яҡын дуҫ буласаҡ кеше! — тип, ауыр кәүҙәһен еңел генә күтәреп, Ҡотлоғужаға ҡаршы атланы ул. — Артем Дмитриевич Лапшин. Ә һеҙ — Ҡотлоғужа әфәнде. Шулаймы?

— Тап үҙе, Артем Дмитриевич. Нисек килеп еттегеҙ?

— Башыңа төшкәс, киләһең инде. Әллә ниҙәр бутап ятаһығыҙ икән дәбаһа.

— Шулайырак килеп сыкты. — Котлоғужа, кыҙмаса баштан булһа ла, был әҙәм алдында йомшарып төшөргә ярамай, тигән фекергә килде. — Закон кушкас, ни эшләйһең инде.

— Һәй, закон, имеш, — Лапшин күҙен бөтәштереп көлдө. — Был донъяның закондары күп инде ул. Улар буйынса ғына йәшәһәң, бер эшкә лә тотонорға ярамай. Бына әле минең һиңә бер кәңәшем бар. Кабат тикшереү-фәлән куҙғатып тормайык. Миңә унда бөгөндән кешеләр ебәреп, эш башларға кәрәк. Икенсенән, мин үҙеңде лә буш итмәм, теге мировойға ла төртәрбөҙ һәм эш шуның менән вәссәләм! Беҙ бит һинең менән ал да гөл йәшәргә тейешле кешеләр.

Котлоғужа эштең үҙе уйлағанса барып сығасағын төшөнгәс, коро ғына һөйләште.

— Артем Дмитриевич, эштең һәйбәт барып сығасағына ла, киләсәктә татыу йәшәребеҙгә лә шигем юк. Әммә урман мәсьәләһен иртәгә мировойҙың үҙенә барып, шунда хәл итәйек.

— Мин риза, Котлоғужа әфәнде... Хәҙер әллә минең бындағы бер дуҫка барып ултырайыкмы? Өйәҙ ғәскәрҙәренең башлығы — Осипов — минең йәшлек дуҫым.

Осипов тураһында ишеткәне бар Котлоғужаның. Өйәҙҙәге иң абруйлы кешеләрҙең береһе. Барып, танышканда ла зыян итмәҫ ине. Тик үҙ бүлмәһендәге һөйәркәһен ташлап киткеһе килмәне, икенсенән, унда эсеп, йомшарып китеп, йә эште боҙоп куйыр.

— Һеҙ мине ғәфү итегеҙ инде, Артем Дмитриевич, сырхабырак торам әле, — тип алдашты ул, билен тотоп, сырайын һытып. — Саҡырыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт, барып йөрөй алмам. Бергәләп ултырыр саҡтар булыр әле.

— Ярар, Котлоғужа әфәнде, тик әйткән һүҙегеҙҙә тороғоҙ, — Лапшин туйтаңлап ишеккә атланы. Тышта уны кырандаста Каргов көтөп ултыра ине.

Иртәгеһенә иртүк Лапшин килеп ингәс, мировой уны хөрмәтләп каршыланы, йомшак креслонан урын күрһәтте һәм эштең нимәлә торғанын төшөндөрөп бирҙе.

— Әгәр утыҙ мең дисәтинәгә неустойка түләгегеҙ килмәһә, ғауғаны ҙурға ебәрмәй генә йомоп калыу яғын карағыҙ, Артем Дмитриевич. Урман эшендә мин һеҙҙең уңыштар ҙур булыуын беләм һәм был кәңәштең бик

урынлы икәнен аңлайһығыҙҙыр тип ышанам, — мировой, «урман бүреһенә» бик мөләйем ҡараш ташлап, һүҙен шулай осланы.

— Урмандың шул тиклем артыҡ икәненә ниндәй гарантия бар?

— Һатылған биләмәнең мин әйткәндән дә күберәк булыуы бик ихтимал. Унда йөҙ утыҙ йылдан бирле инде землемерҙәрҙең аяҡ баҫҡаны, таксация үткәрелгәне юҡ.

— Ҡупме һорайһың? — Лапшин- уға секерәйеп торған ҡыҫыҡ күҙҙәрен төбәне.

— Старшина меңде һорай.

— Үҙеңә?

— Уныһын үҙегеҙ ҡарағыҙ, Артем Дмитриевич. Мин хәҙер үк танытма яҙып бирергә әҙер.

Лапшин кеҫәһенә тығылды, аҡса сығарҙы ла уның алдына һалды.

— Өс йөҙ һум. Теге башҡорт килеп инмәҫ борон — тыҡ.

Лапшин коридорға сыҡты. Бер аҙҙан Ҡотлоғужаның урам ишегенән ингәнен күргәс, битен йәйрәтеп йылмайып, уға ҡаршы атланы.

— Мин һеҙҙе күптән көтәм, Ҡотлоғужа әфәнде. Ҡайҙа теге юнһеҙ мировойың, әйҙә алып ин.

Мировой эргәһендә һөйләшеү оҙонға һуҙылманы. Лапшин Ҡотлоғужаға һигеҙ йөҙ һумды һанап бирҙе. Мировой танытманы яҙып әҙерләгәйне инде. Уға өйәҙҙең крәҫтиән эштәре буйынса присутствиеһе председателенән үҙе ҡул ҡуйҙырып сыҡты ла Лапшингә тотторҙо.

— Ҡарағыҙ уны, — тип ике байға алмаш-тилмәш күҙ һалды ул, — әгәр бынан аҙаҡ тауыш күтәреп йөрөһәгеҙ, минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ. Мин бер һүҙҙе ике тәрлә һөйләргә яратмайым.

Хушлашып, ишеккә еткәс кенә, Ҡотлоғужа:

— Туҡта инде, минең бер йомош бар ине бит әле,— тигән булып, Лапшиндән айырылып ҡалды, еңел көрһөнөп, мировойҙың ҡаршыһына килеп ултырҙы.

— Бир ҡулыңды, егет кеше икәнһең, дуҫ. Тик ул урыҫ меңде үк ыҫҡындырманы бит әле.

— Ни эшләйһең, ағас тотҡан еренән һынмай бит... Ҡап урталай булмаһа ла, ярар, Ҡотлоғужа әфәнде, миңә өс йөҙөн бирһәгеҙ, ҡалғанының рәхәтен үҙегеҙ күрегеҙ.

Мировойҙың кеҫәһенә тағы өс йөҙ һум төшөп ятты.

Артем Дмитриевич Лапшин, Ҡаратауға тиҙҙән үҙе барып етәсәген әйтеп, Ҡотлоғужа менән хушлашты ла Өфөгә ҡабаланды.

Өс-дүрт көн буйы һөйәркәһе менән типтереүҙән әлһерәгән Ҡотлоғужаға Лапшиндең кесәһенән күскән биш йөҙ һум ҡеүәт өҫтәгәндәй тойолдо һәм ул, үҙенә үтә әйәләшкән һөйәркәһе тағы килеп етмәҫ элек тип, унан-бынан атын екте лә Ҡаратауға юл тотто.

Ҡаратауҙың иһә, үҙенең дә, урмандарының да аяуһыҙ йыртҡыс ҡапҡанына эләгеүен әле һаман һиҙмәйенсә, урман һатыуҙан өй башына тура киләсәк тәңкә ярымшар аҡсаны Ҡотлоғужаның ҡайтып таратыуын көтөп, һәүетемсә үҙ көнөн күреп ятҡан ере ине.

* *
*

Ҡотлоғужа, ҡайтып еткәнсе, өс-дүрт көн эсеүенән тамам айнығайны. Өйөнә инеү менән хәл-әхүәлде һорашты ла шундуҡ эшкә тотоноп китте. Писарь менән старостаны саҡыртып алды, уларға урман һатыуҙан килгән аҡсаны (бөтә аҡсаның дүрттән өс өлөшөн Лапшин ер һалымы өсөн банкыға керткәйне) ауылдағы тукһан ете өйгә тигеҙ итеп бүлергә лә халыҡҡа өләшергә ҡушты.

— Ҡарағыҙ уны, мутлашырға уйламағыҙ. Аҙаҡтан берәй тауыш-фәлән сыға ҡалһа, өҫтөгөҙҙән бер иле төшмәм, — тип киҫәтеп ҡуйырға ла онотманы.

Шунан үҙе ҡайтҡаны бирле ниҙер әйтергә ҡыймайынса ситләтеберәк уралған Уйылданға өндәште.

— Улым, кил әле. — Уйылдан эргәһенә килеп, түбән ҡарап торғас, һағайҙы. — Һин ниңә балтаң һыуға төшкән һымаҡ йөрөйһөң? Бер-бер хәл бармы әллә?

— Юҡ та...

— Әйтер һүҙең бармы?

— Атай... Ни... Миңә кәләш әйттерһәк, тигәйнем.

Ҡотлоғужа һуңғы ваҡытта был хаҡта үҙе лә уйлаштыра ине. Донъяһы ҙур, эшләр кешеһе аҙ. Ике оло ҡыҙы икенсе ауылдарҙа кейәүҙә, Уйылдандан һуң тыуған ике балаһы үлде. Ошо арҡала өй тирәһендәге күп эшкә кеше ҡушырға тура килә. Егәрле генә килен тура килһә, бисәһенә донъя көтөшөүҙә оло ярҙамсы булыр ине. Шулай ҙа Уйылдандың үҙе башлап был турала һүҙ ҡуҙға-

тырын көтмәй ине. Ошо сәбәпле улына ҡапыл ғына ни әйтергә белмәй ултырҙы.

— Һы... Кәләш әйттерәйек, тиһең инде. Бынауындай тығын саҡта ҡайҙан башыңа килде әле был уй?

— Тығын, тип... Уның ниmәһе бар?

— Һай улым, улым, оло мәшәҡәт ул килен әйттереү. Яусыларға, килешергә, туйын үткәрергә кәрәк... Был турала һүҙ ҡуҙғатыр йәшкә еткәс, йомшарып торма. Шартлатып һөйләш. Кем ҡыҙын әйттерергә самалайһың?

— Миңлегөлдө.

— Торомтай ҡыҙынмы?

— Эйе. Беҙ уның менән һөйләштек инде.

— Ай-бай, улым, һин улай эште өҙә һуғырға самалама әле, уйлашып ҡарайыҡ. Арыу ғына күренә лә ул ҡыҙ, йыбытҡы тип тә әйтеп булмай. Иллә-мәгәр атаәсәһе...

— Миңә уның ата-әсәһе кәрәкмәй!..

Улының үҙен бүлдереп, киҫә генә әйткән был һүҙҙәре Ҡотлоғужаның асыуын килтерҙе.

— Мин һиңә кәңәшемде әйтәйем тиһәм... Бар, улай бик шәп булғас, етәклә лә алып ҡайт! Кәрәкмәй, имеш! Һай-һай... Эш муйындан әле. Юкәләрҙе ташытып, кәбәнгә һалдыраһы бар. Көҙгө бысраҡҡа биш-алты кәбән бесәнде лә өй эргәһенә алдырырға кәрәк. Һата торған аттарҙы һайлап алып, Һамар барып әйләнергә иҫәп тотам. Ә һиңә — кәләш!.. — Ҡотлоғужа үтә ҡыҙыбыраҡ китеүен үҙе үк аңлап алды, аҙыраҡ һүҙһеҙ ултырғас, баҫалҡыраҡ тауыш менән өҫтәне: — Теләгең булғас, әйттерербеҙ инде. Ҡыҙҙар эт тубығынан. Ҡотлоғужа өйөнә килеүҙән бер кем дә баш тартмаҫ.

— Миңә Миңлегөлдән башҡа ҡыҙ кәрәкмәй.

Атаһы әҙерәк уны һынарға теләп ҡарап ултырғандан аҙаҡ:

— Үҙең былай ныҡыш икәнһең, — тип көлөп ебәргәс, Уйылдандың күңеленә еңел булып ҡалды. — Ярар, улым, эштәрҙе саҡ ҡына түңәрәкләй төшәйек әле.

* *
*

Ҡисә Миңлегөлдө тыҡрыҡ буйында көтә торғас, көтөк булып бөткәйне Уйылдан. Әллә нисәмә төрлө уйҙарға төштө. «Үҙе килмәнеме әллә әсәһе сығарманымы?» Ҡыҙҙың килеүенән өмөт өҙгәс, атаһы ҡайтҡас уҡ әйтеп,

яусы ебәрергә лә эште ҡыҫҡа тоторға тигән ҡарарға килде. Әле атаһы әллә ни тиклем эштәр һанап сыҡты. Ҡасан бөтә улар? Ҡар яуғансы көтөргә тура килерме икән ни? Унан тағы атаһы үҙә генә лә һөйләшмәне бит әле. Миңлегөлдө әйттереүгә әллә ни ҡаршы килгән һымаҡ та түгел, үҙе, ҡыҙҙар эт тубығынан ул, тип һөйләнә. Юҡ инде, Уйылданға Миңлегөлдән башҡаһы кәрәкмәй!

Миңлегөл иһә, атаһы ауырыҡһынып торғас, бөгөн иртүк тороп, ағаһы менән урманда ҡалған күмерҙе теййәп алып ҡайтырға киткәйне. Ағаһын шул тиклем ярата ул. Төлкөсура бит тиңдәштәре араһында буйы-һыны, төҫө-башы менән дә айырылып тора, уны ниңәлер иптәштәре лә бик ихтирам итә. Төлкөсура улар араһында — һайланмаған башлыҡ. Миңлегөл ағаһына эйәреп йөрөп үҫте, ҡыҙҙар менән бик үк аралашып барманы. Уның ҡырыҫыраҡ, малайҙар холоҡлораҡ булыуы ла ошонан киләлер инде.

Уйылдандың бер көн кис үҙҙәренә килеп ултырыуын да, йөҙөк биргәнен дә ағаһына һөйләргә уйлағайны ла, тыйылды. Был уның Төлкөсуранан йәшергән тәүге сере ине. Шулай ҙа улар араһында байтаҡ һөйләшеү булып алды.

— Анау Тәнзилә гел һине һораша ла йөрөй ул, ағай. Ишшеү, етмәһә, ағайыңдың әллә күҙе юҡ, үҙенә тилмереп ҡарап торғандарымды һис кенә лә күрмәй, ти.

— Эй, шул ыҡыйҙы... Яратмайым мин уны. — Төлкөсура һеңлеһенә шулай тип яуап бирҙе, ә үҙенең күҙ алдына тағы ла Стәрле ҡыҙы килеп баҫты ла көрһөнөп ҡуйҙы.

— Арыу ғына ҡыҙ ҙа инде.

— Бер ҡараһаң — арыу, икенсе ҡараһаң... Юҡ, әллә нисек ул. Мине димләгән һымаҡ киләһең. Үҙеңде ана Уйылдан һоратырға ҡыҙышып йөрөй әле.

— Һоратырға?

— Эйе, оҙаҡламай яусы ебәрәм, ти. — Төлкөсура һеңлеһенә көлөп ҡараны. — Ниңә, оҡшамаҫлыҡ егетме ни?

— Үҙең әйткән һымаҡ инде: бер ҡараһаң — арыу, икенсе ҡараһаң...

Улар икәүләшеп ҡысҡырып көлөп ебәрҙеләр.

Ҡискә табан ғына әйләнеп ҡайтып, күмер бушатып йөрөйҙәр ине, урамдан үтеп барған бер төркөм егеттәр

уларҙың ихатаһына боролоп инде. Әллә ни арала улар артынса кейенеп-яһанған ҡыҙҙар күренде. Егеттәр Төлкөсура менән Миңлегөлгә күмерҙе күнәктәргә тултырып, түбәлек аҫтына тиҙерәк бушатырға ярҙам итә башланы; ҡыҙҙар иһә бер урынға йыйылыштылар ҙа, улар яғына йыш ҡына күҙ ташлап, шырҡ-шырҡ көлөшә-көлөшә, һөйләшергә тотондолар.

— Шул тиклем егеттәр барҙа, ниңә эшләп йөрөйһөң, кил бында, — тине бер ҡыҙ Миңлегөлгә.

— Һәй, ул йыбытҡыларға ҡарап торһаң, төнгә тиклем бушатып бөтә алмаҫтар әле! — Миңлегөлдөң шулай тиеүе булды, ошоно ғына көткән кеүек, бик ихлас эшләшеп йөрөгән Уйылдан:

— Әһә, шулаймы әле! — тине лә күмергә буялған усы менән уның битен һыйпаны. Миңлегөл дә аптырап ҡала торғандарҙан түгел ине, ҡапыл әйләнеп, егеттең биттәренән ике усы менән бер юлы һыпырҙы. Миңлегөлдөң ҡулы ныҡ ҡоромло ине, икеләтә үс алды: Уйылдандың биттәре шундай ныҡ ҡарайҙы, тештәре менән күҙҙәре генә йылтырап тора. Был, әйтерһең, дөйөм шаушыу башланыуға сигнал булды: егеттәр, ҡоромланған устарын йәйеп, шарҡылдап көлөшөргә тотонған ҡыҙҙар өҫтөнә ташланды. Китте ҡором менән буяш! Ҡыҙҙар ҙа, күмер саңы ултырған арба төбөндәге ҡабыҡҡа устарын буяп, егеттәрҙең битенә ынтылды. Сар-сор килеп ҡысҡырыу, геү-шау көлөшөүҙе ишетеп, хатта өйҙән Торомтай менән Ғәрифә соланға сыҡты. Ғәрифәнең:

— Ниңә ҡотораһығыҙ ул? — тип өндәшеүе йәштәрҙе баҫыла төшөргә, тыйылырға мәжбүр итте, бер-береһенә күҙ аттылар: ҡоромға буялмаған кеше юҡ, ғауғаны башлаған Уйылдан менән Миңлегөлдөң биттәре бигерәк ныҡ ҡарайған, күрәһең, бигерәк ихлас буяшҡандар, хатта Уйылдандың ап-аҡ күлдәге түшенә ҡәҙәр ҡара таптар менән сыбарланған. Бер-береһенә саҡ ҡына ҡарашып торғас, йәштәр геү килеп көлөшөргә тотондо, уларға ҡушылып көлөүҙән Торомтай менән Ғәрифә лә тыйыла алманы.

— Һәй сәбәкәләр, — тине Торомтай, бүтәнсә әйтер һүҙ тапмағас.

— Арый белмәй шул улар. Йәш саҡта беҙ ҙә шулай булдыҡмы икән, ҡарт? — Ғәрифәнең йөҙө моңһоуланды.

Йәштәр һөрләгөшөп кәртә артына сыҡтылар ҙа йылға буйына ыңғайланылар. Йыуынып алырға уйлағандар-

ҙыр инде, урамдан барырға уңайһыҙланаларҙыр. Үҙҙәре һаман көлөшәләр, ҡысҡырышалар. Был уйындан иң ҙур кинәнес тапҡаны Уйылдан булғандыр. Ул Миңлегөл усын йәйеп үҙенә ташланғанда, ялтанырға ла тырышманы, үҙенең битен буята ла, ҡыҙҙы һыңар ҡулы менән ҡосағына алып, икенсеһе менән битенән һыйпай ғына. Иллә рәхәтләнде лә һуң!

## V

Октябрь баштарында тәүге ҡар яуып ирене, ләкин көндәр ултыраҡ ҡына юнәлеп китмәне. Өҙлөкһөҙ рашҡы яуа, күк йөҙө һәр саҡ томанһып тора. Бына аҙна инде ҡояштың асыҡ йөҙ күрһәткәне юҡ. Көҙгө миҙгелдә була торған иң күңелһеҙ мәл. Урманда ҡош-ҡорт, тышаулы йөрөгән аттарҙың ҡыңғырау тауыштары тынды. Ауыл араһында күшегеүҙән бөршәйешкән малдар ҡаңғырып, баҡырышып йөрөй. Йәйге еңел, саф һауа юҡ инде хәҙер: серегән үлән, бурһыған ағас, кәртәләрҙәге тиҙәк, дым, нилектәндер юғарыға күтәрелмәй мөрйәләргә уралған төтөн еҫтәре — бөтәһе бергә ҡушылып, ошо мәлгә генә хас еҫ аңҡыта.

Ҡаратауға бына ошо мәлдә егермеләп ылау менән Лапшин килеп төштө. Арбаларға аҙыҡ-түлек, балта, бысҡы, ҡышҡы кейем-һалым кеүек нәмәләр тейәлгән. Ауыл осондараҡ ылауҙар теҙелешеп туҡтап ҡалды. Тирләгән аттарҙан, дымланған йөктәрҙән боҫрап пар күтәрелә, кешеләре көңгөр-ҡаңғыр һөйләшәләр. Лапшин үҙе иң алдағы ялбыр яллы, һөлөк кеүек ҡара айғыр егелгән ырандаста ине. Күсерен ылауҙарҙың артҡы осондағы улын — Романды — алып килергә югертте. Козыреклы күн бүрек, һырма өҫтөнән брезент кәжән, ҡалын күндән тегелгән ауыр итек кейгән Романдың килеп еткәнен, оҙаҡ ултырып килеүҙән талсыҡҡан тубыҡтарын һыйпай-һыйпай яҙырға тырышып, түҙемһеҙләнеп көттө. Ул килеп етеү менән:

— Старшинаның өйө ҡайҙа? — тип һораны. Роман Ҡотлоғужаның өйөн күрһәткәс, уға үҙенең яңы урында приказчик буласаҡ Никифор Маслов менән шунда төшәсәген әйтте, ылауҙарҙы, бүлгеләп, бүтән өйҙәргә урынлаштырғас, уға ла шунда килергә ҡушты.

— Атай, старшинала тығыҙ булыр. Минең таныш фатир бар, шунда ғына төшәйем, — тине Роман.

— Кем һуң ул, ниндәй кешеләр?

— Һәйбәт кешеләр. Тәүге килгәндә туҡтаған фатир.

— Ярар, тик алдыңды-артыңды ҡарап йөрө, ауыҙыңды үлсәп ас. Ылаусыларҙы иҫкәрт, йөктәрен келәт кеүек урынға бушатып, йоҙаҡлап ҡуйһындар.

— Бында ҡурҡырға ярамай, атай, әйбергә тейеүсе юҡ.

— Мин ни тием һиңә? Ҡушҡанымса эшлә! Ышан кешегә. — Боролоп ҡарамай ғына әйтте: — Никифор, минең арттан! — Күсеренә ымланы. — Әйҙә, анау өйҙөң ҡапҡаһына юл тот.

Роман ылаусыларҙы дүрт өйгә бүлгеләп урынлаштырҙы ла атын Торомтайҙарға табан ҡыуаланы. Уны ауылға килеп тулыусыларҙы өйҙәре эргәһенән күҙәтеп торған Төлкөсура йылмайып ҡаршыланы. Күптәнге дуҫтарса күрештеләр. Атты түбәлек яғына үткәреп, икәүләп һөйләшә-һөйләшә туғарҙылар.

— Ныҡлап килдек, эшкә тотонорға, — тине Роман.

— Урман ҡырҡтырырға тотонаһығыҙ инде?

— Эйе. Ләкин уның ҡырҡыусыларын, ташыусыларын табырға кәрәк әле тәүҙә. Ошо тирәләге ауылдарға сығып әйләнергә тура килер. Ялланыусылар табылыр бит?

— Ниңә табылмаһын. Беҙҙең халыҡты урман эшенә өйрәтәһе юҡ, кәсеп һәр кемгә лә кәрәк.

— Атайым бер нисә көн тора ла ҡайтып китә, мин бында ҡалам.

— Әле атайың ҡайҙа һуң?

— Ул старшинаға китте. Стәрлетамаҡта күрешеп, танышып ҡайтҡан икән.

— Ә-ә-ә, шулаймы ни... Һин беҙгә боролдоң инде?

— Шулай итмәй. Атайым үҙе менән бергә барырға тигәйне лә, минең бит һиңә әйткән һүҙ бар.

Алсаҡ рус егетенең тәүге килеп киткән сағында, бынан һуң мин гел һеҙгә төшөрмөн, тигән һүҙендә тороуы Төлкөсураны шатландырҙы. Романдың әйберҙәрен күтәреп өйгә инделәр. Китек-коток тештәрен йылтыратып, алсаҡ күрешкән Торомтайҙың арҡаһынан яратып, Роман:

— Бабай, бабай!.. — тип өндәшеп тә ҡуйғас, Төлкөсура:

— Һин, Роман, башҡортса өйрәнә лә башланың инде, — тип көлдө.

— Уны ныҡлабыраҡ өйрәнгәндә лә зыян итмәҫ ине.

Роман, сисенгән арала, түрбаш яғында әсәһе менән ниҙер эшләп йөрөгән Миңлегөлгә бер нисә тапҡыр күҙ һалды. Ошо ҡыҙҙың тыйнаҡ, оялсан, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер сер йәшеренгән ҡарашы менән осрашҡыһы, уны ситтән генә күҙәтеп ултырғыһы килә ине уның. Стәрлетамаҡта Осиповтарға туҡталғас, майорҙың ыҡшаңлап йөрөгән ҡыҙына Романдың был юлы иғтибар иткеһе лә килмәгәйне, үҙен ниндәйҙер изге эшкә хыянат итер һымаҡ тойғайны. Был тойғонан ошо оялсан, һылыуҡай башҡорт ҡыҙы арҡаһында тыуыуын ул бына әле ап-асыҡ аңланы.

Ул әллә ни ҡәҙәр күстәнәстәр сығарып ҡуйҙы. Уларҙың араһында атаһының күҙенән йәшереп тыҡҡылағандары ла бар ине. Төлкөсураға тип алған өр-яңы ҡара салбар, Торомтай ҡартҡа күлдәклек, Ғәрифә менән Миңлегөлгә эре биҙәкле шәльяулыҡ, бер киҫәк ситса. Былар — уларҙың үткән юлы күрһәткән ғәжәп ихласлыҡтары өсөн ине. Хатта Бикморатты ла онотмаған бит әле, ҡомдан эшләнгән бәләкәй генә уйынсыҡ ат алып килгән. Өйҙәгеләр, был ҡәҙәр байлыҡты күреп, аптырап ҡалдылар.

— Ҡитсәле, урыҫтың да шул тиклем һәйбәте булыр икән, — тип бышылданы Ғәрифә ҡыҙына, әйтерһең, шәп һөйләшһә, Роман уның һүҙен аңлай.

Күҙҙәре аҫтыртын ғына бәхетле йылтыраған Миңлегөл дә уға шым ғына яуап ҡайтарҙы.

— Урыҫ кеше түгелме ни?

Ғәрифә сәй ултыртты, сыуалға ҡаҙан аҫып, кисә Төлкөсура алып ҡайтҡан ике ҡорҙо бер ыңғай һалып ебәрҙе. Был юлы, үткәндәге кеүек, табынға ирҙәр айырымланманы, Ғәрифә менән Миңлегөл дә бергә ултырҙы. Роман күстәнәскә бер шешә араҡы ла ҡуйғайны, ләкин үҙе эсмәне, шуғалырмы, Төлкөсура ла баш тартты; Торомтай ҡарт ҡына ярты сынаяҡ самаһы һалып:

— Ни эшләйһең, күстәнәс бит, — тип, уны ике-өс бүлә тәмләп-тәмләп эсеп ҡуйҙы.

Хатта Ғәрифә, Романға ҡарап:

— Сәйеңде эс, улым, һыуытма, — тип өндәшергә лә батырсылыҡ итте хәҙер.

Уның был хәбәренә Миңлегөл, ситкә боролоп, битен яулығы менән ҡаплап, пырх итеп көлөп ебәрҙе.

— Ҡит, ыҡый, юҡҡа көлмә инде, — тип асыуланды әсәһе, — мин уға яман һүҙ әйтәмдер шул.

Роман иһә Төлкөсураға һораулы ҡараш ташланы.

— Сай — русса «чай» буламы?

— Дөрөҫ аңлағанһың, Роман.

Ғәрифә, терһәгенә ҡағылып:

— Көләһең, ана бит аңлаған, — тигәйне, Миңлегөлдөң сыҙар хәле ҡалманы, күрәһең, йәһәт кенә төштө лә, ҡатаһын эләктерҙе һәм тышҡа югереп сығып китте.

Төлкөсура Романға, көлә-көлә, эштең ниҙә икәнен аңлатты.

— Һеңлең үҙе русса аңлаймы һуң?

— Ҡайҙан белһен ул, үҙе лә бер ни аңламай.

— Ярар, рәхмәт, — тип урынынан торҙо Роман. — Атайым эргәһенә барып киләйем әле, ул нисек урынлашты икән.

Кейенеп тышҡа сыҡҡайны, соланда торған Миңлегөл, уның эргәһенән йылп итеп үтеп, өйгә инеп китте. «Ҡоралай һымаҡ, ҡәһәрең», — тип уйланы Роман һәм Ҡотлоғужаның өйөнә ҡарай атланы.

* *
*

Старшина өйәндә һөйләшеү икенсе төрләрәк бара ине. Ҡотлоғужа Өфө баярын баҫалҡы ҡунаҡсыллыҡ менән ҡаршыланы, ихата тирәһен ҡараусы эшсеһенә аттарҙы туғарышып урынлаштырырға ҡушты ла, үҙен Маслов тип таныштырған оҙон кәүҙәле, ҡотһоҙ ябыҡ сырайлы әҙәмгә сәйерһенеберәк күҙ ташлағас, килеүселәрҙе өйгә әйҙүкләне. «Быныһы ниндәй кеше икән? — тип уйланы Ҡотлоғужа. — Өйәҙҙән-фәлән түгелдер ҙә инде». Кемдең кем икәнен белеп, шунан аҙаҡ ҡына ихласлыҡ йә тотанаҡлылыҡ күрһәтергә ғәҙәтләнгән шул.

Ҡунаҡтарҙы төпкө өйгә үткәреп, сисендергәс, ҡатыны табын әҙерләгәнсе, төрлө хәл-әхүәлдәр һорашып ултырҙылар; шунан, тиҙерәк эш башлап ебәреү хаҡында борсолған Лапшин һүҙҙе үҙен ҡыҙыҡһындырған яҡҡа борҙо.

— Халыҡ бында ниндәй кәсеп менән көн итә, Ҡотлоғужа әфәнде?

— Кәсеп тип, кемдең ҡулынан ниндәй эш килә бит. Көрәк сабалар, дегет ҡыуалар, күмер үртәйҙәр. Ҡайһыһы яҙын ҡыуғын менән алып барып һатыу өсөн аҙ-маҙ бүрәнә ҡырҡа.

— Бына һеҙ эшсе тотаһығыҙҙыр бит инде. Көнлөк хаҡы күпме менән йөрөй?

Ҡотлоғужа уйламай хәбәр һөйләй торган кеше түгел ине. Ул әле лә Лапшиндең ниңә төпсөнгәнен шундуҡ һиҙеп алды: урман ҡырҡыуға кеше йыйырға уйлай. Әгәр көнлөк хаҡын дөрөҫ әйтһә, халыҡты ҡыҙыҡһындырыу өсөн, бер нисә тин артыҡ биреп, кешеләрҙе ҡотортоп ебәреүе лә бар был урыҫтың.

— Мин үҙем кешеләрҙе күберәк миҙгел менән тотам, Артем Дмитриевич. Әйтәйек, бесән ваҡытына, фәләнсә кәбән бесән эшләһәң, төгәнсә хаҡ, тип алдан һөйләшәм. Көнлөк хаҡы урман ҡырҡыуға ун ике тиндән, аты менән эшләһә — ун һигеҙ-егерме тиндән йөрөй.

Бындай хаҡҡа Лапшин бик риза ине, күрәһең, ҡәнәғәтләнеү менән итләс елкәһен ышҡыны.

— Дә-э, быныһы шулай, тиң. Яҡын-тирә ауылдарҙан кеше табып булырмы икән һуң?

— Әллә, һөйләшеп ҡарарһығыҙ инде.

Артабан һүҙ табын артында дауам итте. Лапшин, Масловҡа әйтеп, күстәнәскә бер шешә алдырып ултыртҡайны, Ҡотлоғужа уны астырманы.

— Бына башҡорт балынан ауыҙ итеп ҡара әле, — тип, иң тәрбиәләп, яҡшы итеп әсеткән балынан оло ағас алдырҙы тултырғансы ҡойоп, уға һондо.

Лапшин уны тәүҙә аҙ ғына уртлап ҡараны, тамшанды, шунан бер тында эсте лә ҙур кинәнес менән:

— Бына был, исмаһам, бал! — тип маҡтаны. — Умартаны күп тотаһығыҙмы, Ҡотлоғужа әфәнде?

— Аҙыраҡ бар шунда, — Ҡотлоғужа уға йөҙ баштан ашыу умартаһы, утыҙ-ҡырҡ солоғо барлығын әйтеп торманы. Шулай ҙа Лапшиндең был һорауы уға урман һатҡанда һөйләшергә онотолған бер әйберҙе иҫенә төшөрөргә ярҙам итте. Һатылған урмандарҙа үҙенең дә, башҡа кешеләрҙең дә байтаҡ солоғо бар ине. Уларҙы ҡырҡтырмаҫҡа кәрәк бит инде. Ҡотлоғужа ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатҡас, Лапшин солоҡтоң нимә икәнен белмәүен әйтте, хужа күпме тәфсирләп һөйләп ҡараһа ла, аңлап еткерә алманы. Шуғалыр инде «ҡырҡтырмам» тигән һүҙҙе һис тә ауыҙынан ысҡындырғыһы килмәй. Ахыр килеп, Ҡотлоғужа мәсьәләне икенсе төрлөрәк ҡуйырға булды.

— Беләһегеҙме, Артем Дмитриевич, солоҡтар кешеләргә быуындан-быуынға күсә килә. Әгәр уның берәүһен

генә кисτерһәгеҙ ҙә, халыҡ араһында оло ғауға тыуыуы бар. Һаҡ булығыҙ.

Урындағы халыҡ менән тәүҙән үк низағҡа инмәү — Лапшиндең алдан уйлаған тактикаһының береһе ине. Шуға күрә ошонан аҙаҡ:

— Уларҙың береһенә бер кем ҡул тейҙермәҫ, — тине, өҙөп кенә. — Никифор, быны күңелеңә һалып ҡуй. Һәр солоҡтоң именлеге өсөн башың менән яуап бирәһең.

Һөйләшеүгә ҡатнашмай ултырған Маслов эйәк ҡағып ҡына күрһәтмәне аңлауын белдерҙе, ҡаҙаҡта элеүле пинжәге кеҫәһенән ҡәләм, ҡағыҙ алып, ниҙер яҙҙы. Оҙон, осло танауы аҫтында бармаҡ битендәй генә мыйыҡ ҡалдырған, ҡобараһы осҡан ҡотһоҙ сырайлы кешегә Ҡотлоғужаның, ниңәлер, күңеле ятмай ине.

Һитә балынан аҙаҡ, Лапшиндең теле тағы ла асыла төштө, ашауҙан ауыҙы бушаған арала (уға ҡаҡлаған ҡаҙы бик оҡшаны, күрәһең, ауыҙының ике ситенән май ағыҙа-ағыҙа тығына ғына!) һаман хәбәрен һөйләне.

— Миңә хәҙер нигеҙ ҡороп, төпләнеп алырға кәрәк бит инде. Һеҙ миңә, Ҡотлоғужа әфәнде, хөсүсән үҙегеҙ ултырыш урыны һайлашмаҫһығыҙмы икән? Урын йәмле лә, бүрәнә ташып өйөргә, яҙын йылғаға ауҙарырға уңайлы ла булһын ине. Унда аҙыҡ-түлек, кәрәк-яраҡ та ташырға тура киләсәк; юлға яҡынıраҡ булыуы хәйерле. Үҙеңде ҡунаҡҡа саҡырған саҡтарҙа ҡарға сумып ятырлыҡ булмаһын. Хи-хи-хи... — Тамағын май бөргән Лапшин бисәләр шикеллерәк көлә ине.

— Үҙегеҙ шунда күсеп килергә уйлайһығыҙмы, Артем Дмитриевич?

— Ул тиклемен уйлаған юҡ, Ҡотлоғужа әфәнде. Бына был Никифор Маслов минең бындағы тулы хоҡуҡлы кешем — приказчигем буласаҡ. — Лапшиндең был һүҙҙәрен ишеткәс, Маслов ҡуҡырайыбыраҡ ултырҙы. — Үҙем ҡыш килеп-китеп кенә йөрөрмөн, йәйгелектә ғаилә менән дә торорға мөмкин. Хәҙер миңә, Ҡотлоғужа әфәнде, иң тәүҙә һәйбәт кенә оҫталар табырға ла ана шул буласаҡ ултырышҡа ваҡытлыса бер өй, башҡа ваҡ-төйәк ҡаралтылар төҙөргә кәрәк.

— Оҫтаһын да табырһығыҙ, Артем Дмитриевич. Йә әле, балыңды тағы бер эсеп ал.

Лапшиндең табаҡтай бите йәйрәне.

— Ай, һәйбәт кеше һеҙ, Ҡотлоғужа әфәнде! Мин һеҙҙе ғүмерлек дуҫым итәсәкмен! Лапшин һыр бирә тор-

ғандарҙан түгел, ҡурҡма. Өфөлә лә, Петербургта ла дуҫтар етерлек минең. Ниндәй ярҙам кәрәк — бөтәһен дә эшләргә мөмкин.

— Фәрештәнең амин тигән сағына тура килһен был һүҙҙәрегеҙ, Артем Дмитриевич. Беҙҙән дә эш ҡалмаҫ.

Ошо саҡта Уйылдан Романды алып инде.

— И-и, Роман, мин һине иҫтән сығарып уҡ ебәргәнмен. Әйҙә. Минең улды беләһегеҙ бит инде, Ҡотлоғужа әфәнде?

— Бәй, ул да килдеме ни? Ҡайҙа ине һуң ул? Һаумы, белеш ҡустым, түрҙән уҙ. Уйылдан, ни эшләп тораһың, сисендер ҡунағыңды.

— Ул ылаусыларҙы урынлаштырып йөрөгәндер, — тине Лапшин. — Үҙе ниндәйҙер таныштарына төшәм ти ине. Ҡем менәндер дуҫлашып та өлгөргән, малай аҡтығы.

— Ҡемдәргә туҡтаның? — Ҡотлоғужа Романға аптырап ҡараны.

— Төлкөсураға.

Был яуапты ишеткәс, Ҡотлоғужа урынынан күтәрелә биреп ҡуйҙы.

— Һы, тапҡанһың кеше! Теге саҡта кемдең кем икәнен белмәй килеп төшкәс тә етер. Шулай бүленеп-ярылып йөрөү яраймы ни? Уларға ҡабат аяғыңды атлама!

— Ниңә, Ҡотлоғужа әфәнде? Минең ат та, бөтә әйбер ҙә шунда. Унан һуң бит...

— Әйҙә бында алып киләбеҙ, — тине Уйылдан.

— Юҡ, булмай, — Роман урындыҡ ситенә ултырҙы. — Һәйбәт кешеләр улар.

Ҡотлоғужаның ҡуйы ҡаштары йәмерәйҙе.

— Тапҡанһың яҡшы кешеләрҙе! Беткә батып сығырһың — шул булыр. Бар, Уйылдан, атын ек тә әйберҙәрен алып кил.

Ҡотлоғужа аҙаҡҡы һүҙҙәрен башҡортса әйткәйне. Уйылдан йәһәт кенә сығырға ыңғайлағас, шулай ҙа Роман ниҙер һиҙенде.

— Ҡайҙа бара ул? — тип һораны Ҡотлоғужанан.

— Атыңды, әйберҙәреңде килтерергә.

— Ҡотлоғужа әфәнде... атай, кешегә бер ингәс, улай бик уңайһыҙ була бит.

— Күп һөйләнмә: оло кешенең әйткәнен тыңла! — тип ҡыҫҡа тотто Лапшин. — Мин бит уларҙы арыу ғына кешеләрҙер тип торам.

— Яҡшы кешеләр, тинем бит инде.
— Етер! Бар, егет менән бергә атла.

Роман ҡайһы саҡта атаһының ҡурайына бейеп тә бармай ине. Әле лә урынынан тороп Уйылдан артынан атланы, ләкин күңеленән: «Бөгөн барыбер уларҙа ҡалам», — тип уйланы. Урамдан китеп барғанда ул ошо фекерен Уйылданға ла әйтте.

— Бик тә булмаһа, иртәгә килермен.

Уйылдандың ихлас төшөп уны үҙҙәренә алып ҡайтырға йыйыныуының башҡаса хикмәте бар ине. Был шәп кейенгән, сибәр ҡиәфәтле рус егетен ниңә Миңлегөлдөң күҙ алдында уралтырға әле? Теге саҡта ла кәнфиттәр биреп маташа ине, ышан һин ул урыҫҡа. Аллаһы юҡ бит уның.

— Беләһеңме, Роман, атайым бик үҙһүҙле кеше, барыбер тындырмаҫ. Үҙенең килеп етеүе лә бар.

— Ул саҡта күҙ күрер.

Уйылдан аптырап та ҡуя: был Төлкөсураларға ниңә бик йәбешеп ятты һуң әле? Урын йәйеп йоҡлау өсөн рәтле ҡаралтылары ла юҡ, өйҙәре бәрәс ояһындай ғына.

Роман шулай ҡаршылашһа ла, ул унан тороп ҡалманы, өйгә лә бергә инде. Уларҙы күргәс, Төлкөсура ҡаршы йүгереп килде.

— Һин дә бындамы ни, Уйылдан? Беҙҙең дуҫ килгән бит, әй! Әйҙә, әйҙә, ултырышығыҙ.

Уйылдан өйгә инеп һаулыҡ ҡушҡас та, Миңлегөлгә күҙ һалды. Ул әсәһенә аш тәрбиәләшеп йөрөй ине, кереүселәргә иғтибар ҙа итмәгән кеүек. Уйылдан ултырманы, аптыратырлыҡ хәбәр әйтте:

— Атайым да, үҙенең атаһы ла Романды аты-ние менән беҙгә алып ҡайтырға ҡушып ебәргәйне бит әле.

Төлкөсура берсә уға, берсә Романға ҡараны. Роман Уйылдандың башҡортса өндәшеүенән бер ни ҙә аңламағайны, әлбиттә.

— Ҡитәһеңме ни, Роман? — тине Төлкөсура.

— Ҡайҙа? Ә-ә, — егет һаман ишек төбөндә торған Уйылданға боролдо: — Һин әйтеп өлгөрҙөңмө ни? Яҡшы түгел, дуҫ кеше. Мин һиңә әйттем бит инде — бынан бер ҡайҙа ла ҡыбырҙамайым. Атай ҡосағында ятыр сағым үткән инде.

— Ха-ха-ха... — Төлкөсура ҡыуанысынан көлдө. — Ныу шәп әйттең, Роман! Уйылдан, ни эшләп, малайҙар кеүек, унда тумһайып тораһың, ултыр.

Уйылдан Романдың киҫкен генә әйткән һүҙҙәренән аҙаҡ уңайһыҙыраҡ хәлдә ҡалғайны. Был рус ҡа инәлеп тормай ишекте шартлата ябып сығып та китер ине, кем өйөндә икәнен оноторға ярамай, өҫтәүенә, Миңлегөлгә ситтән булһа ла аҙыраҡ ҡарап торғоһо килә. Ошо тойғо еңде уны.

— Ярар, миңә ни барыбер... — тип Роман эргәһенә ултырҙы.

Уғаса Миңлегөл ашъяулыҡ түшәне, табаҡҡа һалынған ике ҡорҙо боҫратып килтереп ултыртты.

— Бүлгелә, атай, — тип төптә аяҡ салып ултырған Торомтай алдына бысаҡ һалды.

«Бынау урыҫтан һис тә тартынмай, нисегерәк етеҙ ҡыланып йөрөй. Урыҫҡа ла, егеттәр менән бергә бүре һуға сапҡан Миңлегөлгә лә ышаныс юҡ. Ауыҙ асып йөрөмәҫкә, атаһын тағы ҡабаландырырға кәрәк. Әсәйһенә әйтәһеме икән әллә?». — Уйылдан шулай уйлана, берәй нәмә һиҙергә теләп, әле Миңлегөлгә, әле Романға ҡарай.

— Егеттәр, Торомтай ағай, бынауындай ит барҙа, аҙ ғына эскәндә лә була бит? — Роман яуап та көтөп тормай, күн сумаҙанынан башланмаған ярты алды.

— Уныһына оронма, башланғаны бар бит, — тине Төлкөсура.

Ит тunion бөтөп, ҡулын сепрәккә һөртөп ултырған Торомтай иһә Ғәрифәгә өндәште:

— Әсәһе, анау солоҡ балынан һалып ҡуйған нәмәң бар ине түгелме? Араҡы кәрәкмәҫ, уландар.

Ғәрифә, Уйылдандың әсәһе кеүек, каса йәки туҫтаҡ менән ташып торманы, сыуал артынан бәләкәйерәк көрәгә балды ашъяулыҡ уртаһына дөңкөлдәтә килтерҙе лә ултыртты.

— Әйҙә эсегеҙ, уны кемгә һаҡларға.

Табын тирәләй йәтешләп ултырҙылар, Төлкөсура көрәгәсе булып алды. Романдың ҡур менән генә әсетелгән һитәле балды эскәне юҡ икән, тәмләп ҡарағас:

— Нимә һуң был? — тип аптыраны.

Төлкөсура уға аңлатып бирҙе. Бер-икешәрҙе эскәс, күңелдәре тағы ла күтәрелә төштө, Уйылдан да шикле уйҙарынан ҡотолғандай булды. Хатта, бер ҡарағанда, Миңлегөлдөң үҙенә күҙ һирпеп, мут йылмайғанын күргәс, бөтөнләй ирәүәнләп китте.

— Атай, итеңдең йәтәсле ерен бир әле миңә, — тип Миңлегөл түш итен һорап алды, Уйылданға тағы мут ҡараш ташланы. «Юҡ инде, Миңлегөл хәҙер уға бөтөнләй үҙ итеп ҡарай. Был урыҫ егетенән көнләшеү тойғоһо ҡайҙан килде уға? Тфү!..»

— Төлкөсура, ҡурай тартып ебәр әле! Роман дуҫтың күҙен аҡшайт бер!

— Ҡит, һеҙҙең ҡурайығыҙҙы аңлаймы ни ул? — тине Ғәрифә.

Торомтай уға ҡаршы төштө.

— Аңламай әллә, знамы аңлай. Көй бит — һүҙ түгел. Ул бөтә йыныс кешеләренә лә аңлашыла.

Ҡама буйындағы һалсылар араһында ҡурайсыларҙы осратҡаны бар ине Романдың, ләкин Төлкөсураның уйнағанын ишеткәс, Петербургтың үҙендә гимназия бөткән зиһенле егет барыбер аптырап ҡалды. Көйҙө йөрәк төптәреңә еткерерлек итеп, илаһи бер дәрт һәм зауыҡ менән уйнай ине шул Төлкөсура! Ҡанатланған Уйылдан уға ҡушылып йырлап та ебәргәс, Роман үҙен бөтөнләй икенсе донъяла ултырған һымаҡ хис итте. Матур ғына йырлай ине Уйылдан да.

Унар ғына һумлыҡ ун аҡыҡлы
Эйәрең булыр, егет, ат булһа.
Яҡын күргән дуҫтан яманы юҡ,
Ауыр саҡтай һиңә лә ят булһа...

— Һай, сәбәке малайҙар! Ир етеп, гөрләшеп ултыраһығыҙ бит! — тип ҡалҡынып-уҡталып ҡуйҙы Торомтай. Ғәрифә уға уҫал ғына ҡараш ташланы, ләкин уның тауышында ла асыу түгел, көтмәгәндә генә ойошҡан ошо мәжлестән кинәнеү һиҙелде.

— Ҡит, ҡартмәкәш, әллә иҫереп алды инде!..

— Әй-й, әбей, миңә, йонсоп йөрөгән кешегә, күп кәрәкме ни? — Торомтай артындағы яҫтыҡҡа терәлде, Ғәрифә, табын эргәһенән тороп, түрбаш яғында ниҙер булаштырырға тотондо.

Ошоно ғына көткән кеүек, Миңлегөл йәлп итеп Уйылдандың алдына килеп баҫты.

— Уйылдан ағай, йәтәс айырышайыҡ!

Егет ҡапыл-ғара ҡаушап ҡалғайны. Ата-әсәһе алдында Миңлегөлдөң был тиклем үк ҡыйыу ҡыланырын көтмәгәйне ул. Төлкөсура уның бөйөрөнә төрттө.

— Йә, ниңә аптыраның?!

Уйылдан сыңғарсаҡ бармағы менән йәтәстең бер асаһын ҡыҫты.

— Нимәнән?

— Әллә... — Миңлегөл саҡ ҡына уйланып торғандай итте. — Йөҙөктән! Отолһам — мин һиңә, отһам — һин миңә йөҙөк бирәбеҙ.

Миңлегөлдөң шаян йылмайып тороуы егетте бөтөнләй илерткәйне. Уйлап та тормаҫтан, йәтәс асаһын үҙенә тартты.

— Тфү йәтәс!..

— Тфү йәтәс!.. — Миңлегөл йәтәстең үҙендә айырылып ҡалған яртыһын Уйылданға һуҙҙы. — Мә, ялғап ҡуй! Йәтәс!.. И-ха-ха-хай... бер оттом!..

Уйылдан күҙе упайып тик ултыра ине.

— Был шайтан һине хәҙер отоп бәтә бит, — тине Төлкөсура.

— Бөтһән дә! Бер йөҙөк тапмам тиһеңме әллә.

Торомтай иһә ҡыҙының ҡылығын бик үк өнәп бөтмәүен һиҙҙерҙе.

— Һин ниңә ир-ат араһына килеп ҡыҫылдың әле? Бар, әсәйеңә ярҙамлаш.

Роман уларҙың ни ҡыланғанын аңламай ултыра ине, Төлкөсура эштең ниҙә икәнен, уйындың тәртибен төшөндөрөп бирҙе.

Ғәрифә сәй ултыртҡас, Миңлегөл Уйылданға сәйле сынаяҡ һуҙғайны, Төлкөсура иптәшенең ҡабырғаһына төрттө: йәнәһе, «иҫемдә» тип әйтергә онотма. Егетендә иһә уның был ишараһын аңлау ҡайғыһы түгел ине: Миңлегөл ҡулынан сәй алып эсеүҙәре үҙе бер ғүмер!

— Йәтәс!

— Эй шайтан, — тине Ғәрифә апай, асыуланмай ғына. — Һинең шикелле, кеше гел шуны уйлап ултыра тиһеңме ни.

Табындан тороп, егеттәр ҡулын сайҡатҡанда, Уйылданға таҫтамал тоттороп, Миңлегөл уны отоп бөтөп тә ҡуйҙы.

— Ярар, берәй баҡыр йөҙөк табырмын әле, — тип һөйләнде Уйылдан. Унда Романды алып ҡайтыу ҡайғыһы юҡ ине инде. Ҡыуанысы кукрәгенә һыймай, ниңә килеүен дә онотоп, сығып китте.

Иртәгеһенә Ғәрифә ҡыҙының бармағында ялтлап торған ҡашлы йөҙөк күргәс, аптырап ҡалды.

— Бәй, әллә теге отҡан йөҙөгөңдө килтереп тә бирҙеме?

— Килтергәйне лә, ҙурыраҡ. Әҙерәк аҫ яғына сепрәк ураным.

— Һарғылт күренә — үҙе бик һәйбәт һымаҡ. Баҡырмы икән әллә еҙме?

— Белмәйем, әсәй, ҡайһылай булһа ла, барыбер инде. Һатып алған нәмә түгел бит. — Миңлегөл уйламағанда йөҙөктө кейергә яй эҙләп табыуына ҡыуана.

* *
*

Роман иртәгеһенә иртүк, тауыш-тын булмаһын өсөн, атаһы эргәһенә алдан уҡ аҡыл уйлап барҙы. Атаһы ҡапҡа төбөнә сығып баҫҡан: әллә уны көтә, әллә урамды күҙәтә.

— Барыбер үҙемсә эшләнем, тиһең инде, улым. Яҡшы түгел, — тип ҡаршыланы ул Романды.

— Атай, беҙ, беренсенән, унда бик күңелле итеп ултырҙыҡ. Старшина малайы ла шунда булды. Төлкөсура — уның дуҫы.

— Ниндәй Төлкөсура? — Исемде саҡ теле әйләнеп әйтте Лапшин.

— Фатир хужаһының улы. Икенсенән, үҙең урындағы халыҡтан ышаныслы кешеләр табырға кәрәк тигәйнең бит. Төлкөсура менән атаһы — бик уңған кешеләр.

— Быныһын дөрөҫ әйтәһең, Роман. Старшинаның һүҙен йыҡҡым килмәгәйне, ярар инде. Әйҙә, Никифор менән кәңәш итәйек тә бушҡа көн үткәрмәйек.

Былай килештеләр: Никифор менән Роман икеһе ике ауылға ағас ҡырҡыусылар, ташыусылар, өй һалырға оҫталар эҙләргә китә; теләгән кешеләр эш тәртибе, көнлөк хаҡы тураһында Лапшиндең үҙе менән килеп һөйләшә. Артем Дмитриевич үҙе иһә Ҡотлоғужа менән ултырыш урыны һайларға бара.

— Бер аҙ йөрөп, урманды ла күреп әйләнге килә ине, Ҡотлоғужа әфәнде, — тине ул, — белмәгән ерҙә яңғыҙым эш ҡырып булмаҫ инде. Һин бергә-бергә йөрөй алырһыңмы икән?

«Ай-һай, быныһы һиңә артығыраҡ хөрмәт булыр, — тип уйланы Ҡотлоғужа. — Ул тиклем үк ваҡланып, һине урман буйынса оҙатып йөрөргә беҙ ҙә һинән кәм кеше түгел».

— Әллә инде. Ултырыш урынын алып барып күрһәтермен күрһәтеүен... — тине ул, ауырһынып ҡына.

Уның урманда йөрөргә теләге юҡлығы күренеп тора ине.

— Атай, — тине Роман, — Төлкәсураны ал. Ул бит беҙгә межа ярышырға ла йөрөнө. Биләмәнең бөтә сиктәрен беләә.

— Бик ҡулай булыр. Әйт шул егетеңә, улайһа, — тип улының кәңәшен хупланы Лапшин.

Ҡотлоғужа урыҫтарҙың һаман шул Торомтайҙар менән яҡынайыуына һис тә риза түгел ине. Ниңә үҙе оҙатыусы итеп икенсе берәй кешене әйтмәй ауыҙ асып торҙо һуң әле? Ләкин Роман Төлкөсураларға сығып югергәйне инде.

Лапшин үҙенең ҡара айғырын менергә булғас:

— Атың урманда йөрөп өйрәнгәнме һуң, Артем Дмитриевич, дүңгәк-фәләндән өркөп, ботаҡ-сатаҡҡа эләгеп йығылмаҫмы? — тип һораны Ҡотлоғужа.

— Борсолмағыҙ, Ҡотлоғужа әфәнде, — тине Лапшин, һис тә иҫе китмәй генә. — Мин был ат менән Пермь урмандарын аҙ тапаманым.

Бына улар ауылдан сыҡты. Ҡотлоғужа — алдан, унан — Лапшин, Төлкөсура иң арттан төшкән. Аҙ ғына бара биргәс тә һирәк ҡайынлыҡ башланып китә. Был ҡайындарҙы утынға йығып ҡырҡырлыҡ та түгел инде: шул тиклем йыуандар, төптәрендәге ҡарайышып, ярғыланып торған суғырмаҡтары ғына бер ая ҡалынлыҡ, тарбағай ботаҡтары әллә ни ҡәҙәр ерҙе ҡаплап тора. Тағы бер аҙ юл үткәс, уҫаҡлыҡ башлана. Бында инде шыуғалаҡ һорғолт япраҡтар ерҙе ябып алған, танауға әскелтем-сөскөлтөм уҫаҡ еҫе килеп бәрелә.

— Ҡотлоғужа ағай, — тип тауыш бирҙе Төлкәсура,— быға һатҡан урмандың бер сиге ошонан үтә. Межаһы ана аңауында.

— Шулаймы ни, күрһәтеп китәйек, әләгәс.

Межаны күрһәткәс, Лапшин, бөрөш күҙҙәрен нығыраҡ асырға теләгәндәй, итләс маңлайын сырыштырып, тирә-яғына иғтибар менән күҙ йөрөттө.

— Был ағастар бер нигә лә эшкинмәй инде, — тине ул, бер яҡ эргәләрен йәшкелт ҡара мүк баҫҡан, бәшмәктәр сыбарлаған уҫаҡтарға ымлап. .

«Ағастың ниндәй икәнен тышынан уҡ таный үҙе та-

ғы, кафыр», — тип уйланы Ҡотлоғужа, шунан, уның күңелен йыуатыу өсөн:

— Уҫаҡ аҙ беҙҙең урмандарҙа, — тине, — ҡарағайҙарҙы күрерһегеҙ әле бына — шәм кеүектәр.

Ары ҡуҙғалдылар. Ҡотлоғужа баянан бирле бер нәмә хаҡында уйланып, баш ватып килә: «Ултырыш итеп ҡайһы тирәне күрһәтергә был урыҫҡа? Ҡыйғыр яланын күрһәтһә, үҙенә бынамын тигән сабынлыҡтан ҡолаҡ ҡағырға кәрәк. Йәйләү яланына яҡын да юлатырға ярамай. Йә, был хәҙер минең ер, йәйләүегеҙҙе башҡа урынға күсерегеҙ, тип йәбешер ҙә ятыр. Алайғыр туғайына алып барырға тура килер. Бүрәнә өйөргә иркен үк туғайы бар, өҫ яғындараҡ — алаңғырт ағаслыҡ, шунда өйҙәрен һалдырыр».

Норош буйына яҡынайғас, осло уҡтары менән күккә тишергә ынтылғандай, һап-һары тәңкәле, шыйлан ҡарағайлыҡтар башланып китте.

— Оҡшаймы, Артем Дмитриевич? — тип, атының теҙгенен тарта төшөп, артына боролоп ҡараны Ҡотлоғужа.

Лапшин әйләнә-тирәһенә күҙ һалғас, һис тә иҫе китмәй генә әйтте:

— Әллә ни түгел, араһында өлгөрөп етмәгәндәре күп. Улар бит ни бураға, ни таҡтаға эшкинмәй.

— Өй һалғас, урҙалыҡ-фәләндәре лә кәрәк бит, Артем Дмитриевич.

— Һәй, Ҡотлоғужа әфәнде, Волга буйында урҙалыҡ һорамайҙар шул. Уларға йыуаныраҡ бүрәнә булһын.

Уның был һүҙҙәрен ишеткәс, Төлкөсураның ғына түгел, Ҡотлоғужаның да күҙе дүрт булды. Волга тигән йылға, уларҙың аңлауынса, бик алыҫ та инде; шул саҡлы ергә үк ҡыуамы икән ни бүрәнәләрҙе?

— Ә беҙҙең яҡ оҫталарында «Ағастың — төрлөһө, ҡатындың көнһөҙө[1] яҡшы» тигән мәҡәл бар, — тип һыр бирергә теләмәне Ҡотлоғужа.

— Күрәһең, һеҙ, Ҡотлоғужа әфәнде, урман эсендә йәшәһәгеҙ ҙә, уның ҡайһы бер яҡтарын белеп еткермәйһегеҙ.

Ҡотлоғужаға уның менән бәхәсләшеүҙән файҙа юҡ инде, урман һатылған — эше бөткән. Нисек теләй — шулай ҡыланһын. Ул атын артабан ҡыуаланы. Бына ҡара-

---

[1] «Көнләшмәй торғаны» тигән мәғәнәлә.

ғай аралаш ҡайын үҫкән алаңғырт, типһән ерҙән Алайғыр туғайы күренде. Ҡотлоғужа, атын туҡтатып, тирәяғына ҡарана-ҡарана артҡараҡ ҡалып килгән Лапшиндең эргәһенә етеүен көттө.

— Ошонан алдығыҙҙағы күренешкә күҙ һалығыҙ, Артем Дмитриевич. Ниҙәр күрәһегеҙ?

Түбәндәрәк — киң генә тугай, уның урталығында — йәнәш ҡойолған ике кәбән. Артабан яланғасланып ҡалған әрәмә аша Норошттоң тоноҡ йылтырап аҡҡаны күренә. Йылғаның арғы яғында — кәлтәһе буйҙарына ҡарағайҙар теҙелеп үҫкән ҡая таш.

— Шунан? — Ҡотлоғужа һораулы ҡараны.

— Матур ғына күренеш, — тине Лапшин. — Миңә ултырышты ошонан ҡоҙаларға уйлайһығыҙмы әллә?

— Ниңә, насармы ни?

— Улай тимәнем бит. Әйҙәгеҙ, туғайын ҡарайыҡ әле.

— Туҡтағыҙ, уға тиклем мин һеҙгә тағы бер шәп нәмә күрһәтәм. — Ҡотлоғужа атының теҙгенен юлдан ситкә — уя буйына тартты.

Төлкөсура ла эштең ниҙә икәнен һиҙеп алғайны инде. Тимәк, Лапшин үҙенә йорттар һалыу, ныҡлап тамыр йәйеү өсөн урын эҙләй. Түбәндәге Алайғыр туғайы — уларҙың ғүмер буйы сапҡан сабынлығы бит. Әгәр рус байы килеп ултырһа, улар сабынһыҙ ҡаламы ни?

Ҡотлоғужа Лапшинде ҡырастағы һандыҡ таш аҫтынан урғылып сығып ятҡан ҡаран эргәһенә алып килде.

— Бына бынһы инде хазина, Артем Дмитриевич, — тине Ҡотлоғужа. Теҙгенен эйәр ҡашына эләктереп, атынан төштө лә ҡаран эргәһенә барҙы. — Йәйге эҫеләрҙә бынан бер ус һыу эсһәң, барлыҡ һыуһындарың ҡана. Әйҙәгеҙ әле, һыуын татып ҡарағыҙ.

Лапшин дә уның эргәһенә барҙы. Ике бай, ҡулдарын сайҡап, устары менән тәмләп-тәмләп һыу эсергә тотондо. Төлкөсура иһә уйға батып тора. Ана, ҡаран сыҡҡан ерҙән йыраҡ түгел уларҙың ҡуна ята, ашап-эсә торған урыны. Ике ҡайын араһына эшләнгән ҡыуыштың өҫтөнә япҡан бесәндәре шыуышып, хәҙер инде тишек-тошоҡ күренеп тора. Уның алдында — ямғырҙарҙа көлө ҡарайып һеңгән, эргәләге асалы бағаналары яртылаш утҡа янып, торонбашланған таған; һыуһын бөтөп, ҡыуыш эргәһенә ялға килгәс, улар салғыларын ҡайындың анау һалынҡы ботағына элеп ҡуялар ине. Шул уҡ ҡайындың ер өҫтөнә бүртеп сығып торған тамырына түш ҡағып,

Төлкөсура иртәнге һалҡында урман яңғыратып салғы сүкер ине... Хәҙер шуларҙың бөтәһе лә Лапшингә ҡалырмы икән ни? Улар бесәнде ҡайҙа эшләр?

— Шишмәһе бер тигән, — тине Лапшин, аты эргәһенә килеп.

Төлкәсура ипләп кенә һорамайынса түҙмәне:

— Ҡотлоғужа ағай, был — беҙҙең сабынлыҡ бит. Ошо әҙәм донъя ҡороп ебәрһә, беҙ сабынлыҡһыҙ ҡалабыҙмы ни?

Ҡотлоғужа терт итеп ҡалды, хатта бер ҡашының ҡойроғо үргә сөйөлдө. Их, ҡәһәрең! Уйланы-уйланы, ә туғайҙың үҙе менән бергә үк килгән кеше сабынлығы икәне иҫенә төшмәгән. Ҡайҙан ошо Төлкөсураны үҙе менән алмаҡ булды кафырың!

— Кем, Төлкөсура ҡустым, ы-ы-ы... Был ерҙәр бит хәҙер беҙҙеке түгел инде.

— Сходта сабынлыҡтар үҙебеҙгә ҡалырға тейеш тигәйнеләр бит.

— Әйткәйнеләр ҙә... Ҡара әле, ҡустым, әгәр оҡшатһа, был кафырға ошо туғайҙы бәхилләйек. Мин һеҙгә икенсе урындан бынамын тигән сабынлыҡ бирермен.

— Әллә шул, Ҡотлоғужа ағай, бер ҡулдан ысҡынһа...

— Юҡты һөйләнеп торма әле, Төлкәсура, мин һиңә малай-шалаймы ни. Беләһең бит, мин һеҙҙе бер ваҡытта ла ситкә ҡаҡҡаным юҡ. Ана йәй көнө, миңә тип ҡойған кәбәндәрегеҙҙе лә күрмәгән көйөнсә, уйнаҡлап торған тай етәкләтеп ҡайтарҙым. Минең арҡала ике атлы булырға тораһығыҙ. Әйттемме — минең һүҙем бер.

Төлкөсура өндәшмәне, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк тә бар ине.

Туғайға төштөләр. Ул оҙон ғына.

— Бүрәнәләренде бына ошонда өйәһең, ана тегендә, ҡағын урынға әйөндө һалаһың. Торғаны бер хөрриәт инде, — тип урынды һаман маҡтауында булды Ҡотлоғужа.

— Туғайға ташҡын саҡта һыу сыҡмаймы һуң?

— Юҡ, ю-у-ҡ! Үҙ ғүмеремдә был туғайҙы һыу баҫҡанын күргәнем юҡ. Йылғаның аръяғынан икенсе волость ерҙәре башлана. Һеҙҙең биләмә ошо һыу буйлап түбәнгә ҡарай китә инде. Ана, күрәһегеҙме? Тау буйҙарында томрап ултырған ҡарағайлыҡ. Урман шәп инде ул беҙҙә, Артем Дмитриевич.

— Ярар, карап карарбыҙ. — Тирә-яғын тағы бер аҙ күҙәтеп торғас, Лапшин өҫтәне: — Был ер ултырыш итмәҫлек түгел.

— Күңелегеҙгә оҡшарын алдан уҡ белгәйнем инде, Артем Дмитриевич. Һеҙгә насар ер күрһәтә буламмы?! Хәҙер мин ҡайтайым инде. Һеҙ бына был ҡусты менән күңелегеҙ бөткәнсе йөрөп әйләнегеҙ. Төлкөсура ҡустым! — Бер ярыраҡ киткән Төлкөсура уның эргәһенә елеп килде. — Һин был кафырҙы йәйләү ултырышы менән Ҡыйғыр яланына алып барып сығара күрмә инде, ситләтеберәк үт. Ышаныс бармы ни уға. Был ер матурыраҡ тиер ҙә шунда ултырмаҡ булыр. — Лапшинга әйләнеп, русса өндәште: — Барығыҙ, йөрөп ҡайтығыҙ, Артем Дмитриевич. Ҡайтыуығыҙға мунса яҡтырып ҡуйырмын. Тик оҙон сәсен әҙерләп булмаҫ, бында ҡала түгел, хи-хи-хи...

«Юха йылан! — Төлкөсура асыу менән ситкә боролдо. — Үҙенең сабынлығын ситләп үтергә ҡуша. Ҡарап ҡарарбыҙ!»

Төлкөсура Лапшинде урмандар буйынса бик белдекле йөрөттө. Ағасты йылға буйына ташыу өсән ҡайһы тирәнән юл һалыу уңайлы буласағын күрһәтте. Туҡтап:

— Бына бынау уҫаҡтар көрәклек кенә бит! Үҙҙәре таҙа, үҙҙәре шараҡ, — йәки: — Бына бынау ҡарағайҙан тыранса ярырға мөмкин. Ҡатланып, һыҙырылып сығып ҡына торасаҡ, — тип һөйләнде.

Ҡойолған миләште сүпләргә төшкән һуйырҙар, ҡорҙар йыш ҡына ҡаптырҙап осоп күтәрелә, аҙым һайын тиерлек яртылаш ағарған ҡуяндар лапы аҫтынан ялп итеп килеп сығып, аттарҙы ҡолаҡтарын ҡайсылап, бышҡырынырға мәжбүр итә.

— Беҙҙең урмандар йәнлеккә бай, — тип һөйләй Төлкөсура. — Ҡулыңда мылтығың булһа, күпме йөрөһәң дә, астан үлмәйһең... Их, бына бынау имәнде ярғылап, сана табаны бөгөргә!

Лапшинга егет йөрөгән һайын оҡшай бара ине. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, белмәгәне юҡ бит бының. Бик аҡыллы ла күренә. Кәүҙәһенә, ҡулдарына, янып торған күҙҙәренә ҡарағанда, эшкә лә шәптер. Роман был егеткә юҡтан ғына һарлығып ятмай, күрәһең. Бындай шәп егеттәрҙе ҡулдан ысҡындырырға ярамай.

Шулай уйланып килгән Лапшин, ҡуйы ҡарағайлыҡ араһынан ҡапыл бер яланға килеп сыҡҡас, күҙе яҡты-

ға сағылған шикелле, күҙҙәрен сылт-сылт йомдо, атының теҙгенен тартты.

— Тукл... Ткул... Исемеңде әйтә алмайым да. Туҡта әле, егет.

Төлкөсура Лапшиндең ниңә туҡтарға ҡушыуын да, бөрөш күҙҙәрс менән әйләнә-тирәне ниңә ҡапшай башлауын да шундуҡ аңлаһа ла:

— Ниңә, Артем Дмитриевич — тип һораған булды.

— Бигерәк тә хозур ялан күренә бит был!

Төлкөсура уны юҡтан ғына Ҡыйғыр яланының бөтә ере ус төбөндәгеләй күренеп ятҡан түшләүҙән килтереп сығармағайны шул. Ҙур яланды өс яҡтан стеналай торған ҡарағай урманы солғап алған; уның урта тирәһендә ап-аҡ сауҡалар өйкөлөшөп үҫә. Был сабындың теләһә ҡайһы йылда тубылғып үҫкәнен белә Төлкөсура. Ана бит, Ҡотлоғужа нисәмә кәбән бесән ултыртҡан. Яландың бер яҡ ситe Норошҡа барып төртөлә ине.

— Тегеһе ниндәй йылға?

— Шул инде — Норош. Артем Дмитриевич, бик һыуһаттырҙы. Ана анауҙан һыу эсеп кенә китәйексе.

Төлкөсура уны тоноп ҡына ағып ятҡан шишмә эргәһенә алып килде. Атынан төштө, ситкәрәк барып, ағас төбөндәге сабылмай ҡалған ерҙән нәҙегерәк ҡурай алды. Бәкеһе менән ике сирек оҙонлоҡта киҫте лә шул ҡурай менән ҡарандан һыу эсергә тотондо.

«Ысын тәбиғәт балаһы был, — тип уға ҡарап һоҡлана Лапшин. — Старшина һымаҡ, услап һемермәй, нисегерәк рәтен тапты». Төшөп, уның эргәһенә килде, һыуһамаһа ла, ҡыҙыҡ күреп, ҡурай менән һыу эсте.

— Был ялан мин һатып алған ергә керәлер бит, егет?

— Әлбиттә. Биләмәгеҙҙең тап урта өлөшөндә.

— Беләһеңме, егет, миңә был ялан нығыраҡ оҡшай. Өйҙәрҙе ошонда һалдырам.

— Әллә шул, Артем Дмитриевич. Ҡотлоғужа ағай ниңә мин күрһәткән ергә һалмайһың тип бәйләнмәһә.

Лапшин, күҙен бөтәштереп, хихылдап көлдө.

— Кем һорап тора унан?! Был ер өсөн мин аҡса түләгәнмен бит. Межа эсендәге бөтә урын минеке. Өй һалам да шуның менән эше лә бөттө!

— Тик, Артем Дмитриевич, минең был яланға алып килгәнемде Ҡотлоғужаға әйтмәгеҙ.

— Ниңә?

— Ул бында һеҙҙе килтермәҫкә ҡушҡайны.

— Әһә, бына нисек икән! Аңлашыла, аңлашыла. Ярар, әйтмәм. — Саҡ ҡына ултырғас, Төлкөсураға хәйләкәр ҡарап өҫтәне: — Мин тәүҙә уға әйтмәй-нитмәй генә өй һалдырып ҡуям, унан ғауғалап ҡайҙа барыр икән. Шулай буламы?

— Булыр ҙа ул... Мин уға, Артем Дмитриевичтең аты нимәнәндер өркөп, ярһып сабып китте лә ошо яланға алды ла сыҡты, тип әйтмәксе инем.

— Хи-хи-хи-хи... — Рәхәтләнеп көлдө Лапшин. — Мут егет күренәһең һин! Был аҡыл да дөрөҫ. Үҙеңә бәйләнә-нитә ҡалһа, шулай тиерһең, мин дә раҫлармын. Әйҙә, киттек, егет!

Төлкөсура эйәр ҡанъяғаһына аҫылған суҡмарын атының ҡабырғаһына бәрелмәһен өсөн ипләберәк бәйләне лә атына һикереп менде.

— Ул нәмәкәйеңде ниңә тағып алдың? — тип һораны Лапшин.

Төлкөсура ғәҙәти генә итеп яуап бирҙе:

— Урманда ҡороғул йөрөргә яратмайым.

Улар тағы арыраҡ барып әйләнделәр ҙә ҡайтыу яғына ыңғайланылар. Лапшиндең күңеле күтәренке: ултырыш өсөн һәйбәт урын һайланы, тулыһынса булмаһа ла, биләмәһе менән танышты. Ҡотлоғужаға ла, Төлкөсураға ла бик иҫе китмәгән кеше кеүек һөйләнһә лә, һарғайып-томрап ултырған шәм шикелле ҡарағайҙарҙы күргәс, һарыҡ көтөүе күҙенә эләккән бүреләй, ҡыуанысынан үрле-ҡырлы һикерерҙәй булды ул. Шәп ине башҡорт урмандары! Урыны ла ярайһы уҡ уңайлы: Норош тулы һыулы йылға күренә. Яҙғы ташҡын менән Ағиҙелгә төшөрәһең дә унан һал бәйләтеп, теләһәң Әстрхандың үҙенә тиклем алып кит! Ул инде үҙенең кеҫәһенә меңәрләп аҡса ағыла башлаған һымаҡ тоя. Тик бына эште ҡыҙыурыраҡ башлап ебәрергә кәрәк, хаҡына ла әллә ни торорға ярамай. Ҡотлоғужанан күберәк тә түләргә мөмкин...

Лапшиндең татлы хыялдары шул ерҙә өҙөлдө. Ниҙер аты өҫтөнә, үҙенең арҡаһына бәрелә биреп, урҙән тып итеп килеп төшкәс, аты һикергән ыңғайға саҡ ҡолап төшмәне. Уға етә үк килгән Төлкөсура иһә хәлде күҙ асып йомғансы аңлап алды. Ғәжәп ҙур һеләүһен ырғыны Лапшин өҫтөнә ағас башынан, ләкин саҡ ҡына яҙ-

лыкты, хужаға тура килмәне, аттың осаһына барып төштө. Ул элмәк кенә итеп бәйләгән суҡмарын һә тигәнсе ысҡындырҙы ла. Лапшин уны-быны абайлағансы. ҡапыл алға уҡталды һәм рус баярының кейеменә ҡатлап иң өҫтән кейгән кәжәненән тешләп һелкетергә тотонған һеләүһендең мейеһен онтай һуҡты. Йыртҡыс лап итеп ергә ҡоланы. йәнтәстемгә ырғып тороп. ҡоро-юҡҡа үргә сирғыны һәм. Төлкөсура, эйәренән түбәнгә ынтылып, башына тағы бер тондорғас, оҙон кәүҙәһен тартыштырҙы ла тынып ҡалды.

Ҡыҙыл сырайы күл төҫөнә ингән Лапшин был тамашаның аҙаҡкы өлөшөн, әркеүҙән ярһып тыпырсынған айғырын тынысландырып аҙапланған сағында, үҙе лә күрҙе. Ул арала Төлкөсура атынан һикереп төштө, теҙгенен сауҡаға бәйләне, суҡмарын тап осондағы бауынан беләгенә элгән килеш әкрен атлап һеләүһен эргәһенә килде. Уның быға саҡлы бүтән кеше алған үле һеләүһенде генә күргәне бар ине. Шуға күрә йыртҡысты суҡмары менән төрткөләп ҡараны, унда йән әҫәре һиҙелмәгәс, ике артҡы ботонан тотоп күтәргәйне, ҡарап тороуға бәләкәй тойолған һеләүһендең оҙонлоғона иҫе китте: үҙе буйы тип әйтерлек.

— Артем Дмитриевич, килегеҙ әле!

Лапшин үҙе лә атын уның эргәһенә ҡыуа. ләкин айғыр күҙҙәрен алартып, танау тишектәрен быршылдатып, артына сигенә ине.

— Төшөп, ағасҡа бәйләгеҙ.

Төлкөсура эргәһенә килгәс тә, Лапшин байтаҡ ваҡыт өндәшә алмай торҙо, маңлайына бәреп сыҡҡан һалҡын тирҙе кәжән еңе менән һыпырҙы, шунан ғына:

— Бына был, исмаһам... ко-комедия! — тип телен саҡ әйләндерҙе.

«Комедия» тигәненең мәғәнәһен аңламаны Төлкөсура. «Башына тура һикергәндә, комедияны бирер ине», — тип уйлап уҫал көләмһөрәне һәм һеләүһенде ергә һуҙып һалды.

— Йәшәрен йәшәгән был йыртҡыс көнө бөтөп һикертәндер инде, — тип һөйләнде.

Лапшин яңы иҫенә килә төштө, күрәһең: үҙенә ниндәй ҡурҡыныс янауын тик хәҙер генә аңлап, башын сайҡаны, Төлкөсураға һоҡланып ҡараны.

— Рәхмәт, егет! Үлемдән ҡотҡарҙың һин мине!

Төлкөсураға уның был маҡтауы әллә ни тәьҫир итмәне.

— Ҡарап тороп булмай инде... Әйҙәгеҙ, киттек, Артем Дмитриевич, табыш та булды.

— Ҡитәйек һуң. Мин һине бының өсөн буш итмәм, егет.

Төлкөсура өндәшмәне, һеләүһендә аты эргәһенә һөйрәп алып китте, алан-йолан ҡаранған атын: «Тыр, хайуанҡай, тыррр...» — тип һөйләнеп тынысландыра-тынысландыра, уны эйәре аша ырғытты. Үҙе өҙәңгегә баҫып күтәрелгәс, күтәрмәгән табышты алдына һалып ултырҙы. Йыртҡыстың тәне ҡатып та өлгөрмәгәйне әле. Төлкөсура уны һыйпаштырып ҡараны. Йөнө шундай йомшаҡ, ҡулға рәхәтлек биреп тора.

— Әйҙә, һин алдан төш, — тине Лапшин, һаман тыныслана алмаған айғырын бер урында бейетеп.

«Ҡотоң бот буйыңа киткән икән», — тип уйлап, Төлкөсура теҙгенен тартты. Бер аҙ барғас, артынан Лапшиндең:

— Ҡара әле, егет, — тигән тауышын ишетте, — һин миңә лесник булып килмәҫһеңме?

Төлкөсураға уның был тәҡдиме ҡапыл ғына аңлашылып етмәне. «Урманын һаҡларға ҡушамы икән?»

— Ниндәйерәк эш була инде ул, Артем Дмитриевич?

— Ниндәй тип... Урманды һаҡлайһың, ҡырҡыу өсөн диләнкә бүләһең, ундағы тәртипте күҙәтәһең.

— Әллә инде.

— Айлап аҡса түләрмен. Бына һин үҙең айына күпме һорар инең?

— Улай айлап эшләгән юҡ бит, ҡайҙан беләһең инде уны.

— Мин үҙем лесниктәрҙе ҡыйырһытҡаным юҡ. Быға тиклем ете һум илле тиндән түләй инем. Көнөнә егерме биш тин көмөш. Әҙ аҡса түгел ул!

«Былай хаҡы арыу икән, — тип самаланы Төлкөсура. — Эшләп ҡарағанда инде...» — Егет һаман өндәшмәгәс, Лапшин:

— Сәй-шәкәр өҙөлмәйәсәк миндә, лавка асып ебәргәс, үҙемдә эшләүселәр өсөн бөтә әйбер буласаҡ, — тип өҫтәне.

— Атайым менән һөйләшеп ҡарармын әле.

— Һәй, бынау тиклем йыртҡысты һуғып йыҡҡан егеткә инде!.. Хәйер, һөйләш әйҙә, кәңәш ит. Килһәң,

яҡшы булыр ине. Роман менән дуҫлашып та алғанһығыҙ шикелле.

— Һеҙҙең улығыҙ — һәйбәт егет.

Урман һирәгәйҙе, танауға тиреҫ, төтөн еҫе килен бәрелде, улар ауылға яҡынлашҡайны инде.

## VI

Иртәгеһенә төшкә табан Ҡотлоғужа өйөнә күрше ауылдарҙан һәм Ҡаратауҙың үҙенән дә кешеләр инеп сыға башланы. Лапшин уларҙың һәр береһе менән айырым һөйләшә, һатыулаша, үҙенең шарттарын ҡуя ине. Бөтәһен бергә йыйып һөйләшергә теләмәне. Сөнки кеше күп ерҙә һүҙҙән-һүҙ сығып, эштең ҡатмарлашып китеү ихтималы булыуын һиҙә. Ышан һин ул мужиктәргә, үҙҙәренең әллә ниндәй талаптарын ҡуя башлауҙары бар.

Шулай ҙа баяр менән һөйләшеп сыҡҡандар ҙа таралырға ҡабаланмай, ҡапҡа тышына йыйылып, һөйләшеп, тапанып тора бирәләр.

— Былай хаҡы бик насар булмаҫ кеүек тә...

— Бүрәнә башынан иҫәпләп түләйем, ти бит әле ул. Ҡул ҡаушырып йөрөп кенә урыҫтан алырһың аҡсаны!

— Ҡул ҡаушырып йөрөгән өсөн берәү ҙә аҡса түләмәй инде.

— Аҡсаға ҡаратып алырға сәй-шәкәре, оно була, ти. Шуныһы һәйбәт әле уның.

— Ҡыуғынға барыусыларға хаҡты айырым — яҙ көнө һөйләшербеҙ, ти.

— Ни тиһәң дә, ағай-эне, йәйен-ҡышын эшләргә кәсеп була әле был. Юғиһә, ҡулың ҡысытҡанда ла, эше юҡ ине.

— Хәҙерҙән өй бурарға ҡушырға итә бит әле ул. Бура бурау күпмегә йөрөй һуң хәҙер?

— Ҙурлығына ҡарап инде...

Бына шулай гәп һатып тороусылар эргәһенә Төлкөсура ла килде, хәбәрҙәренә ҡолаҡ һалды. Ул атаһы менән һеләүһенде тунап йөрөп, быға тиклем килә алмағайны. Атаһы, аҙыраҡ уйлағас, улына лесник булып эшләп ҡарарға кәңәш иткәйне.

— Хаҡы хөрт түгел, ниңә Ҡотлоғужаныҡынан башҡа эш бөткән һымаҡ йөрөргә, — тине.

Ҡотлоғужаның баярға ултырыш өсөн үҙ сабындарын күрһәтеүе, үҙенең старшинаны нисек һемәйтеүе

тураһында атаһына һеләүһен тунағанда һөйләне ул. Торомтай, был хәбәрҙе ишетеп, улының отҡорлоғона ҡыуанды, Ҡотлоғужаның һөмһөҙлөгөнә йәне көйҙө.

— Башың эшләгән, улым, яҡшы иткәнһең. Ҡулыңдан бер ысҡынһа, ул ҡарундан бер күбәлек сабын алалмаҫһың.

— Уныһы шулай инде, атай. Лесник булып эшләй башлаһам, беҙ барыбер сабынһыҙ булмабыҙ. Тик бына бүтәндәр ни эшләр икән?

Торомтай һағайҙы.

— Ниңә, улым?

— Лапшин баяр, һатып алғас, бөтә ер минеке, тип бик ҡаты һөйләшә. Сабынлыҡтарҙы кешеләргә бирмәҫкә уйлай шикелле.

— Сходта был хаҡта һүҙ булғайны ла булыуын.

— Ҡотлоғужа бай менән иҫәпләшмәгәс, бүтәндәр уға сүп кенә. Сходтағы һөйләшеүгә ҡарап торамы ни ул.

— Белмәйем, улым, бер ни ҙә әйтә алмайым. Ҡотлоғужа менән икәү-ара улар нисек тә килешер. Эш улайға китһә, беҙҙең кеүек ярлы-ялпыға ауырлығы төшөүе бар шул.

— Минең башҡа бер уй килгәйне лә ул, атай.

— Ниндәй уй һуң ул?

— Баярҙың сабынлыҡтарҙы бирмәҫкә ниәтләүен ағай-эненең ҡолағына төшөрөргә кәрәк. Баяр менән хәҙерҙән ҡатыраҡ һөйләшеп ҡуйһындар.

— Был аҡылың дөрөҫ һымаҡ та, улым, һинең ошо хәбәрҙе таратҡаныңды ишетһә, баяр асыуланмаҫмы һуң?

— Асыуланып ҡайҙа барыр тиһең...

Шулай ҙа Төлкөсура, ныҡлабыраҡ уйлап ҡарағас, һағыраҡ ҡыланырға кәрәк тигән фекергә килде. Һеләүһенде тунап бөткәс, бер нисә иптәшенә барҙы, баярҙың сабынлыҡ хаҡында нимә һөйләнгәнен уларҙың ҡолағына тište. Атайҙарығыҙҙың ҡолағына төшөрөгөҙ, кемдән ишеткәнде әйтмәгеҙ, тине.

Ҡыскә табан Ҡотлоғужаның өйө тирәһенә байтаҡ йыйылып киткән халыҡ араһында көтмәгәндә һүҙ ҡуйырҙы, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа хәбәр китте.

— Баяр үҙе һатып алған ерҙәрҙәге сабынды бирмәҫкә итә, ти бит...

— Ҡалай-ҡалай була инде ул?

— Ҡалай булһын, бесәнһеҙ ҡалаһың!

— Сходта сабындар үҙебеҙгә ҡала, тип һөйләшкәйнек бит.

— Әйттең хәбәр, баярҙың законы үҙ ҡулында!

— Купчийгә, сабындар үҙебеҙгә ҡала, тип яҙылдымы икән һуң?

— Унын купчийен кем уҡып ҡараған!

— Ағай-эне, былай гәп һатып тороуҙан файҙа юҡ, баярҙың үҙе менән был турала хәҙерҙән нығлап һөйләшәйек.

— Сабындарҙы бирмәйем тиһә, эшенә беребеҙ ҙә сыҡмайыҡ.

Күрше ауылдан килгән берәү тағы ла уçалыраҡ хәбәр ысҡындырҙы:

— Эш былайға китһә, унан яманыраҡын да ҡылып була! Томанын туҙҙырып, үҙен ҡыуабыҙ!

— Ҡыуҙың! Ана китеп бара ине!

— Күмәкләп тотонһаҡ, ниңә ҡыумаçҡа?..

Төлкөсура халыҡтың геүләшкәнен тыңлай, иçке сәкмән, ҡатҡан тун, тышы уңып бөткән бишмәт кейгән кешеләрҙең сабын мәсьәләһен был көйө генә ҡалдырмаçын уйлап ҡыуана.

— Ағай-эне, ғауғалашмағыҙ әле! Ҡотлоғужа купчийҙе уҡып күрһәтһен. Унда сабын тураһында яҙылғанмы-юҡмы, тәүҙә шуны беләйек.

— Дөрөç!

— Ҡотлоғужа үҙе сыҡһын!

Өйөнә инә-сыға йөрөгән Ҡотлоғужа был һөйләшеүҙәргә тәүҙә үк ҡолаҡ һалды. Борсолмағыҙ, сабын мәсьәләһе һөйләшелгән бит, баярға сабынлыҡтар өсөн артыҡ урман бирелде, тип халыҡты тынысландырырға ла уйлап ҡуйғайны, тыйылды. «Һиңә урманды артыҡ бирергә кем ҡушты?», «Күпме артыҡ бирҙегеҙ?» — тип бәйләнеп алыу китеүҙәре бар. Ә бына купчийгә сабын хаҡында бер һүҙ ҙә яҙылмаған, телдән генә килешелгән. Үҙенең сабынһыҙ ҡалыуы тураһында башына ла килтермәй Ҡотлоғужа, етерлек бесәнде барыбер әҙерләтәсәк. Ләкин сабын буталсығы килеп сыҡтымы, кешеләрҙең иң тәүҙә уның ҡолаҡ итен ашаясағын көт тә тор.

Ҡотлоғужа халыҡтың ниңә ғауғалаша башлауын Лапшингә әйтеүҙе, кәңәшләшеп алыуҙы мыуафиҡ күрҙе. Эш тураһында һөйләшеп ултырған кеше сыҡкас, уның эргәһенә төпкө өйгә инде.

— Мин һеҙгә ҙур мәшәҡәт тыуҙырҙым инде, Ҡотлоғужа әфәнде, — тип ҡаршыланы Лапшин. — Өйөгөҙгә хужа булып тигәндәй ултырам бит.

— Тыштағылар тағы ла ҙурыраҡ мәшәҡәт ҡубарырға аҙаплана әле, Артем Дмитриевич.

— Ни бар һуң унда?

— Сабын тураһында һүҙ ҡуйырталар. Беҙ бит, Артем Дмитриевич, сходта былай килешкәйнек: һатҡан биләмәләге сабындар үҙебеҙгә ҡала, беҙ һеҙгә уның урынына урманды артығыраҡ бирәбеҙ. Теге Ҡаргов һеҙгә ошо хаҡта әйтмәнеме ни?

Лапшиндең әле генә йәйрәп йылмайыуы сырайынан һыпырып алғандай ғәйеп булды.

— Мин һеҙҙе аңлап еткермәйем, Ҡотлоғужа әфәнде. Хәләл аҡсамды түләп алған ергә тулыһынса мин хужа булырға тейеш бит инде. Ҡаргов иһә сабынлыҡтар тураһында бер ни ҙә әйтмәне, купчийҙә лә ул хаҡта бер ауыҙ һүҙ яҙылмаған. Ғөмүмән, быға тиклем ер һатып алғанда бындай бәхәстең ҡуҙғалғаны ла булманы, сөнки ул — бәхәсһеҙ эш. Ерҙе бер ваҡытта ла өлөштәргә бүлгеләп, урманы — һиңә, яланы — миңә, тип һатмайҙар. Аҙаҡ килеп, Ҡотлоғужа әфәнде, — Лапшин мыҫҡыллы йылмайып ҡараны, — иҫегеҙҙәме, мировой менән һеҙгә Стәрлетамаҡта артыҡ урман өсөн нисә йөҙ һум аҡса сығарып һалғайным әле?

Ҡотлоғужа уның һөйләгәнен баш баҫып тыңланы. Лапшиндең үҙ һүҙҙәренең дөрөҫлөгөнә ныҡлы ышаныс менән, эҙмә-эҙлекле итеп һөйләүе уны, ауыр йөк шикелле, баҫҡандан-баҫа барҙы ла аҙаҡҡы һүҙҙәр һеңгәҙәтә килтереп һуҡты. Ипләп кенә, ләкин йөрәккә тоҫҡап атылғайны улар.

— Әгәр был аҡса береү хаҡында ла купчийгә яҙылмаған, белгәнем дә, күргәнем дә юҡ тип әйтергә уйлаһағыҙ, мин һеҙгә, Ҡотлоғужа әфәнде, намыҫығыҙға мөрәжәғәт итеп ҡарарға кәңәш бирәм.

Ҡотлоғужа ауыр күренгәндә, ултырған еренда тегеләйбылай әйләнгеләне.

— Ул тиклем һүҙгә барып етмәйек әле, Артем Дмитриевич. Бында бит...

— Һүҙҙе мин түгел, һеҙ башланығыҙ.

Бәй, был кеше уның өйөндә йәйелеп ултырып алған да уға һүҙ әйтергә лә ирек бирмәҫкә, ауыҙын томаларға маташа түгелме? Ниңә ебеп төштө әле Ҡотлоғужа? Ул

бындай саҡтарҙағы иң ышаныслы ҡоралына — халыҡ исеменән һөйләшеүгә тотондо.

— Һүҙҙе мин түгел, ә халыҡ башланы. Ишетмәйһегеҙме ни, баянан бирле геү киләләр. Артығыҙҙы ла уйлап ҡарағыҙ.

Ҡырт ҡына әйтелгән был һүҙҙәр Лапшингә бермәбер тәьҫир итте, тыштағы тауыштарға ҡолаҡ һалғандай, һағайып, шымып ҡалды. Ҡотлоғужа иһә, уңайлы мәлде ҡулынан ысҡындырмай, һөжүмгә күсте.

— Эйе, уйлап ҡарағыҙ, Артем Дмитриевич, һеҙҙең һатып алған ер — беҙҙең волостәге бер утрау ғына. Уның ғүмер буйы ошо тупраҡта йәшәгән кешеләр тарафынан уратып алыныуын, ул кешеләр араһында сая ирҙәрҙең дә етерлек икәнен онотмаҫҡа кәңәш итәм. Һеҙгә ул ҡәҙәр сабынлыҡ нимәгә? Малдарығыҙға етерлек бесәнде бер ҙурыраҡ яланда еткерә алаһығыҙ.

— Мин үҙ еремдә ят әҙәмдәрҙең буталып йөрөгәнен күргем килмәй, Ҡотлоғужа әфәнде, — тине Лапшин, йомшара төшөп. — Бер ергә ике хужа булырға тейеш түгел. Унан килеп, был турала ғауғаны ниңә әле күтәрҙе икән һуң улар? Кем башлаған?

— Уныһы миңә ҡараңғы.

— Был һүҙегеҙ төптө хата. Бындай һүҙ башлаусыларҙы белергә кәрәк, Ҡотлоғужа әфәнде! Әгәр шулай «ҡараңғы» тип, ваҡытында уларға сараһын күрә бармай йөрөһәк, улар үҙҙәре беҙгә берәй «сара» уйлап тапмаһын! Онотма быны!

Шул саҡ алғы өйгә кемдәрҙеңдер килеп ингәне ишетелде. Ҡатыны ике кешенең инергә теләүен әйткәс, Ҡотлоғужа уларға ҡаршы сыҡты. Инеүселәрҙең береһе күрше ауылдан, икенсеһе — Ҡаратауҙыҡы.

— Беҙҙе йәмәғәт ебәргәйне, — тине өлкәнерәк ир. — Һинең сығыуыңды һорайҙар, Ҡотлоғужа.

— Сабынлыҡ мәсьәләһендә. Купчийҙе уҡып күрһәтһен, тиҙәр, — тип өҫтәне йәшерәге.

«Бына башлана хәҙер. Ниндәй әмәлен табырға? Нисектер тынысландырырға кәрәк бит инде быларҙы... Туҡта, Лапшинден үҙен алып сығып, халыҡ алдында бергә һөйләшергә кәрәк». — Шулай уйлап, Ҡотлоғужа инеүселәргә алмаш-тилмәш ҡараны.

— Әйтә тороғоҙ, хәҙер сығырбыҙ.

Ҡотлоғужанан халыҡтың ни талап итеүен ишеткәс, Лапшин икенсе төрлөрәк уйланы. Ул һуңғы осорҙа «де-

мократия» тип һөйләнеүселәрҙең үрсеп китеүен, «народник» тигән бәндәләрҙең халыҡ араһында батшаға ҡаршы төрлө ҡотҡо таратып йөрөүен, ҡалаларҙа ла, ауылдарҙа ла баш күтәреүҙәр, сыуалыштар йышайыуын белә, ғөмүмән, Рәсәй эсендә булып ятҡан бөтә хәлдәр менән дә хәбәрҙар ине. Шуға күрә бында килгәнсе үк урындағы халыҡта үҙенә һәйбәт ҡараш тыуҙырыу, таяныс булырҙай кешеләр табыу тураһында ғына түгел, ҡотҡо һалып, ығы-зығы тыуҙырып йөрөүселәрҙе һәр төрлө ысулдар менән аяуһыҙ рәүештә юлдан алып ырғытыу кәрәклеге хаҡында ла уйлап ҡуйғайны. Шуға күрә халыҡ алдына сығыуҙан, улар менән һөйләшеүҙән баш тартманы.

Ҡотлоғужа үҙҙәрен тығыҙ ҡулса менән уратып алған халыҡҡа күҙ йүгертеп ҡарап сыҡты һәм купчий ҡағыҙҙа сабынлыҡ тураһында яҙылмауын, телдән генә килешелеүен әйтте. Шул уҡ ваҡытта бер кемдең дә сабынһыҙ ҡалмаясағына ышандырырға тырышты. Кешеләр үҙ-ара байтаҡ бәхәсләшкәндән аҙаҡ ярһып алғайны.

— Беҙ сабынлыҡ һатманыҡ, урманды ғына һаттыҡ!..

— Баяр күҙ алдыбыҙҙа үҙе әйтһен: сабынлыҡтарҙы бирәме, юҡмы?

Ҡотлоғужа ошо һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатҡас, Лапшин кешеләр төшөнөрҙәй ябай ғына итеп һөйләргә тотондо. Ерҙең бер ваҡытта ла өлөштәргә бүлеп һатылмауын, шуға күрә сабынлыҡтар тураһындағы һүҙҙең купчий ҡағыҙына дөрөҫ ҡыҫтырылмауын әйтте.

— Тимәк, һеҙ юҡҡа ғына ғауғалайһығыҙ, йәмәғәт. Үҙегеҙҙе ер өсөн бик ҙур һалым түләүенән ҡотолдорғанға рәхмәт әйтәһегеҙ генә бар. Ғөмүмән, мин тәртипһеҙлекте яратмайым. Әгәр киләсәктә кем дә кем юҡҡа-барға тауыш күтәреп, бүтәндәрҙе ҡотортоп йөрөй, ундайҙарға миндә эш булмаясаҡ.

Уның, тағы ни әйтергә инде был йолҡоштарға, тип уйланып тороуынан файҙаланып, халыҡ ҡуҙғалып ҡуйҙы, тәүҙә үҙ-ара һөйләштеләр, унан тағы вата-емерә русса ла, башҡортса ла һорауҙар яуа башланы:

— Сабынлыҡтарҙы бирмәҫкә уйлайһың инде?

— Ул саҡта беҙ ерҙе һатмайбыҙ!..

— Йәйләү ҙә уға ҡаламы икән ни?

— Йәйгелеккә ҡайҙа күсербеҙ һуң?..

Бая Ҡотлоғужаны саҡырырға өйгә ингән өлкән йәштәрҙәге кеше алғараҡ сығып баҫты.

— Һин уға шуны әйт әле, Ҡотлоғужа ағай, әгәр ҙә мәгәр ул беҙгә сабынлыҡтарыбыҙҙы бирмәй икән, эшенә ике аяғымдың береһен атламаясаҡмын, үәт!

Ҡотлоғужа уның һүҙҙәрен ҡайһылайыраҡ итеп руссаға әйләндерергә уйлап торған арала, тирә-яҡтан:

— Мин дә бармайым!

— Беҙ ҙә сыҡмайбыҙ! — тигән тауыштар ишәйҙе.

Лапшин, был турала ишеткәс, битен йәйрәтеп йылмайҙы, мин бит һеҙгә яҡшылыҡ ҡына теләйем тигән мәғәнәлә башын сайҡаны.

— Йәмәғәт, мин бит әйтер һүҙемде әйтеп бөтмәнем әле, ә һеҙ ғауғалай башланығыҙ. Әлбиттә, бөтә эште лә законда ҡаралғанса ғына эшләп булмай. Беҙгә бергә-бергә йәшәргә тура киләсәк. Үҙем йорт һалып ултыраcаҡ яландан башҡа сабынлыҡтарҙы һеҙгә бирәм. Изгелегемде күрегеҙ әйҙә, — тине Лапшин, ләкин шунда уҡ ҡырыҫ тауышҡа күсеп, өҫтәне: — Тик бер генә төп ағасҡа ла теймәгеҙ! Килештекме?

— Килештек!

— Үҙең кире уйлама!

Халыҡ әкренләп таралыша башланы.

Ҡотлоғужа менән Лапшин дә өйгә инде. Ике байҙың сырайында ла нык ҡына борсолоу күренә, ләкин быны бер-береһенә белдермәҫкә тырышыуҙары һиҙелеп тора ине.

* *
*

Күмәк кеше тотонғас, эш түҙәме ни? Бураны ағас ҡырҡҡан урында уҡ буранылар. Шунда уҡ кузла яһап, бысҡы менән таҡта яралар, өй башын ябыу өсөн, тырансa һыҙыралар, мүк тә әҙер. Маслов тигән әҙәм, ҡарап тороуға бик ҡотһоҙ күренһә лә, харап эшмәкәр, тынғыһыҙ кеше булып сыҡты. Бер кемгә лә илке-һалҡы йөрөргә ирек бирмәй, күрһәтмәләрен өҙләкһеҙ яуҙырып ҡына тора. Лапшин кемде приказчик итеп алырға белгән, күрәһең.

Баяр үҙенең һуңғы күрһәтмәләрен биреп, бөтә эште Маслов менән Романға ышандырып, ҡайтып киткәйне инде. Ул Стәрлетамаҡтан тейәтеп ебәргән ишек күгәне, сығанаҡ, тотҡа, ҡаҙаҡ кеүек әйберҙәр ҙә кисә килеп етте.

Романдың артыҡ эше юҡ, күберәк Төлкөсура менән бергә йөрөй. Икәүһе, тәүге осорҙа бүрәнә ырҡыу өсөн, сәп юнып, диләнкә бүлделәр; яр буйында ҡаҙыҡтар ҡағып, бүрәнә өйөү урындарын билдәләнеләр. Маслов әйткән бүтән ҡайһы бер йомош-юлға йөрөнөләр.

Ҡөндәр апаруҡ һыуытып, өҙлөкһөҙ тиерлек рашҡы яуғанлыҡтан, эшләүселәргә ҡыйын ине: өҫтән дә яуа, ер ҙә бысраҡ, ҡайҙа баҫма — тайғаҡ. Шулай ҙа улар бил яҙмай эшләй. Сөнки Лапшин, эш хаҡына ҡарата таратыу өсөн, бер нисә йөк он ебәрәм, тип китте. Ҡышҡылыҡҡа йыйынып ҡала алмаусыларҙы ошо яғы бигерәк тә ҡыҙыҡһындыра.

Ауыл тормошо ла үҙ көйөнә бара.

Торомтай баяр эшенә тотоноуҙан тыйылып торғайны. Яндырған күмерен әүеш-тәүеш итеп, ҡышҡылыҡҡа ашанты, ғаиләгә кейем-һалым рәтләйһе бар. Төлкөсура баярҙа лесник булып эшләргә ризалыҡ бирһә лә, Роман менән һөйләшеп, эш башламаҫ борон яланға күмерҙе тәүге юлы ике атта алып сыҡтылар. Торомтай:

— Үҙ эшеңә тотон һин, улым. Күмерҙе мин, өс юллаһам да, әкренләп һатып бөтөрмөн, — тигәйне, Төлкөсура риза булманы.

— Бер юлы эште бөтөрәйек, көндәрҙең ныҡ боҙолоп китеүе бар бит, атай, — тип ныҡышты.

Был ныҡышлыҡтың үҙенә күрә хикмәте барлығын белмәй ине, әлбиттә, Торомтай. Улының күңелен иһә әллә ниндәй билдәһеҙ көс ҡалаға ымлай. Билдәһеҙ тип, улай ҙа түгел, Төлкөсураның, тағы ла бер тапҡыр ғына булһа ла, ғүмерендә тәүге мәртәбә осратҡан сихырлы зәңгәр күҙҙәргә ҡарап торғоһо килә ине.

Ҡалаға етеп, таныш ҡунаҡхананың һәр төрлө арбалар менән тулы ихатаһына килеп инеү менән, Төлкөсура, теге татар ҡыҙын күрергә ымһынып, тирә-яғына күҙ йүгертте, ләкин ул бер ҡайҙа ла күҙгә-башҡа салынманы.

Улар аттарын туғара ғына башлағайны, теге юлы килгән саҡта уҡ Төлкөсураның хәтерендә ҡалған һыҙма мыйыҡлы, туҫтаҡ битле хужа эргәләренә килде лә, асыуланып:

— Ниңә һорашмай-нитмәй ат туғараһығыҙ?! Өйҙә бер урын да юҡ! — тип екерҙе.

Торомтай тәүҙә аптырап ҡалғайны, шунан:

— Улай тимә инде, Сабир әфәнде, бер кискә тере һөйәк һыйыр әле, — тине, уға ялбарыулы ҡарап.

— Юҡ-юҡ! Урын булһа, йәлме ни минә. Барығыҙ, бар, икенсе фатир юнләгеҙ.

Торомтай ҙа, Төлкөсура ла ниндәй әмәлен табырға тигән ҡиәфәт менән баштарын түбән эйеп тора ине, китә башлаған хужа алдына теге зәңгәр күҙле ҡыҙ килеп баҫты.

— Сабир абзый, һин уларҙы кире сығарма инде.

Хужа уға, күҙен алартып, аптырап ҡараны. Ә Төлкөсураны иһә был тауыш ҡапыл тетрәтте, әйтерһең, ҡараңғы урман эсендә төңөлөп, өмөтһөҙлөккә бирелеп ултырғанда, һандуғас һайрап ебәрҙе. Ул ошо тауыш килгән яҡҡа йәлп итеп боролдо. Өҫтөнә йоҡа бишмәт кейгән, башына сәскәләре уңып бөткән шәл бәйләгән ҡыҙ хужа алдында ҡулдарын ыуғылап баҫып тора.

— Ике кеше китергә йыйына... хәҙер сығалар, Сабир абзый, урындары бушай... — Хужаның уҫал ҡарашынан ҡаушап, һүҙен саҡ-саҡ әйтеп бөттө ҡыҙ.

Хужа, артына боролоп та ҡарамай, Торомтайға:

— Туғарығыҙ!.. — тип ҡул һелтәне лә лап-лоп баҫып, ҡапҡа яғына ыңғайланы.

Үҙ һүҙенең бушҡа китмәүенә ҡыуанған ҡыҙ Төлкөсура яғына күҙ һирпеп алды, йәлп итеп әйләнде лә арҡыс-торҡос торған арбалар, аттар араһынан үҙ йомошо менән ҡайҙалыр югерҙе.

Иҫәңгерәп, һаман тик торған Төлкөсураға атаһы:

— Туғар инде атыңды. Тамаҡ ялғай һалырбыҙ ҙа баҙарға сығырбыҙ, — тип һүҙ ҡушты.

Ҡитсе, әллә ни булды Төлкөсураға. Ҡамытының тамаҡбауын сисә алмай аҙапланды, ҡулына тотҡан бер нәмәһе төшөп барҙы, арба тәртәһенә эләгеп йығыла яҙҙы. Башында: «Беҙҙең килгәнде күреп ҡалдымы икән?.. Мине танып, шуға килеп еткәнме әллә?.. Бигерәк тә инде ут һымаҡ... Теге саҡта Ашҡаҙар буйындағы ауылдан икәнен әйткәйне. Хужаның туған-ырыуымы әллә ошонда эшләп йөрөүсеме икән?..» — тигән өҙөк-өҙөк уйҙар ҡайнашты. Атаһы:

— Мин хәҙер сәй әҙерләтәм, — тип өйгә ингәс тә, ул арбаһы эргәһендә тора бирҙе һәм:

— Ҡурайсы абый... — тип ҡыйыуһыҙ ғына өндәшкән тауышҡа терт итеп, башын күтәрҙе.

Унан бер-ике генә аҙымда әлеге ҡыҙ баҫып тора ине.

— Исемең кем һинең? — Был һүҙҙәрҙең ауыҙынан нисек сыҡҡанын Төлкөсура үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

Ҡыҙ иһә, әйтерһең, уның һорауын ишетмәне.

— Мин һине күргәс тә таныным. Хужа кире сығарып ебәрәме тип торам.

Күргәс тә таныным, ти. Был һүҙҙәр Төлкөсураға үҙ ғүмерендә ишеткән иң яғымлы хәбәр һымаҡ тойолдо.

— Исемең кем һинең, ҡәрендәш?..

— Сажидә... Үҙеңә кем тип әйтәйем, абый?

— Төлкөсура мин... — Тамағына ниҙер төйөлгәндәй, Төлкөсураның тауышы өҙөлдө, шунан ниңәлер өҫтәне: — Ҡаратауҙыҡы.

— Уй, исемең дә әллә нисек кенә икән!.. — Ҡыҙҙың төпһөҙ күлдәй күҙҙәрендә хәтәр осҡондар һикергеләне.— Ә Ҡаратауҙы белмәйем.

— Белмәйем, тиһеңме? — Төлкөсура ысынлап аптыраны. — Беҙҙең яҡмы...

Ул Ҡаратауҙы маҡтай башларға уйлағайны ла, атаһының тауышы ишетелде.

— Ниңә оҙаҡланың? Әйҙә ашарға!

Төлкөсура ҡыҙға ҡараны, уныһы керпектәрен түбән төшөрөп, аяҡ остарына төбәлеп тора. Төлкөсура, шуға асыу иткәндәй, ялбыр бүркен көс менән маңлайына баҫыбыраҡ кейҙе, бер-ике аҙым атланы ла туҡтаны.

— Сажидә...

Ҡыҙ, боролоп, уға ҡараны. Их, суҡынмыштың күҙҙәре! Телһеҙ итте егетеңде. Төлкөсура, ни әйтергә уйлағанын онотоп, эре аҙымлап, өйгә табан атланы.

Ниңә онотто икән шул саҡта әйтә торған һүҙҙәрен? Ниңә ҡабаланып китеп барҙы?

Он һатып алып, шуны тейәргә кәрәк булғанлыҡтан, баҙарға аттарын егеп сыҡҡайнылар. Эштәрен тиҙ бөттәләр. Көн иртә ине әле. Шуға күрә Торомтай ҡунаҡханаға ҡабат барып тороуҙы кәрәк тапманы. Ун биш саҡрым самаһындағы ауылға етеп, шунда ҡуныу өсөн, ҡаланан сығып киттеләр.

Төлкөсураның иһә уй-тойғолары сигенән аша, көҙгө бысраҡ юлда сыптырҙап, әкрен генә алға ҡуҙғалған арба өҫтөндә ултырған еренән берсә моңая, шунан, уйынсыҡ күргән балалай, йылмая, быуындары шытырҙағансы, осоп китергә теләгәндәй, ҡолас йәйеп кирелә, көрһөнә. «Сажидә!.. Исеме әллә нисек ят та, үҙе матур ҙа бит әле. Их, ҡабат барып булманы!..» Ҡунаҡханаға ки-

ре әйләнеп барһалар, ни эшләр ине — быныһын Төлкөсура үҙе лә белмәй. Тик ул хәҙер бөтә күңеленән бер нәмәне асыҡ төшөнә: сымыры кәүҙәле, саф ҡараштарынан нур бөркөүсе был һөймәлекле ҡыҙҙы ғүмеренә онотасағы юҡ.

...Атаһы тағы ялан сыҡмаҡсы булғас, ул был юлы ла ҡалышмаҫҡа теләүен аңғартҡайны ла, Торомтай:

— Бер тотонғас, эшенде булмә. Баярҙа ла бушҡа йөрөмәйһең бит, төшөмлө кәсеп, — тип ауыҙ ҙа астырманы. Бер йөклөк күмерҙе ике арбаға тейәп йөрөү ҙә мәғәнәһеҙ ине. Шуға күрә ныҡышманы Төлкөсура. Атаһы яңғыҙы ғына китте, бөгөндәргә әйләнеп ҡайтыр инде. Атаһының ҡайтыуын иңәлер түҙемһеҙләнеп көтә ул. Әйтерһең, Торомтай улына әллә ниндәй йылы хәбәр алып ҡайтасаҡ...

* *
*

Ҡотлоғужа хужалығында ла ҡыҙыу эш ҡайнай. Юкәләр ташылып, кәбәнгә һалдырып ҡуйылды, алты кәбән бесән дә өй эргәһенә килтерелде. Былары артынан Уйылданға югерергә тура килде. Ҡотлоғужа үҙе иһә Ырғыҙ яҡтарына алып барып һатыу өсөн бер өйөр йылҡы алып киткәйне, һаман хәбәр-хәтере юҡ әле.

Уйылдан унын ҡайтыуын түҙемһеҙләнеп көтә. Атаһының көҙгө эштәрҙе түңәрәкләйек тә унан күҙ күрер тигән һүҙҙәрен онотмай. Атаһы, әсәһе менән һуңғы тапҡыр һөйләшеп, Миңлегөлгә яусы ебәрмәксе. Ул әсәһенең үҙһүҙлерәк икәнен, хатта ҡайһы берҙә Ҡотлоғужа тиклем Ҡотлоғужаны үҙ яғына ауҙарырға хәленән килеүен бик яҡшы белә. Шуға күрә бөгөн бесән ташыусыларға кискелекте ашатып оҙатҡас, атаһы ҡайтҡанға тиклем үк унын ҡылын тартып ҡарау уйы менән, Уйылдан, уф итеп урындыҡҡа килеп ултырған әсәһенә күҙ ташлап, ҡаға-һуға ғына һүҙ башланы.

— Һин дә арып китәһендер инде, әсәй, эш бигерәк күп.

— Һөйләмә лә инде, улым. Үлә яҙып эшләп йөрөлә, әллә кемгә ҡала торған донъялыр инде. Һуңғы ваҡытта сәләмәтлегем дә юҡ. Ауырып-һыҙлап китмәһәм ярар ине тип ҡурҡып ҡына йөрөйөм.

— Үҙеңә берәй ярҙамсы алып бирһәм, арыу булыр ине лә бит, әсәй.

Әсәһенең йонсоу йөҙө асылып китте, улына табан шылышыбыраҡ ултырҙы.

— Эй улым, улым, ауыҙыңдан ҡасан ошо һүҙҙе ишетермен тип кенә йөрөйөм бит мин. Бөтә уйым — шул килен алыу, шунан башҡа донъя ыҙаһынан ҡотолоу юҡ минә...

Әсәһенең күҙенән хатта йәштәр тәгәрләп сыҡты.

— Ниңә илайһың, әсәй, юҡты ни... — тип һөйләнде һүҙҙе артабан нисегерәк ялғап алып китергә белмәгән Уйылдан.

Ике өрсөк күҙ йәшен яулыҡ осо менән һөртөп ҡороҡас, әсәһе һағайып ҡына һораны:

— Улым, күҙләп йөрөгән берәй ҡыҙың бармы һуң?

— Бар ҙа ул, әсәй...

— Кем? — Әйтерһең, берәйһе ишетеүҙән ҡурҡа, әсәһенең тауышы бышылдап ҡына сыҡты.

— Атайым әйтмәнеме ни? Ул белә бит.

— Аһ-аһ, юҡсы... Ул ҡыртыштың ауыҙынан һүҙ сығамы ни, әйтә һиңә. Кем һуң ул ҡыҙ?

— Миңлегөл.

— Ы-ыы... Ғәрифәнең ҡыҙын әйтәһеңме ни?

— Эйе, әсәй, унан башҡа мин бер кемде лә алмайым.

Әсәһе аҙ ғына һүҙһеҙ ултырҙы. Уйылдан уның ни әйтерен түҙемһеҙләнеп көтә ине.

— Былай мин үҙем дә ҡараштырып йөрөй инем ул ҡыҙға. Тик бына холҡо менән һис тә әсәһенә оҡшамаған, атаһына тартҡан, уҫалыраҡ булмаһа, тиеүем.

— Ҡайҙан уҫал булһын, шул тиклем һәйбәт ул, әсәй, тик аҙ ғына шаянbackыраҡ. Саялығы ла бар...

— Һәй улым, улым, күҙең төшкән кешеңдең китеген күреү өсөн, уның менән ете кисеү кисергә кәрәк, тигән боронғолар. Былай мин үҙем дә үтә ебек кешене яратмайым. Етеш донъянан иркә килен дә алып ултыртып ҡуйғым килмәй. Үҙең ҡаты ғына тотһаң, бер ҡайҙа ла бармаҫ. Миңлегөлдө яусыларға фатихамды бирәм, улым. Башҡа рәтле ҡыҙҙы ла белмәйем. Былай, үҙе менән һөйләшкәнең бармы һуң?

— Бар, әсәй, бар! — Уйылдан шатлығынан ырғып торҙо. — Ул ни — риза инде.

— Атайың ни тигәйне һуң?

— Көҙгө эштәрҙе бер төрлө иткәс, ҡарарбыҙ, ти ине. Һин риза булғас инде, ул әллә ҡайҙа бармаҫ.

Бөгөн йәштәр Ҡотдостарҙың өйөнә ултырмаға йыйылырға тейеш ине, Уйылдан унан-бынан кейенде лә шунда сығып югерҙе. Моғайын, Миңлегөл дә шунда булыр тигән өмөт ҡыуалай ине уны.

Ҡотдостоң ата-әсәһе күрше ауылға ҡунаҡҡа киткәйне. Йәштәр иһә йыйылырға шундай аулаҡ өйҙө көтөп кенә торалар. Тышта шөкәтһеҙ көҙ хөкөм һөрһә лә, уларҙың күңеле дәрт менән тулы, күңел асып, шашынып ҡалыу өсөн яй эҙләй. Бөгөн дә аулаҡ өйгә ҡыҙҙар, егеттәр байтаҡ йыйылғайны. Йөҙөк һалыш уйынын башлап та ебәргәндәр. Ана, түрбаш яҡтараҡ Миңлегөл дә ултыра. Уйылдан килеп ингәс, уға күҙ һирпеп кенә алды, үҙе йөҙөк һалыусының килеп еткәнен көтә.

— Һуңланың, Уйылдан. Бер ҡул үткәнсе көтәһең инде.

Уйылдан бүтәндәргә ҡамасауламау өсөн урындыҡ янына үтмәне, стенаға терәлде. Ул, эш менән булашып, һуңғы ваҡытта Миңлегөлдө күргәне юҡ ине. Ҡара һин уны, ҡайһылай ялт иттереп кейенеп алған! Өҫтөндә — ҡыҙыл сатин күлдәк, башында — өр-яңы шәльяулыҡ, уның аҫтындағы ҡашмауының мәрйен баулы тәңкәләре нәфис маңлайына һалынып төшкән. Был кейемдәр уны бигерәк матур күрһәтә. Ана, йоҡа ирендәрен беленер-беленмәҫ кенә ҡуҙғатып, эргәһендәге әхирәтенә ҡарап йылмайҙы. Их, ҡасан ғына бергә йәшәй башларҙар икән?!. Туҡта, туҡта, Уйылдан биргән алтын йөҙөктө лә кейеп алған бит! Бына шайтан алғыры ҡыҙыҡай. Ата-әсәһенә, Төлкөсураға ҡайҙан алдым тине икән?

Шул саҡ йөҙөк һалыусы иҙән уртаһында торған егеттән һораны:

— Йөҙөк кемдә? Тапһаң — үҙең йөҙөк һалаһың, тапмаһаң — мәрәй алаһың!

Бына егет урындыҡ ситендә теҙелешеп ултырыусыларға берәм-берәм күҙ югертә. Һәр кемдең хәрәкәтенән, күҙ ҡарашынан, үҙ-үҙен тотошонан самалап, йөҙөктөң кемгә йәшерелгәнен белергә тырыша. Йәштәр иһә, бөтәһе лә йылмайышып, йә, танауың еҫ һиҙәме икән тигәндәй, уға төбәлгән. Егет бүтәндәргә ҡарағанда күҙе нығыраҡ йылтыраған ҡыҙға төртөп күрһәтте.

— Тор, Зарифа, йөҙөк һиндә!

Ҡыҙ усын асып, итәктәрен ҡаҡҡылап күрһәтте лә, егеткә биреләсәк мәрәйҙе таҡмаҡлап әйтеп тә ҡуйҙы.

— Булмай торһон, шуҡ егет, алаһың уны бейеп!

Бында инде бейей белмәйем, фәлән дә төгән тип ҡаршылаша алмайһың, теләйһеңме-юҡмы — бирелгән мәрәйҙе үтә. Бейеү менән йырлау иң еңел мәрәйҙәрҙән иҫәпләнә. Юғиһә, әтәс булып ҡысҡырырға, бер тына уйнағансы баҙға төшөп ултырырға, һөйгәнеңде үбергә ҡушып ҡуйыуҙары бар. Хатта усалыраҡ ҡыҙҙар: «Көйәнтәләп һыуға барып ҡайтһын!» — тип тә аяуһыҙлана. Унан егет башың менән ауылдың буйынан-буйына һыуға китәһең.

Мәрәй алыусыны бейетеү өсөн ҡыҙҙар таҡмаҡ әйтергә тотондо:

Бейе, бейе, Хәйбулла,
Бейегән кеше бай була.
Бейегән кеше бай булһа ла,
Кеҫә яғы һай була!

Ҡыҙҙар таҡмағын егеттәр күтәреп алды:

Һай, һай-һай икән!
Баҫ әйҙә!..
Ҡыптыр-ҡыптыр аласыҡтың
Ҡабығы төшөп бара икән,
Бейеүсебеҙ Хәйбулланың
Ыштаны төшөп бара икән!..

— Ха-ха-ха!..

Бер геү килеп көлөшкәс, Уйылдан да урындыҡ ситенә ултырҙы, уйын тағы ла күңеллерәк дауам итте. Хәҙер йөҙөктө йәштәр алдына мәрәй үтәгән егет йәшерә ине. Бая йөҙөк һалған ҡыҙ иһә уның хәрәкәтен иғтибар менән күҙәтә: йөҙөктө кем алдына йәшереп киткәнен самаларға тырыша. Бына Миңлегөл йөҙөк йәшереүсе үҙенең алдына ҡулын төртөп үткәс, мут ҡына йылмайҙы, башын түбәнерәк эйҙе. Ай-һай, йөҙөк уға ҡалдырылманымы икән? Йөҙөк һалыусы ситкәрәк баҫты ла иҙән уртаһындағы ҡыҙға:

— Йөҙөк кемдә? Тапһаң — үҙең йөҙөк һалаһың, тапмаһаң мәрәй алаһың! — тине.

Ҡыҙ, һис тә күп уйлап тормайынса:

— Тор, Миңлегөл, йөҙөк һиндә! — тине.

Белеп әйтте бит, суҡынмыш ҡыҙ! Ни эшләһен, Миңлегөл иплән кенә урынынан торҙо, үҙенә ниндәй мәрәй бирелеүен көттө. Бына берәү иң ҡаты яза уйлап тапты:

— Һөйгәненә ҡул бирһен!

Миңлегөл тертләгәндәй итте, битенә ҡыҙыллыҡ югерҙе. Әлбиттә, ҡыҙҙарға, тыйнаҡлыҡ һаҡлап, һөйгәнен үбергә ҡушыу ғәҙәте юҡ, бындай «яза» егеттәргә генә бирелә һәм улар быны ҙур ҡәнәғәтләнеү менән үтәй ине. Шул уҡ ваҡытта ҡул биреү йәки үбеүҙе ысынға алыусы ла юҡ, ғәҙәттә, ҡыҙҙар һөйгән кешеһенә түгел, сер һаҡлап, бөтөнләй икенсе, хатта иң яратмаған егетенә ҡул биреүсәндәр. Шунан был ҡыҙҙың ихлас күңеле кемдә икәнен самалап ҡара инде! Миңлегөл урындыҡ ситендә теҙелеп ултырыусыларға күҙ һирпеп алды ла өҙә баҫып килеп, Уйылданға ҡулын һондо һәм ошондай наказды үтәгәндә һәр ҡыҙ әйтә торған һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

— Ҡулым — һиндә, күңелем — икенселә!

Йылтыр күҙҙәре менән Уйылданды өтөп алды һәм, уйынды дауам итеп, йөҙөктө йәшереү эшенә тотондо. Миңлегөлдөң Уйылданға ҡул биреүен кем нисек юрағандыр, әммә егет үҙе шатлығынан һикерә яҙҙы: ҡайһылай ҡыҫып тотто Миңлегөл уның ҡулын! «Күңелем — икенселә, имеш, мутлашаһың, ҡыҙыҡай! Күңелең миндә һинең!..»

Тағы ла бер нисә төрлө уйын уйнанылар, бейештеләр, йырлаштылар ҙа таралышты йәштәр. Уйылдан ҡараңғы урамда Миңлегөлдө күҙенән яҙҙырмаҫҡа тырышты, өйҙәре эргәһенә тиклем оҙатып ҡуйырға уйланы. Уйылдан үҙҙәренең өйө тәңгәленән үтеп, һаман артынан эйәргәс, Миңлегөл аңғармаҫтан ғына уның эргәһенә килде лә: «Эйәртенеп йөрөмә, уңайһыҙ», — тип бышылданы. Уйылдан ҡапыл туҡтаны, үҙенән алыҫлаша, ҡараңғыла иреп юғала барған Миңлегөл артынан өңшәйеп ҡараны. «Уңайһыҙ», — ошо һүҙ уға «яратам мин һине» тигән мәғәнәлә аңлашылды һәм, аяҡ тауыштары алыҫлашҡас, үҙ өйҙәренә ҡарай боролдо.

Миңлегөлдөң иһә уны, ысынлап та, үҙ артынан эйәрткеһе килмәй ине. Һәйбәт тә егет кеүек бит инде Уйылдан, уның ихлас йөрөүен, баш-көллө ғашиҡ булыуын да белә хәҙер, ләкин күңеле, йөрәге уны үҙһенмәй. Бөгөн бынау йөҙөгөн әллә ниңә уйынға кейеп барҙы, Миңлегөл йәтәскә отоп алғанға иҫәпләһә лә, Уйылдан үҙе, мин биргән йөҙөктө кейгән, тимәк, һүҙемде кире ҡаҡмай, тип уйлағандыр әле. Ниңә өйҙә генә ҡалдырып китмәне һуң шул йөҙөктө?

Өйҙәре эргәһендә бер ҡараҫҡы торғанын күргәс,

Миңлегөл һағайҙы, аҙымдарын әкренәйтте. Тәҙрәгә күҙ һалды, ҡарындыҡ тоноҡ ҡына яҡтыра, тимәк, йоҡламағандар әле. Теге ҡараҫҡыға төбәлеберәк ҡараны. Бәй, Роман шикелле бит, торош-һынышы шуныҡы...

Төлкөсура менән Роман бөгөн урмандан ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтҡайны. Хәҙер ултырыштағы өйҙөң эше бөтә яҙҙы, иртәгә Григорий ҡалын тимерҙән эшләгән мейесте, кейем-һалым тейәп алып бармаҡсылар. Быҫраҡта көн дә ҡайтып йөрөгәнсе, көн буйына эшләп арығандан аҙаҡ, шунда ятыр ҙа йоҡларҙар. Маслов мунса һалдырып бөтөүҙе лә йәһәтләй, һарай, келәт буратырға тотонҡо. Унда оҙаҡламай әҙәм рәтле йәшәй башларға мөмкин.

Эш насар ҡуҙғалып китмәне, шулай ҙа бөгөн Романдың күңеле бойоҡ: хәҙер ауылға әллә ни йыш килеп тә булмаҫ, йөрәгенә бер генә минутҡа ла тынғылыҡ бирмәгән Миңлегөлдө һағынып ыҙаланыр. Әле ул көн һайын уны күрәсәгенә ышанып, ҡыҙҙың берсә моңһоу, берсә шаян ҡарашы менән осрашырға ашҡынып ҡайта ине. Миңлегөлдөң русса бөтөнләй белмәүе, ошоғаса үҙенә бер ауыҙ һүҙ ҙә өндәшмәүе серле ҡыйынлыҡ тыуҙыра; әммә ҡыҙ, уның мәғәнәле ҡарашын аңлағандай, тыйнаҡ йылмайыу менән яуап биргәндә лә, Романды сикһеҙ ҡыуаныс биләп ала, йөрәге талпынып ҡуя. Быға тиклем гел ҡалала йәшәгән, кеҫәһенән бер саҡта ла аҡса өҙөлмәгән егет күңеленә ятышлы ҡыҙҙарҙың башын аҙ әйләндермәне, был тәңгәлдә тәжрибәһе етерлек. Әммә Миңлегөлгә ҡарата мөнәсәбәте ошоғаса ҡыҙҙар менән мауығыуҙарының береһенә лә оҡшамай; был башҡорт ҡыҙы уның өсөн буй етмәҫлек, үрелеп ҡулына эләктергән осраҡта, уға ғүмерлек бәхет биреүсе хазина булып тойола. Ләкин был хазинаға ынтылырҙай көс тапмай егет, хатта Өфөнән бүләк итеп алып килгән яҡут ҡашлы алтын йөҙөктө уға бирергә уңайын да тура килтермәй, ҡыйыулығы ла етмәй этләнә. Ҡайһы саҡта ул һалҡын баш менән: «Ниңә ошо юнһеҙ бер ауылда төңөлөп йәшәгән, аҡты ҡаранан айырмаған ҡыҙ менән башымды һиңкетәм әле? Уның менән тормошомдо бәйләй һалғым бармы?» — тип уйлай. Тик үҙ тойғоларын һис тә ауыҙлыҡлай алмай. Ҡояшҡа талпынған ҡошсоҡ кеүек, күңеле тик сафлыҡ нуры менән генә ҡойонған төҫлө, Миңлегөлгә тартыла.

Бына ул бөгөн дә өйҙә Төлкөсура, Торомтай менән

аҙыраҡ гәп һатып ултырҙы ла, Миңлегөл өйҙә булмағанға юкһынып, тышҡа сыҡты. Ҡөҙгө рашҡыларҙан өй бүрәнәләре йоҡа ялтыр боҙ менән көпләнгән, өшөп ҡалтыранған ауыл өҫтөн ауыр ҡара пәрҙә япҡан. Исмаһам, эттәр ҙә өрмәй. Ауылдың көнсығышындағы тау күңелгә шом һалып геүләй, түбәлек аҫтындағы аттарҙың гөршөлдәтеп бесән ашағаны ишетелә. Бына үрге остараҡ шат һөйләшкән, көлөшкән тауыштар ишетелде. «Бәлки, Миңлегөл дә шундалыр. Бына хәҙер ҡайтып килер, — тип уйлай Роман һәм ниндәйҙер көсөргәнеш менән аяҡ тауыштары яҡынлауына ҡолаҡ һала. — Уның йөрөгән егете юҡмы икән? Бер көн старшина улы менән бик ҡыҙыҡ ҡына шаярып алды, егет тә Миңлегөлгә тишә ҡарап, һеләгәйен ағыҙып ултырған һымаҡ ине. Әллә...» Тик был уй ҙа Романды өйгә ҡыуалап индерә алманы, киреһенсә, тағы ла ҙурыраҡ ныҡышмалылыҡ менән ҡыҙҙың ҡайтып етеүен көтөргә тотондо. Бына йәштәр тәңгәлдән уҙып китте, бына яңғыҙ аяҡ тауышы уға яҡынлай; ана, йөҙгән кеүек, ваҡ, тигеҙ аҙымдар менән атлап килгән шәүлә лә күренде; килеп етә яҙғас, туҡтап ҡалды, тағы алға ҡуҙғалды.

— Минигуль!..

Ҡыҙ атлар аҙымын атламай туҡтаны, артабан ни булырын көттө. Роман уның эргәһенә килде, өй тәҙрәһенә күҙ һалды — ҡарындыҡ сыра яҡтыһынан тоноҡ ҡына ағарған.

— Минигуль... бына һиңә бүләк, — ул ҡыҙҙың шәлен түшенә ҡаушырып торған ҡулын ҡараңғыла үҙенә табан иплән кенә тартты ла усына яҡут ҡашлы йөҙөктө һалды.

Ҡыҙ, ҡулы бешкәндәй, ҡапыл артҡа тайшанды, китергә ынтылғайны, туҡтап ҡалды. «Подарок» тигән һүҙҙең мәғәнәһен, һуңлабыраҡ булһа ла, төшөнгәйне Миңлегөл. Ни эшләгәнен үҙе лә уйлап тормаҫтан, урта бармағындағы алтын йөҙөктө һалды ла егеткә һуҙҙы.

— Мә... минән һиңә... баҙарыҡ.

Роман тәүҙә ул үҙе биргән йөҙөктө ҡыҙ кире һона икән тип ҡурҡты, шунан, ниҙер аңлап, ҡыҙға яҡынайҙы, усын тотто һәм уға икенсе төрлө йөҙөк төшөп ятыуын һиҙеү менән, ынтылып, ҡыҙҙы ҡосағына алды. Миңлегөл бер мәлгә генә уға һыйынды, ҡапыл тартылып ысҡынды; Роман иҫенә килгәндә, ул, ҡараңғылыҡта ireп юғалғандай, ғәйеп булғайны инде.

Роман усына йомған йөҙөктө ҡапшаны: был, һис шикһеҙ, Миңлегөл быға тиклем үҙе кейеп йөрөгән йөҙөк ине. Уны бармағына кейеп ҡараны — һыйманы, бер яҡ эргәгә уралған сепрәген тағатып ташлағайны, сыңғарсаҡ бармағына тап-таман. Егет шатлыҡтан албырғап ҡалғайны. Тимәк, Миңлегөл дә уны ярата! Был йөҙөк — уның яуап һүҙе бит инде. Ләкин уны бер кемгә лә белдермәҫкә кәрәклеген дә, нисек кенә булмаһын, үҙенә әле хатта ошо һәйбәт өйҙә лә «урыҫ» итеп ҡарауҙарын да аңлай ине Роман. Йөҙөктө сисеп, ҡулъяулығы мөйөшөнә төйнәп тора ине, ишек алдынан Төлкөсураның:

— Роман, һин ҡайҙа? — тигән тауышы ишетелде.

— Бында, бында, хәҙер инәм.

Әгәр яҡты булһа, Төлкөсура үҙенең эргәһенә килгән егеттең күҙҙәрендә тоҡанған мөхәббәт осҡондарын һис шикһеҙ күрер ине.

Ҡайтып инеү менән түрбаштағы шаршау артында күлдәген алмаштыра һалып, кемдәндер ҡурҡып ҡасҡандай, юрған аҫтына сумған, шунда уҡ йоҡлап ятҡан Бикмораттың битенән:

— Алтыным минең, матурым!.. — тип бышылдап һөйләнә-һөйләнә супылдатып үбергә тотонған ҡыҙына Ғәрифә сәйерһенеп ҡараны, йөрәге һулҡылдап ҡуйҙы.

— Ни эшләйһең ул, ниңә ҡотораһың? Баланы уятаһың бит, — тине, ә күңеленән: «Осоноп йөрөй башланы был ҡыҙыҡай, хәйерлегә генә булһа ярар ине», — тип уйлап, көрһөндө.

Иртәнсәк ҡыҙының бармағында ҡашы йылҡылдап торған бөтөнләй икенсе йөҙөк күргәс, ҡурҡа уҡ төштө. «Шул тиклем матур йөҙөктәрҙе кем бирә һуң әле уға?» Сәй эсеп ултырғанда рус егетенең Миңлегөлгә бик хәтәр төбәлеп ҡарауын абайлағас, был шикләнеүҙәре хәүефләнеүгә әүерелде. «Абау, хоҙайым, тикмәгәме икән шул тиклем элмәйеп, ҡаҙалып ҡарауы?!.»

Сәй ҙә эсеп бөтмәнеләр, ялан яғынан Торомтай ҡайтып төштө. Аты ла арыған, үҙе лә йонсоған ҡарт. Инде лә, бер сеүәтә эсе сәй эскәс, яҫтыҡҡа ауҙы. «Ат йонсоғас, аҙыраҡ ашатып алайым тип, туҡтап, үҙем йөк өҫтөнә ятып торғайным, ойоғанмын да киткәнмен, хәйерһеҙ. Шунда аҙыраҡ һалҡын тейҙе шикелле», — тип юткерә-юткерә хәлен аңлатты ул. Уның бөтә тәне янып килә, күҙ төптәре ауырта, ҡолағы шаулай.

— Юҡ инде, атаһы, әмәл-таҡыл итәйек. Ныҡлап ауы-

рып китеүең бар бит, — тип, Ғәрифә Миңлеголдө исмсе Бәҙеғолъямал әбейгә югертте.

Шәлен бөркәнеп, таяғын таянып, юрғалап килеп етте Бәҙеғолъямал әбей. Ҡатаһын сисеп, Торомтай эргәһенә менеп тә ултырҙы. Беләген, маңлайын һәрмәштерҙе, күҙен йоммай ғына үҙенә ҡарап ятырға ҡушты һәм ҡәтғи һүҙен әйтте.

— Төндә әлхәмде уҡып, салауат әйтмәйенсә берәй ерҙә ятып йоҡлағанһыңдыр, Торомтай. Ен һуғылған һиңә, башҡа бер ни ҙә юҡ.

Һәм эсенән генә доғаларын уҡып, оҙаҡ ҡына өшкөрҙө.

Роман менән Төлкөсура, кәрәк-яраҡ әйберҙәрен тейәп, баяр ултырышына ҡуна китергә йыйына ине. Инеп-сығып йөрөгәндә, Роман Бәҙеғолъямал әбейгә күҙ һалғылаңы. Әбейҙең ғәжәп бер ихласлыҡ менән уҡыныл, Торомтайҙың өҫтөнә әйелә биреп төкөрөгөн сәсә-сәсә өргөләп алыуы уға ҡыҙыҡ тойола ине. Төлкөсуранан:

— Атайыңа ни булған? — тип һораны ул, һаман бер ни ҙә аңламай йөрөгәнлектән.

Атаһының ауырып ҡайтыуы Төлкөсураны бойоҡторғайны. Уның сырхауында үҙен дә ғәйепле һанай: хәҙер бына донъяның бөтә мәшәҡәттәре атаһына ҡала. Ҡартайған, кәре ҡайтҡан бит инде уның. Әллә ҡайҙан Лапшиндең эшенә тотоноп китте.

Төлкөсура хәлде һөйләп аңлатҡас:

— Уға, моғайын, һыуыҡ тейгәндер, — тине Роман.— Миндә һалҡын алғанда эсә торған бик һәйбәт дарыу бар, шуны бирәйек.

Бәҙеғолъямал әбей өшкөрөүен бөтөп, саҙаҡа алып, кәңәштәрен әйтеп сығып киткәс, Роман кескәй генә ҡағыҙ ҡаптарға төрөлгән порошоктар алды ла, уның бере-һен һыуға һалып болғап, ҡартҡа бирҙе.

— Ҡурҡма, эс, һәйбәт дарыу ул, — тине һәм порошокты көн һайын өс тапҡыр эсергә ҡушты.

Төлкөсура менән Роман, тейәнеп бөтөп, төшкә табан ғына аттарын ектеләр. Бер арала йомош табып ихатаға сыҡҡан Миңлеголь Роман эргәһенән үткәндә уға моңһоу ғына ҡараш ташланы.

— Хуш, Роман... — тип бышылданы ла югерә-атлай өйгә инеп китте.

Юлға сығып, байтаҡ бара биргәс, Роман түҙмәне, Төлкөсуранан һораны:

— Әйт әле, «хуш» нимә тигән һүҙ була ул?

Төлкөсура уға аптырап ҡараны, шулай ҙа төпсөнөп тормай яуап бирҙе.

— Һау бул тигәнде аңлата инде.

Романдың йәшкелт күҙҙәре ялт-йолт килде, Төлкөсураның бөйөрөнә төрттө.

— Шәберәк ҡыуала әле атыңды, Төлкөсура дуҫ!

Төлкөсура, әлбиттә, уның был ҡыланышынан һаман бер ни ҙә аңламай ине.

* *
*

Йылҡылар һатырға киткән Ҡотлоғужаның юлы уңып, күтәренке кәйеф менән ҡайтып төштө. Шуға күрәләр инде, улының килен төшөрөү тураһында тағы һүҙ ҡуҙғатыуына һис тә асыуланманы, бисәһе менән кәңәш иткәс, аллаға тапшырып, Миңлегөлгә яусы ебәрергә булдылар. Яусы итеп Бәҙеғолъямал әбейҙе һайланылар һәм был һис тә юҡтан ғына түгел ине. Уның имселектә генә түгел, был эштә лә теше төшкән. Ҡешенең яйын-көйөн тартҡылап һөйләшә белә, аҙыраҡ аҡса бирҙеңме, башлағанын аҙағына еткермәйенсә туҡтамай.

Бәҙеғолъямал әбей Торомтайҙарға Миңлегөлдөң өйҙә юҡ сағын ғына һағалап килеп инде. Ғәрифә уны тәүҙә, әллә уның өшкөрөүе, әллә дарыу килешеп, шәбәйә төшкән Торомтайҙың хәлен белергә килдеме икән, тип уйлағайны; ыштанының һыңар балағы ойоғо тышына ялпылдап сыҡҡанын күргәс, уның йомошон шундуҡ һиҙенде, йөрәге өшәнеп ҡуйҙы. Бәҙеғолъямал хәл-әхүәл һорашты, Торомтайҙың һауыға төшкәнен белгәс:

— Аллаға шөкөр, тыным килешә минең. Ғүмерем кешегә гел изгелек күрһәтеп үтте инде, — тип һүҙ башланы. — Бына әле лә үҙегеҙгә хәрап яҡшы бер эш менән килеп сыҡтым әле.

Хәҙер инде Ғәрифәнең бер шиге лә ҡалманы. «Ҡемдән яусы булып килде икән?» — тип уйлап, һаҡ ҡына һораны.

— Ниндәй эш һуң ул, Бәҙеғолъямал апай?

— Бигерәк матур ҡыҙ үҫтерҙегеҙ бит. Миңлегөлдө әйтәм, үҙегеҙгә оҡшап, һылыу, бигерәк уңған. Бына шул ҡыҙығыҙға ауылдағы иң һәйбәт кешеләр яусы итеп ебәрҙе.

Быға тиклем уның хәбәренә артыҡ иғтибар итмәй ятҡан Торомтай, һуңғы һүҙҙәрҙе ишеткәс, тороп ултырҙы, берсә бисәһенә, берсә имсе әбейгә ҡараны.

— Изге эш менән йөрөйһөң икән, апай, ысынлап та. Ҡемдәрҙән килдең һуң?

— Ҡемдәр тип... Ауылда иң һәйбәт кеше кем булһын инде — Ҡотлоғужаларҙан. Уйылдандары, Миңлегөлдән башҡа бер кем кәрәкмәй, ти икән. Ата-әсәләре лә ҡуш ҡуллап риза. Йәштәр үҙ-ара һөйләшмәйенсә йөрөмәйҙер инде ул. Бына һеҙҙең фатиханы һорарға килдем. Ҡыҙығыҙ бәхетле булыр алла бирһә. Ундай донъяға килен булып төшөү кемгә эләгә? Улдары ла уғата инсафлы, баҫалҡы. Атайым старшина тип танау сөймәҫ, эш яғынан да һынатмай, ул ата-әсәһе тәрбиәле кешеләр.

Ғәрифә, электән дә уйында йөрөгәс, яусының был һүҙҙәренә ҡаршы әллә ни әйтергә лә йыйынмай ине, самауыр ҡуйырға тотондо; әүәлдән килгән ғәҙәт буйынса, яусыны ҡоро ғына сығармаҫҡа уйланы. Торомтай уйлап ултырҙы-ултырҙы ла:

— Һөйләгәндәреңә ҡаршы килә алмайым, Бәҙеғолъямал апай, — тине, — белмәгән кешеләр түгел. Шулай ҙа бер шигем бар, һин шуны уларға еткер: улар артабан беҙҙе үҙҙәренә тиң туған-ырыуға иҫәпләрме? Ҡыҙыма хеҙмәтсе күреп кенә ҡарамаҫтармы?

Ғәрифә:

— Һин инде, ҡарт, уларын... — тип ниҙер ҡаршы әйтмәксе булғайны, ире уны уҫал ғына тыйҙы:

— Мин ни һөйләгәнемде беләм. Ҡыҙымды мин уларҙың байлығына ҡыҙышып бирергә йыйынмайым.

— Донъя булғас, уныһы ла кәрәк инде.

— Ҡәрәкмәй! Бына үҙебеҙ һинең менән ҡасан етеш көн күрҙек? Шулай ҙа бергә ғүмер итеүебеҙгә икебеҙҙең дә үкенгән юҡ. Ҡүңелдәребеҙ бай булды, бер-беребеҙгә ауыр һүҙ әйтмәнек, кәмһетешмәнек. Шулай түгелме ни?

— Шулай инде...

— Знамы, шулай!..

Бәҙеғолъямал әбей һөйләшеүҙе үҙенә уңайлыраҡ яҡҡа бороп ебәрергә самаланы.

— Һин улай тимә әле, Торомтай. Ҡотлоғужалар хеҙмәтсе итеү өсөн кеше төшөрмәҫ. Килендән башҡа эшләүсе кеше аҙмы ни уларҙа? Ҡыҙығыҙ майҙа йөҙөп кенә...

— Ул майҙа йөҙөп йәшәргә өйрәнмәгән. Эшен дә эшләр — бөтәһен дә булдырыр.

— Дөрөҫ әйтәһең, Торомтай, дөрөҫ, ҡыҙығыҙ бигерәк уңған, егәрле. Шуға күрә һораталар ҙа бит инде. Һин бына шуны әйт, Торомтай, ҡалымына нимәләр һорайһығыҙ? Ҡыҙҙы бит уны аҫырап үҫтерәһең, изгелегең күрә алмай, шулай оҙатып ебәрәһең. Шул бер ҡалым алыуың ҡала. Ҡулдарынан килмәҫ кешеләр түгел, арыу ғына һорағыҙ ҡалымын.

— Минең һатлыҡ ҡыҙым юҡ, Бәҙеғолъямал апай, улай һатыулашырға уйламайым. — Бисәһененең ризаһыҙлыҡ белдереп сирылғанын күргәс, тағы ла ҡырыҫыраҡ итеп өҫтәне. — Һатырға — мал түгел ул. Бәҙеғолъямал апай, беҙ әсәһе менән һөйләшәйек, кискә табанырак килеп сығырһың.

Торомтайҙың, Уйылданға әллә ни һүҙ тейҙерер ере булмаһа ла, Ҡотлоғужа өйөнә ҡыҙын биргеһе килмәй ине. Етмеш бер йәшлек атаһы шул Ҡотлоғужаларҙың ихатаһын һепереп йөрөгән еренән ятып үлгәне бирле, йөрәк яраһы уңалмай уның. Атаһы мәрхүм ғүмер баҡый шуларҙа эшләне, бер ваҡытта ла өҫтө кейемгә, тамағы ашҡа туйманы, һуңғы тынын алғанса, шуларҙың саңын йотто. Ҡарт үлгәс, Ҡотлоғужаның атаһы уға кәфенлек тә бирә белмәне бит. Шул кешеләрҙә ниндәй хәйер булһын? Шуға күрә, бисәһе менән һөйләшеп, ҡыҙын бирмәҫкәрәк уйлай ине ул. Уның ошо фекерен белгәс иһә, Ғәрифә иҫ китмәле һүҙ әйтте.

— Һин белгәнде мин дә беләм, атаһы, хатта күберәк тә беләмдер әле. Анау үҙебеҙҙәге урыҫ егетенән шикләнә башланым әле-мин. Ҡыҙың да шуны яҡын иткәндәй була. Аралары эҫенеп китеп, әҙәм хурлығына ҡалмайыҡ.

Бисәһененең был һүҙенә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне Торомтай. Бер яҡтан — булмай торған хәл, уларҙың ауылында ғына түгел, был тирәлә бер ҡыҙҙың да русҡа кейәүгә сыҡҡаны юҡ әле. Ҡыпсаҡ яғында мәрйә ҡыҙына өйләнгән бер егетте ана сход йыйып ауылдан ҡыуғандар хатта. Икенсе яҡтан уйлап ҡараһаң, йәштәр араһында ни генә булмаҫҡа мөмкин? Әгәр был һүҙ ысынға сыға ҡалһа, Роман ни ҡәҙәрем генә арыу егет күренмәһен, ҡыҙын мәңге уға бирәсәге юҡ Торомтайҙың. Берҙән, шулай уҡ бай балаһы, өҫтәүенә, рус. Алла һаҡлаһын, мосолман башы менән ата-бабайҙар йолаһына тап төшөрәһе бармы?

— Булмаç, юҡты һөйләйһеңдер, әсәһе, — тип үҙенең шикле уйҙарын белдермәçкә тырышты Торомтай.

— Шулай тиһең дә... Ана, ҡулына ла әллә ниндәй йөҙөк кейеп алған, ауылдыҡына бер ҙә оҡшамай.

— Йөҙөк?..

— Эйе, күрмәнеңме ни? Имен-аман саҡта, биреп ҡалайыҡ, атаһы. Уйылдан һис тә кейәү булмаçлыҡ кеше түгел.

Торомтайҙы һындырҙы бисәһе, ир — баш, ҡатын — муйын, тигәндәре ошолор инде.

Ҡисен килгән Бәҙеғолъямалға риза икәндәрен белдереп ҡайтарҙылар, ләкин Торомтай ҡалым һорауҙан баш тартты.

— Үҙҙәре ҡараһын ул яғын, мин бер ни ҙә һорамайым, — тине.

Ҡотлоғужаларҙың ошо кесаҙна көн үк ижәп иттереп, никах уҡытырға кәрәк, тигән фекеренә лә ҡаршы килмәнеләр. Бирергә булғас, кеше араһында ваҡ-төйәк хәбәр таралмаç элгәре эште бөтәргән яҡшы ине.

Был хәбәрҙе ипләп кенә Миңлегөлгә ишеттергәс, уныһы баш-аяғы менән ҡаршы торҙо, иланы, ялбарҙы. Ошонан аҙаҡ инде ҡыҙының күңеле башҡала икәнлегенә Торомтайҙың шиге ҡалманы һәм ҡатыраҡ тотондо.

— Һүҙебеҙҙе йығып, ата-әсәйеңде кеше араһында рисуай итер булһаң, тыңлама инде әйҙә, — тине. — Арыуыраҡ ергә төшөп, әҙәмсә донъя көтһөн тип, беҙ һинең өсөн тырышабыҙ.

Атаһы ныҡ торғас, уны еңә алмаçын белде Миңлегөл. Шулай итеп, Уйылдан бисәһе булып китерме икән ни? Ә Роман һуң? Уның күңеленә яҡын, мөләйем йөҙлө, йәшкелт күҙле рус егете? Төн буйына боршаланып, уйланып, рәтләп йоҡлай алмай сыҡты Миңлегөл. Иртәнсәк торғас, үҙенең бошонҡолоғон әллә ни белдермәçкә тырышты. Ашағас, йәһәт кенә бер көйәнтә һыу алып ҡайтты ла әсәһенә:

— Йөрөштөрөп киләм әле, башым ауыртып тораһы,— тине.

Ғәрифә апай уның һүҙен йыҡманы.

— Бар, балам, әхирәттәрең эргәһенә барып ултыр. Мин бынау юрғандың тышлығын бесеп алайым да эшкә тотонайым.

Миңлегөл урамға сығып торҙо ла, икенсе яҡтан урап инеп, түбәлек аçтындағы атты эйәрләп, кәртә арты яҡҡа

етәкләне һәм, һикереп менеп, уны Ҡыйғыр яланына табан ҡыуаланы. Алда ни буласағын асыҡ ҡына күҙ алдына килтермәһә лә, уның күңеле Роман эргәһенә тартыла һәм уның был ынтылышҡа ҡаршы торор көсө юҡ ине.

Ҡыйғыр яланына етәрәк урман киҫеп йөрөүселәрҙән ул:

— Төлкөсура ағайымды күрмәнегеҙме? Ҡайҙа икән? — тип һораны.

— Ул бөгөн яңы диләнкә бүлергә китте, кисһеҙ ҡайтмаҫ, — тигән яуапты ишеткәс, бик вайымһыҙ ҡыланып әйтте:

— Теге урыҫы ҡайҙа икән?

— Ҡартымы, йәшеме?

— Ҡайһыныһы булһа ла ярай. Йомошомдо әйтеп ҡалдырырға ине.

— Ҡарты өйҙә. Тегенеһе ана-а-а тегендә, яр буйында, әрәмә ботата.

Миңлегөл тура шунда юнәлде. Роман ике кеше менән, ысынлап та, әрәмә киҫеп, бүрәнә өйөләсәк урынды таҙартып йөрөй ине. Миңлегөлдө күргәс, аптырап ҡалды, ҡулынан балтаһы төшөп китте. Теге кешеләргә ниҙер әйтте лә байтаҡ килеп етмәҫ элек үк атынан төшкән ҡыҙ эргәһенә ашыҡты. Миңлегөл уның иҫәнләшеүенә лә яуап бирмәне, башын түбән эйеп, өндәшмәй тора бирҙе. Роман унан:

— Ниңә килдең? Төлкөсура кәрәкме әллә? — тип тә һораны. Шунан: — Әйҙә, беҙҙең өйгә барайыҡ, — тип тә ҡараны, ҡыҙ иһә тумһайып ҡатҡан да ҡалған.

Аҙаҡ килеп, сыҙаманы Миңлегөл, әрәмә ҡырҡып йөрөүселәр күрмәһен өсөн, атының икенсе яғына сығып, уның мунтаһына маңлайын терәне лә үкһеп илап ебәрҙе. Шаҡ ҡатты Роман, уның эргәһенә килде.

— Ни бар һуң, Минигуль? Ни булды? — тип бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы, ни әйтергә белмәйенсә.

Бына Миңлегөл турайып баҫты, уға табан боролдо, битендәге юлаҡланып торған йәшен дә һөртмәйенсә, күҙҙәрен ҙур асып, егеткә төбәлде. Күп нәмә аңлата ине был һорғолт матур күҙҙәр: уларҙа әйтелмәгән ҡайнар мөхәббәт хистәре тулы, моңайыу, үкенес, ялбарыу билдәләре лә бар. Ахырҙа, уның күкрәгенән ярып, бер нисә ауыҙ һүҙ атылды:

— Яратам бит мин һине, Роман!.. Үлеп яратам!.. Ә мине икенсе кешегә бирәләр!.. Ҡотҡар, бәғерем!..

Ул атының муйынына аҫылынды ла башын уның ҡамыт ҡыҫып ялпаҡлатҡан муйынына терәне һәм үҙәк өҙгөс итеп тағы иларға тотондо. Иҫ-аҡылдары ҡороно егеттең. Әллә атаһы үлдеме икән? Ауырып ҡалғайны бит.

— Торомтай ағайға берәй хәл булдымы әллә?

Уның был һүҙҙәрен аңланы Миңлегөл, хатта, башын сайҡап:

— Нет, — тип русса яуап бирҙе, ләкин үҙенең хәсрәтен, тойғоларын ғына төшөндөрә алмай ине ул.

— Әйҙә беҙҙең өйгә. Ниңә бында торабыҙ әле. Ҡискә Төлкөсура ҡайта, уның менән һөйләшерһең, — тине.

— Юҡ, бармайым, — тип үҙенә яҡынлашҡан Романдан ситкәрәк тайшанғандай итте Миңлегөл.

Илап, күңеле бушағас, ул аңына килә башлағайны. Ниңә килде һуң әле ул бында? Барыбер үҙенең уй-хистәрен Романға төшөндөрөп бирә алмай бит инде. Эй хоҙайым, ниңә, аҙ-маҙ булһа ла, русса белмәй икән, исмаһам!..

Миңлегөл йоҡа шәленең осо менән битен, күҙҙәрен ҡоротто, итек үксәһе менән туңаҙыған ерҙе төйгөсләне, тыныслана төшкән моңһоу ҡарашын егеткә төбәп:

— Мин һине ғүмерем буйы яратырмын, Роман, — тине, тағы уға табан ике-өс аҙым атланы, ләкин ниҙәндер ҡурҡҡандай, ҡабат артына сигенде һәм, атына һикереп менеп, юлһыҙ-ниһеҙ урманға сабып кереп китте.

Роман иҫенә килгәндә, уның ат аяҡтарының тауышы ла ишетелмәй ине инде. Егет, уның артынан йүгерергә иткән кеүек, ынтылыш яһаны, ҡысҡырырға теләне, ләкин ауыҙынан:

— Минигуль... — тигән көсһөҙ өндәр генә сыҡты.

Төлкөсура ҡараңғылатып ҡына ҡайтты утарға. Баярға һатылған ерҙән күрше ауылдыҡылар ике төп ҡарағай йыҡҡан, шуларҙы юллатып барып йөрөгәйне. Уларға бәйләнеп, ҡурҡытып маташманы ул. «Икенсе улай ҡыланмағыҙ, ағайҙар», — тип киҫәтеү генә яһаны. Был хаҡта Масловҡа ла әйтмәне, штраф һалам, фәлән-төгән, ти башлар...

Роман уға Миңлегөлдөң бик сәйер генә килеп китеүен һөйләмәйенсә булдыра алманы, хатта:

— Их, Төлкөсура, белмәйһең!.. Яратам бит мин һинең һеңлеңде! — тип тә ысҡындырҙы.

Төлкөсура уның Миңлегөлгә тыныс ҡарай алмауын һиҙеп йөрөй ине. Хатта һеңлеһенең шул хәтлем егетте ҡарата алыуына ҡыуанғандай ҙа итә. Ләкин Роман менән һеңлеһе араһында ысын мөхәббәт булырына һис тә ышана алмай. Ҡапма-ҡаршы кешеләр бит инде улар: береһе бай, белемле, ҡала егете; икенсеһе — тома наҙан ауыл ҡыҙы, бер ауыҙ русса һөйләшә белмәй; береһе — рус, икенсеһе — башҡорт. Ҡемдер күңеленә оҡшау менәнме ни ул... Шулай ҙа ауылға ҡайтмайынса, был һорауға яуап табып булмай ине. Төлкөсураның йөрәге түҙмәне, төнөн юлға сыҡты. Ләкин ул ҡайтыуға бөтә эш теүәлләнгәйне инде: атаһы менән әсәһе никахтан ҡайтып ҡына ингән, Миңлегөлдө иһә Уйылданға ҡушырға кейәү йортона алып киткәндәр...

* *

Иртәгеһенә иртүк үҙенең йылҡы малын ҡараусынан Лапшингә өйҙө Ҡыйғыр яланына һалыуҙарын ишеткәс, Ҡотлоғужа тәүҙә ышанманы. Теге кеше:

— Анау бер тайҙы һаман табып булмай бит. Кисә шуны эҙләп йөрөгәндә үҙем барып сыҡтым. Өйөн һалып бөткәндәр, тағы әллә нимәләр бурайҙар, — тигәс тә әле:

— Алайғыр яланы менән бутамайһыңмы? — тип һораны.

— Һуң, Ҡотлоғужа ағай, миңә ышанмаһаң, үҙең барып ҡара.

Ҡотлоғужа асыуынан бишкә ярыла яҙҙы, ары һуғылды, бире бәрелде: килен әйттергәндәрен, Торомтайҙың, Төлкөсураның ҡоҙа икәндәрен дә онотоп:

— Шул эттәрҙең генә эше! Олаталарын танытырмын мин уларҙың! — тип ҡыҙҙы.

Өйҙә, эштең нисегерәк килеп сыҡҡанын бер кем дә белмәгәнлектән, уның ҡылығына аптыранылар, һүҙ әйтергә батырсылыҡ итмәнеләр. Ахыр килеп, Ҡотлоғужа ат эйәрләттереп менде лә Ҡыйғыр яланына ҡарай сапты.

Яланға етер саҡта байтаҡ урман ҡырылып та өлгөрөүен, унда эшләп йөрөүселәрҙе күрһә лә, туҡтамай: «Их, мин һантый! — тип үҙен-үҙен һүкте ул. — Торомтай малайына ниңә ышанырға ине теге саҡта? Шуның

ғына этлеге! Йәнен алам мин уның хәҙер!» — Ялан уртаһындағы ҙур ғына өйҙө, уның эргәһенә бурала башлаған бүтән ҡаралтыларҙы күргәс, Ҡотлоғужа оторо ярһый төштө. Ул Лапшин менән сабынлыҡтарҙы үҙҙәренә ҡалдырыу тураһында һүҙ көрәштереп ултырған саҡта уҡ был яландан ҡолаҡ ҡаҡҡан булып сыға бит. Суҡынмыш рус, шул саҡта, ултырышты икенсе урындан һайланым, тип әйтмәй ҙә бит әле. Ә теге Төлкөсураһы белмәмеш тә күрмәмеш булып йөрөп ята. Шулай итеп, ул иң һәйбәт сабынлығынан тороп ҡаламы ни инде? Туҡта әле!..

Күҙҙәре аларған Ҡотлоғужа килеп ингәндә, Маслов өҫтәл артында яҙыу-һыҙыу менән була, ә Роман менән Төлкөсура төшкөлөккә ашарға әҙерләп йөрөйҙәр ине.

— Һа, әйҙүк түрҙән, Ҡотлоғужа әфәнде! — тип уға ҡаршы атланы Роман. — Ниндәй елдәр ташланы?

Маслов иһә әллә ни ыжламаны, ултырған еренән:

— Һаумыһығыҙ, Ҡотлоғужа әфәнде? — тип һалҡын ғына баш ҡаҡты.

Төлкөсура иһә яйлабыраҡ, йылмая бирәберәк уға яҡынланы, ҡулын һондо:

— Һаумы, ҡоҙа...

— Бирермен мин һиңә ҡоҙаны! — Ҡотлоғужа, күрешеү урынына, ҡулындағы тоҡос ҡамсы менән бар көсөнә уның биләнә һуҡты.

Маслов урынынан һикереп торҙо, Роман, аптырап, артына сигенде, тик Төлкөсура ғына, һөҙөп ҡарап, баҫҡан урынынан ҡуҙғалманы.

— Быныһы ни өсөн булды, Ҡотлоғужа ҡоҙа? — Уҫал һораны егет.

— Уныһы — мине алдаған өсөн, быныһы!..

Ҡотлоғужа егеттең битен яра һуғыу уйы менән тағы һелтәнгәйне, Төлкөсура ялтанды, ҡамсының осо ғына сикәһенә эләгеп, уны ҡара көйҙөрөп сығарҙы.

— Мә, тағы берҙе, йолҡош!..

Был юлы Ҡотлоғужа уның ботона уралта һуҡты.

Бик тиҙ арала килеп сыҡҡан был хәлдән албырғап ҡалған Роман улар араһына ташланырға уҡталғайны, өлгөрә алманы, егеттең асыуҙан салшайған йөҙөн генә күреп ҡалды. Төлкөсураның ҡолас ташлап Ҡотлоғужаның ҡолаҡ төбөнә һалып ебәреүе булды, тегеһе, киҫкән ағас кеүек, арма-торма барып та төштө.

— Ни эшләйһегеҙ!?. — Күҙе түбәһенә менгән Мас-

лов, өҫтәл артынан сығырға ҡыйыулығы етмәйенсә, тамағы ҡарлығып ҡысҡырҙы.

Ҡотлоғужаның кәре ҡайтмағайны әле, ырғып торҙо ла был юлы йоҙрогон төйнәп һаман урынынан ҡуҙғалмаған Төлкөсураға ташланды; тик икенсе тапҡырына тәкмәсләп барып төшкәс, иҙәндән ҡапыл ғына күтәрелә алманы, башын тотоп, ыңғырашырға кереште.

— Хәшәрәт!.. — тип уға асыулы ҡараш ташланы Төлкөсура, ишекте тибеп асып, сығып китте.

Роман Ҡотлоғужа эргәһенә килде, уға тороп ултырырға ярҙам итте. Старшина әкренләп иҫен йыйҙы, ҡама тирәсле ҡырма бүркен иҙәндән алып кейҙе лә, үгеҙ шикелле, аҫтан һөҙөп ҡараны. Маслов та уның янына килеп сүгәләне.

— Ни булды һуң, Ҡотлоғужа әфәнде? Бер ни ҙә аңламайым. Һөйләп бирһәңсе?

— Аңларһың! — тип ыҫылданы старшина. — Минең сабынлыҡты ултырыш итергә һеҙгә кем ҡушты?! Кем рөхсәт итте?!

Маслов мәсьәләне төшөнә башланы, Ҡотлоғужаның асыулы ҡарашын күтәрә алмайынса, тороп баҫты. Шул уҡ ваҡытта ул хәҙер башҡорт байы менән бигүк йомшаҡ һөйләшергә ярамағанлыҡты ла шәйләп алды.

— Артем Дмитриевич үҙе ҡушып китте, — тине ҡырыҫ ҡына.

— Алдаҡсылар һеҙ бөтәгеҙ ҙә! — Ҡотлоғужа күтәрелде лә, түңәрәк һаҡалын алға һона биреп, арҡаһын көмөрәйтеп әкрен генә Масловҡа яҡынлашты. — Судҡа бирәм мин һеҙҙе! Ҡотлоғужаның кем икәнлеген белмәйһегеҙме ни әле?! Танытырмын!..

Роман стенаға табан сигенеүсе, ҡобараһы осҡан Маслов менән Ҡотлоғужа араһына төштө.

— Ҡотлоғужа әфәнде, тынысланығыҙ, — тип йомшаҡ ҡына өндәшеп, ҡулын уның яурынына һалды. — Эштең ниҙә икәнен аңлатып бирегеҙ. Ултырығыҙ.

Ҡотлоғужаның ярһыуы аҙ ғына баҫыла төштө, эскәмйәгә ултырҙы.

— Был яландың минең сабынлыҡ икәнен беләһегеҙме?

— Юҡ, Ҡотлоғужа әфәнде. Беҙгә уның Артем Дмитриевич һатып алған ер икәнлеге генә мәғлүм, — Никифор Масловтың сырайына туң һалҡынлыҡ кире ҡайтҡайны инде.

— Ҡем килтереп күрһәтте? Төлкөсурамы?

Был юлы Роман яуап ҡайтарҙы.

— Атайым үҙе.

— Уға кем күрһәткән?

Лапшин китер алдынан Масловҡа Ҡотлоғужа менән ултырышҡа ҡағылышлы ғауға килеп сыҡһа, бөтәһен дә үҙенә япһарырға ҡушып, эштең нисегерәк тороуын аңлатҡайны. Шуға күрә приказчик һүҙҙе оҙонға һуҙырға теләмәне.

— Беҙҙән һорау алыуығыҙ урынһыҙ, Ҡотлоғужа әфәнде, был турала тик Артем Дмитриевичтең үҙе менән генә һөйләшә алаһығыҙ. Икенсенән, һалынған йортто хәҙер ҡабат ҡутарып булмай бит инде.

Ҡотлоғужа тороп, өр-яңы аҡ сәкмәненең салғыйын ялпылдатып, иҙәндә йөрөп әйләнде. Хәҙер былар менән һөйләшеп тә, Лапшин менән бәхәсләшеп тә бер ни сығара алмаҫын, эштең һуң икәнлеген үҙе лә белә ине ул. Шуға күрә бөтә асыуын Төлкөсураға төшөрмәксе булды.

— Ә теге йолҡошто судҡа бирәм! Башын төрмәлә серетәм мин уның! — тип һөйләнә-һөйләнә тышҡа сыҡты, ауырлыҡ менән эйәренә менеп ултырҙы, атын шәп ҡыуаламай ғына юлға ыңғайланы. Һаман башы әйләнеп. күҙ алдында йәшкелт-ҡыҙыл дүңгәләктәр күренгәндәй булып ҡала. Төлкөсура йөҙрөғонөң әле һаман сығып бөтмәй ине әле.

...Төлкөсура уның ҡайтып киткәнен күрмәне. Норош ярына баҫҡан да уйға талған, уйҙар Ҡотлоғужа ҡамсыһының осо ялландырған сикәһенең янып һыҙлауын да онотторҙо. Ул бүтән саҡта бик шымафый ғына йөрөгән Ҡотлоғужаның йыртҡысҡа әүерелеүен беренсе тапҡыр үҙ күҙҙәре менән күрә ине. Атаһы белеп әйтә икән шул: уның кешелекле, кеселекле булып ҡыланыуы — торғаны бер күҙ буяу өсөн генә, һарыҡ тиреһе бөркәнгән бүре ул. Байлыҡ өсөн, үҙ ҡулындағы малды ысҡындырмаҫ өсөн, халыҡты алдауы ла, йыртҡыслыҡҡа барыуы ла мөмкин. Кисә төнөн ҡайтып төшкәс, атаһы:

— Әллә инде, улым, һеңлеңде Уйылданға бирҙек тә биреүен, һис тә ихласлығым юҡ. Ҡыҙымдың башын әрәм итеү генә булмаһа ярар ине, йөрәгем һыҡрап тик тора,— тип һөйләнгәс, уны:

— Юҡҡа хәҙерҙән борсолма, атай. Бынамын тигән иттереп, терттереп донъя көтәп алып китер әле. Насар кешеләр түгел дә инде улар, — тип йыуатып ултырғайны.

Бөгөн килеп, Ҡотлоғужа «яҡшылығын» күрһәтергә лә өлгөрҙө.

— Төлкөсура, ашарға ҡайт! — тип Романдың ҡысҡырғаны ишетелде.

Ҡотлоғужа киттеме икән, юҡмы? Уның менән бер табаҡтан бер ҡалаҡ та ризыҡ ҡапмаясаҡ хәҙер Төлкөсура! Ул өйгә табан атланы, Ҡотлоғужаның аты күренмәгәс, эскә ингәйне, Роман шарҡылдап көлөп ҡаршыланы.

— Ну, дуҫ, старшинаға шәп тамыҙҙың! Мин һине ул тиклем үк көслө тип уйламағайным.

Бынан ғына Төлкөсураның күңеле күтәрелмәне, табын артында ла ҡашы йәмерәйгән көйө һөйләшмәй ултырҙы. Бер ауыҙ һүҙ өндәшмәгән Маслов, ашап бөткәс, уға һалҡын ҡарашын төбәне.

— Дөрөҫ эшләмәнең һин, егет кеше.

Төлкөсура уға, йә, тағы ни әйтерһең икән, тигән һымаҡ ҡараны. Уның урынына:

— Нимәһе дөрөҫ түгел? — тип һораны Роман.

— Дөрөҫ эшләмәне, — тип ҡабатланы Маслов. — Өлкән кешегә, волость старшинаһына шулай ҡул күтәрәме ни кеше?

— Ниңә, ул бер яғыңа һуҡҡас, икенсе сикәне ҡуйып торорғамы ни?

— Һин, Роман, юҡты һөйләп маташма! Беҙгә һәр саҡ кәрәк кеше ул. Төлкөсура ла унан башҡа әллә ҡайҙа бара алмай.

Төлкөсура өйгә ингәне бирле беренсе тапҡыр һүҙ ҡыҫтырҙы.

— Һеҙгә нисектер, миңә кәрәк кеше түгел ул.

Был турала һөйләшкеһе килмәй ине уның, тышҡа сыҡты, Роман да уның артынан эйәрҙе. Төлкөсура уға Миңлегөлдө кейәүгә биргәндәрен һөйләмәгәйне әле. Төлкөсураның:

— Ҡисә атайымдар ҡоҙа булышҡан, бөгөн һуғыштыҡ, — тигәнде ишеткәс, Роман аптырап ҡалды.

— Ниндәй ҡоҙа? Нисек инде?

— Һинең яратҡан Миңлегөлөң — хәҙер Уйылдандың бисәһе.

Романдың сырайы ағарҙы, телһеҙ ҡалды. Ҡисә Миңлегөлдөң көтмәгәндә генә килеп сығыуы, илауы, ялбарыуы итеп мөхәббәт тулы ҡарашын төбәп тороуы — бөтәһе лә бер юлы күҙ алдына баҫты уның. Ярҙам өмөт итеп,

һыйыныр урын эҙләп килдеме икән ул, әллә хушлашыр өсөн генәме? Төлкөсураның:

— Миңлегөл барырға риза булмаған, атайҙар көсләп тигәндәй биргән, — тигән һүҙҙәре ер аҫтынан килгән тауыш һымаҡ ҡына ҡолағына килеп бәрелгәс, Роман өҙәләнеп ҡысҡырып ебәрҙе:

— Их, мин алйот!..

Миңлегөлдөң ниңә килгәнлеге бер юлы асыҡланды: уға күҙ төбәп, ҡотолоу урыны эҙләп килгән, бәлки, мин һинеке, Роман, ал мине, тип тә әйткәндер әле. Хәтәр үкенес тойғоһо Романдың йәшкелт күҙҙәренә, бөтә ҡиәфәтенә бәреп сыҡты, хатта кәүҙәһе кесерәйеп киткән һымаҡ булды; яурындарын бөршәйтеп, эргәһендә ятҡан бүрәнә өҫтөнә ултырҙы.

...Ике көндән урядник менән исправник икеһе бер юлы килеп төшкәс, Төлкөсура уларҙы Ҡотлоғужа, үҙ сабынлығына өй һалдырған өсөн, Маслов менән һөйләшергә ебәргәндер, сабынлығын бирмәҫкә итәлер, тип уйлағайны. Исправник үҙенә уҫал ҡарап:

— Старшинаны туҡмаусы һин булаһыңмы? — тип һорағас, ҡапыл-ғара аптырабыраҡ ҡалды.

— Туҡмаусы тип... ул үҙе һуҡҡас...

— Молчать!.. Һин минең һорауға борғоланмай ғына яуап бир: старшинаға һуҡтыңмы?

— Һуҡтым инде...

Исправник уға тағы бер нисә генә һорау бирҙе лә ниҙер яҙырға тотондо, шунан:

— Бына бынауында үҙең әле әйткәндәрҙе иҫбатлап ҡул ҡуй, — тигәс, ҡулын ҡуйҙы.

Исправник Төлкөсура менән һөйләшкәндә Маслов менән Романды тышҡа сығарып торғайны. Урядникка Масловты саҡырып индерергә ҡушты.

— Маслов әфәнде, Ахуновтың старшинаны туҡмауы тураһындағы күрһәтмәләрегеҙҙе ҡағыҙға теркәгеҙ ҙә миңә бирегеҙ.

— Уның башлап миңә һуғыуын да яҙһын, — тине Төлкөсура.

— Тик кенә тор, көсөк!

— Нимә?! — Төлкөсураның күҙҙәре ут булып янды, исправникка табан ынтыла биреп ҡуйҙы.

— Урядник! — Исправниктең ошо һүҙен ишетеү менән урядник наганын сығарҙы.

— Стена буйына баҫ та урыныңдан ҡуҙғалмай ғына тор! — тип бойорҙо ул Төлкөсураға.

Бәй-бәй, ни эшләй әле былар? Төлкөсура, артына сигенә барып, стенаға һөйәлде. Маслов ниҙер яҙып биргәс, Романды саҡыртып индерҙеләр. Ул ҡобараһы осҡан Төлкөсураны, наган тотҡан урядникте күргәс, аптырап ҡалды.

— Ни эшләйһегеҙ әле бында, исправник әфәнде?

— Беҙ ни эшләгәнлегебеҙҙе үҙебеҙ беләбеҙ, Роман Артемьевич, — тип һалҡын йылмайҙы исправник. — Ахуновтың старшинаны туҡмауы тураһындағы күрһәтмәләрегеҙҙе яҙып бирегеҙ.

— Һеҙ әле шул турала эш ҡуҙғатырға килдегеҙме ни?

— Ә, һеҙҙеңсә, беҙ старшинаға ҡул күтәреүсенең башынан һыйпарға тейешме ни?

— Ул үҙе минең өйгә баҫып инде! Үҙе тик торған кешегә башлап ҡул күтәрҙе!

— Ҡысҡырмағыҙ, Роман Артемьевич, ҡушҡанды эшләгеҙ, яҙығыҙ.

— Бер ни ҙә яҙмайым мин... — Роман исправниктең эргәһенә үк барып баҫты ла уҫал һораны. — Туҡтағыҙ әле, исправник әфәнде, икенсе гильдия купеце Лапшиндең өйөнә инеп, һәр төрлө һорау алыуҙар ойоштororға һеҙҙең ни хаҡығыҙ бар?!

Исправник урынынан һикереп торҙо, бесәй ҡойроғондай мыйығы тағы ла ныҡыраҡ тырпайғандай тойолдо.

— Закон беҙҙең үҙ ҡулыбыҙҙа, Лапшин әфәнде, һәм ни эшләгәнлегебеҙҙе лә беләбеҙ!

— Ҡысҡырмағыҙ миңә! Никифор Андреевич, был бәндәләрҙе өйҙән сығарып ебәр әле, буталып йөрөмәһендәр!

Масловтың туң сырайында аҙ ғына ла үҙгәреш күренмәне.

— Роман Артемьевич, беҙгә тәртип һаҡлаусылар килгән һәм беҙ уларға үҙ бурыстарын үтәүҙә ҡулыбыҙҙан килгән ярҙамды күрһәтергә тейешбеҙ. Артем Дмитриевич биргән хоҡуҡтар буйынса былдай эштәрҙе башҡарыу миңә тапшырылған.

Роман был һүҙҙәргә ҡаршы ни тип яуап ҡайтарырға ла белмәне.

— Ярар, әгәр теләмәһәгеҙ, һеҙҙе күрһәтмә алып борсомабыҙ, Роман Артемьевич, — тине исправник һәм,

Төлкөсураға табан боролоп, ҡәтғи тауыш менән әйтте: — Ахунов, һин ҡулға алынаһың. Урядник!..

Урядниктең үҙ ҡулына бығау һалғанын, был эштең ысын булыуына ышанмаған, уйын ғына итеп күргән төҫ менән ҡараны Төлкөсура, ә тышҡа сығырға ҡушҡас, Романға күҙ ташланы ла, уныһы ни эшләргә белмәүҙән, көсһөҙлөгөнән ағарынып торғанды күргәс, ишеккә атланы. Төлкөсураны, Ҡаратауға ла һуғылып тормай, Стәрлетамаҡ трактына тура сыға торған юлдан алып киттеләр.

Улар китеп, байтаҡ ваҡыт үткәс иҫенә килде Роман. Миңлегөлдөң кейәүгә сығыуы тураһындағы хәбәрҙе ишеткәндән аҙаҡ былай ҙа аңҡы-тиңке йөрөгән кешене исправниктәрҙең кетмәгәндә килеп төшөүе нык шаңҡытҡайны.

— Ниңә бәлйерәп төштөң? — тине уға Маслов. — Лесникте бер ҙә биреп ебәргең килмәй инеме ни?

— Уны ҡайҙа алып барасаҡтар?

Никифор Масловтың туң йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу ғәләмәте күренде.

— Билдәле, ҡунаҡҡа түгел. Дүрт-биш йылды биреүҙәре бар.

— Төрмәгә ултыртасаҡтармы?

— Ундай башкиҫәрҙәрҙең урыны шунда. Әле ул старшинаны туҡманы, иртәгә һинең менән мине лә аяп тормаясаҡ. Яңы лесник табыу яғын ҡарарға кәрәк беҙгә, Роман Артемьевич.

— Юҡ! — Роман өҫтәлгә шартлата һуҡты. — Төлкөсураны төрмәгә ултыртыуҙарына юл ҡуймаясаҡмын. Ул бит — минең дуҫ, атайымды үлемдән ҡотҡарған кеше!

— Тапҡанһың икән дуҫты. Улай булғас, анау бөтә урман ҡырҡыусыларҙы ла дуҫың ит.

— Мин уларҙы дуҫ итәм тимәнем, ә Төлкөсура — дуҫ!

Масловтың өгөтләүҙәренә лә ҡарамаҫтан, Роман атын эйәрләргә тотондо. Урядниктәрҙе Ҡаратауҙа уҡ ҡыуып етеп, Төлкөсураны йолоп алып ҡалырға теләй ине ул.

Ул Торомтайҙарға килеп ингәндә, Ғәрифә генә өйҙә ине. Хужабикә уны асыҡ йөҙ менән ҡаршыланы, ҡулы менән хәрәкәттәр яһап, ниҙер аңлатырға тырышты. Уның шулай хәсрәтһеҙ йөрөүенән Төлкөсураның ҡулға алыныу хәбәре бында ишетелмәүен аңланы Роман. Төл-

көсураны ауылға килтермәй, ыңғай алып киттеләрме икән ни? Бәлки, исправниктәр старшина өйөнә туҡталып, уны келәткә ябып ҡуйғандарҙыр? Роман, урамға сығып, Ҡотлоғужа өйөнә юнәлгәйне, туҡтап ҡалды. Хәҙер Миңлегөл уларҙа бит, әгәр ул осраһа, ни эшләр? «Исмаһам, үҙен бер күрермен», — тигән ҡарарға килде лә ары атланы. Старшина өйөнә килеп еткәс, ул ҡапҡа алдында тағы туҡталырға мәжбүр булды. Ҡапҡанан теҙелешеп биш-алты ҡыҙ сыҡты, улар артынса өҫтәре аҡ таҫтамал менән ябылған күнәктәр көйәнтәләгән, кейенеп-яһанған Миңлегөл күренде. Ҡыҙыл сатин күлдәге өҫтөнән уҡалы елән кейгән, башында — оҙон сәсәкле, эре биҙәкле йоҡа шәл, аяғында — итек; унын артынса тағы өс-дүрт ҡыҙ күренде. Улар сырҡылдашып көлөшә-көлөшә һөйләшәләр, тик Миңлегөлдөң сырайы ғына моңһоу кеүек, башы түбән эйелгән. Ана бит, шаҡ ҡатып торған Романды ла күрмәне. Шул саҡ бер ҡыҙ, Роман яғына ымлап, уға бер-ике ауыҙ һүҙ әйтте һәм, ниҙәндер ҡурҡҡандай, Миңлегөл, һаҡ ҡына боролоп, шәл ситенән уға күҙ һалды, атлауынан туҡтап, аяғы аҫтына төбәлде, шунан ваҡ-ваҡ аҙымдар менән ҡабалан атлап алдағы ҡыҙҙар артынан эйәрҙе.

Роман, әлбиттә, бөгөн төш ваҡытында ғына ир йортона оҙатылып килгән Миңлегөлгә әхирәттәренең, әүәлдән килгән ғөрөф-ғәҙәт буйынса, һыу юлы күрһәтергә китеп барыуҙарын аңламаны. Йөрәген әсенеүле уй телеп үтте, ҡыҙҙар тыҡрыҡҡа боролғансы ҡарап торҙо ла ихатаға инде. Унда бер кем дә күренмәй. Алғы өйҙә йөрөгән старшина ҡатыны:

— Уйылдан, сыҡ әле! — тип төпкө өйгә ҡысҡырҙы.

Өр-яңы таҡыя, ап-аҡ күлдәк, кәүҙәһенә килешле ҡара кәзәкей кейгән Уйылдан югереп килеп сыҡты, Романды ҡосаҡлап алырҙай булып күреште, төпкө өйгә әйҙүкләргә тотонДо, шунан Романдың ҡиәфәтендәге ғәҙәти булмаған һалҡынлыҡты абайлап, туҡтап ҡалды.

— Атайың ҡайҙа?

— Ул Стәрлегә киткәйне, ҡайтмаған әле.

Әһә, бына нисек икән! Тимәк, Ҡотлоғужа теге көндәге ғауғанан аҙаҡ тура Стәрлетамаҡҡа сапҡан. Исправниктәрҙең шулай бик йәһәт килеп етеүҙәре аңлашыла инде хәҙер.

— Ярар, хуш, — шулай бик сәйер генә сығып киткән Роман артынан Уйылдан аптырап ҡарап ҡалды, сөнки баяр ултырышында булған хәлдәрҙе Ҡотлоғужа өйөндәгеләргә лә һөйләп тормағайны.

Роман ултырышҡа кире ҡайтты, кистән әҙерләнеп ҡуйҙы ла, иртәгеһенә Стәрлетамаҡҡа сығып китте. Ул Төлкөсураны бәләнән ҡотҡарырына ныҡлы ышана ине. Ләкин эш ул уйлағанса уҡ еңел генә хәл ителерҙәй түгел икән. Өйәҙ полиция идаралығында уның менән рәтләп һөйләшергә лә теләмәнеләр, юҡҡа борсолоп йөрөмә, закон ни ҡушһа, шулай эшләрбеҙ, тинеләр. Романдың берҙән-бер ышанысы ҡалды: өйәҙ хәрби командаһының начальниге Осипов аша эш итергә. Ләкин Осипов та борғоланды-һырғаланды, минең эш — ғәскәр менән командалыҡ итеү, суд эше миңә ят нәмә, тине. Шулай ҙа, ныҡышып, үтенеп, уны полиция идаралығына алып барҙы Роман. Ләкин Осипов начальник кабинетенән, бер ни ҙә эшләй алмайым, тигән ҡиәфәттә сығып, ҡулын йәйеп, эйәген атты.

— Ул бәндә старшинаны туҡмаған бит, бында, туғанҡай, эштәр хөрт. Иң һәйбәте, башыңды ҡаңғыртып йөрөмә, ҡайтып кит, — тип кәңәш бирҙе.

Роман Ҡаратауға кире ҡайтманы, Өфөгә китте. Атаһы, моғайын, бер әмәлен табыр, Төлкөсураны — үҙен үлемдән аралаған кешене — хөкөм ителеүҙән ҡотҡарыр.

Өйҙә уның көтмәгәндә ҡайтып төшөүенә аптырап ҡалдылар, шунан зыу-ғәләмәт ҡубып, шатланышып, унан тегенеһен-быныһын һорарға тотондолар. Роман эштең нисек барыуын оҙонға һуҙмай ғына төшөндөрөп бирҙе һәм, атаһы менән икәүҙән-икәү генә ҡалғас, уға ниңә ҡайтыуын һөйләне.

— Бөгөндән, бына хәҙер үк, берәй сараһын күрергә кәрәк. Шунһыҙ Төлкөсураны ултыртасаҡтар. Ҡотлоғужа, суд булғанын көтөп, үҙе Стәрлетамаҡта ята, — тип бөтөрҙө һүҙен.

Лапшин уйға ҡалды. Ҡапыл ғына хәл итә торған да мәсьәлә түгел ине был уның өсөн. Уға, иң беренсе сиратта, старшина менән араны боҙорға ярамай, Ҡаратауҙағы иң ышаныслы таянысы — Ҡотлоғужа. Икенсенән, уға Төлкөсура кеүек, тура килгәндә старшина менән дә бигүк иҫәпләшеп тормаған дыуамал, уҫал, көслө кешеләр ҙә кәрәк. Төлкөсураның Ҡыйғыр яланы — Лапшин ултырышҡа тип һайлаған урын өсөн һуғышып ҡулға

алыныуына, бәлки, артыҡ иҫе лә китмәҫ ине, уны үлемдәндән ҡотҡарып та ҡалған кеше бит әле Төлкөсура.

Лапшинде был юлы намыҫы еңде. Губерна полиция идаралығына, енәйәт һәм гражданлыҡ эштәре буйынса Өфө суд палатаһына барҙы, кәрәкле кешеләр менән һөйләште, ҡулына «Төлкөсура Ахуновты, күҙәтеү аҫтында тотоу шарты менән, төрмәнән сығарырға, хөкөмгә тарттырмаҫҡа» тигән яҙыу алыуға өлгәште. Лапшин ҡағыҙҙы Стәрлетамаҡҡа почта аша ғына ебәрәйек, үҙең, бер килгәс, тора биреп кит, тигәйне лә, Роман:

— Атай, Ҡаратауҙа эштең иң ауыр ваҡыты, унда тиҙерәк барған-яҡшы, — тип тағы юлға сыҡты.

Төлкөсураны иртәгә суд була тигән көндө һаҡ аҫтынан сығарҙылар. Төрмәнең ҡапҡа ауыҙында көтөп торған Романды югереп килеп ҡосаҡланы ул.

Уғата уйламағанда ҡулға алынып, төрмәгә килтереп япҡастар, тәүҙәрәк һеңкәҙәгән кеүек ултырҙы Төлкөсура. Ҡамерала байтаҡ кеше бар ине. Улар менән дә һөйләшмәне. Ҡитсе, шул хәтлем ғәҙелһеҙме икән ни был донъя? Уны башлап туҡмаусы рәхәтләнеп ирекτә йөрөй, ә ул төрмәлә ултыра. Ул эштең хөкөмгә үк барып етеренә ышанмай ине. Өсөнсө көнөнә, камеранан сығарып, һорау алғастар (ул бөтәһен дә нисек булған — шулай һөйләп бирҙе), аҙаҡтан: «Мине артабан ни эшләтәсәктәр?» — тип һорағайны, һорау алыусы, көлөп: «Уныһы хөкөм эше», — тип кенә ҡуйҙы. Ошонан аҙаҡ ҡына ул үҙен ниндәйерәк яҙмыш көткәнен төҫмөрләне. «Бында беҙҙең менән күп һөйләшеп тормайҙар», — тине уға камерала бергә ултырған өлкән генә ағай. Ул недоимка өсөн өйөндәге әйберҙәрҙе алырға килгән урядниккә яман һүҙ әйткән икән, шуға ултыртҡандар. Икенсе берәүҙе ҡаҙна урманынан ағас ҡырҡыуҙа ғәйепләп япҡандар. Ә өсөнсөһө, бошонмаҫ бер әҙәм, үҙенең нисек итеп ат урлау мажараларын тәмләп-тәмләп һөйләй. «Хөкөм итһендәр әйҙә, барыбер ҡасам мин, — ти. — Үҙемде ҡулға алдыртҡан кешенең үләкһә бәрәсен дә иҫән ҡалдырмай, бөтә байлығын урлаясаҡмын, алла бирһә», — тип, һаман ҡаҫта һаҡлай бит әле. Эйе, төрлө кешеләр бар ине бында. Шулар менән бергә Төлкөсураның башы ла әллә ҡайҙарға олағырмы икән ни?

Ул ҡайһы саҡта Сажиҙәнең һөймәлекле йөҙөн күҙ алдына килтерә. Уның ошо уҡ ҡалала, яҡында ғына булыуын тойоу йөрәген яндыра, башын стенаға бәрер

сиккә етә. Сажидә уның шулай хөкөм ителгәнен кеше аша, моғайын, ишетер. Әллә ниндәй яман уй килер инде уның башына Төлкөсура хаҡында. Ғүмерендә тәү тапҡыр үҙен ғишыҡ уттарына һалған ҡыҙ хыялында ғына ҡалырмы икән ни?..

Ниндәйҙер өмөт бағлаһа ла, ул Романдың үҙе артынан шул саҡлым уҡ йөрөрөн башына ла килтермәгәйне. Көтмәгәндә иреккә сыҡҡас, уға ошо урыҫ егете донъялағы иң яҡын кешеһе тойолдо.

Роман ҡалалағы иң яҡшы ҡунаҡханаға урынлашҡайны. Шунда алып барып, Төлкөсураның тамағын туйҙырҙы, хатта араҡы менән дә һыйламаҡсы иткәйне, Төлкөсура:

— Мин былай ҙа иҫерек кеше кеүек әле, Роман дуҫ, — тип баш тартты.

Шулай ҙа, йыуынып-сайынып, тамаҡ туйҙырғас, уның күңеле күтәрелде, тағы Сажидәне иҫенә төшөрҙө. Туҡта инде, ирекһеҙҙән ҡалаға килһә лә, уны күреп китмәй тиме ни! Роман, хәҙер үк юлға сығабыҙ, тиһә лә, ул, тиҙ генә бер танышымды күреп киләйем, тип, уның ризалығын алып, үҙҙәре төшөп йөрөй торған ҡунаҡханаға югерҙе. Бара торғас, ҡабаланыуҙан бәреп сыҡҡан тирен һөртөү өсөн усын битенә тейҙергәйне, ҡулына ҡужырмаҡ урын бәрлекте. Бәй, уның Ҡотлоғужа ҡамсыһы ялмап үткән бите хәтәр ҡутырлаған да инде! Шул килеш ҡыҙ алдына барып баҫырмы? Әллә ни уйлауы бар бит Сажидәнең. Төлкөсураның дәрте ҡапыл һүрелде, туҡтап ҡалды, шунан: «Ярар, моғайын, берәй саҡ юл төшөр әле», — тип кире боролдо. Ләкин тағы туҡтаны. «Ситтән генә, ҡойма аша ғына булһа ла, күреп киткәндә...» Ошо уй уны яңынан ҡунаҡханаға табан ҡыуаланы. Ситтән-ситтән ҡарап, байтаҡ йөрөнө ул ҡапҡа тирәһендә, ләкин таныш һын күренмәне. Төлкөсураның күңелен бошонҡо уйҙар баҫты, Романдың ҡайтырға ҡабаланыуын хәтерләгәс, артына әйләнеп ҡарай-ҡарай, китеп барҙы...

Юлда ҡайтып килгәндә Роман уны ҡотҡарыу өсөн ниҙәр эшләүен һөйләп биргәс, уның яурынына ҡулын һалып:

— Беләһеңме, мин һинең алда хәҙер үлгәнсе бурыслы, — тине Төлкөсура.

Атаһы кеүек ҡулында байлыҡ булған кешеләрҙең түбән ҡатламға айырыуса ҡанһыҙ мөнәсәбәте менән күңеленән ризалашып бөтмәй ине Роман. Ул Петербургта

уҡығанда гимназистәр, студенттәр араһында йөрөгән «демократия», «социализм» тураһындағы һәр төрлө хәбәрҙәрҙе байтаҡ ишеткәйне. Унынса, байҙар бай булып ҡалыу менән бергә, ярлыларҙың да хәлен бер аҙға яҡшыртырға кәрәк. Әйтәйек, уның атаһы алтмышар тингә һатып алған һәр дисәтинә урмандан егерме бишәр һум самаһы саф файҙа төшөрә. Ни өсөн урман ҡырҡыусыларға, эшселәргә, ҡыуғынсыларға эш хаҡын күберәк түләмәҫкә?

Ул юлда Төлкөсураға үҙенең Петербургта уҡыған саҡтары, ошо уйҙарының ҡайһы берҙәре тураһында ла һөйләне. Ошонан аҙаҡ инде Төлкөсураға был рус егете үтә яҡын булып китте: «Күпте белә, яҡшы күңелле кеше Роман», — тип уйлай. Хатта уғата бер ҡатлыланып:

— Атайыңдан эшселәргә көнлөк хаҡын арттырыуҙы һорап ҡарайһыңмы әллә, Роман? — тине, уға өмөт менән ҡарап.

Роман башын сайҡаны.

— Бер эш тә сыҡмаясаҡ. Бына үҙем төп хужа булып ҡалһам...

Ул саҡта ни эшләйәсәген әллә үҙе лә белмәгәнгәме, Роман һүҙен осламаны.

* *
*

Григорий баяр ултырышында йәшәй ине хәҙер. Уға Маслов һәйбәт иттереп, ҡул менән әйләндереп өрҙөрмәле механик күрек ҡуйҙыртып, тимерлек һалдырҙы. Григорийҙең йәшәү урыны ла ошонда уҡ: төптәге стена буйына кескәй генә һике әтмәләп алды ла шунда ятып-тороп йөрөй. Григорийҙе эшкә алып, рәхәтләнде Маслов, өнө-теле юҡ, ни тотһа — ҡулынан шул килә.

Ләкин баяр приказчиге был оҫта ҡуллы кешелә һуңғы ваҡытта әллә ни ҡәҙәрем үҙгәрештәр булыуын тойомламай ине. Григорий хәҙер үҙен яңынан тыуғандай хис итә: һәр саҡ кешеләр араһында, улар менән һөйләшеп, көлөшөп йөрөй. Һаҡал-мыйығын ҡырып, сәсен үҫтергәс, төҫкә-башҡа ла йәшәреп, үҙгәреп киткәндәй булды. Эшселәр ҙә уға бик һәйбәт ҡарай, оҫта, ихлас булғаны өсөн ихтирам итәләр. Улар араһында бер нисә яҡын күргән дуҫы ла бар инде. Улар менән айырыуса алсаҡ һөйләшә, үҙенең заводта эшләгән йылдарын хәтерләп алған саҡтары ла була.

Эшселәрҙең ҡышҡы эш шарттары бик ауыр ине. Көн буйы ҡар ярып, һыуланып, өшөп-туңып ағас киҫәләр ҙә төнөн ауылдарына ҡайтып китәләр, иртә менән тағы килеп етәләр. Өҫтәүенә, анау Никифор йәндәрен ҡыя: бүрәнәнең төбөн әрсемәнеңме йә бер нисә ботаҡты ғына шыма итеп киҫмәнеңме, ҡырҡҡан ағасыңды кәмгә һуға. Эш хаҡын да, фәлән-фәлән әйберҙәр алғайның, ат дағалатҡайның, тип иҫәпләй-иҫәпләй ҙә яртылаш тотоп алып ҡала.

Берҙән-бер көндө ат дағалатырға, ыңғырсаҡ-фәлән юнәттерергә, ағасты этеп йығыу өсөн һөңгө башы — айҡыс эшләтергә килеүселәр тимерлектә байтаҡ йыйылып киткәйне. Өшөп килеп кергән кешеләр тимерлектән сығышмай, тегендә-бында терәлеп, һүҙ ҡуйырталар.

— Беҙгә ҡарағанда ожмахта йәшәйһең һин, Гөргөрөй.

— Һөйләмә лә, әй. Йылы, ҡыштың нисек үткәнен дә һиҙмәй ҡалаһың инде бында.

Григорий китек тешен күрһәтеп көлә.

— Әйтмәгеҙ ҙә инде, Лапшин үҙе лә был тиклем үк донъяны күргәне юҡтыр әле.

— Шулай ҙа беҙҙең хәлдә түгелһең барыбер.

— Дөрөҫ, саҡ ҡына еңелерәк миңә. Ә һеҙ ниңә ауыҙығыҙҙы йомоп йөрөйһөгөҙ һуң? Әйтегеҙ Масловҡа, ҡуна ятып йөрөү өсөн барак эшләтһен.

— Һәй, әйткәнде бар тип беләме ни ул, Гөргөрөй, әҙәм арҡырыһы бәндә бит.

— Шулай ҙа ул, брат, — тип тимер сүкеүенән туҡтамай, ялт итеп ҡарап ала Григорий, — беҙ заводта эшләгән саҡта унан яман арҡыры кешеләрҙе буйға әйләндерә торғайныҡ. Ҡүмәкләберәк бер төптән тотонһаң, әллә ҡайҙа бара алмай ул.

— Ысынлап та, әллә әйтеп ҡарайһымы икән, ағайэне? Былай бигерәк ҡыйын бит. Көндөҙгөлөккә лә ҡар өҫтөндә ултырып ашайбыҙ.

— Эш түгел инде, яза ғына.

— Һеҙ, егеттәр, ҡайҙа, кем менән, ниндәй һүҙ һөйләшкәнде кәрәгер-кәрәкмәҫ урында ғауғалап йөрөмәгеҙ. Әммә бер кәңәшемде әйтәм. Иң ышаныслы кешеләрегеҙҙән һайлап, бер төркөмдө Масловҡа ебәрегеҙ, барак һалдырһын. Унан ҡыш көнө урман киҫеүгә, миненсә, йәйгелектәгенә ҡарағанда аҡса ла артығыраҡ түләнергә тейеш. Ағас төбөндәге ҡарҙы көрәйһегеҙ, уларҙы атҡа те-

йәп ташыу өсөн юл көрәп һалаһығыҙ, тағы әллә ни тиклем мәшәҡәттәр бар, ә норма ла, эш хаҡығыҙ ҙа һаман шул көйө. Уныһын да бер юлы әйтегеҙ, көнлөк хаҡын арттырһын.

Төлкөсура ла ошонда инде был мәлдә. Григорийҙең һөйләгәндәренә иғтибар менән ҡолаҡ һалып тора. «Ауылда балаганында төңөлөп ятҡанда ауыҙынан бер һүҙе сыҡмай ине, ҡара һин уны, ни һөйләй. Аҡыллы кешегә оҡшаған был», — тип уйлай. Ғөмүмән, Григорий менән аралары һәйбәт кенә уларҙың, ләкин тимерсенең быға тиклем улай уҡ асылып киткәне юҡ әле.

— Әллә Маслов менән был хаҡта тәүҙә үҙем генә һөйләшеп ҡарайыммы икән, ағай-эне, — тине Төлкөсура.

Григорий уға ялбыр ҡашы аҫтынан ризаһыҙлыҡ белдереп ҡараны.

— Бындай эш, дуҫ кеше, берәүҙең генә ҡулынан килмәй, бөтә кешеләр исеменән вәкиләт барһын. Масловтың: «Һинең ни ҡыҫылышың бар әле бында? Өшөмәйһең, айлыҡ эш хаҡың һәйбәт, үҙ эшеңдә бел», — тип һинең ауыҙыңды тиҙ тығыуы бар.

Ошонан аҙаҡ биш-алты көн үткәйне, приказчик эргәһенә өс-дүрт урман ҡырҡыусы килеп инде. Аҙыраҡ тапанып торғас, русса шымараҡ белгән берәүһе һүҙ башланы.

— Беҙҙе һеҙгә, Маслов әфәнде, иптәштәребеҙ ебәргәйне.

— Көпә-көндөҙ эш ҡалдырып, ниңә килдегеҙ?

— Башҡа саҡта беҙҙең ваҡыт юҡ, — тине әлеге кеше һәм урман ҡырҡыусыларҙың ҡуна ятып эшләү өсөн барак һалдырыуҙы һәм ҡышҡы эш хаҡын арттырыуҙы һорағанлыҡтарын әйтте.

Маслов тәүҙә иғтибарһыҙ ғына ҡылана ине, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, урынынан торҙо, иҙәндә ары-бире йөрөргә тотондо, шунан өҫтәле артына барып баҫты.

— Кем ҡотҡоһо был?

— Ҡотҡо түгел, хәлде үҙегеҙ ҙә аңлап тораһығыҙҙыр.

— Һеҙ минең кеҫәлә бөтмәҫ аҡса бар тип беләһегеҙме әллә? Бынауҙарға барак һалдырып бир икән! Уның өсөн ваҡыт, аҡса, бүрәнә кәрәк. Ә быларҙың береһе лә миндә юҡ! Һеҙ тора-бара һәр ҡайһығыҙға айырым өй һалдырыуҙы ла талап итә башларһығыҙ. Эш хаҡына килгәндә, быныһы инде тәүҙән үк үҙегеҙ менән килешел-

тән. Мин һеҙгә былай ҙа үҙ байҙарығыҙҙан артыҡ түләйем. Дөрөҫ бит?

— Шулайын шулай ҙа...

— Шулай булғас, барығыҙ, эшегеҙҙә булығыҙ.

Килеүселәр, артабан һүҙҙе нисек дауам иттерергә белмәйенсә, сығып киттеләр. Кисен был хәл тураһында Маслов Романға һөйләне.

— Аҙ ғына ла йомшаҡлыҡ күрһәтергә ярамай, улар хәҙер елкәңә менеп атланырға әҙер тора. Был эште кемдәр башлап йөрөүен белергә ине беҙгә. — Маслов, шикләнеберәк, шунда уҡ ултырған Төлкөсураға ҡараны. — Һинән бер серебеҙ ҙә юҡ инде, Ахунов (исемен әйтә белмәгәнлектән, Никифор уға шулай фамилияһы менән өндәшә ине), һин — үҙ кешебеҙ. Бындағы бөтә эшкә бына әсөбөҙ яуаплы. Эшселәрҙең һөйләшкәненә ҡолаҡ һалғылап йөрө әле һин. Ҡайһылары ризаһыҙлыҡ белдереп күберәк һөйләнә — миңә әйтерһең. Һин бит — уларҙың ауылдашы, улар һинән тартынып тормай. Нисек ҡарайһың?

— Ярар, белештергеләрмен, — тине Төлкөсура, күңеленән иһә: «Ай-һай, аҡыллы баш, һинең кеүек ҡотһоҙға ауылдаштарымды һатайым икән», — тип уйланы.

Был көндө Төлкөсура менән Роман ауылға барып килергә йыйынғайны. Төлкөсураның өҫ-башын алмаштыраһы, ата-әсәһен күрәһе, бигерәген дә иһә Уйылданды осратып һөйләшәһе бар. Роман әллә ни йомошо булмаһа ла, унан ҡалышаһы килмәне. Төлкөсура һиҙә уның күңеле ниңә ауылға тартылғанын — Миңлегөлдө онота алмай, күреп булһа ла китермен, тиҙер инде.

Миңлегөлдөң тормошо иһә ҡатмарлыраҡ. Көҙ көнө Ҡыйғыр яланында булған хәлдән аҙаҡ, Ҡотлоғужа туй үткәреү тураһында уйлап та ҡараманы. Уйылданы был хаҡта һүҙ ҡуҙғатҡас:

— Мине әҙәм рисуайы иткән, урыҫтарға һатылған Төлкөсура менән ата-әсәһен өйөмә саҡырыу түгел, тупһама ла аяҡ баҫтыраһым юҡ, — тип ҡырт киҫкән.

«Өндәре тығылһын әйҙә. Миңә — малы түгел, даны ҡиммәт», — тип, ҡалым өсөн көтөүсеһенән бер күнәк бал, ике һарыҡ, бер тана һыйыр ебәрткәйне шулай ҙа, Ҡотлоғужаның әллә ни ҡәҙәрем янау һүҙҙәрен ишетә йөрөгән Төлкөсура көпә-көндөҙ балын да, малын да кире алып барып:

— Бөтәһе лә үҙегеҙгә булһын, беҙгә мал түгел, на-

мыҫ ҡәҙерле, — тип сығып киткәс, Ҡотлоғужа енен сәсеп ярһыған.

Ғөмүмән, ул күҙ көнө үҙ һүҙен һүҙ итеп, Төлкөсураны төрмәгә ултырта алмағаны бирле, уны тотоп ашарҙай булып йөрөй. Ҡоҙа тип өндәшеү түгел, ҡайһы саҡта, урамда күреп ҡалһа ла, әллә ҡайҙан уҡ ситкә борола һалып китә. Ата-әсәһе эргәһенә барып йөрөмәҫкә ҡушып, Миңлегөлдөң йәнен ҡыялар икән. Ул, бахыр, ҡасып-боҫоп һирәк кенә килгеләгәнендә лә:

— Эй әсәкәйем, башҡайымды тере көйө тамуҡҡа тыҡтығыҙ бит! — тип илауҙан бушамай; уның хәлен аңлап, әсәһе ҡайғыра.

Ҡотлоғужа, Лапшин кешеләре — Маслов һәм Роман менән дә ҡатнашырға теләк белдермәй, Төлкөсураның. ниңә ҡотолоуын бер кем дә һөйләмәһә лә, Романдың Стәрлегә барып йөрөүен ишеткәс, был эштә Лапшиндең ҡулы уйнауын һиҙә ине ул. Шунһыҙ Төлкөсураға ҡотолоу юҡ ине, судья: «Атаһының исемен дә һорамай, ете йылға ултыртам, Себергә һөрәм мин уны», — тип Ҡотлоғужаның үҙенә әйтеп үк ҡуйғайны бит инде. Ә ул ҡотолдо, һаман иректә йөрөп ята, шул урыҫтары тирәһендә урала.

Кисә Төлкөсура урман ҡырҡырға йөрөүселәрҙән Уйылдандың Миңлегөлдө бик ныҡ туҡмап ташлауын ишетте. Һеңлеһен бик йәлләй, уның шулар ҡулына барып эләгеүендә үҙенең дә ғәйебе бар һымаҡ тоя ине Төлкөсура. Уйылдандың Миңлегөлгә ымһынып йөрөүен белде бит ул. Ата-әсәһе менән алдан һөйләшеп, яусы-маҙар килә ҡалһа, кире ҡағырға өндәһә, бәлки, бирмәгән дә булырҙар ине. Хәҙер, һуң булһа ла, һеңлеһенә ярҙам ҡулы һуҙмаҡсы, Уйылдан менән һөйләшеп, уның намыҫ ҡылына сиртеп ҡарамаҡсы. Тәүге осорҙараҡ Уйылдан ул ауылға ҡайтҡан саҡта, атаһының күҙенә салынмай ғына, янына килеп етә, һөйләшеп ултыра ине; хәҙер иһә иҫәнлек-һаулыҡ ҡушыуҙан ары киткәне юҡ.

Бөтә был хәлдәрҙе Роман да белә, борсола, ҡайғыра. Анау бер көндө хатта:

— Төлкөсура, әллә Миңлегөлдө шул Уйылдандан тартып ҡына алайыммы икән? — тип тә хәбәр һалды. — Белеп торам, Миңлегөл быға риза буласаҡ, — ти бит әле.

Төлкөсура уны быndай дыуамал аҙымдан тыйҙы: беренсенән, алып киткәс тә, Уйылдан Миңлегөлдө тыныс

ҡалдыра буламы? Икенсенән, нисек кенә итмәһен, Төлкөсура Романдың Миңлегөлдө алып, уны бәхетле итәсәгенә ышанып та бөтмәй. Өлкән Лапшиндең был эшкә риза булмаясағы көн кеүек асыҡ.

Бына улар, икеһенә бер ат егеп, кашауайға йәнәш ултырып, ауылға юл алдылар. Март урталары ине инде. Хәҙер урманда ла яҙ еҫе аңҡый. Ҡар күгелйем төҫкә ингән. Ҡарағайҙар асыҡ йәшел, ә ҡайындарҙың туҙы тағы ла ағыраҡ күренгән һымаҡ; бөрөләре суҡлана башлаған, күрәһең, ҡышҡылыҡҡа үле йоҡоға талған ағастарҙың олононда яҙғы һут уйнарға керешкән. Тауыш иһә яҙғы урманда шул ҡәҙәр асыҡ ишетелә, ҡоро ботаҡ һынып төшкәндә лә, ҙур көҙгө аунап ватылғандай тойола. Ҡайҙалыр йыл әйләнәһенә эштән туҡтамаусы тумыртҡа сиҡылдай. Әллә ниңә ярата ошо ҡошто Төлкөсура, уға бер ваҡытта ла мылтыҡ тоҫҡағаны юҡ. Күрҙеме, уның ағас олонона йәбешеп, ибәтәйһеҙ ҙур башын тегеләй-былай ҡыйшайтҡылап, ҙур ихласлыҡ һәм талымһыҙлыҡ менән сиҡылдай-сиҡылдай үҙ эшен башҡарыуын күҙәтеп тора, уның ҡандай ҡыҙыл, ҡап-ҡара, аҡ буяуҙар менән сыбарланған төҫөнә һоҡлана. Юл буйындағы ағас баштарында ғолдор-ғолдор, ғорт-ғорт тип алаңдап ултырған ҡорҙар күңелле фырылдап осоп киткеләй.

Егеттәр һөйләшмәйҙәр, һәр ҡайһыһы үҙ уйына сумып килә. Роман Ҡаратауға килгәнсе үк башҡорт тормошон аҙыраҡ белһә лә, Миңлегөлгә бәйләнешле килеп тыуған хәлдәр уны аптырата. Яратам тип йөрөп өйләнгәс, ире хәҙер уны ниңә шул тиклем ҡыйырһыта икән? Миңлегөл шул йәберләүҙәргә ни өсөн түҙеп тора? Айырылып ҡайтһын да китһен ине... Бер көн Төлкөсураға «Уйылдандан тартып алайыммы икән әллә?» — тип әйтте лә әйтеүен, ул ысынлап та айырылып ҡайтһа, ни эшләр ине икән Роман? Былай уның һаман да Миңлегөлдө күргеһе, уның матур күҙҙәренә ҡарап торғоһо, йоҡа ирендәренән һурып үпкеһе килә. Ләкин уны үҙ эргәһенә алып, бергә йәшәй башлауға әҙерме һуң ул? Башҡорттан ҡалған бисәнән башҡа мөхәббәтен таба алмаҫмы ни? Был һорауҙарға Роман һис ниндәй икеләнеүһеҙ яуап бирә алмай. Хәҙер инде Төлкөсура өсөн дә сер булмаған алтын ҡашлы алтын йөҙөккә ҡарай ҙа унда Миңлегөлдөң төҫө сағылышын күргәндәй була.

Улар ауылға килеп ингәндә, эңер төшә башлағайны

инде. Түбәлек аҫтында ат тиҙәген көрәп йөрөгән Торомтай, егеттәр ихатаға кереп туҡтау менән, эргәләренә килде. Атаһы ҡапыл ҡартайып, бөтөрөнөп киткән кеүек. Төлкөсура уға йәлләп ҡараны. «Бөтәһе лә минең менән Миңлегөл арҡаһында», — тип йөрәге һыҡранды. Уның иҫән-һаулыҡ һорашыуына Торомтай ҡарлыҡҡан, хәлһеҙ тауыш менән:

— Эштәр шәптән түгел, улым, — тип яуап бирҙе.

— Әллә ауырыйһыңмы, атай?

— Сырхап та торам...

— Шулай булғас, ниңә сығып йөрөйһөң һуң?

— Сыҡмай... өйҙә ултырып түҙер хәл юҡ. Миңлегөл дә беҙҙә әле.

— Шулаймы ни? — Төлкөсураның һеңлеһен байтаҡтан бирле күргәне юҡ ине, өйгә йүгереп инеп китте. Барып керһә — Миңлегөл әсәһе менән урындыҡ ситендә йәнәш ултыра, ҡапыл ғына танырлыҡ та түгел: күҙ-башы күм-күк, өҫкө ирене шешкән, битендә яра эҙе бар. Әсәһенең иһә күп илауҙан күҙе ҡыҙарып бөткән.

Миңлегөл йүгереп килеп ағаһының муйынына аҫылынды ла иларға тотондо.

— *Их*, ағаҡайым, белмәйһең бит хәлдәремде!.. — тип өҙәләнеп-әсенеп һөйләнә.

Төлкөсура уны нимә тип йыуатырға ла белмәй, көрәктәй усы менән арҡаһынан һыйпай. Бына һеңлеһе әҙерәк тынысланды, һөйләшер хәлгә килде.

— Анау юнһеҙ үлтерә яҙып туҡманы бит. Теге саҡта биргән йөҙөгөн таптыра, кемгә бирҙең һин уны, ти. Аптырағас, ошо йөҙөккә алмаштырҙым, тигәйнем, һин тора-бара мине лә алмаштырырһың, тип туҡмап алды ла китте. Ни эшләргә лә белмәйем инде хәҙер, ағай. Бөгөн, улай ыҙалатҡансы, айыр ҙа ҡуй һин мине, тигәйнем: «Айырырмын бына мин һине. Өйөмдән тере килеш сығып китә алмаҫһың», — тисе. Әллә үлтерергә итә инде... Ней әсәйемә тере көйөк булдым.

Ишектә Торомтай, уның артынса Роман күренгәс, уның ауыҙынан ыңғырашыуға оҡшаш өн сыҡты, йәшеренергә теләгәндәй, түрбаш яғына йүгерҙе. Роман, ғәҙәтенсә, Ғәрифәгә ҡул биреп күреште, шунан арты менән торған Миңлегөлгә өндәште:

— Һаумы, Минигуль.

Ни эшләргә лә белмәй ине был мәлдә Миңлегөл. Романға күм-күк бите менән йәмһеҙ килеш күренеүҙән тар-

тына, бына әле эргәһендә торған Романдың ҡосағына ташланып, рәхәтләнеп бер илағыһы ла килә. Их, теге саҡта эргәһенә сабып барғанда үҙенең ни өсөн килгәнлеген аңлата алманы бит! Бәлки, ошо көнгә тарымаған да булыр ине... Башынан күҙ асып йомған арала үткән ошо уйҙар уға ниндәйҙер ҡыйыулыҡ өҫтәнеме әллә Романды күргеһе килеү теләген еңә алманымы, ул ҡапыл боролдо, эргәләрен талаҡтай күк ҡаплаған, йәшкәҙәгән күҙҙәрен егеткә төбәп, ғәфү ит, мин бына шундай хәлдәмен инде тигән кеүек, уның һуҙған ҡулына усын һалды. Романдың ҡапыл тетрәнеүен хатта Миңлегөл дә һиҙҙе. Егет артҡа сигенә барып, тимер мейескә бәрелде, шунан ишек эргәһендәге бәләкәй урындыҡҡа ултырҙы ла башын түбән эйеп тынып ҡалды. Уның тыны ҡыҫылды, маңлайына һалҡын тир бәреп сыҡты. Өйҙәге көсөргәнеш сигенән ашҡайны. Күрәһең, быны Миңлегөл күтәрә алманы.

— Әсәй, мин ҡасып ҡына сығып киткәйнем, барайым инде тегендә, — тине. «Ҡайтайым» тимәй, «барайым» ти бит әле.

Ул шәлен бөркәнде, Романға тағы бер тапҡыр күҙ һирпте лә ишеккә атланы. Төлкөсура иһә Уйылданды нисек итеп күреү тураһында баш вата ине. Бында берәйһе аша саҡырһаң, килмәҫе билдәле, өйҙәренә барып кереп булмай, атаһы ла өйҙә ултырһа, әллә ниндәй тауыш сығыуы бар. Икенсе берәйһенә, әйтәйек, Ҡотдостарға саҡыртып ҡараһа, ни эшләр икән, килерме? Ошо уй менән ул урынынан күтәрелде.

— Ҡотдоста йомошом бар ине, — тине атаһы менән әсәһенә.

Роман үҙенең артынан эйәреп сыҡҡас, икеләнеп, туҡтап ҡалды. Уны Ҡотдостарға эйәртеп алып барыу урынлы булырмы? Бәлки, Уйылдан менән ҡаты ғына һөйләшергә тура килер. Хәйер, уларҙың икәү-ара һөйләшкәнен аңлаймы ни ул. Бер үҙе өйҙә төңөлөп ултырғансы, барһын әйҙә.

— Теләгең булһа, бар, бер дуҫ эргәһенә инеп сығаһы ине, — тине ул. — Тик бер нәмәне алдан уҡ әйтеп ҡуям. Уйылдан килеп-фәлән керһә, һин беҙҙең һөйләшеүгә ҡыҫылмаҫһың, яраймы, Роман.

Һөйләшеүҙең нимә тураһындараҡ булырын тойомлай ине Роман, ризалыҡ белдереп, эйәк ҡаҡты.

Ҡотдос килеп, Төлкөсураның үҙҙәрендә икәнен, уның менән бик һөйләшкеһе килеүен әйткәс, Уйылдан ҡапыл ғына яуап бирмәне. Был осрашыуҙа дуҫтарса һөйләшеү булмаҫын белә бит инде. Ул, ҡыҙып китеп, Миңлегөлдө үтә ныҡ туҡмап ташлағаны өсөн хәҙер үҙе лә үкенеберәк йөрөй һәм Төлкөсураның был хәлде һүҙһеҙ генә үткәреп ебәрмәҫен дә һиҙә ине. Уйылдан шөрләй ине унан. Әүәлге дуҫ булһа, хәҙер ҡайнаға бит, тотоп, һин шулай минең ҡарындашты ҡыйырһытаһыңмы ни әле, тип бәргеләп ташлау ул дыуамал өсөн һуҡыр бер тин тормай. Атаһын ни эшләтте ана. Етмәһә, хәҙер рустарға арҡаланып алған. Их, анау йөҙөк мәсьәләһен әллә ҡайҙан ҡуйыртып ебәрҙе бит! Тәүге ваҡытта, килен булып төшкәне бирле, Миңлегөл һис ниндәй йөҙөк кейгәне юҡ ине. Уйылдан:

— Мин биргән йөҙөгөң ҡайҙа? Ниңә киймәйһең? — тип һораһа:

— Ята шунда үҙемдең ҡый-шаҡыр араһында. Йөҙөк кейеп, ҡупшыланып йөрөргә ваҡыт бармы? — ти ҙә ҡуя ине.

Бынан ике көн элек уның бармағында бөтөнләй ят йөҙөк күреп, ғәжәпкә ҡалды. Миңлегөл иһә, ҡайһы саҡта, яңғыҙ ҡалдымы, эсе бошоп киткән мәлдәрҙә, үҙ һандығын аса ла йәшергән еренән Романдың бүләген алып, йөҙөктө кейә, ошонан үҙенең күңеленә йыуаныс тапҡандай була ине. Был көндө әллә ни итеп йөҙөктө бармағынан һалырға оноттҡан. Ҡәйнәһе:

— Ана бесәнселәр ҡайтты, бесән алышырға сыҡ! — тип ҡысҡырғайны, һандығын яба һалып торған да киткән.

Ашап ултырғанда ҡулындағы йөҙөккә иренең тишә яҙырҙай ҡарап ултырыуын абайлағас ҡына, үҙенең хатаһын һиҙҙе лә бит, һуң ине шул инде. Өҫтәүенә, Уйылдан уның сырайындағы үҙгәреште, бармағына йөҙөк кейгән ҡулын ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндәй ыуаланыуын да күрҙе. «Бындай шәп йөҙөктө ҡайҙан алды икән ул, — тип аптыраны Уйылдан. — Һатып алған тиһәң, ауылда ҡайҙан тапһын уны? Миңә килмәҫ элгәре ундай йөҙөгө юҡ ине». Әсәһе Уйылданға һәр саҡ: «Бисәндең дилбегәһен ныҡ тот. Уның ҡыҙ саҡта уҡ, аңшаңлап, егет-елән араһында буталғанын беләһең. Бер буйлатһаң, аҙаҡтан тотоп та тыя алмаҫһың», — тип ҡабатлай ине. Тәүҙә әллә ни иғтибар итмәйерәк йөрөһә лә, тора-бара был һүҙҙәр уның ҡолағын тиште. Миңлегөлдөң үҙҙәрендә мал

ҡараусы егет-елән, ир-ат менән һөйләшкәнен күреп ҡалдымы, уға бисәһе әллә ниндәй серле нәмә хаҡында хәбәрләшкән һымаҡ тойола башланы. Былдай саҡта ул Миңлегөлдө тиҙ генә саҡырып ала, ир-ат араһында буталып йөрөмә, тип екерә...

Бына хәҙер әллә ниндәй йөҙөк кейеп алған. Уйылдан менән Миңлегөл урта өйҙә йоҡлап йөрөй ине. Аталары төпкө өйгә кереп бикләнгәс, Уйылдан урын һалып йөрөгән бисәһенән һораны:

— Ҡулыңдағы йөҙөктө ҡайҙан алдың?

— Ҡайҙан тип, үҙемдекесе.

— Элек юҡ ине бит, хатта мин биргән йөҙөктө лә киймәй инең. Дөрөҫөн генә әйт әле, ҡайҙан алдың? — Уйылдандың тауышында янау ишетелә ине.

Миңлегөл киске аштан һуң үткән арала, былдай һорауҙың буласағын белеп, үҙенсә аҡыл уйларға өлгөргәйне инде.

— Асыуланма, Уйылдан. Һин биргән йөҙөк ҙурыраҡ ине бит, алмаштым мин уны.

— Ҡемгә?

— Уныһы һиңә ниңә кәрәк?

— Әйт, кемгә алмаштың? Ауылда быныҡ кеүек йөҙөк бер кемдә лә юҡ!

— Һин бөтә кешенең бармағын ҡарап йөрөйһөңмени...

— Әйтмәйһеңме? Ярар, барыбер әйттерермен!..

Уйылдан һуңғы ваҡытта бисәһенә һис тә юҡтан ғына һуғып ебәреүҙән һис тә тартынып тормаһа ла, төнөн тауыш сығарғыһы килмәне, шулай тип ыҫылданы ла бисәһенә арҡаһын ҡуйып ятты. Иртәгеһенә иһә әсәһенең:

— Ай-һай, һәйбәт бисәңә ни, ниндәйерәк йөҙөк алып биргәнһең! — тигән бер нисә ауыҙ һүҙе утҡа кәрәсин һибеү менән бер булды, ул Миңлегөлдө бығаса һис тә ҡыланмағанынса ныҡ туҡмап ташланы. Иллә тиҫкәре үҙе лә, йөҙөктө кемгә алмаштырғанын барыбер әйтмәне...

«Моғайын, саҡырып алып туҡмамаҫ, барайым әле, һөйләшеп ҡотолған яҡшы», — тигән фекергә килде Уйылдан һәм Ҡотдос артынан эйәрҙе. Романды ла Төлкөсура менән күргәс, ғәжәпләнде, ҡаушабыраҡ ҡалды. Шулай ҙа үҙенең хәлен һиҙҙермәҫкә маташты ул, асыҡ йөҙ менән күрешергә тырышты һәм... Роман менән күрешкән саҡта уның сыңғарсаҡ бармағындағы үҙе Гришанан

һуҡтырып алған йөҙөктө күреп, шаҡ ҡатты. Бына кем менән алмашҡан икән Миңлегөл уның бүләк йөҙөгөн! Бына бит эштәр нисегерәк! Ул Төлкөсуранан шөрләберәк килеүен дә онотто, эштең ни менән бөтөрөн дә уйламаны.

— Был йөҙөк ҡайҙан килеп эләкте һиңә? — тип һораны ул, күҙҙәрен ҡыҫа төшөп.

«Их, эште харап итте бит был Роман! — тип үкенде Төлкөсура. — Шул йөҙөгөңдө Уйылданға күрһәтмә, тип ниңә әйтмәнем һуң?» Төлкөсура йөҙөк Миңлегөлгә йәтәскә отолған өсөн генә бирелһә лә (ул һеңлеһенең әйтеүе буйынса шулай уйлай ине), Уйылдандың отолған өсөн алтын йөҙөк бирмәҫен белә һәм Миңлегөлдөң уны Романға бүләк итеүенең сәбәбен дә аңлай ине...

Роман иһә быларҙың береһен дә белмәй ине, шуға күрә ҡулындағы йөҙөктө кем дә булһа таныр тигән уй башына ла кереп сыҡҡаны юҡ. Ләкин әле ул бер нәмәне асыҡ белә: Миңлегөл бирҙе, тип дөрөҫөн әйтергә ярамай.

— Килеп эләкмәне, үҙемдеке.

— Ха-ха-ха... Үҙеңдекеме ни, Лапшин Роман Артемьевич? Ха-ха-ха!.. — Уйылдан асыуынан быуылып көлдө.

«Таныймы икән ни?» — тигән уй үтеп китте Романдың башынан, шулай ҙа ҡаушаманы, уҫал ғына һораны:

— Йөҙөк тикшерергә килдеңме ни бында?

— Тикшерермен дә! Ул йөҙөктөң кемдеке икәнен онотһаң, ана, Төлкөсуранан һора!

Бер ни аңламағанҠотдос, уның атаһы менән әсәһе, балалар, егеттәрҙең тасма-тас русса һөйләшеүҙәренә аптырап ҡарап, битараф ултыралар.

Төлкөсура хәҙер яҡшылап һөйләшеүҙең килеп сыҡмаҫын аңлай, Уйылданға аҡланырға сәбәп бар; ана бит, үҙе үк этәсләнергә әҙер тора. Шул уҡ ваҡытта эште олоға ебәреп тә булмай ине.

— Уйылдан, — тине ул тауышын күтәрмәй генә, — һин минең менән һөйләшергә килдеңме әллә Роман менән талашырғамы? Унан кеше өйөндә икәнлегебеҙҙе лә онотма.

Уйылдан дилбегәнең үҙ ҡулына күсеп китеүенә ҡыуана, уны ысҡындырмаҫҡа тырыша һәм бик яһил ҡылана ине.

— Шулаймы ни? Һеңлеңдең ошо урыҫ менән...

Унын һүҙе ошо урында өҙөлдө. Төлкөсура, ҡапыл ынтылып, унын яғаһынан бөрөп тотто ла, лып иттереп урындыҡҡа ултыртты.

— Бына шулай ултырып ҡына һөйләшәйек! Ҡобараҡ осмаһын, һине туҡмар өсөн саҡыртып килтерманем.

Ҡурҡыуҙан шымып ҡалған Уйылдан, иҫен йыйып, телгә килде.

— Миңә аҡыл өйрәтмә, һеңлеңә өйрәт.

— Кәрәк булһа, уға ла өйрәтермен. Әле һинен менән ирҙәрсә һөйләшкем килгәйне... — Төлкөсура Ҡотдостоң ата-әсәһенә күҙ һалып алды. — Асыуланмағыҙ инде, ни эшләйһең бит, — тине. Шунан ҡабат Уйылданға боролдо. — Бер нәмәне онотма, Уйылдан, әгәр ҙә мәгәр тағы минең һеңлегә, ялсығыҙ кеүек эшләп йөрөгән, яңы ғына үҙең артынан ялынып югергән балаға, ҡул тейҙерер булһаң, мин һинең менән икенсе төрлө һөйләшәсәкмен. Ул һөйләшеү теленең нисегерәк икәнен белгең килһә, атайыңдан һора. Аңланыңмы?

Уйылдан өндәшмәне, эргәһендә, ысынлабыраҡ һелтәнһә, башын онтай һуғыр кеше ултырғанын белә ине ул. Роман кеүек яҡлаусыһы барҙа, старшина атаһынан да, судтан да ҡурҡып тормаҫ.

— Хәҙер бына йөҙөктөң кемдә икәнен дә белдең, ләкин уны онот! Йөҙөк алмашыу һис ниндәй ғәйеп эш түгел! Романға ла тызырайырға уйлама. Аҙаҡҡы кәңәшем шул: әгәр артабан бергә матур торорға уйламайһың икән, айыр Миңлегөлдө. Ата-әсәнән бала бер ваҡытта ла артмай. Ул әле йәше үтеп барған кеше түгел. Кәрәкһә, ирен дә табыр. Килештекме?

Уйылдан өндәшмәне, лап-лоп атлап сығып китте. Өйөнә иҫерек кеше шикелле ҡайтып инде ул. Урамда саҡта башына килгән тәүге уй — Миңлегөлдөң бөгөн үк йәнен алыу ине. Килә торғас, айығыраҡ фекер йөрөтә башланы: юҡ, быныһын булдыра алмаясаҡ. Унын Миңлегөлгә булған мөхәббәте бөтөнләйгә һүнеп бөтмәгәйне әле, быуырға йә бысаҡ күтәрергә ҡулы бармаҫ. Әгәр туҡмаһа, Төлкөсуранан изгелек көтөп булмаясаҡ. Айырып ҡайтарырға — берҙән-бер юл ошо.

Ул, түрбашта ҡашығаяҡ йыйыштырып йөрөгән Миңлегөлдө танымаған һымаҡ, ишек төбөндә һүҙһеҙ баҫып торҙо.

— Абау, әллә эсеп ҡайтҡан инде? — тине Миңлегөл, уға табан әйләнеп.

— Иçерттеләр!.. — тип ыçылданы Уйылдан. — Эсермәй иçерттеләр! Беләһеңме, хәҙер үк күҙ алдымдан юк̡ бул! Сығып кит!.. Тупһаға к̡абат аяк̡ баçма!.. Талак̡!.. — Асыуға быуылыуҙан Уйылдан был һүҙҙе өс тапк̡ыр к̡абатлай алманы.

Миңлегөл унының к̡ыск̡ырыныуҙарынан һис тә к̡урк̡май туп-тура к̡арап тора ине. Әгәр тағы к̡ул күтәрһә, бынау бысак̡ты алып йөрәгенә к̡аҙаясак̡. Һи булһа ла була!

Тауышк̡а төпкө өйҙән бисәһе менән К̡отлоғужа сык̡ты.

— Тағы ла ни к̡убараһығыҙ? — тип ялбыр к̡аштарын йәмерәйтте К̡отлоғужа.

— К̡ис булһа — талаш, көндөҙ — һуғыш. Бәй-бәйбәй, был ни эш был, — тине бисәһе, Миңлегөл менән улына алмаш-тилмәш к̡арап. Уйылдандың киленен бик нык̡ к̡ына ак̡ылға ултыртыуына к̡әнәғәт булып, Миңлегөлдөң артабан майлаған к̡айыштай йөрөрөнә, тауыштын сык̡маçына өмөт итә ине ул. К̡илененең эшсәнлеген, ни к̡ушһаң — к̡улынан шул килеүен дә белә, улынан айыртырға ла уйламай, тик тәүге көндән үк уны ғүмер бак̡ый к̡алк̡ынмаçлык̡ итеп, баçтырып к̡уйғыһы ғына килә. Шуға күрә әле Уйылдан:

— Айырам мин уны! Хәҙер үк сығып китһен! Талак̡!.. Талак̡!.. Талак̡!.. — тип к̡ыск̡ырғас, аптырап к̡алды, аҳырҙа, тапылдата баçып, улы алдына килде.

— Ни һөйләйһең?! Әле алғаныңа ярты йыл юк̡, айырырға ла уйлайһыңмы? Әстәғәфирулла тип, әйткән һүҙеңде кире ал!

Был арала Миңлегөл еңел генә атлап урта өйгә инде лә кейенергә тотондо. Иң арыу кейемдәрен кейҙе ул, Роман алып биргән шәльяулык̡ты бәйләне, тик уның өçтөнән Уйылдан алған эре биҙәкле кизе шәлде түгел, өйөнән үҙе менән килгән иçкеһен ябынды. Алғы өйҙәгеләрҙең һаман ниҙер ғауғалап һөйләшкәненә лә иғтибар итмәй, һандығы төбөнә кисә кире йәшергән як̡ут к̡ашлы йөҙөгөн алып кейҙе һәм к̡әйнәһе менән к̡айныһы асҡан ауыҙҙарын да ябырға өлгөрмәне, Миңлегөл кәүҙәһен текә тотоп, тык̡-тык̡ баçып, һаман ишек төбөндә торған Уйылданды к̡атк̡ыл терһәге менән төртә биреп сык̡ты ла китте. Артынса ишек асып, к̡әйнәһенең:

— К̡илен, ни эшләйһең?! Ак̡ылыңа кил! — тип к̡ыск̡ырғанын да к̡олағына элмәне хатта.

Бына Миңлегөл шул уҡ ҡиәфәттә, башын артҡараҡ саңҡайтҡан килеш, урам буйынан атлай, ҡайҙа барыуын да, ни эшләрен дә уйламай. Шулай ҙа ул үҙ өйҙәре тәңгәлендә туҡтаны, ҡарҙы ярып ингән юлдан шул яҡҡа борололорғамы-юҡмы тигән кеүек, бер аҙ баҫып торҙо. Шунан иплән кенә атлап ҡарындыҡ тәҙрәһе тоноҡ ҡына яҡтырған ата йортона ҡарай йүнәлде. Хәҙер ул бөтөнләй ҡайтҡанды белгәс, атаһы менән әсәһе ни эшләтерҙәр икән? Тағы иларҙар, тағы ҡайғырырҙар инде. Ә-ә-әй, Төлкөсура ағаһы менән Роман да бында бит әле! Улар хәҙер ни уйлар? Бая Роман, уның йәмһеҙләнгән йөҙөн күргәс, ҡурҡҡан шикелле, сырайы ҡасып, артына сигенгәйне. Моғайын, Миңлегөлдән бөтөнләй һүрелгәндер инде ул хәҙер, әйләнеп тә ҡарамаҫ. Эй раббым, шулай уҡ ул һөйөлөүҙән бөтөнләй мәхрүм ҡалырмы ни? Ирҙән айырылған яңғыҙаҡ бисә көйө ғүмере үтерме? Һөймәгәс, һөйөлмәгәс, был донъяла йәшәүҙең ни ҡыҙығы? Бай кейәүгә барғайның да, уҡаң тиҙ ҡойолдо, тип әхирәттәре лә көлөр инде. Улар араһына барып, уйнап-көлөп ултыра ла алмаҫ...

Бөтәһе лә, бөтәһе лә емерелде, уның алдында бына ошо ҡабат күтәрелмәҫ төн пәрҙәһе ҡоролдо, бер аҙым атланымы, бушлыҡ йәһәннәменә осоп китер кеүек. Ата-әсәһенә, бүтәндәргә күҙ көйөгө булып йөрөгәнсе, был донъяла йәшәмәү хәйерле. Бер иларҙар, хәсрәтләнерҙәр ҙә онотторҙар. Романға булған оло мөхәббәтен иһә мәңгелеккә үҙе менән бергә алып китер. Их, һуңғы тапҡыр уның матур, алсаҡ йәшкелт күҙҙәренә ҡарайһы, уның яҡынлығын тояһы ине!..

Был һуңғы тойғо уны шул тиклем нык биләп алды, унан һис кенә лә ҡотола алманы. Мөйөштә торған еренән ҡуҙғатып, уны ниндәйҙер көс ишеккә табан һөйрәне. Бына ишек тотҡаһы, тыуған төйәгенең ишеген һуңғы тапҡыр асып инеүҙәрелер инде. Уны күргәс, өйҙәгеләр аптырап ҡалды. Атаһы йоҡларға ятҡан, әсәһе һүрәү генә янған сыуал ҡаршыһында ниндәйҙер сепрәк-сапраҡ йыуа, ағаһы менән Роман ишек эргәһендәге бәләкәй урындыҡта һөйләшеп ултыралар.

— Мин былай ғына килгәйнем... хәҙер китәм мин... бер ни ҙә юҡ... — тип өҙә-йолҡа, ҡабаланып, бәйләнешһеҙ һүҙҙәр теҙҙе ул.

Уны күргәс, башын ҡалҡытҡан атаһы кире ятты, эшенән туҡтаған әсәһе:

— Ҡитһәң ни, әйҙә, үтеп ултыр, — тине лә әйберҙәрен йыуыуҙы дауам итте.

— Теге ҡайттымы? — тип һораны унан ағаһы.

Миңлегөлгә уның һорауы ҡапыл ғына аңлашылып етмәне, һүҙ Уйылдан тураһында барғанын төшөнгәс, ҡабаланып яуап ҡайтарҙы:

— Ҡайтты, ҡайтты, бер ни ҙә юҡ, ағай... Тик... минең Романда саҡ ҡына йомошом бар ине, сығып ҡына әйләнмәҫме, тигәйнем.

Ағаһы ниҙер әйткәс, Роман урынынан күтәрелде. Миңлегөл иһә өй эсенә тағы бер күҙ һирпте: уның Романда йомошом бар тиеүе аптыратҡандыр инде, атаһы тағы башын күтәргән, әсәһе кер йыуыуҙан туҡтап ҡалған.

— Ярар, киттем...

Миңлегөл, тупһаны нисек аша атлап сығыуын да тоймай, тышҡа юнәлде, соландан саҡ ҡына ситкә китеү менән туҡтаны. Бына Роман уның янына килде, ниҙер әйтте. Тауышы нисектер һағайып ҡына сыҡҡан кеүек бит әле. Миңлегөл уға табан боролдо ла, егеттең муйынынан ҡосаҡлап, башын түбәнерәк әйҙе, сикәһен үҙенең битенә ҡыҫты. Бына хәҙер ирендәренән һурып үпһен ине Роман! Һуңғы тапҡыр ғына... хушлашыу бүләге итеп кенә... Юҡ, үбергә йыйынмай. Уның шешкән иренен, күгәргән биттәрен ниңә үпһен инде ул?..

— Хуш, Роман... Мин һине шул тиклем яраттым, шул тиклем... Мөхәббәтемде үҙем менән ҡәбергә алып китәм, — тип бышылданы ул. Шунан Романды ҡапыл ысҡындырҙы, ҡулы менән түшенән этте. — Бар, кер инде, бар, бар...

Роман артына сигенде, шунан боролдо ла әкрен генә атлап инеп китте.

Юҡ, быға тиклемге кеүек ихласлыҡ күрһәтә алмай ине Роман. Унда хәҙер Миңлегөлгә ҡарата ниндәйҙер йәлләү тойғоһо ғына ҡалған. Әле Миңлегөл күгәреп бөткән битен үҙенә яҡынайтҡас та, сирҡанған һымаҡ, ситкә тартылды. Юҡ, йәберһетелгән, ябыҡҡан, имгәнгән былдай ҡатын кәрәкмәй ине уға. Уның ошондай киҫерешен Миңлегөл дә һиҙенгән кеүек булды һәм был тойғо донъяла йәшәргә теләгенең һуңғы осҡондарын һүндерҙе.

...Иртүк аттарҙы ҡарарға сыҡҡан Торомтай ҡарт, түбәлек урҙаһына аҫылынып торған ҡыҙының кәүҙәһен күреп, иҫ-аҡылдары ҡороно. Баҫҡан урынынан ҡуҙғала

алмайынса, күпме торғандыр, ахырҙа ҡулын һуҙып, аяҡтарын шыуҙырып ҡына атлап уға яҡынлашты. Тәүҙә бармаҡ остары менән генә уға ҡағылды, шунан тәнен тотоп ҡараны ла һығылып төштө, күҙ алдары ҡараңғыланды.

— Ах... балам...

Был хәбәрҙе ишеткәс, хәлһеҙләнеп, төҫө ҡасып йығылған Ғәрифәне битенә һыу бөркөп саҡ-саҡ иҫенә килтерҙеләр. Төлкөсура менән Роман да, баштарына тай типкәндәй, шаңҡып ҡалғайны.

Миңлегөлдө күтәреп индереп, урындыҡҡа һуҙып һалдылар. Ана ул, муйынын саҡ ҡына ҡыйшайтҡан көйө, үҙенең иң һәйбәт кейемдәрендә, башына Роман килтергән шәльяулыҡты бәйләп, өҫтәренә хәсрәт емерелеп төшкән кешеләргә һис тә иҫе китмәйенсә, тып-тыныс ята. Йоҡа өҫкө ирене бүртеп тора; әллә бите бөтәнләйгә күкһел төҫкә ингәнгә инде, ундағы ҡараһыу таптар асыҡ күренмәй; ҡара ҡаштары, нимәгәлер ғәжәпләнгәндәге кеүек, тағы ла нығыраҡ дуғаланған, матур күҙҙәре мәңге ҡабат асылмаҫҡа йомолған... Их, һин, тормош! Нинә һөйәктәре нығынып та етмәгән ошо ҡыҙ балаға күтәрә алмаҫ ауыр йөктәреңде йөкмәттең? Уйнап-көлөп, шатланып ҡына йөрөр сағында яҡты донъянан ниңә тартып алдың уны, әжәл?..

Был һорауҙарға баштары түбән һалынған, хәсрәткә тарыған кешеләрҙең береһе лә яуап бирә алмай ине.

## VII

Был донъяға кешеләр килә һәм китә торған кеүек үк, йыл миҙгелдәре лә туҡтауһыҙ береһен икенсеһе алмаштыра. Ана, бер нигә лә иҫе китмәйенсә зәп-зәңгәр күктә балҡыған яҙ ҡояшының тәнде иркәләүсе йылы нурҙары һуңғы ҡарҙарҙы ҡыуалай. Ҡарҙар тау битләүендәге ағас араларында ала-ҡола ғына ҡалған инде. Унан әрселгән урындарҙы ап-аҡ умырзая сәскәләре ябып алған, ҡаулан аҫтынан үләндәр морон төртә башлаған. Бөтә ерҙә яҙ нуры, яҙ еҫе ҡолаҡтарға әллә ниндәй моңдар килеп бәрелгәндәй тойола.

Тик Ҡыйғыр яланындағы кешеләрҙең яҙғы матурлыҡҡа һоҡланып торорҙай форсаттары юҡ. Эштең иң ҡыҙған мәле: ҡырҡылған бүрәнәләрҙе яр буйына ташып бөтөргә

кәрәк, кәмәләр, ҙур булмаған һалдар өҫтөнә таҡтанан аласыҡ-казенкалар яһайҙар. Бер нисә көндән бүрәнәләрҙе йылғаға ауҙарып, ҡыуғын башланасаҡ.

Ҡыш буйына Ҡаратауҙа күренмәгән Лапшин бынан аҙна элек үҙе килеп төштө. Хәҙер ул Масловҡа ла, улына ла тынғылыҡ бирмәй, тегендә-бында югертә, улары иһә, үҙ сиратында, эшселәрҙең ҡолаҡ итен ашай. Урман ҡырҡыу ваҡытлыса туҡтатылып торғанлыҡтан, бушаған кешеләр күп кенә ине. Уларҙың байтағы яр буйы эштәрендә, бер ни тикләме ары бәрелеп, бире һуғылып, эшһеҙ йөрөй.

— Күп кенә кешеләрең бер тинлек тә эш эшләмәй, Никифор, һин шуларға көнлөк хаҡы түләйһең, — тине Лапшин бөгөн иртәнсәк. — Һин, беҙҙең биләмәлә башҡорттарҙың ун дүрт дегет ҡайнатыу баҙы бар, ти инеңме әле?

— Эйе, Артем Дмитриевич, улар кирбес менән көпләп, ғүмерлек итеп эшләнгән. Уларҙың хужаларының ҡайһы берҙәре, дегет ҡайнатыу өсөн, беҙҙең биләмәләге ҡайындарҙан тороҡ көйөнсә генә туҙ һыҙырырға рөхсәт итеүҙе һорап килгәйнеләр ҙә инде. Мин уларға, хужа үҙе килмәйенсә, бындай эшкә рөхсәт бирә алмайым, тинем.

— Шундуҡ ауыҙҙарын ҡаплап ҡайтарырға йөрәгең етмәне-инде. Йомшаҡ ҡыланаһың. Елкәңә менгәндәрен көтәһеңме?

— Уныһын ғына эшләп булыр ине лә, Артем Дмитриевич, мине һуңғы ваҡытта бер әйбер борсонҡорай. Был башҡорттар уҫаллаша башланы әле. Ҡыш көнө, ҡуна ятыу өсөн барак һалдыр, ҡышҡы көнлөк хаҡын арттыр, тип ғауғалай биргәйнеләр ҙә тынғайнылар. Хәҙер шул һүҙҙәрҙе яңынан ҡуйырталар. Етмәһә, тимерсе менән лесниккә, ҡарауылсыға эш хаҡын үҙҙәренең аҡсаһынан тотоп алып ҡалып түләгәнде әллә ҡайҙан һиҙгәндәр.

— Уларға быны кем әйтеүе мөмкин һуң?

— Үҙебеҙҙең лесниктән шикләнәм мин, Артем Дмитриевич. Беҙгә ихлас ярҙам итерҙәй кешегә һис тә оҡшамаған ул. Беҙҙең Роман менән һөйләшкәнгә ҡолаҡ һалып йөрөй ҙә шуны эшселәргә еткерә, минеңсә. Ниндәйҙер ҡотҡо таратыусы башлыҡтары ла барҙыр кеүек.

— Мин һинең күрәҙәлеккә ышанып етмәйем, Никифор. Ошо һүҙҙәреңде иҫбатларлыҡ дәлил килтер! Ул саҡта бер көн дә тотмаясаҡмын мин уны. Артабан, бына

ни эшләйһең: һиңә хоҙай шул тиклем оҙон танауҙы юкҡа ғына бирмәгән бит, еҫкән, ҡотҡо таратып йөрөүсене тап. Ҡыуғын ҡыуыусылар араһына ундай кеше эләгергә тейеш түгел. Быныһы — бер. Икенсенән, бөгөн үк башҡорттарҙың дегет баҙҙарын ҡутарырға кешеләр ебәр. Баҙҙарҙы көпләгән кирбестәрҙе тышҡа сығарып өйһөндәр, иртәгәнән уларҙы бында ташыта башла. Был ағас өй ҡышҡылыҡҡа эшселәргә барак булып ҡалыр, үҙең өсөн кирбестән йорт һалдыраһың. Биләмәлә дегет ҡайнатырға бер кемгә рөхсәт юҡ! Аңлашыламы?

— Аңлашылыуын аңлашыла, Артем Дмитриевич, ләкин дегет баҙҙарын ватырға барыусылар табып булырмы икән?

— Булыр! Көнлөк хаҡын бишәр, уға ла риза булмаһалар, унар тингә артыҡ түлә. Уның хаҡы барыбер сығасаҡ. Эргәләге кирбес — Стәрлетамаҡтан һатып алып ташыған менән бер түгел бит.

Дегет баҙҙарын боҙа барырға бер нисә кеше тапты Маслов. Тик, ни хәтлем генә шым эшләргә тырышмаһын, «Лапшин үҙ биләмәһендәге барлыҡ дегет баҙҙарын боҙҙороп, кирбесен бында ташыта икән», тигән хәбәр эшселәр араһына бик тиҙ таралып өлгөрҙө. Бөтә ерҙә ошо хаҡта һөйләп борсолалар, «Был баяр тағы әллә ниндәй этлектәрен уйлап табыр әле!» тип шаулашалар.

Төлкөсура, һуңғы көндәрҙә тимерлектә эш уғата күбәйеп киткәнлектән, Маслов ҡушыуы буйынса, Григорийгә ярҙамлаша ине. Улар икәүһе бергә багор, һал һаллағанда бүрәнәләрҙе бер-береһенә тоташтырыу өсөн тырнаҡтар эшләйҙәр, тимер арҡандар башына ырғаҡ яһап ҡуялар. Йыуан тимер сыбыҡтан сынйыр эшләүе уғата мәшәҡәтле, ваҡ эш булып сыҡты, өсөнсө көн инде шуның менән этләнәләр.

— Әҙер сынйыр һатып ҡына алһа, ни була инде, — тип асыулана Гриҫорий. — Юҡ, алмай, аҡсаһы йәл. Бында бит ул ҡарунға бушҡа тиерлек килә!

— Аптырарһың инде, Гриша, — ти Төлкөсура, — шул ҡәҙәрем аҡсаны ни эшләтә икән ул?

Григорий уҫал көлдө.

— Их, һин!.. Бына уның Өфөләге йортон, донъяһын барып күр, нисегерәк типтереп, бал-майҙа йөҙөп йәшәүен бел инең. Улар донъяныҡын донъялыҡта ҡалдырмай йәшәй, брат!.. Беҙҙең тир иҫәбенә... Анау ҡыҫҡысты алып бир әле.

Шул саҡ тимерлеккә өс кеше килеп инде. Уларҙың борсолоуы йөҙөнә сыҡҡайны.

— Ни эшләп ҡарарға инде, — тине берейе, Григорийҙең стена буйындағы һикеһенә ултырып.

— Тағы нимә бар?

— Баяр үҙ биләмәһендәге беҙҙең бөтә дегет баҙҙарын ватырға кешеләр ебәргән. Ни хәтлем көс түгеп төҙөлгән бит улар! Былай булһа, ул беҙҙе йәйге кәсептән мәхрүм итә бит.

Григорий эшенән туҡтаны, түш беркетелгән бүкәнгә ултырып, тәмәке төрөргә тотондо.

— Башы эшләй баярҙың, — тине ул, әлеге кешенең һүҙенә артыҡ иҫе китмәйенсә. — Һин бына йәй көнө дегет ҡайнатып һатыуҙан ҡолаҡ ҡаҡһаң, ҡайҙа бараһың? Әлеге ошо баярға эш һорап киләсәкһең. Уға шул ғына кәрәк тә.

— Һуң, ни эшләп ҡарайыҡ икән? Григорий, һин аҡыллы кеше бит, берәй кәңәш бир?

Григорий, тәмәкеһен быҫҡытып, байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙы.

— Бында ҡоро аҡыл һатыу менән әллә ни эш ҡырып булмай шул. Күмәкләп тотоноп, Лапшиндең ҡотон алырға кәрәк.

— Нисек? — Аласыҡтағы бөтә кеше Григорийҙең ауыҙына төбәлде.

— Бының өсөн иң уңайлы мәл. Бер нисә көндән ҡыуғын башланырға тейеш бит. Эшселәргә ҡуна ятыу өсөн йорт һалдырыу, аҡсаны арттырыу кеүек ана теге ҡыш көнө ҡуҙғата биреп ҡуйған һүҙҙәргә хәҙер дегет баҙҙарын ваттырма тигән талапты ла өҫтәргә кәрәк. Унан минең менән Төлкөсураға эш хаҡын ул ниңә һеҙҙең аҡсанан тотоп ҡалып түләй? Был турала, бына Төлкөсура һиҙеп әйтмәһә, ошоға тиклем үҙебеҙ ҙә белмәй инек. Һеҙгә эшләмәйбеҙ ҙә инде беҙ. Бөтә эшселәр йыйылып, иртәгә үк баяр алдына барырға, ошо талаптарҙы ҡуйырға кәрәк. Әгәр үтәмәһәң, ҡыуғынға сыҡмайбыҙ, тиһең. Ҡыуғын ул шундай нәмә: әгәр һыу ташҡан саҡта бүрәнәләреңде ҙур йылғаға төшөрөп ҡалманыңмы, улар яр башында ятып серей тигән һүҙ. Ҡыуғынға һеҙ бармаһағыҙ, бер-ике көн эсендә ул бүтән кешеләрҙе ҡайҙан таба? Бына шулай, туғанҡайҙар, был юлы баяр сығынлай алмаҫ. Бына һеҙ өсәү хәҙер бөтә кешегә, иртәнгелеккә

ашап та тормай, иртәгә баяр өйө алдына йыйылырға әйтеп сығығыҙ. Буламы?

— Әлбиттә!..

— Тик шымыраҡ, алдығыҙҙы-артығыҙҙы ҡарап ҡыланығыҙ.

Улар сығып киткәс, Григорий эшкә тотонорға ашыҡманы, һикегә килеп ултырҙы, үҙе эргәһенә Төлкөсураны ла саҡырҙы. Һуңғы ваҡытта ябығып, тартылып киткәйне Төлкөсура. Ял иткәне лә юҡ, борсолоуҙары ла күп булды шул. Миңлегөл аҫылынып үлгәс, ғауғаһы әллә ни тиклемгә барҙы. Урядник килеп, тикшереп, һорашып, яҙып алып китте лә шуның менән онотолдо. Кешеләр, Уйылданды судҡа бирегеҙ, шул ғына башын ашаны, тип кәңәш итте. Төлкөсура атаһына:

— Әллә Стәрлегә барып, һөйләшеп, судҡа бирәйемме икән? — тигәйне лә, Торомтай ҡарт, ауыр көрһөнөп, ҡулын ғына һелтәне.

— Әй улым, ҡарға күҙен ҡарға суҡыймы? Юҡҡа этләнеп, барлы-юҡлы аҡсаңды тәләфләп йөрөмә. Урәтник ни һөйләгәнде ишетмәнеңме ни аңа. Үҙегеҙҙең лапаҫта аҫылынған, ғәйепле кешене ситтән эҙләп, беҙҙе мәшәҡәтләп йөрөмәгеҙ, тине бит.

Шунан Төлкөсура ошо хаҡта Роман менән һөйләшеп ҡараны. Роман уға тиҙ генә яуап бирмәне. Үткән эште яңыртып, етмәһә, Ҡотлоғужа менән әселешле булып йөрөгөһө килмәй ине уның. Миңлегөлгә булған тойғолары ла хәҙер, аҙашҡан ел өрөп тергеҙгән ут шикелле, бөтөнләйгә һүрелгәйне. Хатта ул ябай бер башҡорт ҡыҙының үҙен ҡасандыр йөрәкһетеүенә аптырай биреп ҡуя. Шуға күрә Төлкөсураға, шаһиттәр ҙә юҡлыҡҡа һылтанып, был эштән бер мәғәнә лә сыҡмаҫын аңғартты. Ҡыйын да бит, ни эшләйһең, тиеү менән сикләнде.

Ошонан аҙаҡ ғәҙеллек юллау уйынан һүрелде Төлкөсура, ләкин һеңлеһенең ҡонон ҡайтарғыһы килеү теләге уны ташламаны. Тәүҙәрәк, Уйылданды аулаҡта осратып, дөмөктөрәйем дә ҡуйыйым, тип йөрөгәйне, тора-бара икенсерәк фекер тыуҙы: бөтә был фажиғәлә төп ғәйеп — Ҡотлоғужа старшинала. Шуны берәй хәлгә төңкәтергә кәрәк. Тик был уйын нисек ғәмәлгә ашырыу юлын ғына ошоғаса уйлап таба алғаны юҡ.

Өҫтәүенә, Торомтай, Миңлегөл үлгәндән аҙаҡ, сәләмәтлеккә йәлсей алмай. Утынды ла, аҙнаһына бер ҡай-

тып, Төлкөсура үҙе ҡырҡып, соланға ташып китә. Әсәһе лә үтә бөтөрөндө. Үткән ҡайтҡанында:

— Әллә, улым, был эшеңде ташлап, эргәбеҙгә ҡайтаһыңмы? Килен алыу тураһында ла уйлашырға ваҡыт, — тип һүҙ ҡуҙғатҡайны, Торомтай, ауырып ятһа ла, уға ҡаршы төштө.

— Ҡапылда эшләһен әле, аҡсаһы ла арыу ғына. Кәләш алырға өлгөрөр, йәше үтеп бармай, — тине.

Шул саҡ өйҙәге берҙән-бер ҡайғыһыҙ кеше, хәҙер инде алтыһы менән барған Бикморат:

— Ә мин кәләш алам, — тип һүҙ ҡыҫтырып, уларҙы көлдөрҙө.

Төлкөсура ҡустыһын күтәреп ҡосағына ҡыҫты.

— Кемде алаһың, ҡустым?

— Анау яҡта торған Тәнзилә апай бар бит, — ул тәҙрә яғына кескәй бармағын һуҙҙы, — шуны.

— Ҙур ҙа инде ул, ҡустым.

— Ул беҙгә һыу килтерә, — тип һалды малай.

Бала — күңел йыуанысы, тип ошондайға әйткәндәрҙер инде, айҙар буйы йөрәге һыҙыуҙан ябыҡҡан, күҙҙәре упайып ҡалған Ғәрифә апайҙың да сырайында йылмайыу ғәләмәте күренде. Эйе, өйгә ҡайтып инһә, хәсрәт ҡаршылай, ҡайғы оҙатып ҡала Төлкөсураны. Әллә шундай борсоулы тормош уны һуңғы ваҡытта Романдан да алыҫлаштырған һымаҡ итте. Ул йыш ҡына йоҡларға улар эргәһенә өйгә ҡайтмай, Григорий янында ҡуна башланы. Сөнки йоҡолары ҡасҡан саҡта был кеше менән үҙеңде борсоған һәр нәмә хаҡында һөйләшергә мөмкин.

Әле бына үҙ эргәһенә саҡырғас, Төлкөсура уға аҙыраҡ ҡарап торҙо. Ҡырҡ йәшендә сәсе яртылаш ағарған, маңлайына тәрән һырҙар ятҡан. Уның үткән тормошон белмәй Төлкөсура, ләкин был кешенең күп ауырлыҡтар үтеүен тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап та абайларға мөмкин.

— Төлкөсура, һин бөгөн ауылға барып әйләнһәң, арыу булыр ине, — тип һүҙ башланы Григорий.

— Ниңә? Берәй йомошоң бармы?

— Был байрҙы бер тотонғанда ныҡ ғыраҡ һелкетергә ине. Дегет баҙҙары баяр биләмәһенә эләккән кешеләр ауылда ла бар бит. Иртәгә бында улар ҙа, теләге булған бөтә кешеләр ҙә килһен ине.

— Булдырабыҙ уны, Гриша. Ҡайтам да егеттәрҙең ҡолағына төшөрәм. Яу булып килеп етәсәк улар.

— Шулай ит. Ҡайҙа китте, тип һораһалар, мин бында яуабын үҙем табырмын.

Төлкөсура көндөҙгөлөккә яланға тышап ебәргән атын тоторға китте. Ләкин ул да, башҡалар ҙа тимерлек бурамаһы мөйөшөнә һыйынып торған Никифор Масловты күрмәне.

Ҡояш төшкөлөктән ауышҡан инде. Төлкөсура атын ҡабаландырмай, үҙ яйына ҡуйып ҡына китеп бара; нисек итеп ауылдаштарын иртәгә Ҡыйғыр яланына күберәк килтерергә — шул турала уйлана, үҙенсә аҡыл ҡора. Лапшинденң килгәне бирле ауыҙынан күбектәр сәсеп ҡотороноуы, ҡысҡырыныуы быға тиклем уға арыу ғына ҡараған Төлкөсурала ҡапма-ҡаршы уйҙар ҡуҙғатты. Уның урман һатып алыуы Ҡаратау кешеләренә, шул иҫәптән уға ла, кәсеп булды булыуын. Ләкин һәр тин аҡса өсөн кешеләр күпме яфа сигә. Етмәһә, хәҙер килеп, шуларҙың дегет баҙҙарын бушлай тартып алһын! Тағы бер нәмә эсен бошора Төлкөсураның. Тәүге ҡышта ғына ни тиклем урманды ҡырҙырҙы! Йәйен-ҡышын эш шулай дауам итһә, Норош буйын ҡола яланға әйләндерәсәк бит ул. Урман ҡырылғас, ҡош-ҡорттоң, йәнлектең бөтәсәге лә көн кеүек асыҡ. Урманһыҙ, кейекһеҙ ҡалғас, ауыл халҡы нисек көн күрер һуң артабан? Был урманды үҙ баштарына ғына һатманылармы икән?..

Ат тояҡтары тауышын ишетеп, Төлкөсура алға ҡараны. Үҙенән башҡа кешегә мендермәгән ҡола бейәһен юрғалатып, ауыл яғынан Ҡотлоғужа килә ята ине. Быҥа ул да Төлкөсураны күрҙе, атының башын тарта төштө. Миңлегөл үлгәне бирле уның менән күҙмә-күҙ осрашҡаны юҡ ине Төлкөсураның. Бына ҡайҙа килеп осраштьі улар! Туҡта әле, күптән һаҡланып йөрөгән үсте алыу өсөн ошонан да уңайлыраҡ мәлдең булыуы мөмкинме һуң? Уның күҙендә усал осҡондар һикергеләне. Ҡотлоғужа, әйтерһең, ошо осҡондарҙы йыраҡтан уҡ күрҙе, тирә-яғына, боҫор урын эҙләгәндәй, алан-йолан ҡаранды, ахыр килеп, елеп үтеп китеүҙән башҡа сара тапманы, күрәһең, атына ҡамсыһы менән һелтәнде лә, яҙғы бысраҡ кибеп бөтмәгән батҡаҡты сәсрәтеп, юлдың бер яҡ ситенә һыйына биреп, ҡаршы сапты. Ләкин үҙенең әжәленән ҡасып ҡотолорға теләгән байға был уйы ярҙам итмәне. Тәңгәленә етеү менән, Төлкөсура, һеләүһен кеүек, уның өҫтөнә ырғыны, муйынынан эләктереп, ергә ауҙарып төшөрҙө. Ҡотлоғужа көс-кеүәте артыҡ кәмемә-



гән, яңы иллеһен тултырған кеше ине. Йығылып төшкән ыңғайы Төлкөсураны өҫтөнән әйләндереп ебәрергә өлгөрҙө. Әгәр эш билдән тотоп алышыуға китһә, был ит бүкәне теләһә кемгә бирешерлек түгел. Ул хатта апаруҡ йылғыр ҙа булып сыҡты, Төлкөсура менән бер үк мәлдә ерҙән ырғып торорға өлгөрҙө һәм йәһәт кенә артына сигенде лә йәмһеҙ, ят тауыш сығарып ҡысҡырҙы:

— Яҡын килмә! Үлтерәм!..

— Ә-ә, шу-лай-мы!.. — тип ыҫылданы Төлкөсура. Уның ҡиәфәте хәтәр ине был минутта: ҡыҫылған күҙҙәре асыулы ялтырай, ирендәре ҡымтылған, терһәктәрен яҡ-яҡҡа тырпайтып, алға эйелә төшкән — хас ҡорбанына ырғырға әҙерләнгән йыртҡыс. — Миңлегөлдөң башын ашаған, етте!.. Бына хәҙер мин һине!..

Төлкөсура ырғыған ыңғайы Ҡотлоғужаның ҡолаҡ төбөнә ҡундырҙы, старшина сәсрәп барып та төштө. Хәҙер инде үҙенең ни эшләгәнен дә уйлап тормаҫ сиккә еткәйне Төлкөсура, башын күтәргән Ҡотлоғужаның икенсе яҡ ҡолаҡ төбөнә һалып ебәрҙе лә боғаҙына йәбеште. Иҫенә килеп күтәрелгәнендә, бай күҙе аҡшайып ҡатҡан килеш йәнһеҙ-тынһыҙ кеүек ята ине. Төлкөсура, үҙе эшләгән яман эштән ҡапыл ҡото осоп, артына сигенде, йәнә туҡтап ҡалды. «Үлде шикелле!.. Артабан ни эшләргә? Былай юл эсендә ҡалдырып китһәң, тотолороңдо көт тә тор». Төлкөсура уны аяғынан ситкә һөйрәне. Ауыр ит бүкәнен егерме-утыҙ сажин алып барғансы, йән тирҙәре атлыҡты. Ҡотлоғужаның башын бер яҡҡа ҡыйшайта биреп ҡуҙғалмай ятҡан кәүҙәһенә ҡарап торҙо. Их, шулай кеше үлтерҙеме ни инде Төлкөсура? Улай уҡ итергә уйламағайны ла... Юлға югерә-атлай сығып, атына менде лә Төлкөсура ауылға ҡарай сапты.

Тура Ҡотдостарға инде ул. Дуҫы, уның төҫө ҡасыуын абайлап, ҡурҡа уҡ төштө.

— Тағы берәй нәмә бармы әллә?

— Бар шул, Ҡотдос. Лапшин баяр бөгөн беҙҙең дегет баҙҙарын ватырға ебәрҙе. Һеҙҙең ағайындар менән бергә төҙөгән баҙ ҙа баяр урманында бит инде.

— Кит әле... Ниңә ваттыра һуң уларҙы?

— Уныһын үҙенән һора инде, миңә ҡараңғы...

Төлкөсура хәлде уға яйлабыраҡ аңлатып бирҙе, иртәгә урман ҡырҡыусыларҙың баярға ҡаршы сығыш яһауын, ауыл кешеләренә лә шунда барырға кәрәклекте

әйтте. Ҡараңғы төшөүгә Лапшин баярҙың яңы бер яуызлығы бөтә Ҡаратауға мәғлүм ине инде.

* *
*

Григорий көн буйы эшләүҙән ҡатыһыныҡҡан билен ҡулы менән ыуалай-ыуалай тимерлектән сыҡты. Ҡояш байып бара инде. Унын ҡыҙғылт нурҙары Норош аръяғындағы тау һыртын ҡаплаған ағас баштарына ғына эләгеп тора. Көн буйы күмер саңы йотоп, эҫелә эшләгәндән аҙаҡ, яҙғы саф һауаны һулау ҡайһылай рәхәт! Туҡтасы әле, Норош боҙо киткәне бирле ул йылға буйына ла төшөп әйләнгәне юҡ, барып ҡарарға кәрәк.

Григорий күмер саңы ултырған, тиреһе күн һымаҡ күренгән ҡулын биленә һалды, ялан оҙонлоғон аҙымлап үлсәгән кеүек, әкрен генә атлап, Норош буйына йүнәлде. Ҡара инде, ер-һыу бөтөнләй ҡороп бара бит, ҡалҡыу урындар гөлт итеп йәшәреп килә. Йә инде, ошо яҙғы көндә рәхәтләнеп бер йөрөргә ваҡыт та тапҡаны юҡ. Ниңә шул тиклем тырышып эшләй һуң әле ул? Баярҙан рәхмәт алыу өсөнмө? Григорий үҙ алдына көлөмһөрәне, туғайға етәрәк туҡтап ҡалды. Ярҙың буйынан-буйына бүрәнә өйөмдәре теҙелеп киткән. Быйаса уларға ла иҫләп ҡарағаны юҡ ине, ғәжәп күп икән дә!

Григорий бүрәнә өйөмдәре араһынан яр башына барҙы. Хәтәр ҡотороноп аға Норош, бейек ярҙың өҫтөнә сығa яҙған, ә түбәндәгерәк туғайҙы бөтөнләй һыу баҫҡан. Һорғолт һыу өйрөлтмәкләнеп, ҡайнап аға, шарлап-гөрләп теге яҡ ярҙағы ҡаяны кимерә; ҡаяның иһә һис тә иҫе китмәй, әйҙә инде, ҡылан, тигән төҫлө, йөҙләүендә байып барған ҡояш нурҙарын уйнатып, көлөп һауаға олғашып тора. Ана, тулҡындар тамыры-тамыро менән ауған ағасты юнышҡы урынына тәкмәсләтеп ағыҙып килтерә. Ағас, ҡороға сығырға, был ҡиәмәттән ҡотолорға теләгәндәй, ярға яҡынланымы, шашынған тулҡындар уны тағы йылға үҙәгенә ҡыуалай...

Григорийҙең тормошо ла ошо ағып килгән ағасҡа оҡшашыраҡ түгелме һуң әле? Уны ла бит тормош тулҡындары тыуған тупрағынан ҡуптарып алды ла, бына шулай яҙмыш ҡосағына ташланы. Хәҙер ана, ярҙарға бәрелә-һуғыла, ҡаңғырып йөрөп ята. Ҡайҙа тиклем алып барыр уны был тулҡындар — билдәһеҙ.

Ҡайһы яҙ һуң әле ул, Настяһен күрергә ашҡынып, юлда һыу-һүл кибеүен дә көтмәй, Ҡаратауҙан Белореткә юл тотҡайны. Шул саҡта үлемдән саҡ ҡотолоп ҡалғайны бит әле ул. Ағиҙел аша кәмә менән сыҡҡанда ҙур боҙ килеп бәрелде лә йылға уртаһында кәмәләрен ауҙарҙы. Григорий ҡайһы аралалыр әлеге боҙға йәбешеп өлгөрҙө бит. Шул килеш ағып байтаҡ ер үткәс, ярға яҡынлағаныраҡ тәңгәлдә боҙҙан ҡулын ысҡындырҙы ла йөҙөп барып, һыуға һуғылып ултырған ниндәйҙер баҡсаның кәртәһенә йәбеште, ҡороға сығып баҫты. Унан башҡа кәмәлә тағы биш кеше бар ине, уларҙың бөтәһе лә Ағиҙел төбөнә китте. Шул саҡта: «Бына бит донъя ҡайһылай ҡыҙыҡ ҡына, — тип аптырағайны Григорий. — Бер ниндәй төйәкһеҙ, илһеҙ-ерһеҙ байғош иҫән ҡалдым, ә улар батты. Бәлки, бик һәйбәт донъя көткән, бәхетле кешеләр булғандарҙыр әле...»

Шул ҡайтыуында, тап бына ошондай ҡояш байыған мәлдә Настяһе менән Ағиҙелдең текә ярында баҫып торғайнылар. «Һине көтөп йәшәүҙәре, бер нисә төн бергә булғандан аҙаҡ тағы айырылыуҙары бигерәк ҡыйын миңә, Гриша! Ҡайһы берҙә, әллә ошо тулҡындарға ғына ташланайым да ҡуяйыммы икән, тигән уй ҙа килә», — тигәйне шул саҡта Настя, уның яурынына башын терәп. Григорий уның сәстәренән һыйпаны: «Һин киләсәккә ышан, Настя, мин һине оҙаҡламай был ыҙаларҙан ҡотҡарырмын», — тип йыуатты. Ләкин бына шунан аҙаҡ та байтаҡ ғүмер уҙҙы, ә Григорийҙең һөйгәне менән рәхәтләнеп бергә йәшәү юлын тапҡаны юҡ әле. Быйыл унда ниндәйҙер өмөт ҡуҙғалып тора-тороуын: Лапшиндән берәй өйлөк ағас һорарға уйлай. Бәлки, бирер һалһа, үҙе бурап эш итер, торор ер булғас, Настяһе лә килергә күнер һымаҡ...

«Эй хыял, хыял, — тип ауыр көрһөндө Григорий, — һинең осар күктәрең киң дә бит, минең ҡанаттарым ғына юҡ!»

Тимерлеккә ҡайтып килгәнендә уға Маслов осраны.

— Ахунов ниңә күренмәне бөгөн? Ҡайҙа китте?

— Көндөҙ, ҡырҡылған бүрәнәләр күпме ҡалды икән, тип диләнкәһенә йөрөп килгәйне, әле ауылына ҡайтып китте. Атаһы ныҡ ауырый икән.

— Бөгөн әйләнеп киләме һуң ул?

— Белмәйем, килә алырмы икән, Никифор Андреевич, бик һуң ғына ҡайтты бит.

— Багорҙар етерлек булдымы инде?

— Артығы менән, бөгөн сынйырҙы ла эшләп бөттөм.

Никифор хушлашмай-нитмәй китеп барҙы.

* *
*

Лапшин, урмансыларҙың иртәгә иртәнсәк үҙ талаптары менән өй эргәһенә йыйыласағын Никифорҙан ишетеп белгәс, иҙән буйынса байтаҡ һүҙһеҙ йөрөнө. Никифор ҙа, уның ауыҙынан был хәбәрҙе ишетеп аптыраған Роман да, Артем Дмитриевичтең ни әйтерен көтөп, һүҙһеҙ ҡалдылар. Төлкөсураның был эштә буталыуы Романды бигерәк ныҡ аптырата. Ниңә шул ҡотҡоға иреләп йөрөй? Ни етмәй һуң уға? Эш хаҡы бүтәндәрҙекенән артыҡ, ситкә ҡаҡмай, үҙ итеп торалар. Етмәһә, көҙ көнө төрмәгә ултырыуҙан ҡотҡарҙылар.

— Атай, мин әллә Төлкөсура менән һөйләшеп ҡарайыммы? Әгәр ул әйтһә, бәлки, кешеләр йыйылмаҫ.

— Бигерәк тә бала-саға хәбәрен һөйләйһең, Роман Артемьевич, — тип, уға атаһы урынына Маслов яуап бирҙе. — Һинең Төлкөсураң ауылдан да кешеләр йыйып килтерергә ҡайтып китте. Уны...

Лапшин иҙән уртаһында туҡтаны, Масловтың һүҙен бүлде.

— Ярар, Төлкөсура менән нисек һөйләшеү тураһында уйлашырбыҙ. Был башҡорттарҙың, ҡабат тел оҙайтмаҫлыҡ итеп, арт һабаҡтарын уҡытырға кәрәк. Беҙ бит бынан бер-ике йылдан китергә йыйынмайбыҙ. Бында урмандар минең генә түгел, һинең быуынға ла етерлек, Роман. Бына шуға күрә лә хәҙер үк Стәрлетамаҡҡа сабаһың. Ҡағыҙ ҙа яҙырмын, телдән дә әйтерһең, Осипов һис кисекмәҫтән берәй рота ғәскәр ебәрһен. Әлбиттә, бер нисә полицейский менән дә эште бөтөрөп булыр ине. Ләкин үҙебеҙҙең артта нindәй көс торғанды күрһәтергә кәрәк. Урядникте алып, исправник тә килһен. Тиҙ генә йыйын да һыҙ. Ғәскәр иртәгә кис үк сыҡһа, яҡшы булыр ине. Хәҙер беҙгә һәр сәғәте ҡиммәт, бүрәнәләрҙе һыуға ауҙарыр саҡ еткән.

— Атай, бәлки, Никифор барып ҡайтыр.

— Уның бында икенсе эше бар. Әгәр атайыңдың йөҙәр меңләгән аҡсаһын һыу төбөнә ебәргең килмәһә, ошо сәғәттә үк ысҡын!

Роман ҡара айғырҙы менеп юлға сыҡты.

Ошонан аҙаҡ Лапшин менән Никифор, икәүҙән-икәү ултырып, артабан ни эшләргә кәрәклекте ентекләберәк планлаштырҙылар. Иң тәүҙә, һис кисекмәҫтән, Григорийҙе шым ғына юлдан алып ташларға.

— Ул эйәһеҙ этте бер кем дә юллап йөрөмәйәсәк, — тине Лапшин, аяуһыҙланып. — Уны эшкә алып, хата эшләгәнһең, Никифор. Әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан, юнһеҙ кешелер әле ул. Багор-фәләндәрен эшләп бөттөмө? Бөтмәһә, тағы берәй көн йәшәтергә лә мөмкин.

— Бөткән, Артем Дмитриевич.

— Һораш, кәрәкле әйберҙәрҙе эшләп бөткән булһа, бөгөн үк дөмөктөрөргә кәрәк. Был бурыс һиңә төшә, Никифор. Былдай эштә тәжрибәң дә бар. Уйлаш та нисегерәк эшләргә теләүеңде миңә әйтерһең. Булдымы?

— Булыр.

— Артабан былай итәбеҙ. Төлкөсураны һәм Григорий тирәһенә өйрөлгән тағы бер нисә кешене, бола күтәреүҙә һәм рус кешеһен үлтереүҙә ғәйепләп, ҡаланан саҡырылыусылар килеп етеү менән ҡулға алып, тиҙ генә әйләнеп ҡайтмаҫ ергә оҙатабыҙ. Нисек уйлайһың?

— Минең белеүемсә, Артем Дмитриевич, һеҙҙең был мәсьәләлә һынатҡанығыҙ юҡ. Бик шәп уйланған.

— Улай булһа, Григорий менән эште нисек төгәлләү тураһында уйла. Туҡта әле... Иҫтә саҡта, тағы шуны әйтеп ҡуяйым. Килгән ыңғайҙа һуғылғанымда Ҡотлоғужаға ошо үҙебеҙ ултырған ялан урынына биләмәмдәге күңеленә ятҡан теләһә ҡайһы яланды һайлап ал, тип әйткәйнем, уның дегет баҙына ла тейергә кәрәкмәҫ, ул бөгөн-иртәгәләрҙә килеп сығырмын, тигәйне. Килгәнендә яҡты йөҙ менән йөрө. Беҙгә старшина, мулла менән мөнәсәбәттәрҙе боҙорға ярамай. Беҙҙән мәсетегеҙгә хәйер, тип муллаға ҡыуғынға төшөр көндә бер аҙ аҡса алып барып бирерһең, эт күңеле бер һөйәк, ти. Ярар, бар, уйлаш.

Хәҙер инде Лапшин иртәгә эшселәр менән нисегерәк һөйләшеү тураһында үҙ алдына аҡыл ҡорорға тотондо. Әлбиттә, уның былдай саҡта төрлөсә һөйләшкәне бар, тәжрибәһе етерлек. Шулай ҙа уйлана Лапшин. Тәүге йылда уҡ әйләнә-тирә ауылдарҙа үҙенә нәфрәт тыуҙырырлыҡ аҙым да яһарға ярамай. Григорийҙең үлемен шуға күрә ҡулға алынасаҡ кешеләргә ғәйеп итеп яғырға уйланы ла ул. Кеше үлтереүселәрҙе ҡайҙа хөкөм итмәй-

ҙәр? Шул уҡ ваҡытта улар Лапшин менән шаярыуҙың яҡшыға алып бармауын да аңғарһындар. Ҡыуғынға барасаҡ кешеләргә, ғаиләләренә ҡалдырып китеү өсөн, аҙыраҡ алдан аҡса биреү тураһында ла уйларға кәрәк. Яҡшы күңелле булып күренеүгә ни етә...

Маслов кисен бөгөн Төлкөсураның әйләнеп килмәҫен, Григорийҙең яңғыҙ йоҡлаясағын әйтеп, үҙ планын һөйләп биргәс, Лапшин уны хупланы.

* *
*

...Бөгөн әллә нимә йоҡоһо осоп торҙо Григорийҙең. Ни ҡәҙәрем арыған, шулай ҙа, ятҡыһы килмәйенсә, ҡараңғы төшкәс тә, әле тәмәкеһен көйрәтеп, тимерлек алдында байтаҡ ултырҙы. Төнө лә ғәжәп матур ине. Ярты икмәк хәтлем булған ай яҙғы урманды, ултырыш яланын сихри нурға күмгән, йондоҙҙар шул тиклем баҙлап яна, улар бына хәҙер гөлт итеп тоҡанып китерҙәр ҙә бөтә күк йөҙөн ялҡын ҡаплар кеүек. Бөгөн кис тә һыуытырға уйламай, һуңғы ҡарҙарҙың башына етер, ахырыһы, был төн.

Григорий тәмәке төпсөгөнә төкөрөп, аяғы аҫтына һалып тапаны, хәжәтен үтәне лә тимерлеккә инде. Өҫкө кейемдәрен, аяғын systeм сисе. Бүтән саҡта төнөн һыуығыраҡ булғанлыҡтан, ул ойоғо менән ята ине. Бөгөн систе. Көн буйы тирләп, талсығып йөрөгән аяҡты бына шулай яланғас килеш һуҙып ятыу, табанында ләззәт биреүсе һалҡынлыҡ тойоу ниндәй рәхәт!

Иртәгәһе көн тураһында уйлай башланы Григорий. Кеше йыйылған ерҙән тороп ҡалырға уйы юҡ уның, әлбиттә. Барыр. Ләкин бына һөйләргәме әллә бүтәндәрҙе генә тыңларғамы? Улай эшләһә, башҡорт дуҫтары, ана, беҙҙе ҡотортто ла үҙе ситтә боҫоп тора, тимәҫме? Ул һөйләүҙән дә әллә ни ҡурҡмай, Лапшин, моғайын, уны бының өсөн генә эштән ҡыумаҫ, тимерсе кәрәк бит уға. Әгәр ҙә ҡулға ала ҡалһалар, Григорийҙе ҡабат ысҡындырмаҫтар инде, уның кем икәнлеген дә тиҙ үк белерҙәр...

«Шулай ҙа һөйләргә кәрәк. Эш хаҡы тураһында һүҙ сыҡҡанда, мин кешенән тотоп алып ҡалған аҡсаға эшләргә теләмәйем, тип дөрөҫ һүҙ һөйләүҙән ни була», — тигән ҡарарға килде ул һәм йәтешләнеберәк ятты. Ләкин

уйҙар уны һаман бимазалай. Берәй заман үҙ өйөндә ҡатын йылыһын тойоп, рәхәтләнеп ятыр, яңғыҙлыҡтан ҡотолор көнө булырмы уның, юҡмы?.. Төлкөсура ауыл кешеләре менән һөйләштеме икән, унан кешеләр күп килерме? «Шәп егет, эшен үҙ еренә еткерер», — тип тынысланырға, йоҡларға тырыша ул.

Тик йөрәгең бер ҡуҙғалғас, уны тынысландырыуы еңелме ни? Боршаланып, көрһөнөп ятты-ятты ла, ахырҙа урынынан тороп, ҡабаттан кейенде.

Ҡар бөтөп, ер һурыҡҡаны бирле урман киҫеүселәрҙең байтағы ауылға ҡайтмай, Ҡыйғыр яланы ситендәге йыуан ҡарағайҙар төбөнә ҡыуыш ҡороп, шунда ҡуна ине. Григорийҙең уйы — ана шулар эргәһенә барып, һөйләшеп ултырыу. Иртәгә буласаҡ ҙур эш алдынан уларҙың кәйеф-сафаһын белеү, иғтибарҙарын төп бурысты хәл итеүгә туплау, үҙ фекерҙәрең менән уртаҡлашыу зыян итәме ни? Былай ҙа бит ошоға хәтлем ул халыҡ менән артыҡ аралашмай, үҙ уй-хәсрәттәренә үҙе күмелеп йәшәне. Хәҙер белә Григорий: был донъяла дуҫ-иштәрең булмауҙан да ҡыйынараҡ нәмә юҡ.

Ул тимерлегенән сыҡты ла ҡабаланмай ғына ҡыуыштарға табан атланы.

Ҙур ғына итеп эшләнгән ике ҡыуыш алдында ла һүрәү генә усаҡ яна. Уларҙың тоноҡ яҡтыһында бер нисә кешенең утҡа төбәлеп ултырғаны күренә. Көн буйы эшләп арыһалар ҙа, ятмағандар. Тимәк, алда торған хәл уларҙы ла борсолдора, уйландыра.

— Кәңәштәрегеҙ берекһен! — тип сәләмләне уларҙы Григорий, ҡаршыларына туҡтап.

Иң ситтә ултырған, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан өлкән үк йәштәге кеше:

— Кәңәш итешкән булабыҙ ҙа, Гөргөрөй, уның осона һис тә сығып булмай бит әле, — тип русса һупаланы, аяғын яҙып, юнәлеберәк ултырҙы.

— Ҡоро кәңәш-төйөш менән генә эш сыҡмаҫ, ағайҙар, — Григорий ҡарағай төбөнә сүгәләне. — Бына иртәгә сығырға кәрәк инде уның осона. Бер тотонғанда ныҡ һелкетергә кәрәк Лапшинде.

— Әллә шул, Гөргөрөй. Икенсе йылға, үсегеп, беҙҙең яҡҡа бөтөнләйгә килмәй тормаһа... Ни әйтһәң дә, аяҡ аҫтында ятҡан кәсеп ине бит әле.

Григорий ихлас көлдө.

— Их, ағайҙар, Лапшин бында хәҙер теше-тырнағы

менән йәбешеп ятасаҡ. Ҡитеү өсөн таш өй һалдырырға йөрөймө ни ул? Бер саҡ Норош буйындағы урмандарығыҙҙы ҡырып бөтөр, шунан уны бында бәйләп тә тота алмаçһығыҙ.

— Ә беҙ уға ҡабат урман һатмайбыҙ, — тип һүҙ ҡыçтырҙы берәү.

Баяғы һаҡалтай башын сайҡаны.

— Әллә шул. Ҡөтөүгә эйәләшкән бүрене, башына етмәй тороп, биҙҙереп буламы икән?

Шулай һүҙгә һүҙ ялғанып, усаҡҡа аҙлап утын өçтәйөçтәй һөйләште лә һөйләште улар. Ҡайғы-хәсрәттәре берҙәй кешеләр уртаҡ телде тиҙ таба шул.

...Ә төн урталарында тимерлек бурамаһы мөйөшөндә бер шәүлә күренде. Януарҙай һаҡ атлап ишеккә яҡынлашыуынан уҡ уның яҡшы ниәт менән йөрөмәүе һиҙелеп тора ине. Бына ул туҡтаны, тирә-яғына ҡолаҡ һалды, шунан, шикләнерлек тауыш-тын ишетелмәгәс, ишекте ипләп кенә асты ла эскә үтте. Тимерлек эсендә үле тынлыҡ ине. Никифор Масловтың хатта үҙ күңеленә шом югерҙе, ҡайһылыр мөйөштә кемдер уны һағалап тора һымаҡ; түҙмәне, шым ғына тауыш бирҙе:

— Гриша... Григорий!..

Яуап юҡ. Аптырағас, Григорий йоҡлай торған тар һике эргәһенә ҡабалан атлап килеп, Маслов һәрмәнеп ҡараны. Алам-һалам ҡаранты туҙышып ята, бер кем дә юҡ, урын буп-буш. Никифор ҡаушап уҡ төштө. Ҡайҙа ғәйеп булған икән? Ҡараңғы төшөр саҡта ғына ишеге алдында урала ине бит. Һиҙеп-фәлән ҡалмағандыр ҙа инде?.. Әгәр Никифор эшен эш итә алмаһа, Лапшин иртәгә тетмәһен тетер инде. Урмансылар бик хәтәр ҡыланып, үҙ һүҙҙәрен һүҙ итһәләр, былар бөтәһе лә һинең юнһеҙлегең арҡаһында тип хужаның уны бөтөнләйгә эштән ҡыуыуы ла бар бит әле. Ошо уй Масловты аласыҡ эргәһенән бер аҙым да ситкә ебәрмәй. Балтаһын әҙер тотоп, ул таң атҡансы аласыҡ мөйөшөндә Григорийҙе көттө, ләкин ул әйләнеп ҡайтманы.

* *
*

Иртәнсәк иртүк, ҡояш арҡан буйы күтәрелеүгә, ҡыйғыр яланына Уйылдан килеп төштө. Үҙе менгән аттан тыш эйәрле ҡола бейә лә етәкләгән.

Бөгөн Лапшин менән Масловта ла йоҡо ҡайғыһы юҡ ине. Артем Дмитриевич Никифорҙың Григорий эргәһенән эш бөтөрөп ҡайтыуын керпек тә ҡаҡмай көттө. Ул оҙаҡлағас, хатта ҡурҡыуға төшөп бөттө: әллә алышып китеп, тимерсе Никифорҙың үҙен мәтәлткәнме? Тик ул тимерлек яғына барырға баҙнат итмәне. Ә таң атып, яҡтыра башлағас, сырайы ағарған, күҙҙәре ҡыҙарған Маслов ҡайтып инеп, хәлде һөйләп биргәйне, асыуҙан Лапшиндең тыны быуылды, ҡыҫыҡ күҙҙәре аҡшайҙы.

— Мин һиңә иртәрәк бар тинем бит! Ҡурҡаҡ!.. Уның әллә ҡайҙа сығып китеүен көтөп ултырҙың!

— Улай тип, Артем Дмитриевич... Мин бит...— тип телен саҡ-саҡ әйләндереп мығырҙаны Никифор.

— Һөйләнмә! — Лапшин асыуынан буҙарып екерҙе. — Әгәр берәй насарлыҡ килеп сыҡһа, бында эҙең дә булмаясаҡ!..

Бына ошондай һөйләшеүҙән аҙаҡ һаман тыныслана алмағайны әле Лапшин. Шуға күрә старшина улын ҡараңғы сырай менән ҡаршыланы, хатта уның ошондай мәлдә килеп сығыуына йәне көйҙө.

— Атайым бындамы? — тип, Уйылдан инеү менән өй эсенә күҙ югертеп сыҡты.

— Юҡ. Ниңә уны бынан эҙләйһең әле?

— Кисә ул төш ваҡытында бында киткәйне. Бөгөн иртүк тороп сыҡһам, менеп киткән аты ҡапҡа ауыҙында тора, үҙе юҡ. Мин бит уны, аты ҡасып ҡайтҡандыр ҙа, үҙе шуға бында йоҡларға ҡалғандыр, тип атын алып килгәйнем. Ҡайҙа булыр икән ул, Артем Дмитриевич? — Уйылдандың йөҙөнә хәүефләнеү сыҡты.

— Белмәгәнде һис тә әйтә алмайым, туған. Шулай ҙа уйлашырға кәрәк, бер-бер хәл булып ҡуймағайы.

Уйылдан, атаһы ҡотолғоһоҙ бәләгә юлыҡҡанды аңлаған кеүек, ҡапыл ағарынып, һораны:

— Төлк... Төлкөсура ла бында түгелме ни?

— Ул кисә ауылға ҡайтҡан.

— Һы... улай булғас ни...

Лапшин дә ысынлап борсола башлағайны инде.

— Төлкөсуранан шикләнәһеңме әллә?

Уйылдан икеләнде, тура ғына яуап бирмәне.

Лапшин, иҙән уртаһында туҡтап, уйға ҡалды. Бөтә төн йоҡоһоҙ үткәйне, көнө лә әллә ниндәй буталсыҡ, аңлайышһыҙ хәлдәрҙән башланды. Төлкөсура ауылға ҡайтып киткән, Григорий күҙ менән ҡаш араһында ғәйеп

булды; хәҙер бында килергә сыҡҡан еренән Ҡотлогужа юғалған. Быларҙың бөтәһе лә бер-береһенә бәйләнешле һымаҡ тойола Артем Дмитриевичкә, ләкин уларҙы бер-береһенә тоташтырған епте асыҡ ҡына итеп төҫмөрләй алмай. Григорийҙе ҡулдан ысҡындырыу алдан ҡоролған планын бутаясағын, эште ҡатмарлаштырасағын да беләине Лапшин. Төҫө ҡасҡан Маслов, яҡтыра башлағас та ҡайтып инеп, Григорийҙе осрата алмауын һөйләп биргәс, шуға күрә хәтәр туҙып китте лә бит инде. Миңә һинең кеүек ебек кеше кәрәкмәй, биш яғың ҡибла, тип үк ебәрҙе.

Шул ярһыуынан ул әле лә баҫылмағайны. Шуға күрә Уйылданға юнле-рәтле кәңәш бирә алмай торҙо.

— Аты өркәк түгел инеме? — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Никифор, ауыр тынлыҡты боҙоп. — Бәлки...

Ошо мәл Лапшин уға шундай итеп ҡараны, Маслов, ҡапыл йөҙө ағарып, ауыҙын яртылаш асҡан көйө туҡтаны. Хужаның ҡарашында: «Өндәшмә! Ҡулыңдан эш килгән кешеләй булып, хәбәр һөйләп тораһың!» — тигән мәғәнә ярылып ята ине.

Кәйефе ҡырылған Лапшиндең Уйылдан менән дә һүҙ оҙайтырға иҫәбе юҡ. «Шул башҡорт байына ни булыр тиһең. Үҙ мәшәҡәттәрем баштан ашҡан», — тип уйлай. Ул Уйылданға боролоп ҡарамай, тәҙрәгә төбәлгән көйө әйтте:

— Беләһеңме, хәҙер үк ауылыңа ҡайт та, кешеләр алып, бында килә торған юл буйын эҙләргә сыҡ. — Һәм ҡоро ғына осланы: — Башҡа төрлө аҡыл бирә алмайым, туғанҡай.

Уйылдан ауылға кире сапҡас, Лапшин менән Никифор араһында шундай һөйләшеү булып алды.

— Артем Дмитриевич... — Масловтың тауышы тамағынан ҡыҫылып, ғыжылдабыраҡ сыҡты.

— Нимә?

— Старшинаға берәй хәл була ҡалһа, мин әйтәм...

— Старшина ҡайғыһы юҡ әле бында!

Маслов ыҡ-мыҡ итте, шулай ҙа уның ниҙер әйткеһе килгәнлеге бик асыҡ күренә ине. Никифорҙы байтаҡтан белә Лапшин: аҫтыртынлыҡты, хәйләкәрлекте, ҡаҫтаны хоҙай уға йәлләмәй биргән. Шуға күрә уның һүҙен аҙаҡ-ҡаса тыңларға теләне.

— Йә, ни әйтмәксеһең?

— Артем Дмитриевич, старшинаға берәй хәл булһа,

бөтә ғәйепте Төлкөсура менән Григорийгә ауҙарып була, тимәксе инем. Икеһе лә төнөн бында ҡунманы.

Лапшин, ҡалын иренен бөрөштөрөп, байтаҡ һүҙһеҙ ултырғас, приказчигенә боролоп ҡарамай ғына:

— Был аҡылың дөрөҫкә оҡшай ҙа, — тине. — Ярар, хәҙер урмансыларҙы, ҡаланан ғәскәр килгәнсе, ҡайһылайыраҡ итеп әүрәтеп, ғауғаны ҙурға ебәрмәү хаҡында уйлашайыҡ.

Ошо бик һалҡын ғына әйтелгән һүҙҙәр ҙә Масловтың күңеленә йылы һалды, күндәм һәм тоғро эт шикелле, хужаһының артынан юрғаланы.

Ә был мәлдә Уйылдан, ниндәйҙер яман эш һиҙеүҙән йөрәге һулҡылдап, ауылға табан елдерә ине. Ул, әлбиттә, Лапшиндең ниндәйерәк хәлдә йөрөүен белмәй ине. Шуға күрә уның бик һалҡын, артыҡ иҫе китмәй һөйләшеүенә аптырай. Шунан тағы атаһы тураһында уйлай башлай. Ҡитсе, ҡайҙа булыр икән ул, тип нисәнсе тапҡыр инде үҙ-үҙенә бер үк һорауҙы бирә һәм уға яуап таба алмайынса башы сәңкей.

Баяр ултырышынан ике-өс саҡрым самаһы киткәс, үҙенә ҡаршы атлаған байтаҡ йәйәүле кешеләрҙе күреп, аптырап ҡалды. Атаһын эҙләргә сыҡтылармы икән әллә? Атын етәкләп килгәне Төлкөсура шикелле. Кешеләртә тиңәлгәс, Уйылдан атын туҡтатты.

— Атайымды күрмәнегеҙме?

— Ниңә, атайың ҡасҡанмы әллә?

— Ҡурҡма, байлығын ташлап ҡайҙа китә ул, барыбер ҡайтыр, — тип көлөштө кешеләр.

Уйылдан илар сиккә етте, ниңә былай йөрөүен һөйләп бирҙе. Шунан һуң ғына кешеләр, бер-береһенә ҡараштылар, аптыраштылар.

— Ағай-эне, икенсе ауылдыҡылар беҙҙе көтәләрҙер, әйҙәгеҙ, — тине быға тиклем өндәшмәй торған Төлкөсура, шунан өҫтәп ҡуйҙы: — Байға ни булыр тиһегеҙ. Берәй ерҙә ҡунаҡ булып яталыр әле. — Уйылданға ҡарап, мыҫҡыллы йылмайҙы. — Һин атайыңды күрше ауылдарҙан эҙлә, ирһеҙ ҡатындар өйөнә ныҡлабыраҡ күҙ һал!.. Әйҙәгеҙ, киттек.

Уйылдан бер һүҙ әйтә алмай тороп ҡалды, асыуынан шартлар сиккә етте. Ауылдаштары, шаулашып, ары китте.

* *
*

Был донъяла кешенән һырыраҡ йән эйәһе юҡ, тип әйткәндәре дөрөҫ, ахырыһы. Төлкөсура эше бөткәнгә һанаһа ла, үлмәгәйне Ҡотлоғужа. Икенсе көндө иртәнгә һалҡын төшкән мәлдә, ярты тәүлек самаһы үткәндән аҙаҡ, иҫенә килде ул. Күҙ алдында төрлө төҫтәге дүңгәләктәр зырлап әйләнә, үҙе һаман ниндәйҙер упҡын төбөнә осоп төшөп барыуын дауам иткән һымаҡ.

Ул, ҡото осоп, нимәгә булһа ла йәбешергә теләп, һәрмәнде һәм эргәһендәге нәҙек ағасты услап тотоп алды. Юҡ, упҡынға осмаҫҡа тейеш ул! Ағасҡа йәбешкән көйө аҙыраҡ ятҡайны, тынысланды, ныҒыраҡ иҫенә килде. Туҡта, ниңә күҙҙәре асылмай һуң әле уның? Әллә асыҡ булһа ла күрмәйме? Шул саҡ уның алдында Төлкөсураның һыны пәйҙа булды һәм, яңынан иҫен юғалтып, ауыр башы дымлы ергә ялпашты.

Байтаҡ ятҡас, тағы иҫенә килде ул. Был юлы хатта баш осонда яҙғы яланғас ағас ботаҡтарын да төҫмөрләгәндәй итте. Ята торғас, кисәге хәлде хәтерләне. Их, ҡайҙан тура килде шул Төлкөсура!.. Юҡ, юнһеҙҙәр нәҫеленә бәйләнеп, Уйылданы хаталанды. Бөтә бәлә уның арҡаһында килеп сыҡты. Нисек кенә булһа ла, Торомтай малайының башын төрмәлә серетмәһәме!.. Был юлы ҡотола алмаҫ.

Ҡотлоғужа тороп баҫырға самаланы, тик башын ҡалҡыта алманы. Башы шул тиклем ауыр, эсенә ҡом тултырғандармы ни!.. Күҙен киңерәк асып, тирә-яғына ҡараны: ҡайҙа ята һуң әле ул? Юл ҡайһы яҡта? Ниңә бөтә донъя ҡараһыу ҡыҙғылт төҫтә күренә?.. Туҡта инде, былай ятһа, ҡош-ҡортҡа емтек булмам тимә. Ҡотлоғужа тауыш биреү уйы менән ҡысҡырмаҡсы булды, ләкин ауыҙынан бер өн дә сыҡманы. Тағы торорға ынтылды, тик һис ниндәй хәле юҡ. Ахырҙа ул, ярҡалай кәүҙәһен саҡ-саҡ ҡыбырҙатып, шыуырға тотондо. Бер-ике аҙым алға ынтыла ла, тыны ҡыҫылып, хәле бөтә. Күҙен йомоп байтаҡ ятҡас, тағы ла тырмаша башлай. Юлға ғына барып етһен ине, унда, моғайын, берәйһе күрер, ярҙам итер. Был донъяла бөтәһе лә Төлкөсура түгел, мәрхәмәтле кешеләр ҙә бар...

Бер ағас төбөндә хәл йыйып ята ине, әлеге ҡыҙғылт яҡтылыҡта әллә ни тиклем кешеләр һынын төҫмөрләне.

Күс кергәндәй булып, алға ынтылмаҡсы, ярҙам һорап ҡысҡырмаҡсы иткәйне, иҫе инәрле-сығарлы күйө лә үҙен тыйыр күс тапты: әллә ниндәй кешеләрҙер, Төлкөсура ла шунда булһа, бөттөң.

Әҙәм һындары үтеп китеп бөттө. Тик ниңә улар шып-шым ғына әле? Хатта аяҡ тауыштары ла ишетелмәй? Ҡотлоғужа, әлбиттә, үҙенең мейеһенә яртылаш ҡан һауғанын, шуға күрә ныҡлап иҫ йыя алмауын, һаңғырау һәм һуҡыр тиерлек булыуын белмәй ине. Бына ул, былтырҙан ҡалған ҡоро япраҡтарҙы ышырып, тағы ла алға ынтыла...

Уйылдан аты өркөп, ситкә ялтаныуҙан тәүҙә үҙе лә ҡурҡты: айыу-фәләнме әллә? Шунан юлдан биш-алты аҙым самаһы ерҙә ҡыймылдаған кәүҙәне күрҙе лә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Атай!..

Ҡотлоғужа уны күрмәне лә, ишетмәне лә. Тәненә кеше ҡулы тейеүен тойоуҙанмы, бығаса үлем ҡурҡынысы тыуҙырған күсө ҡапыл бөтөп, шиңеп төштө һәм тағы иҫен юғалтты.

Бөтөнләй албырған Уйылдан, ни эшләргә белмәйенсә, улай-булай итте, атаһының өҫтөнә эйелеп, сикәләрен ыуғыланы, ҡулын тотоп ҡараны, ахырҙа югереп йөрөп һыу эҙләргә тотондо. Соҡорҙа йыйылып ятҡан ҡар һыуын услап килтереп, атаһының асыла биреп торған ауыҙына ипләп кенә ҡойҙо. Ошонан һуң Ҡотлоғужа иҫенә килде, шешмәкләнгән күҙҙәрен күскә асып, өҫтөнә эйелгән улына төбәне.

— Улым... ыш-шан-ма... Төлкөсураға...

Телен саҡ-саҡ ҡыбырҙатып әйткән ошо ике ауыҙ һүҙ уның улына әйткән һуңғы, һис тә аңлайышһыҙ васыяты булды. Ҡотлоғужа күҙен көмбәҙләндереп тартышты ла тынып ҡалды.

Яҙғы ояныу алдынан шымып ҡалған урманда атаһының күкрәгенә башын терәп һыҡтаған Уйылдандың ҡыҙғаныс тауышы ғына ишетелә ине.

...Ҡаратауҙыҡылар, тау битләүенән Ҡыйғыр яланына төшөп килгәндә үк, ултырышта ғәҙәти булмаған күренеште абайланылар. Бер төркөм халыҡ тимерлек алдында тапана, икенселәре өй яғындараҡ айырым-айырым йыйылышып тора. Самаһына ҡарағанда, күрше ауыл-

дарҙан да баярҙа эшләмәүселәр байтаҡ килгән, кеше күп күренә.

Иртәһе лә әллә ниндәй — күңелгә шом һалырлыҡ. Ҡибла яҡҡа ҡара болоттар өйөлгән. Уларҙың ситен шул тотҡонлоҡтан сыға алмай ыҙаланған ҡояш нурҙары көйрәтә — әйтерһең, болоттарға ниндәйҙер көс ғәйрәтләнеп һуҡҡан да унан тирә-яҡҡа ҡан сәсрәгән. Ел-фәлән дә юҡ. Ҡыйғыр яланын уратып алған урмандар, тау-таштар һағайып, тынып ҡалған.

Ҡаратауҙыҡылар яҡынайғас, был һиллек боҙолдо, халыҡ төркөмө ҡуҙғалып, шаулаша башланы.

— Өҫтәмә көс килә!

— Былай булғас, баярың сыҙап ҡына торһон!

— Көлөн күккә осорайыҡ!..

Маңлайындағы сырыштары бөтөп, нисектер йәшәреп киткәндәй тойолған Григорий, йылмайып, өҙә баҫып, Төлкөсураға ҡарай атланы.

— Булдырғанһың, дуҫ!

— Бында эштәр нисек?

— Күрәһең бит, — Григорий халыҡ яғына эйәк атты, — бөтә участкаларҙан, хатта Өстамаҡтан да килгәндәр. Халыҡ ни бер һүҙ әйткәнде генә көтә.

— Йә һуң, эште ниҙән башлайбыҙ, Григорий?

Был һорауға Григорий өҙә генә яуап бирмәне. Ҡыуыш эргәһендә төн буйы тиерлек һөйләшеп ултырғанда ла, бына әле лә ул ошо һорауға яуап эҙләй: баярға ҡаршы ҡуҙғалышты нисегерәк башларға? Ул ни менән барып бөтөр? Ләкин уларға өҙә әйтер һүҙ таба алғаны юҡ. Шуға күрә, аҙыраҡ өндәшмәй торғас, икеләнеберәк әйтте:

— Тәүҙә халыҡ менән аҙ ғына кәңәш итәйек әле. Баяр алдына, һарыҡ көтөүе шикелле, һөрләгөшөп барып баҫыуҙан ни файҙа? — Шунан халыҡҡа табан боролоп һораны. — Иәмәғәт, дуҫтар, Лапшин алдына ниндәй талаптар ҡуясағыбыҙҙы әйткәйнем инде һеҙгә. Тағы ниндәй әйтер һүҙегеҙ бар? Уйлашайыҡ.

— Нимәһен уйлап торорға?!

— Әйткәнебеҙҙе үтәмәһә, ерҙән ҡыуабыҙ!

Көн элгәре халыҡты уғата ярһытырға ярамағанды белә ине Григорий. Ҡешеләр, бер ҡыҙып алһа, алдан уйланмаған дыуамаллыҡ ҡылыуы ла, тырым-тыраҡай туҙышып китеүе лә бар. Шуға күрә ул ҡулын юғары күтәрҙе.

— Ағай-эне!.. Баярға талаптарыбыҙҙы бик асыҡ

итеп бер кеше генә әйтеп бирергә тейеш. Кемгә ышандырабыҙ?

— Үҙең әйт, Гөргөрөй!..

— Юҡ, Төлкөсура әйтһен!..

Григорий менән Төлкөсура бер-береһенә ҡараштты. Оҙаҡ икеләнеп торор саҡ түгел ине.

— Төлкөсура, халыҡ исеменән һин һөйләйһең, — тине Григорий. — Бында һүҙ башҡорттар исеменән әйтелә бит. Ә мин һиңә ҡушылырмын. — Шунан тағы халыҡ төркөмө яғына боролдо. — Ныҡ тороғоҙ, туғандар! Ҡуйған талаптарҙан аҙ ғына ла кире сигенмәйек. Бер һуҡҡанда ныҡ һуғырға кәрәк!

— Киттек, ағай-эне!..

Халыҡ төркөмө тағы бер геүләп алды ла ялан ябып баяр өйөнә ҡарай юнәлде. Бында урман ҡырҡыусыларҙан тыш әле мыйыҡ та сыҡмаған, ҡыҙыҡ күреү өсөн генә килгән үҫмерҙәр ҙә, урыҫ баярына ләғнәт һүҙе әйтеү теләге менән килеүсе бәлтерәп бөткән, таяҡ таянып, бөксәйеп, бишмәт сабыуҙарының итәген ергә һөйрәлтеп атлаусы ҡарттар ҙа байтаҡ ине.

Улар барып етер-етмәҫ элек үк, солан күтәрмәһенә ҡотһоҙ йөҙө тағы ла нығыраҡ һөрөмләнә төшкән Маслов сығып баҫты. Һәр кемде танырға теләгәндәй, һөҙөп ҡарап тора биргәс, бер ни белмәгәнгә һалышып, ҡоро ғына һораны.

— Ниндәй йыйын әле был ваҡытлы-ваҡытһыҙ? Әллә берәй байраммы?

Теле тик тормаҫыраҡ берәү ҡысҡырып ебәрҙе:

— Һиңә генә ул көн дә байрам!

Уға икенсеһе, шунан өсөнсөһө ҡушылды:

— Белә тора мыҫҡыл итеп һорап маташа!

— Был кипкән тәрегә байрамды күрһәтеп алырға кәрәк!..

Һүҙҙең шулай әрләшкән кеүек башланып китеүен теләмәй ине Төлкөсура. Ул халыҡтан айырылып, алғараҡ сығып баҫты ла:

— Никифор Андреевич, — тине, тыныс булырға тырышып, — беҙ һинең менән ҡыш буйы күп һөйләштек инде. Халыҡ хужаның үҙе менән һөйләшергә теләй, уны саҡыра. Ниңә өйөнә инеп боҫто?

— Дөрөҫ!

— Үҙе сыҡһын! — тип бүтәндәр уның һүҙен элеп алды.

Халыҡ төркөмө сайҡалды, геүләне, өймәкләшеп, баяр йортоноң эргәһенә үк килеп туҡтаны.

Ғәжәпкә ҡаршы, Масловтың ҡотһоҙ сырайында аҙ ғына ла асыу күренмәй, киреһенсә, хатта йылмайыу ғәләмәте сағыла.

— Теләйһегеҙ икән, мин уны хәҙер саҡырам, — Маслов вайымһыҙ ғына атлап өйгә инеп китте.

Бына соланға шулай уҡ бик тыныс ҡиәфәт менән Лапшин сығып баҫты, ҡулын артҡа ҡуйып, көптәй ҡорһағын ҡалҡан итергә теләгәндәй, ҡайҡая биреп һораны:

— Йәгеҙ һуң, йәмәғәт, ни әйтмәксеһегеҙ? Ниңә былай иртүк йыйылдығыҙ?

Көңгөр-ҡаңғыр үҙ-ара һөйләшеү китте, ләкин һүҙ баштарға батырсылыҡ итеүсе күренмәне. «Ни булһа ла булды, тәүәккәлләргә кәрәк», — тип уйланы ла Төлкөсура иң алға уҡ сығып баҫты.

— Артем Дмитриевич, беҙ бер нисә көндән ҡыуғын башланырын беләбеҙ, тик шуға тиклем халыҡ һеҙҙән үҙенең ҡайһы бер һорауҙарын үтәүҙе талап итә. Иң беренсенән, киләсәк ҡышҡы сезонға ҡуна ятып эшләү өсөн йорт кәрәк. Икенсенән, ҡышҡы эштең йәйгегә ҡарағанда ауыр икәнлеге үҙегеҙгә мәғлүм, шуға күрә көнлөк хаҡын һәр бүрәнәгә берәр тин арттырығыҙ. Өсөнсөнән, дегет баҙҙарын ватыуҙы бөгөндән туҡтатығыҙ. Аҙаҡ килеп, ни өсөн миңә, туранан-тура һеҙҙең эште бөтөрөп йөрөгән кешегә, ана уларҙың, — Төлкөсура халыҡ яғына ҡул иҙәне, — аҡсаһынан тотоп эш хаҡы түләйһегеҙ? Григорий менән бүрәнә ҡарауылсыһына ла шулай итәһегеҙ. Артабан миңә кеше аҡсаһы кәрәкмәй!

— Дөрөҫ әйтә Төлкөсура!..

— Барак булмаһа, алдағы ҡыш эшкә килеү юҡ!..

— Дегет баҙымды ваттырһаң, бөгөндән ҡайтып китәм!

— Талаған өсөн судҡа бирәбеҙ уны!

— Знамы шулай!

— Ҡыуғынға аяҡ атламайыҡ, ағай-эне!

— Ул бында беҙҙе талаһын, ишеү етмәһә уға йәй буйы бүрәнә ҡыу!..

Халыҡтың шулай ғауғалашҡанын Лапшин бик тыныс ҡиәфәт менән тыңлап тора ине. Шау-шыу аҙ ғына баҫыла төшкәндәй иткәс, бөрөш күҙен тағы ла ҡыҫа төшөп йылмайҙы.

— Эй, ҡыҙыҡ та инде һеҙ! Талаптарығыҙ шул ғынамы? Бының өсөн йыйнаулашып килеүҙең ни кәрәге бар? Шул уҡ Төлкөсура ғына килеп әйтһә лә, аңлар инем бит инде, ай-яй-яй!.. Һис тә юҡҡа ғына борсолоп йөрөйһөгөҙ.

— Юҡҡа түгел!..

— Һин беҙҙең әйткәндәргә яуап бир! — тип тағы тауышлана башлағайнылар, Лапшин, «Шауламағыҙ, хәҙер әйтәм» тигәнде белдереп, итләс, ҡыҫҡа бармаҡтарын тырпайтып, ҡулын юғары күтәрҙе.

— Һеҙгә ҡышын көн дә ауылға ҡайтып йөрөүҙең ҡыйынлығын мин дә беләм, йәмәғәт. Ләкин тәүге мәлдә бөтәһенә бер юлы өлгөрөп булманы. Бына был өй киләһе ҡышҡа һеҙгә ҡала. Ҙурыраҡ мунса һалдырып ебәрергә лә уй бар. Эштән һуң рәхәтләнеп йыуынып сығырһығыҙ. Ҡискелеккә аттарығыҙҙы ҡуйырға лапаҫ та эшләтермен тип торам. Ҡурәһегеҙме, ни тиклем эшләйһе бар, ә бының өсөн тағы аҡса кәрәк. Шуға күрә алдағы ҡышта уҡ көнлөк хаҡын арттырып булмаҫ.

— Ҡуна ятыр урын булһа, уныһына бер ҡышҡа сабыр ҙа итер инек!

— Тик һүҙҙә ҡалмаһын, мәтри!..

— Ағай-эне, былай булғас, беҙ был өйҙө үҙ аҡсабыҙға һалдырған һымаҡ килеп сыға бит.

— Эйе шул!..

Лапшин һуңғы һүҙҙәрҙе әйтеүселәргә бәзерәйеп ҡараны.

— Ә һин үҙ өйөңдө кеше аҡсаһына һалдырҙыңмы ни? Башҡа ауылға барғанда, бер кис йоҡлап сыҡҡан өсөн дә фатиргә түләйһең.

— Бер ҙә уйламай һөйләйһегеҙ, йәмәғәт. Минең әйтеп бөткәнде көтөгөҙ. Дегет баҙҙарығыҙ, үҙегеҙ миндә эшләй башлағас, барыбер кәрәкмәҫ, тип уйлағайным. Һеҙ ҡушмағас, уларға теймәбеҙ. Килештекме?

— Яҡын юлама!

— Беҙ уларҙы тир сығарып төҙөгәнбеҙ!

— Ярар, аңланым. Йәмәғәт, әллә кемдең ҡотортоуы буйынса һеҙ ваҡ-төйәк талап ҡуйып маташаһығыҙ. Һеҙҙең урында булһам, мин хужаға: «Үҙебеҙ ҡыуғынға китәбеҙ, ә бала-сағаларыбыҙ ни эшләр?» — тигән һорауҙы бирер инем. Ләкин һеҙ әйтмәһәгеҙ ҙә, Никифор Андреевич менән кисәнән бирле ошо хаҡта баш ваттыҡ. Эшлән-

мәгән эш өсөн аҡса биреү тәртибе юҡ бит инде. Шулай ҙа, һеҙҙең хәлде уйлап, һеҙгә тағы бер изгелек эшләргә булдыҡ. Ҡыуғынға китер алдынан һәр кемгә тәңкә ярымышар аҡса бирербеҙ, ғаиләгеҙгә ҡалдырып китерһегеҙ.

— Бына бынығы дөрөҫ!

— Ҡасан бирәһегеҙ?..

— Икешәр һум итеп булмаймы шуны?

— Беҙ бишәр һум да бирер инек. Аҙаҡтан ҡыуғындан буш ҡул менән ҡайтаһығыҙмы ни? Ҡыуғынды урынына алып барып еткергәс, тулыһынса иҫәп-хисап эшләйбеҙ. Кәрәк әйберҙәрегеҙҙе һатып алып, байығып ҡайтып килерһегеҙ. Хәҙер, ағай-эне, ваҡытты бушҡа үткәрмәйек. Бөгөн урмандағы аҙаҡҡы бүрәнәләрҙе ташып бөтөргә кәрәк. Төлкөсура, унда нисәләп бүрәнә бар әле?

— Алтмышҡа яҡын!

— Өсәр юллаһағыҙ, бөтә тигән һүҙ. Һалдар өҫтөндәге казенкаларҙың да ҡайһы бер эштәре бар әле. Маслов, бер нисә кешене багорҙар һапларға ҡуш. Бөгөн-иртәгә эштәрҙе төгәлләйек, ағай-эне; иртәнән һуңға бүрәнәләрҙе ауҙарырға тотонорбоҙ.

Халыҡ көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп таралыша башлағайны, Лапшин:

— Туҡтағыҙ әле, йәмәғәт! — тип ҡысҡырҙы. — Мин бит һеҙгә иң яҡшы хәбәрҙе әйтергә онотҡанмын.

Өй эргәһенә ҡабат яҡынайҙылар.

— Ҡышҡы сезонды һәйбәт кенә бөттөк бит, ағай-эне, хәҙер яҙғы-йәйге эштәр башлана. Шул уңай менән үҙегеҙҙе тағы бер ҡыуандыраһы ине.

Лапшиндең был һүҙҙәре күптәрҙе ҡыҙыҡһындырҙы.

— Нисек итеп, Артем Дмитрич?

— Һыйларға уйламайһыңдыр бит?

— Һай, күрәҙә кеше икәнһең. Ҡаршы килмәһәгеҙ, тап шулай итергә ине шул! Кисен, эш бөткәс, килерһегеҙ. Никифор Андреевич, — Лапшин баянан бирле ҡаҡҡан бағана кеүек ҡыбырҙамай баҫып торған приказчигенә боролдо, — һәр кешегә сирек литр араҡы әҙерләп ҡуй.

Кешеләр ҡапыл күңелләнеп үк китте, яңы ғына борсолоп-ярһып һөйләнеүҙәрен онотҡандай, һәр ҡайһыһы үҙенең эш урынына юнәлде.

— Ахунов! — тип ҡысҡырҙы Лапшин, әкрен атлап тимерлек яғына ыңғайлаған Төлкөсураға. Ул боролоп ҡарағас, килергә ҡушып, ҡулын болғаны. — Һин хәҙер

үк атыңды эйәрлә лә диләнкәгә кит. Бер генә лә бүрәнә ятып ҡалмаһын.

— Ярар.

— Туҡта әле... Атайың ауырый, тип ишеткәйнем, ни хәлдә?

— Бик ныҡ ята ҡарт, ни эшләп китер.

— Ярар, борсолма, ҡыуғыңды оҙатып ебәргәс, эргәһенә ҡайтып, бер аҙ ял итерһең, тәрбиәләрһең.

Был минутта Төлкөсураның күңелендә ике тойғо көрәшә ине. Ул Лапшиндең шулай халыҡтың талабын тулыһынса тиерлек ҡәнәғәтләндереүенә ҡыуанған һымаҡ та итә, икенсенән, баярҙың үтә тиҙ йомшарып төшөүе шикләндерә лә. Һүҙҙе олоға ебәрмәү, кешеләрҙе нисек тә тиҙерәк ҡыуғынға оҙатыу өсөн генә ҡыланманымы икән Лапшин. Әле бына, етмәһә, Төлкөсураның үҙе, атаһы тураһында ла хәстәрлек күргән һымаҡ һөйләшеп тора бит әле. Аңламаҫһың был кешене.

Төлкөсураның артыҡ һүҙ оҙайтҡыһы килмәй ине, баярға ҡайтарып бер һүҙ ҙә әйтмәй китеп барҙы.

Лапшин бөрөш күҙен тағы ҡыҫа төшөбөрәк уның артынан ҡарап торҙо ла ниңәлер һаман тимерлегенә китмәй бер тирәлә тапанған Григорийгә өндәште:

— Һин, байғош, был таҡырбаш мосолмандар ыңғайына йөрөп, ни ҡырмаҡсыһың? Кил әле, кил бындараҡ. Бына шулай... Ике христиан күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшәйек. Йә, һаҫыҡ ояңдан кеше араһына — яҡтыға алып сыҡҡан өсөн рәхмәтең ошо булдымы?

Халыҡ алдына сығып, Лапшингә бер ауыҙ һүҙ әйтә алмауына эсе боша ине Григорийҙең. Йә, кешеләр хәҙер уның хаҡында ни уйлар? Алдан сәпсәңләне лә, баяр алдына барғас, ауыҙы йомолдо. Русты рус ҡыйырһыта буламы, тиҙәрҙер әле. Шулай борсолоп, ниҙер әйтергә теләү, күңелен бушатҡыһы килеү тойғоһо тотоп тора ине Григорийҙе.

Лапшин үҙе әйткән мыҫҡыллы һүҙҙәрҙән ул йомшарып төшөр, ғәфү үтенер тип уйлағайны, Григорий иһә уға тишә ҡарап әйтте.

— Артем Дмитриевич, хәйләкәр һәм уҫал йыртҡыс һеҙ. Ҡорбанығыҙҙы бына былай ҡымтып алғанһығыҙ ҙа, — Григорий сабый башы хәтлем йоҙроғон һоноп күрһәтте, — ҡыбырҙарға ла ирек бирмәйһегеҙ. Тик йән эйәһен һәр саҡ шулай ҡыҫып тотоп буламы икән? Ысҡынып китһә, — ай-һай!..

Лапшин был көтөлмәгән һүҙҙәргә ни тип яуап ҡайтарырға белмәй торған арала, Григорий тимерлегенә ҡарай китеп барҙы.

— Ух, мин һине!.. — тип ыҫылданы Лапшин, асыуҙан тыны ҡыҫылып, йөҙө буҙарҙы.

Был һөйләшеүҙе ишетмәгән Никифор уның эргәһенә килеп, ыуаланып, ялағайланып һөйләнергә тотондо.

— Иллә-мәгәр эште шыма бөтөрҙөгөҙ, Артем Дмитриевич, — тип оҙон танауын ышҡып алды ул. — Ауыҙ асып һүҙ ҙә әйтә алманылар бит. Дегет баҙҙарына ысынлап та теймәйбеҙме ни?

— Һин дә шул аңғыралар һымаҡ һөйләнәһең, Никифор. Ҡыуғынға тыныс ҡына китһендәр. Шунан һин үҙ эшеңә ҡайтанан тотонорһоң. Әйләнеп ҡайтыуҙарына йортто һалдырып ҡуйҙыңмы, ни эшләй ала улар? Әйҙә әле, йортҡа нигеҙҙе ҡайһы тирәгәрәк һалырға икән, ҡарап әйләнәйек. Туҡта, миңә тәүҙә берәй стакан араҡы ҡойоп бир әле. Төнөн рәтләп йоҡламағас, баш шаңҡып тора.

Бер аҙҙан улар өйҙән сыҡтылар ҙа яландың икенсе яҡ ситенә ҡарай атланылар.

* *
*

Ҡисен һәр кем үҙ өлөшөн эсеп алғас, кешеләр ауылына ла ҡайтманы. Бер хәсрәтһеҙ әҙәмдәрҙәй геү-шау ҡубып йөрөнөләр ҙә ҡайһыһы арбаға, ҡайһыһы тимерлектән йыраҡ түгел ерҙә өйкөлөп үҫкән сауҡалыҡ араһына ятып йоҡланы.

Иртәнсәк иһә уларҙы күмәк ат тояҡтары тауышы уятты. Хәрби кейемдәге ун бишләп һыбайлыны күргәс, аптырашып, һикереп торҙолар: «Был тиклем ғәскәр нимәгә килде икән?»

Ләкин был аптырашыу оҙаҡҡа барманы.

— Төлкөсураны ҡулға алғандар!

— Григорийҙе бығаулап ултыртҡандар.

— Ғәлләм менән Әхмәтте лә келәткә япҡандар!

— Хөсәйенде эҙләйҙәр, ти әле.

— Ағай-эне, ишеттегеҙме, Ҡотлоғужа старшинаны урмандан тапҡандар. Улының күҙ алдында үлгән, ти.

— Был ниндәй ҡиәмәт көн булды һуң әле!..

Ошондай хәбәрҙәрҙән кешеләрҙең башы ҡатты. Ләкин урядник, исправник, әллә ни ҡәҙәре ғәскәр эргәлә

саҡта бер кемдең дә ҡыҫҡырынып һөйләшкәне ишетелмәне.

Лапшин төш алдынан бөтә халыҡты тимерлек эргәһенә йыйырға ҡушты. Күңелдәре ауараланып, ни эшләргә белмәй йөрөй ине кешеләр. Баяр ни әйтер икән тип, ҡыҙыҡһынып, бик йәһәт йыйылдылар. Ә үҙҙәренең артына ҡоралды һыбайлылар теҙелгәс, ҡурҡып ҡалдылар, күҙ ситтәре менән генә һалдаттарға ҡарап, үҙ-ара ымлаштылар.

— Хәҙер килеп, йәмәғәт, бөтә эштәр асыҡланды, — тип һөйләй башланы Лапшин. — Арабыҙҙа йыртҡыстар аҫырап ятҡанбыҙ, ағай-эне. Әллә ни хәбәрҙәр һөйләп, һеҙҙең башты бутауҙары етмәгән, Ахунов менән Григорий ауылдың иң һиммәтле, иң абруйлы кешеһе, власть башы Ҡотлоғужаны ла үлтергән. Төн буйы ошо ҡара эште ҡылып йөрөгән улар. Әлбиттә, был яуызлыҡты улар икәүләп кенә эшләмәгән, һеҙҙе ҡотортоп, аҙып-туҙып йөрөгән тағы өс кешенең ошо йыртҡыслыҡта ҡатнашыуы беленде. Бына хәҙер шарлатандарҙың һеҙҙең алда бер хәбәр һөйләп, артығыҙҙа икенсе эш ҡылыуҙарын белегеҙ инде. Ундайҙарға киләсәктә лә һис ниндәй аяу булмаясаҡ! Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, тәртип һәм именлек һаҡлауҙа беҙгә батша хәҙрәттәренең ошо тоғро һалдаттары, — ул атлыларға төртөп күрһәтте, — һәр саҡ ярҙамға килеп етәсәк! Һис ниндәй баш-баштаҡлыҡтарға юл ҡуймаясаҡбыҙ! Урядник, арестанттарҙы алып сығығыҙ! Уларҙың ниндәй юлдан, ҡайҙа табан киткәнен халыҡ үҙ күҙе менән күрһен.

Урядник, бер нисә һыбайлы һалдатты эйәртеп, келәткә ҡарай йүгерҙе. Унан ҡулдары артҡа шаҡарып бәйләнгән биш кешенең сыҡҡанын күргәс, халыҡ ах итте лә тымып ҡалды. Григорий һис тә артыҡ борсолған күренек түгел, хатта уның сырайында ниндәйҙер уйсанлыҡ бар. Ҡараштары иһә алыҫтағы үркәс-үркәс зәңгәр тауҙарға төбәлгән. Әйтерһең, ул шул тауҙар арьяғында ҡалған Настяһен аҙаҡҡы тапҡыр күрергә теләй йәки уның менән күңеленән мәңгегә хушлаша. Төлкөсура тиҙ генә бирешмәгән, күрәһең, һалдаттарға ҡаршы нык алышҡан: яраланған битенә ҡан уҡмашҡан, күҙ төптәре күгәргән. Ул әлдә лә бөгөлөп төшмәгән, туп-тура баҫып атлап килә. Халыҡ менән тиңәлгәс, ул артынан танауҙарын мыш-мыш тартып илап килеүсе өс иргә боролдо:

— Иламағыҙ, ағайҙар! — Шунан кешеләргә ҡарап

ҡысҡырҙы: — Ағай-эне! Был Лапшин тигән эттең бер һүҙенә ышанмағыҙ! Ҡотлоғужаны үлтереүем дөрөҫ! Ҡономдо ҡайтарҙым мин!.. Хушығыҙ, туғандар!..

— Молчать! — тип екерҙе урядник.

Бер атлы һалдат иһә тупаҡ ҡамсыһы менән уның арҡаһына һуҡты.

Биш йәйәүлене урталарына алып, атлылар Стәрлетамаҡ трактына сыға торған тура юлдан киттеләр.

Ҡапыл дөбөр-шатыр иткән тауышҡа өнһөҙ-тынһыҙ аптырап торған халыҡ терт итеп ҡалды. Ҡайһы арала-лыр күк йөҙөн ҡуйы ҡара болоттар өйкөмө ҡаплап алған. Бына тағы күк күкрәне; унан ҡара болоттарҙы, күҙ сағылдырғыс ялтлап, йәшен ҡылысы телеп үтте лә ғәжәп ҙур көҙгө ватылып, уның онтаҡтары ергә яуа башлағандай тойолдо. Ҡыйғыр яланы өҫтөндә быйыл тәү тапҡыр күк күкрәүе ине. Ҡешеләр, ләйсән ямғырының шифаһын һеңдереп ҡалыу өсөн, кәпәстәрен һалдылар.

7 Заказ 355

## ИКЕНСЕ КИҪӘК

### I

Бер мең туғыҙ йөҙөнсө йылдың көҙгө ҡараңғы төнө. Тышта үҙәккә үтеп бөткән ваҡ күҙле ямғыр өҙләкһеҙ һибәләй ҙә һибәләй. Ҡайһы берҙә ел күтәрелдеме, үткер, һалҡын тамсылар ҡарындыҡ тәҙрәне тишә яҙырҙай булып, шаптырҙап бәреләә.

Өрләктөң урта тәңгәленә, ишек яҡ стенаға терәү һуғылған, лапашҡан өйҙөң эсен ана һүнерҙән-бына һүнерҙән генә янған берҙән-бер сыра тоноҡ ҡына яҡтырта; ҡыйыҡтан үткән һыу иҙәнгә тыпылдап тама, сыуал артында сиңерткәнең өҙөп-өҙөп сырылдауы эс бошорғос тынлыҡты боҙа.

Бер яҡ яурын башынан күлдәге бүҫелгән, ҡаҡса сырайлы егет урындыҡта арҡыры һуҙылып ятҡан ап-аҡ сәсле әбейҙең кипкән ирендәрен һуйыр ҡауырыйы менән сылата. Әбейҙең төпкә батҡан нурһыҙ күҙҙәре түбә таҡтаһына төбәлгән. Ҡайһы берҙә ул күҙҙәр бөтөнләй һүнеп ҡалған кеүек тойола, тик әбей хәлһеҙ тауыш менән:

— Балам... һыу... — тип тамшаныуҙан ғына был ҡибеп, сауығып бөткән тәндә йән барлығы тойола.

Егет туҫтаҡтағы һыуға һуйыр ҡауырыйын мана ла, аҡһыл төҫкә ингән, ҡороған ирендәргә тейгеҙә һәм төпкә батҡан күҙҙәр асыла төшкәндәй була.

Егет, күрәһең, бына шулай бик оҙаҡ ултырған; талған аяҡтарын яҙыу өсөн, иҙәнгә төштө, иҫке быйма башын аяғына эләктереп, бөтөнләй һүнеп барған сыуалға өс-дүрт ағас утын һөйәне лә, унып янып киткәнен көтөп, хәрәкәтһеҙ ҡалды. Егет буйға оҙон — башы түбә таҡтаһына тейә яҙып тора, яурындары киң. Бына ул яңаҡтарын ҙур усына ҡуйып, терһәктәрен тубығына терәп урындыҡ ситенә ултырҙы ла, арҡаһын көмөрәйтә төшөп, алға эйелде; ҡараштары иҙәнгә төбәлгән, ҡуйы ҡара ҡаштарының осо юғары сөйөлгән; алға кәксәйеңкерәп торған киң әйәк, ҡалҡыу тура танау — егет ошо ултырған ҡиәфәтендә ҡая башынан түбәндәге табышын күҙәткән бөркөттө хәтерләтә ине.

Нимә тураһында уйлана икән ул? Бына хәҙер айҙан артыҡ инде түшәктә ятҡан әсәһен нисек итеп үлемдән ҡурсалап ҡалыу әмәлен эҙләйме? Бөтә илде солғап алған аслыҡты ҡәһәрләп, әсәһенә берәй яһап эсерерлек матур сәйҙе ҡайҙан табыу хаҡында баш ватамы?..

Урындыҡта саҡ-саҡ тын алып ятҡан ап-аҡ сәсле әбей — Төлкөсураның әсәһе Ғәрифә, ә уның янында ултырған егет — ҡасандыр атаһы бүре тиреһенә урап, үлемдән ҡотҡарған Бикморат ине. Бына хәҙер егерме дүрт йыл инде улар икәүҙән-икәү донъя көтә. Ауырып ятҡан Торомтай, ауыр ҡайғыны күтәрә алмайынса, Төлкөсура төрмәгә киткәндән һуң күп тә тормай, ҡатыны менән бәләкәй улын яҙмыш ҡосағына ҡалдырып, үлеп киткәйне. Ошо егерме дүрт йыл эсендә ниҙәр генә күрмәне Ғәрифә?!. Төлкөсураһының ун биш йылға һөргөнгә ебәрелеүен ишеткәс, иҫе инерле-сығырлы булып йөрөнө-йөрөнө лә астан үлмәү, Бикморатын һаҡлап алып ҡалыу, кеше ыңғайына донъя көтөү тураһында уйлай башланы. Төлкөсура менеп йөрөгән атты һатып, тәүге ҡышты арыу ғына сыҡтылар. Аҙаҡҡы атын һатһа, этеп-төртөп тағы бер йыл үткәрерҙәр ине, атты тотонғоһо килмәне Ғәрифәнең. Йәйгелектә ҡайһылай етте — шулай итеп бесән эшләне, бер нисә арба утын ташып алды; шунан берәй төрлө эш табып, ашарға юнләү хәстәрлеген күрҙе: Низам муллаға барҙы ул тәүҙә, ат менән берәй нәмә ташырға ҡушмайһыңмы, өй тирәһендә берәй эшең юҡмы, тип белеште. Мулла иһә уны ҡыуып тигәндәй сығарҙы. Ирендең, улыңдың кафыр дуҫтарына бар, тине. Уйылданға эш һорап барыу тураһында башына ла килтерә алмай ине Ғәрифә. Ни эшләһен, тотто ла Лапшин улты-

рышына китте. Баяр дегет баҙҙарын барыбер ваттырып, Стәрлетамаҡтан да кирбес ташытып, харап ҙур йорт һалдырып ҡуйғайны. Ғәрифәнең был өйҙә тәүге күргән кешеһе Роман булды. Элекке кеүек үк алсаҡ ҡылапмаһа ла, ул Ғәрифәне лә, унын итәгенә йәбешкән Бикморатты ла төптәгерәк бүлмәгә саҡырҙы (Ғәрифәне күреү — уға хәҙер инде бөтөнләй онотолоп барған Миңлегөлдө хәтерләткәйне). Өйҙәге ниндәйҙер мәрйәнән (ул Масловтың ҡатыны ине) сәй ултырттырҙы, Ғәрифә бер ни аңламаһа ла, әллә ниндәй хәбәрҙәр һөйләне, аҙаҡтан өс тәңкә аҡса сығарып тотторғайны, Ғәрифә уны алырға ла, алмаҫҡа ла белмәне. Ул бит эш белешергә килгәйне, был өс һум аҡса бөтөр ҙә китер, унан тағы ҡайҙа барыр? Үҙе бик аҙ ғына белгән бөтә рус һүҙҙәрен башҡортсаға бутап, шуны аңлатырға тотондо.

— Малайка бар бит, Роман, — тине. — Лашадка ла, тапор ҙа бар, эш кәрәк. Ашайт наҙы бит, йәшәйт наҙы, — тип ебәрҙе.

Их, был донъя тигәнең, белмәгәнеңде белдертә, һөйләмәҫ һүҙеңде һөйләтә икән.

Роман да хәҙер башҡортса арлы-бирле аңлай башлағайны, унын эш һорағанын төшөндө, байтаҡ уйланып торҙо. Үҙҙәренең ошо йортона ла иҙән, кер йыуыусы, ишек алды тирәһен таҙартыусы кеше кәрәк тә, Маслов, Ғәрифәнең Төлкөсура әсәһе икәнен белһә, мәңге ризалыҡ бирмәйәсәк. Урмансылар барагына йыйыштырыусы итеп алды уны Роман. Тәүҙә Ғәрифәнең кем икәнен белмәй йөрөгән Маслов, аҙаҡтан, Төлкөсураның әсәһе икәнен ишеткәс, енен сәсеп ҡарағайны ла, Роман: «Беләһеңме, Никифор Андреевич, ул минең ғүмеремдә тәүге тапҡыр ихлас күңелдән ғашиҡ булған ҡыҙҙың әсәһе икәнде лә онотма», — тип, уны шаҡ ҡатырҙы, атаһы килеп киткән саҡта уға был хаҡта ла, Ғәрифәнең кем икәнен дә әйтмәүен үтенде. Әлбиттә, Никифор унын әйткән һүҙен ҡыра һуғырға ла батырсылыҡ итмәй ине. Ни тиһәң дә, өлкән Лапшин килә лә китә, ә Роман һәр саҡ бында, унын менән низағҡа кереүҙең хәйерле бөтмәүе лә мөмкин.

Ун бер йыл буйы, аяғы-ҡулы һыҙлап, хәлдән тайып йығылғансы, эшселәр барагын йыйыштырҙы Ғәрифә. Унда гел ир-ат торғанлыҡтан, ҡуна ята алмай ине, ниндәй генә ауыр хәлдә ҡалһа ла, ҡатындарға хас тартыныу, ғорурлыҡ ят түгел ине уға. Атын егеп, Бикморатын атаһынан ҡалған иҫке сәкмәнгә төрөп ултырта ла таң

менән ултырышҡа килеп етә, көн буйына эшләй, төнөн ҡабат үҙенең һыуыҡ өйөнә ҡайтып инә торғайны. Ҙурая килә, Бикморат урмансыларға өйрәнеп китте, шунда йоҡларға ла ҡалғылай башланы, ләкин Ғәрифә үҙе һаман ҡайтып йөрөр ине. Эшләй алмаҫ хәлгә килеп йығылғанында, Бикморатты ҡул араһына инә, ирҙәргә ҡуш булып, урманға ағас киҫергә йөрөй башлағайны инде. Әсәһе өйҙә генә ултырғаны бирле, бына хәҙер ун өс йыл инде, ул баяр утарына көнөнә йөрөп эшләй, бар хәленсә әсәһен ҡәҙер итергә тырыша. Ғәрифә бынан бер ай самаһы элек түшәккә ауғас, уны көндөҙ Рәхилә — Ҡотдостоң оло ҡыҙы ҡарай, кисен Бикморат үҙе бына шулай ултырып сыға.

Егерме дүрт йыл ваҡыт үтһә лә, Ғәрифә һаман Төлкөсураһын көтә ине, көн дә уны иҫкә ала, йылы ла күптән тулды бит инде, ҡайһы илдәрҙә генә йөрөй икән балам, тип илай торғас, йәше сыҡмаҫ хәлгә еткән күҙҙәрен яулыҡ осо менән тызый. Ҡисә генә лә: «Бөгөн бик матур төш күрҙем, ағайың ҡайтыуға булһа ярар ине», — тип яткайны, бөгөн өндәшмәй, бөтөнләй телдән ҡалды, күрәһең. Оҙаҡҡа бармаҫмы икән инде...

Ишек асылыуға Бикморат башын ҡалҡытып ҡараны.

— Шунан, Ғәрифә инәйемдең хәле нисек? Мин ни ары-бире ҡапҡыланым да кире югерҙем. Үҙең берәй нәмә рәтләп ашаныңмы һуң? — тип ишектән үк һөйләнә-һөйләнә килеп инде Рәхилә.

Әгәр ошо ҡыҙ булмаһа, елкәһенә төшкән ауырлыҡҡа сыҙай алыр инеме икән Бикморат? Күңел йыуатҡысы, арып, хәлһеҙләнеп ҡайтҡан сағында йөрәгенә яңы дәрт өрөүсе берҙән-бер кеше ул. Ана бит, килеп ингәйне, өй эсе яҡтырып киткәндәй булды, Бикмораттың да йөҙө асылды.

— Үҙем ашауға ашаным да... Әсәйемдең хәле насарлана шикелле, Рәхилә. Әллә берәй әбей саҡырайыҡмы икән, тим. Йә ясинһеҙ үтеп-фәлән китер.

— Ҡуйсы, Бикморат, юҡты һөйләмә, ниңә үлһен ти әле ул. Бына мин ҡайнаған һөт алып килдем. Хәҙер балғалаҡ менән ауыҙына ҡоям.

Ырғып тороп, ҡосаҡлап алырҙай була Бикморат Рәхиләне. Ләкин был сымыры кәүҙәле, теремек ҡыҙға мөхәббәте шул тиклем көслө, уның тәненә ҡағылырға ла баҙнат итмәй. Үҙен Рәхиләнең дә яратҡанын күптән белә ул. Тик был хаҡта улар араһында һис ҡасан да һүҙ

ҡуҙғалғаны юҡ. Ҡараштары менән генә бер-береһен аңлайҙар ҙа көн һайын күрешеп, бына шулай бергә донъя көткән кеүек йөрөүҙәренә ҡыуанып, кешеләрҙә була торған иң гүзәл тойғоно тышҡа сығармайынса күңелдәрендә һаҡлай алыуҙарына шатланып йәшәй бирәләр.

Уларҙың был дуҫлығы, бәлки, ун өс-ун дүрт йәшлек Рәхилә Бикмораттарға тәүге тапҡыр һыу килтергәндә үк башланғандыр. Хәҙер инде уға ун һигеҙ. Уларҙың ғәжәп дуҫлығын, кеше күҙенә һис тә йәшерен-батырын булмаған мөхәббәтен бөтә ауыл белә. Шулай асыҡтан-асыҡ йөрөгәндәре өсөндөр инде, улар тураһында ауылда ғәйбәт һөйләүсе лә юҡ. Хатта бер көн Рәхиләнең атаһы Ҡотдос баяр ултырышынан ауылға ҡайтып килгәндәрендә, бик ғәҙәти генә итеп:

— Бикморат, ҡасан өйләнешергә уйлайһығыҙ? — тип һорап та ҡуйҙы.

Бикморатты был һорау ҡаушатманы ла, уңайһыҙландырманы ла, сөнки борғаланып-һырғаланып тороуҙың кәрәге юҡ ине.

— Әсәйем бик нык ята бит әле, Ҡотдос ағай, — тине ул, шулай уҡ күптән һөйләшеп килешелгән эш тураһында һүҙ барған кеүек. — Әллә шәбәйеп китә, әллә...

— Уныһын мин дә беләм. Рәхилә барыбер һеҙҙән ҡайтышмай, уны тәрбиәләй бит инде. Икегеҙгә лә тыныс-ыраҡ булыр ине, тиеүем.

— Шулай ҙа саҡ ҡына сабыр итәйек әле, Ҡотдос ағай.

Был егетте, Төлкөсура кеүек күреп, бик ярата ине Ҡотдос. Ағаһы менән уның араһында тик бер генә айырма күҙгә ташлана: Төлкөсура тотҡан еренән һындырырға яратыусы, ҡаны ҡайнап торған егет ине; Бикморат иһә, ҡайһы бер саҡта дыуамалыраҡ ҡыланһа ла (былтыр йәй, сәмләнеп, елкәһе менән тайҙы күтәрҙе ләбаһа!), баҫалҡы, һүҙгә лә һаран. Бүтән яҡтан инде ике тамсы һыу кеүек оҡшағандар.

Рәхилә Ғәрифә әбейҙең ауыҙына тамсылап ҡына һөт тамыҙа, ләкин ауырыу уны рәтләп йота ла алмай. Бөгөн уның күҙҙәре ҡыҙға рәхмәт һирпеп тә ҡарамай, бәлки, күрмәйҙер ҙә инде. Юғиһә, эргәһенә Рәхилә килдеме, уның сырайында шатлыҡ ишараһы күренә, ҡыҙҙың ҡулдарынан һыйпай-һыйпай ҙа:

— Эй балаҡайым, бәхеттәрегеҙҙе биреп, улым ме-

нән матур ғына донъя күтәп алып китһәгеҙ ине, бөтә теләгем шул, — ти торғайны.

Рәхилә үҙенә ҡарап, ниндәйҙер уйға батып эргәһендә ултырған Бикморатҡа боролдо.

— Һин ятып ял ит инде, йәме. Тик күлдәгеңде һалып ят. Бынау яурын башын ямармын, йыуып ҡуйырмын. Иртәнсәккә әҙер булыр.

— Беген бүрәнә тейәгәндә бүҫелде лә китте, — тине Бикморат, эш боҙған балалай, аҡланырға теләгән шикеллерәк итеп, күлдәгенең йыртығын һәрмәштерә-һәрмәштерә.

— Ярар, эшләгәндә була инде... Туҡта, урыныңды үҙем рәтләберәк һалып бирәйем әле.

Рәхилә, һөтлө сеүәтәһен ҡуйып, стена буйына урын йәйергә тотондо. Иҫке мендәрҙе эй гөпөлдәтеп һуҡҡылай, әйтерһең, уның ҡабарыр ере ҡалған.

— Кил ят, бер ни уйламай, тыныс ҡына ял ит. Ғәрифә инәй насарланып-фәлән китһә, уятырмын. Хәйер, әллә ни бирешмәҫ әле ул.

Бикморат күлдәген сисә башлағайны, кемдер дөп-дөп баҫып соланға күтәрелде, саҡ ҡына тынып торғандан һуң, ишекте шаҡылдатты. Бикморат яртылаш сискән күлдәген кире кейҙе, ауылда ишек ҡағыу ғәҙәте булмағанлыҡтан: «Бынау эт сыҡҡыһыҙ төндә кем йөрөй икән?» — тип уйлап:

— Кем бар? Ин әйҙә,— тине.

Оҙон кәүҙәһен эйә биреп, һыуланған ҡалын кәжәнен ҡыптырҙатып ишек яғына бәрә-бәрә, бер кеше килеп керҙе. Башындағы күн тышлы бүрке һыуланып ялтыраған, танауы аҫтында ҡуйы мыйығы һыҙылып күренә. Инеүсе шул тиклем ҡаҙалып ҡараны, ниҙер һиҙенеп, Бикморат хатта тертләп ҡуйҙы; ләкин бер ни уйларға ла өлгөрмәне, инеүсе:

— Бикморат!.. Ҡустым!..— тип ҡоласын йәйеп уға ташланды.

Бикморат хәҙер кем килеп кереүен асыҡ тоя, ләкин ауыҙ асып бер һүҙ ҙә әйтә алмай, ҡосаҡлаусының ихтыярына буйһоноп, йөрәге туҡтап ҡалған шикелле, тик тора ине. Шул саҡта:

— Балам... Төл...кө...сурам...— тигән, ишетелер-ишетелмәҫ кенә әйтелгән ике ауыҙ һүҙ уларҙың икеһен бер юлы айнытты, бер-береһен ысҡындырҙылар.

Төлкөсура иплəп кенə атлап əсəһенə яҡынлашты, бысраҡ аяғын тейҙерməҫкə тырышып, урындыҡҡа тубыҡланды ла əсəһенə табан эйелде.

— Əсəй...

— Ҡайттыңмы... улым...

— Ҡайттым, əсəй, ҡайттым. Мине күрəһеңме, əсəй?

Ғəрифəнең күҙҙəренəн ике бөрсөк йəш атылып сыҡты ла, тəгəрлəп төшмəйенсə, ике тамсы терегөмөш кеүек, күҙ соҡорона эркелде. Уның ҡарашы ҡайһылыр араға яҡтырып киткəндəй булды, хатта башын ҡалҡытырға телəгəн һымаҡ хəрəкəт яһаны, шунан осло эйəген юғары күтəрə бирҙе лə, күҙҙəрен əкрен генə йомоп, тынып ҡалды.

— Əсəй!.. Əсəкəйем минең!..

Үҙ-үҙен белə-белгəне бирле күҙ йəше сығармаған Төлкөсура, əсəһенең күкрəгенə ҡапланып, һулҡылдап иларға тотондо. Ул арала Бикморат менəн Рəхилə лə Ғəрифə эргəһенə килə һалып етте. Сырайы ағарынған Бикморат уның өҫтөнə эйелде, ə ҡыҙ урындыҡтан шыуышып төштө, сыуал мөрйəһенə битен терəп, мыш-мыш илай башланы.

Бына Төлкөсура күтəрелде, йəшлəнгəн битен ҡул һырты менəн бер-ике һөртөп алды, тəрəн итеп ауыр көрһөндө, урындыҡ ситенə аяғын һалындырып ултырҙы. Хəлəхүəл һорашыу ҙа юҡ, əйтерһең, улар егерме дүрт йыл буйы айырылышып тормағандар; Төлкөсура тышҡа ғына сыҡҡан да, ул əйлəнеп ингəнсе, əсəһе үлгəн.

— Күрəһең, мине генə көтөп ятҡан...

— Ул һине көн дə һөйлəй ине,— Бикморат ағаһына, уның ҡайтып инеүенə һаман ышанмаған шикелле, ғəжəплəнеп ҡарай ине. Иҙəнгə төшөп, уның алдына килде.

— Ағай, ысынлап та һинме?..

— Мин, ҡустым, мин... Ҡайттым бит.

— Их, ағаҡайым! — Бикморат уны ҡосаҡланы; күңеле тулышты, тамағына ниҙер килеп тығылғандай булды. Төлкөсураны ысҡындырып, һаман сыуалға һөйəлгəн килеш торған ҡыҙға өндəште: — Рəхилə, күрəһеңме, ағайым ҡайтты бит! — Ағаһының һораулы ҡарашын абайлап, өҫтəне: — Ə был — Рəхилə, Ҡотдос ағайҙың ҡыҙы... Əсəйемде икəүлəп тəрбиəлəй инек беҙ уның менəн.

— Һы...— Төлкөсура уға ышанмаған кеүек ҡараны.— Ҡотдостоң шул тиклем ҡыҙы бармы? — Ҡыҙҙың уңайһыҙланғандай итеүен һиҙеп, һүҙҙе шундуҡ икенсегə бора һалды.— Ярар, ҡустым, күрештек, əсəйемдең күҙен бер-

гәләп йомдорорға яҙған икән. Уның эргәһенә бер-ике оло кеше саҡырмайынса ярамаҫ бит. Әйтерҙәй кемдәр бар?

Рәхилә йәһәт кенә кейенә башланы.

— Хәҙер оләсәйемде, тағы берәй әбейҙе алып киләм.

— Ҡара әле, кем... Рәхилә һеңлем, унда минең ҡайтҡанды әйтеп, тауыш күтәрмәй тор.

Төлкөсура өй эсенә күҙ югертеп сыҡты.

— Дә-ә-ә, — тип һуҙҙы, — өйҙөң дә рәте киткән икән.

Бикморат уға яуап бирмәне.

* *
*

Иртәгеһенә ауылда, Ғәрифә үлеүҙән бигерәк, бөтөнләй онотолоп бөткәс ҡайтып төшкән Төлкөсура тураһында күберәк хәбәр һөйләнеләр. Төлкөсура үҙе иһә хәлен белешә килеүселәргә әллә ни оҙон хәбәр һөйләп торманы: көнө лә ундай түгел ине, ауыр үткәндәрҙе, ҡайҙа булғандарын хәтерләп торғоһо ла килмәй ине.

— Ғүмер булғас, йөрөп ҡайтылды бына,— тиеү менән сикләнде.

Әсәһен Торомтай менән Миңлегөл эргәһенә йәнәш ерләнеләр. Иртәгеһенә Төлкөсура менән Бикморат, шул зыярат эсендә үк ағас йығып, көн буйы ҡәбер бураһы бураныдар. Миңлегөлдөң ҡәбер бураһы сереп бөткәйне, уны яңырттылар, атаһының ер менән тигеҙләнә яҙған ҡәбер тупрағы өҫтөнә лә бура ҡуйҙылар, шунан һәйбәтләп әсәһенең ҡәберен бураныдар. Ҡояш байып барған саҡта ғына эше бөттө уларҙың.

— Йә, ҡустым, эште осланыҡ,— тине Төлкөсура.— Әллә, мин әйтәм, әсәйемдең баш осона берәй ҡайын килтереп ултыртабыҙмы?

Бикморат саҡ ҡына уйланып торҙо.

— Ҡайын — ҡайғылы ағас, тиҙәр бит, ағай.

— Их, ҡустым, ҡайғы-хәсрәтте ҡайындан күрергә ярамай. Кем кем, мин беләм уны хәҙер! Беләһеңме, ҡайындарҙы һағынып ҡайттым мин, үҙебеҙҙең ап-аҡ ҡайындарҙы. Мин йөрөгән яҡтарҙа улар юҡ ине, ә ҡайғылар... Ярар, әйҙә ҡайтайыҡ, бөгөн барыбер өлгөрөп булмаҫ.

Зыярат ауылдан ситтәрәк, Ҡаратау-Айыры йылғаһы аръяғындағы һөҙәк тау битләүендә ине. Улар ауылға табан атланылар. Таштан һалып эшләнгән тар баҫманан сығып, аҙыраҡ килгәс, Төлкөсура туҡтаны.

— Бар һин атлай тор, Бикморат, мин Ҡаратау-Айырыһында рәхәтләнеп бер йыуынам әле.

— Ярар, тик оҙаҡлама.

Төлкөсура йылға буйына кире килде. Йылға оҙаҡҡа һуҙылған көҙгө ямғырҙарҙан ташып киткән, буръяҡланып аға. Тәүҙә Төлкөсура битен-ҡулын ғына йыумаҡсы иткәйне, шунан билеңә тиклем үк сисенеп ташланы. Ах та ух килеп, рәхәтләнеп йыуынырға тотондо. Тыуған ерҙең көҙгө һалҡын, буръяҡ һыуы ла тәнгә ниндәйҙер ләззәт биргән һымаҡ ине. Тәне еңеләйеп киткәндәй тойолдо. Яңынан кейенеп алды. Ул хәҙер ҡайһы яғы менәндер ауыл кешеһенә бик үк оҡшамаған кеүек ине. Әллә яңы йәшел фуфайкаһы, әллә күн бүрке аҫтынан сыға биреп торған етек сәсе, әллә инде аяғындағы ҡалын күндән тегелгән ҡупшы ғына итеге шулай күрһәтә. Күпме ыҙалар татыһа ла, төҫкә лә бик бирешмәгән әле ул. Каторганан ҡотолғандан аҙаҡ, һуңғы дүрт йылда Златоуст заводында эшләгәнендә сәләмәтлеген бер аҙ нығытып, әҙәм төҫөнә ингәйне.

Их, был үткән ғүмерҙе уйлаһаң... Егерме дүрт йыл, ир кешенең ер һелкетеп, тормоштоң тәмен татып, ҡәҙерен белеп донъя көтә торған ғына бер мәле Себер төпкөлөндә күмелеп ҡалды. Ул көндәрҙе иҫкә төшөргөһө килмәй Төлкөсураның, ләкин ҡайһы саҡта барыбер йөрәк майын һыҙып, үкенес тойғоларын ҡуҙғатып, шул хәтәр осор күҙ алдына килә лә баҫа.

Аяҡтарында бығау шалтырҙатып, иң тәү башлап эшкә сыҡҡан көндәр... Уларҙы, Төлкөсура ише үк йөҙәрләгән каторжандарҙы, карьерҙан алтын йыуыу урынына ҡаҙылған ерҙе ташырға ҡуштылар. Этмәле арбаны күпме һөйрәне икән ул? Көҙгө-яҙғы бысраҡтарҙа, йәйге эҫеләрҙә, ҡышҡы сасҡау һыуыҡтарҙа... Әгәр был үтелгән юлды бер-берећенә ялғап туралаһаң, ер шарын әллә нисәмә тапҡыр әйләнер ине.

Тәүге мәлдә ниндәйҙер вайымһыҙлыҡ менән йөрөгәйне Төлкөсура. Яҙмыштан уҙмыш юҡ, башы һау булһа, бер әйләнеп ҡайтыр әле. Шунан уны мәле-мәле менән һағыш, ниндәйҙер юҡһыныу тойғолары иҙә башланы. Ҡаратауы, Нөрош буйҙары, ауыл ҡаршыһындағы тау битләүен ябып үҫкән сауҡалар күҙ алдына килә лә осар ҡош булып, күңеленән шунда уҡтала, тыуған яҡтарына бер генә күҙ ташлаһа ла, болоҡһоуы, һағыныуҙары ба-

çыла төшөр һымаҡ тойола. Атаһы менән әсәһе, Бикморат ҡустыһы иçенә төшкәндә ул йөрәге әсенеүҙән хатта, тешен ҡыçып, ыңғырашып ҡуйыр ине. Ҡайтып күрә алырмы уларҙы? Ай-һай, сыҙай алмаç был хәтлем хәсрәт-ҡайғыларға атаһы менән әсәһе. Улар үлеп-фәлән китһә, Бикморатты кем ҡарар? Шулай уҡ Торомтай нәçеле төбө-тамырынан ҡорормо икән ни?..

Иртәнән кискә тиклем эшләп, арманһыҙ булып, һаçыҡ, тығын баракка ҡайтып ауғас, ул йыш ҡына сымыры кәүҙәле, алъяпҡыс быуған, уңған биҙәкле яулығын артҡа ҡаушырып бәйләгән ҡыҙҙы күҙ алдына килтерә. Ҡаршыһына килеп баçа ла Сажидә зәңгәр күҙҙәрен тултырып уға ҡарай, моңһоу ғына йылмая. Йә, шулай ер аяғы-ер башы ерҙәргә киттеңме ни, тигән төçлө. Бындай саҡтарҙа рәхәт тә, ҡыйын да Төлкөсураға. Рәхәт, сөнки Сажидә уны иç китмәле ауырлыҡтарға ла бирешмәй йәшәргә ҡеүәт биреп тороусы өмөт йондоҙо кеүек. Ул — Төлкөсураның Себер һалҡыны ураҡан, бына-быча туңып, өҙөлөп төшөр төçлө тойолған йөрәгенә йылы биреүсе әллә ниндәй, берҙән-бер изге йән. Ҡыйын, сөнки ысынбарлыҡта Сажидә унан ҡоштар осоп етмәç алыçлыҡта тороп ҡалды. Үҙ йөрәгендә тыуған иң матур тойғононң ҡапыл ғына селпәрәмә килеп онталыуын, Сажидә менән хәҙер бүтәнсә күрешә алмаçын аңлау Төлкөсураны шашыныр сиккә еткерә. Их, исмаһам, анау саҡта, Роман үҙен төрмәнән сығарғас, күреп китә алманы бит! Бите ҡутырлы булһа тағы. Старшина менән яғалашҡанын асыҡтан-асыҡ һөйләп бирһә, Сажидә ғәйеп тә итмәç ине әле, бәлки. Старшина менән алышыу үҙе бер егетлек түгелме ни?..

Йыш ҡына төштәрендә күрә ине ул Сажидәне. Шунан, уянып китеп, ҡурғаштан ауыр ҡараңғылыҡҡа төбәлеп, төндәр буйы ҡабат йоҡлай алмай ята. Шулай уҡ үҙ ғүмерендә һөйә лә, һөйөлә лә алмаçмы икән ни Төлкөсура? Хатта Ахуновтар нәçеленең дауамын да ҡалдыра алмаçмы?

Ошондай уйҙар уны был ғүмерлек булып тойолған тотҡонлоҡтан ысҡынырға ынтылтып та ҡараны бер саҡ. Бик ентекле әҙерлектән һуң, «ер өçтөндәге тамуҡ» исемен йөрөткән тотҡонлоҡтан ике иптәше менән ҡасты. Ҡыу ағастарҙан һал бәйләп, бер аҙна буйы төндәрен ниндәйҙер ҙур ғына йылғанан түбәнгә йөҙҙөләр, көндөҙ яр башында боçоп ултырҙылар. Оло юлға барып сығырға ла

күп ҡалмағайны шикелле инде. Уларҙы эҙәрлекләүсе стражниктәр тотоп алды. Каторга урынына ҡабат килгәс, Төлкөсураның тәүге хөкөм ителгәндәге ун биш йылына тағы биште өҫтәнеләр һәм айырыуса ышаныcһыҙ каторжандар төркөмөнә ҡуштылар...

...Григорий суд барышында үҙен аҡлар өсөн бер һүҙ ҙә әйтмәне. Тикшереп, уның Белореттән икәнен, хөкөм ителгәндән аҙаҡ ҡасыуын белгәндәр. Шуға күрә уны егерме йылға хөкөм итеп, тәүҙә үк айырыуса ышаныcһыҙҙар төркөмө менән Себергә ҡыуалағайнылар.

Төлкөсура, ҡасып, тағы хөкөм алдына баҫып, өҫтәмә срок алғандан аҙаҡ, яңы урында уйламағанда ҡабат уның менән осрашты. Башлап Григорий таныны һәм, төпкә батҡан күҙҙәрен бәхетле йылтыратып, бығауҙарын шалтырҙатып, уға табан ынтылды.

— Төлкөсура!..

Ныҡ үҙгәргәйне, бирешкәйне Григорий, хатта кәүҙәгә кесерәйеп киткән төҫлө. Шуғалыр инде, Төлкөсура, үҙ исемен ишетеп, тәүҙә аптырап ҡалды, шунан ғына етеһигеҙ йыл элек айырылышҡан тимерсене төҫмөрләне.

— Григорий!..

Улар ҡосаҡлашып, бер аҙ һүҙһеҙ торҙолар, артҡа сигенә төшкәс, Төлкөсура Григорийҙең күҙендә йәш мөлдөрәүен күрҙе, нисектер үҙенең дә күңеле нескәреп китте.

Яйлап һөйләшеп торорға стражниктәр аҙ ғына ла форсат бирмәй ине. Хәл-әхүәл һораштылар ҙа айырылыштылар. Бер нисә көн үткәс кенә улар һөйләшеп ултырырлыҡ ваҡыт тапты. Төлкөсура үҙенең ҡасыуын, тотолоп, ҡайтанан хөкөм ителеүен һәм ошонда килен эләгеүен һөйләне. Берәй ҡайтып, тыуған яғын күреүҙән өмөт өҙмәүен әйтте, Григорий иһә рухи яҡтан да бөтөнләй һынғайны, күрәһең. Өмөтһөҙлөккә бирелгән. Үлгәнсә йөрөлөр инде ошонда, минең ҡабат ул яҡтарға ҡайтып булмаҫ, ти. Ана шул саҡ ул Настяһен телгә алды һәм үҙенең тәүге һәм һуңғы мөхәббәте хаҡында Төлкөсураға ниндәйҙер моң-һағыштарға сума-сума һөйләп бирҙе.

— Һин — йәш кеше, ныҡ кеше, бирешмәҫһең, ҡайтырһың,— тине ул.— Һиңә, донъялағы иң яҡын кешемә, бер үтенесем бар: ҡайтҡас, Белореткә барып, Настяне күр һин. Уға Себер төпкөлөндәге каторга юлдарында ла үлгәнсә уны онотмауымды, уның күҙ ҡараштарын, күңел йылыларын ҡәбергә алып китеүемде һөйләп бирерһең...

Төлкөсура уны йыуатып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә, үҙен ирҙәрсә тоторға димләп ҡараны, тик Григорий ҡулын ғына һелтәне.

— Был яҡты донъяның рәхәтлеген күрергә яҙманы инде. Киләһе быуындар ирәүәнләп йәшәһен ине, исмаһам...— Шулай тине лә, байтаҡ һүҙһеҙ ултырғас, әйтте:— Шулай ҙа ундай замандар киләсәк. Барыбер киләсәк!

Аяҡ-ҡулы бығаулы, битен һаҡал-мыйыҡ баҫҡан был кеше ниндәй замандарҙы күҙ уңында тотоп һөйләгәндер, Төлкөсура төшөнөп етмәне. Шулай ҙа ошо һүҙҙәрҙе әйткәнендә Григорийҙың күҙҙәре ҡуҙҙай баҙлап китеүҙән кеше күңелендәге матур тормошҡа ынтылыу тойғоһон һис нәмәнең дә, хатта мәңге туң Себер ере лә һүндерә алмауын асыҡ аңланы ул.

Ошо осрашыуҙан аҙаҡ ике йыл самаһы уҙғас, Григорий көҙгө япраҡтар ҡаплаған туң ергә йығылып йән бирҙе. Бында кешенең үлеүенә артыҡ иғтибар итмәйҙәр ине, әйтерһең, ул ғәҙәти бер күреңеш. Ошо хәл Төлкөсураның күңелен айырыуса иҙә. Кеше үлә, һәм шуға иҫең дә китмәһен әле!.. Харап бит!..

Төрлө-төрлө кешеләр бар ине каторжандар араһында: башкиҫәрҙәр ҙә, бурҙар ҙа, батшаға ҡаршы ҡул күтәреүселәр ҙә. Уларҙың тормош фәлсәфәһе лә төрлөсә. Нисек кенә булмаһын, Төлкөсура бер нәмәне ныҡ төшөндө: тормошто бөтөнләй үҙгәртеп ҡормай тороп, был ғазаптарҙан ҡотолоу, рәхәт йәшәү мөмкин түгел. Ләкин нисек итеп үҙгәртергә уны? Яңы тормош ҡайһылайыраҡ булырға тейеш? — Был һорауҙарға «политическийҙәр» тип йөрөтәлгән, арыу уҡ уҡымышлы каторжандар ҙа өҙә генә яуап бирә алмай ине...

Шулай ҙа әҙәм балаһы сыҙай икән сыҙағас. Һәр көнө айҙай тойолған оҙон-оҙаҡ егерме йылды иҫән-һау үткәрҙе Төлкөсура. Тәүҙә шул тирәләге алтын приискеһендә эшкә ҡалырға ла уйлағайны ул. Ләкин тыуған яғын һағыныу тойғоһон еңә алманы. Шулай ҙа Уралға табан оҙон юл үткән саҡта, каторжан ҡиәфәтендә ауылға ҡайтып инеү ярамаҫ, тигән уйға килде. Йәкенсенән, унда ата-әсәһенең, ҡустыһының иҫәнлегенән дә өмөт өҙгәйне ул. Шуғалыр инде, Златоустҡа туҡтап, эшкә урынлашҡас та, ауылына хәбәр-хәтер итмәне, баҫылып эшләп тик йөрөнө.

Ул һаман да хыялдарға сумып киткән саҡтарында Сажидәне иҫенә төшөрә, быға тиклемге үткән ғүмерендә уның менән осрашыуҙы иң яҡты хәтирә итеп күңелендә

һаҡлай ине. Тик уның менән ҡабат осрашыуға өмөттәре бөтөнләйгә өҙөлгән. Хәҙер ҡайҙа икән? Ул һөйкөмлө ҡыҙ кемгә насип булып, нисек донъя көтә? Был һорауҙарына ул күрһөнөү менән генә яуап бирә, ә үҙенең тормош ҡороп, әҙәмсә донъя көтөп китерен һис кенә лә күҙ алдына килтерә алмай.

Бына ул хәҙер ваҡыты-ваҡыты менән, ҡайтып, ҡабат аяҡ баҫырына өмөтөн өҙгән ауылында. Ана, Нурош буйында йәйрәп ятҡан урмандары, күкһел тауҙары, ниндәйҙер нур һибеп ултырған ауҡалыҡтары. Тормошон артабан нисегерәк дауам итер Төлкөсура? Ҡайҙа барып морон төртөр ҙә ниндәй эшкә тотонор? — Ҡайһы бер уйфекерҙәре булһа ла, был һорауҙарына өҙә генә әйтерлек яуап тапмаған әле ул.

Төлкөсура ауыр күрһөндө, мыйығын һыпырғыланы һәм, ҡустым көтәлер, тип ҡайтыу өсөн артына боролғайны, күнәктәр көйәнтәләгән бер йәш сырайлы ҡатындың һуҡмаҡтан йылғаға төшөп килеүен күрҙе. Йәшерәктәрҙең береһен дә танымай ине Төлкөсура, ҡайһыларын ғына, ата-әсәләренә сырамытып, шул кешенең балаһылыр, тип уйлай. Бына ҡатын яҡынайғандан-яҡыная, уның кершәндәй алһыу йөҙө, ҡыйғас ҡаштарына тиклем апасыҡ күренә инде. Үҙенә төбәлеп ҡарап торған ят ирҙе күрҙе ахырыһы, аҙымдарын әкренәйтте, Төлкөсураға күптән таныш кеүек тойолған күҙҙәре ҙурыраҡ асылды. Был сая ҡарашты быға тиклем ысынлап та күргәне бар шикелле Төлкөсураның; ана бит, оҙонсараҡ йөҙөнә ыҫпайлыҡ һәм шаянлыҡ өҫтәгән килешле танауы, бешербешмәҫ сейә төҫлө бүлтәйгән ирендәре — бөтә ҡиәфәте таныш. Кем һуң был, кемдең ҡатыны? Был һорауҙарға яуап табып өлгөрә алманы Төлкөсура, ҡатындың биҙрәләре көйәнтәһе-ние менән даңғырҙап ергә төшөп китте.

Туҡта, ниңә улай ҡаушап ҡалды әле ул? Ҡатын биҙрәләрен көйәнтәһенә элеп, башын түбән эйеп, уғата бер ҡыйыуһыҙлыҡ, икеләнеү менән үҙенә яҡынайғайны, Төлкөсураның ҡапыл йөрәге ярыла яҙҙы: Сажидә бит был! Йә хоҙай, өнөмө был әллә күҙенә күренәме?

Шул-шул, тап үҙе! Ана бит, Төлкөсура нисәмә йылдар буйы хыялында йөрөткән зәңгәр күҙҙәр!..

Төлкөсура ҡулдарын һоноп алға уҡталды, ләкин бер аҙым да атлай алманы, әйтерһең, табандары ергә ҡуша ҡаҙаҡланған.

— Сажидә!..

Был һүҙҙе ул әллә бышылдап, әллә ҡысҡырып әйтте— үҙе лә һиҙмәне. Ҡатын өс-дүрт аҙым килеп етер-етмәҫ туҡтаны, ҡараштарын һаман аяҡ остарына төбәгән килеш:

— Мин шул... Төлкөсура,— тине саҡ ишетелерлек итеп.

— Күҙемә күренәһеңме әллә?

— Юҡ... Мин бит бында...

Төлкөсура бер аҙым атланы ла, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмағандай, Сажидәгә төбәлеп ҡараны.

— Һаумы, Сажидә...

— Үҙең нисек йөрөп ҡайттың, Төлкөсура?

— Ҡайттым бына...

— Ярай **шул.**

Сажидә татарса менән башҡортсаны бергә бутап һөйләй ине. Әллә шуға инде, Төлкөсура: «Бында ҡасандан бирле икән?» — тип уйланы. Ул артабан ни әйтергә белмәй торған арала, Сажидә яр буйына барҙы ла, биҙрәләрен сайҡап, һыу алды һәм ҡайтырға боролдо.

— Сажидә... ниңә бында һин?

Сажидә был юлы ҡыйыу ғына күтәрелеп ҡараны, таныш ҡараш Төлкөсураның әллә ҡайһы ерҙәренә үтеп ингәндәй булды.

— Мин бит Уйылдандың ҡатыны. Күптән инде...

Был һүҙҙәр Төлкөсураға Сажидә менән ҡапыл осрашыуҙан да нығыраҡ тәьҫир итте, һеңкәҙәтә һуҡты, бөтөнләйгә телһеҙ ҡалдырҙы.

— Мин һине ҡасан да булһа барыбер тағы осратырмын тип йөрөй торғайным, Төлкөсура. Бына күрештек...

Сажидә шулай тине лә, билдәрен һығылдырып атлап, ҡайтыу яғына ыңғайланы. Төлкөсура иһә һаман иҫәңгерәп тора бирә. «Һы, барыбер осратырмын тип йөрөй торғайным, тиме? Шунса йылдар буйы ул да онотманымы икән ни?.. Туҡта, ниңә Уйылданда ул? Ҡайҙан барып тапҡан уны Уйылдан? Ҡитсе, әле генә күргән-ишеткәндәрем ысынмы әллә хыялый булып бараммы?

Төлкөсура, башын ҡалҡытып, һыу юлына ҡараны. Унда бер кем дә күренмәй ине инде. Был хәл уның әле генә күргәндәренә ышанысын тағы кәметте, Сажидәне ҡабат күргеһе, уның үҙ ауылында йөрөгәнлегенә ныҡлап ышанғыһы килде.

Бына ул, кемделер ҡыуып етергә теләгәндәй, ҡабаланып атлай, башында әллә нисәмә төрлө уйҙар мыжғый. Уйылданға барып инеп, тағы Сажидәне осратһа, ни эшләр? Унда унан әллә нимәләр һорашып, һөйләшеп тороп булмай бит инде... Әллә, ҡайтып, Бикмораттан ғына бөтәһен дә һорашып белергәме? Юҡ, инергә кәрәк Уйылдандарға. Үҙенең дыуамал уйын аҡларға теләптер инде: «Ул атаһының урынына старшина булып ҡалған бит. Мин, төрмәлә, унан ситтә эшләп йөрөп ҡайтҡан кеше, йәүитсә булырға ла тейеш»,— тип уйланы Төлкөсура.

Бына уның алдында таҡтанан эшләнгән таныш бейек ҡапҡа. Асып инде, ихатаға күҙ югертте: элеккенән һис тә үҙгәрмәгән кеүек. Анауҙағы өр-яңы ҙур келәт кенә юҡ ине. Төлкөсура солан алдында итеген ҡырып таҙартты, бүркен рәтләберәк кейҙе лә ишекте тартты.

— Инергә яраймы?

— Әйдә, әйдә, керегез,— ишек эргәһендә ниҙер элеп йөрөгән Сажидә, уға күҙ һирпеп алды, саф татарса яуап ҡайтарҙы.

— Һаумыһығыҙ.

— Һаубыҙ әле,— өлкәнерәк ҡиәфәтле, йыуантыҡ кәүҙәле икенсе ҡатынды Төлкөсура бер ҡарауҙа таныны — Низам мулланың ҡыҙы лабаһа.— Уйылдан, кеше килде, сыҡ!

Төлкөсура Уйылдандың күренеүен ниндәйҙер көсөргәнеш менән көттө: нисек икән ул хәҙер, ҡайһылайыраҡ ҡаршылар? Әлбиттә, Төлкөсураны көтөп ултырмайҙыр, шулай иҫән-һау йөрөп ҡайтыуына эсе көтөрҙәйҙер әле, бәлки...

Әкрен генә, олпат ҡына атлап, Уйылдан килеп сыҡты. Был ҡәҙәрем атаһына оҡшап китмәҫ! Хатта Төлкөсура тертләп ҡуйҙы. Шул уҡ түңәрәк ҡара һаҡал, ҡырма мыйыҡ, башына буҫтау таҡыя кейгән. Кәүҙәгә лә бик ныҡ ҡалынайған. Уға Уйылдан артыҡ ғәжәпләнмәй, тыныс ҡына һынаулы ҡараш ташланы.

— Һаумы, Төлкөсура, иҫән йөрөп ҡайттыңмы? — тип башлап сәләм бирҙе, күрешергә ике ҡулын һондо.

— Һауғынамы... Уйылдан.

Күрешкәндә лә бер-береһенә һынаулы ҡарауын дауам итте улар, әйтерһең, ғүмерҙәрендә тәү тапҡыр осрашҡан кешеләр.

— Әйҙә, үтәйек теге яҡҡа,— Уйылдан үҙе алдан юл башланы.

Төлкөсура үҙҙәренә ҡыҙыҡһынып ҡарап торған Сажидәгә күҙ ташланы ла унық артынан эйәрҙе. Төлкөсура ултырғас, Уйылдан доға уҡып битен һыйпаны, һаҡалын һыпырып ҡуйҙы.

— Шулай итеп, йөрөп ҡайттым, тиһең инде, Төлкөсура.

«Был бөтөнләй аҡһаҡалдарса ҡылана»,— тип уйлап алды Төлкөсура, хатта унық үҙен уғата тыныс тотоуына аптырай төштө.

— Ғүмер булғас, ҡайттым инде... Бына әле ситтән әйләнеп ҡайтыу йолаһын үтәйем тип ингәйнем, күренеп сығырға кәрәк бит. Каторга срогын бынан дүрт йыл элек үк тултырғайным, унан аҙаҡ заводта эшләп йөрөнөм.

— Әле күреп китергә генә ҡайттыңмы әллә бөтөнләйгәме?

— Нисек булыр, әлегә әйтә алмайым.— Төлкөсура үҙе менән Уйылдан араһында йырып сыға алмаçлыҡ боҙ кәртә тороуын ап-асыҡ һиҙҙе.— Ярай, ҡайтайым әле, әсәйемдең өсөн уҡытып сығарырбыҙ тигәйнек.— Урынынан торҙо һәм әүәлге дыуамаллығын тыя алмай ҡапыл ғына һорап ҡуйҙы: — Тәүге ҡәйнәцдең өсөнә бармайһыңмы һуң?

Тура ҡарап бирелгән был һорау Уйылдандың тыныслығын бермә-бер боҙҙо, ҡарашын ҡайҙа төбәргә белмәй, тегеләй-былай ҡаранды.

— Әллә инде... Теге... бер кешенең килерен көтөп тора инем бит әле... Арыу булыр ине лә...

— Ярар, Уйылдан, миңә әйтмәнеләр ҙә, тип үпкәләтмәç өсөн генә өндәшкәйнем. Хуш.

Уйылдан унық артынан сыҡманы, урынынан ҡуҙғалмай ултырып ҡалды. Солан ишеге алдында тап булған Сажидә Төлкөсураға ситкәрәк тайшанып юл бирҙе, зәңгәр күҙҙәрен тултырып ҡараны:

— Ҡайһылай тиҙ киттең, Төлкөсура ағай.

— Киттем шул... Хуш булып тор, Сажидә...

— Хуш...— Сажидә башын түбән эйҙе.

## II

Кеше килерен көтәм, тип дөрөçөн әйткәйне Уйылдан. Ҡараңғылатып, уға Роман килеп инде. Алғы өйҙә йөрөгән ҡатындар менән:

— Һаумыһығыҙ, матур килендәр! — тип геүләп-шаулап иҫәнләште, йоҡаҡ пальтоһы өҫтөнән кейгән плащын сисеп, ҡаҙаҡҡа элде. Уңарсы төпкө өйҙән Уйылдан килеп сыҡты.

— Һай, Роман Артемьевич, нисек килеп еттең? Әйҙә, әйҙә теге яҡҡа, шунда сисенерһең.

— Юл бик бысраҡ, Вилдан Ҡотлич (Уйылданға шулай өндәшергә ғәҙәтләнгән хәҙер Роман), атым ике-өс тапҡыр тайып йығыла яҙҙы. Алғы аяғының бер дағаһы төшкән икән дә.

— Хәҙер дағаһыҙ атта йөрөргә ярамай беҙгә,— тине Уйылдан, төпкө өйгә ингәс, уға мәғәнәле ҡарап, ниндәйҙер кинәйә менән.— Төлкөсура минән әле генә сығып китте.

Төлкөсураның ҡайтыу хәбәрен Роман да ишеткәйне, шуға күрә ҡыҙыҡһынып һораны.

— Шунан, нисегерәк күренә? Нык үҙгәргәнме?

— Һис тә бирешмәгән кеүек шайтан алғыры нәмә. Йәнәһе, миңә йәүитсә булырға кергән. Ә үҙе, тәүге ҡәйнәндең өсөнә бармайһыңмы, тип тел сарлай.

Роман аптыраған һымаҡ итте, шунан көлөп ебәрҙе.

— Ну уҫал әйткән!..

— Һин көләһең әле... Сажидә! Ашарға әҙерме? Беҙгә берәр каса бал һалып бирә торһаңсы... Срокты тултырғас, заводта эшләп йөрөнөм, ти. Беҙҙең көлкөнө яңыртыуы ла бар әле уның.

— Шулай, тиһеңме? Ҡурҡма, Вилдан Ҡотлич, әллә ҡайҙа бара алмаҫ. Шулай ҙа өйәҙ полиция идаралығына, бына шундай-шундай каторжан ҡайтты, тип донесение ебәреп ҡуй. Саҡ ҡына яңылышыраҡ баҫыуын һиҙгәс тә, беҙ уны әүәлге урынына оҙатырбыҙ.

Сажидә ике каса менән бал килтерҙе. Роман касаны алғанында, уға тишә яҙып ҡараны. Һылыу ҡатынды килгән һайын күреп туя алмай ул, шаян һүҙҙәр ҙә ысҡындырғылай, ләкин Сажидә үҙен уның менән бик ҡоро тота.

— Артабан ни эшләргә уйлай икән? — тине Роман, бер тына бал һемергәс.— Һөйләнмәнеме?

— Ҡылын тартып ҡарағайным, асығын ғына әйтмәне. Ул бит һинең дуҫың ине, бәлки, һиңә эш һорап барыр.— Уйылдан Романға һынаулы ҡараны.

— Был мәсьәләлә икебеҙгә лә уйлап эш итергә кәрәк, Вилдан Ҡотлич. Уның бында тороп сыҙамауы ла бар әле. Әгәр ҡала икән, мин уны эшкә ала алмамдыр. Миндә

кешеләр бергә тупланып эшләй бит, улар араһында һәр төрлө ҡотҡо таратыуы еңел. Уға үҙе айырым ғына йөрөп эшләрҙәй эш табаһы ине. Һаҡ булырға кәрәк беҙгә, һуңғы ваҡыттарҙа илдә тыныслыҡ китеп тора, ҡалаларҙа эш ташлау, сыуалыштар көсәйҙе. Үҙебеҙҙең тирәгә ундай рухтың таралыуына юл ҡуйырға ярамай.

— Уны ауылдан ҡыуып ебәреп тә булмай бит әле. Дөрөҫөн генә әйткәндә, уның ҡайтыуы бөтә тыныслығымды алды минең, Роман Артемьевич. Атайымды үлтереп кенә миңә булған үсе ҡандымы икән уның?

— Ҡурҡаһыңмы? Улай шәмтерәп тә төшмә. Әгәр был хәлендә һиҙеп ҡалһа, ул һине тиҙ үк ауыҙлыҡлап менәсәк. Моғайын, миңә уны күреп һөйләшергә тура килер. Шул саҡта уға һинең үс тотмауыңды әйтермен, үткәндәрҙе оноторға кәңәш бирермен. Әлбиттә, ул үҙһүҙле, уҫал кеше. Атай ҡарт бында булһа, мин уны һәр төрлө бәләнән һаҡлау өсөн бөгөндән үк Өфөгә оҙатҡан булыр инем.

— Атайың ни хәлдә һуң әле, бирешмәйме?

— Ю-у-ҡ, көн дә тиерлек банкеттәргә йөрөй, һәр төрлө йыйылыштарҙы ҡалдырмай. Сана юлы төшкәс, был яҡҡа килергә уйы бар ине, былай булғас, килмәҫкә ҡушып хат яҙам инде.

Роман касаһындағы балды эсеп бөтөп ҡуйҙы, аҙыраҡ уйланып ултырҙы.

— Һин үҙеңә эшкә ал уны, Вилдан Котлич,— тип көтөлмәгән фекер әйтте ул.— Әйтәйек, көтөүсе итеп. Йөрөһөн әйҙә яланда япа-яңғыҙы ҡаңғырып. Ҡышҡылыҡҡа тай-тулағыңды аҫырай торған утарға оҙат. Был, бер яҡтан, һинең уға үс һаҡламауыңды күрһәтер, икенсе яҡтан, һәр аҙымы күҙ алдында. Ышаныслыраҡ көтөүсеңде артынан күҙәткеләргә лә ҡушһаң, әллә ҡайҙа бара алмаясаҡ ул.

— Их, Роман Артемьевич,— Уйылдан түңәрәк һаҡалын усланы,— әгәр мөмкин булһа, мин уны бөгөндән юҡ итер инем, ә һин эшкә ал, тиһең.

— Был бит үҙенә күрә хәйлә, шуны аңламайһыңмы ни? Әйттем бит, бәләкәй генә сәбәп килеп сығыу менән, беҙ уны үҙ урынына кире оҙатасаҡбыҙ.

— Уныһы шулай ҙа ул... Ярар, уйлашып ҡарармын әле.

Роман сиртһәң ҡаны сығырҙай ҡып-ҡыҙыл сикәһен тызып алды, бармаҡтары менән етек сәсен тараны.

— Мин һиңә бер кәңәш менән килгәйнем әле, Вилдан Котлич.— Уйылдан уға һағайып ҡараны.— Хажы ауылына барып ҡайтайыммы икән әллә тигәйнем.

— Ни йомош менән?

— Тағы бүрәнә ҡырҡыу сезоны башлана бит. Эшселәр күберәк кәрәк ине. Тик анауы йәй көнө булған ҡыялҡынан аҙаҡ шул ауыл халҡынан шикләнәм.

— Һуң? Ни әйтмәксе итәһең?

— Һин ундағы халыҡты беләһең бит инде. Ышаныслыҙ кешеләрҙең исемдәрен яҙып бирәһеңме әллә, тим. Ундайҙарын яҡын юлатмаҫҡа ине. Бәләнән баш аяҡ...

Уйылдан һаҡалын семеткеләп, уйланып ултырҙы.

— Һы... Хажыныҡыларҙы беләм инде мин былай. Тик хәҙерге заманда кемдең эсендә ниндәй уй ятыуы хоҙаның үҙенә лә ҡараңғылыр.

— Әйе, заманалар ҡатмарлаша бара... Шулай ҙа, Вилдан Котлич, һин шигең булған кешеләрҙе әйт әле.

Уйылдан тороп, аяҡтары һырлап-кирткәсләп яһалған ҙур өҫтәл янына барҙы. Тартмаһын асып, ҡәләм, ҡағыҙ алды ла, һалынҡы иренен бөрөштөрөп уйлана-уйлана, яҙырға тотондо. Унлап исемде ҡағыҙға теркәгәс, уны Романға һондо.

— Бына, ал. Әммә ләкин был яҙыуҙы кеше күҙенә күрһәтеп ҡуйма.

— Уныһы инде әйтмәһәң дә асыҡ. Рәхмәт.— Роман яҙыуға күҙ йөрөтөп сыҡты, бөкләп, пинжәгенең түш кеҫәһенә тыҡты.

Уйылдан тыштан ҡарауға Роман менән бик һәйбәт мөғәмәләлә булған һымаҡ күренһә лә, рус баяры йыш ҡына уның эсен көтөрҙәтә. Ана бит, тағы эшселәр йыя. Ә Уйылдан үҙ эштәрен эшләтергә мәле-мәле менән кеше таба алмай. Һуңғы йылдарҙа көнлөк хаҡының байтаҡ күтәрелеүе лә ошо Роман арҡаһында. Тик бер әмәл дә ҡыла алмай ине ул арҡаһын Норош буйында ныҡ-ҡа терәгән был баяр менән. Ҡайһы саҡта ярҙамы ла тейә. Быйыл йәй Хажы ауылының халҡы ғауға күтәргән саҡта ул ярҙам итмәһә, эштең әллә нимәгә олғашыуы бар ине. Шуға күрә, ҡайһы берҙә эсе күмһеһә лә, бергә-бергә йәшәүҙән башҡа сараһы юҡ...

Уйылдандың бурһыҡтай һимеҙ өлкән ҡатыны туйтаңлап атлап ит, һурпа килтерҙе, касаларға бал өҫтәне.

— Иллә-мәгәр донъяның рәхәтендә йөҙөп йәшәйһең, Вилдан Котлич,— тип, ул сығып киткәс, хәйләкәр йыл-

майҙы Лапшин.— Бер ҡатының ҡуйҙай һимеҙ, икенсеһе ҡойоп ҡуйған һылыу. Харап бит, әй!

— Бына бынау балды эскәс, артынан ит ҡапһаң, арыу булып ҡала бит. Был икәү ҙә шуның шикеллерәк инде: береһе — эсергә, икенсеһе — ҡабырға... Хи-хи-хи...

— Ха-ха-ха! — Роман һыны ҡатып көлдө, хатта күҙенән йәштәре атылып сыҡты.

* *
*

Байҙар шулай үҙ кеҫәләрен нисегерәк итеп ҡалынайтыу яйын самалап, көлә-көлә йәшәһәләр ҙә, Ҡаратауҙың хәле мөшкөл ине. Тормош баҫыуҙан, етешһеҙлектән миңкәгән халыҡ донъя яңыртыу тураһында бик үк ҡайғырта алмағанлыҡтан, иҫкергән өйҙәр ергә йылдан-йылға нығыраҡ һеңеп, һаман ҡотһоҙлана бара. Етмәһә, йылы ауыр килеп, ашанты ҡиммәтләнде. Бер бот он алыу өсөн ай буйы бил яҙмай эшләргә кәрәк. Ә бер бот он ишле ғаилә өсән нимә генә инде?

Улай-былай юнь-юл итеп, нисек тә астан үлмәү сараһын күрә халыҡ. Уҫалыраҡтар, ауырлыҡҡа сыҙамайынса, байҙарҙы, муллаларҙы, батшаны һүгәләр, хатта аллаға ла тел тейҙерәләр. Тик шунан ары китә алмайҙар. Уларға был ғазаптан ҡотолоу юлын өйрәтеүсе юҡ. Уларға бөтә ғүмерҙәре бына шулай осон-осҡа ялғай алмай, интегеп, ҡаңғырып үтер кеүек тойола.

Ҡайһы саҡта был яфа-ыҙалар йоҙроҡ булып төйнәлә һәм кемгәлер һуғырға ынтыла. Ай-һай, бындай саҡта яман йоҙроҡ был!

Роман телгә алған Хажы ауылындағы боланың да, бик ҡапыл ғына килеп сыҡҡан һымаҡ булһа ла, нигеҙе ана шундай ине: халыҡтың күптән йыйылып килгән асыуы, яҙғы ташҡын алып киткән быуа кеүек, шарлапярһып йырылды.

Бесән бөтөп килгән мәл ине. Халыҡ аҙаҡҡы бакуйҙарын йыйып күбәләй, кәбәнен ҡоя. Иртәрәк бесән еткергәндәр ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә: өй тирәһен, кәртә-ҡураһын нығыта, көҙгө юл өҙөгөнә утын алып ҡалырға тырыша.

Бына шулай һәүетемсә генә көн итеп ятҡан Хажыға ят бер әҙәм килеп төштө. Арыу ғына кейенгән, өҙә баҫып атлауынан да, үҙенә осраған кешене туҡтатып:

— Старостаның өйөн күрсәтмәссеңме, сеңлем? — тип был яҡтағынан бүтәнсәрәк һөйләшеүенән дә уның ят кеше икәнлеге һиҙелеп тора ине.

Үҙе бик үтеп сыҡҡан һымаҡ та күренә тағы: күҙе-башы уйнап тора.

Старостаға барып ингәс, ул иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, үҙен:

— Рөстәмхан, — тип таныштырҙы һәм: — Мин бында бик ҙур йомош менән килдем. Бына,— тип, старостаның алдына яҙыу сығарып һалды.

Староста русса яҙыуҙы бөтөнләй белмәй ине, шуға яҙыуҙы тегеләй-былай әйләндергеләне, ыҡ-мыҡ итте, ахырҙа һораны:

— Нимә хаҡында һуң был яҙыуың?

Рөстәмхан түрәләргә ярамһаҡланып, еңел-елпе эш башҡарып, тамғанды ялап, эләккәнде өҙөп йөрөүсе кеше ине. Бынан аҙна элгәре уны крәҫтиән эштәре буйынса өйәҙ присутствиеһенең председателе саҡыртып алды.

— Һиңә төшөмлө генә бер кәсеп сығып тора,— тине председатель уға.— Ҡирәй волосена барып килмәйһеңме?

— Быға тиклем һеҙҙең ҡушҡан эштән баш тартҡаным юҡлығын беләһегеҙ, председатель әфәнде. Һеҙ әйтһәгеҙ, йәһәннәмдең үҙенә лә китергә мөмкин, — тип юхаланды Рөстәмхан.

— Батша хәҙрәттәренә оҙаҡ йылдар хеҙмәт итеп, хәҙер үҙебеҙгә ҡайтҡан майор Осипов әфәндегә унан ер бүлергә кәрәк. Матур ғына урманы ла, яланы ла булһын. Бына уның губернатор ғали йәнәптәре ҡул ҡуйған рөхсәт ҡағыҙы.

Майор Осипов тигәне — Стәрлетамаҡта бынан байтаҡ йылдар элек өйәҙ хәрби командаһының начальниге булып торған Осиповтың улы ине. Ул Роман Лапшиндең — йәшлек дуҫының — Ҡирәй урмандарын ҡырҡтырып кесә ҡалынайтыуын, теттереп йәшәүен белә һәм тынғыһыҙ хәрби хеҙмәттән аҙаҡ үҙе лә донъя рәхәтен күреп ҡалыу яйын самалай ине. Осиповтың урман ҡырҡтырып һатыуға барымы ла, уйы ла юҡ. Тау яғында йәй көндәре йәшәү өсөн бер имение кеүек нәмә төҙөтөп, ҡалала шул урмандан ташытып, һәйбәт ҡарағай бүрәнәнән йорт һалдырып ҡуйһа — еткән.

Осипов крәҫтиән эштәре буйынса өйәҙ присутствиеһе председателе тәҡдим иткән кеше — Рөстәмхан менән

юлға сыҡты. Кирәй волосенең ерҙәренә килеп ингәс, сәсеп үҫтергәндәй урмандарҙы күреп:

— Бында йәшәргә була! — тип, алдан уҡ ожмах рәхәтлеге тойоп ыуаланды.

Тура Романға барып төштө ул. Йәшлек дуҫы менән ерҙе ҡайһы тирәнән алыу, эште нисегерәк ойоштороп ебәреү тураһында кәңәшләшергә уйланы. Роман уны көтөп алған ҡунағындай ҙур ихласлыҡ менән ҡаршыланы, һый-хөрмәт итте. Тик Осиповтың ниндәйерәк ниәт менән йөрөүен белгәс, уйға ҡалды. Әлегә майор, йәй көндәре килеп йәшәү өсөн генә имение һалдырам, ти ҙә, тора-бара нәфсеһе ҡотороп, урман һатып алып, шуны ҡырҡтырыу, ҡыуғын ҡыуҙырыу кәсебенә тотоноп китеүе лә бар бит әле. Ул саҡта инде эргәңдә генә конкурент пәйҙа булырын көт тә тор. Ә Романдың бындай күрше менән йәшәгеһе килмәй: урман һатып алыу ҙа, эшсе етештереү ҙә ҡыйын буласаҡ. Шуға күрә ул тәүҙә хатта:

— Нисәмә йылдар ситтә ҡаңғырып йөрөгәндән аҙаҡ, һинең урынында булһам, Стәрлетамаҡта ла түгел, Өфөнән сыҡмай ғына йәшәп ятыр инем мин. Юҡ менән ҡыялаһың. Имение төҙөүҙең мәшәҡәттәрен белеп бөтмәйһеңдер шул әле,— тип Осиповты был уйынан бөтөнләйгә төңөлтөргә лә самалап ҡараны.

Осипов аумаҡай кеше түгел ине.

— Ни булһа ла, тотоноп ҡарайым әле,— тип үҙ уйынан ҡайтауламаны.

Шунан инде Роман, саҡ ҡына фекер төйнәп алғас, Осиповты нисек тә үҙенән ситкәрәк ебәрергә, ерҙе был тирәнән — Норош буйынан алыҫтараҡ бүлдертергә кәрәк, тигән уйға килде. Бер көндө иртәнсәк:

— Һиңә иң яҡшы урындан ер бүлдертәм. Старшина менән һөйләшеп ҡайтам әле,— тип Ҡаратауға сығып китте.

Уйылданға ул эштең ниҙә тороуын төшөндөрөп бирҙе.

— Норош буйына яҡын юлатмайыҡ. Бик нәфселе, бәхил кеше,— тип һүҙен осланы.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Уйылдандың да күңеле болоҡһоно. Әле ошо Лапшиндәре арҡаһында күпме мәшәҡәттәр тыуа тора. Осиповы ла килеп ҡыҫылһа, эшкә ҡушыу өсөн бөтөнләйгә кеше таба алмауың бар. Юҡ инде, китһен әйҙә ана егерме саҡрымдағы Хажы ауылы тирәһенә. Роман, ултырышына ҡайтҡас:

— Эш мин уйлағанса уҡ барып сыҡманы,— тине Оси-

повҡа, борсолған ҡиәфәттә.— Һиңә ерҙе үҙемдең тирәнән бүлдертергә ине. 1898 йылғы законды беләһеңдер инде? Юҡмы ни? Ул закон буйынса хәҙер бөтә ерҙәр ҡаҙна һәм йәмәғәт урмандарына бүленә. Минең тирә ҡаҙна еренә керә икән. Мин һиңә ҡаҙна еренә яҡын юларға кәңәш бирмәйем, әллә ни мәшәҡәттәр тыуыуы бар,— тип үҙ хәйләһен осланы.

Донъя эштәре менән булашып өйрәнмәгән Осипов ер бүлергә үҙе барып йөрөмәне, Рөстәмханды ғына ебәрҙе.

Бына әле ул Хажы ауылының русса әлепте таяҡ тип тә белмәгән старостаһы ҡаршыһында ултыра һәм, уға мыҫҡыллы ҡарап: «Алдыҡ яҙыу тотторол, тишек шомапға ултыртыу ҙа бер ни түгел икән һине»,— тип уйлай. Үҙе эштең ниҙә торғанын төшөндөрөп бирҙе. Уйылдандың өйрәтеүе буйынса:

— Һеҙҙең ауылдан йыраҡ түгел Шәшкеле йылғаһы буйында Бешәлеялан тигән урын бар икән. Старшинағыҙ Уйылдан әфәнде ерҙе шунан бүлергә ҡушты, — тип һүҙен бөтөрҙө.

Староста ике кеше алып, майорға ерҙе Бешәлеяландан бүлде. Унда Шәшкеле йылғаһы аръяғындағы Ҡаратау ерҙәре лә, бирьяҡтағы Хажы урмандары ла керҙе.

Был хәл иртәгеһенә ике ауыл халҡына ла мәғлүм булғас, һүҙҙән һүҙ сығып, шау-шыу ҡупты.

— Ул майорға ерҙе ниңә йәмәғәт еренән бүләләр?! Бирһендәр ана ҡаҙна еренән!

— Беҙгә әйтеп тороу ҙа юҡ, исмаһам!..

— Әйтте, ти. Оҙаҡламай ана шул майорға бил бөгөп эшләй башларһың әле...

— Уныһы, Роман кеүек, тағы урмандарҙы ҡыра башлаһа, ят та үл! Бөлдөрәләр бит!

Һүҙ, ҡуйыра барып, ҙурға юлғашты. Ҡаратауҙыҡылар менән Хажы халҡы һүҙ беркетеп, яу булып Шәшкеле буйына сыҡтылар ҙа Осиповҡа бүленгән урманды ҡырырға тотондолар. Ярһып эшләне кешеләр. Ҡырҡылған ағас утын буламы, бура бурауға йәки көрәк сабыуға китәме — уйлап та ҡарау юҡ, ҡырҡа ла ҡырҡалар.

Был хәлде ишетеп, Уйылдан унда тәүҙә ике ауылдың да старостаһын ебәреп ҡараны. Ҡыҙған, ярһыған халыҡ улар менән һөйләшергә лә теләмәне. Бешәлеяланға үҙе китте Уйылдан. Ул барғанда өсөнсө көн алһыҙ-ялһыҙ эшләгән ике ауыл халҡы майорға бүленгән урмандың яртыһын ҡырҡып бөткәйне инде.

— Ағай-эне, һис тә ғәмәлгә һыймаç эш эшләйһегеҙ бит. Закон алдында яуап бирергә тура килеүе бар,— тине Уйылдан, бер тирәләге кешеләрҙе йыйып алып.

— Кәрәк икән,— бирербеҙ! — тине өлкән йәштәрҙәге ағай, ҡулындағы үткер балтаһын уйнатып.— Ниңә ул майорға ерҙе ҡаҙна межаһынан ары бүлмәйҙәр?!

— Етмәһә, халыҡ менән һөйләшеү ҙә юҡ!

— Урлап бүлгәнһегеҙ!

— Йәмәғәт, майорҙың гөбөрнатыр ҡул ҡуйған яҙыуында ошо ер күрһәтелгән. Гөбөрнатыр хәҙрәттәренә ҡаршы килеп булмай бит. Ул саҡлы хаяһыҙ ҡыланмағыҙ, туҡтатығыҙ был эште,— тип уларҙы һаман тыймаҡсы итте Уйылдан.

Шул саҡ Ҡотдос алғараҡ сығып баçты.

— Беҙҙе бер алдағайны инде атайың,— тине ул, бик уçал ҡарап.— Хәҙер һин беҙҙе ыштанһыҙ ҡалдырырға уйлайһыңмы? Барып сыҡмаç! Лапшинден Норош урмандарын ҡырыуы ла еткән!

— Ҡотдос ҡорҙаш,— тине Уйылдан тауышын күтәрмәй генә,— ярай, шул ҡәҙәрем урманды ҡырҡып ҡуйҙығыҙ, ти. Кем ташып ала һуң уны? Файҙаһыҙға ятып серейәсәк бит ул.

— Ҡайғырма, кәрәкләһен ташып та алырбыҙ!

— Ятып сереһә лә, үҙ хәләл көсөбөҙ! Барыбер майорға бирмәйбеҙ!

— Әйт ул майорыңа: яҡын юлаһа, саңын ҡаҡҡылап, генерал яһап ҡайтарырбыҙ!..

Аңланы Уйылдан: был ярһыған халыҡ менән яңғыҙы ғына бер эш тә ҡыра алмаясаҡ. Ҡайтып китте. Волость ерендә шундай тәртипһеҙлеккә юл ҡуйған өсөн өйәҙҙә үҙенә һүҙ тейерен дә белә ине ул. Шуға күрә, бәләне үҙенән ситкәрәк ебәреү өсөн, Уйылдан мировой судья исеменә, ғауға күтәреүселәрҙе яуапҡа тарттырыуҙы һорап, ҡағыҙ яҙҙы. Күп тә үтмәне, мировой судьяның хөкөм ҡарары килеп тә етте: ике ауыл халҡына ла, урман ҡырҡырға сығыусыларҙан йыйып алыу өсөн, бишәр йөҙ һум штраф һалынғайны.

Был хәбәрҙе ишеткәс, халыҡ яңынан ғауға күтәрҙе.

— Быға тиклем түләгән һалым етмәгәнме?!

— Үҙ еребеҙҙән ҡырҡҡан ағас өсөн штраф түләмәйбеҙ!..

Хажы ауылының ике ире:

— Һинең арҡаңда килеп сыҡты был яфа,— тип старостаны арыу уҡ ҡаҡҡылап та алған хатта.

Эш шулай ҙурға киткәс, Уйылдан Романға барып кәңәш итте. Халыҡтың шулай туҙыныуы Лапшинде лә ныҡ борсой ине. Был хәтәр тулҡындың уның эшселәре араһына ла килеп етеүе бар. Шуға күрә берәй сараһын күреп, боласыларҙың түбәһенә сүгәләтә һуғырға кәрәк, тигән фекергә килде ул. Шунан Уйылдандан өйәҙ полиция идаралығы исеменән яҙыу яҙҙырып алды ла Стәрлетамаҡҡа, башҡа йомоштарым да бар ине, тип үҙе китте.

Дүрт көн үтеүгә, бер төркөм полицейскийҙәр алып, урядникте эйәртеп, Ҡаратауға өлкән пристав килеп төштө. Уйылдан иһә хәйләгә һалышты: майорҙың урманын ҡырҡырға сығыусылар исемлеген алдан әҙерләп ҡуйғайны; өлкән приставҡа шуны бирҙе лә, сирләп тороуына һылтанып, был эштә артабан ҡатнашмаç булды. Һуңғы ваҡытта бик уçалланған халыҡ менән араны ҡырҡыулаштырғыһы килмәй ине. Шунса полицейскийҙәре менән өлкән пристав үҙе лә теләгәнен эшләй алыр.

Өлкән пристав майор урманын ҡырҡа сығыусыларҙы берәм-берәм саҡырып һөйләште, янаны. Ҡайһы бер ҡурҡмайыраҡ һөйләшеүселәрҙе ҡамсы менән ярҙырҙы, Ҡотдосто иһә келәткә яптырып уҡ ҡуйҙы. Шунан урядник дүрт полицейский менән штраф йыйыу өсөн өй беренсә сығып китте. Әлбиттә, һәр кеше башына төшкән дүрт һум егерме тин штрафты түләү өсөн күптәрҙең аҡсаһы юҡ ине. Полицейскийҙәр быңдайҙар менән күп һөйләшеп торманы, өйҙә ниндәй арыуыраҡ әйбер бар, һыпыра һуғып алып, тышта әҙерләп ҡуйылған ылауға тейәнеләр. Көн буйына хәтәр ғауға булды: ҡайҙа илаған-һыҡтаған, ҡайҙа әрләшкән-ҡысҡырышҡан...

Иртәгеһенә өлкән пристав полицейскийҙәре һәм урядник менән Хажы ауылына киткәс, кешеләр ҡапыл иçенә килгәндәй булып, үткән хәл тураһында һөйләшә, фекер туплай башланылар.

— Өйөмдә ятып йоҡлар ҡаралдым ҡалманы, — тине берәүһе, әсенеп.

— Минең башмаҡты етәкләп алып сыҡтылар. Дүрт тәңкәлек кенәме ни ул? — тип үкенде икенсеһе.

Урам уртаһында халыҡ күбәйгәндән-күбәйҙе, һөйләшеүҙәр киçкенерәк төç ала барҙы.

— Көпә-көндөҙ талау бит был!..

— Беренсе тапҡырмы ни!..

— Уйылдандың этлеге был!..

— Хәҙер ана Хажы ауылын таларға киттеләр!..

— Ир булып, үҙ донъябыҙға үҙебеҙ хужа түгел. Ғәрлек бит!..

— Әйҙәгеҙ, старостаның өйөнә!.. Беҙҙең әйберҙәрҙе уның келәтенә тултырҙылар.

— Ҡиттек!..

— Ҡүрәләтә биреп ебәрмәйек!..

Халыҡ төркөмө староста өйөнә табан юнәлде. Бикморат та ошонда. Ауырыу әсәһенең өҫтөнән берҙән-бер юрғандарын тартып алып сығып киткәйнеләр, шуны алып ҡайтырға уйланы. Унан һуң Ҡотдостоң самауырын алғандар, үҙе келәттә бикле ултыра, шуны ла алып барып бирер.

Ихатаһына баҫып ингән кешеләрҙе күргәс, староста, соланына сығып:

— Йәмәғәт, ни ҡыланаһығыҙ?! Баструкка ултырғығыҙ киләме ни? — тип ҡарағайны, халыҡ:

— Имен сағыңда күҙҙән юғал! — тип үкергәс, йәһәт кенә өйөнә инеп боҫто.

Келәт ишеген ҡайырып асып, әйберҙәрен, һарайға бикле малдарын бик тиҙ таратып алып бөттө халыҡ. Шунан яңы һүҙ ҡупты:

— Әйҙәгеҙ Хажыларға ярҙамға, ағай-эне! Ниңә уларҙы талатабыҙ әле!

— Эйе шул. Күрше хаҡы — тәңре хаҡы!

— Киттек!

— Урманды бергә ҡырҡтыҡ, бергә яуап бирәйек!

Хажыға барырға теләүселәр байтаҡ йыйылды. Әсәһе ауырып ятһа ла, асыу, үс тойғоһо ярһытҡан шауҡымдан ҡотола алмайынса, Бикморат та атын эйәрләне. Хажыға табан елеп сығып киттеләр.

Хажы халҡы иһә Ҡаратауҙар һымаҡ полицейскийҙәрҙән өркөп ҡалмағайны. Староста берәм-берәм саҡырта башлағас, унда барыуҙан да, штраф түләүҙән дә баш тарттылар. Урядник полицейскийҙәр менән өйҙәренә баҫып инә башлағас, ауылда хәтәр бола ҡупты.

Ҡаратауҙыҡылар килеп еткәндә, урам тулы халыҡ ине. Һыбайлы полицейскийҙәр, ҡамсыларын, алтатарын болғап, ары-бире саба, ярһыған, асыуҙан йөҙҙәре буҙарған кешеләр ҡысҡырыша.

— Хәҙер шул көнгә ҡалдыҡмы?!.

— Йәшәргә рәт бөттө!..

— Арт һабаҡтарын уҡытырға кәрәк!..

Ҡаратауҙар килеүе янып торған дегет баҙына бер йөк туҙ өҫтәгәндәй булды.

— Беҙҙе лә талап киттеләр!..

— Бер нәмә лә бирмәгеҙ!..

— Ҡыуырға кәрәк ауылдан!..

Ҡешеләр әллә ни ике арала һәнәк, күҫәк, балта менән ҡоралланып алдылар ҙа полицейскийҙәр мыжғышҡан старостаның өйө эргәһенә юнәлделәр.

Өлкән пристав был саҡлы көскә ҡаршы тора алмаҫын һиҙгәйне. Йәһәт кенә атына атланды, алтатарынан шарт та шорт һауаға атты. Халыҡ һаман ябырылып килгәс, старостаның артҡы ҡапҡаһына йомолдо. Урядник тә, полицейскийҙәр ҙә, аттарын ҡайыҙлай-ҡайыҙлай, уның артынан эйәрҙе. Ҡыҙып алған халыҡ, ҡулында ни бар — шуны баш осонда болғап, ҡый-ҡыу һалып, урман ситенә тиклем уларҙы баҫтырып барҙы.

Ғүмерҙәрендә тәү тапҡыр еңеү тантана итһә лә, был эш эҙһеҙ генә үтеп китмәне. Аҙна самаһы уҙғас, пристав бер рота ғәскәр менән килеп төштө. Хажынан өс, Ҡаратауҙан ике кешене ҡулға алдылар. Уларҙы өс-дүртәр йылға хөкөм иткәндәр. Ә урядник алып киткән Ҡотдос һәм тағы ете кеше Кинйәкәү бастругында егерме көн ятып, ябығып, хәлһеҙләнеп ҡайтып йығылды.

Шулай ҙа ике ауыл халҡының бергәләшеп күтәрелеүе файҙа ла бирҙе. Майор ер бүлдереү өсөн ҡабат килеп йөрөмәне. Мировой судья иһә штраф түләтеү тураһындағы тәүге ҡарарын Шәшкеле йылғаһы буйында ҡырҡылған ағасты хөкүмәткә алырға, тигән яҙыу менән алмаштырҙы. Быныһына кешеләр артыҡ борсолманы. Улар Лапшин Норош буйы урмандарын аяуһыҙ ҡырыу өҫтөнә кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ағас ҡырҡыуҙың ҡасан да булһа ер биҙәге уңыуға ғына түгел, яратып эскән йылғаларының да ҡороуына килтерәсәген бик үк уйламайҙар ине шул...

## III

Тағы бер таң атты. Ҡаратау ауылы таң атҡан мәлдәрҙә генә була торған сәйер тынлыҡта ойой.

Төлкөсура уянды. Йоҡоһо осоп, әрбәк-һәрбәк ҡараңғылыҡҡа төбәлеп, ҡыбырламай байтаҡ ятты. Күкрәген ниҙер ҡыҫҡан, үңәрәшенә ниҙер тығылған кеүек. Әйтерһең, өйҙө ҡараңғылыҡ түгел, әллә ниндәй ҙур ауыр ҡыҫ-

ҡыс бөрөп алған. Ошо хәлдән ҡотолоу уйы менән, ул, ҡустыһын уятмау өсөн, ипләп кенә тороп, тышҡа сыҡты.

Бөгөн аяҙыҡкан. Офоҡтағы ҡыйғас-ҡыйғас аҡһыл болоттарҙың ситтәрен көмөшкә ҡаймалап, таң яҡтыра. Хәҙер инде ҡоштар һайрашыр саҡ үтһә лә, көҙҙөң үҙ матурлығы бар. Көҙ ағастарға төрлө төҫтәге буяуҙарын һипкән. Һауа шундай саф, иртәнге һалҡынлыҡ бөтә тәнде рәхәт итеп ҡытыҡлай, тороп югерге килә. Тынлығы һуң, тынлығы ниндәй! Бер өн сығарһаң да, бөтә ауыл тертләп уяныр төҫлө.

Нисек һағынған Төлкөсура ауылының ошондай иртәһен! Ул солан һикәлтәһендә байтаҡ баҫып торғас, барып, ҡапҡа бағанаһына һөйәлде. Йәйен сирәм күпереп ятҡан урам һарғайған, ҡойма буйҙарындағы кесерткәндәр генә, ҡырауҙарға бирешмәйенсә, йәшәреп ултыра. Бүрәнәләре бәҫәргән, лапашып бөткән өйҙәр күҙенә эләккәс, Төлкөсураның таң матурлығы биргән кәйефе бөтөнләй үҙгәрҙе, көрһөнөп, ҡарашын аяғы осона төбәне. Егерме дүрт йыл ғүмер уҙҙы. Ә ауыл ҡайҙа ти ул рәтләнеү, ана бит, тағы ла ҡотһоҙлана ғына төшкән. Ҡаторгала саҡта бер «политический»: «Батшалыҡтың аҫтын-өҫкә килтермәй тороп, Рәсәй ере ярлылыҡтан ҡотола алмаясаҡ»,— тип һөйләй ине. Дөрөҫтөр. Илгә торған һайын ҡытлыҡ ҡына өҫтәлә...

Шунан Төлкөсураның уйҙары икенсе яҡҡа боролдо. Бына, күп нәмәләр башынан кисереп ҡайтты. Артабан нисегерәк дауам итергә һуң был тормошто? Һағынып ҡайтһа ла, ауылда сыҙай алмаҫ кеүек ул. Күп кешеләр араһында эшләп өйрәнгәнгәлер инде, күңеле нисектер етемһерәп торған һымаҡ. Тик ҡайҙа сығып китергә? Етмәһә, анау Сажидәһе бында йәшәп ята бит әле. Тап килеп болоҡһотто ла, хәҙер Төлкөсураның йөрәген әллә ниндәй ҡуҙ көйҙөрә. Ғәжәп, ҡайҙан тап иткән уны Уйылдан? Сажидә көндәш өҫтөнә ниңә килде икән? Хәйер, Уйылдан уға бисәһе барлығын әйтеп торған тиһеңме ни?.. Юҡ. Сажидә лә бында булғас, һис кенә лә ҡалырға ярамай уға ауылда. Ҡалған ғүмерҙе яңғыҙ йәшәп заяға үткәреү ҙә яҡшы түгел ине. Ә ни эшләргә һуң?..

Ҡояштың тәүге нурҙары ҡаршылағы Үркәстау һыртындағы ағас баштарын алтынлатты. Ауыл өҫтө лә ҡапыл яҡтырып киткәндәй тойолдо. Ошо яҡтылыҡ, әйтерһең, йән өрҙө ауылға — унда-һанда тауыштар ишетелә башланы, танауға эскелтем төтөн еҫе килеп бәрелде.



Төлкөсура, һаман уйҙарынан арынып етә алмайынса, һәлмәк атлап өйгә инде. Бикморат сыуалға ут яғып маташа ине.

— Әллә ҡасан тороп сыға һалғанһың,— тип ҡаршыланы ул ағаһын.

Төлкөсура өндәшмәне. Үтеп ултырҙы ла теләр-теләмәҫ кенә яна башлаған сыуалға төбәлде. Бикморат та шымып ҡалды. Сарт-сорт итеп үҙ юлын алған ут тауышы ғына өйҙәге тынлыҡты боҙа. Ағалы-ҡустылы шулай байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙы улар.

— Ағай,— Бикмораттың өндәшкәненә тертләгәндәй, Төлкөсура башын ҡалҡытты,— урманға барып ҡайтабыҙмы әллә?

— Ни эшләрбеҙ икән һуң унда?

— Былтыр өс солоҡ юнып япҡайным. Шуның берәүһенә быйыл ҡорт ҡунғайны.

— Шунан?

— Юкә сәскә атҡан мәлдә яуын булғас, быйыл ҡорт балламаны. Бер ҡарап, әсәйемә сәйлек кенә бал алып ҡайтҡайным. Әллә барып, шуны ҡырып алайыҡмы тигәйнем. Баллап сәй эсерһең, исмаһам.

— Солоҡ ябырға ҡайҙан өйрәндең? — тип аптыраны Төлкөсура.

— Ҡотдос ағайҙан. Уның менән бергә йөрөштөргәйнем, ниндәйерәк ҡарағайҙы ҡайһылай итеп өңөргә, тәрбиәләп ябырға өйрәтте... Барып ҡайтайыҡмы, ағай?

— Арыу һөнәргә өйрәнгәнһең, ҡустым. Тик ҡунған ҡортто ҡырып алып тәләфләү килешмәҫ бит.

— Һәй, ағай, ниҙә тәләф була, ти. Ғүмер булһа, киләһе йыл тағы ҡуныр әле. Быйыл Ҡаратау аръяғында ике ҡарағай күреп ҡайтҡайным, киләһе яҙ шуларҙы ла юнып ябам әле. Балды ла һағынғанһыңдыр, тим. Сәйләп эсербеҙ.

Ҡустыһының күңелен аңлай Төлкөсура, ағаһын нисек тә ҡунаҡ иткеһе киләләр. Ҡайһылай итеп уның хәтерен ҡыраһың инде.

Ашанып алғас, Бикморат кәрәк-ярағын әҙерләргә тотондо. Ҡурыстан ишелгән кирәмен, бағауын, башына ҡабыҡ көпләмә кейҙерелгән солоҡ балтаһын, ерҙән солоҡ башына әйбер баулап күтәрә торған арҡатауын, бәләкәйерәк батманын арбаға сығарып һалды. Уның бик белдекле ҡиәфәт менән йөрөүенә күңеле бөтөп ҡарап торған Төлкөсура:

— Ҡәрәкле ҡорамалдарыңды ла етештергәнһең әле,— тине.— Үҙең эшләнеңме?

— Үҙем рәтләнем шунда. Әлеге шул Ҡотдос ағай өйрәткәйне. Ул бик күп ярҙам итте инде миңә. Ғөшөрөн берәй ҡайтара алһам...

— Ҡыҙын алһаң, бөтәһен бер юлы ҡаплатаһың да ҡуяһың инде! — Төлкөсура өйгә ҡайтып ингәне бирле тәү тапҡыр көлдө.

Ул ҡустыһы уңайһыҙланырмы икән тигәйне, Бикморат ҡылт та итмәне.

— Рәхиләне алырмын да ул,— тине, бик ғәҙәти генә итеп.— Быныһы изгелек ҡайтарыуға инмәҫ бит әле.

Хәйер, Бикморат ниңә борғоланып-һырғаланып торорға тейеш әле? Ул бит хәҙер утыҙға етеп килә. Донъяһы арыуыраҡ булһа, күптән өйләнеп, бала-саға үҫтерер ине.

— Һәйбәт ҡыҙ күренә, өйлән һин уға,— тиеүҙән ары һүҙ тапманы Төлкөсура. Шунан ҡустыһына ат егешергә тотондо.— Шулай ҙа аттан яҙмағанһың әле, ҡустым.

— Мин бәләкәй саҡтағы ҡола бейәнең нәҫеле инде, ағай. Ат булмаһа, нисек тамаҡ туйҙыраһың? Бик ауыр саҡта ла тотонмаҫҡа тырыштыҡ.

Урамдан китеп барғандарында Төлкөсура ҡапҡаһы төбөнә сығып баҫҡан Уйылдандың, улар яҡынлағанды күреү менән, йәлп итеп ихатаһына инеп киткәнен шәйләп ҡалды.

— Старшинаны өркөттөң түгелме, ҡустым?

— Минән бик ыжламаҫ инде ул, ағай. Һинән ҡурҡҡандыр... На, әйҙә, ҡола юрға!..— Бикморат башлаған һүҙен ауыл осона сыҡҡас дауам итте.— Бер нәмә булһа, ағайыңдың башы каторгала серене, һиңә лә шул кәрәкме, ти ҙә тотона торғайны. Һин ҡайтып төшөү уның өсөн ҡара ҡайғы булғандыр әле.

— Ни эшләһә лә, хәҙер инде ул мине бик тиҙ генә һемәйтә алмаҫ, ҡустым. Халыҡ менән үҙен нисек тота һуң? Бик шашып китмәйме?

— Төлкө кеүек ул, ағай. Сәғәт эсендә биш төрлө һүрәткә инә. Хәйләкәрлек, яуызлыҡ, ҡомһоҙлоҡ — бөтәһе лә етерлек.

— Эй-йе,— тип һуҙҙы Төлкөсура, аҙыраҡ һүҙһеҙ барғас, — ә мин ҡасандыр уның менән дуҫ булып, серләшеп йөрөй торғайным. Атайым мәрхүм, Уйылданды маҡтай башлаһам, януар балаһы йылы ҡан тәмен татып ҡарағас

ҡына ысын йыртҡыска әйләнә, тип мицә асыуланыр ине. Белеп әйткән шул.

Бикморат ағаһына быйыл йәй майорға ер бүлгән саҡта ҡупҡан бола, ошонан аҙаҡ Уйылдандың Роман менән тағы ла нығыраҡ дуҫлашыуын һөйләне.

— Шулай инде, байҙың бай менән дуҫлашыуы ғәжәп түгел,— тип һығымта яһаны Төлкөсура.

Юлға һары, ҡыҙғылт, һоро япраҡтар түшәлгән. Ялан-ғас урман һирәгәйеп ҡалғандай тойола. Ағас араһында-ғы үләндәр ҙә ергә һылашып йығылған шул инде. Ана бит, әллә ҡайҙағы миләш уттай янып, ҡыҙарып, үҙенә саҡырып ултыра.

— Атыңды туҡтат әле, ҡустым.

Төлкөсура арбанан төштө лә шул миләшкә ҡарай атланы. Барып, бер тәлгәшен өҙөп алды, йәҙрәләй миләш-тәргә һоҡланып ҡарап торҙо, шунан береһен ауыҙына ҡапты. Их, таты ла таты! Миләштең әскелтем тәме хатта бөтә тәненә таралған һымаҡ тойолдо. Юлға кире сыҡҡа-нында Төлкөсура бер ҡурай йолҡоп алды. Арбаға улты-рып, үлсәргә тотондо:

— Ҡурай!

— Әү.

— Ҡайҙа үҫтең?

— Урманда үҫтем.

— Кем ҡырҡты?

— Оҫта ҡырҡты.

— Ни эшләргә?

— Уйнарға.

Ошо һүҙҙәрҙе нисәмә ҡабатлағандыр инде Төлкөсура үҙ ғүмерендә. Ләкин әйткән һайын уларҙа ниндәйҙер мәғәнә бар һымаҡ тоя ул. Әйтерһең, кемдер уға һорау-ҙар бирә, ә ул яуап ҡайтара:

— Башҡорт балаһы?

— Әү.

— Ҡайҙа үҫтең?

— Урманда үҫтем...

. . . . . . . . . . .

Тик уйнарға түгел, ҡайғы-хәсрәттәр татыу өсөн ки-ленгән шул был донъяға...

Төлкөсура көрһөндө, ҡурайын өргөләп ҡараны, шу-нан артыҡ көсәнмәй генә, талғын ғына итеп «Нюрош буй-ҡайҙары, ай, сауҡалыҡ» тигән көйҙө уйнаны. Саҡ ҡына

шымып ултырғас, «Сәлимәкәй»ҙе һыҙҙырып ебәрҙе. Быныһын арбанан төшөп китеп, башын артҡа саңҡайтып, күкрәген киреп, ғәжәйеп бер ярһыу, ашҡыныу менән уйнаны ул. Ҡөҙгө урманда ҡурай тауышы әллә ҡайҙарға китте һәм йыр булып кире ҡайтҡандай тойолдо:

Ирәмәлкәй тауы бигерәк бейек,
Тора-тора меңдем башына.
Сәлимәкәй һылыуым бигерәк матур,
Ғашиҡтәү булдым ҡара ҡашына...

Төлкөсура уйнауҙан туҡтаны, арбаға ултырҙы ла:

— Ҡыуала атыңды, ҡустым! — тине нисектер дәртле итеп. Бикморат унын «Сәлимәкәй»ҙе уйнағанда Сажидәне күҙ алдына килтереп йөрәкһеүен белмәй ине, әлбиттә.

Үҙҙәренең сабыны Алайғыр яланында ла йөрөп әйләнде Төлкөсура. Ҡарандан ятып һыу эсте, ҡасандыр ҡуна ятҡан ҡыуыш урынына төбәлеп ҡарап торҙо. Шунан, әкрен генә атлап, тағы яланға сыҡты. Әйтерһең, ошонда күмелеп ҡалған йәшлек эҙҙәрен табырға тырыша ине.

Бында уға һәр нәмә ниҙелер хәтерләтә, уйланырға мәжбүр итә ине. Юлға һуғылып ултырған ялбыр, йыуан ҡайынды күргәс, унын тағы бер хәтирәһе яңырҙы. Ҡустыһына бынан теүәл егерме дүрт йыл элек Лапшингә ер күрһәтергә килеүен, шул саҡта ошо ҡайын башынан баяр өҫтөнә һеләүһен ырғыуын һөйләп бирҙе.

— Их, иҫәр булғанмын да инде! — тине ул.— Ниңә шул баярҙы ҡотҡарғанмын икән.

— Ҡарап тороп өҙгөләт инең дә бит,— тип унын һүҙен ҡеүәтләне Бикморат.

Төлкөсура иһә үҙенсә һығымта яһаны.

— Уларҙы йыртҡыстан талатып ҡына бөтәрөп булмай шул, ҡустым...

Солоҡ ҡарағайы алаңғырт тау битләүендә бүтән ағастарҙан аша ҡарап ултыра ине. Атты туғарғас, Бикморат солоҡҡа менергә әҙерләнә башланы, ағаһына сәй ҡайната торорға ҡушты.

Төлкөсура ҡустыһынын бик белдекле ҡыланыуын һиҙҙермәй генә күҙәтә ине. Бына Бикморат солоҡ төбөнә барып баҫты, үргә күҙ ташланы. Шунан арҡатауынын бер осон, тәпәлдерек бауын билбауына ҡыҫтырҙы ла ки-

рәмен яурыны аша алып, солоҡто уралтып бәйләне. Тубығын олонға терәп күтәрелә биргәс, кирәмен үргә һирпте. Рәтен белмәгән кеше өсән егерме сажин бейеклектәге хәтәр йыуан, ботаҡһыҙ солоҡҡа менеү баш етмәҫлек эш һымаҡ тойолор ине. Бикморат ҡайһылай еңел күтәрелә. Тейенме ни! Тормошта ла бына шулай үрләй барып, үҙ бәхетеңде тап ине. Һай, тормош — солоҡ башына менеү түгел шул! Аяҡ терәр киртмәстәре лә, һирпеп менәр кирәме лә юҡ. Шулай уйлай Төлкөсура ҡустыһына ҡарап. Ул арала Бикморат ҡапҡаҡ тәңгәленә етеп, солоҡҡа ҡағылған йыуан имән сөйҙәргә тәпәлдереген аҫып, шунда баҫты ла түбәнгә ҡысҡырҙы:

— Ағай!.. Батманға солоҡ балтаһын, бысаҡты, сөректө һалып, арҡатауға таҡ әле!

Үҙенә кәрәк-яраҡты арҡатау менән тартып алғас, Бикморат солоҡтоң ҡапҡағын асып, сөрөгө менән төтөн быҫҡыта-быҫҡыта бал ҡарарға тотондо. «Ҡатындан да уңып китһә, донъяны арыу ғына көтөр,— тип уйлай Төлкөсура.— Эш рәтен белә, минең һымаҡ артыҡ яндырай ҙа түгел».

Байтаҡ бал алып төштө Бикморат. Еҫе аңҡып торған бал менән сәй эсеп ултырғанда Төлкөсура үҙ уйҙарын ҡустыһы менән уртаҡлашты.

— Незнай инде, ҡустым, баш ҡайнай. Артабан ни эшләп ҡарармын икән, тим.

— Иҫән-һау йөрөп ҡайтҡас, уныһына ниңә аптырайһың, ағай?

— Аптырата шул. Ауылда ни кәсеп итмәк кәрәк? Роман хәҙер мине яҡын да юлатмаҫ.

— Ҡуйсәле, ағай, башыңды юҡҡа ҡаңғыртма. Ҡулдан эш килмәҫ кешеме ни беҙ. Күмер үртәрбеҙ, көрәк сабырбыҙ. Өйләнеп тә алһаң, яңы өй бурарбыҙ. Ат бар, балта тота беләбеҙ.

Ҡустыһының шулай дәртләнеп һөйләнеүе Төлкөсураның күңелен күтәрә төштө.

— Бүтәне ҡулдан килер,— тип көләмһерәне ул.— Тик бына өйләнеү ҡәҙәреме — ай-һай... Хәҙер миңә, каторгала ғүмере үткән кешегә, кем ҡараһын?

Бикморат ысынлап асыуланды ла китте.

— Мин һине һис тә бирешмәгән, донъя күреп, сынығып, бешеләнеп ҡайтҡан, тип йөрөһәм, бер йыбытҡы икәнһең дә! Кеше шулай донъянан ваз кискән шикелле һөйләшәме! Ир кешенең һүҙе түгел был!

Төлкөсура шарҡылдап көлөп ебәрҙе, шунан ауыр ҡулын Бикмораттың яурынына һалды.

— Ну кәрәкте бирҙең, ҡустым! Дөрөҫ әйтәһең, бирешергә ярамай. Дошмандарға үс өҫтөнән емерел эшләргә, һыр бирмәй йәшәргә кәрәк.— Аҙыраҡ уйланып ултырғас, өҫтәне: — Иртәгә Ҡыйғыр яланына барып ҡайтам әле. Күрәйем, йәш баяр нисек йәшәй икән. Таныш-белештәрҙе лә осратырмын. Теге Маслов тигән әҙәм юҡтыр бит хәҙер?

— Уны ун йыл самаһы элек эшселәр төнөн электерен алып, имгәткәнсе туҡманылар. Лапшин Өфөгә оҙатҡайны, аҙаҡтан, шул имгәнеүенән шәбәйә алмайынса үлгән икән, тип ишеттек.

— Яуыз кеше ине, арыу иткәндәр.— Төлкөсура урынынан торҙо.— Ҡайтабыҙмы инде, ҡустым?

— Хәҙер ат егәм.

Урман килеште Төлкөсураға. Нисектер эсе бушап, күңеле күтәрелеп ҡалғандай булды.

Улар ҡайтырға сыҡҡанда, көн кискә тартҡайны инде.

* *
*

Романдың эштәре арыу ғына бара ине. Бынан егерме биш йыл элек атаһы һатып алған урман күптән бөткәйне инде. Унан аҙаҡ яңынан әллә күпме урман алып ҡырҡтырҙы. Хәҙер ана тағы биләмәләр һатып алырға самалап йөрөй. Нороштоң түбән ағымындараҡ бик һәйбәт ҡарағай урмандары бар; Ҡыпсаҡ волосендәге кәрәкле кешеләрҙе күреп, шуларҙы ҡулға төшөрөүҙе көйләй яҙып ҡуйған... Хәҙер атаһы уның эшенә бик үк ҡыҫылмай, урман һатыуҙан килгән төшөмдө иҫәпләй ҙә ҡайһы бер кәңәштәрен генә бирә, эсе бошоп, ҡалала ултырыуҙан ялҡып киткән саҡтарында йылына берәй тапҡыр ғына Ҡаратауға килеп әйләнә. Улының үҙенә лайыҡлы варис булып етешеүенә ҡыуанып бөтә алмай Артем Дмитриевич. Романдың эште һәйбәт ойоштороуы арҡаһында, Волга буйындағы ағас һатыу пристандәре һаман уға күҙ төбәп тора. Ҡартайһа ла, Өфөнөң юғары ҡатламы тирәһендә лә абруйы ҙур. Романдың Белорет заводы хужаһы Сергей Владимирович Пашковтың ҡыҙына өйләнеүе уның ижтимағи хәлен тағы ла нығыта төштө. Роман, ҡайны

ҡартының ярҙамына таянып, Иҙелбашы яғында тағы бер урман ҡырҡыу участкаһы ойоштороу хаҡында хыяллanып йөрөй.

Хәҙер эште атаһы заманындағынан икенсерәк төрлө итеп алып барырға кәрәклекте аңлай шул Роман. Ул урман ҡырҡыуҙы айырым участкаларҙа алып бара. Һәр ауыл кешеләренә диләнкәне бер-береһенән байтаҡ алыҫлыҡта үҙҙәренә башҡа бүлеп бирә. Бараҡтар ҙа шул диләнкәләргә яҡын урынға айырым-айырым һалынған. Ағас ҡырҡыуға ул яҡын-тирә ауылдарҙағы атһыҙ-ерһеҙ иң ярлы кешеләрҙе ҡушты, ә бүрәнә ташырға алыҫтағыраҡ рус ауылдарынан атлы эшселәр ялланы. Улар ҡышын бүрәнә ташый ҙа йәйгелеккә өйҙәренә тарала, ә урман ҡырҡыусылар йәй буйы ҡыуғында йөрөй. Бына шулай итеп, эшселәр һәр саҡ бер-береһе менән ныҡлап таныша ла алмай тырым-тыраҡай йәшәргә мәжбүрҙәр. Йәш Лапшин ризаһыҙлыҡ белдергән кешеләргә аяуһыҙ, аҙ ғына ла һөйләшеп тормаҫтан, эштән ҡыуа, ҡабат яҡын да юлатмай. Ул бынан өс йыл элгәре транса һәм дранка ярҙырыуҙы юлға һалып ебәрҙе. Ағиҙел һәм Волга буйы ҡалаларында был тауарҙарҙы көтөп алалар. Уларҙы һатыр урынға алып барыуы ла еңел: һалға күпләп тейәйһең дә ағыҙаһың, бүрәнә шикелле, берәмләп этеп-төртөп, йәй буйы ағыҙып ыҙаланмайһың.

Шулай ҙа һуңғы ваҡытта борсолобораҡ йөрөй Роман. Өфөлә, хатта Стәрлетамаҡтың күн заводында ҡуҙғалыштар булған икән. Һәр төрлө һалымдар, штрафтар бигерәк артып китте шул. Быйыл, мең туғыҙ йөҙөнсө йыл башынан, һәр ир кешегә тейгән ер өсөн һалымдың өс һум егерме биш тингә, эш хаҡынан һалым бер һум һикһән биш тингә тиклем артҡас, урман ҡырҡыусылар араһында ла һүҙ булып алғайны. Был хөкүмәт тарафынан ваҡытлыса ғына индерелгән закон, фәлән дә төгән, тип алдалап ҡуйҙы ҡуйыуын Роман. Илдәге ваҡиғалар менән хәбәрҙар булмаған, тома наҙан халыҡ, үҙ араларында ысын хәлде төшөндөрөүсе лә юҡлыҡтан, үтә тарҡау ине шул. Күптәре, таштан юкә һуйып буламы, нисек теләй — шулай ҡылана инде улар, яҙмыштан уҙмыш юҡ, тип ҡул һелтәйҙәр ҙә баш эйеп эшләп йөрөй бирәләр.

Ошоларҙың бөтәһен дә күҙ уңында тота Роман һәм шуға ла ер-һыу күреп, әллә кемдәр менән аралашып, күпте белеп ҡайтҡан Төлкөсураны үҙ эшселәре тирәһенә яҡын юлатырға самаһы юҡ. Теләһә ҡайҙа морон терәһен.

Ҡаратауҙа, Уйылдан өйөндә булып ҡайтҡандан аҙаҡ. бер көн үтеү менән, ишектән Төлкөсура килеп ингәс, шулай ҙа ҡаушабыраҡ ҡалды ул. Ниндәй һүҙ ҡушып күрешергә лә белмәй торҙо.

— Һаумы, Роман. Ниңә аптыраның? — Төлкөсура йылмая биреп ишек алдында имәндәй баҫып тора. Ысынлап та, каторга уны бөгә алмаған икән, элеккенән дә хәтәр елләнеп киткән.

— Иҫәнме, Төлкөсура дуҫ! — Роман уның ҡулын ҡыҫты, осрашыу үтә ҡапыл килеп сыҡҡанлыҡтан, ни ҡылырға белмәйенсә, уны төпкө бүлмәһенә етәкләне.

— Туҡта әле, Роман, итегемде сисәйем.

Төлкөсура һырмаһын, бүркен дә систе, ойпаланған сәсен бармағы менән тараны.

— Һин беҙҙең братҡа оҡшап киткәнһең,— тип көлдө Роман, уның етек сәсенә ҡарап.

Төлкөсура уның артынан эйәрҙе, иркен бүлмәгә инде.

— Ҡемдең арбаһына ултырһаң — шуның йырын йырлайһың, тиҙәр беҙҙә. Заводта эшләгәндә еткергәйнем.

— Заводта эшләнеңме ни?

— Тура килде.

— Лиза! — тип ҡатынына ҡысҡырҙы Роман.— Ашарға килтерһендәр әле шунда. Эсергә лә берәй нәмә бирегеҙ. Шунан, дуҫ, һөйләп ебәр хәбәреңде.

Төлкөсура көлөмһөрәне.

— «Дуҫ»тан өҙҙөрәһең дә, Роман, хәҙер һинең менән минең арала ул һүҙ урынлымы икән? Күренеүенсә, һинең эштәр шәп, ысын хужаға әйләнгәнһең. Әйткәндәй, атайың иҫәнме әле?

— Иҫән дә, хәҙер Өфөнән сығып йөрөй алмай.

— Күрәһе ине ул ҡартты берәй.

Роман ихлас ҡыҙыҡһынып һораны:

— Күрһәң, ни эшләтер инең, Төлкөсура, ысынын ғына әйт әле?

— Ни эшләтәһең инде уны. Ҡотлоғужаны үлтергән өсөн мине унан башҡа ла ултыртырҙар ине. Унан һуң, Роман, мин уға ҡул да күтәрмәҫ инем. Бер нисә байҙы үлтереү менән донъяны яҡшыртып булмаҫын төшөндөм мин хәҙер. Ана бит, Ҡотлоғужаны үлтергәйнем, уның эшен Уйылдан дауам итеп ята. Шулай бит?

— Ҡыҙыҡ ҡына һүҙ ҡуҙғаттың әле һин, Төлкөсура. Ә донъяны ҡайһылайыраҡ яҡшыртырға уйлайһың һуң?

Урта йәштәрҙәге ҡатын һалҡын ит, икмәк, бер шешә араҡы килтереп ҡуйҙы. Роман араҡыны асып, рюмкаларға ҡойҙо.

— Иҫеңдәме, Роман, һин тәү тапҡыр беҙгә килеп төшөп, ауыл халҡын мөгәрис менән һыйлағанығыҙҙа һин, мин, Уйылдан беҙҙең кәртә артында иҫергәнсе эскәйнек?

— Бар ине инде ваҡыттар.

— Әйе, бар ине, ул саҡта Уйылдан менән һин дә бөтөнләй икенсе кешеләр инегеҙ. Хәҙер һин — ысын урман промышленниге, Уйылдан — старшина, мин — каторжник. Һөнәрҙәребеҙ саҡ ҡына айырыла, эйеме, Роман?

— Һин һаман шаярғанда ла уҫал шаяраһың. Ни эшләйһең бит. Һиңә хәҙер, Төлкөсура, тынысланып, яҡшылап тормош ҡороп йәшәй башларға кәрәк.

— Арыу булыр ине лә... Ләкин ул тормошто, бына был ҡулдар ни тиклем көслө булмаһын, яңғыҙым ғына ҡора алмам шул.

— Ниңә улай тиһең, Төлкөсура?

— Һин мутлашма, Роман. Мин һинең аҡыллы, аңлы егет икәнеңде беләм. Тарих ҡуласаһының ҡайҙа табан тәгәрләүен төшөнәһеңдер, моғайын. Хәтереңдәме, һин мине Стәрлетамаҡ төрмәһенән сығарып алғас, ҡайтып килгәнебеҙҙә: «Бөтәһе лә үҙемдең ҡулға ҡалһа, эште икенсе төрлөрәк ойоштороп инем»,— тигәйнең, бөтә кешеләрҙе лә рәхәт тормошта йәшәтер кеүек фекер йөрөтә инең. Хәҙер бына бөтәһенә лә үҙең хужа, ләкин хәҙер һин бөтөнләй икенсе төрлө уйлайһың — үҙеңә күберәк аҡса ҡайырыу яғын ҡарайһың. Эшселәрең нисек йәшәй — улар һинең ике ятып бер төшөңә лә инмәй. Шулай бит?

— Мин тарихте әҙерәк беләм былай,— Романдың сырайы ҡараңғылана төштө. — Бөтә дәүерҙәрҙә лә кемдәрҙер етәкселек иткән, кемдәрҙер ҡара эш башҡарған. Быныһы — тормош законы.

— Ә мин, Роман, тарихте уҡып өйрәнмәнем. Шулай ҙа һинең «етәкселек иткән» тигән һүҙҙәрең шымалабыраҡ ебәреү түгелме икән? «Өҫтөнлөк иткән» тиһәң, дөрөҫөрәк булыр һымаҡ.

— Ярар, Төлкөсура, был турала һүҙҙе ҡуйып торайыҡ әле. Берәрҙе төшөрәйек тә, егет сағыбыҙҙағы кеүек, матур ғына һөйләшеп ултырайыҡ.

— Их, Роман, ул саҡтарҙы кире ҡайтарып булһын ине лә бит!..— Төлкөсура төп күтәрә эсте, икмәк ҡап-

ты.— Әлеге һөйләшеүебеҙ ҙә зыянға түгел, Роман. Егерме дүрт йылдан аҙаҡ бына шулай аңлашып алыуҙың зыяны юҡ. Ләкин бөгөн мин һиңә был хаҡта һөйләшергә түгел, ә рәхмәт әйтергә килгәйнем.

Роман уға аптырап ҡараны.

— Ғәжәпләнмә, ысынлап әйтәм. Әсәйемде эшкә алғаның, асҡа үлтермәүең өсөн рәхмәт, Роман. Исмаһам, мин уны, һуңғы тын алыры алдынан булһа ла, ҡайтып күрҙем, ҡустым да ҙурайып ир еткән. Юғиһә, Уйылдандан бер тинлек файҙа теймәҫ ине.

— Изгелекте онотмауың өсөн, үҙеңә рәхмәт, Төлкөсура. Ни әйтһәң дә, был яҡҡа килгәс, мин иң тәү башлап һеҙҙең йылы өйҙә ятып йоҡланым бит. Ә ҡустың — бик шәп егет. Бер үҙе ике кеше эшен эшләй.

— Ә һин уға хаҡты икеләтә түләйһеңме һуң?

— Һаман әсе телләнәһең!.. Әсәйек әле.

Роман Төлкөсураны оҙатырға тышҡа уҡ сыҡты.

— Килгән ыңғайымда урмандарҙа байтаҡ йөрөп әйләндем. Ай-һай күп ҡырғанһың, бөтә ер шыр ялан булып ҡалған,— тип һүҙ ялғаны Төлкөсура.

Роман иһә уны үҙенсә аңланы.

— Эште еренә еткереп, таҙа итеп эшләтергә яратам.

— Ә бына ошо тирә ғөмүмән тап-таҙа ҡола яланға әйләнеп ҡалһа, нисек булыр, Роман? Урман — тау халҡының күҙ терәп торған байлығы. Беҙ үлгәс тә кешеләр йәшәйәсәк бит әле. Һин был тирәләге урманды ҡырҙырып бөтөрһөң дә яңы урынға китерһең, ә ошо яҡтың килер быуындары ни эшләр? Яңы быуын, улар ғына ла түгел, ҡорғаҡһып ятҡан бөтә ер һиңә ләғнәт уҡыясаҡ!

— Мин уны үҙ кәрәгемә ҡырҡтырмайым, урманды минән бөтә Рәсәй һорай,— Роман был һүҙҙәрен бик ҡырыҫ әйтте.

— Барыбер уның киләсәге тураһында уйларға кәрәк. Бына һиңә ни өсөн һәр диләнкәлә орлоҡҡа бер нисә төп ҡарағай ҡалдырмаҫҡа?

— Төлкөсура, беҙҙең бөгөнгө көн мәшәҡәттәре лә етерлек, әллә нәмәләр менән башты ҡатырма әле.

— Һис тә артыҡ һүҙ түгел был. Тыңламаҫыңды беләм, шулай ҙа әйтәм: урман — ер күрке, ул, халыҡ кеүек үк, мәңгелек булырға тейеш! Уйлап ҡара, урманды тамырынан ҡоротоу — йыртҡыслыҡ ул, ә йыртҡыслыҡ өсөн яуапҡа тарттыралар.

— Һин улай уҡ һөйләшмә,— Роман мыҫҡыллы йыл-

майҙы.— Әлегә миллионер Роман Лапшинде бер кемдең дә йыртҡыс тигәне юҡ.

— Әйтәсәктәр!.. Ярар, хуш, миллионер Роман Лапшин. Шулай ҙа мин һинең күңелең төбөндә йәш саҡтағы алсаҡ егеттең матур тойғолары аҙ булһа ла һаҡланып ҡалыуына ышанам әле.

Роман уның артынан байтаҡ ҡарап торҙо һәм апасыҡ аңланы: Төлкөсура хәҙер уның өсөн иң көслө, иң ҡурҡыныс дошман, һаҡ булырға кәрәк.

* *
*

«Һорашманым бит әле, ни эшкә тотонорға самалай икән был каторжан,— тип уйланы Роман.— Берәй яры олаҡһа, арыу булыр ине лә...»

Ул контораһына юнәлде. Унда земская управанан килгән чиновник Романдың биләмәләрен яңынан тикшереү һөҙөмтәләре тураһындағы актын бөгөн яҙып бөтөргә тейеш ине. Ни эш ҡыйрата икән?

Быйыл ул тикшереүҙәре менән Романдың башын байтаҡ ҡаңғырттылар. Бөтәһе лә шул 1898 йылда һәр ауылға йәмәғәт ерҙәре бүлеп беркетеү, ҡаҙна ерҙәренә таксация үткәреп, яңынан межалау тураһындағы закон сыҡҡандан аҙаҡ башланды. Былтыр ана әллә нисәмә землемер килеп, йәй буйы шул эш менән булашты. Роман Лапшин һатып алған урмандың бер өлөшө, беҙҙәге карта буйынса, ҡаҙна еренә керә, тип ҡаңғырттылар. Роман өлкән землемерга арыу ғына аҡса төрттө, бер нисә тапҡыр өйөнә алып ҡайтып, ҡуна ятҡырып һыйланы. Шунан аҙаҡ ҡына эшен рәтләне — ҡаҙна урманы межаһын уның билдәләмәһенән алысҡараҡ сигерҙеләр.

Шул саҡта ҡалған землемерҙәренә лә аҙыраҡ аҡса йомдормауына әле булһа үкенә Роман. Шулар, үҙҙәре буш ҡул ҡалғанға үс итептер инде, Лапшин ҡаҙна еренә керергә тейешле урмандан ағас ҡырҡтыра, тип губернатор исеменә ялыу яҙған. Июнь башында Ырымбурҙың үҙенән Законов тигән чиновник килеп төштө.

Килгән көнөнән үк хәтәр ҡыланды ул. Үҙенең губернатор ҡушыуы буйынса ялыу тикшерергә килеүен әйтте лә, Лапшин ни ҡәҙәрем өгөтләһә лә, уның өйөнә инеп торманы, Ҡыйғыр яланының бер яҡ ситенә үҙе ылау менән алып килгән тирмәне ҡорҙорҙо. Шунда өсҭәлен дә ултыртып, эшен Романға бөтөнләй бәйһеҙ рәүештә баш-

лап ебәрҙе. Уның әйтеүе буйынса, Лапшин уға көн һайын өс эшсе бирә. Законов үҙе менән алып килгән землемерҙе, шул өс эшсене эйәртә лә, компасын, картаһын, сажинле үлсәүен алып, көн һайын урманға китә.

Романдың тамам зитына тейҙе ул Законов тигән әҙәм. Хатта юнләп һөйләшмәй ҙә. Өйөнә саҡырһа:

— Мин — эш кешеһе. Губернатор ғали йәнәптәре мине бында ҡунаҡ булып ятырға ебәрмәне,— тип кенә ҡуя.

«Был тиклем исеменә ессме тура килмәç. Закон һағындағы Законов! — тип енен сәсә Роман Лапшин.— Рәсәйҙә берҙән-бер шундай чиновниктер был».

Берҙән-бер кис, француз коньягы ҡыçтырып, тирмәһенә барғайны, губерния чиновнигe:

— Әле эштең осона сыҡмағанбыҙ. Ваҡыты еткәс, мин һеҙҙе үҙем саҡыртырмын,— тип, уны тағы кире бороп сығарҙы.

Роман, аптырағас, бик тиҙ килеп етеүен һорап, атаһына саҡырыу ебәргәйне, уныһы Мәскәү яғына сығып киткән икән. Ни ҡылаһың, бик сәйер ҡыланған чиновниктең эште нисек бөтөрөүен көтөргә тура килде.

Законов тикшереү һөҙөмтәләрен ике көн буйы тирмәһенән сыҡмай ҡағыҙға теркәне. Өсөнсө көнөнә уның менән бергә йөрөгән землемер Романды саҡырырға килде. Ярғаҡ битле, эскә батып торған күҙле, һөймәлекһеҙ бер кеше ине землемер. Әллә шуға күрә инде, Роман, уның аша берәй эш сығарып булмаçмы икән, тип уйлай ҙа, уның ҡиәфәтенә ҡарағас уҡ төңөлә. Һис тә ыҡҡа килер әҙәм һымаҡ түгел. Йә теге юнһеҙ Законовҡа бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирер. Ул саҡта инде эштең бөтөнләй кирегә түңкәрелеүе бар.

Землемер үҙен саҡырырға килгәс иһә, Роман шулай ҙа уның ҡылын тартып ҡарамаҡ итте. Исмаһам, туң баш чиновниктең ике көн буйы нимә яҙғанын аҙ-маҙ белеп, һөйләшеүгә алдан әҙерләнеп барырға ине. Землемерҙе әйҙүкләп төпкө бүлмәгә алып инде, йомшаҡ креслоға ултыртты.

— Шулай итеп, эште бөттөгөҙ инде,— тип һүҙ башланы Лапшин, бик вайымһыҙ күренергә тырышып.

— Бөттөк, Роман Артемьевич. Бына хәҙер уҡып ҡул ҡуяһы ғына ҡалды.

Роман көсәнеп көлөмһөрәне.

— Уныһы инде оҙаҡ булмаç... Мине үтә бөлдөрөп ташламаһағыҙ ярай ҙа.

— Бөлдөрөп, тип, Роман Артемьевич... Беҙ һис тә юҡтан ғына бер кемде лә рәнйетмәйбеҙ. Жалобалар тикшергәндә губернатор ғали йәнәптәре беҙҙән тик дөрөҫлөктө генә талап итә.

— Уныһы инде, Ховрин әфәнде, бөтәбеҙҙең дә хоҙай алдындағы изге бурыс. Тик бит әле хоҙай — күктә, беҙ — ерҙә.— Роман землемерғә мут ҡына ҡараш ташланы.— Ә ерҙәге кешегә, бөтәһенән элек, яҡты донъяла һәйбәт йәшәп ҡалыу өсөн аҡса кәрәк.

Землемерҙең эскә батҡан боҙҙай күҙҙәре ҡайһылыр арала ирене, ҡарашында өмөтлө осҡондар күренеп ҡалды.

— Быныһы бәхәсләшә торған нәмә түгел, Роман Артемьевич. Шул аҡса тип һеперелеп эшләп йөрөйбөҙ.

Был һүҙҙәрҙән аҙаҡ Романға ҡеүәт өҫтәлде, асығыраҡ һөйләшеүгә күсте.

— Дөрөҫ, бик дөрөҫ, Ховрин әфәнде. Бына мин ошо төпкөлдә күпме яфалар сигә-сигә Рәсәйгә ҡулымдан килгән ярҙамды күрһәтергә тырышам. Ә кемдәргәлер шул оҡшамай, кемдәрҙер, көнләшеп, минең өҫтән губернаторға яҙа. Ошо арҡала бына һеҙгә артыҡ мәшәҡәт тыуа. Мин, әлбиттә, һеҙҙең түккән көсөгөҙҙө буш итмәм.— Роман тағы землемерғә күҙ ташланы. Ул ниҙер өмөт иткән, йә, әйтер һүҙеңде әйт тә, ниңә оҙаҡҡа һуҙаһың, тигән һымаҡ ултыра ине. Роман түш кеҫәһенә алдан һанап һалып ҡуйған йөҙ һумды сығарҙы, ни булһа ла була! — Бына, Ховрин әфәнде, рәхмәт йөҙөнән һеҙгә минән бүләк.

Землемер, алдан уҡ һөйләшеп ҡуйғандағы шикелле, аҡсаны һис һүҙһеҙ алып, кеҫәһенә тыҡҡас, Роман: «Һин хужаң кеүек үк иҫәр кешегә оҡшамайһың»,— тип уйланы, күңеленә йылы йүгерҙе.

— Ы-ы-ы... Роман Артемьевич...— Ховриндең теле тотлоҡто, төпкә батҡан күҙҙәре алан-йолан килде.— Законов — яҡшылыҡты бигүк аңлап етмәй торған кеше. Һеҙ уның менән был мәсьәләлә һағыраҡ ҡыланығыҙ.

— Һәй, мин ул әҙәмдең юнһеҙлеген тәүге күргәндә үк белдем,—тип ҡул һелтәне Роман.—Ни эш ҡыйратырға уйлай икән ул? Бына шул ҡыҙыҡһындыра мине, Ховрин әфәнде. Ҡурҡҡандан түгел, шулай ҙа ниҙәр яҙып алып китергә йыйыныуы ҡыҙыҡһындыра мине.

Ховрин, берәйһе тыңлап тороуҙан шикләнгәндәй, ишек яғына күҙ ташланы, шунан Романға табан эйелә төштө.

— Самаһыҙ насар ҡылана. Бер мең дүрт йөҙ һикһән дисәтинә урманыңды ҡаҙна еренә керә, тип актҡа теркәне.

— Китсе!..

— Эйе. Ул әҙәм присутствиелә эшләгән бөтә кешенең теңкәһенә тейеп бөткән инде. Һис кенә лә һөйләшеп ипкә килмәй. Шуға күрә, бәләнән ҡотолайым тиһәгеҙ, алдан берәй аҡылын уйлағыҙ, Роман Артемьевич.

Бер мең дүрт йөҙ һикһән дисәтинә! Был урмандың ҡайһы ерҙә икәнен бик яҡшы белә Роман. Был тирәләге иң һәйбәт ҡарағай урманы. Шуға күрә хаҡына тормай, байтаҡ аҡса сығарып алғайны ул биләмәне. Хәҙер шуны ҡулдан ысҡындырырғамы? Юҡ инде, нисек тә бер юнен күрергә кәрәк.

— Ховрин әфәнде, ярҙамығыҙ кәрәк булһа, мин һеҙгә ышана аламдыр бит?

— Мин ошо йәшкә етеп, үҙебеҙҙең халыҡты, бигерәк тә һеҙҙең кеүек киң күңелле кешеләрҙе, йәберләгәнем юҡ, Роман Артемьевич. Тик, тағы бер аңғартам, Законов менән һаҡ булығыҙ.

— Кәңәшегеҙ өсөн рәхмәт, Ховрин әфәнде.

Землемер, Роман ҡыҫтаһа ла, ашарға ултырып торманы, оҙаҡламай барып етергә ҡушып, сығып китте.

Тәҙрәһе эргәһенә баҫып, байтаҡ уйланды Роман. Башына әллә нисә төрлө уй килде, ләкин береһен дә ҡулай тапманы. Ахырҙа, барып, тәүҙә Законовтың яҙғандары менән ентекләп танышырға кәрәк, унан күҙ күрер, тигән һығымтаға килде.

Тирмәгә һәйбәт кәйефтә күренергә тырышып барып инде ул.

— Хужалар өйҙәме? Хәйерле көн, губернатор ғали йәнәптәренең тоғро хеҙмәткәрҙәре!.. Башҡорт тирмәһендә тынсытмаймы? — тип һөйләнә-һөйләнә Законовҡа ҡулын һондо.

Законов, ғәҙәтенсә, уның һөйләнеүенә артыҡ иғтибар бирмәне, урын тәҡдим итте, алдындағы артыҡ-борторҡ ҡағыҙҙарҙы ситкәрәк һалды, аҙыраҡ һүҙһеҙ ултырғас:

— Беҙ эште төгәлләнек,— тине.— Һеҙгә лә, ҡаҙнаға ла зыян килтермәҫкә тырышып, бөтәһен дә еренә еткереп эшләргә тырыштыҡ, Роман Артемьевич.

— Шулай булырға тейеш тә инде, Законов әфәнде. Ләкин бер нәмәне күҙ уңынан ысҡындырмаһағыҙ ине, тим. Мине һеҙ дәүләтебеҙ мәнфәғәттәренән бөтөнләй

айырып алып, үҙем өсөн генә йәшәгән кеше итеп ҡарамаһағыҙ ине. Минең бөтә түккән көсөм Рәсәй, уның ҡөҙрәтен арттырыу өсөн бит.

— Һеҙҙең дәүләт өсөн ҙур эш башҡарыуығыҙ һәр кемгә мәғлүм, Роман Артемьевич. Икенсенән, беҙ һеҙгә күрәләтә зыян эшләү өсөн дә килмәнек. Шуға күрә беҙгә лә, башҡарған эшебеҙгә лә шикләнмәй ҡарағыҙ. Тикшереү нимә күрһәткән — бөтәһе лә ошонда.

Законов, күн тышлы папкаһын асып, яҙғандарын Лапшин алдына һалды. Уны уҡыған һайын, Романдың тыныслығы нығыраҡ юғала барҙы. Үтә тәфсилләп, һүҙ тейҙергеһеҙ итеп яҙылғайны ул. Хатта ҡаҙна еренә ингән биләмәнең картаһы һыҙылған, яңы межаның ҡайҙан үтергә тейешлеге күрһәтелгән.

Уҡып бөткәс, Роман, фекер төйнәп, бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙы. Законов иһә, бөтөнләйгә битараф кеше һымаҡ, уға һис тә иғтибар итмәйенсә, башын артҡа саңҡайта биреп, өндәшмәй ултыра ине.

— Еренә еткереп, төплө яҙылған. Һеҙ, Законов әфәнде, үҙ эшегеҙҙе яҡшы беләһегеҙ.

Романдың был комплиментсна Законов аҙ ғына ла әһәмиәт бирмәне, ахырыһы, сырайындағы бер мускул да ҡыбырҙаманы.

— Беҙҙең бурыс шундай. Ҡушылған эште тейешенсә үтәргә тейешбеҙ, Роман Артемьевич.

Был кеше менән ҡаға-һуға ғына һөйләшеүҙән бер файҙа ла булмаҫын нығлап төшөндө Роман. Шуға күрә ҡырыҫ ҡына әйтте:

— Ошо мең ярым дисәтинә урманды минән алып, Рәсәйгә ниндәй файҙа килтермәксе итәһегеҙ инде, Законов әфәнде?

Законов турайып ултырҙы, Романга тишә ҡараны.

— Һеҙ минән һорау алырға уйлайһығыҙмы әллә?

Шунда уҡ ултырған Ховрин, һөйләшеүҙең ҡырҡыу төҫ алғанын күреп, тегеләй-былай борғоланды, тамағын ҡырҙы.

— Юҡ, һорау алыу түгел, һеҙ мине дөрөҫ аңлағыҙ, Законов әфәнде.— Романдың сигенергә, йомшарырға уйы юҡ ине.— Тулыһынса аңлашыу кәрәк бит. Мәҫәлән, әлеге урман, мин ҡырҡтырмайым икән, был әҙәм аяҡ баҫмаҫ төпкөлдә барыбер ятып серейәсәк.

— Серемәйәсәк,— тип киҫте Законов.— Һеҙ ғүмерегеҙҙе урман киҫтереүгә арнаһағыҙ ҙа, насар белгес икән-

һегеҙ. Ҡарағай урмандары ҡырҡырлыҡ булып етлеккәндән аҙаҡ тағы йөҙ-йөҙ егерме йыл үҫеүен дауам итә әле. Ә йөҙ йылдан һуң, беләһегеҙме, Роман Артемьевич, Рәсәйгә бындай һәйбәт ағастар күпме кәрәк буласаҡ? Йөҙ тапҡырға артығыраҡ!

— Һеҙ, бәлки, яҡшы белгестер.— Роман тороп уҡ китте. Законовтың шулай һөйләнеүе уны ярһыта башлағайны.— Ләкин бик ябай бер нәмәне күҙ уңынан ысҡындыраһығыҙ. Урман үҫмәй торамы ни? Йөҙ йыл үтеүгә бында яңы быуын ҡарағай урманы өлгөрәсәк. Унан ары беҙгә Рәсәйҙең бөгөнгөһө ҡиммәт.

— Дөрөҫ түгел! Беҙгә Рәсәйҙең киләсәге ҡәҙерлерәк. Улай ғына ла түгел, ерҙәге тормош ҡиммәтерәк. Ерҙә тормош туҡталып ҡалмаһын өсөн, урмандар мәңгелек булырға тейеш. Ә беҙ уны йыртҡыстарса ҡырабыҙ. Рәсәйҙә урман кисҫтереүсе бер һеҙ генә түгел бит, Роман Артемьевич. Ана, Волга, Днепр буйы урмандары һуңғы йөҙ йыл эсендә ҡырып бөтөлдө. Хәҙер Уралды яланғаслай башланыҡ. Беҙгә бының өсөн киләһе быуындар алдында яуап тоторға тура киләсәк.

— Һеҙҙең һүҙҙәрегеҙ Петербургта уҡып йөрөгән саҡтағы бер егетте хәтерләтә миңә, Законов әфәнде. Өҫтөнә кейер кейеме юҡ ине уның, күп ваҡыт аслы-туҡлы йөрөр ине. Ә гел киләсәк, туҙға яҙмаған матур тормош тураһында хыяллана торғайны. Буш хыял менән йәшәп ҡара бар! Ысынбарлыҡты онотторға ярамай. Йыйып әйткәндә, миңә бөгөнгөһө ҡиммәт!

— Тормошҡа ҡарашығыҙҙы асыҡтан-асыҡ әйткән өсөн рәхмәт һеҙгә. Ләкин мин һеҙҙең фәлсәфә менән килешмәйем. Уҡып сыҡтығыҙмы? Ҡул ҡуйығыҙ.

Роман, аяҡтарын кирә баҫып, Законовтың ҡаршыһына туҡтаны.

— Мин һеҙҙең ул яҙмағыҙға ҡул ҡуймайым. Өмөт тә итмәгеҙ. Минең биләмәләремдә бер ҡабат тикшереп, яҙып алып киттеләр инде. Ә һеҙ әллә ниндәй ошаҡсыларҙың һүҙен дөрөҫләп, миңә яла яғырға маташаһығыҙ.

— Уйлабыраҡ һөйләшегеҙ, Лапшин әфәнде. Мин губернатор ҡушҡан эште үтәйем. Унан һуң һеҙҙең ҡул ҡуйыу-ҡуймауығыҙ минең өсөн бик мөһим дә түгел. Бергә тикшергән кешеләрҙең ҡултамғаһы бар, шул еткән.

— Еткәнме, юҡмы, уныһын ҡарап ҡарарбыҙ. Лапшиндең быға тиклем үҙенә яла яғыуға юл ҡуйғаны юҡ!

— Ярар, мин һеҙҙең менән бәхәсте оҙонға һуҙғым

килмәй.— Законов та урынынан торҙо.— Беҙ иртәгә иртүк юлға сығабыҙ. Ат әҙерләтеп ҡуйһағыҙ ине. Унан тағы бер иҫкәртеү яһауҙы кәрәкле һанайым. Ҡаҙна еренә кергән урмандың бер төбөнә лә теймәгеҙ. Юғиһә, эштең бик ҙурға китеүе бар.

— Урынһыҙ иҫкәртеү. Ул урман өсөн мин аҡса түләгәнмен, был турала тейешле документтәрем бар.

— Минең, бигерәк тә эш урманға ҡағылғанда, үҙ һүҙемдән кире ҡайта торған ғәҙәтем юҡ, Лапшин әфәнде. Һәм башлаған эште аҙағынаса еткерергә өйрәнгәнмен. Аръяғын үҙегеҙ уйлағыҙ.

— Уйларбыҙ ҙа, эшләрбеҙ ҙә! — Роман тирмәнән тамам ярһып сығып китте.

Ҡискә табан, күңеле саҡ ҡына тыныслана төшкәс, башына бер уй килеп, Законовҡа һиҙҙермәй генә. Роман землемерҙе саҡыртып алды. Ашамлыҡ-эсемлектәр ҡуйып, өҫтәл әҙерләткәйне. Ховрин ишектә күренеү менән:

— Һеҙҙең был эштә бер ғәйебегеҙ ҙә юҡ,— тип уны шул өҫтәл артына килтереп ултыртты.— Беҙ һеҙҙең менән дуҫтарса айырылырға, киләсәктә лә бер-беребеҙҙе онотмаҫҡа тейешбеҙ.

Аҙыраҡ эсеп алғас, Ховриндең теле бөтөнләй асылды. Ҡарап тороуға йомоҡ күренһә лә, ыштанһыҙ бәндә икән. Әй һүгергә тотондо Законовты.

— Ул социал-демократтар һүҙен һөйләй! Идаралыҡтан ҡыуҙыртам мин уны! — тип ебәрә.

Роман уның «социал-демократ» тигән һүҙенә йәбешеп ятты.

— Уның «киләсәк», «урманды йыртҡыстарса ҡыраһығыҙ» тип һөйләнеүе һис тә юҡтан түгел. Полиция идаралығы начальнигенә уның был һүҙҙәрен кисекмәҫтән еткерәсәкмен,— тине ул.— Һеҙ ҙә ишеттегеҙ бит, Ховрин әфәнде?

— Мин уның тағы ла хәтәрерәк һүҙҙәр һөйләгәнен дә ишеткәнем бар. Әгәр кәрәк икән, мин һәр саҡ һеҙгә ярҙам итергә әҙер, Роман Артемьевич.

Романға юшо ғына кәрәк ине лә. Ул Ховринде йығылғансы һыйланы. Землемер хырылдап йоҡоға киткәс, үҙендә күсер булып йөрөгән, ни ҡушһаң — шуны үтәргә әҙер рус егетен саҡырып алып, уға быш-быш ниҙер әйтте.

Таң алдынан Законов менән землемер йәшәгән тирмә дөрләп янып китте. Ҡешеләр уянып, югерешеп барып еткәндә, Законов күлдәк-ыштандан ғына көйө ут ялмаған

тирмә тирәһендә югергеләп йөрөй ине. Ул ни эшләргә белмәй торған кешеләргә ҡулын болғай, ут эсенә керерҙәй булып, тирмәгә яҡын бара ла:

— Ах... Бөтәһе лә харап булды!..— тип кире сигенә.— Һыу килтерегеҙ! Һыу!..

Шишмә тирмә урынынан алыҫ ҡына ине. Ҡотороноп янған ут бер нисә күнәк һыуҙы төкөрөк тиклем дә күрмәне. Яҡтыра башлауға тирмәнән баҙырып ятҡан ҡуҙҙар ғына тороп ҡалғайны.

Тик шул саҡта ғына килеп еткән Роман башын сайҡап аптыраған булды, ах-ух итте, хеҙмәткәрҙәрен әрләп ташланы. Күлдәк-ыштаны ҡоромға буялып бөткән Законов, уның эргәһенә килеп:

— Был — һинең генә этлек, Лапшин!.. Былай ғына ҡотола алмаҫһың!.. — тип ҡысҡыра башлағайны, Роман уға бик хәтәр ҡараш ташлап:

— Әле һин шулаймы! Нахаҡ бәлә яҡҡан өсөн башыңды төрмәлә серетермен! — тип екерҙе.

Законовтың хәле мөшкөл ине: яҙылған документтәр генә түгел, өҫтөнә кейер кейеме лә юҡ. Тирмәгә ут ныҡлап тоҡанып, арҡаһына ҡыҙыулыҡ бәрелә башлағас ҡына уянып китте шул.

Ни эшләһен, Лапшин биргән кейемде кейеп, ҡоро ҡул ҡайтып китеүҙән башҡа сараһы ҡалманы. Роман иһә тикшереүселәр китеү менән Законов өҫтөнән бик оҙон итеп жалоба яҙҙы ла Ырымбурға ебәрҙе.

Был эштең нисек бөтөүен ул байтаҡ ваҡыт үткәс кенә ишетте. Ҡайтҡас, Законов туҙынып йөрөп ҡараған. Ләкин һүҙен һүҙ итә алмайынса, бөтөнләй икенсе яҡҡа сығып киткән, имеш, тиҙәр.

...Ул контораһына барып ингәндә, күптән түгел өсөнсө ҡабатына килгән чиновник тикшереү актын яҙып бөткәйне инде. Чиновник урманға бер тапҡыр сығып әйләнде лә Норошта балыҡ ҡармаҡларға йөрөнө, кистәрен рәхәтләнеп һыйланды. Әле ана, Лапшинде һөттән аҡ, һыуҙан пак күрһәтеп, акт яҙған. Өсөнсө тикшереүсе һәйбәт кеше булып сыҡты. Актҡа Роман ҙур ихласлыҡ менән ҡул ҡуйҙы.

Ошонан аҙаҡ Роман иркен һулап ҡуйҙы.

## IV

Бикморат Рәхиләне өйөнә оҙатып алды. Төлкөсура уларҙың шул ҡәҙәр татыулыҡтарына ҡарай ҙа шатлана,

шунан моңая — уның йәш ваҡыты заяға үтеп китте бит. Хәҙер уға ҡырҡ дүртенсе йәш, ошоғаса ҡатын менән йәшәү, ғаилә ләззәтен татығаны юҡ. Ул, ауылдаштарын, туған-ырыуын күргәндәй булғас, Белорет тирәһенә барып эшкә урынлашырмын, был Уйылдан, Романдар тирәһендә тыныс тормош булмаç, тип уйлап йөрөгәйне һуңғы көндәрҙә. Яңы өйләнгән ҡустыһы өйҙә иркенләп донъя көтһөн әйҙә. Ул заводта эшләп йыйған аҙ-маҙ аҡсаһын ҡустыһына бирҙе, берәй башмаҡ алып ебәр, һыйыр булыр, тине.

Тормош та бик ауыр ине. Аҡса тотоп йөрөп тә, аҙыҡ табып булмай, игендәр хәтәр ҡиммәтләнде. Ошонан файҙаланып, хәҙер Роман Лапшин дә, Уйылдан да эшселәренә ҡиммәт хаҡтан ҡуйып ҡаҙаҡлап он биреп эшләтеүгә һалышыу китте. Аслыҡ уларға кеçә ҡалынайтырға юл асты, ярлыны уларға ялынып килергә мәжбүр итте. Ошоларҙы күрә лә Төлкөсураның эсе боша. Завод эшселәренең митингеләрҙә: «Беҙгә, көсөбөҙҙө туплап, байҙарҙы һеперепп түкмәйенсә, бәхет һәм азатлыҡ юҡ»,— тигән һүҙҙәрен хәтерләй. Уның ауылындағы кешеләр ошо хәҡиҡәтте аңлаймы икән? Хәйер, был һүҙҙәрҙең ҡасан, нисек тормошҡа ашасағын ул үҙе лә төшөнөп етмәй бит әле.

Был һорауға яуап табыуы еңел түгел ине. Ни булһа ла, Төлкөсура ауылдан китергә йыйынып бөткәйне инде. Хәҙер ҡоҙа булышҡан Ҡотдос тиңдәше, уның китәм тигәнен ишеткәс, ашҡа саҡырып алып:

— Юҡҡа китәһең, ҡоҙа, кеше илендә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тигән мәҡәлде онотмаçҡа кәрәк ине,— тип китмәçкә димләп тә ҡараны, ләкин Төлкөсура үҙ уйынан кире ҡайтманы.

— Олтан булып күп йәшәнек, ҡорҙаш-ҡоҙа,— тине.— Солтан булырға ла тырышып ҡарарға кәрәк. Завод эшселәре ошо хаҡта уйлай хәҙер. Шуға күрә күңел шунда тартыла.

Иртәгә юлға сығам тигән көндө ул ата-әсәһенең, Миңлегөлдөң ҡәбере менән хушлашырға зыяратҡа барҙы. Әйткән һүҙендә тороп, әсәһенең ҡәбере эргәһенә бер сауҡа ла ултыртты. Әкрен атлап, әллә ниндәй уйҙарға тарып ҡайтып килһә, әлеге Сажидә тағы һыуға төшкән. Уның күнәктәрен ҡабат-ҡабат сайҡатып, билен һығылдырып һыу алғанын йылға аша күҙәтеп торҙо Төлкөсура. Их, исмаһам, ошо Сажидә ауылда булмаһын ине. Йәшлек

сәхифәләре аҡтарылмаҫ, үкенес тойғолары көн дә яңырып тормаҫ ине. Күңеле һәр саҡ ошо ҡатынды күрергә ынтылһа ла, ул үҙ тойғоларын үҙе ауыҙлыҡлай. Ни эшләйһең инде, Сажидәгә бит ул йәш саҡта осратҡанында мөхәббәте хаҡында бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтмәне. Мөхәббәт, имеш, шулай булдымы икән һуң әле ул? Бәлки, ҡоро һоҡланыу, алыҫтағы ялтыр әйбергә ынтылған сабый кеүек, юҡҡа ымһыныу ғына булғандыр. Хәҙер кеше ҡатынына өмөтләнеп йөрөргә ни хаҡы бар уның?

Сажидә һыу алды ла, еләненең еңдәрен тартҡылап, сәстәрен шәле аҫтына юнәтеп ҡыҫтырып китергә ҡабаланмай тора бирҙе. Шунан ул Төлкөсура яғына боролоп ҡараны, ҡыйғас ҡаштарын ҡыйылдырып йылмайҙы.

— Ниңә былай сыҡмайһың, Төлкөсура ағай?

Бәй, әллә, ысынлап та, уның сыҡҡанын көтөп торамы? Төлкөсура биш-алты таштан ғына һалынған баҫманан аталанып сығып килгәнендә тайып йығыла яҙҙы, шаптор-шоптор һыуға төшөп китте лә һай йылғаның ҡалған өлөшөн кисеп сыҡты. Сажидә иһә шул тиклем саф, ҡыҙҙарса матур тауыш менән сыңғыратып көлдө.

— Батып үлмә, Төлкөсура ағай, мине ғәйепле итерһең!..

Төлкөсура ярға сыҡты, туп-тура уның эргәһенә килде һәм, үҙенең ни эшләгәненә һис тә иҫәп биреп тормаҫтан, Сажидәнең ҡулын тотоп алды. Ул үҙен-үҙе тыйыр, аҡыл менән уйлар хәлдә түгел ине. Сажидәнең алсаҡ өндәшеүе бөтәһен бер юлы онотторҙо ла ҡуйҙы.

— Сажидә, беләһеңме... мин бит һине һаман теге саҡтағы ҡыҙыҡай итеп күҙ алдыма килтерәм.

— Ул саҡтар үтте инде, Төлкөсура ағай... Ебәр ҡулымды, кеше-фәлән күрер...

— Күрһә ни, мин кешенән ҡурҡып йәшәүҙән үткәнмен,— шулай тиһә лә, Төлкөсура уның ҡулын ысҡындырҙы.

— Минең дә һин ҡайтҡаны бирле тынныслығым китте. Һинең те-геее саҡтарҙа ҡурай уйнап тороуҙарың, һелкетә баҫып йөрөүҙәрең күҙ алдыма килә. Әле лә бына ошо яҡҡа киткәнеңде күреп ҡалғайным, Төлкөсура...

— Шунан һыуға төштөңмө? — Төлкөсура, күҙҙәре осҡонланып, тағы уға ынтылды.

— Эйе... Һин ҡабат теймә миңә.— Сажидә күнәктәрен көйәнтәләне.— Китәйем. Оҙаҡ һөйләшеп тороу ярамай

беҙгә. Һин ҡайтҡаны бирле Уйылдан былай ҙа утҡа баҫҡан бесәй кеүек йөрөй.

Сажидә уға әллә ни хәтлем һөйләнмәгән сер аңлатыуҫы ҡараш ташланы ла ҡайтыу яғына ҡуҙғалды.

Ҡапыл осрашҡандан, Сажидәнән өмөтлө һүҙҙәр ишеткәндән аҙаҡ албырғабыраҡ ҡалған Төлкөсура югерә-атлап уны ҡыуып етте.

— Сажидә, һинең менән яйлап бер һөйләшкем килә минең. Осрашһаҡ ине...

Сажидә, ике ҡулын да көйәнтәләренә һуҙып һалган килеш, аяҡ осона төбәлеп, һүҙһеҙ тора биргәс:

— Ҡараңғы төшкәс ошонда кил, йәме, — тине. Шунан өҫтәне: — Анау сауҡалар араһында көтөп торормон.

Сажидә китеп барҙы. Төлкөсура уға күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙо ла сәсрәтә баҫып һыуҙы кире кисеп сыҡты һәм ботаҡ остарында һирәк-мирәк һары япраҡтары ғына ҡалған сауҡалыҡ араһынан Ҡайынлытауға табан югерә-атлай китеп барҙы. Зыярат аръяғындағы тау битләүендәге ап-аҡ ҡайындарҙы ҡосаҡлай-ҡосаҡлай:

— Эй, ҡайындар, ерем, һыуым, һауам! Шулай уҡ мин дә мөхәббәтемде таптыммы икән ни? — тип һөйләнә, икенсе ҡайынға күсеп: — Таптым бит мин уны! — тип үҙ һорауына үҙе үк яуап бирә.— Ул да мине ярата... Я-ратаа!..

Ситтән берәйһе ҡарап торһа, был аяуһыҙ көслө, ләкин йәшлек йылдары каторганың мәңге туң юлдарында тапалып ҡалған, бер ауыҙ йылы һүҙгә мохтаж ҡырҡ дүрт йәшлек кешегә тәүге мөхәббәт уты-ялҡыны менән килеп инеүен аңламаҫ, ҡоторған икән, тип уйлар ине.

Ул ҡайтып ингәс, Рәхилә лә аптырап китте: ҡайнағаһы бөтөнләй үҙгәргән, моңһоу күҙҙәрендә дәрт балҡып тора. Рәхилә уның йәш ваҡытын күрһә, Төлкөсураны ун туғыҙ йәштәге сағына кире ҡайтҡан, тип уйлар ине.

— Бикморат ҡайтманымы ни әле, килен?

— Әллә ниңә һаман юҡсы. Һин дә иртәгә китер булғас, иртәрәк ҡайтырмын, тигәйне. Бер-бер хәл булмаһын тип, ҡотом осоп торам.

— Иренде бына шулай һағынып, борсолоп көтөп ала белеүең һәйбәт, килен. Ә мин әле генә китмәҫкә булдым.

— Шулаймы ни? Бик дөрөҫ эшләгәнһең, ҡайнаға. Атайым да, юҡҡа китә, тип борсола ине.

— Килен, һин минең анау яңыраҡ күлдәкте йыуып

ҡуйғайның шикелле, алып бирһәңсе. Ана, Бикморат та ҡайтып килә.

Ағаһының кейенеп-яһанып торғанын күргәс, Бикморат ишек төбөндә туҡтап ҡалды.

— Хәҙер үк китергә тормайһыңдыр ҙа инде?

— Юҡ, ҡустым, иртәгә лә, иртәнән һуң да китмәм әле.

— Әллә кире уйланыңмы?

— Ҡапылда белмәйем. Бер эш сығып тора.

— Ашарыңа бештеме, Рәхилә? Ағайымды оҙатырға бынау бер яртыны алып ҡайтыу өсөн баярҙың лавкаһын көтөп оҙаҡланым.

Табынға ултырғас, ағаһындағы үҙгәреште Бикморат та абайланы.

— Ағай, бөгөн һин бик сәйер күренәһең.

— Булыр, ҡустым, булыр.

— Ни бар һуң?

— Юҡ та... Ҡана берәрҙе төшөрәйек тә...

— Шунан?

— Йәш саҡта беҙ «ҡыйыулыҡ өсөн» ти торғайныҡ,— Төлкөсура хәйләкәр йылмайҙы.

— Бер ни ҙә аңламайым, ағай.

— Аңларһың әле.

Ҡараңғы төшкәйне инде. Төлкөсура сыра яҡтыһында сәсен тараны; ҡуйы ҡара сәсе ҡабарып, уға харап күркәм төҫ биреп тора ине. Салбарын һыпырғыланы, йыуғыс менән итегенә сәсрәштергән батҡаҡты һөртөп таҙартты һәм ишек алдына барып туп-тура баҫты ла:

— Йә, егеткә оҡшаныммы? — тип көлдө.

— Ҡыҙҙар артыңдан ҡалмаҫ, ағай.

— Ярай, улай булһа, мин киттем.

Йәштәр уның сәйер ҡыланышына аптырап ултырып ҡалды.

Төлкөсура иһә төүҙә үҙҙәренең кәртә артына сыҡты, шунан йылға буйына төшөп, аръяҡтағы сауҡалыҡҡа юнәлде. «Сығырмы икән? Әгәр шаяртып ҡына әйткән булһа?» — тигән уй борсой башланы уны.

* *
*

Сажидә Ҡаратауҙа ун һигеҙенсе йыл тора ине инде. Тамағы туҡ, өҫтө бөтөн. Уйылдан уны өлкән бисәһенән

дә бик үк ҡаҡтырмай. Ләкин күңеле һәр саҡ китек Сажидәнең. Уйылдан көслөк менән алған кисгә яраланған йөрәге һаман уңалмай.

Булманы инде бәхеттәре булмағас. Ул сабый сағында уҡ етем ҡалып, үгәй әсә ҡулында үҫте. Үгәй әсәйҙең дә ниндәйе ине бит әле — иң уҫалы, иң яһиле. Биш-алты йәшлек Сажидәне, балалығына барып, аҙ ғына кирелән-деме, ҡышҡы һыуыҡтарҙа яланаяҡ көйө тышҡа елтерәтеп сығарып ебәрер ине. Сажидә солан мөйөшөнә баҫа ла тик тора. Аяҡтары сәңкеп өшөй, йөрәк-бауырҙары туңа башлаған төҫлө тойола. Шунан ғына өй ишеге шағырҙап асыла.

— Туңманыңмы әле, ҡәһәр һуҡҡыры! — тип екерә үгәй әсә.— Ин! Эт балаһына ни булыр тиһең!.. Иламай ҙа бит, исмаһам, етем башмаҡ!

Әллә ниңә иламай торғайны шул Сажидә. Үгәй әсәһе уны әйләнгән һайын туҡмай, төрлөсә язалай, ә ул иренен тешләй ҙә өнөн дә сығармай. Ауырып ятҡанын да хәтерләмәй ул. Бәләкәйҙән беше булып үҫте. Эшкә лә ҡатынҡы өйрәнде. Һигеҙ йәшендә гөбөрҙәтеп һыйыр һа-уыр, әллә ҡайҙағы ҡойонан көйәнтәләп һыу ташыр ине.

Ун өс йәшенә тиклем шулай йөрөнө лә, сыҙаманы, ауылдарына егерме биш саҡрымдағы Стәрлегә йәйәүләп сыҡты ла китте. Эш эҙләп йөрөй торғас, ҡунаҡханаға килеп инде.

— Һинең ҡулыңдан ни килә һуң? Бала ғына бит әле һин,— тине хужа, уның сибек кәүҙәһенә күҙ ташлап.

— Ниндәй эшең бар, бөтәһен дә эшләйем,— тип үк ебәрҙе Сажидә.— Һыйыр һауам, кер, иҙән йыуам, һыу ташыйым,— тип теҙеп алып китте.

Сөнки уға ебеп төшөргә ярамай ине, бөгөндән ашарына кәрәк ине. Ҡыҙҙың шулай өҙә һөйләшеүе хужаға оҡшаны булһа кәрәк.

— Ни эшләп ҡарайһы икән һуң? — тип үҙенә-үҙе һорау биреп, аҙыраҡ һүҙһеҙ ултырҙы.— Йәлһең бит әле.

— Тамағымды туйҙырһағыҙ, миңә шул еткән, ағай,— тине Сажидә, хужаның кире уйлап ҡуйыуынан ҡурҡып.

Шул саҡ хужаның ҡатыны ҡайҙалыр киткән еренән ҡайтып инде. Ире һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән:

— Тамам йонсоном, ҡарт, бер нәмәгә өлгөрмәйем Ваҡ-төйәккә эшкинер әле. Һынамаҡҡа алайыҡ,— тине.

Сажидә хужаларҙы иртәгеһенә үк хайран ҡалдырҙы. Улар тороуға юлаусылар инеп-сығып йөрөп аяуһыҙ быс-

ратҡан веранданы, соланды ялт иттереп йыуып, ишек алдарын һепереп ҡуйҙы. Шунан көндөң көнө буйы бил дә яҙмай бөтә бүлмәләрҙең иҙәнен йыуҙы, саң ҡатҡан гәҙрәләрен таҙартты. Ҡисен ҡатыны хужаға:

— Былдай баланы күргән юҡ ине! Ҡурсаҡтай кәүҙәһенең ҡайһы ерендә шул тиклем көс барҙыр инде. Бигерәк уңған күренә,— тип Сажидәне маҡтап та, һоҡланып та һөйләне.

Үҙенә һүҙ тейҙермәҫкә тырышып, шулай йөрөгәс тә, ҡыйын ине Сажидәгә. Йоҡларға яттымы, ҡуҙғала ла алмай, биле ауырта, беләктәре һыҙлай. Тик күңеле тыныс, тамағы туҡ ине уның хәҙер. Шуғалыр инде, бер йыл самаһы үтеүгә ул шөйлә ит ултырып, кәүҙәгә йомороланып китте. Битфәре алһыуланып, йөҙө түңәрәкләнде, еткән ҡыҙҙар ҡиәфәте инә башланы. Йылмаяғыраҡ юлаусылар уға шаяртып һүҙ ҡуша, күҙен-ҡашын уйнатып өндәшә. Ләкин Сажидә былдайҙарға иҫе китеп бармай, әсе-әсе генә һүҙҙәр тондора ла үҙ эшен дауам итә.

Ҡарағусҡыл йөҙлө, мыҡты кәүҙәле, йәй көнө лә башына төлкө бүрек кейгән Төлкөсураны тәү күргәс үк уның йөрәге әллә ни эшләне. Был егеттә бүтәндәрҙә һис тә булмаған әллә ни ҡәҙәрлем сифаттар тапты ул. Уның ҡурай уйнағанын ишеткәс иһә, уға башы-тояғы менән ғашиҡ булды ла ҡуйҙы. Тик ул егет иртәгеһенә үк китеп барҙы. «Эй хоҙайым, шулай уҡ бүтәнсә күрә алмаммы икән ни мин уны!» — тип өҙгөләнде ул. Ошонан аҙаҡ ҡапҡанан юлаусылар килеп иһә, улар араһынан ҡаштары юғары сөйөлгән, бөркөт ҡарашлы егетте эҙләр, тапмағас, эсе бошоп, ҡулына эш бармай йөрөр ине.

Көҙ көнө Төлкөсура тағы килгәс, эй ҡыуанғайны Сажидә, ҡанатланып осор сиккә еткәйне. Исемен дә белде егеттең. Күҙҙәренең осҡонланып янырынан ҡыҙҙарҙа ғына була торған һиҙгерлек менән егеттең үҙенә тыныс ҡарай алмауын тойомланы. Тик һөйләшә алманылар. Төлкөсура китте лә ҡабат әйләнеп килмәне.

Шулай ҙа онота алманы уны Сажидә. Тағы бер осратырға, һөйләшеп, йөрәк серҙәрен тиреп, танһығын ҡандырырға өмөтләнде. Өс-дүрт йыл үтте, ләкин Төлкөсура күренмәне. Сажидә йәкшәмбе көндәрендә урамға сыға, юлдан үткән атлыларҙы күҙәтә, шунан баҙар яғына югерә: Төлкөсура күренмәҫме? Бәхетте эҙләп табып булмай, тигәндәре шулдыр инде, уның йөрәген тәү башлап ҡуҙғатҡан егет һыуға батҡандай ғәйеп булды.

Бынан ун һигеҙ йыл элек әллә нисәмә ылау менән һалабаш юкәһе тейәтеп килгән Уйылдан, бешеп өлгөрөп, иртәнге ысыҡ сылатҡан кеүек, сафлыҡ сәсеп торған Сажидәгә тәү күреүендә үк күҙе төштө. Уның етем ҡыҙ икәнен белгәс, ҡунаҡхана хужаһын үҙе урынлашҡан айырым бүлмәгә саҡырып индерҙе лә:

— Сабир ағай, минә анау ҡыҙыңды һыйла, — тине туранан-тура. — Буш итмәм. Минең кем икәнде беләһең.

Сабир угата егәрле, һөймәлекле Сажидәнең ҡасан да бер үҙенән китерен белә, шулай ҙа уны һис кенә лә ситкә ебәргеһе килмәй ине. Хатта йыш ҡына: «Их, улым юҡ бит! Килен генә итер инем», — тип уйлай. Шунан ҡаланан арыу ғына кейәү табырына, Сажидәне үҙендә һаман хеҙмәтсе итеп ҡалдырырға өмөтләнеп, күңелен йыуата ине. Хәҙер килеп, Ҡаратау старшинаһы икенсе бисәлеккә алып китергә самалай. Юҡ инде, бәләкәй сағынан аҫрап, буйға еткереп, әллә ҡайҙа тотторон ебәрәһе юҡ.

— Булмай, Уйылдан туған. Йәрәшелгән, эше бөткән Сажидәнең оҙаҡламай никах уҡытып, туйын үткәрергә торабыҙ, — тип, һүҙҙе оҙонға һуҙмау өсөн, тап-таҙа алданы Сабир.

Тик уның был хәйләһе Уйылданға, старшиналығын да онотоп, дыуамал юлға баҫырға ғына ярҙам итте. Уйылдандың кешеләре икенсе төнөнә үк Сажидәне урлап алып киттеләр. Юлдағы бер ауылда уҡ ишәп әйттереп, Уйылдан Ҡаратауға йәш ҡатын менән ҡайтып төштө.

Сажидәнең һылыулығына мөкиббән ғашиҡ булып, дыуамалланып, үтә ҡапыл икенсе ҡатын алып ҡайтыуы уға әллә ни тиклем мәшәҡәттәр, ҡыялҡылар, борсолоуҙар ҙа татытты.

Теге йылда атаһы көтмәгәндә үлеп киткәс, Уйылдандың әсәһе ҡайғы-хәсрәттән бик тиҙ бөтөрөндө, хатта ашһыу әҙерләрлек тә рәте ҡалманы. Шуға күрә Уйылдан, һис тә күп уйлап тормай, Низам мулланың уртансы ҡыҙы Хәтирәгә өйләнгәйне. Хәтирә — түңәрәк йөҙлө, әллә ни матурлығы булмаһа ла, ир-ат иғтибарын ылыҡтырырҙай йоморо кәүҙәле, төйөрөм генә ҡыҙ ине. Хәбәрҙе лә күп һөйләмәй, бисә-сәсә менән дә артыҡ аралашмай. Әрпешерәк булһа ла, донъя эшен үҙ көйөнә алып бара. Тик быны аш-һыу тәрбиәһен белмәүе Уйылдандың йәнен көйҙөрә: Хәтирәнең йә икмәге бысый бешер, ашҡа тоҙҙо йә ҡырҡыу һалыр, йә сыҡмаҫ, һурпаһы үтә шыйыҡ йә ҡуйы

булыр ине. Ә инде бал ҡойоу, күбек май бешеү, ҡымыҙ әсетеү кеүек айырыуса оҫталыҡ талап иткән эштәрҙе ул ҡулына ла алып ҡараманы. Уларын Уйылдан үҙенең ихатаһында эшләүсе кешенең ҡатынына ҡуша. Ҡайһы саҡта Хәтирәне: «Эшлекһеҙ, шул да ҡулыңдан килмәй!» — тип әрләп ташлай. Тик Хәтирә әрләү-фәләнгә генә ҡыҡтайып бармай, ҡаршы һүҙ ҙә әйтмәй, иренең әрен ишетмәгән кеүек, тик йөрөй. Илла-мәгәр түлсән булып сыҡты үҙе. Йәшәй башлауҙарына ете йыл — шалҡандай дүрт балаһы сыр-сыу килеп йөрөй, бишенсеһе буйында.

Тәү ҡарашҡа бик сабыр, хатта һиңмайыраҡ күренгән Хәтирә, ире йәш бисә менән ҡайтып төшкәйне, Уйылдан һис уйламағанса, яман туҙҙы ла китте.

— Алмалай сағымда көндәш менән донъя көтөр хәлем юҡ! Йә — ул, йә — мин! — тип бик өҙә һөйләште.

Уйылдан уны тәүҙән үк буйлатмаҫ өсөн:

— Мин биш бисә лә алырмын! Унда эшең булмаһын! — тип ҡыҫҡа тоторға уйлағайны, Хәтирә бөтәһен күтәреп һуғып аталарына ҡайтты ла китте.

Өс көн буйы дүрт бала сыр-сыу килеп илашты, ауыл буйынса әллә ни хәтлем ләстит хәбәр таралды, йәш бисә төшһә лә, Уйылдан донъяһының ҡото китте. Ул тәүҙә Хәтирәне, ғауғалар ҙа, баҫылғас, кире ҡайтыр, балаларын ташлап ҡайҙа барыр тиһең, тип уйлағайны. Хәтирә һаман, кеше аша ишетеүенә ҡарағанда, атаһының әрләүен ҡолағына ла элмәй, шул килмешәк татар эргәһенә барасағым юҡ, тип ныҡ торғас, аптырабыраҡ ҡалды. Икенсе көнөнә, балаларының зыҡ ҡубып илашыуына түҙә алмағас, Хәтирә артынан Низам муллаларға китмәксе булғайны, түшәктә ауырып ятҡан әсәһе:

— Аҡылың булһа, ике аяғыңдың береһен атлама!.. Бисәңде елкәңә мендереп ултыртҡың киләме?! — тип ағыуын сәсте.

Етмәһә бит әле, төпкө өйҙәге Сажидә ал-ял белмәй илай; Уйылдан килеп индеме, төпкә боролоп ултыра ла бер ауыҙ һүҙ ҡушмай. Ҡайҙа барып бәрелергә, ни ҡылырға белмәй, аптыраны Уйылдан. Сажидәне алып ҡайтыуына үкенмәй ине ул. Хәтирә менән ни ҡылыу әмәлен тапмай. Айырып та ебәрер ине, әллә ни үкенер ере лә юҡ; тик бынау дүрт балаһы йәл, бигерәк ярата ине шуларҙы; өҫтәүенә, бишенсеһе булырға тора.

Балалар — донъя тотҡаһы, тип белеп әйткәндәр шул. Балаларынан айырылып оҙаҡ түҙмәне Хәтирә лә, дүртен-

се көнөнә килеп етте. Тырт-мырт атлап өйгә бер инде, бер сыҡты, ахырҙа түҙмәне, әле саҡ атлай башлаған малайын ҡосаҡланы ла буҫығып иларға тотондо.

Уйылданға ҡайһылыр мәлгә бик йәл тойолдо ул. Тик Хәтирәне йыуатҡанды Сажидә күрер ҙә тағы үҙенә яҡын юлатмаҫ тип, уның эргәһенә барырға, йылы һүҙ әйтергә баҙнат итмәй, тамағын ҡырғылап, елкәһен ыуалай-ыуалай ары-бире йөрөүҙән уҙа алмай. Шулай көн үтте, кис булды. Хәтирә иң алғы өйҙөң урындығына урын йәйҙе лә балаларын шунда теҙеп һалды һәм көнө буйы рәтләп тамағына ашамаған, төҫө ҡасҡан Уйылданға:

— Балаларың эргәһенән бер аҙым ситкә китмә! Ҡарап йоҡлат! — тине лә үҙе ҡәйнәһе ятҡан урта өйгә инеп бикләнде.

Уйылдан был буталсыҡтарҙы, ғауғаны ҙурға олғаштырмай үткәрер ебәреренә өмөтләнә ине әле һаман. Шуға күрә, төпкө өйҙәге Сажидәнән айырылып ҡалһа ла, ярар, бер кискә сыҙарға кәрәк, тип, өндәшмәне, балалары эргәһенә ятты. Тик йоҡлар хәлдә түгел ине ул. Башы зыңҡып тора, мейеһенә әллә ниндәй буталсыҡ уйҙар тығыла. Уйылдан бигерәк тә Хәтирәнең төпкө өйгә — Сажидә эргәһенә барып инеп, оло тауыш күтәреүенән ҡурҡа һәм шылт иткән тауышҡа ла ҡолаҡ һалып ята ине.

Арҡаһына кемдеңдер йомшаҡ ҡына ҡағылыуына терт итеп ҡалды ул. Хәтирәһенең үҙенә һырынып килеп ятҡанын белгәс, аптыраны: китсәле, туптай кәүҙәле Хәтирә шулай бесәй кеүек шым атлап йөрөй аламы икән ни? Уның урта өй ишеген асып сыҡҡанын да, эргәһенә атлап килеүен дә һиҙмәне бит. Уйылданды ҡосаҡлап алды ул, эҫе тыны менән яурын башын бешерҙе. Үҙе туҡтауһыҙ бер үк һүҙҙәрҙе бышылдай:

— Бирмәйем мин һине уға! Бирмәйем!..

Ни тип әйтергә лә белмәй Уйылдан. Хәтирәнең былай сығып ятҡанын Сажидә һиҙҙеме икән? — Ошо мәлдә уның өсөн ошо һорауға яуап табыуҙан да мөһимерәк эш юҡ ине. Йәш бисә алғандан аҙаҡ уның, моғайын, иң ауыр, икегә ярылырҙай ытырғанып, кисерештәргә бирелгән минуттары булғандыр был. Хәтирәһен ҡосаҡлап, арҡаһынан һыйпаштырып, йылы һүҙ әйтергә, күңелен күрергә самалай ҙа, шундуҡ ҡараңғы төпкө өйҙә япа-яңғыҙы ултырған Сажидәне күҙ алдына килтерә һәм ҡыбырҙарға ла ҡурҡып ята бирә. Хәтирә иһә һаман уға һыйына, өҙләкһеҙ бышылдай:

— Бирмәйем мин!.. Бирмәйем килмешәк татарыңа!..

Ахырҙа Уйылдан был көсөргәнештән ҡотолорға ҡарар итте: әйләнеп, Хәтирәһенең итләс, тығыҙ кәүҙәһенә ҡулын һалды...

Төпкө өйҙәге Сажидә уларҙың ни һөйләшеүе, ни ҡыланыуы хаҡында уйлап та бирмәй, тәҙрә төпһәһына терһәкләнгән дә, быялаға килеп һарлыҡҡан ҡараңғылыҡҡа төбәлеп, уйға батҡан. Стәрлетамаҡтан урлап алып кителеүенә алты көн генә үтте, ә ул шул тиклем ныҡ үҙгәргән: сырайы ап-аҡ, зәңгәр күҙҙәре упайып ҡалған, улар моңхәсрәт менән тулы, ҡасан ғына әле сафлыҡ бөркөп торған бөрләгәндәй һутлы ирендәре хәҙер күгелйем төҫкә ингән, ҡужырмаҡланып, сатнап ярылған. Уның яраланған, кәмһетелгән йөрәгенән өҙлөкһөҙ хәсрәт һарҡа: «Әй хоҙайым, ғүмеркәйҙәрем ошонда төңөлөп уҙырмы икән ни? Ниңә минән бәхеткәйҙәренде йәлләнең? Йө, был донъяға тыуып, ниндәй рәхәтлек күрҙем мин? Бала сағым етемлектә, үгәй әсә ҡулында үтте, унан кеше тупһаһы төбөндә юлаусы бысрағын таҙартып йөрөлдө. Ярай әле унда, хәлдән тайғансы эшләһәм дә, күңелем ирекле ине. Хәҙер бына ситлектәге ҡош шикелле ултыр инде...» Сажидә ауыр көрһөндө, боролоп, ҡараңғы өй эсенә күҙ югерткәйне, ысынбарлыҡҡа ҡайтты. Ниңә бер тауыш-тын юҡ? Ул килгәне бирле өйҙә балалар илашыуы тынып тормағайны, Уйылдан эргәһенән китешмәй ине, әле ҡайҙа улар? Сажидә әллә был өйҙә бер үҙе ултырып ҡалғанмы?

Ул, күңеле болоҡһоп, урта ишекте этеп ҡараны, — бикле... Әәә-ййй, балалар ниңә илаһын бөгөн, әсәләре бында бит. Уйылдан да шул бисәһе эргәһендә йоҡлап яталыр әле... Ә иртәгә... иртәгә ул тағы, туҡал үгеҙ һымаҡ һөмһөҙләнеп, уның ҡуйынына сумыр...

Ошо хәл күҙ алдына килгәс, Сажидә иҙән уртаһында ҡапыл туҡтаны, арҡа һабаҡтарын зымбырҙатып, бөтә тәне буйынса һалҡынлыҡ югерҙе. Иртәгә ул бөгөн икенсе бисә менән йоҡлаған кешенең ҡуйынында ятырмы? Ғүмер баҡый ошондай тормошта йәшәрме?..

Был мәлдә уның күңелендә ошо хәлдән ҡотолорға теләү тойғоһонан башҡа уй юҡ ине. Ул асмалы тәҙрә эргәһенә килде, уны ипләп кенә асты ла, өҫтөндә ни бар, шул кейеме менән тышҡа сыҡты һәм, һис оҙаҡ уйлап тормаҫтан, тыҡрыҡ буйлап югерҙе. Йәйге ҡыҫҡа төн үтеп, таң ҡыйылып килә ине инде. Сажидә, ауыл ситенә сыҡҡас, тирә-яғына күҙ һалды. Әһә, улар анау туғайҙағы

оло юлдан килеп ингәйнеләр бит әле ауылға. Шунда сығырға ла Стәрле яғына ҡарай ысҡынырға кәрәк.

Таш юлға төшкәс, ҡараңғыла юлын ыратып ҡалыу өсөн, ул югерергә тотондо. Их, ҡабаланып, ойоҡсан көйө сығып киткән бит. Ваҡ ташҡа баҫҡан һайын табаны ауырта. Сажидә юлдан ситкә — йомшаҡ ергә сығып, шунан югерҙе. Бындағы ысыҡ ойоғон, күлдәк итәктәрен лысма һыу итте. Ләкин ул, маңлайына, битенә бәреп сыҡҡан тирҙе ҡул һырты менән һыныра-һыпыра, һаман алға ынтылды. Ниндәйҙер ҙур тауҙы менеп бөткәс кенә, хәлһеҙләнеп, ауыр ысыҡтар эйелткән ҡуйы үлән араһына ауҙы...

Иҫенә килеп, күҙен асһа, ҡояш сыҡҡан, уның тирә-яғында ысыҡ бөртөктәре йым-йым итә. Һауа шул тиклем саф, уны услап-услап һемереп эске килә. Баш осонда ғына ҡоштар һайраша, ә зәңгәр күк шундай бейек...

Ошо рәхәтлеккә сумып ят та ят инең дә бит, Сажидә был тирәнән мөмкин тиклем тиҙерәк алыҫ китергә тейеш. Бына ул ырғып торҙо, тирә-яғындағы ҡуйы урманға ҡото осоп ҡараны. Их, үҙенең ялан яҡтарына барып сыҡһа, ҡоштай осор ине! Ҡасан йырып сыға ошо урманды...

Ул юлға төштө лә югерә-атлай ары ҡуҙғалды. Күп тә ер китмәне, артында сабып килгән ат тояҡтары тауышын ишетте. Әллә алдан әҙерлекһеҙ, үтә ҡапыл сығып киткәнгә инде, Уйылдандың артынан ҡыуа төшөрөн уйлап та ҡарамағайны. Әле ошо уй башына килеп, юлдан ҡапыл ситкә һикерҙе, урман эсенә ынтылды, ләкин һуң ине инде. Боролоштан йән-фарманға сабып килеп сыҡҡан Уйылдан уны абайлап ҡалды, уның тәңгәленә еткәс, аты туҡтар-туҡтамаҫтан ергә һикерҙе. Бына Сажидә артынан югергән аяҡ тауыштарын ишетә, тик һаман туҡтамай, битен ағас ботаҡтарына бәрә-бәрә алға ынтылды.

Ошо ерҙә айыу баҫтырып атып, бүре һуғып, урманды үҙ өйөндәй күреп үҫкән Уйылдан ҡулынан ҡотола аламы ни инде? Бына уның тауышы ҡолағы төбөндә генә тиерлек ишетелә:

— Сажидә!.. Туҡта!.. Туҡта инде!..

Сажидә ниндәйҙер ботаҡҡа эләгеп йығылды, шулай ҙа Уйылдан эргәһенә килеп еткәнсе тороп баҫырға өлгөрҙө, йыуан имәнгә һөйәлде лә, нәфрәт сәскән ҡарашын уға төбәп, ҡатып ҡалды. Югереп килгән Уйылдан ҡапыл туҡтаны, аҙыраҡ һүҙһеҙ торҙо, шунан:

— Сажидә!..— тип, ҡулын һоноп, уға табан атланы.

— Яҡын юлама! Ҡайтып кит бисәң янына!..

Уйылдан был хәтәр киҫә әйтелгән һүҙҙәрҙе ишетеп тертләне, тағы туҡтаны, һәм, күрәһең, шул арала иҫен йыйып өлгөрҙө, Сажидәне йомшаҡ һүҙ менән еңә алмаҫын төшөндө. Югерә-атлай килде лә Сажидәне ҡосаҡлап күтәреп алды, лап-лоп баҫып юлға табан атланы. Биш төн, биш көн йоҡламай борсолоуҙар, бөгөн ун саҡрымдан ашыу юлды югереп үтеү бөтөнләй хәлдән тайҙырғайны Сажидәне, шуға күрә артыҡ ҡаршылаша алманы.

Уйылдан шул кисте үк пар ат ектерҙе лә, Сажидәне кырандасҡа йәнәшә ултыртып, Хажы ауылына юл тотто, Низам мулланың үҙ ҡыҙы өҫтөнә килгән ҡатынға никах уҡымаҫы тәғәйен билдәле булғанлыҡтан, ошо ғөрөфтө Хажы муллаһы алдына барып үтәтеп ҡуйырға теләй ине Уйылдан. Шулай никах уҡытып, араны нығытҡас, Сажидә әллә ҡайҙа бара алмаҫ, тип уйлай ине ул.

Бынан һуң Сажидә, ысынлап та, ҡасырға, бынан ҡотолорға ынтылманы. Сөнки ҡасып бер ҡайҙа ла бара алмаҫын белә ине инде. Тешен ҡыҫып йөрөп, кешеләргә күрһәтмәй генә илап-һыҡтап үткәрҙе ул артабанғы көндәрен. Көндәше аҡшайып ҡараған, ары-бире үткән һайын терһәге менән төрткән саҡтарҙа йөрәктәре сыға яҙа ине. Ә берҙән-бер көндө Хәтирә, һүҙҙән-һүҙ сығып, уның башына уҡлау менән һуҡты. Сажидә, бәләкәйҙән эшләп үҫкәнлектән, ҡаты ҡуллы ине. Туптай кәүҙәле Хәтирәне дөрмәкләтеп алып барып урындыҡҡа йыҡты ла өҫтөнә үк менеп китте. Тик Хәтирә лә уның битен яра тырнап алырға өлгөрҙө.

Был хәлде күреп, Уйылдан енләнде лә китте. Хәтирәне ҡайыш сыбыртҡы менән ярырға тотондо. Һуҡҡан һайын:

— Уға икенсе теймәҫһеңме? Теймәҫһеңме?— тип ҡысҡыра бит әле. Хәтирәһе үкереп илай, сәбәләнә.

Сажидәнең ниңәлер күрә тороп бисә кешене уҫлаптай ирҙән туҡматҡыһы килмәне. Ҡапыл улар араһына инде лә:

— Миңә лә һуҡ, йә, һуҡ! Йә!..— тип ҡысҡырҙы.

Күҙенә ҡан һауған Уйылдан был көтөлмәгән хәлдән ҡапыл айныны, уның һуғырға һелтәнгән ҡамсыһының осо Сажидәнең беләген көйҙөрөп үтте лә түбәнгә һалынды.

— Ух, мин һеҙҙе!..— тип төкөрөгөн сәсте Уйылдан һәм дөп-дөп атлап төпкө өйөнә инеп бикләнде.

Ошо хәлдән аҙаҡ Хәтирә лә йыуашая төштө. Сажидә иһә, мин күрерҙе кем күрһен, тип әкертенләп йәшәп алып китте.

Үҙенең күңелендә уйылып ҡалған Төлкөсураның ауылында йәшәүен ул бер аҙҙан һуң ғына белде. Төлкөсураның ни өсөн һөргөнгә киткәнен дә ишетте. Әллә ағаһына оҡшап торғанға инде, Бикморатты күрһә, Төлкөсураны иҫенә төшөрә лә әллә ниндәй моңһоу уйҙарға бирелә ине. Ә бер мәл халыҡ араһында, Төлкөсура һөргөндән ҡасып ҡайтҡан да урманда б́оҫоп йәшәй икән, уның янында бүтән ҡасаҡтар ҙа бар, имеш, тигән хәбәр таралғас, Сажидә әллә ниндәй өмөт менән йәшәй башланы. Берәй көндө Төлкөсура үҙенең иптәштәре менән ауылға елеп килеп инер ҙә уны Уйылдан ҡулынан тартып алыр кеүек тойола ине уға. Тик көндәр, айҙар, йылдар уҙҙы, уның был өмөтө лә уҫаҡ ҡуҙы шикелле көлгә әүерелде...

Ҡилеүенә бер йыл самаһы үткәс, уны Уйылдан атаһы менән үгәй әсәһе йәшәгән Ашҡаҙар буйындағы ауылына ла алып барҙы. Уйылдан ике тәпән бал, бер күнәк май биргәс, үгәй әсә ирееп төштө, юғын да б́ар итеп, һый әҙерләне. Иллә-мәгәр шул саҡта бер үс алды Сажидә ҡасандыр електәренә үткән үгәй әсәһенән. Китер саҡта өйҙән сығырға йыйынғас, үгәй әсә:

— Һау бул инде, ҡыҙым,— тип хушлашырға ҡулын һонғайны, күҙенән уттар сәсеп:

— Мин бит — старшина бисәһе. Һинең бысраҡ ҡулың кәрәкмәй,— тине лә, ҡырт боролоп сығып китте.

Ләкин Сажидәгә Уйылдандың старшиналығы ла әллә ни түгел, уны иргә лә һанап бөтмәй ине. Йәберләнгән йөрәге уға тулыһынса баш бирмәҫкә, ғорур булырға өндәп тик тора. Шуғамылыр, ул тәүге ике ауырын имсе әб́ейҙән төшөрттө, хәҙер инде ауырға ҡалмай торған рәтте үҙе лә белә. Ниңәлер Уйылдандан бала тапҡыһы килмәй Сажидәнең.

Уның күңеленә ҡайһы саҡта: «Төлкөсура ҡайтып төшһә, ни эшләрмен?»— тигән уй килә, ләкин был һорауына һис нисек тә яуап бирә алмай. Төлкөсураның старшина тиклем старшинаны үлтереүенә ул ғорурланған һымаҡ та итә, хәүефләнеп тә ҡуя ине.

Уның ҡайтып төшкәнен ишеткәс, йөрәге ашҡынды, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөнө...

Бына уны ошо ашҡыныуы әле көҙгө ҡараңғы төндә йылға аръяғындағы сауҡалыҡҡа алып китеп бара. Уйылданға: «Түбәнге ос Ғәйшә ойоҡ энәмде алып торғайны, шуны килтерәм»,— тине лә сыҡты ла китте. Изгелеккә генә булһа ярай ине был йөрәкһеүҙәре.

Йылға аша сыҡҡас, ул, баҙнатһыҙланып туҡтап ҡалды. Сауҡалыҡ эргәһендәге зыярат шом һала ине унын күңеленә. Эй илаһым, ниңә бында саҡырҙы һуң әле ул Төлкөсураны? Бүтән урын бөткәнме?.. Туҡта, ниңә бер ниндәй ҙә тауыш-тын юҡ? Ул, өйҙән тиҙ генә сыға алмайынса, юҡҡа ҡлаңҡыраны бит. Төлкөсура һаман килмәнеме икән ни? Ары барырғамы, юҡмы?

Ниндәйҙер көс, уның шомланыу-ҡурҡыуҙарын еңеп, сауҡалыҡҡа табан этәрҙе. Аҙыраҡ барҙы ла, йөрәге дарҫлап типкән хәлдә, тағы туҡтаны.

— Сажидә!..

Ҡысҡырмай, әммә әҫәрләнеп өндәшкән ошо саҡырыулы тауышҡа табан нисек югереүен дә, шул ыңғайы Төлкөсураның ҡосағына сумыуын да аҙаҡтан төштәге кеүек кенә хәтерләйәсәк Сажидә.

— Мин һине килмәйһеңме әллә тип торам.— Төлкөсура ҡосағын бушата бирҙе.

— Килдем бит, Төлкөсура...

— Аҡ фәрештәм минең!.. Күрер көндәрем бар икән!

— Мин дә һине көтә инем, Төлкөсура. Теге саҡта ҡунаҡханаға килгәнеңдәге кеүек, төлкө бүркеңдең ҡойроғон ялпылдатып әллә ҡайҙан килеп сығырһың төҫлө ине...

— Ә мин ҡартайып ҡайттым.

— Юҡсы... Ирҙәр ҡиәфәте генә кергән һиңә.

— Алыҫ Себерҙә йөрөгәндә лә төштәремә инә торғайның, Сажидә. Мин һиңә тәү күргәс үк ғашиҡ булдым. Шуны ҡиәмәт донъяһынан һаҡлап алып ҡайттым.

Төлкөсура Сажидәнең башынан һыпырылған шәлен юнәтеп япты, ҙур, ауыр усын арҡаһына һалды.

— Артабан, һине осратып, мөхәббәтем яңынан терелгәс, нисек йәшәрмен икән һинһеҙ.

— Беләһеңме,— Сажидә уның түшенә эҫе тынын бәреп өндәште,— миңә һинең нисек бүре һуғырға йөрөгәндәреңде, рус баярын ҡайһылай итеп үлемдән ҡотҡарғаныңды, Ҡотлоғужаны үлтергәнеңде — бөтәһен дә һөйләнеләр.

— Кем һөйләне?

— Бүтәндәр ҙә, көндәшем дә. Ул һиңә йәш сағында ғашиҡ булып йөрөгән шикелле...

— Ҡитсе... — Төлкөсура ысынлап ғәжәпләнде.

— Ысын. Мин килә һалған йылдарҙа гел һине һөйләй торғайны.

— Һы, ә ул минең ете ятып, бер төшөмә ингәне юҡ.

— Бер саҡ шулай һинең турала, Төлкөсура каторганан ҡасып ҡайтҡан икән, әллә ниндәй кешеләр менән урманда йәшәй икән, тигән хәбәр таралғас, Уйылдан төндәр буйы йоҡлай алмай, уфылдап сығыр булып китте. Ә мин һинең ялбыр яллы атта урамға сабып килеп кереүеңде теләй инем... Һәм бына нисәмә йыл көтә торғас...

— Һин Уйылдан менән шулай оҙаҡ тораһыңмы ни?

— Ун һигеҙенсе йыл.

— Балаң бармы?

— Юҡ... булдырмаясаҡмын да.

— Ниңә?

— Яратмайым мин уны.

— Ә ниңә килдең һуң?

Сажидә уға ҡайһылайыраҡ бында килеп юлығыуын ҡыҫҡа ғына итеп һөйләп бирҙе.

— Мыҫҡыл ителгәс, ҡайҙа бараһың. Унан, һинең ауылың икәнде ишеткәс, әллә ниндәй өмөт менән дә йәшәй башланым,— тип һүҙен осланы ул.

— Минең һине ғүмерлеккә үҙемдеке иткем килә, Сажидә!..

— Уй, Төлкөсура, оҙаҡлап киттем,— Сажидә уның ҡосағынан ысҡынды,— ҡайтайым.

— Мин бит әле һиңә һөйләр һүҙемде һөйләп тә бөтә алманым.

— Иртәгә тағы кил, йәме? Ул өйҙә булмай, күрше волоскә эш менән китә.

Төлкөсура уны яңынан ҡосаҡланы ла әллә ниндәй татлы еҫ аңҡып торған ирендәренән һурып үпте.

— Хуш, Сажидә!..

Сажидә бер нисә аҙым китеү менән ҡараңғылыҡҡа йотолдо.

Төлкөсура иһә бәхетле йылмайып баҫып тора; әйтерһең, егерме йыллыҡ каторга ла, дүрт йыл буйы ситтә йөрөү ҙә булмаған, һаман ун туғыҙ йәшендә.

Иртәгеһенә ул кис булыуын тағы түҙемһеҙләнеп көттө, өйгә бер инде, бер сыҡты. Уның хәлен Рәхилә лә һи-

ҙенгән кеүек: «Ай-һай, был ҡайнаға берәй эш сығарырға уйлап йөрөмәйме икән?» — тип хәүефләнеп үк ҡуя. Төлкөсураның башында иһә төрлө-төрлө уйҙар сыуала. Ярай, ул ғүмер юлында үҙе һөйгән кешене осратты, Сажидә лә нисәмә йыл үткәс, ихласлығын күрһәтте. Ләкин артабан ҡайһылайыраҡ ағыр икән был тормош? Сажидәгә өйләнеп, ауылда тыныс йәшәүгә өмөт итеп булмай, Уйылдан барыбер әмәлен табыр, этлеген итер; әлегә власть уның ҡулында. Әллә Романға барып, бөтәһен дә асыҡтан-асыҡ һөйләп, эш, йәшәр өсөн берәй мөйөш бирееүен һорарғамы? Бүтәндәр кеүек, ни ҡушһа, шуны эшләп йөрөргә һүҙ бирер. Уға ла һөйгән кешеһе менән тыныс ҡына йәшәп алырға кәрәктер бит. Башҡалар түҙгән ауырлыҡҡа ул да түҙер әле.

Ҡисен осрашҡас, ул Сажидәгә ошо уйҙарын һөйләне.

— Мин һинең менән ер сигенә китергә лә риза,— тине Сажидә. Аҙ ғына шымып ултырғас, өҫтәне: — Әллә Стәрлетамаҡҡа китәбеҙме, Төлкөсура?

Төлкөсура уның алдына башын һалып ята, уйлана; Сажидә рәхәт итеп сәсенән һыйпай.

— Унда барыу ҙа ике юсло. Ҡалала Уйылдандың дуҫтары күп, етмәһә, полицейскийҙәр һәр аҙымды еҫкәнеп йөрөйәсәк.

— Улай булғас, ни эшләйбеҙ һуң?

— Ни булһа ла, иртәгә Романға барам.

— Ниңә?

— Эшкә алһа, торорға урын бирһә, шунда йәшәрбеҙ.

— Ай-һай, Төлкөсура, Уйылдан бик яҡын була бит.

— Ҡурҡма, Сажидә, тәүҙән үк, әгәр морон тығырға самалаһаң, атайыңдың әжәле көтә һине, тип ҡотон алам мин уның.

— Һин ни әйтһәң — бөтәһенә лә ризамын, Төлкөсура. Һин барҙа, миңә бер ни ҙә ҡурҡыныс түгел.

Роман был юлы Төлкөсураны әллә ни яҡты йөҙ менән ҡаршыламаны. Контораһында ултыра ине. Һаулыҡ ҡына алды ла Төлкөсураға таныш булмаған приказчиге менән эш тураһында һөйләшергә тотондо. Төлкөсура ныҡышмалы рәүештә үҙенең бушауын көткәнде һиҙгәс:

— Ниндәй эш, ни йомоштар менән килеп сыҡтың? — тине, ҡоро ғына итеп.

— Үҙең менән генә һөйләшә торған һүҙ бар ине, Роман.

— Серме ни?— Роман уға ҡыҙыҡһынып та, шикләнеп тә ҡараны.

— Әллә ни сер түгел дә...

Приказчик хужаһының үҙенә ҡараш ташлауының мәғәнәһен аңланы, эш тапҡан кеше һымаҡ, йәһәт кенә сығып китте.

— Приказчигеңде әйтәм, Никифор түгел икән.

— Ҡыуҙым мин уны. Ундай тупаҫ кешеләр менән эшләүе бик ҡыйын хәҙер, Төлкөсура. Эшселәр менән матур итеп һөйләшә белгән хеҙмәткәр кәрәк. Йә, йомошоңдо әйт?

— Эшкә ал мине, Роман.

Лапшин ҡапыл ғына яуап бирмәне. Ул хәҙер кәүҙәгә ныҡ ҡына ҡалынайған, ҡиәфәте атаһына оҡшай төшкән. Ана бит, яңағына таяныи, итләс маңлайын сырыштырып ултырыуы — хас Артем Дмитриевич.

— Дә-әә... Бында ҡалырға уйлайһыңмы ни?

— Китергә инем... Белорет яғына. Тағы кире уйланым. Хәйер, Роман, асығын әйтәйем дә ҡуяйым инде. Өйләнәм мин. Әгәр эш бирһәң, башҡаларҙан ҡалышмам. Ҡурҡма, элекке кеүек буталып, дыуамалланып йөрөргә лә уй юҡ.

— Әлбиттә... Һиңә лә кешесә донъя көтөргә кәрәк бит. Ҡемгә өйләнергә уйлайһың?

— Унышын да йәшермәйем һинән — Уйылдандың йәш ҡатыны менән һөйләштем.

Романдың күҙҙәре түбәһенә менде, телһеҙ ҡалды, иплэп кенә урынынан тороп, Төлкөсураға тәбәлеп ҡараны.

— Ни һөйләйһең? Ысынмы?!

— Минең инде шаярып һөйләшер саҡ үткән.

— Бына быныһы, исмаһам, егеттәрсә! Ҡайтыуың яңы бит, ҡасан өлгөрҙөң?

— Уларын берәй саҡ һөйләрмен әле. Һин яуабыңды бир.

— Ну, Төлкөсура! Һаман шул элекке Төлкөсура һин! Былай булғас, Вилданды терелэй һуяһың бит тағы.

— Мин бит уның ҡатынын көслөк менән алмайым. Сажидә үҙе уның менән йәшәргә теләмәй. Ә мин уны төрмәгә киткәнсе үк белә инем.

— Мут кеше һин, Төлкөсура! Шәп ҡатын ул, килмәгән ере юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, мин үҙем дә ымһынып, берәй эләктереп булмаҫмы, тип ҡылын тартҡылап ҡараған бар ине уның. Бер ҙә сиртер һымаҡ түгел ине. Ә был

ҡайтҡан да, ҡаптырған да! Тфү, шайтан кеше икәнһең!.. Бынан аҙаҡ Вилданды күрергә ине, ха-ха-ха!.. Һу старшина яна!..

— Уныһын аҙаҡтан күҙ күрер. Эшкә алаһыңмы, юҡмы?

Лапшиндең сырайы етдиләнде, кеҫәһенән ҡулъяулығын алып, көлгәндә сыҡҡан күҙ йәшен һөрттө.

— Беләһеңме, Төлкәсура, көсөң, эшсәнлегең генә түгел, бына әле һөйләгән егеттәрсә ғәҙәт-ҡылыҡтарың да һоҡландыра мине. Һинең шулай әлегә бер кемгә лә һөйләмәй торған серҙе әйтеүең өсөн дә рәхмәт. Ләкин, теләһәң нисек аңла, һине бөгөндән эшкә ала алмайым. Әгәр һорауыңды үтәһәм, мин Вилдан менән ғүмерлек ыҙғышҡа керергә тейеш булам, ә миңә күрше менән ыҙғышып йәшәүҙең файҙаһы юҡ.

— Уйылдандан ҡурҡаһың инде?

— Бында һиңә лә тынғылыҡ булмаясаҡ. Егетлегеңә ихтирам йөҙөнән, бер һәйбәт кәңәш бирә алам.

— Әйтеп ҡара.

— Белореткә кит һин. Минең ҡатындың атаһы завод хужаһы бит. Ундағы управляющийына әйтерһең. Ҡулына ҡағыҙ яҙып бирәм, эшкә урынлаштырыр, бәлки, фатир ҙа табыр. Нисек ҡарайһың?

— Арыу кәңәш һымаҡ был, Роман.

— Башҡа бер кемгә лә бындай яҡшылыҡ эшләмәҫ инем. Һинең өсөн генә, шуны бел.

Роман өҫтәле артына ултырҙы ла яҙыу яҙҙы, уны хатта Төлкөсураның үҙенә лә уҡып ишеттерҙе. Бик һәйбәт яҙылғайны ул, Төлкөсураны «дуҫым» тип үк ебәргән.

— Әгәр эштәрем уңай булып сыҡһа, мин дә был егетлегеңде онотмам, Роман. Хуш. Барып урынлашҡас, хат яҙырмын әле.

Төлкөсура артынан ишек ябылғас, Роман еңел һулап ҡуйҙы. Уны, юлбаҫарҙы, үҙ эшселәре араһына килтермәүҙең әмәлен дә тапты, старшина менән ыҙғышҡа кереүҙән дә ҡотолдо. Ҡурҡма, буталып йөрөмәм, ти, ышан уға, ауыртҡан еренә аҙ ғына тейҙеңме, бөтә халыҡты һиңә ҡаршы баҫтырыр! Ситтәрәк йөрөгәне яҡшы. Унда, ҡалала, полицейскийҙар етерлек; саҡ ҡына яңылыш баҫтымы — эләктерергә торалар, әллә ҡайҙа бара алмаҫ. Ә старшинаның йәш бисәһен һелтәп, шәп эшләгән!.. Быныһы тик Төлкөсураның ғына ҡулынан килә торған эш.

Роман Лапшин, өйөнән сығып, бейек күтәрмәһендә

туҡталды. Төлкөсура тау итәгенән ҡыҙыу атлап Ҡаратау юлынан китеп бара ине.

* *
*

Ҡистән осрашҡанда Төлкөсура Сажидәгә иң кәрәкле әйберҙәрен төйнәргә һәм, Уйылдан ҡайтмаç элек — бөгөн төндә үк Белорет яғына юлланыу өсөн, таң һарыһынан күпер аръяғына сығырға ҡушты.

Өйҙәгеләргә ысын хәлде һөйләп биргәс, Рәхилә тәүҙә ҡурҡып китте, Бикморат:

— Был ҡәҙәр һемәйеүенә Уйылдан старшина шарт-лар сиккә етер инде! — тип, ағаһының ҡыйыулығына ҡыуанды.— Бик һәйбәт ҡатын ул. Үҙең дә тиҙ эләктер-гәнһең, ағай,— тип тә өçтәне.

— Тик һеҙ бында бер нәмәне онотмағыҙ, мин киткән кеше — китәм дә барам. Уйылдандың һеҙгә ҡанығыуы бар. Беренсенән, минең кем менән, ҡайҙа киткәнде бел-мәмеш тә күрмәмеш булығыҙ. Икенсенән, ошо хатты тапшырырһығыҙ. Унда мин, әгәр туған-ырыуымды ҡы-йырһытһаң, һине лә атайың яҙмышы көтә, тип яҙғанмын. Үҙем имен-аман барып урынлашһам, хәл белдертермен әле.

Ул кейем-һалымын ҡабат юл тоҡсайына тултырҙы. Шунан тағы ла һөйләшеп ултырҙылар. Күптән төн урта-һы ауып киткәнлектән, Төлкөсура ятып-фәлән торманы, иртәрәк булһа ла, китергә сыҡты. Бикморат уны урамға саҡлы оҙатып ҡалды.

Иртәгеһенә иртәнге сәй эсеп, эшкә китергә сыҡҡайны, Бикморат Уйылдандың өлкән ҡатынының урамда икен-се бер бисә менән сарылдап һөйләшкәнен ишетте.

— ...Аптыраным, башым ҡатты инде бына. Иртәнге намаҙға торһам, бүтән саҡта һаçып йоҡлап ятҡан нәмә үҙе лә, кейемдәре лә юҡ,— тип сурыта Хәтирә.— Тышҡа сығып эҙләнем — юҡ. Был әллә әйберҙәрҙе урлап ҡас-ҡанмы тип, ҙур һандыҡты асып ҡараным — нәмәләр үҙ урынында. Уның һандығын ҡараһам, бөтә арыуыраҡ нә-мәләрен алған. Шул килмешәгеңә ышанма тип күпме әйттем, юҡ, теленә алданып, тыңламаны бит. Хәҙер бына шул йылмаяҡ арҡаһында мин әрләнәм инде. Өйҙән кеше сығып киткәнде лә белмәй, ниңә йоҡлап яттың тип йән-дәремде ашаясаҡ...— Күҙен ҡул һырты менән тызый-ты-

зый дауам итте: — Аптырағас, бала-сағаны күршеләргә ебәрҙем, эҙе лә юҡ. Шул Эстәрлеһенә ҡасҡандыр инде... Осаға май ҡундырып алғас ни... Шулай ғына ҡотолоп китһәм, ни шөкөр ҙә бит, мине әрләр-әрләр ҙә эҙләп сығып китер әле артынан, тағы алып ҡайтыр, шул татары өсөн үлә яҙа бит, эшкинмәгән тыу бейәгә...

Бикморат, үҙалдына көлөмһөрәп: «Иллә-мәгәр тағы бер ғауға ҡутарҙы был ағайым»,— тип уйланы ла ары атланы.

Уйылдан кискә табан ғына ҡайтып төштө. Күрше волостең старшинаһында ике көн буйы ҡунаҡ булып ятҡандан аҙаҡ, ныҡлап айнып та бөтмәгәйне әле ул. Арбаһынан төштө лә алпан-толпан өйөнә юнәлде. Соланға йүгереп ҡаршы сыҡҡан өлкән бисәһенә:

— Ниңә ҡапҡаны асып тормайһың, бүҫкә ҡорһаҡ! — тип ҡысҡырҙы. — Ас ишегеңде!

Бисәһе, уның ҡыҙмаса икәнен күргәс, шундуҡ бер хәйлә уйлай һалып алды. Асыуланһа ла, өндәшмәй, уның тирәһендә өйөрөлөп-сөйөрөлдө: сисендерҙе, алдына ҙур, каса менән иң ныҡ әсегән көрәгәнән бал килтереп ултыртты.

— Бигерәк йонсоған һымаҡһың, атаһы, шуны эс тә ятып тор.

«Хоҙайымдан булып, теге суҡынмышты ғына һорай күрмәһен, иҫерек көйө әллә ни ҡыланыр»,— тип көйәләнде ул. Бәхетенә, Уйылдан Сажидәне һорашманы; ике тынала касаны төп күтәрә эскәс кенә, телен саҡ-саҡ әйләндереп:

— Сажидәм... яныйым... килше ҡо-ҡошаҡларымау...— тип иҫергән саҡтағы ғәҙәте буйынса татарса һупалап маташты ла артына тәкмәсте. Бисәһе уның күлдәк иҙеүҙәрен ысҡындырҙы, ойоғон систе, өҫтөнә юрған япты; төнөн торһа, тағы эсһен дә дөңкәйһен өсөн, касаға бал тултырып ултыртты, үҙе: «Харап, яныйың ошо көндә әллә ҡайҙалыр әле»,— тип һөйләнде.

Уның урынына иртәнсәк өйҙә дәжжәл ҡуптымы ни! Уйылдан бисәһен пыр туҙҙырҙы, балаларын да әрләне һәм оҙаҡ уйлап тормаҫтан ат ектереп, Стәрлетамаҡ яғына елдерҙе. Сажидә үҙе Стәрлетамаҡтан йыраҡ түгел ауылдан ине, уның ҡалалағы туған-ырыуҙарын да белә Уйылдан. Юлдағы ауылдарҙа, бисәһе икәнлекте әйтмәй генә, шундай-шундай ҡатын күренмәнеме, тип һорашты,— бер кем күрмәгән. Ҡалаға барып төшкәс, ҡунаҡхана иха-

таһында эшләгән ирҙе туған-ырыуҙарына белешергә ебәрҙе — юҡ; шунан ауылына китте. Уны тәүҙә кейәү ҙә кейәү тип өлтөрәп ҡаршылаған ҡәйнәһе, унын Сажидәне эҙләп килеүен белгәс, аптыраны, шунан, Сажидәне яманлап, хәтәр һүҙҙәр менән әрләргә тотондо. Ләкин Уйылданға бынан файҙа юҡ ине.

Сажидәне Уйылдан ысынлап та ярата ине. Уға артыҡ ҡаты һүҙ әйтмәне, өлкән бисәһенең ҡағып-һуғыуына юл ҡуйманы; ҡайҙа барһа — шунан бүләккә яңы әйбер алып ҡайтыр ине. Ситтән таныш-белештәре килгәндә, һай, бисәң, Уйылдан, ҡалаҡҡа ғына һалып йоторлоҡ бит, тиһәләр, ҡупырайып: «Стәрле һынлы ерҙән юҡҡа алып ҡайтмаған бит мин уны»,— тип маҡтанырға яратыр ине.

«Ҡайҙа китер икән ул? Ниңә сығып китте икән? Әллә ни бошонмай йөрөп ята ине бит»,— тип, ауылына еткәнсе әллә ни хәтлем уйҙар килде уға. Өйөнә ҡайтып ингәс иһә, бисәһе ҡот осорғос һүҙ әйтте:

— Һин эстерәпкәңде әллә ҡайҙан эҙләп йөрөйһөң, ә ул Төлкөсура менән Белореткә ҡасҡан, юлда күргәндәр.

Баҫҡан урынында ҡатты ла ҡалды Уйылдан. Юлда йөрөгәндә әллә ни ҡәҙәр уйҙар килде унын башына, бындайы инеп тә сыҡмағайны. Бер һүҙ әйтә алмай, лап итеп урындыҡҡа ултырҙы, түңәрәк һаҡалын услап, иҙәнгә төбәлде. Артабан ни эшләү тураһында бер төрлө лә төплө фекергә килә алманы. Ҡыҙ урлау, бисә һалдырып алыу — әүәл-әүәлдән килгән йола; бының өсөн «суд та юҡ, шурт та юҡ». Арттарынан төшөр инең, ҡалаға барып, полицияға әйтеп, табып та булыр, бәлки; тик Төлкөсура уға Сажидәне тотторол ебәрә буламы?

— Ҡем әйтте? Ҡем күргән? — тип ғыжылданы дүртбиш көн буйы алһыҙ-ялһыҙ юлда йөрөүҙән йонсоған, ғәрлектән тыны ҡыҫыла башлаған Уйылдан.

— Түбән өс Сәхиҙән үҙем барып һораштым. Үҙән аръяғында тап булдылар, етәкләшеп китеп баралар ине, ти. Етмәһә, Төлкөсура, старшинаға минән сәләм әйт, тип ҡысҡыра, ти, оятһыҙ. Шул каторжан, мөрәүәтһеҙгә бер һыным теймәй ине, суҡынып киткере! Кафыр!..

Әле бисәһе Уйылдандың күңелен күреү өсөн генә Төлкөсураны шулай әрләй, ҡарғай; ә күңеленән: «Һинең һымаҡ юҡҡа ҡупырайып йөрөй торған кеше түгел шул Төлкөсура»,— тип уйлай.

Тәүге һеңкәҙәүе үткәс, Уйылдан, файҙаһы булырын-

булмаҫын уйлап тормайынса, Бикмораттарға китте. Өйҙә Рәхилә яңғыҙы ғына ине.

— Һис ни белмәйем, Уйылдан ағай,— тине ул.— Ҡайнаға таң менән яңғыҙы ғына өйҙән сығып китте, бер хәбәр ҙә һөйләнмәне. Һиңә бирергә тип, бына ҡынау ҡағыҙҙы ғына ҡалдырғайны.

Уйылдан яҙыуға күҙ югертеп сыҡты, берсә ағарҙы, берсә күгәрҙе, тешен ҡыҫып:

— Ҡа-тор-жан...— тип ыҫылданы ла сығып китте.

Рәхилә тәҙрәгә ҡапланды: ҡарындыҡ аша Уйылдандың бөгөлөп төшкән кәүҙәһе тоноҡ ҡына күренә ине.

## V

Урамдан эскәрәк тартылып ултыра был өй. Ҡарағай бүрәнәләре, ҡояшҡа янып, көңгөрт төҫкә ингән, суйындай ҡатҡан. Өй артында яңғыҙ ҡарағай етемһерәп, ел сыҡҡан мәлдәрҙә бөгөлөп-һығыла. Өйгә ҡаршы яҡта шулай уҡ ҡарағайҙан ел үтмәҫлек итеп буралған һарай. Ҡапҡанан соланға тиклем таҡтанан юл түшәлгән. Ғөмүмән, бер күҙ ташлауҙа уҡ хужалыҡлы, егәрле кешенең ҡулы һиҙелеп тора.

Бында Александр Николаевич Пухов йәшәй. Әле йәш булыуына ҡарамаҫтан, ун дүрт йәшенән кеше араһында егелеп эшләп йөрөгәнгәлер инде, төплө аҡыллы, тормошҡа һәр саҡ айыҡ күҙ менән ҡарай. Хәҙер мартен цехында эшләй ул. Уның устары күн кеүек ҡатҡан, оҙонсараҡ йөҙө ҡорос ялҡыны бәрелеүҙән ҡыҙарып, ҡужырмаҡланып тора.

Бөгөн ял. Александр, ғәҙәтенсә, көн буйы өйө тирәһендә ваҡ-төйәк эш менән мәшғүл булды. Төнөн яуған епшек ҡарҙы көрәне, шунан утын бысырға тотондо. Йыуан ҡарағайҙарҙы ла бер үҙе быса ине ул. Ҡабаланмай ғына тарта бысҡыны, ә башында төрлө уйҙар ҡайнаша. Кисә столяр цехында эшләүсе Косоротов менән һөйләшеп торғайны. Һәр һүҙен уйлап һөйләүсе был кеше Александрға оҡшай. Уның менән бергә булғандан аҙаҡ нисектер күңел бушанып ҡалған һымаҡ.

— Александр,— тине ул кисә айырылышҡан саҡта,— «Ғаилә кисәһен» иртәгә һиндә үткәрәбеҙме әллә? — Пухов уның тел төбөн аңламаған ҡиәфәттә тороуын күргәс, өҫтәне: — Үткән ялда йыйылғанybыҙҙа минең өй тирә-

һендә ниндәйҙер шикле кешенең еҫкәнеп йөрөгәнен күргәндәр. Миндә йыйылһаҡ, хәүефлерәк булыр, тим.

— Шулаймы ни? Рәхим итеп барығыҙ, кәтәрмән, Василий Емельянович. Ә кешеләр миндә йыйылырға икәнде беләме һуң?

— Уларға үҙем хәбәр итермен, Саша.

Һуңғы ваҡытта ял һайын йыйылып, шунда эш, тормош хаҡында ғына түгел, илдәге хәлдәр тураһында ла һөйләшеп ултырыу ғәҙәткә ингәйне. Уны Белореткә бынан ике йыл элек уҡытыусы булып килгән, үҙе төп Екатеринбург кешеһе Дмитрий Алексеевич Киселев менән Косоротов ойоштороп ебәргәйне. Киселев — теге-был эштең тәртибен белгән кеше. Поселок властәре аша юллап, йыйынға «Ғанлә кисәләре» тигән исем ҡушып, уны ял һайын үткәреүгә рәсми рөхсәт алды. Бөгөн кискә табан ошо кисә Пуховтың өйөндә үтәсәк. Килһендәр әйҙә. Ул йәшәгән Кашин урамы аулаҡ урын. Кемдәр килер икән?

Александр, утын бысыуынан туҡтап, билен яҙҙы, маңлайына сыҡҡан тирен һөрттө.

Көн аяҙ. Баш осонда зәңгәр күк көмбәҙе, ниндәйҙер сафлыҡ бөркөп, бәүелеп тора. Был тау-урман яҡтарында марттың икенсе яртыһында ла һыуыҡ бурандар ҡотороп, хатта ауылдар араһында бер нисә көнгә юл өҙөлөп тора торғайны. Быйыл яҙ иртәләргә уйлай, ахырыһы. Ана бит, ҡояш апаруҡ йылыта. Ҡыйыҡтан һирәк-мирәк тамсылар ҙа тама.

Миҙгел артынан миҙгел килә. Беҙҙең тормош ҡына һис ниндәй үҙгәрешһеҙ аға. Их, үҙгәртергә ине уны!» — Александр ауыр көрһөндө лә, балтаһын алып, бысҡан түмәрҙәрен ярырға тотондо. Һәр ял һайын аҙнаға етерлек утын ҡырҡып ҡуя ул. Юғиһә эштән арып ҡайтҡандан аҙаҡ донъя эштәренә бик үк ҡул бармай.

Солан ишеге алдында һөймәлекле сырайлы йәш ҡатын күренде.

— Александр, инеп ашап сыҡһаңсы.

— Хәҙер инәм, Катя.

Балтаһын түмәргә ҡаҙай сабып, Александр ишеккә табан атланы. Өйөнөң эсе һәр саҡ гөлт итеп тора уның. Һәр нәмә үҙ урынында, бөтәһе лә таҙа. Бигерәк уңған инде Екатеринаһы. Шуғалыр, күрәһең, ошо йылы өй Александрҙы һәр саҡ үҙенә тарта, ҡайтып индеме, иркен һулап, рәхәтлеккә иҙерәй.

— Бөгөн кешеләр килә, ти инең, Александр,— тип

һүҙ башланы Ҡатя, ашарға ултырғас.— Ҡасаныраҡ килерҙәр икән?

— Ҡараңғы төшкәс, Ҡатя.

— Ҡемдәр һуң улар?

— Таныштырырмын. Ете-һигеҙ кеше килергә тейеш.

— Уһу, байтаҡ икән дә. Ашарға берәй нәмә әҙерләргә кәрәктер бит?

— Ҡарарһың унда. Һурпалыҡ итең бармы һуң әле?

— Бер бешерерлек ҡалған.

— Һал шуны.

— Эй хоҙайым, ите лә бигерәк ҡиммәтләнде. Үткән баҙарҙа ҡаҙағына өс тин һорап торалар. Оят та юҡ, исмаһам.

— Ниндәй оят ти ул, Ҡатя. Донъяһы шулай бит, бөтә нәмә ҡиммәт.

— Әлләсе, берәй арыуланырмы, был тормош.

— Үҙенән-үҙе үҙгәрмәҫ инде ул...

Шулай һөйләшеп ултырып ашағас, Александр саҡ ҡына ятып торҙо ла тағы утын ярырға сыҡты. Аҙаҡтан, йышҡы, ҡасау кеүек кәрәкле нәмәләрен алып, эскәмйә яһарға тотондо. Кешеләр килһә, ултырырға урын етмәҫе иҫенә төшөп ҡалғайны уның.

Иң тәүҙә Косоротов менән механика цехының слесаре Иван килде.

— Әйҙүк түрҙән! — тип уларҙы күтәренке кәйефтә ҡаршыланы Пухов. — Бына, һеҙ килеүгә эскәмйә яһап ҡуйҙым. Ҡотлап ултырығыҙ.

— Һинең ҡулыңдан эш килә инде ул,— тип хужаны маҡтаны Косоротов, ослайып барып бөткән һаҡалын, ҡуйы мыйыҡтарын һыйпаштыра-һыйпаштыра төпкө бүлмәгә үтте. Уғата йыйнаҡ кеше лә инде. Цехтан башҡа урында күрһәң, уны һис тә ҡара эшсе тип уйламаҫһың: ап-аҡ күлдәк, галстук, костюмендә сыйыш эҙәре күрмәҫһең.

Иван иһә ауыр кәүҙәле, өҫ-башына әллә ни иғтибар итмәй. Ләкин ғәжәп төгәл кеше: әйттеме — һүҙендә тора.

Аҙ ғына һөйләшеп ултырғайнылар, тағы ишек шаҡынылар. Ҡорос ҡойоу цехында эшләүсе Генка Садырин икән. Ә уның артынса инеп, тупһа алдында туҡтап ҡалған ҙур кәүҙәле кешене береһе лә танымай ине. Иптәштәренең һораулы ҡарашын күреп, Генка:

— Яңы кеше алып килдем,— тине.— Тимерлек цехынан Ахунов Төлкөсура. Ышаныслы иптәш. Каторга юл-

дарын егерме йыл тапаған. Беҙ унының менән күрше йәшәйбеҙ.

Эйе, Генканан бер өй аша ғына йәшәй ине Төлкөсура. Ҡөҙ көнө Белореткә килгәс, ул Роман биргән яҙыу менән завод управляющийе Ҡольгә инде. Пашковтың бындағы иң ышаныслы кешеһе Коль Роман Лапшинде яҡшы белә ине. Шуға күрә артыҡ төпсөнөп тормайынса уҡ Төлкөсураны тимерлек цехына эшкә тәғәйенләне. Ләкин, бараҡтарҙа бер буш урын да юҡ, фатирҙе үҙең юнлә, тине.

Бына ошо Генка Садыриндең ярҙамы менән ул Ағиҙел буйындағы, поселоктың иң ситендәге, урамда йәшәгән яңғыҙ рус әбейенә фатирға инде. Ҡөтмәгәндә Сажидәһен осратып, өйләнеп, тормошо шулай рәтләнә башлау менән ҡанатланған Төлкөсураның тәүҙәрәк үҙенең тирә-яғына ентеклерәк күҙ һалыу, кешеләр менән танышыу ҡайғыһы ла булманы. Көндәр буйы бил яҙмай эшләй, шунан Сажидәһе эргәһенә оса-ҡуна ҡайта. Икәүләшеп яңғыҙаҡ әбейҙең өй эсен ялт иттереп таҙартып алдылар. Көн һайын тегенән-бынан таҡта күтәреп алып ҡайтып, Төлкөсура туҙып бөткән соланды яңынан эшләп ҡуйҙы, өй тирәһен рәтләне. Шуға күрә уғата татыу йәшәгән был егәрле кешеләргә рус әбейе тиҙ өйрәнде, үҙ балалары кеүек ҡарай башланы.

Тора-бара Төлкөсураның күңеле киңерәк тормошҡа тартылды. Тимерлек цехында, әллә ни итеп, гел танышмаҡһыҙ, һәр ҡайһыһы үҙалдына көн итеүсе кешеләр эшләй ине. Көн дә тиерлек эшкә бергә барып, бергә ҡайтып йөрөгән Генканың һәйбәт кеше икәнен тиҙ төшөнөп алды Төлкөсура. Йыш ҡына заводтағы хәлдәр, тормош тураһында һөйләшеп ултыралар. Генка уға завод эшселәренең хәле бик ауыр булыуын, берҙәм сығыш яһап, хужалар алдына ҡырҡа талаптар ҡуймайынса, уның яҡшырмаҫын һөйләй. Ә бынаһ аҙна-ун көн элек Төлкөсураны бер йыйынға алып барырға, үҙенең дуҫтары менән таныштырырға һүҙ биргәйне. Бына бөгөн шунда алып килде.

Төлкөсура, ят өйгә килеп ингәс, тәүҙә тартыныбыраҡ торғайны, шунан һәр береһе менән ҡул биреп күреште, эскәмйәнең бер яҡ башына ултырҙы.

— Теге көндө миңә әйткән тимерсе ошомо ни? — тине Ҡосоротов. Төлкөсура яғына боролоп, һораны: — Бында күптән бирлеме?

— Ҡөҙ көнө килеп урынлашҡайным.



— Бығаса заводта эшләгәнең бар инеме һуң?

— Златоустта дүрт йыл эшләгәйнем.

— Улай булғас, ысын пролетариат инде,— тине Косоротов һәм тимерлек цехындағы хәлдәрҙе һораштыра башланы. Аҙаҡтан: — Ул цехта беҙҙең ышаныслы кеше юҡ ине. Бынан былай һиңә таянырбыҙ,— тип һүҙен ослаңы.

Төлкөсура, ниҙер һиҙемләһә лә, уның тел төбөн аңлап етмәгәйне. Ниндәй эштә таяныс итергә уйлайҙар икән уны?..

Александр Пухов өҫтәлгә тәрилкәгә һалып икмәк, бер шешә араҡы, стакандар килтереп ҡуйҙы. «Бәй, бында эсергә йыйылғандармы икән ни?» — Төлкөсура шулай аптырап ултырған саҡта аралағы иң өлкән Ҡосоротов тигәне кәрт таратырға тотондо. Тик араҡыны стакандарға ҡойоусы ла, кәртте ҡулына алыусы ла булманы. Эргәһендә ултырған Генка:

— Һин аптырама, Төлкөсура,— тине,— былар бөтәһе лә конспирация өсөн, йәғни ят кеше-фәлән килеп инһә, күңел асып ултыралар, тип уйлаһын.

Өй хужаһы уға өҫтәп әйтте:

— Һин бында яңы иптәш, Ахунов. Беҙҙең былай йыйылып ултырғанды бер кем дә, хатта бисәң дә белергә тейеш түгел.

— Аңланым,— тип бер һүҙ менән яуап бирҙе Төлкөсура.

Саҡ ҡына тынып ултырғас, Ҡосоротов һүҙ башланы.

— Беҙ һаман бына шулай тар ғына түңәрәктә һөйләшеп, бәхәсләшеп ултырыуҙан уҙа алмайбыҙ, дуҫтар. Ә бит заводта эшләгән һәр кешенең эсендә хужаларға, үҙебеҙҙе иҙеүселәргә ҡаршы асыу ҡайнай. Уларҙы ойоштороға, ышаныслы кешеләрҙе үҙебеҙгә күберәк ылыҡтырырға кәрәк беҙгә.

— Цехта забастовка ойоштороп, хужаларҙан эш хаҡын күтәреүҙе талап итергә ине, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Иван.

— Мин дә шул хаҡта һүҙ ҡуҙғатмаҡсы инем, Иван,— тип дауам итте Ҡосоротов.— Һинең фекерең дөрөҫ. Бөтә заводты бер юлы күтәреү ҡыйын буласаҡ. Тәүҙә бер цехтың сығышын ойошторорға ине. Һәм быны бик ныҡ әҙерлек менән эшләргә кәрәк. Забастовкасылар нисек тә үҙ һүҙҙәрен һүҙ итергә тейеш. Тик шул саҡта ғына бөтә

завод эшселәре берҙәм сығыштың файҙаһын аңлаясаҡ, үҙ көстәренә ышаныс артасаҡ.

— Василий Емельянович,— бөтәһе лә Киселев яғына боролдо,— прокламация тексы әҙерләргә ине беҙгә. Уны күсереп яҙып күбәйтеүҙе мин үҙ өҫтөмә алам. Унан шуны цехтарға таратыр инек!

— Дөрөҫ фекер был,— тине ишек төбөндә баҫып торған Пухов.— Һәр кеше менән осрашып, һөйләшеп бөтөп булмай. Ә былай — ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡырҙар.

— Улайһа, был эште кемгә тапшырабыҙ? — Косоротов бүлмәләгеләргә күҙ йөрөтөп сыҡты.— Дмитрий Алексеевич,— ул ҡарашын уҡытыусыла туҡтатты,— һеҙ яҙһағыҙ, нисек булыр? Ҡәләмегеҙ шыма. Беҙҙең был саҡырыу һәр кемгә аңлайышлы булырға тейеш. Шулай килештек: һеҙ яҙаһығыҙ, аҙаҡтан бергәләп ҡарап сығырбыҙ.— Косоротов Садыриндән һораны: — Һеҙҙең цехта Бейерҙең бер эшсене туҡмауы дөрөҫмө?

— Дөрөҫ. Бер ауыҙ ҡаршы һүҙ әйткән өсөн таяҡ менән йыға һуҡҡан.

Төлкөсура Бейер тигән смотритель хаҡында ишетеп белә ине. Бөтә эшселәр уның яуызлығына зарлана.

— Иртәгә үк өс-дүрт эшсе менән һөйләш, бөтә цех исеменән управляющийға барһындар, Иван. Беҙ был эште шым ғына үткәреп ебәрергә тейеш түгелбеҙ. Әгәр ҙә Бейер ҡабат шулай ҡул күтәрһә, бөтә цех эш ташлаясаҡ, тип әйтһендәр.

— Быныһын эшләрбеҙ, Василий Емельянович.— Иван етек сәсе ҡаплаған елкәһен тырнаны. — Шул Бейерен дә, Бехерен дә заводтан бөтөнләй ҡыуҙырыуҙы талап итергә ине. Тамам теңкәгә тейҙеләр бит.

Косоротов аҙыраҡ уйланып ултырғас ҡына яуап бирҙе.

— Һинең фекер дөрөҫ һымаҡ. Ләкин был әлегә эшкә ашмаҫ талап булыр. Уларҙы Пашков белгес булараҡ әллә ҡайҙан саҡырып килтергән бит.

Ирҙәрҙең һөйләшеүенә ҡамасауламаҫ өсөн төпкө бүлмәгә бер тапҡыр ҙа сығып әйләнмәгән Екатерина урта ишектә күренде.

— Һеҙ, бәхәскә бирелеп, ашау тураһында бөтөнләй оноттоғоҙ, ҡунаҡтар. Аш ултыртайыммы, Александр?

Пухов ҡатынына өҫтәл әҙерләргә ярҙамлашты. Ашағанда көлөшә-көлөшә еңел-елпе хәбәр һөйләштеләр.

Өҫтәлдән һауыт-һаба алынғас, Ҡосоротов ҡуйынынан йоҡа ғына китап сығарҙы.

— Дуҫтар, беҙгә тоғро ярҙамсыбыҙ Булаев бына юшо ғәжәп шәп китапты алып ҡайтҡан. Маркс һәм Энгельс тигән бөйөк кешеләрҙең «Коммунистәр партияһының манифесе» ул. Бөгөн шуның бер өлөшөн ҡысҡырып уҡырға тигән тәҡдим бар. Башлайыммы?

— Әйҙә.

— Тыңлайбыҙ.

Ҡосоротов ҡабаланмай ғына уҡыһа ла, байтаҡ нәмә аңлашылып етмәй ине Төлкөсураға. Шулай ҙа ул бөтә иғтибарын биреп тыңланы. Уҡып туҡтағандан аҙаҡ булған һөйләшеү мәлендә инде ул ҡайһы бер нәмәләрҙе төшөндө.

* *
*

Өйөнә былай һуңлап ҡайтҡаны юҡ ине Төлкөсураның. Шуғалыр инде, уны Сажидәһе аптырап ҡаршыланы, шунан түшенә һарлыҡты.

— Ҡайҙа йөрөйһөң ул? Ҡурҡып бөттөм.

— Таныштарға ингәйнем, сығармай ҙа сығармай.

— Ҡабат улайтып йөрөмә, йәме, Төлкөсура. — Сажидә уның күҙҙәренә мөлдөрәп, инәлеп ҡараны.— Мин бит һине ҡабат юғалтып ҡуйырмын тип ҡурҡып торам.

Төлкөсура үҙен Сажидәнең ихлас яратыуын белә. Һәм уның күңелен саҡ ҡына ла ҡырмаҫҡа тырыша ине.

— Ҡайҙа юғалайым мин? — Ул бисәһен ҡосаҡланы, маңлайына эйәген терәне.— Оҙаҡлағаныма үҙем дә борсолдом да ни...

Сажидә, ситкәрәк тартылып, уның күҙҙәренә төбәлде, серле генә ҡарап бер аҙ һүҙһеҙ торғас, әйтте:

— Минең ауырым бар, Төлкөсура.

Бисәһенең һуңғы ваҡытта йыуаная башлауын Төлкөсура ла һиҙә, тик үҙе башлап һорарға баҙнат итмәй йөрөй ине. Сажидә әйткән һүҙҙәр уны сикһеҙ ҡыуандырҙы.

— Китсе!..

— Ысын. Бына, тотоп ҡара.

Сажидә уның ҡулын эсенә баҫты. Тәүҙә Төлкөсура бер ни ҙә тойманы. Бисәһенең ҡушҡанына буйһоноп, тора бирҙе. Шул саҡ эстәге ҡатҡыл урын ҡапыл ҡыбырҙаны, хатта ул, тертләгәндәй, ҡулын тартып алды.

— Ҡурҡаһыңмы әлләʔ — Сажидә рәхәтләнеп көлдө.

— Аҡыллым, аҡ фәрештәм минең! — Төлкөсура уны тағы ҡосағына алды. Тимәк, Төлкөсура нәçеле дауам итәсәк! Уны каторга ла быуа алмаған.

— И-и, һүҙгә әүрәп тик торамсы.— Сажидә уның ҡосағынан ысҡынды.— Әйҙә ашарға. Асығып бөткәнһеңдер әле. Тәмле итеп ботҡа бешергәйнем.

Аш-һыуға ғәжәп тәрбиәле ине Сажидә. Һис тә юҡ ҡына нәмәне лә тәмле итеп бешерә, шуны ҡорһагың асмағанда ла ашата белә. Әле лә Төлкөсура, Пуховтарҙа һурпа эсеүгә ҡарамаçтан, бер һүҙһеҙ өçтәл эргәһенә килде.

Аҙыраҡ ултырғас, Сажидә һүҙ башланы.

— Төлкөсура.

— Әүʔ

— Өйҙә ултырып, ялҡа башланым әле.

— Ҡыйыныраҡтыр ҙа инде, Сажидә, ни эшләйем һуң.

— Заводта берәй еңелерәк эш юҡмы икәнʔ

— Кит, юҡты уйлама. Һине эшләтәсәгем юҡ. Етмәһә, ауырлы көйөңә...

— Улайһа, берәй байға кер-фәлән йыуһам да...

— Булмай, эшләтмәйем,— тине Төлкөсура ҡырыç ҡына. — Быйаса ыҙаланғандарың да еткән. — Башын түбән эйеп шымтайған Сажидәне йәлләп, ҡулын яурынына һалды.— Серләшеп, һөйләшеп ултырырға арыу гына дуç кәрәк ине һиңә.

— Өйҙә йомолоп ултырғас, дуçты ҡайҙан табаһың.

— Үҙем табып бирәм мин һиңә...

Иртәгеһенә, мартен цехынан сыҡҡан ерҙә көтөп тороп, Төлкөсура Пуховты осратты. Заводтан ситкәрәк киткәс, Александр:

— Беҙгә завод тирәһендә осрашырға ярамай, дуç кеше,— тине.— Абай булығыҙ, управляющий Кольдең дә, приставтың да еçкәнеп йөрөгән кешеләре күп бында.

Үҙенең тәүге көндә үк шундай иçкәртеү алыуына уңайһыҙланды Төлкөсура.

— Минең һеҙҙә бөтөнләй икенсе йомошом бар ине лә, Александр Николаевич...

— Әйтегеҙ һуң.

— Ҡатыным өйҙә яңғыҙы төңөлөп ултыра. Йорт хужаһы әбей бар ҙа, ул инде...

— Ҡатынығыҙҙы эшкә урынлаштырырға уйлайһығыҙмы әлләʔ Ҡулдан килгәнсә ярҙам итербеҙ.

— Ю-у-ук, барып һөйләшеп ултырыу өсөн, һеҙҙең ҡатынығыҙ менән таныштырһам, тигәйнем. Уның бит бында бер белгән кешеһе юҡ.

— Шуны һорап торалармы ни, Ахунов ағай? Етәкләп ал да кил. Бөгөн үк килегеҙ.

Төлкөсура шатланып ҡайтып инде. Уның шулай хәстәрлек күреп йөрөгәне өсөн Сажидә лә ҡыуанды. Ашағас, Сажидә арыу күлдәген кейҙе, сәсен яңынан тарап үрҙе лә Ҡашин урамына ҡарай юнәлделәр. Төлкөсураның әллә ҡасан уҡ алып ултыртып ҡуйған бер ярты араҡыһы бар ине, шуны кеҫәһенә тыҡты. Ныҡлап танышып, һөйләшеп ултырырҙар.

Пуховтар уларҙы яҡты йөҙ менән ҡаршы алды. Екатерина йүгереп йөрөп өҫтәл әҙерләне. Шул арала, ҡыҙыҡай сағынан төрлө халыҡ араһында булып өйрәнгәнлектән, таныш маҡлы, русса оҫта уҡ һөйләшкән Сажидә уның менән яҡынайып та өлгөрҙө. Өҫтәүенә, Екатерина Стәрленеке икән, үткән көҙ шунда барып ҡайтҡан. Байтаҡ йылдар буйы Стәрлелә булмағанлыҡтан, Сажидә унан ҡала хәлдәрен һорашты.

Өҫтәл артына ултырыштылар. Әҙерәк эсеп тә алғас, телдәр бөтөнләй сиселде.

— Катя, йырла әле бер,— тине Александр, күңелсәкләнеп.

Ҡатыны инәлтеп торманы, саф, сыңрап торған тауыш менән йыр башланы. Көй моңло ине, уйҙарға талдырырҙай ине. Шымтайып, ихлас тыңланылар. Шунан Төлкөсура һүҙ башланы.

— Каторгала йөрөгәндә бер иптәшебеҙ ауырып китте шулай. Уға ярҙам итергә фельдшер ҙә, дарыу ҙа юҡ. Эҫе һыу эсереп, башына дымлы сепрәк һалып ҡарайбыҙ — файҙаһы теймәй. Саҡ-саҡ йәне сыҡмай ятҡан шул ир уртаһы кешенең әйткән һүҙҙәрен һис онотмайым. «Әгәр бына хәҙер берәй ҡатын-ҡыҙ йырлап ебәрһә, шәбәйер ҙә китер инем»,— тигәйне ул... Ҡатын-ҡыҙҙың тауышын ғына булһа ла ишетергә зар-интизар йөрөгән саҡтар бар ине.

— Эйе, һеҙҙең баштан байтаҡ ауырлыҡтар кискән, Ахунов ағай,— тине Пухов, уның хәтирәһенән тәьҫирләнеп. — Ләкин рухығыҙ һынмаған — иң яҡшыһы шул.

— Ауырлыҡтарҙы еңеп була, Александр. Тик ирмен тигән ир була тороп, бар хәленсә эшләп тә рәхәт тормош көтә алмағанға йән әсей.

— Беләһегеҙме, Ахунов ағай, минең уйымса, беҙҙең быуын кешеләре ул азат тормошто күрәсәк. Бының өсөн, әлбиттә, бик ныҡ көрәшәһе, хатта ҡан түгәһе барҙыр әле.

— Бөгөн, исмаһам, шул хаҡта һөйләмәҫ инең, Александр,— тине Екатерина.

— Шулай ҙа бит, Катя, һүҙ үҙенән-үҙе шуға барып төртөлә... Ярар, ҡабат был хаҡта һүҙ ҡуҙғатмайбыҙ. Йәгеҙ әле, тағы берәрҙе тотайыҡ...

Артабан күңелле генә ултырҙы улар. Башҡаларға нисектер, әммә Сажидәнең күңеле булды. Катя кеүек һәйбәт дуҫ табыуына ҡыуанып бөтә алмай ине ул.

## VI

Тәү ҡарашҡа иң ябай һәм тыныс эш кешеһе Булаев поселоктағы берҙән-бер аптекала эшләй. Ул дарыуҙар алыу өсөн йыш ҡына Өфөгә бара. Шул саҡта дарыуҙар тултырған сумаҙанына рус социал-демократтары сығарған йәшерен китаптарҙы ла һалып алып ҡайта ине.

Бер мең туғыҙ йөҙ икенсе йылдың мартында Өфөнән ҡайтып төшөүенең икенсе көнөнә Косоротов аптекаға килеп ингәс, ул бүтән саҡтағынан да мәғәнәле итеп:

— Василий Емельянович, туҡтама, төпкө бүлмәгә үт,— тине, тәҙрәгә күҙ һалып алды.

Булаев шараҡ кәүҙәле, ялт-йолт килгән күҙлеге ҙур. ҡырлас танауына килешеп тора. Төпкө бүлмәгә ингәс, ул дарыуҙар бикләнгән шкафының иң аҫҡы тартмаһынан торба һымаҡ итеп төрөүле ҡағыҙ килтереп сығарҙы.

— Бынныһы китап та, журнал да түгел, Василий Емельянович, ә бик йыраҡтан килгән газета.

— «Вестник»ме әллә «Петербургская газета»мы?

— Һы, әйттең хәбәрҙе. Минең шуларҙы күтәреп йөрөйһөм бармы? Уларҙы бында табып булмаймы ни?

Косоротов төргәкте ҡабаланып тағатырға тотондо.

— Иплэп, йыртып ҡуйма.

Йоҡаҡ ҡына ҡағыҙға баҫылған «Искра» тигән һүҙҙәрҙе уҡығас, Косоротов ҡыуанысынан бейер сиккә етте, Булаевты ҡосаҡлап алды. Был газета тураһында ла, Лениндең бынан ике йыл элек Өфөгә килеп китеүен дә ишеткәне бар ине уның.

— Рәхмәт һеҙгә, был яҡшылығығыҙҙы ғүмергә онотмам.

— Миңә түгел, үҙебеҙҙең урядниккә әйт ул рәхмәтенде.

Ҡосоротов уға аптырап ҡарағас, Булаев йылмайҙы, бына шулай ул, ниңә икәнен үҙең бел, тигән кеүек, күҙлеген ҡабаланмай ғына мамыҡ менән таҙартып, яңынан танауына атландырҙы.

— Иртәгә ҡайтырға сығам тигән көндө Өфө урамында үҙебеҙҙең урядник осраны. Туғанына ҡунаҡҡа барған икән. Күп эсеүҙән шешенеп бөткән. Мин дә иртәгә ҡайтам, ти был, үҙе мөлдөрәп миңә ҡарай. Һиҙеп алдым шундуҡ, башын төҙәтә алмай йөрөп ятҡан көнө. Аҙыраҡ һөйләшеп торғас, түҙмәне, үҙе үк: «Һеҙҙә минең кеүек ауырыуҙарҙы төҙәтә торған дарыу ҙа барҙыр. Алла хаҡына йәнемә инегеҙ. Ағайым, һин — дәүләт кешеһе, көндөҙ иҫереп йөрөмә, тип эсермәне»,— ти бит.

Минең башҡа бик һәйбәт бер уй килде. Туҡта әле, мин әйтәм, үҙе үк ҡулға килеп ҡапҡан ярҙамсыны ниңә ысҡындырырға. Газетаны биргәндә, бик һаҡ булығыҙ, был «осҡон» батша властәре өсөн оло янғындан да ҡурҡыныс. Уны бөтә ерҙә эҙләйҙәр, тип киҫәткәйнеләр. Әллә ниңә үҙем дә сырхап торам әле. Иртәгә бергәләп ҡайтып китһәк, арыу булыр ине, тим тегегә, хәйләгә һалышып. Был өндәшмәйерәк тора. Шунан фатиргә индереп, бер стаканды йомдорткайным, һәйбәт кеше һин, бергә ҡайтырбыҙ, тип йомшарҙы ла китте. Иртәгә иртүк миңә кил, тағы ла баш төҙәтерһең, мин әйтәм. Ҡараңғылы-яҡтылы килеп еткән. Әҙерләп ҡуйған йөҙ грамды эсергәйнем, сумаҙанды әйтмәһәм дә күтәреп алды. Мин ни ҡайтып еткәнсе сирле кешегә һалыштым, ул төпкө ҡатында ошо газета ятҡан сумаҙанды күтәреп йөрөнө.

— Ха-ха-ха!..— һәр саҡ етди Ҡосоротов түҙмәне, рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе.— Ну шәп иткәнһең!

— Әйтмә лә, күңел тыныс, урядникте кем тикшерә... Һеҙ ҙә һаҡ булығыҙ, Василий Емельянович. Хәйер, әйтмәһәм дә, беләһегеҙ инде.

«Искра»ның беренсе һаны ине был газета. Ундағы мәҡәләләрҙе Ҡосоротов төн буйына һәр ҡайһыһын бер нисәшәр ҡат уҡып сыҡты. Пухов менән кәңәшләшкәс, иң ышаныслы кешеләрҙе йыйып, уны күмәкләп уҡырға һүҙ ҡуйыштылар.

Пуховтың да өйө күҙәтеү аҫтына алынғанлыҡтан, улар һуңғы ваҡытта Иванда йыйылалар ине. Был көндө

Ҡосоротов үҙен айырыуса етди тотто, һаҡлыҡ өсөн урамға күҙәтсе лә ҡуйҙы.

Төлкөсура килеп ингәндә, кешеләр йыйылып бөтә яҙғайны инде. Ул хәҙер бында бөтөнләй үҙ кеше. Был төркөмдөң маҡсатын да, бурыстарын да ныҡ аңлай ине инде Төлкөсура һәм ошондай һәйбәт дуҫтар менән таныштырғаны өсөн Садырингә рәхмәт әйтеп бөтә алмай.

Ул Ҡосоротовтың ҡысҡырмай ғына, ләкин аңлайышлы итеп уҡығанын ҙур иғтибар менән тыңлай, үҙенсә фекер төйнәй ине.

Уҡып бөткәс, Ҡосоротов:

— Бына шулай, дуҫтар,— тине.— Хәҙер беҙгә юл күрһәтерлек үҙ газетабыҙ бар. Бында яҙылғандарҙы үҙебеҙ генә белеү түгел, бөтә эшселәргә аңлатыу — бөгөнгө төп бурыс. Экономик һәм политик забастовкаларҙың берҙәй үк булмауын, эш хаҡы арттырыуҙы талап итеп кенә, тормошобоҙ яҡшырмаҫын, власте ҡулға алырға кәрәклеген аңлатыуға айырыуса әһәмиәт бирегеҙ.

Ошонда уҡ һәр цехта аңлатыу эштәре алып барыу өсөн яуаплы кешеләр тәғәйенләнде. Төлкөсура, әлбиттә, үҙенең тимерлек цехына беркетелде. Цехта ла һуңғы ваҡытта үҙгәреш күҙгә ташлана ине. Тәүҙә йомолоп, һәр ҡайһыһы үҙенсә йәшәгән кешеләр уны ҡыйыу фекерле, алсаҡ күңелле булғаны өсөн яраталар, уның кәңәшенә ҡолаҡ һалалар, серҙәрен дә уртаҡлашалар. Төлкөсура ла цехтағыларҙы яҡшы белә, ышанырҙай кешеләрҙе үҙе тирәһенә ныҒыраҡ туплай ине. Шуға күрә Ҡосоротовтың:

— Ләкин бик һаҡ булығыҙ,— тип иҫкәртеүе уны артыҡ борсоманы.

Аҙаҡтан быйыл йыйылышып маевка үткәреү, беренсе майҙа прокатсыларҙың забастовкаһын ойоштороу хаҡында һөйләштеләр.

— Ҡулыбыҙға килеп эләккән был «осҡон» беҙҙең Белореттә лә ялҡын ҡабыҙырға тейеш, дуҫтар,— тип йомғаҡланы Ҡосоротов йыйылышты.

* *
*

Яҙ быйыл һуңлабыраҡ килде. Апрель аҙағы, ә урманда, йырындарҙа һаман ҡар бөтмәгән әле. Ағастар күгәрешеп, япраҡ ебәрергә сыҙамдары бөтөп ултыра. Ҡарҙан әрселгән ерҙәрҙе иһә аҡ сәскәләр, умырзаялар ҡаплаған.

Нисек кенә булмаһын, һәр ерҙә яҙ үҙен һиҙҙерә, ергә лә, кешеләр күңеленә лә нур өҫтәй.

Төлкөсура менән Сажидә ҡары бөтөп һурыға башлаған өй алдарын һепереп таҙартҡас, һарай эргәһендә ятҡан бүрәнә өҫтөнә ултырҙылар. Көн сыуаҡ, елһеҙ ине. Арҡаны рәхәт иттереп ҡояш иркәләй.

— Мин хәҙер йөрөп киләм әле,— тине Төлкөсура,— ваҡ-төйәк йомоштарым бар ине.

Сажидә уға шикләнеберәк ҡараны.

— Тағы йыйылышҡалыр әле?

Төлкөсура үҙенең йыйылышҡа йөрөгәнен унан йәшермәй ине хәҙер. Сөнки яратмағаны — алдашыу. Һуңлап ҡайтҡан һайын ялғанлаһаң, Сажидәнең ышанмауы, шикләнә башлауы ла бар. Уның Сажидәһе юҡ-бар хәбәрҙе кешегә һөйләп йөрөй һалығы ла юҡ. Үҙенә ышанған кеүек ышана ла инде уға Төлкөсура. Шулай ҙа был юлы ҡайҙа барыуын йәшерҙе. Сөнки Мратҡы тауында маевка үткәреүгә әҙерлек бик йәшерен алып барылды. Уны маевкала ҡатнашырға тейешле кешеләрҙән башҡа бер кем дә белергә тейеш түгел ине. Шуға күрә Төлкөсура был юлы дөрөҫөн әйтмәне. Уның һорауына:

— Юҡ, шулай иртә ниндәй йыйылыш булһын.— тип яуап бирҙе лә урынынан торҙо.— Әйҙә инәйек, теге малай уянып, осоп төшмәһен.

Уларҙың хәҙер имгәкләп, бер итеп йөрөгән күңел йыуатҡыстары — Илһам исемле малайҙары бар ине. Төҫө менән атаһына һуйған да ҡаплаған. Өйгә инһәләр, ул йоҡоһонан уянған да, стена буйына өйөлгән кейеҙ, юрғандарҙы ауҙарып, шуның өҫтөнә менеп ултырған. Атаһы менән әсәһен күргәс, үҙе генә белгән телдә һөйләнә-һөйләнә, ҡап-ҡара күҙҙәрен, өс-дүрт бөртөк тешен йылтыратып, урындыҡ ситенә имгәкләп килде. Төлкөсура уны югерә-атлай барып ҡулына алды.

— Ныу һине, шайтан малай!.. Урынды ниңә ҡолаттың?

Малай атаһының мыйығына йәбеште. Сажидә иһә ире менән улына ҡыуанып ҡарап торҙо, шунан әйтте:

— Үҙеңә оҡшаған инде, тик ултырыуҙы белмәй, йөрөп ята.

Төлкөсура һиҙә: Сажидә уның, йөрөп киләм, тиеүенә төрттөрә. Бисәһенә ҡайтарып һүҙ әйтмәне, китергә әҙерләнә башланы. Кешеләр эштән сығыу менән Мратҡы тауы һыртындағы аҡланға йыйылырға тейеш ине. Унда

ҡайһы яҡлап, нисегерәк барыу алдан уҡ һөйләшеп ҡуйылған. Төлкөсура ла унда урап-урап барҙы. Сауҡалыҡ, унан шыршылар араһынан тауға күтәрелгәнендә, бер нисә урында үҙ кешеләрен осратты. Белә: былар — һаҡлыҡ өсөн ҡуйылған постар.

Маевканы артыҡ ҙур итеп үткәреүҙән тыйылғайнылар. Иртәнән һуңға — Беренсе май көнө — прокат цехы забастовка башларға тейеш ине. Әгәр бөгөнгө йыйынды киң үткәрһәң, земский начальниктең һуңғы ваҡытта бөтә завод, поселок буйынса еҫкәнеп йөрөүсе шпиктәре һиҙенеп ҡалып, забастовканың өҙөлөп ҡуйыуы бар.

Тау һыртындағы ер һурыҡҡан инде. Үләндәр моронлап, йәшәреп сығып килә. Ун бишләп кеше, аҡлан ситенә түңәрәкләп ултырып, иң тәүҙә ошо забастовканы ойошҡан рәүештә үткәреү хаҡында һөйләштеләр.

— Нисек кенә итеп булһа ла, прокатсылар ҡуйған талаптарының үтәлеүенә ирешергә тейеш,— тине Косоротов.— Был бүтән цех эшселәрендә лә үҙ көстәренә ышаныс тыуҙырыр, дөйөм завод забастовкаһы үткәреүгә генераль репетиция булыр. Геннадий,— тип Садырин ултырған яҡҡа боролдо (ул хәҙер прокат цехында эшләй ине),— кешеләрҙең кәйефе нисек?

— Бөтәһе лә әҙер. Беренсе май көнө эш тулыһынса туҡталасаҡ. Икеләнеүселәр юҡ тиерлек, Василий Емельянович.

— Яҡшы. Александр Николаевич,— Пухов, үҙенең исемен ишеткәс, ҡалҡына биреп ҡуйҙы,— эшселәрҙең управляющийгә тапшырасаҡ ҡағыҙын Генкаға бир. Унда беҙ, иптәштәр, завод хужалары алдына шундай талаптар ҡуябыҙ: цех эшселәренә көнлөк эш хаҡын ҡырҡ тингә арттырырға, бөтә цехты өс сменалы эшкә күсерергә. Шулар үтәлмәй тороп, эш башлау юҡ. Әгәр хужалар прокатсыларҙы ҡыҫымға ала башлаһа, бүтән цехтарҙа эш ташлаясаҡтарын белдереп, управляющийгә үҙ вәкилдәрен ебәрә.

Төлкөсура ошо һүҙҙәрҙе тыңлай ҙа бөтә завод эшселәренең хужаларға ҡаршы күтәрелеүен күҙ алдына килтерергә тырыша. «Бик ҙур көс бит был. Ниңә бер юлы бөтә заводта забастовка үткәрмәҫкә?» — тип уйлай. Василий Косоротов ныҡлы уйлап, әкренләп үҫеш юлынан алып барған көрәштең үтә ҡатмарлы икәнен аңлап бөтмәй ине шул әле.

Ҡайтҡан саҡта Төлкөсура, өйҙә бошонор, үҙен көтөп

ултырған бисәһенең күңелен күтәреү өсөн бүләк итермен тип, туҡтаны ла, тау итәген ябып алған аҡ сәскәләрҙе йыйырға тотондо. Ике ҡулына ла сәскәләр тотоп, поселок урамынан күңелле генә атлап килә ине, сортировкалау цехының мастере осраны. Быға тиклем бер ҙә һөйләшеп торғандары булмаһа ла, мастер уның менән исәнләште:

— Сәскә йыйырға барҙыңмы? — тине, мәғәнәле ҡараш ташлап.

— Эйе, малай бар бит минең,— тине Төлкөсура, һис ниндәй ҙә уй башына килмәйенсә.

Иртәгеһенә эш башланыу менән Төлкөсураны завод контораһына саҡыртып алдылар. Смотритель Бейерҙең бүлмәһендә приставтың ултырыуын күргәс, ул тәүҙә аптыраны, шунан башына шикле уй килде: «Кисә маевкаға барғанды һиҙгәндәрме әллә? Ҡайҙан белеүҙәре мөмкин?» Пристав оҙаҡ уйланып торорға ваҡыт бирмәне.

— Һин кисә сәскә йыйырға барғанһың икән.— Уның табаҡтай битендә мыҫҡыллы йылмайыу сағылды.— Беҙгә һинең сәскә йыйырға түгел, икенсе ергә барыуың билдәле. Маевка ҡайһы ерҙә үтте? Унда кемдәр ҡатнашты?

Төлкөсура бер мәлгә генә аптырабыраҡ ҡалды, ләкин үҙен шундуҡ ҡулға алды. Бындай хәлгә беренсе тапҡыр ҡалыуы түгел, приставтан былайыраҡ һорау алыусыларға яуап биргәне бар.

— Һис ни аңламайым, пристав әфәнде. Маевка тигән нәмәгә барыу түгел, ишеткәнем дә юҡ.

— Борғоланма, Ахунов. Ҡосоротов үткәргән йыйында һинең дә ҡатнашыуың беҙгә билдәле. Тик һин, үҙ хәлеңде еңеләйтәйем тиһәң, асығын әйт, унда кемдәр ҡатнашты, ни тураһында һүҙ барҙы?

«Теге мастерҙең генә эше, шул еткергән,— тип уйлай Төлкөсура.— Ләкин ул мине урамда ғына күрҙе бит. Был бәндә минән бөтәһен дә вайым менән һорай».

— Мин һеҙгә дөрөҫөн әйттем, маевканы ла, һеҙ телгә алған кешене лә белмәйем.

Пристав улай итте, былай итте, Төлкөсураның аҙ ғына ла үҙгәрмәгән, тыныс сырайына ҡарап, унан үҙенә кәрәкле һүҙ ишетеренә өмөтөн өҙҙө. Сөнки кисә ҡайҙалыр маевка үтеүе, Төлкөсураның сәскә тотоп ҡайтыуы тураһындағы хәбәрҙән башҡа белешмә юҡ ине уның ҡулында. Икенсенән, тимерлек цехы әлегә иң тыныс урын һанала, ундағы эшселәрҙең ризаһыҙлыҡ белдереп, тауыш күтәргәне юҡ.

— Тағы ла бер уйлап ҡара, Ахунов. Әгәр дөрөҫөн әйтһәң, үҙеңде ҙур бәләнән ҡотҡарасаҡһың,— тине лә ул Төлкөсураны сығарып ебәрҙе.

Был хәлде туранан-тура Ҡосоротовҡа һөйләп бирергә ҡыймаңы Төлкөсура. Пуховты осратып, уға әйтте. Ләкин шул кисте үк Ҡосоротовтан ныҡ ҡына эләкте уға.

— Мин ул мастерҙән гел шикләнеп йөрөй торғайным. Төрлө юлдар менән яҡынлашырға, иң актив эшселәрҙең ышанысына керергә самалап йөрөй. Һаҡ булығыҙ унан,— тине Василий Емельянович һәм Төлкөсураны, прокатсыларҙың забастовка көндәрендә тимерлек цехы тулы тынысльҡ һаҡларға тейеш, сөнки хәҙер һинең һәр аҙымыңды күҙәтеп торасаҡтар, тип киҫәтте.

Беренсе май көндө прокат цехына ике сменаның эшселәре лә иртүк йыйылды һәм, өс кешенән вәкил һайлап, үҙ талаптары яҙылған ҡағыҙҙы тапшырыу өсөн, управляющийға ебәрҙеләр.

Прокатсыларҙы һәр төрлө янауҙар ҙа, эштән ҡыуыу менән ҡурҡытыу ҙа йомшартманы. Иртәгеһенә цехҡа управляющий үҙе килде.

— Эш башлағыҙ, ә мин эш хаҡын арттырыу тураһында заводтың төп хужалары менән һөйләшермен,— тип эште нисек тә урынынан ҡуҙғатып ебәрергә самаланы.

Ләкин эшселәр ҡоро һүҙгә алданманы.

— Тәүҙә эш хаҡын арттыр!

— Цехты өс сменага күсер!

— Шунһыҙ эш башлау юҡ!..

Ҡоль бер нәмәне асыҡ аңланы: забастовка алдан уйлап ойошторолған, уны былай ғына туҡтатыу мөмкин түгел. Һәм утыҙлап эшсене заводтан ҡыуыу тураһында приказ яҙҙы. Ошоно ғына көткән кеүек, ҡорос ҡойоу, мартен цехтарынан, әгәр прокатсыларҙы эштән бушатһағыҙ, беҙ ҙә забастовка күтәрәбеҙ, тигән иҫкәртеү менән вәкилдәр килде. Шулай ҙа һаман бирешергә теләмәне управляющий. Әүжән заводы управляющийына хат яҙып, унан егерме прокатсы саҡыртып килтерҙе һәм цехты шулар ярҙамында эшләтә башларға уйланы. Әүжәндәрҙе прокатсылар ҡапҡа алдында:

— Һеҙ заводсылар яҡлымы ни?!

— Цехҡа аяҡ баҫмайһығыҙ! —тип ҡаршы алдылар.

Әүжәндәрҙе оҙата килгән полицейскийҙәр юл эрсәләргә итеп ҡарағайны, уларҙы ҡыҫырыҡлап урамға сығарҙылар, бер нисәһен дөмбәҫләп тә алдылар.

Прокатсылар сығышын бөтә завод ҙур көсөргәнеш менән күҙәтә ине. Аҙ ғына осҡон төшөр,— барлыҡ эшселәр гөлтләп ҡабынасаҡ. Шуға күрә управляющийҙең сабырлығы һынды, забастовка башланыуҙың унынсы көнөндә эшселәрҙең талабын ҡәнәғәтләндереүе тураһында белдерҙе.

Был көндө Төлкөсура өйөнә шат йөҙ менән ҡайтып инде. Әйтерһең, уның күптән уйлап йөрөгән хыялы тормошҡа ашҡайны.

* *
*

Йәй күңелдәргә хөрлөк, күтәренкелек алып килгән һымаҡ була ине. Һәр сәғәттең ҡәҙерен белеп, иркенләп йөрөп ҡалғы килә. Сажидә менән Төлкөсура ла, балаларын алып, ҡайһы саҡта бергәләп Ағиҙел ярына сығалар. Төлкөсура сиҙәм өҫтөнә һуҙылып ята ла:

— Беләһеңме, Сажидәкәй, бәхет ҡошом, бына бер көндө беҙ байғураларҙы һепереп түгербеҙ, үҙебеҙ теләгәнсә шул тиклем матур тормош ҡорорбоҙ. Бында нисектер ерһенмәйем мин, ауылға ҡайтырбыҙ; иркен итеп, тәҙрәләрен киң уйып өй һалырбыҙ ҙа шул өй эсен тултырып балалар үҫтерербеҙ, — тип хыялдарға сума.

Әлегә уның хәҙерҙән ауылға ҡайтыу тураһында уйлағаны юҡ. Бикморатҡа һирәкләп хат яҙа, унан алған хат буйынса, ауыл хәлдәрен аҙ-маҙ белә: ҡустыһының да улы бар икән, Йәнтүрә тип исем ҡушҡандар. Уйылдан шул Төлкөсуранан үсемде алмаһам, бүркемә хужа булмайым, тип һаман теш ҡайрап йөрөй икән. Ауылда ла хәҙер халыҡ шым ғына ятмай, тип яҙған һуңғы хатында Бикморат, халыҡ дүрт көн буйы эшкә сыҡмағас, Лапшин көнлөк хаҡын унар тингә арттырҙы, тигән.

Тик тәбиғәт хозурлығына һоҡланып ҡына йәшәр саҡ түгел ине шул.

Берҙән-бер көндө күҙ бәйләнгәс, Төлкөсуралар өйөнә Василий Косоротов килеп инде. Һәр саҡтағы кеүек, апаҡ күлдәктән, галстук таҡҡан. Инде лә:

— Көтмәгәйнегеҙме? Үҙем килмәһәм, саҡырып алмайһығыҙ бит,— тип тупһа алдында туҡтап ҡалды.

Ни эшләп йөрөй икән ул? Бында бер тапҡыр ҙа булғаны юҡ ине ләбаһа, ҡайҙан юллап килгән?

— Әйҙәгеҙ, Василий Емельянович, сисенегеҙ, үтегеҙ.

— Рәхмәт, Ахунов, ҡабаланам. Үҙеңә генә әйтә торған йомошом бар ине.

Хужа әбей өйҙә булғанлыҡтан, Сажидәнән бер серен дә йәшермәһә лә, Төлкөсура соланға сыҡты.

— Һиңә бик ҙур һәм яуаплы йомош ҡушырға ине,— тине Косоротов.

Төлкөсура, уның йомоштарын быға тиклем дә үтәгәне булыуға ҡарамаҫтан, һағайҙы.

— Әйтеп ҡарағыҙ, Василий Емельянович.

— Сермәнгә барып ҡайтырға кәрәк. Әүжән юлындағы ауылды beләһеңдер бит?

— Беләм дә?..

Был хәбәрҙән аптырабыраҡ ҡалғайны Төлкөсура. Ул ауылда ни эшләргә икән?

— Унда беҙҙең Мирза тигән үҙебеҙҙең кеше бар. Өфөләге иптәштәр ебәргән бына бынау прокламацияны,— Косоротов ҡуйын кеҫәһенән бер ҡағыҙ алды,— шунан башҡортсаға тәржемә иттереп алып ҡайтырға кәрәк.

Төлкөсура аҙ ғына уйланып торҙо ла икеләнеберәк әйтте:

— Бәй, уны үҙем дә башҡортсалаштыра алмаммы икән?

— Әллә инде. Уны бик дөрөҫ һәм аңлайышлы итеп тәржемә итергә кәрәк.

— Ғилем етеңкерәмәҫ шул,— тип кире ҡайтауылланы Төлкөсура.— Ярар, барып ҡайтырмын. Тик бына иртәгә эшкә бит әле.

— Уныһын уйлағанбыҙ. Бына һинең ауырып ятыуың тураһында яҙыу.— Косоротов уға тағы бер ҡағыҙ кисәгә тотторҙо.— Хәҙер үк юлға сығырға кәрәк. Иртәгә кис әйләнеп ҡайтып етәһең. Ләкин ҡара уны, ауыл тип, алабарман ҡыланма. Земскигә һис кисекмәҫтән мине тотоп ултыртыу тураһында өйәҙҙән ҡағыҙ килгән, ти эле. Һуңғы ваҡытта хәтәр ҡоторона улар, һаҡ йөрө.

Косоротов Мирзаның өйөн нисек табырға өйрәтте лә китеп барҙы.

Төлкөсура кире ингәндә, Сажидә әле саҡ бер айлыҡ ҡына булған ҡыҙын имеҙеп ултыра ине. Ҡыҙы тас әсәһе инде: зәңгәр күҙле, аҡ йөҙлө. Хәҙер апаруҡ теле сыға башлаған Илһам сабыйҙың имгәнен ҡыҙыҡһынып күҙәтә, әсәһенә ниҙер һөйләй.

Бисәһен, балаларын күргән һайын Төлкөсураның бөтә

тәнен ҡыуаныс солғап ала. Ҡаторгала йөрөгәндә ғаилә ҡороп, бала-сағалы булып донъя көтөүҙән ҡайһы саҡта өмөтө өҙөлөп йөрөгәнгә шулай итәлер, бәлки. Ул балаларын эштән ҡайтҡанса ла һағына. Хәҙер бына тәүлек буйы йөрөргә тура килә.

Сажиҙәнең сабыйҙы тыныс ҡына имеҙеп бөткәнен көттө ул. Бисәһе, ҡыҙын сәңгелдәккә һалып:

— Ни йомош менән йөрөй ул? — тип һорағас ҡына, уны эргәһенә ултыртып, ҡулын яурынына һалды ла:

— Мин иртәгә кискә тиклем китәм,— тине.— Бынан йыраҡ түгел бер ауыл бар, шунда барып киләм.

Сажидә ҡапыл күңелһеҙләнде, йөҙөнә борсолоу сыҡты.

— Эй илаһым, һуңғы ваҡытта ниңәлер күңелем тыныс түгел, Төлкөсура. Һиңә әйтмәгәс тә... Бигерәк әллә ниндәй эштәр менән булашаһың.

— Минең насар эш менән йөрөмәгәнде беләһең дә инде, Сажидә. Шулай кәрәк.

— Һаҡланып йөрө, Төлкөсура. Хәҙер бер түгел, ике сабыйыбыҙ бар.

— Ярар, ярар, һин бер ҙә борсолма. Иртәгә ошо ваҡытта, таш яуһа ла, өйҙә булам. Теге әбейгә минең китеүҙе, үҙеңсә аҡыл табып, икенсе төрлө аңлатырһың әле.

Төлкөсура йәһәт кенә кейенде лә, хушлашып, сығып китте.

Көн болотлап торғанлыҡтан, ҡараңғы ине. Быныһы әллә ни борсомай Төлкөсураны. Бер оло юлға төшөп алдыңмы, китеп тик бараһың.

Күпергә етеп барғанында юл ситендә торған бер шәүлә күҙенә салынды. Кем булыр икән бынау төндә? Тәңгәленә етә башлағас, теге шәүлә уға табан ыңғайланы.

— Дуç кеше,— тип русса өндәште шәүлә,— шырпың юҡмы?

— Юҡ шул, тартмайым.

Төлкөсура үҙ юлында булды. Ҡала артта ҡалды инде. Завод тирәһендәге һәм пожар каланчаһындағы ғына уттар сысҡан күҙендәй баҙлап күренә. Тирә-яҡ тыптын. Ҡайҙалыр һыҙғырған төн ҡошо ғына уны ара-тирә боҙоп ҡуя.

Әгәр йөҙ ҡырҡ саҡрым самаһы барһаң, ошо таш юл уны ауылына уҡ алып барып еткерәсәк. Ҡарағауҙан киткәненә лә өс йылға яҡын ғүмер уҙып китте бит инде. Ҡайтып, күреп, танһығын ҡалдырып та килә алмай.

Ауылдан был яҡҡа йөрөүсе лә юҡ. Шуға күрә ҡустыһының хәлен дә рәтләп белешә алмай. Нисек кенә йәшәп ятҡан була икән? Уйылдан ғына ҡыйырһытмаһа, бирешмәйҙер былай. Бикмораттың ултыраҡ аҡыллы, егәрле икәнен күреп китте бит...

Нисәмә йылдар ситтә йөрөһә лә, ул ауылын һаман йыш ҡына һағынып иҫкә ала. «Матур булһа ла йөрөгән ер, һағындыра тыуған ил» тигәндәре шулдыр инде. Ярай әле эс бошорға ваҡыт ҡалмай тиерлек. Заводҡа эшкә йөрөүенән буш сағында, Ҡосоротов, Пуховтар бына ошоноң кеүек йомошон табып торалар.

Ғөмүмән, был өсөнсө йылдың тәүге яртыһы бик шаулы үтте. Әле бер, әле икенсе цех забастовка күтәрә, завод хужалары менән алыш өҙлөкһөҙ тиерлек бара. Анау март айында, Златоустағы баш күтәргән эшселәрҙе аттырғанды ишеткәс, күпме шау-шыу булғайны. Был хәбәр, унда дүрт йыл буйы эшләп киткәнгәлер инде, Төлкөсураға айырыуса нык тәьҫир итте.

РСДРП-ның Өфө комитете тарафынан сығарылған «Златоустта ҡан ҡойоу» тигән прокламацияны алып, Өфө менән Екатеринбургтан агитаторҙар килеп етте. Уны тәүҙә уилап ҡына кеше ҡатнашлығында уҡығайнылар, шунан бөтә заводҡа тараттылар. Тимерлек цехына Өфө агитаторы үҙе килде һәм прокламацияны ҡысҡырып уҡып сыҡты.

— Самодержавиене бөтөнләйгә һепереп түкмәй тороп, беҙҙе лә бына шундай яҙмыш көтә. Ҡулға ҡул тотоношоп, бер кешеләй көрәшегеҙ, үҙегеҙҙе кәмһетергә юл ҡуймағыҙ, дуҫтар! — тине Өфө паровоздар ремонтлау мастерскойынан килгән эшсе.

Май аҙағында иһә берҙәм көрәштең тәмен татыған прокатсылар тағы баш күтәрҙе. Ләкин был юлы забастовка һөҙөмтәһеҙ булды. Төлкөсура белә: хәҙер Ҡосоротов өс цехта бер юлы забастовка башлауға әҙерлек алып бара. Төнөн юлға сығып, прокламацияны тәржемә иттереп алып ҡайтһа, Төлкөсура ла ошо ҙур эшкә үҙ өлөшөн индерәсәк. Һуңғы ваҡытта Ҡосоротов башҡорт, татар эшселәре араһында үҙ телдәрендә аңлатыу алып барыуға ныҡлы әһәмиәт бирә ине.

Шулай ҙа ҡасан булыр икән ул азат тормош? Ул көнгә сығыу өсөн тағы ниҙәр эшләргә кәрәк?..

Бына шулай үткәндәр, киләсәк тураһында уйланып үтте төнгө юлды Төлкөсура. Ул Сермән ауылына килеп

ингәндә, йәйге ҡыҫҡа төн уҙып, таң ата башлағайны инде. Ауыл өҫ яғындағы урманда, түбәндәге туғайҙа, таң тынлығына моң өҫтәп, ҡоштар һайраша. Һырт яҡтараҡ аттарҙың ҡыңғырауы шалтырағаны ишетелә. Ауылдың бына ошо үҙенә хас тауыштары һәм һиллек менән яңы көндө ҡаршылауы Төлкөсураның башында ҡайнашҡан уйҙарҙы таратты.

Мирза аҙ һүҙле кеше икән, Косоротов биргән ҡағыҙға күҙ йүгертеп сыҡты ла, Төлкөсураның ҡайҙан, кем икәнен дә һорашып тормай, уға келәттә урын юнәтеп бирҙе.

— Йонсоғанһыңдыр, ятып тор,— тип ишекте япты.

Ятыу менән йоҡлап китте Төлкөсура. Төшө болармһа ла, уянманы. Имеш, ул каторганан ҡасып ҡайтҡан да ауылында ҙур йыйын үткәрә, халыҡты бөгөндән үк Уйылдандың донъяһын туҙҙырырға саҡыра. Халыҡ геү килә, шунда уҡ Косоротов менән Пухов та ҡулдарын болғайболғай нимәлер һөйләп йөрөп ята, имеш. Ҡапыл ауыл осонан атлылар сабып килеп сыҡты. Алдан килгәне каторгалағы иң яуыз кеше — өлкән стражник бит. Атының муйынына ятҡан да ҡылысын болғап саба. Төлкөсура ҡайҙандыр ҡулына эләккән һыҙманы уға тоҫҡай, сәкегә баҫа — мылтыҡ атылмай, баҫа — атылмай...

Ул яурынына ҡаты ғына төртөүгә уянып китте. Ҡараһа, эргәһендә бер ҡатын баҫып тора.

— Беҙгә әллә ниндәй кешеләр менән урядник килде. Бар, кәртә артына ғына сыҡ та ҡас. Бынау ҡағыҙҙы Мирза биргәйне, мә.

Ҡағыҙҙы алып, пинжәген эләктерҙе лә Төлкөсура һарай артына һыҙҙы. Эй йүгерҙе эйелә-боҫа, эй йүгерҙе, ҡарағай урманына сәсәп килеп йығылды. Бер аҙ ятҡас ҡына уйларлыҡ, фекер төйнәрлек хәлгә килде. «Ни эшләп йөрөй икән ул урядник? Кемдәр менән килгән? Уның бында ни эш менән китеүен һиҙеп, эҙәрләп килгәндәрме әллә юлайҡан ғына һуғылғандармы? Мирза ҡатыны аша бирҙергән прокламация булдымы?» — Төлкөсура тороп ултырып, кеҫәһенә тығылды. Шул. Руссаһы ла, башҡортсаға әйләндерелгәне лә бергә төрөлгән.

Төлкөсура ҡояшҡа күҙ һалды. Шулай оҙаҡ йоҡланымы икән ни? Төш ауып бара ла инде. Шул саҡ ул бик ныҡ асығыуын, һыуһауын тойҙо. Исмаһам, кеҫәһенә берәй телем икмәк тә тығып алмағайны шул. Ярар, нисек

тә ҡайтып етер әле. Был тирәнән тиҙерәк шылғаны яҡшы.

Ул урмандан юлһыҙ-ниһеҙ Белорет яғына ыңғайланы. Байтаҡ ара үткәс, юлға сыҡҡайны, бер атлы килгәне күренде. Арбаһына, атына ҡарағанда шикләнерлек кеше түгел шикелле. Тәңгәленә еткәс, арбалағы урта йәштәрҙәге ирҙән поселокка тиклем ултыртыуын һораны.

— Атым йонсоған да... Әйҙә инде, ултыр,— тип һыңғырҙабыраҡ ризалашты ирекәй.

Үҙе былай алсаҡ ҡына кеше икән. Ҡуҙғалып китеү менән тегеһен-быныһын һораштырҙы, береһенә икенсеһен ялғап хәбәрҙәр һөйләргә тотонло. Һуңғы үрҙе артылып, һарҡыуға табан ыңғайлағас, ул атын ситкәрәк тартып туҡтатты ла арбанан төшөп, арҡалығын күтәрҙе, ҡамытының тамаҡбауҙарын ҡараштырырға тотондо. Шул саҡ юлдың ике яғынан да биш-алтышар кеше йүгереп килеп сыҡты. «Полицейскийҙәр!» Ошо уй башына килеү менән Төлкөсура кесәһенән прокламацияларҙы алды ла бик йәһәт кенә арба төбөндәге ҡабыҡ аҫтына тыҡты. Үҙен полицейскийҙәр уратып алғас та, ылау хужаһының тыныс ҡына баҫып тороуын күреп, аңланы: ул алдан әҙерләнгән ҡармаҡҡа ҡапҡан.

— Төш арбанан! — тип бойорҙо тырпай мыйыҡлы полицейский.

Ҡаршылашыуҙан файҙа юҡ ине. Төлкөсура үҙен тыныс тоторға тырышып, ергә төштө.

— Бер ни ҙә аңламайым.

— Аңламаһаң, аңларһың! Тентегеҙ!

Кесәһен, ҡуйынын аҡтарҙылар, салғый буйҙарын, кейем ҡаттарын һәрмәнеләр, итеген систереп, сылғауҙарын ҡаҡтылар. Хәҙер инде Төлкөсура үҙен поселоктан сыҡҡанда уҡ аңдып торғанлыҡтарын, теге шырпы һораусының шундай кешеләрҙең береһе булыуын аңланы. Ләкин йомшанып төшөү уның башына ла килмәне.

— Прокламацияң ҡайҙа?!

— Ниндәй прокламация ул?!

— Ауылда ҡалдырҙыңмы?

— Мин унда бер ни ҙә алып та барманым, ҡалдырманым да.

— Ниңә барҙың?

— Танышыма йомош менән барғайным.

— Мирза тигән кешегәме?

Мирза өйөнә урядник килеп ҡалһа ла, үҙен күрмәүҙәрен уйлап, Төлкөсура тағы ғәжәпләнгән булды.

— Ниндәй Мирза? Мин ундай кешене белмәйем.

— Ярар, белмәһәң, белерһең! Бәйләгеҙ ҡулын!

Төлкөсурала ҡайһылыр мәлгә тирә-яғындағыларҙы армы-тормо килтереп, ҡасыу тойғоһо уяныл ҡуйҙы. Тик ҡасып күпме йөрөйһөң? Уны Сажидәһе, балалары көтөп тора бит. Бәлки, былай ғына үтеп китер әле...

Унаң ҡулын артҡа шаҡарып бәйләнеләр ҙә арба артынан ҡыуаланылар.

* *
*

...Төнө буйы рәтләп йоҡлай алманы Сажидә. Төлкөсура менән Ҡаратауҙан сығып киткәндән аҙаҡ тәү тапҡыр унһыҙ йоҡларға ятыуы ине шул. Тегеләй-былай әйләнде, улын ҡосаҡлап ятып ҡараны, юҡ инде, эргәһе буп-буш кеүек. Ахырҙа ҡараңғы түбә таҡтаһына төбәлеп ятты.

Төлкөсураһы бынауындай айһыҙ төндә ҡайһылай итеп китеп барған була икән? Аҙашыуын аҙашмаҫ, Ҡаратау юлы буйындағы ауыл, тине бит. Эт-ҡошҡа тап булмаһын. Хәйер, унаң Төлкөсураһы ҡурҡып ҡаламы һуң? Айыуына ла бирешмәҫ әле...

Сажидә иренең ни өсөн йыйылыштарға йөрөүен, унда ни хаҡында һөйләшеүҙәрен асыҡ ҡына белмәһә лә, күңеленән һиҙенә: ҡурҡынысыраҡ эшкә бәйләнә Төлкөсура. Заводта эш ташлауҙар менән ошо йыйылыштар араһында ниндәйҙер бәйләнеш булыуын да тойомлай ул. Бөгөн ни өсөн ауылға китте икән? Шулай кәрәк, тине, төнөн үк юлға сыҡҡас, кәрәктер инде. Эй хоҙайым, иҫән-һау ғына йөрөп ҡайтһа ярар ине.

Ҡыҙы шыңшып уянғайны, Сажидә уны сәңгелдәктән алып, имсәк бирҙе. Сабыйҙың бер ғәҙәте бар: имсәкте ҡаба ла бәләкәй генә бармаҡтары менән әсәһенең түшен рәхәт иттереп тырнап ята. Эй супылдатып, мыш та мыш килеп имә ҡыҙы. Сажидә үҙе лә бер саҡ шулай ятҡандыр инде. Ләкин ул үҙен тапҡан, күкрәк һөтөн биргән әсәһен бөтөнләй хәтерләмәй. Әгәр әсәһе иҫән йөрөһә, ауылынан сыҡмай ғына йәшәһә, яҙмышы нисегерәк булыр ине икән Сажидәнең? Тормош юлында Төлкөсура тап килер инеме? Осрашырҙар ине, моғайын. Кешенең үҙенә яҙғаны

тыуғанда уҡ маңлайына яҙылып ҡуйыла, тн бит...

Ул Уйылданды ла, унда үткән көндәрен дә иҫкә алырға яратмай ине. Әле ниңәлер хәтеренә төшөрҙө. Саҡ ҡына ла яратмаған кеше менән, етмәһә, көндәш эргәһендә шунса йылдар буйы нисек түҙеп йөрөнө икән?

Уйҙар шулай бер-береһенә ялғанып аҡты ла аҡты. Ҡыҙы, имеп туйып, йоҡлап китте. Тәҙрә төбөндә аяҡ тауыштары ишетелгән һымаҡ булды. Сажидә ҡалҡына биреп тыңланы. Төлкөсура кире әйләнгәнме әллә? Бер тауыш та юҡ. Көткәнгә шулай тойолғандыр. Ул ҡабат ятҡайны, тағы аяҡ тауыштары ишетелде. Китсе, кем йөрөр бынау төндә? Күңеле болоҡһоп, Сажидә торып ултырҙы, шунан шәмгә ут алып, соланға сыҡты, һораны:

— Кем бар унда?

Тышта үле тынлыҡ, өйҙә хужа әбейҙең:

— Төлкөсура ҡайттымы әллә? — тигән тауышы ишетелде.

— Юҡ, әбей, аяҡ тауышы ишетелгән һымаҡ булғанға сыҡҡайным.

— Ә һин борсолма, тыныс ҡына йоҡла. Көткәнгә шулай тойола ул, ҡыҙым.

Сажидәгә әбей һәр саҡ шулай «ҡыҙым» тип өндәшә. Бигерәк һәйбәт кеше лә инде. Донъяның әсеһен-сөсөһөн күп татыған шул. Ире төрөк һуғышына киткән дә әйләнеп ҡайтмаған. Бына хәҙер илле йылға яҡын тол ҡатын булып йәшәй. Сажидә әбейҙе уятҡаны өсөн үҙен ғәйепле һанап, уның эргәһенә барҙы, юрғанын ҡымтып япты, арҡаһынан яратты.

— Йоҡла, әбей, хәҙер утты һүндерәм.

— Һәйбәт ҡатын һин, — тине әбей. — Ирҙе бына шулай түҙемһеҙләнеп, борсолоп көтә белеү ҡатын кешене матурлай. Ят, ҡыҙым, Төлкөсура үҙ эшен белеп йөрөй торған кеше. Ваҡыты еткәс, ҡайтыр.

Сажидә улы менән ҡыҙы уртаһына ҡабат ятты, ләкин күҙенә һаман йоҡо ҡунманы. Хәҙер уның башына бер-береһенә бәйләнешһеҙ, әллә ниндәй буталсыҡ уйҙар тығыла ине. Бына тәҙрәгә таң зәңгәрлеге төштө. Зәңгәрһыу быялаларға төбәлеп ята торғас, Сажидә йоҡлап китте.

Көндөҙ ҙә тынысланманы Сажидәнең күңеле, ҡулына ни тотһа, шул төшөп барҙы. Ахырҙа хужа әбейгә:

— Йөрөп киләм әле, — тине лә, ҡыҙын күтәреп, улын етәкләп, урамға сыҡты.

Өс йылға яҡын йәшәһәләр ҙә, рәхәтләнеп һөйләшеп

ултырырлыҡ таныштары аҙ Сажиданең. Үҙҙәре эргәһендә йәшәгән Садыриндәргә ингеләй ҙә Пуховтарға — Ҡатя эргәһенә бара. Ҡатя — алсаҡ ҡатын, уның менән булғанда донъя мәшәҡәттәре онотолоп торғандай тойола ине. Шуға күрә әле, алыҫыраҡ булһа ла, шунда китте.

Ҡатя уны, һәр ваҡыттағыса, ихлас ҡаршыланы, ҡулынан балаһын алып:

— Бигерәк матур ҙа инде ҡыҙың,— тип һөйләнә-һөйләнә, биттәрен супылдатып үпте; уны ағас койкалағы мендәргә һалды ла: — Әйҙә, килеп, ҡайһылай һәйбәт иттең әле,— тине, Илһамға кәнфит килтереп тотторҙо.

Сажиданең борсолоуҙары бер юлы һыпырып алғандай ғәйеп булды.

— Йә, нисек кенә йәшәп ятаһығыҙ, Ҡатя?

— Әүәлгесә инде. Тик бына бөгөн Александр эшкә борсолобораҡ китте әле.

— Ниңә? Бер-бер хәл булғанмы әллә?

Ҡатя икеләнгән һымаҡ итте, шунан әйтте:

— Һинән йәшереп булмай инде, Соня (ул Сажидәгә шулай өндәшеп ғәҙәтләнгәйне). Уҡытыусы Киселевты ҡулға алғандар. Һин уны беләһе инеңме икән?

— Белгән кешем түгел. Ниңә икән?

— Ул бит беҙҙекеләр менән бер юлда ине.

Был һүҙ Сажиданең күңелен яңынан болоҡһотто.

— Китсе... Беҙҙекеләргә ни булыр икән?

Катянең һәр саҡ ниндәйҙер шатлыҡ бөркөп торған күҙҙәре уйсанланғайны.

— Белмәйем инде, Соня. Полиция Василий Емельяновичте эҙләй, ти.

— Уныһы кем тағы?

— Бик һәйбәт кеше. Беҙҙекеләрҙең башлығы, тип әйтәйемме... Белмәйһеңме ни? Һаҡал үҫтергән, урта йәштәрҙәге ир.

Был юлы Сажидә тертләгәндәй итте. Төлкөсураны төнөн йомош менән ебәреүсе шул булдымы икән ни? Катягә ул иренең өйҙә юҡлығын һөйләп бирҙе һәм, күңеле ниҙер һиҙенеп, ҡайтырға йыйына башланы.

— Эй хоҙайым, ниҙәр генә күрәһеләр бар икән.

— Ниңә һин ул тиклем көйәләнеп киттең әле, Соня? Бер ни ҙә булмаҫ иреңә,— тип уны йыуатты Ҡатя.

Ләкин Сажидә тынысланманы.

— Икенсе ваҡыт яйлап ултырырбыҙ әле,— тип ҡайтырға сыҡты.

Уны хужа әбей ҡапҡа алдында ҡаршыланы.

— Ҡайҙа йөрөнөң, ҡыҙым? Бында полицейскийҙәр килеп, өйҙөң аҫтын өҫкә килтерҙеләр,— тип йөрәк ярғыс хәбәр әйтте ул.— Ни эшләргә белмәй, тик ултырҙым.

Сажидә Илһамын шунда ҡалдырҙы ла йүгереп өйгә инде. Ысынлап та, өйҙәге бөтә нәмә туҙып ята. Өҫтәл, һандыҡ урынынан шыуған, урын-ер таратып ташланған. Ни хәл был? Төлкөсураны ла ҡулға алғандармы әллә?

Хужа әбейҙең соландан уҡ:

— Төлкөсураны таптыралар, һине лә һораштылар,— тип һөйләнә-һөйләнә килеп инеүе уны айныҡтандай итте, балаһын алып барып сәңгелдәккә һалды.

Төлкөсураны таптырғас, уның ҡайҙа китеүен белмәйҙәр, күрәһең, ҡулға ла алмаған булырға тейештәр. Ләкин Төлкөсура ҡайтып етәсәк бит. Ҡабат килеп, алып китеүҙәре лә бар. Ни эшләп ҡарайһы икән? Әллә ҡаршыһына сығырғамы? Ҡаратау яғына китә торған юлды белә, моғайын, шунан киткәс, шунан уҡ ҡайтыр. Тәҙрәнән болоттар аша тоноҡланып күренгән ҡояшҡа күҙ һалды.— көн кисләп бара.

— Әбей, һин балаларға күҙ-ҡолаҡ булып тор,— тине лә уның ни әйтерен дә көтмәй, сығып йүгерҙе. Анау тау битләүендә ярылып ятҡан юл Ҡаратауға бара бит инде. Төлкөсураһын осратҡанға тиклем шул юлдан атлар ҙа атлар. Сажидә әллә ниндәй тыҡрыҡтар аша үтеп, тоҫмал менән шунда ҡарай йүнәлде. Бына таш юлға сыҡты. Юл түбән төшә лә, бынан уҡ күренеп торған күпер аша сығып, тауға күтәрелә.

Сажидә, шул яҡҡа күҙ һала-һала, юл ситенән алға йүгерҙе. Шунан, ниңә йүгерәм әле, берәйһе ҡарап торһа, аптырар, шикләнеүе лә бар, тип, атлап ҡына бара башланы. Йөрәге сығырҙай булып тибә, сикәләре ҡыҫыла ине уның. Күпергә етеп бара ине, тауға үрләгән юл бороло-шонда ат күренде. Түбәнләскә торо булһа ла, атлатып ҡына киләләр. Арбаға байтаҡ кеше тейәлгән, арттан йәйәү килгәндәре лә күренә. «Төлкөсура бында булмаҫ,— тип уйланы Сажидә.— Ул яңғыҙы йөрөр, моғайын». Туҡтамай, атлауын дауам итте, күпер аша сығып, тауға артылды. Бына арба тауышы яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Ниндәй әҙәмдәр икән? Әллә ни һөйләнеп, бәйләнмәҫтәр ҙә инде?.. Башын түбән эйеп, атлылар яғына ҡарамаҫҡа тырышып, һаман юл ситенән атлай Сажидә.

Ат үҙенең тәңгәленә етеүе булды:

— Сажидә!..— тигән тауыш йөрәген тетрәтте, башын күтәреп ҡараһа, артынан ике полицейский төшкән Төлкөсура уға ҡаштарын сөйөп ҡарап тора.

— Төлкөсура!.. — Сажидә ҡоласын йәйеп, һис ни уйламаҫтан, уға ҡарай югерҙе.

— Был ни хәл тағы?!.

— Бисәһелер.

— Яҡын юлатмағыҙ!

Артынан килгән полицейский Төлкөсураның арҡаһына наган көбәге менән төрттө.

— Атла!

·Икенсе берәүһе, арбанан төшөп, Сажидәнең юлына арҡыры торҙо.

— Һин кем?

Был тауыш Сажидәне ҡайһылыр мәлгә туҡтатты, иҫенә килтерҙе. Төлкөсураның ҡулдары артҡа шаҡарып бәйләнгәнен абайланы ла тағы алға уҡталды.

— Ул бит минең ирем!.. Ҡайҙа алып бараһығыҙ уны?!.

Полицейский уны төртөп ебәрҙе, Сажидә юл ситенә үк тәкмәсләп барып төштө. Был Төлкөсураның бөтә сабырлығын өҙҙө, бер генә һикереп полицейский эргәһенә килде лә уның артына типте, тегеһе бауын киҫкәндәй ҡоланы. Арбанан өҫтөнә ырғығанын башы менән бәреп йыҡты. Ләкин уға күмәкләп ябырылдылар һәм, арбаға күтәреп һалып, өҫтөнә ултырҙылар ҙа тау түбәненә юрттырҙылар.

Сажидә ырғып тороп улар артынан югерҙе. Полицейскийҙәрҙең көлөшөүен, һүгенеүен ишетте, ыржайған тештәрен күрҙе, нимәгәлер эләгеп, юл уртаһына йөҙтүбән йығылды...

## VII

Ҡаратауға ҡыш иртә килде. Октябрь бөтмәҫ элек ҡар яуҙы ла ҡабат иремәне. Ҡешеләрҙең быға артыҡ иҫе китмәне: көҙгө бысраҡ оҙаҡҡа һуҙылмайынса сана юлы төшкәне яҡшы.

Бикморат аҙна буйы баярға ағас ҡырҡырға йөрөмәне. Ҡар һай саҡта бесәнен ташып алды, бер нисә йөк утын да килтерҙе. Уның һаман бер атынан башҡа малы юҡ. Теге йылда ағаһы биреп ҡалдырған аҡсаға башмаҡ һатып алғайнылар, беренсе йылда аслыҡ тағы көсәйеп кит-

ҡәс, һуйырға тура килде. Мал күҙенә ҡарап ултырып булмай бит инде.

Рәхиләһе харап уңған булып сыҡты. Өй эсенә йәм өҫтәргә тырышып, таҙартып, йыйыштырып тора. Малай ҙа табып бирҙе. Өсөнсө йәш менән барған Йәнтүрәләре тупылдап югереп йөрөй. Үҙе бер ирмәк инде.

Һуңғы йылдарҙа ил буйынса иҫкән тынғыһыҙлыҡ, сыуалыштар, баш күтәреүҙәр еле урман төпкөлөндәге Ҡаратауға ла һуғылмай үтмәне. Үткән ҡыш Лапшингә урман ҡырҡыусылар, эш хаҡы арттырыуҙы һорап, аҙна буйы эшкә сыҡманы. Роман тәүҙә ситтәгерәк ауылдарҙан кешеләр табыу өмөтө менән бик үк ыжламағайны, уйы барып сыҡмағас, көнлөк хаҡын унар тингә арттырырға мәжбүр булды. Ауыл халҡы нисектер уҫалыраҡ та, ҡыйыуыраҡ та тота үҙен хәҙер. Уйылдан менән дә артыҡ иҫәпләшеп тормайҙар. Быйыл ана ете кәбән бесәнен үртәп киткәндәр.

Бәләкәйҙән донъя ауырлыҡтары үтә ныҡ баҫканғамы, ағаһының яҙмышын ҡабатлағыһы килмәйенсәме, Бикморат бындай ғауғалы эштәргә тығылып бармай ине. Илгә ни булһа, беҙгә лә шул тигән һымағыраҡ йөрөй.

Берҙән-бер көндө, Белоретҡа үтешләй, беҙҙең ауылға губернатор килә икән тигән хәбәр таралды. Староста, өй беренсә йөрөп, халыҡты ауылды икегә ярып үткән таш юлдағы ҡарҙы көрәргә ҡыуа башлағас, был хәбәрҙең ысын икәненә ышандылар. Өҫтәүенә, урядник тә килеп төштө. Губернатор килгәндә теге-был тәртипһеҙлек ҡупмаһын тиҙер инде.

Уйылдан да, артына ут ҡапҡандай, югереп йөрөй. Ҡапҡалары ығышып, йығыла яҙып торған кешеләргә уны яңыртырға йә бөтөнләй алып ташларға ҡуша. Бүтән саҡта тик ятып сереһә лә, һалабаш ҡабығын бер кемгә буш бирмәй торғайны. Әле иһә өй ҡыйыҡтары туҙған кешеләргә, берәй түләрһең әле тип, һалабаш быуаһынан ҡабыҡ алырға рөхсәт итә, хатта атһыҙҙарға ат бирер тора. Кешеләр, йәнәһе, губернаторға яҡшы күренә инде, ауылды бөтөн итеп күрһәтергә тырыша, тип мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп, байҙың күңеле биртенгән мәлде файҙаланып ҡалырға тырыша. Ҡарҙы көрәп, бер-береһенә йәбешеп туңған ҡабыҡты ташыйҙар, өй баштарын ябалар.

Бикморат та үҙҙәре тәңгәлендәге ҡарҙы сығып көрәне лә көн буйы ҡабыҡ ташыны. Иртәгеһенә өйөнөң ҡыйығын

ябып бөтөп, артып ҡалған ҡабығы менән лапаҫының тишек-тошоғон ҡаплап йөрөй ине, ҡалуҙа төбөндә ятҡан айыу тиреһе күҙенә салынғас, башына ҡыҙыҡ та, дыуамал да уй килде. Баҫалҡы һымаҡ йөрөһә лә, унда ла Төлкөсуралағы ҡан тибә ине шул.

Губернатор килер көндө таң һарыһынан торҙо ул.

— Кәбән төбөндә бесән ҡалғайны, шуны алып ҡайтам,— тине бисәһенә.

Атын екте. Санаға кисә эсенә бесән тултырып, ҡамыт энәһе менән тегеп, бөтөнләй айыу ҡиәфәтенә кертелгән тирене һалды, өҫтөн бесән менән япты ла ауылдан ике саҡрымда башланған Ҡаратауға юл тотто.

Ҡаратауҙың иң текә бер артылышында юлға табан ыға биреп үҫкән йыуан, тарбағай имән бар. Шул тәңгәлдә атын бороп, эскә инде Бикмөрат. Дилбегәһен сисеп алды, уға арҡан ялғап оҙонайтты. Шунан «айыуҙы» күтәреп имән эргәһенә барҙы. Ағас башына менде лә ике ботаҡ араһына һайғауҙар һалды һәм, «айыуҙы» түбәндән бау менән тартып мендереп, шунда баҫтырып ҡуйҙы. Дилбегәһенең бер осон «айыу» баҫтырылған һайғауға бәйләгәс, түбәнгә төштө.

Атын сокорғараҡ алып барып, арҡалығын бушатты, алдына бесән һалды, үҙенең башынан иһә: «Ҡыялам ҡыялауын, уйындан уймаҡ сығып ҡуймаһа»,— тигән уй китмәй. Унан ҡотолоу өсөн: «Харап, бигерәк яман ҡылаҡалар. Ниңә урамды көрәтәләр инде? Бүтәндәр йөрөгән юлдан үтһә, ни була? Ярар, Ҡаратауҙан бик рәхәт кенә уҙып китмәһен әле!» — тип ҡулын һелтәй.

Байтаҡ ултырғас, сана табаны һыҙғырған, ат ҡыуалаған тауыштар ишетеп, һағайҙы, ҡолаҡ һалыбыраҡ тыңланы. Юҡ, губернатор түгел. Ауыл яғынан кемдәрҙер килә. Бына тау артылыусы ике атлы күренде. Йөктәре ауыр, ахырыһы: тирләгән аттарҙың өҫтөн аҡ бәҫ ҡаплаған, ылаусылар, ҡайыш сыбыртҡыларын муйындары аша һалып, сана артынан йәйәү килә.

Бына алдағы ат «айыу» ҡуйылған имән тәңгәленә етмәҫ борон туҡтаны, ҡолағын торғоҙоп, аланлап, тирәяғына ҡараны. «Их, ҡәһәрең, еҫ алды. Эште боҙоп ҡуямы инде»,— тип борсолдо Бикмөрат. Һаҡалтай ылаусы аты эргәһенә килде, арҡалыҡты бушата бирҙе.

— Әйҙә, ерәнсәй! Нааа!..

Ат урынынан ҡуҙғалманы, хужа ҡабат ҡыуалағас, артына сигенә башланы. «Имән башына ҡарамаһалар

ғына ярар ине!» — тип боҫоп ултырған ерендә сыҙай алмай үрһәләнә Бикморат. Ылаусы, хәтәр асыуланып, муйынынан ҡайыш сыбыртҡыһын алды ла атының һырт буйына тартты. Ат, меҫкен, сәбәләнеп ҡараны, шунан бар көсөнә алға ынтылды һәм, тау үренә булһа ла, имән тәңгәленән елә-юрта уҙып китте, уға икенсеһе эйәрҙе. Арттараҡ тороп ҡалған ылаусылар, аттарының ҡылығына аптырап, мығырҙап һөйләшә-һөйләшә, саналары артынан ҡабаланды.

«Гөбөрнатыр ниңә һаман юҡ? — тип уйлай Бикморат, ул өшөй ҙә башлағайны инде.— Былары үтеп китте лә, икенсе берәү килеп сыҡһа, эште боҙоп ҡуйыуы бар бит...»

Шул саҡ үр яҡта ат бышҡырғаны, сана тауыштары ҡолағына салынды. Күп тә үтмәне, әле генә ылауҙар юғалған боролоштан бер нисә һыбайлы килеп сыҡты. «Аттары башын текә тотҡан, һыбайлыларҙың кейеме лә хәтәр күренә,— шуларҙыр». Уғаса өс ат мисәлгән кашауай сана ла күренде. Бикморат, эйелеп, дилбегәһенең осо ятҡан ергә ҡабаланды. Был хәтлем һаҡ аҫтында килер тип уйламағайны ул губернаторҙы. Эләгеп ҡуймаҫмы?

Бына һыбайлылар имәнде үтте, кашауай ҙа тәңгәлләшеп килә. Тәүәккәлләне шул саҡ Бикморат,— икенсе осо «айыу» баҫтырылған һайғауҙарға бәйле дилбегәһен тартты. «Айыу» ялп-йолп итеп түбәнгә ҡоланы. Юлда шунда уҡ шау-шыу ҡупты: ҡысҡырышалар, нимәлер шартлап өҙөлә. Бикморат күтәрелә биреп ҡараны. Мисәүле аттар, бер-береһен тапарҙай булып, йән-фарманға түбәнгә саба, һыбайлылар туҡтап, айыуға ҡарай бер нисә тапҡыр аттылар, унан, кире әйләнеп, кашауай артынан елделәр.

Ошонан аҙаҡ ҡына тынысланды Бикморат, шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Әллә күптән бирле шулай ихлас көлгәне булмағанға инде, рәхәт булып ҡалғандай тойолдо.

Тиҙ генә «айыуҙы» барып алды. Эсен һүтеп, бесәнен бушатты ла, уны бөкләп сана төбөнә һалды һәм атын үҙенең сабынлығы яғына ҡыуаланы.

Кәбәне төбөндә ҡалған бесәнде тейәп ҡайтып килә ине, Ҡаратау аҫтында бер нисә ауылдашы тап булды. Ат менгәндәр, арҡаларында — мылтыҡ. Бикморат ниҙер һиҙенде.

— Ҡайҙа бараһығыҙ? — тип атын туҡтатты.

— Китеп барабыҙ әле...

— Үҙебеҙ, гөбөрнатыр һалдаттарының һүҙенә ҡарап, сыҡтыҡ, үҙебеҙ ышанмайбыҙ.

Хәҙер Бикморатҡа бөтәһе лә аңлашыла ине. Шулай ҙа, көлмәҫкә тырышып, һораны:

— Нимәгә ышанмайһығыҙ?

— Гөбөрнатыр санаһына айыу ташланды, атҡайныҡ, үлдеме-юҡмы, шунда ятып ҡалды, тиҙәр.

Бикморат сыҙамады, көлдө.

— Ниңә көләһең?

— Гөбөрнатыр һалдаттары ла, улар һүҙенә ышанған һеҙ ҙә инде... Ха-ха-ха!.. Бынау ваҡытта ниндәй айыу йөрөһөн? Айыу күптән ятты бит инде. Хәҙер уны өңөнән ҡыуалап та сығарып булмай.

— Уныһы шулай инде,— тип килеште бер һыбайлы.

— Унан ары, шул тиклем кешегә ташланырға айыу иҫәрме ни? Йөрөмәгеҙ әҙәм көлдөрөп. Әйҙәгеҙ ҡайттыҡ.

— Ысынлап та әле, шуларға ышанған беҙ ҙә инде,— тип егеттәр аттарын кире борҙо.

Ҡайтып, бесән алғанда Рәхилә көлә-көлә хәбәр һөйләне.

— Гөбөрнатырҙы күрергә бөтә халыҡ урамға сыҡты. *Мин* дә түҙмәнем, ниндәйерәк әҙәм икән, тип ҡапҡа төбөнә сыҡтым. Бер заман йән-фарманға сабып аттар килә бит, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй. Мисәүгә егелгән бер атының баструмкаһы өҙөлгән. Санала ултырғандарҙы ат тояғынан сәсрәгән ҡар күмгән. Ҡайһыһы гөбөрнатыр, ҡайһыһы күсер икәнен дә белерлек түгел. Сана артынан әллә нисәмә һыбайлы елә. Иллә-мәгәр Уйылдан старшинаны ҡыҙыҡ иткәндәр. Мулла абзый менән юл ситендә икмәк-тоҙ тотоп торғандар икән, сана ләжәнкәһе менән бәрҙереп йығып үткән дә киткәндәр...

— Ха-ха-ха!..— Көлөүҙән Бикмораттың лапаҫ башына ташларға тип күтәргән бесәне кире төшөп китте.— Шәп булған да һуң! Уйылдан менән старостаның ыуаланып йөрөүҙәре бушҡа китте инде, былай булғас.

— Бер һалдаттары туҡтап, ҡаршыбыҙға айыу килеп сыҡты, фәлән дә төгән, тип хәбәр һөйләгән. Аттары шунан өрктөмө икән әллә, Бикморат?

— Булыр-булыр,— тине Бикморат, көлә-көлә. Ә бесәнде бушатып бөткәс, сана төбөндәге айыу тиреһен күрһәтте.— Бына ошо «айыу» гөбөрнатырҙың ҡотон алды, бисәкәй.

Рәхилә иҫе китеп аптыраны. Ире бөтәһен дә тәфсилләп һөйләгәс кенә:

— Эй дыуамал, дыуамал. Һин өндәшмәҫтән дә шундай эш сығыр икән! — тип әллә ҡыуанды, әллә асыуланды.

— Йыуаштан йыуан сыға ул, бисәкәй...

— Харап, бер-бер хәлгә юлығып ҡуйһаң... Икенсе улай ҡыланма, йәме?..

Бисәһенең бына шулай йомшаҡ ҡына, иркә генә әйткән һүҙҙәрен йығырға һис тә баҙнат итә алмай Бикморат.

— Ярар, ярар, гөбөрнатыр ҡабат был яҡҡа килмәҫ тә инде,— тип, бисәһенең арҡаһынан һөйҙө. Әйтерһең, ул кескәй ҡыҙ бала.

* *
*

Уйылдан ах та ух килеп өйөндә ята. Губернатор кашауайының ләжәнкәһе һуҡҡан аяғы ауыртыуҙан бигерәк, ҙур ҡунаҡтың аҙға ғына булһа ла туҡтап, икмәк-тоҙ алып китмәүенә, бөтә тырышлығының юҡҡа сығыуына, ауыл алдында көлкөгә ҡалыуына эсе яна уның. Ә күңеленән генә: «Бәлки, туҡтап, өйгә лә инер, һыйланып сығыр»,— тип тә өмөт итә ине. Ҡаҙан тултырып аш һалдырҙы, эсерергә әсе бал, күстәнәскә биреп ебәрергә бер тәпән юкә балы әҙерләп ҡуйҙы. Ә бына нисегерәк килеп сыҡты бит, уфылдамаҫлыҡмы ни!..

Бисәһе, эргәһенә килеп:

— Атаһы, аш-һыу бигерәк күп әҙерләнгән бит. Әллә атайымдарҙы саҡырып алайыҡмы? — тигәйне, туҙҙы ла китте.

— Суҡынып кит шул атайыңдар менән! Һиңә — аш, миңә баш ҡайғыһы!.. Юғал күҙемдән.

— Эй енней! — тип мығырҙап, ауыҙын турһайтып, туйтанлап алғы өйгә сығып китте Хәтирә.

Унын да эсе бошоп йөрөгән саҡ шул. Уйылдан кесаҙна көн Хажы ауылына йәш кәләш алып ҡайтыу өсөн китергә йыйына. «Йәш кәләш алып, әҙәм мәсхәрәһенә ҡалғаныңды оноттоңмо ни? Кемде алырға йөрөй бит әле, бер хәйерсе ҡыҙы бит»,— тип әллә ни саҡлы илауланы, ялбарҙы Хәтирә. Уйылданы һүҙен ҡолағына ла элмәне. «Һинең унда ҡыҫылышың юҡ»,— тип кенә ҡуйҙы.

Уйылдандың һуңғы ваҡытта кәйеф-сафаһы арыу ине шул. Быйыл яҙ ул быраuай һалдырып, таҙа дегет ҡайнаттыра башланы. Тәүге йәйҙә үк бик күп аҡса бирҙе ул Уйылданға. Ана хәҙер бик ҙур иттереп яңы өй буратып ята. Туҙҙы етерлек һуйҙырып ҡуйған, бырауайы ҡыш буйы туҡталмаясаҡ. Ә ҡышын таҙа дегет икеләтә ҡиммәт хаҡҡа үтә. Унан ары, ялан яҡ волостәрҙә һуңғы ваҡытта крәҫтиән халҡы бик хәтәр ҡылана: баш күтәрәләр, ауыл байҙарының донъяларын үртәйҙәр. Уның волосендә әлегә тауыш-тын юҡ. Үткән юлы ҡалаға барған саҡта уны, халыҡты тота беләһең, тип өйәҙ хужалары маҡтап ҡайтарҙы. Аҙаҡ килеп, ул бынан ай самаһы элек күңеленә һиллек өҫтәүсе хәбәр ишетте: Төлкөсураны төрмәгә ултыртҡандар. Башы шунда ғына серейһен инде уның, тип теләй Уйылдан, үсе ҡанып.

Уҙған аҙнала Хажы ауылына барғайны ул. Ҡәйеф һәйбәт, күңел күтәренке булғас ни, ҡыҙ йәрәшеп ташланы. Сажидәне Төлкөсура алып китһә, ҡыҙ бөткәнме ни. Ҡеҫәң ҡалын саҡта, теләһәң, биш бисә лә алып була. Баш һау саҡта йәшәп ҡалырға кәрәк.

Әле ҡатыны тырт-мырт сығып киткәс, ул ҡыҙ кейәүләргә барасағын иҫенә төшөрҙө. «Ул кафырҙың туҡтамауы менән донъя емереләме ни?» — тип тороп ултырҙы, ләжәнкә бәрелгән аяғын ыуаланы. Ахшам намаҙына тәһәрәт алырға уйлап, иҙәнгә төшкәйне, алғы өйгә кемдер килеп инде. Сәләм биргән тауышты ишеткәс, белде — Роман. Был арала килгәне юҡ ине, ни эшләп йөрөй икән?

— Ҡайҙа губернаторың, Вилдан? Әллә китеп тә барҙыңмы? — тип гөрләп, ғауғалап килеп инде уның янына Роман.

— Уның ни — үҙ юлы,— тине Уйылдан, был турала һөйләшергә теләмәйенсә.— Үҙеңдең хәлең нисек? Ниңә бер ҙә күренмәйһең?

— Өфөгә ҡайтып килдем. Атай ҡарт бик ныҡ ауырып киткән.

— **Һуң?**

— Арыуыраҡ булып ҡалғайны, әле ни хәлдәлер. Ул Өфөлә һис тә яйлап торғом килмәне. Көн дә тиерлек шаушыу унда, Вилдан. Әле бер, әле икенсе урында эшселәр баш күтәрә. Социал-демократтар шашына.

— Улары кем һуң тағы?

— Һинең менән минең кеүектәрҙе аяғынан аҫып ҡуйырға ҡырсыныусылар.— Уйылдандың ҡурҡып китеүен

күреп, Роман рәхәтләнеп көлдө.— Ҡурҡма, улар бында уҡ килеп етмәç.— Шунан етди өçтәне: — Шулай ҙа аң булырға кәрәк беҙгә. Эт сапҡанға бет сапҡан тигәндәй, гауға күтәрергә торғандар бында ла табылыуы бар. Ундайҙарҙы саҡ ҡына тауышы-тыны һиҙелеү менән тейешле ергә оҙатыу сараһын күр.

— Әлегә ул-был тойолмай ҙа.

— Ә һин тойолғаның көтөп ятма. Һәр ауылда хәбәрхәтергә ҡолаҡ һала йөрөүсе үҙ кешең булһын. Бына әле мин дә яңы эшселәр ялларға тип йөрөп ятам. Былтырғыларҙы бик үк яҡын юлатмаçҡа ине. Бер тәмен татығас, тағы эш ташлап, аҡсаны күберәк давайлауҙары бар.

Уйылдан көрһөндө.

— Белмәйем инде, халыҡ боҙолғандан-боҙола. Әллә ниндәй замандар килер әле,— тип һылтыҡлап урта ишеккә ҡарай атлағайны, Роман һораны:

— Ниңә сатанлайһың?

— Әй... аягым тайып киткәйне лә... Хәтирә, Хәтирә, ҙәм! Ашыңды-фәлән йәһәтлә әле шунда.— Туҡтап, Романға табан боролдо.— Теге каторжан тураһында ишеттеңме әле?

— Ниндәй каторжан?

— Һәй, һорап ултыраһың, Төлкөсураны әйтәм.

— Шунан, ни булған?

— Төрмәгә япҡандар. Ниндәйҙер ҡара эштә тотҡандар, ти.

— Дәәә,— Роман уйға ҡалды. Шунан, башын ҡалҡытып, үҙ фекерен әйтте: — Бик үк шәп тә түгел был. Төрмәнән ҡайтҡас, унда эшкә алмаһалар, тағы бында килеп төшөүе бар.

— Хәҙер ысҡындырмаçтар ҙа инде?

— Белеп булмай, Вилдан.

Был Роман бөгөн әллә күңелгә шом һалыу өсөн генә килгән инде. Уйылдан бисәһенә тағы ла асыулыраҡ ҡысҡырҙы:

— Хәтирә!.. Ашың ҡасан әҙер була?!.

Тышта ел ыжғырҙы, һыуыҡтан ярмаланған ҡар бөртөктәрен шаптырҙатып тәҙрәгә килтереп бәрҙе. Уйылдан, тертләп, ҡапыл томанһып киткән тәҙрәгә күҙ һалды.

## VIII

Бөтә Рәсәйҙе тетрәткән бер мең туғыҙ-йөҙ бишенсе йыл. Илдәге революция шауҡымы Ағиҙел ярына урын-

лашып, тулыһынса тип әйтерлек завод эшселәренән торған кескәй Белоретка лә килеп бәрелде. Яңы ғына һөргөндән ҡайтып төшкән Василий Косоротов менән Пухов етәкселегендәге эшселәр көн дә тиерлек завод хужалары алдына яңынан-яңы талаптар ҡуйып, демонстрацияларға сыға. Завод хужаһы Пашков, управляющий Коль демонстрацияларға ҡаршы полиция сығарып, бер нисә кешене ҡулға алдырғайнылар, эшселәр цех смотрителе Бетхерҙе залогка алып, ҡайҙалыр биклəп ҡуйҙылар, етмәһә, заводты үртәү менән янағас, Коль эшселәрҙе һаҡ аҫтынан сығарырға мәжбүр булды.

Йыл ярым саҡаһына баҫылыбыраҡ торган революцион көрәш ялҡыны Белоретте тағы ялмап алғайны.

...Өсөнсө көн инде февраль бураны ҡотора. Һыуыҡ ел ажарланып өй стенаһына килеп бәрелә, туңған быялаларға услап-услап бәреп ҡар һылай. Хатта ҡайһы бер саҡта өй өшөүҙән ҡалтыранып ҡуйғандай була

Өй эсендә лә һыуыҡ, күңелһеҙ. Утыны наҡыҫлыҡтан, самалабыраҡ тотона шул Сажидә. Утын бөттөмө, урман яҡын булһа ла, ҡышын уны алдырыуҙары ҡыйын да, ҡиммәт тә.

Һыуыҡтан ҡобаралары осҡан балаларын йәлләй ул. Ана бит, үҫеп килгән Илһамы тышҡа сыҡҡандағы кеүек кейенеп алған да шырпы ҡабына еп тағып, шуны сана итеп уйнап йөрөгән була.

— Әсәй, мин утынға киттем,— ти ул һәм алпан-толпан мейес артына атлай.

Әсәһе көн дә утынды телгә алғас ни, ул да шуны һөйләй. Сажидә һаран йылмая, көрһөнә, баҫырынып йоҡлап ятҡан ҡыҙына күҙ һала. Ҡасан ҡотолор ул быңдай эс бошорғос тормоштан? Бигерәк ауыр бит көн күреүҙәре. Эшләп тапҡаны ашарға саҡ-саҡ етә. Үҙенең кейемһалымы иҫкереп, туҙып бөттө, балаларына әле тегеһе, әле быныһы кәрәк.

Теге саҡта Төлкөсураны Верхнеуральскигә алып киткәс, ул тәүҙә башын ҡайҙа бәрергә белмәй, һеңкәҙәберәк йөрөнө. Тора-бара һушын йыйып, артабан нисек йәшәү тураһында уйлана башланы. Башына тәүге килгән уй — йылы ҡулда нисек тә Стәрлегә күсенеп китеү ине. Унда, ҙурыраҡ урында, эш табылыр, көн итеү еңелерәк булыр. Срогын тултырғас, Төлкөсура шунда әйләнеп ҡайтыр әле. Уға ла бит хәҙер бында түрәләр гел ҡырын күҙ менән ҡарарҙар. Стәрле яғына бушкитеүсе ылау белеш-

терә, әйберҙәрен төйнәй башлағайны инде ул. Уның янына көн дә тиерлек инеп, ҡайғыһын уртаҡлашып йөрөгән Катя берҙән-бер көн йылы хәбәр алып килде.

— Александр ебәрҙе әле,— тине ул.— Һиңә аптекала эш белешкән.

— Аптекала ни эшләрмен икән һуң мин, Катя?

— Унда үҙебеҙҙең кеше. Аптекаргә ярҙам итерһең, шҙән-фәлән йыуырһың.

Ошонан аҙаҡ ул Стәрле яғына китеүҙе онотто. Ашарлыҡ аҡса табыу өсөн эше булғас, исмаһам, бында үҙемдең торор урыным бар, тип уйланы. Былтыр хужа әбей үлеп киткәс, өй уға тороп ҡалғайны. Аптекарь бик һәйбәт кеше булып сыҡты. Ипле һүҙле, үҙе үк, бар, ҡайтып, балаларыңды ҡарап кил, тип тора. Эш тә әллә ни ауыр түгел. Сажиҙәнең уңғанлығы ла, отҡорлоғо ла бар шул. Булаевтың әйткәнен көтөп тормай, һәр нәмәне алдан алып, еренә еткереп эшләй...

Шулай йөрөп, йыл ярымдан артыҡ ваҡыт үтеп тә китте. Бөгөн ана, ҡыҙы ауырып торғанды белгәс, аптекарь өйөнә ҡайтарып ебәрҙе, дарыу ҙа бирҙе.

Төлкөсуранан һирәкләп хат килә, әммә ҡасан ҡотолоп ҡайтасағын өҙә генә яҙмай әле. Ҡасан ғына күрер Сажидә уны, ялҡытты был яңғыҙаҡ тормош. Төлкөсуранан аҙаҡ ҡулға алынған Косоротов тигәндәре ҡайтты, тип һөйләгәйне Катя. Шуға күрә Сажидә һуңғы көндәрҙә шндәйҙер өмөт менән йәшәй, Төлкөсураһы бына-бына ҡайтып инер кеүек.

Сажидә, ауыр ғына ҡуҙғалып, урынынан торҙо. Шул саҡ мейес артынан улы килеп сыҡты.

— Әсәй, мин утындан ҡайттым.

— Шулаймы ни? Бушат утыныңды.

Илһам шырпы ҡабына тап-топ ярсыҡтары һалған, уны еп менән бәйләп тә маташҡан.

— Мин ҡалағай утын апҡайттым, ҡоло утын,— тип һаман үҙ хәбәрен һөйләй ул.

— Ярар, улым, мин һыуға барып киләйем әле.

Сажидә биҙрәләрен, көйәнтәһен алып, тышҡа сыҡты. Солан ишеген асҡайны, ҡоторонған ел ҡомдай ҡытыршы ҡар бөртөктәрен битенә килтереп һыланы. Ҡара инде, иртәнсәк кенә көрәгәйне, юлды тағы ҡар баҫҡан. Сажидә биҙрәләрен соланға ҡуйҙы ла ағас көрәген алды. Меҫкен кешеләй, йорт тирә-яғын көрттән баҫтырып, ҡар йырмаслап йөрөүҙе яратмай ине ул. Йә көтмәгәндә Төлкөсу-

раһы ҡайтып төшөр ҙә, мин булмағас, юлы ла юҡ, тип уйлар. Үҙе өйҙә саҡта йәйен-ҡышын ихатаны ялт иттереп тота торғайны бит.

Быйыл ҡар күп. Ҡыш буйы көрәй торғас, ҡойма буйҙарына тауҙай итеп өйөлдө. Сажидә көрәге менән үргә ырғытҡан һайын, ел уның өҫтөнә ҡарҙы тағы ла яманыраҡ һирпә. Шәле, көпөһө, көрткә сумып сыҡҡан һымаҡ, ап-аҡ булған. Биттәре алһыуланып киткән. Әгәр уны ошо килеш Төлкөсураһы күрһә...

— Сажидә!..

Сажидәнең ҡулынан көрәге төштө лә китте, быуындары йомшарҙы, йөрәге дарҫлап типте.

Иҫенә килгәндә, ул, Төлкөсураның ҡар һылашҡан түшенә уттай янған эҫе битен терәп, мыш-мыш илай ине.

— Илама, Сажидәкәйем, ҡайттым бит бына, — тип һөйләнә Төлкөсура, уның арҡаһынан һыйпай.

— Ҡитсе, ысынлап һинме? Хәбәр-хәтерең дә юҡ ине бит.— Сажидә, башын артҡа ташлай биреп, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан иренә ҡарай ҙа уның түшенә терәлә.

— Балалар нисек, Сажидә?

Сажидә ҡапыл һушын йыйҙы, Төлкөсураны өйгә етәкләне.

Өй шул тиклем йылы, әллә ниндәй татлы еҫтәр аңҡыған кеүек. Ә-әә, яңы икмәк һәм бешкән картуф еҫе бит был. Урындан ҡуҙғалмай ғына ятҡы ла ятҡы килә. Бөгөн Сажидә утыны бөтә тип борсолмай, мейескә ныҡ итеп яҡҡайны шул. Ире өй йылыһын һағынһандыр тип тә уйланы.

Төлкөсура тороп ултырҙы, балаларына күҙ һалды. Ҡайһылай ҙурайып, үҙгәреп киткәндәр. Уларҙы уятмаҫҡа тырышып, иплән кенә яратты ла иҙәнгә төштө. Ут эргәһендә йөрөп, биттәре алһыуланған Сажидәһе килеп етте.

— Ниңә ята бирмәйһең?

— Етте, булды.— Төлкөсура, уның ҡулынан әләктереп алдына ултыртты, түшенән ҡосаҡлап, яурынына эйәген терәне лә һалмаҡ ҡына бәүелтергә тотондо.— Эй һағындым мин һине, шул тиклем һағындым.

Сажидә уға баянан бирле уйлап йөрөгән һүҙен әйтте:

— Төлкөсура... һин ҡабат әллә ниндәй бәләле эштәргә ҡатнашып йөрөмә инде.

Төлкөсура уға тиҙ генә яуап бирмәне, уны һаман алдында бәүелтте. Ҡайтҡас, тормошто нисегерәк дауам

итеү хаҡында байтаҡ уйланғайны ул. Хәҙер инде йәш кеше лә түгел, иллегә яҡынлап килә. Балаларын үҫтереп, кеше итергә кәрәк, Сажидәһенең дә тыныс ҡына йәшәүен теләй. Шуға күрә: «Дыуамалланып байтаҡ йөрөлдө, етер инде»,— тигән һығымтаға килә. Ләкин уны көрәштәш дуҫтары аңлап етерме? Төрмәлә ултырып сығыу менән кәре ҡайтты, тип уйламаҫтармы? Ғөмүмән, Төлкөсура үҙе лә бүтәндәрҙең азат тормош өсөн көрәшкәнен тыныс ҡына күҙәтә алырмы? Ирлек буламы һуң был?

Шулай ҙа әле бисәһенә:

— Ярар, беҙгә лә әҙәмсә донъя көтөргә ваҡыт бит,— тип яуап ҡайтарҙы.

Төлкөсура сама менән һиҙә: ул юҡта Сажидәгә балаларҙы ашатып-эсереп тороу еңел булмағандыр. Ял итеү ҡайғыһы юҡ. Ҡырынып, таҙарынып, ашап-эсте лә Төлкөсура завод контораһына юл тотто. Уны элекке эшенә — тимерлеккә ебәрмәнеләр, теләһәң, йөк тейәүсе булып эшлә, тинеләр. Ни хәл итәһең, өйрәнгән эшенә барғыһы килһә лә, ризалашырға тура килде.

Ҡисен иһә ул Генка Садырингә инеп сыҡмайынса түҙмәне. Унан Ҡосоротовтың, тағы бер нисә танышының да ултырып ҡайтыуҙарын, хәҙер иһә поселокта революцион көрәштең теге саҡтағынан да киңерәк ҡолас менән барыуын ишеткәс, Сажидәһенә әйткән һүҙҙәрен бөтөнләй онотто. Юҡ инде, ситтә боҫоп ята алмай ул. Рәхәт тормош килгәнен көтөп йәшәүҙән ни мәғәнә?

Өсөнсө көнөнә Төлкөсура Ҡосоротовты осратып һөйләште.

— Ахунов, һаман үҙемде һинең алда ғәйепле тоям,— тине Ҡосоротов.

— Ниңә, Василий Емельянович? Һеҙҙең ниндәй гәйеп булһын?

— Бар шул. Теге саҡта прокламацияны алып барғанда һағыраҡ йөрөмәнем. Шул арҡала һин эләктең.

— Үткәнде онотайыҡ, Василий Емельянович...

— Юҡ, Ахунов, хаталарҙы оноторға ла, ҡабатларға ла ярамай. Сөнки көрәштең иң ауыры алда әле. Беләһеңме, йөк тейәүселәр — тарҡауыраҡ халыҡ. Беҙҙең дөйөм көрәштән нисектер ситтә ҡала улар. Хәҙер һиңә ышанабыҙ инде. Аңламағандарын — аңлат, ойоштор һин уларҙы.

Һәм Төлкөсура тағы хәтәр, ләкин күңеленә рухи ныҡлыҡ биреүсе эшкә сумды: йөк тейәүселәр менән айы-

рым-айырым һөйләшә, кемдең кем икәнен белергә тырыша, ышаныслыларын йыйып, гектографта баҫылған прокламацияларҙы уҡый.

Уның тағы әүәлге юлға баҫыуын Сажидәһе лә һиҙә, ул һуңлап ҡайтҡан саҡтарҙа ауыр көрһөнә, ләкин бер һүҙ ҙә әйтмәй. Төлкөсураның үҙ алдына алғанды ҡуймаҫын белә шул.

...Апрель баштары ине. Тауҙарҙа ҡар ныҡлап иремәһә лә, һәр ерҙә яҙҙың ҡабат сигенмәҫ өсөн килеүе һиҙелә инде. Көндөҙ ҡыйыҡтарҙан тамсылар тыпылдап тама, аяҡ аҫты епшекләнә, урамдағы соҡор-саҡырға һыу эркелә, ҡарая башлаған юлдарға ем эҙләп төшкән сәүкәләр сырҡылдаша.

Был көндәрҙә Беренсе майҙы берҙәм забастовка менән үткәреүгә ныҡлы әҙерлек бара. РСДРП-ның Өфө комитете татар телендә баҫып сығарған «Мосолмандарға» тигән прокламация башҡорт, татар эшселәре араһында айырыуса рух күтәренкелеге тыуҙырҙы. Ошо уңай менән Василий Косоротов үҙе белгән ышаныслы башҡорт, татар эшселәрен йыйып алып, айырым һөйләшеү уҙғарҙы. Унда Төлкөсура ла саҡырылды.

— Ҡалала беҙҙең революция эшенә бирелгән, һуңғы һулыштарынаса көрәшергә әҙер торған кешеләр етерлек,— тине ул.— Ләкин беҙ бында завод хужаларына ҡаршы көрәшеү менән генә сикләнергә тейеш түгелбеҙ. Батшаның ауылдарҙағы таянысы милли байҙарға, муллаларға ҡаршы ла халыҡты күтәрергә кәрәк. Крәҫтиәндәрҙә ныҡлы таяныс, яҡлау тапмай тороп, беҙ тулы еңеүгә ирешә алмаясаҡбыҙ. Хәҙерҙән бер нисә кешегә прокламацияларҙы алып, ауылдарға халыҡ араһына китергә, уларға революцияның асылын төшөндөрөргә кәрәк. Владимир Ильич Ленин беҙгә шулай эшләргә ҡуша. Кем үҙ теләге менән ошо эшкә барырға теләй? — Косоротов бүлмәләгеләргә күҙ йүгертеп сыҡты ла өҫтәне: — Бында һеҙҙең урынға эшләп тороусылар табылыр, эш хаҡтарығыҙға зыян килмәҫ. Аптекарь Булаев аша һеҙгә «ауырый» тигән справка ла әҙерләп ҡуйҙырасаҡбыҙ.

Төлкөсура үҙенең ауылы яғын һайланы, Ҡыпсаҡ һәм Кирәй волостәренә барасағын әйтте. Косоротов китеүселәргә дыуамаллыҡҡа бармаҫҡа, тәүҙә иң ышаныслы кешеләрҙе йыйып һөйләшергә һәм май башына тиклем әйләнеп ҡайтырға ҡушты.

Төлкөсура менән иһә ул айырым һөйләште.

— Һин ярым пролетарҙар — урман ҡырҡыусылар эргәһенә бараһың. Урмансылар — беҙҙең тау ауылдарында таяныс булырҙай төп көс,— тине ул. Шунан эргәһендәге рус кешеһе менән таныштырҙы: — Был — беҙҙең Артемьев тигән үҙ кешебеҙ. Уның менән бергә йөрөрһөгөҙ. Ҡағы, Әүжән заводтарында ла туҡтап китергә кәрәк. Юғиһә беҙ күршеләрҙе онотобораҡ ташланыҡ.

Артемьев — утыҙ йәштәр тирәһендәге кеше, прокат цехынан. Былтыр Златоусттан килеп, бында эшләй башлаған. Әле рәтле фатире лә юҡ икән. Ныҡлабыраҡ танышырбыҙ, яңғыҙ китмәүемде күргәс, Сажидә лә тыныраҡ ҡалыр тип, Төлкөсура уны үҙҙәренә алып ҡайтты. Унан Златоуст хәлдәрен дә белешкеһе килә ине.

Артемьев бынан ике йыл элек губернатор Богдановичтең Златоустта эшселәрҙе аттырыу ваҡиғаһын, шул саҡта үҙенең дә яраланыуын һөйләне.

— Унда эшселәр берҙәмерәк,— тине ул.— Эште ышаныслы алып барырға мөмкин. Полиция һис тә тынғылыҡ бирмәгәс, китергә тура килде.

Ул Төлкөсураның ҡайһы бер таныштарын да белә ине. Төлкөсура менән бергә каторганан ҡайтҡан Соловьев өсөнсө йылғы атышта үлгән икән. Йә инде, ун биш йыл каторгала йөрөп ҡайтып, үҙ илендең һалдаты пуляһенән үл! Бигерәк аяныс бит.

Төлкөсура китәсәген әйткәйне, Сажидә моңһоуланды. ашарға әҙерләп йөрөгән еренән туҡтап ҡалды.

— Әллә инде,— тине, ни әйтергә лә белмәйенсә,— йөрәгем өшөп бөткән шул. Имен-аман ғына йөрөп ҡайтһаң, ярай ҙа...

— Ҡурҡма, яңғыҙ түгелмен дәбаһа. Ауылға уҡ барып етергә тура килә. Бикморатты ла күрермен.

Был хәбәрҙән Сажидә тағы ла нығыраҡ болоҡһоно.

— Уйылдандан һаҡ бул, Төлкөсура. Ҡырсынып йөрөгәнен Бикморат та яҙғайны. Иманы юҡ бит ул ҡанһыҙҙың.

Төлкөсура иптәше менән таң алдынан юлға сыҡҡанда, күңеле бик тулышһа ла, иламаны Сажидә. Иренә күҙ йәшен күрһәтеп, уның эсен бошорғоһо килмәне. Тыныс ҡына йөрөп ҡайтһын.

Артемьев менән Төлкөсура Ҡағыла, унан Әүжәндә булдылар. Косоротов әйтеп ебәргән кешеләрҙе табып, улар аша революцион рухтағы эшселәрҙе йыйып һөйләштеләр. Артемьев арыу ғына оратор икән, ышандырырлыҡ

итеп, кешеләр күңелендә дәрт тоҡандырырҙай һөйләй. Йыйылыштағыларға, бүтән эшселәргә лә уҡыу өсөн, прокламация таратып бирҙеләр, завод хужалары алдына ниндәйерәк талаптар ҡуйып сығыш яһарға өйрәттеләр.

Шунан улар Ҡыпсаҡ волосена һуғылды. Бында инде күберәк Төлкөсура һөйләй ине. Улар, эре ауылдарға туҡтап, халыҡтың кәйеф-сафаһын белеште, эште башлап алып китеү өсөн ышаныслыраҡ кеше табырға тырыштылар. Ауылдарҙа оҙаҡ туҡтап тормайҙар ине. Эш бөтөү менән, тәүлектең ниндәй мәле булыуға ла ҡарап тормай, ары ҡуҙғалалар. Сөнки урындағы властәр белеп ҡалып, бөтә эште боҙоуҙары бар. Ғауға ҡуҙғатып йөрөү иһә уларҙың планына кермәй. Революцион ҡуҙғалыш ойотҡоһо һалып киттеләрме, шул еткән.

Бөтә Рәсәйҙе дер һелкеткән революция тулҡыны Урал тауҙарының иң төпкөлөндә ултырған ауылдарға ла килеп еткәйне. Ләкин әле ярлы халыҡ урамда ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа ишеткән хәбәрҙе һөйләп, ниҙер көтөп йөрөүҙән ары китмәй, хатта был көрәштең үҙҙәренә ни биререн дә асыҡ төҫмөрләмәй ине. Төлкөсура, уларҙы йыйып, ҡалалағы, илдәге хәлдәр тураһында һөйләне, «Мосолмандарға» тигән прокламацияны уҡып күрһәтте. Ҡайһы берҙә уға көтөлмәгән генә һорауҙар бирәләр һәм ул яуап ҡайтарырға ауырһынып та ҡалғылай.

— Ысынлап та, батшаны төшөрһәләр, илгә кем хужа була инде?

— Старшинаны ҡыуһаҡ, дегет-фәлән һатырға рөхсәт ҡағыҙын кемдән яҙҙырып алырбыҙ икән? — тигән кеүек һорауҙарға Төлкөсура:

— Батша, байҙар хакимлеге бөтөрөлдөмө, бөтә ерһыу үҙегеҙҙең ҡулға ҡаласаҡ. Һәр кем үҙе теләгәнсә, азат йәшәйәсәк,— тип дөйөм һүҙҙәр менән яуап бирә. Шулай ҙа донъя тарлығынан, ярлылыҡтан интеккән халыҡта ошо һүҙҙәр ҙә өмөт уты уята.

— Туҙҙырайыҡ фәлән байҙың донъяһын! Малын бүлешеп алайыҡ! — тип геүләшә башлайҙар.

Белореттән сығыуына ун көнләп ваҡыт үткәс, Төлкөсура менән Артемьев Ҡаратауға яҡынлашты. Ҡояш юғары уҡ тора ине әле. Төлкөсураның көпә-көндөҙ ауылға ҡайтып ингеһе килмәне; Төлкөсура ҡайтҡан тигән хәбәр менән шундуҡ ауыл тулыр, һөрлөгөшөп өйгә килерҙәр, тип, үҙ уйын иптәшенә аңлатҡас, юлдан боролдо ла ҡары бөтөп һурыҡҡан тау битләүенә күтәрелде. Эй тыуған ер,

тыуған ауыл! Ҡырҡ һигеҙ йыл ғүмеремдең утыҙ йылға яҡыны ситтә үтһә лә, бер ҙә юнле рәхәтлек күрһәтмәһәң дә, ниңә яҡынһың икән һин күңелгә? Ҡар аҫтынан уҡ морон төртөп сығып, ер ҡаплап үҫкән умырзаяларың да, тәлгәштәрен суҡландырып ултырған ҡайындарың да, өйҙәре һирәкләнеп һибелгән урамдарың да бүтән яҡтағыға оҡшамаған. Һиндәге һәр күренештең тик үҙеңә генә хас, ҡабатланмаҫ йәме бар. Ана анау ҡаршы тауҙан малай сағында шыуып йөрөгәндә, Төлкөсураның бер ҡалтағайы һынып, тубал аяҡ көйө бата-сума саҡ ҡайтып еткәйне. «Һиңә көн дә ҡалтағай эшләп ултырып буламыни? Ипләп йөрөмәй...» — тип һуҡранғайны атаһы. Ҡайҙа ҡалды һуң шулай атаһынан әрләнгән, әсәһенән яратылған саҡтар? Ә ана тегендәге әрәмә артында Ҡаратау-Айыры йылғаһының сөмбәйе бар ине. Бер саҡ Ҡотдос менән балыҡ мәскәүләргә килһәләр, шунда бик күп бәрҙе йыйылған бит, лығырҙап йөрөйҙәр. Төлкөсура оҫта мәскәүләй ине балыҡты. Шуға күрә Ҡотдос үҙе һемәйеп ҡалмау өсөндөр инде: «Һин берҙе мәскәүлә лә, мин берҙе алғанды көтөп тор, уртаҡ булһын»,— тигән тәртип ҡуйҙы. Сәмләнешеп мәскәүләй торғас, сөмбәйҙә бер генә балыҡ тороп ҡалды бит әй — ишһеҙ булғандар икән. Быныһын кем мәскәүләргә тейеш һуң, бер балыҡты икәүһе мәскәүләй, алмай бит инде. Керештеләр осарым тотторға. Малай сағында Ҡотдос бик сәмсел була торғайны; Төлкөсура отһа, юҡ, һин бармағыңды түбән шыуҙырҙың, тип харамлашырға тотона; шунан икенсе сыбыҡ һындырып алып, яңынан башлайҙар. Ҡыяла торғас, бер заман дөбөр-шатыр күк күкрәне лә ҡойоп ямғыр яуырға керешто; малайҙарҙың әлеге бәрҙе ҡайғыһы китте, бер ҡулына шешкә теҙелгән балыҡтарын, икенсе ҡулдары менән һыуланып ауырайыуҙан төшөп барған ыштан бөрмәләрен тотоп, ауылға ҡарай югерҙеләр...

Бына хәҙер ул малай сағы, үҫмер йылдары үткән, һәр нәмә шул саҡтарҙы хәтерләткән тыуған төйәгенән сителәп йөрөй. Ҡасан да булһа, был — минең ауыл, былар — минең урамдар, былар — минең һыуҙар тип, бына әлеге кеүек боҫоп ятмайынса, күкрәк киреп йөрөр көндәр килерме?

Ҡояш байыны инде, эңер төшә башланы. Хәҙер ауылдың үҙенә генә хас моңдары асыҡ ишетелә. Кемдер: «Ниңә ошоғаса йөрөйһөң, хәҙер сыбыҡ менән һыҙырам!» — тип балаһына урамдан инергә ҡуша. Икенсе берәүһе:

«Кезе-гезе-гезе...» — тип көйләп кәзәһен сакҡыра. Кемдер так та ток килеп утын ҡырҡа. Ҡайҙалыр ҡыҙҙарҙың сырҡылдашып көлөшкәне ишетелеп ҡалды. Донъялар ауыр булһа ла тормош үҙ ағышы менән бара, кешеләрҙең көн итергә тырышып ятҡан ере... Юҡ, быңдай ағышты икенсе яҡҡа бороп ебәрергә кәрәк! Шунһыҙ Төлкөсура кеүектәргә быңа ошо йәмле, моңло ауылында иркенләп йәшәү юҡ.

Қарацғы төшөү менән, киске һалҡындан өшөй башлаған Төлкөсура урынынан торҙо, ауылға ҡарай атланы; арҡаһындағы юл тоҡсайына Бикмораттың улына күлдәклек, Рәхиләгә яулып төрөп һалынған. Быңа ул ергә тағы ла ныгыраҡ һеңә төшкән кеүек тойолган ата өйө алдында. Солан иҙәнен эйелтә баҫып, Төлкөсура ишек алдына килде, шымарып бөткән агас тотҡаны үҙенә ҡарай тартты һәм гәжәп таныш, күңел иреткес тыуған йорт еҫе танауына килеп бәрелде.

Бөтәһе лә өйҙәләр икән. Урындыҡта ятып торган Бикморат иҫен йыйғансы, Рәхилә килеп күреште.

— Уй, ҡайнаға, бөгөн генә һине һөйләп алғайныҡ әле! Әйҙә, түрҙән үт,— тип өйөрөлөп-сөйөрөлдө.

Бикморат ағаһын ҡосаҡлап уҡ алды, Артемьев менән күреште.

— Йә, ағай, хәлдәрең нисек? Һөйләп ебәр. Рәхилә, һин самауырыңды йәһәтлә инде.

Төлкөсура килененә яулыҡ бирҙе. Улдары йоҡлап ята ине, иплән кенә яратты ла, уға күлдәклекте урҙага элде.

— Нимәһен һөйләйһең инде, ҡустым,— тип шунан һуң ғына һүҙгә керешле.— Бер сама йәшәп ятабыҙ. Ә ҡала хәҙер көн дә гөү килеп тора. Демонстрацияларға сығалар, митингеләр үткәрәләр. Петербург, Мәскәү, хатта Өфөлә лә эшселәр капиталист, помещиктәрҙе дер һелкетәләр, ти. Заманалар үҙгәрә, ҡустым...

Бикморат ағаһының «демонстрация», «митинг», «капиталист» тип үҙе быгаса ишетмәгән ят һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләүен ҡыҙыҡһынып тыңланы. Ил буйынса ҙур сыуалыштар барғаны ауылға ишетелһә лә, шунда үҙе ҡатнашҡан кешенең һөйләүе бөтөнләй икенсе төрлө ине.

— Ҡустым, мин был хәбәрҙәрҙе һинең бер үҙеңә генә һөйләргә ҡайтманым. Бында беҙҙе, быңа был иптәш менән икебеҙҙе, Белорет эшселәренең башлыгы Косоротов үҙе ебәрҙе. Ниңә аптырайһың? Революцияның нимә икәнен һеҙгә лә аңлатырға кәрәк бит.

Ысынлап аптырашта ҡалғайны Бикморат. Ағаһы шул тиклем ҙур кеше булып киттеме икән ни? Революцияның нимә икәнен төшөндөрөп бирәм, ти бит! Ләкин ул төпсөнөп торманы, Төлкөсура әйткән кешеләрҙе саҡырырға сығып китте.

Кешеләр бер-бер артлы тиҙ үк йыйылдылар, хәл-әхүәл һораштылар. Төлкөсура ауылдағы яңылыҡтар менән генә түгел, Лапшин утарындағы эш барышы менән дә ҡыҙыҡһынды. Роман Нороштоң түбәнгерәк ағымынан яңы бисәмәләр һатып алған икән, хәҙер шундағы урманды ҡырырға тотонған.

— Харап ҡоторондо ул хәҙер,—тип һөйләне Ҡотдос.— Алтатарын кеҫәһенә тығып ҡына йөрөй. Бер ауыҙ һүҙ әйттеңме, шул нәмәһен сығара ла, әле һин батшаға ҡаршы ҡул күтәрмәксе булаһыңмы, башыңды төрмәлә серетермен, фәлән дә фәсмәтән, тип ҡысҡырынырға тотона. Ул әллә ниндәй штрафтары менән йонсота. Аҙна һайын тиерлек Стәрленән атлы һалдаттар килеп урай. Өстамаҡ ауылының бер егетен тотоп алып киткәндәр әле ана.

— Үҙебеҙҙең ҡанды ла, ер ҡанын да эсә инде ул баяр,— тип һүҙгә ҡушылды икенсе берәүһе.— Бөтә ҡарағай урманын ҡырып бөтөп бара бит. Хәҙер ана уҫаҡ менән ҡайынды ла ҡырҡтырырға тотондо. Норош буйы ҡола яланға әйләнә...

— Улай ғына тиһең әле, ағас баҫып йә бүрәнә аҫтында ҡалып күпме кеше имгәнә. Ҡыуғында йыл һайын бер нисә кеше батып үлә. Ирһеҙ ҡалған ғаиләләр аслыҡтан ҡырыла. Харап инде ул...

— Хәлегеҙҙең шулай ауыр икәнен һөйләмәһәгеҙ ҙә белеп торам, ағай-эне,— тип һүҙ башланы Төлкөсура.— Завод эшсеһенең дә тормошо һеҙҙекенән яҡшы түгел. Шуға күрә хәҙер улар ҡулға-ҡул тотоношоп завод хужаларына ҡаршы көрәшкә сыҡтылар. Ҡалаларҙа капиталистәрҙе, һеҙҙәге Лапшин, Уйылдан кеүек байҙарҙы, Низам муллаларҙы бөтөнләйгә һепереп түкмәй тороп, рәхәт тормош күреү юҡ беҙгә. Уларҙың нигеҙҙәрен пыр туҙҙырырға, үҙҙәрен аяуһыҙ ҡырырға кәрәк. Үҙегеҙгә мәғлүм бит, ике-өс кеше бөтә ауылды үҙ ҡулында тота, бал-майҙа йөҙөп йәшәй, ҡалғандарыбыҙ шулар алдында бил бөгә, аслы-туҡлы көн күрә. Шул да булдымы тормош? Хөрриәт, тигеҙлек кәрәк беҙгә. Ә бының өсөн көрәшергә кәрәк! Иртәгә ашарлыҡ икмәк ҡайҙан табайым икән тип йәшәү ялҡытты бит инде. Әгәр бөтә ауыл күтәрелһә,

Уйылдан менән Низам ҡайҙа бара? Лапшинендең унлап һыбайлыһын атып ысорорлоҡ ун мылтыҡ таба алмайһығыҙмы ни! Ирлек ғорурлығы тигән нәмә бар бит, ағай-эне. Бына, Зариф ағай, һинең шул уҡ Уйылдандан ни ерең кәм? Ир була тороп, алһыҙ-ялһыҙ эшләй тороп, балаларыңдың аламаһы ҡойолоп йөрөү ғәрләндермәйме ни һине?!

Бына хәҙер мин һеҙгә Өфөнән килгән бер ҡағыҙҙы уҡыйым. Унда бөтәһе дә бик һәйбәт аңлатып яҙылған.

Төлкөсураның ҡыҙып-ҡыҙып, бик шыма, ҡыйыу һөйләүенә һоҡланып ултырған ир-ат, уның аҙаҡҡы һүҙҙәрен ишеткәс, ҡолаҡтарын ҡарпайтты. Төлкөсура прокламацияны ятлап бөткәйне инде. Ундағы һәр һүҙҙе асыҡ әйтеп, ҡайһы бер урындарын икешәр тапҡыр ҡабатлап, уҡып сыҡты.

— Эштәр бына шулайыраҡ, ағай-эне. Һорай торған һүҙегеҙ булһа, һорағыҙ,— тип һүҙен осланы Төлкөсура.

Төн уртаһы ауғансы һөйләшеп ултырҙылар. Шулай ҙа әле ауылдаштарының байҙарға ҡаршы бөгөндән көрәшкә сығырға әҙер түгеллектәрен, ниҙәндер шикләнеүҙәрен төшөндө. Урман ҡырҡыусыларҙың эш урынына барып, шунда ныҡлабыраҡ һөйләшергә кәрәк булыр тигән фекергә килде Төлкөсура. Баш күтәреүҙе ҡайҙандыр башлап ебәрергә генә кәрәк, унан ары ауыл халҡы ла гөлт итеп тоҡаныр.

— Минең ҡайтҡанды һөйләнмәй торһағыҙ, арыу булыр ине,— тип оҙатты ул килеүселәрҙе.

Кешеләр таралғас, ҡустыһы, Артемьев менән һөйләшеп ултырҙылар, Бикморат үҙенең Белореткә китеп барған губернаторҙы нисек өркөткәнен һөйләп көлдөрҙө.

— Ул ҡалала моронон күрһәтергә лә ҡурҡып ятты, йәшеренеп тигәндәй ҡайтып китте,— тине Төлкөсура. Шунан үҙен баянан бирле ҡыҙыҡһындырған һорауын бирҙе: — Уйылдан теге саҡта ни эшләне? Һаман онотмаймы икән әле?

Бикморат менән Рәхилә Уйылдандың Сажидәне эҙләп ҡыялып йөрөгәндәрен, өйгә килеүен—бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй, бер-береһен бүлдерә-бүлдерә, көлә-көлә һөйләп бирҙеләр.

— Шунан аҙаҡ айҙан артыҡ урамға аяҡ та баҫмай өйөндә ятҡан, тип һөйләнеләр. Шулай ҙа, ағай, һиңә бик һаҡ булырға кәрәк. Әгәр шул Төлкөсураның башына етмәһәм, ер упһын, тип ант иткән, тиҙәр.

— Ҡурҡма, ҡустым, кем кемдең башына еткәнде күрербеҙ әле,— тип тынысландырҙы Төлкөсура уны.

Иртүк, ҡоҙаһы менән икәүҙән-икәү һөйләшеп ултырырға тиштер ниде, Ҡотдос тағы килеп етте. Шул саҡ һүҙ араһында:

— Элекке көн Уйылданды Белорет яғына киткән, тиҙәр ине, осраманымы? — тип һорап ҡуйҙы ул.

Ҡапыл ғына әллә ниндәй уйҙарға төшөрҙө·был хәбәр Төлкөсураны. Ни йомошо төшөп китте икән Белорет яғына? Ул яҡҡа һис тә йөрөгәне тойолмай ине бит. Берәй этлеген һөйрәп йөрөмәйме? Их, Ҡыпсаҡ волосенән үҙҙәренә оло юлдан урап ҡайтһа, юлда осратҡан булыр ине лә, тураға йөрөнө шул! Әгәр, еҫкәнеп, Төлкөсураның өйҙә юҡлығын ишетһә, хаслыҡ уйлап, уның өйөнә барыуы, әллә ни ҡыланыуы бар бит.

— Ниндәй уйға тарының әле, ҡорҙаш-ҡоҙа? — тип, уға ғәжәпһенеберәк ҡараны Ҡотдос.

— Уйылданды әйтәм, унда тигенгә барамы икән? Әллә ниңә күңелем болоҡһоп киттесе.

Ҡотдос был хәбәрҙе һүҙ араһында ғына ҡыҫтырған кеүек булһа ла, иртүк килеүенең сәбәбе — шуны Төлкөсураның ҡолағына төшөрөү ине. Кисә әйтергә онотоп ҡайтҡан. Ул үҙе ишеткәнде, әллә ысын, әллә буш тип, тулыһынса һөйләп тә бөтмәне. Әйтеүҙәренә ҡарағанда, Уйылдан юлға төнөн сыҡҡан, һәр саҡ үҙе тирәһендә ялағайланып йөрөүсе Сәхи таҙҙы ла ни өсөндөр эргәһенә ултыртып алып киткән, тиҙәр.

— Улай бик борсолһаң, Белореткә ҡайт һин,— тине Ҡотдос.— Беҙ бында яйлап уйлашырбыҙ әле.

Аҙыраҡ уйлағас, Артемьев менән кәңәшләшкәс, шундай һығымтаға килделәр: Төлкөсура Белореткә ҡайтып китә, Артемьев бында ҡала. Урмансылар араһында рустар ҙа байтаҡ ине, шулар менән һөйләшә, прокламацияларҙы тарата. Төлкөсура бер нисә прокламацияны Бикморатҡа ла бирҙе, урман ҡырҡыусылар араһында таратырға, күмәкләшеп йыйылып уҡырға ҡушты һәм йәһәт кенә юлға йыйына башланы.

Ҡарышҡан кеүек, уға атлы кеше лә осраманы, юлдың өҙөк ваҡыты шул — ни арба, ни сана түгел. Көндөҙ юлдағы ирей бөтөп барған ҡар мәреуләнә, атлауы ҡыйын, ҡара ергә сыҡтыңмы — бысраҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер ауылда саҡ ҡына ял итте лә төнөн дә атланы

Төлкөсура. Ниндәйҙер хәүефле тойғо уны туктауһыҙ ал-ға кыуалай ине.

* *
*

Теге сакта Рәхилә кулынан Төлкөсура калдырған яҙыуҙы алып укығас, ысынлап та өйөнән сыкмай ятты Уйылдан. Берҙән, ғәрлек тойғоһо быуа, икенсенән, «һине лә атайыңдың әжәле көтә» тигән һүҙҙәр мейеһендә туктауһыҙ кабатланып тора. Уның йокоһо осто, аҙ ғына күҙе йомолдомо, һаташа башлай. Һакал-мыйык баҫкан, ғифриттәй оло кәүҙәле Төлкөсура өҫтөнә эйелә лә, һине атайыңдың әжәле көтә, тип ыҫылдай, ырғактай бармактары менән муйынына үрелә. Йән тиргә төшөп уянып китә Уйылдан, бисәһен төрткөләп уята, бал һорап эсә, шәмде яктыртып куйырға куша. Бисәһе, бер сак шулай кыланғанында:

— Шул шыркана бисә өсөн ошо хәлгә барып етмәһәң,— тип ысқындырғайны, енләнде лә китте, төн буйы шашынып, үкереп сыкты.

Бисәһе иртәгеһенә атаһын, Низам мулланы, алып килеп, өшкөртөп караны уны. Быныц да файҙаһы теймәне. Уйылдан төн буйы уяу ята ла көндөҙ генә йоклай. Хатта көптәй корһағы шиңеп, сырайы ағарынып китте. Төлкөсураның Белореткә барып эшкә урынлашыуын ишеткәс, сукынып китһен шунда Сажидәһе менән тип, кулын һелтәне; үс өҫтөнә, байтак калым биреп, күрше ауылдан бер йәш бисә әйттерҙе һәм ошонан аҙак тынысланыбырак йәшәй башланы. Ләкин атаһын үлтергән өсөн дә, үҙен хурлыкка калдырған өсөн дә Төлкөсуранан үс алырға теләү тойғоһо уны бер вакытта ла ташлап китмәне. Тәүҙәрәк ул, моғайын, ауылға кунакка-фәлән кайтыр, тип, уны шул сакта берәй хәлгә түндерергә самалағайны, хатта Сәхи таҙҙы Бикморат өйө тирәһенән күҙ яҙлыктырмаҫка яллап куйғайны. Төлкөсураның кулға алыныуын ишеткәс, ярар, миңә күрһәткән яфалары өсөн хоҙай түбәһенән орһон, тип үс тойғоһо һүрелә башлаған кеүек ине. Кыш көнө анау Роман килеп, бөтә ил буйынса батшаға каршы сыуалыштар көсәйеүен кайһы бер урындарҙа байҙарҙың донъяһын үртәүгә, үҙҙәрен үлтереүгә тиклем барып етеүҙәрен һөйләп, күңеленә хәтәр вәсүәсә һалып китте. Күп тә үтмәне, Төлкөсураның төрмәнән кайтыу хәбәрен ишетте.

— Һаҡ булырға кәрәк,— тине Роман.— Уҫаллыҡ, хәйләкәрлек, аҡылды, ҡулыбыҙҙан ни килә — шуны ҡулланып, аҙ ғына ығы-зығыға ла юл ҡуйырға ярамай. Тегеләй-былай һөйләнеп йөрөгән кеше бармы, ишетеү менән, урядникте саҡырт. Анау Төлкөсура килеп сығып, эште боҙмаһын, тип борсолам әле мин. Ул бит хәҙер ҡала балаларында ҡатнашып, халыҡты ҡоторторға оҫтарған, әллә ниҙәр ҡыланыуы бар.

Ошонан аҙаҡ тыныслығы тағы боҙолдо Уйылдандың. Яҡындағы ғына ауылға барһа ла, яңғыҙы юлға сыҡмаҫ булды. Әлеге шул төштәре бутала башланы: Төлкөсура, атайындың әжәле көтә һине, тип ҡабатлай, йә өйөнә ут һала, муйынына бау тағып, аҫырға маташа. Мендәре аҫтына ҡөрьән һалып ятыу ҙа, һәр төрлө бетеүҙәр сайҡатып эсеү ҙә — бер ни ҙә ярҙам итмәне. Ахыр килеп, уйланды-уйланды ла, Төлкөсураны юҡ итмәй тороп, тыныс тормош булмаҫ, йә — ул, йә — мин, тигән фекергә килде.

Уға Белорет заводының Стәрлетамаҡ яғына йөрөүсе ҡайһы бер кешеләре төшкөләп китә ине. Ҡайһылары ихлас күңелдәнме, итәғәтлек өсөн генәме, ҡунаҡҡа саҡырғаны, йорттарын өйрәтеп үк киткәне бар. Шуларҙың берәйһенә барып төшөр, Төлкөсураның өйөн һорашып белешер; төнөн йоҡоһонан уятып инәһең дә балта төйҙәһе менән тондораһың. Үҙе йығылһа, теге кәнтәйен сысҡан урынына быуырға мөмкин...

Шулай ҙа был эшкә яңғыҙы барырға батырсылыҡ итмәне Уйылдан. Аҡылы теүәл кешенең Төлкөсура кеүек бәһлеүән менән күҙмә-күҙ осрашыуҙан баш тартасағын да белә, алтын бирһә лә, риза булмаясаҡтар. Ахыр килеп, әлеге Сәхи таҙға туҡталды. Ләкин үҙенең уны Белоретка ни өсөн алып барғанын юлға сыҡмаҫ борон уҡ әйтмәне. Ул иҫәргә һүҙ ысҡындырһаң, берәйһенә һөйләп ҡуйыуы бар ине. Бисәләренә иһә, йәйгә сыҡһаң, балта, бысҡы, игәү, ҡаҙаҡ кеүек тимер-томор күп кәрәк була, алдан әҙерләп ҡуймаһаң, ваҡытында табылмай торған, Белореттәге таныштарға барып ҡайтам, тигән һылтау тапты. Уйылдан был хаҡта элегерәк тә бер һөйләнгәнлектән, бисәләре башҡаса һис ни уйламай тороп ҡалды. Юл йомшармаҫ элек йөрөү яҡшы тип төнөн сығып китеүенә лә аптыраманылар. Ләкин унын, атҡа ултырғас:

— Минең ҡайҙа киткәнде һөйләнмәгеҙ. Кешенең белгәненән белмәгәне яҡшы,— тигән һүҙен йәш ҡатыны ғына онотоброаҡ ебәрҙе. Бер мал ҡараусыға: «Тыңлама-

һаң, Белореттән ҡайтҡас, ағайың ҡолағыңды борор»,— тип ысҡындырҙы.

Белореттә Уйылдан завод идаралығында эшләгән танышына барып төштө. Һәйбәт кеше икән, өлтөрәп тора, хәбәрҙәрен һөйләй-һөйләй һыйлай. Заводта эштәрҙең яҡшынан бармауын, эшселәрҙең забастовка артынан забастовка иғлан итеүен, завод хужаларының һис кенә лә хәлде төҙәтеп алып китә алмауын, тағы байтаҡ хәбәрҙәр ишетте Уйылдан. «Аллаға шөкөр, үҙебеҙҙә тыныс икән әле», тип уйлап ҡуйҙы. Ул танышынан, өй түбәһе ябыу өсөн тимер табып буламы, тип белеште; ҡаҙаҡ, күгән кеүек ваҡ-төйәктәр ҙә кәрәклеген әйтте; шунан һүҙ араһында ғына:

— Һеҙҙең заводта минең бер ауылдаш эшләп йөрөй, шуның ҡайҙа торғанын белеп булмаҫмы икән? — тип һорашты.

— Ниндәй цехта эшләй һуң ул?

— Уның цехын кем белһен, бында киткәненә хәҙер дүрт-биш йыл самаһы инде. Ахунов Төлкөсура тигән кеше.

— Табыуға табып булыр уны. Иртәгә һорашырмын,— тине хужа.— Әллә бында килергә ҡушайыммы?

— Юҡ-юҡ, кәрәкмәй. Уға минең килгәнде лә әйтергә ярамай. Ваҡытым булмаҫ та, йә барып күрә алмам, унан үпкәләр. Уның адресе генә кәрәк миңә, бәлки, өлгөрһәм, үҙем барып сығырмын.

Иртәгеһенә ул үҙе лә урамға сыҡманы, Сәхиҙе лә йөрөтмәне, аңғармаҫтан Төлкөсура йә Сажидә осрап ҡуйыр кеүек тойолдо. Төшкә ашарға ҡайтҡас, хужа:

— Бөтәһен дә белештем, Уйылдан әфәнде, — тине. — Май урталарына бер танышым өй түбәһе яба торған ҡалай әҙерләргә һүҙ бирҙе. Теге ауылдашың йөк тейәүсе булып эшләй икән. Әле ун көн инде өйөндә ауырып ята, ти. Бына адресе. Был урам Нижнее Селениелә, бынан йыраҡ түгел.

Төшкөлөккә ашап, хужа тағы үҙ эшенә киткәс, Уйылдан Сәхи таҙҙы ихатаға саҡырып алып сыҡты һәм тик шунда ғына үҙенең уйҙарын асып һалды. Улар хәҙер һаҡ ҡына йөрөп, Төлкөсураның өйөн табалар, ситтән генә күҙәтәләр. Ҡараңғы төшөр саҡта, күрше ауылға барып ҡунабыҙ, тип фатирҙән аттарын егеп сығып китәләр ҙә...

Уйылдан бөтәһен дә теҙеп һөйләгәс, Сәхи таҙға тура ҡарап һораны:

— Үҙеңә иң оҡшаған бер тайҙы һайлап алырһың. Ризаһыңмы?

— Үҙең дә бергә бараһыңмы һуң, Уйылдан ағай?

— Мин һине шул тирәлә генә ат менән көтөп торормон. Эт тә һиҙмәç. Ишек аçҡан кешене тәүҙә ауната һуғаһың, унан икенсеһен... Балалары бар шикелле, уларын да ҡалдырырға ярамай, тамыры ҡороһон, ҡәһәр һуҡҡырының.

— Ҡурҡыңҡырайым бит әле, Уйылдан ағай. Ул Төлкөсураның ҡулына ҡапһаң...

— Һәй, юҡты һөйләп торма инде. Ауырып ята ти бит ул, урынынан ҡуҙғала ла алмай ҡалыр. Һинең ҡулыңдан килмәгән эш бармы ни был донъяла!

— Ярар, тырышырмын. Түлкә тайыңды ҡайтҡас та бир.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, Сәхи.

Өйҙө тиҙ үк таптылар, ләкин уға яҡын барманылар. Ауыл өйө кеүек кенә икән дә, рәтле ҡапҡалары ла юҡ.

— Соландары бар икән,— тине Уйылдан.— Солан ишектәре бикле булһа, асырға сығыусыны шунда уҡ ҡолата һуҡ та йәһәтерәк өйгә ин. Күп туҡталып торма, эште бөтөрөү менән сыҡ та һыҙ. Мин ана анау мөйәштә көтөп торормон.

...Төн урталары. Тирә-яҡта шылт иткән тауыш та ишетелмәй. Уйылдан тыҡрыҡҡа атты килтереп ҡуйғас ҡына, үҙе лә Төлкөсураның өйөнә бармаҡсы булды. Сәхи таҙ эште боҙоп ҡуйһа, барыбер уны ла тотасаҡтар бит. Ни булһа ла — тәүәккәлләргә кәрәк. Уйылдан Сәхиҙең ҡолағына бышылданы.

— Ишек астырғанда, кем, тип һораһа, ауылдашың, әле генә килеп төштөк, тип әйт.

Балталарын сабыу аçтына йәшереп, өйгә табан атланылар. Төнөн туңған ҡарҙың аяҡ аçтында шығырҙауы йөрәктәренә үтә. Өй тәңгәленә етә башлағас, аяҡ ослап ҡына атларға тура килде. Ҡапҡалары көндөҙгөсә асыҡ килеш тора. Сәхи солан ишеген шаҡыны, аҙ ғына тороу менән, өй ишеге асылды. Иренең ҡайтыуын түҙемһеҙләнеп, хәүефләнеп көтөп торған Сажидә, Төлкөсураһылыр тип, кем икәнде лә һорап тормай, солан ишегенең келәһен ысҡындырыуы булды, Сәхи яп итеп инеп, балтаһы менән һелтәнде...

Уйылдан ҡайтыу яғына атын бөтөнләй икенсе юлдан ҡыуаланы. Йөрәге урынында түгел ине уның. Төлкөсура

өйҙә булмай сыҡты. Ҡайҙа йөрөп ҡалды икән ул? Хәҙер был эш ни менән бөтөр?..

* *
*

Төлкөсура үҙенең өйө тәңгәлендә йыйылышып торған бер төркөм халыҡты алыҫтан уҡ күрҙе һәм йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Әллә Уйылдан үҙенең хаслығын эшләргә өлгөргәнме? Ҡилеп етер-етмәҫтән һораны:

— Ниңә өйөлдөгөҙ? Нимә бар?

Ҡешеләр баштарын унан ситкә борҙолар, бер ҡатын иларға тотондо. Төлкөсура ихатаһына югерен инһә, ишек алдында торған полицейский:

— Инергә ярамай! — тип юлын киртәләне.

— Мин — был өйҙөң хужаһы! Ни эшләйһегеҙ бында?

— Унда тикшереү бара.

— Ниндәй тикшереү?

— Үлгәндәрҙе.

Төлкөсура ҡайһылыр араға ҡатып ҡалды, шунан полицейскийҙе юлынан ситкә елтерәтте лә ишеккә ташланды. Өйөндә кемдәр булыуын да хәтерләмәй ул, тик ҡатынының, ҡыҙының ҡанлы кәүҙәләре генә гүмеренә күҙ алдынан китмәҫлек булып, йөрәгенә уйылып ҡалды...

Сажидәһе менән ҡыҙын күмгәс, иптәштәре уға шик тотҡан кешеһе тураһында полицияға барып әйтергә кәңәш биргәйнеләр, Төлкөсура ҡул һелтәне.

— Быны иҫбатларға дәлилдәрем дә юҡ. Уға мин язаны үҙем бирергә тейеш,— тине.

Уйылдан, бик тырышһа ла, Төлкөсураның барлыҡ йәшәү өмөттәрен өҙә саба алмағайны. Дүрт йәшлек Илһам, фажиғә булырын белгән кеүек, был төндө мейес башында ашыҡ уйнатып ултырған еренән йоҡлап киткәйне. Сажидә уны ҡуҙғатып йөрөмәне, башы аҫтына мендәр ҡыҫтырҙы ла өҫтөнә япты. Уйылдан менән Сәхи иһә мейес башын ҡарауҙы иҫтәренә лә индермәне. Шулай итеп, Төлкөсураға берҙән-бер йыуанысы — Илһамы ҡалды. Нисек кенә булмаһын, Төлкөсура был шаңҡыуҙан тиҙ генә ҡотола алманы. Ҡулына һис ни бармай ине уның. Эштә нисек етте шулай көн үткәрҙе лә өйөнә ҡайтты. Сажидәһенең, ҡыҙының эҙен табырға тырышҡан кеүек, башын түбән эйеп, ҡараңғы төшкәнсе ихатаһында йөрөнө. Өйөнә ингәс, тупһа эргәһендә туҡтап ҡалды; әйтер-

һең, быға тиклемге шикелле, Сажидәһенең, бер ҡулына әле йәше лә тулмаған ҡыҙын күтәреп, ҡаршыһына йылмайып сығырын көтә. Ҡайҙа һуң уның ошо бәхетле минуттары? Әллә улар төш кенә булдымы? Ҡапыл уның күҙ алдына ҡанлы кәүҙәләр килеп баҫа, Төлкөсура күҙҙәрен усы менән ҡаплай ҙа тәнтерәкләй-тәнтерәкләй тышҡа кире атлай...

Бер нисә иптәше килгәндә, ул, тубығындағы улын ҡосаҡлап, солан күтәрмәһендә ултыра ине. Бер кем дә уға артабанғы тормошон нисек ҡороу тураһында кәңәш бирмәне, йыуатыу һүҙҙәре лә әйтмәнеләр. Дуҫтары белә ине: Төлкөсура — ғәжәп көслө ихтыярлы кеше. Йыуатыу һүҙҙәре, аҡыл биреү — бындай кешенең асыуын ғына ҡабартырға мөмкин. Төн уртаһы ауғас, өс иптәше ҡайтып китте, ә береүһе, миңә баракка ҡайтып ни бар, тип Төлкөсура эргәһендә йоҡларға ҡалды. Быныһы ла алдан уйланған эш ине. Дуҫтарының уның яңғыҙын ҡалдырғылары килмәне: Төлкөсураның ҡыҙыу баш менән әллә ни эшләп ҡуйыуы бар.

Төнө буйы керпек тә ҡаҡманы Төлкөсура, үҙенең бөтә тормош юлын ҡайтанан барлап, күҙ алдынан үткәрҙе, күп нәмәләр тураһында уйланды. Ахырҙа шундай фекергә килде: һәр саҡ үҙ юлына кәртә ҡороусы, бәхетен тартып алыусыларға ҡаршы һуңғы тамсы ҡаны ҡалғансы аяуһыҙ көрәшергә. Шунан башҡа был донъяла йәшәүҙең уға хәҙер ҡыҙығы юҡ.

Ул иртәнсәк контораға барҙы ла эштән китәсәген әйтте, иҫәп-хисапты өҙөүҙәрен һораны.

— Ғаиләңдең фажиғәһен асыҡлайһың барҙыр бит әле? Ниңә ҡабаланаһың? — тип һорағайнылар, Төлкөсура был һүҙҙәргә артыҡ иғтибар итмәне. Уның ғаиләһе яҙмышы менән был буталсыҡ заманда полицияның әллә ни ҡыҙыҡһынмаҫын белгәнлектән:

— Уныһын тикшереүсе кешеләр бар бит,— тип кенә ҡуйҙы.

* *
*

Төлкөсура ауылына ҡайтып барған ыңғайында уҡ эште ниҙән башлау тураһында уйланы. Хәҙер ҡыуғынға әҙерләнгән ваҡыт, ауылдың күҙгә күренгәнерәк ир-аты, моғайын, Лапшин утарында ҡуна ятып эшләйҙер, туп-

тура шунда барырға, кешеләр менән һөйләшергә, тәүҙә урмансыларҙы күтәрергә кәрәк, Лапшиндең донъяһын ҡабат был яҡта эҙе лә булмаҫлыҡ итеп пыран-заран килтерергә, унан ауылда Уйылданды туҙҙырырға. Артабан бүтән ауыл байҙарын ҡыра башларға мөмкин.

Ул Илһамын Рәхилә килене эргәһенә ҡалдырҙы ла, ошо уйҙарын тормошҡа атҡара башлау уйы менән, ҡайтҡан көнөндә үк Лапшин утарына юл тотто.

...Әрбәк-һәрбәк яҡтылыҡта Төлкөсураны танығас, ятырға әҙерләнеп йөрөгән кешеләрҙең йоҡоһо осто. Ни өсөн ҡабат әйләнеп килеүен, ҡалалағы хәлдәрҙе һорашырға тотондолар. Һөйләшеү барышында Төлкөсура «Мосолмандарға» тигән прокламацияның эшселәргә ныҡ тәьҫир итеүен, тик уларға берҙәм баш күтәреү өсөн ҡыйыулыҡ һәм ойошоу етмәүен һиҙҙе. Артемьев кисә генә кире ҡайтып киткән икән. Ул халыҡҡа күп кенә нәмәне аңғартҡан, күрәһең... «Анау урыҫ бик күп нәмәне белә. Аҡыллы кеше икән»,— тип телгә алалар уны. Төлкөсура үҙен уратып алған кешеләргә, барлыҡ участкаларҙағы халыҡ менән һөйләшеп сыҡҡандан аҙаҡ, иртәнән һуңға— ҡыуғын башланасаҡ көндә — баяр имениеһен туҙҙырырға, кассаһындағы бөтә аҡсаны, келәттәрендәге бөтә байлыҡты бүлешеп алырға, ҡыуғынға сығыу урынына байҙарға ҡаршы көрәшкә күтәрелергә тәҡдим итте. Ҡыуғынға йөрөү — һәр кемдең елеген ҡоротҡан, иң ныҡ теңкәһенә тейгән эш ине. Берҙән, унан имен-аман йөрөп ҡайтыуың икеле, теләһә ҡайһы көндә һыу төбөнә китеүең бар; унан һуң байтаҡ ваҡытҡа ғаиләнән айырылып йөрөргә кәрәк, бесән мәленә әйләнеп ҡайта алмаһаң, ҡышҡылыҡҡа малың ас тороп ҡала. Шуға күрә Төлкөсураның тәҡдимен берҙәм хупланылар. Төлкөсура уларға көн элгәре ғауға күтәрмәҫкә, иртәгә һәр кемгә үҙ урынынан эшкә сығырға, үҙенең бында икәнлеген баяр кешеләренә белдермәҫкә ҡушты.

Иртәгеһенә ул Нюрош буйындағы тағы ике участкала булып, ундағы кешеләрҙе лә иртәгә иртүк баяр имениеһенә килергә күндерҙе. Эштең шулай ыңғай ғына башланып китеүе уны ҡыуандырҙы, дәртләндерҙе. Ул инде хәҙер баяр имениеһен, Уйылданды, яҡын-тирә ауылдарҙағы байҙарҙы туҙҙырғас, отряд ойоштороп, оло юл буйынса Белореткә табан хәрәкәт итеү тураһында уйлай. Әгәр унда еткәнсе ҙур ғына отряд ойошоп, Беренсе майға тиклем ҡалаға барып өлгөрһәләр, ниндәй шәп булыр ине!

Демонстрацияла, митингелә ҡатнашырҙар, эшселәр менән бергәләп, бәлки, ҡаланы бөтөнләй үҙ ҡулдарына алырҙар ине...

«Романды ни эшләтергә икән? — тип уйланы Төлкөсура, Ҡыйғыр яланына кире әйләнеп килгән сағында.— Суҡынмышты әллә ниңә үлтерергә килмәй бит әле. (Уның үҙ ғаиләһен сана юлы менән ук Өфөгә оҙатҡанлығын әйткәйнеләр.) Иң һәйбәте — ул үҙе лә шулар артынан һыпыртһын. Ҡабат был тирәгә аяҡ баҫмаҫлыҡ итеп ҡотон алырға ла...»

Роман һуңғы көндәрҙә эшселәр араһына әллә ни сығып йөрөмәй. Приказчигенә күрһәтмәләр бирә лә, үҙе күберәк өйҙә ултыра, ваҡ-төйәк иҫәп-хисап эштәре менән булаша, унан Өфөнән алып килгән китаптарҙы уҡып көн үткәрә. Ул эшселәр ҡулына ниндәйҙер прокламация килеп эләгеүен ишеткәйне. Ләкин приказчиге, үҙе тирәһендә ҡойроҡ болғаусы шымсы-ялағайҙар ни тиклем тырышмаһын, ул ҡағыҙҙы ҡулға төшөрә алманылар. «Уны кем, ҡайҙан килтерер икән? Әллә Өфөләге социал-демократтарҙың ҡулы бында ла килеп етәме?» — тип баш вата ул хәҙер Был көндәрҙә бөтә уйы — бүрәнәләрҙе тиҙерәк һыуға ауҙартып ҡыуғынды башлап ебәреү. Унда, ташҡын йылға буйында, ҡыуғынсыларҙың һәр төрлө прокламациялар ҡайғыһы китәсәк. Шулай ҙа ул өйәҙ полиция идаралығына, Стәрлетамаҡ хәрби командаһына, ҡыуғын башланыу көнөнә ҡоралы отряд ебәреүҙе һорап, яҙыу оҙатҡайны. Эшселәрҙең ҡыуғын башланыр мәлдә һәр төрлө талаптар менән сығыш яһауҙарын, ҡыуғынға сыҡмау менән янәлтеүҙәрен белеп бөткән бит инде. Һалдаттарҙың бөгөн-иртән килеп төшөүҙәрен көтә.

Ул һуңғы ваҡытта өйөнә бер кемде лә кертмәй, йомошо булған кешеләрҙе аҙнаһына бер тапҡыр конторала ғына ҡабул итә ине. Ишек эргәһендәге бүлмәлә ултырған ярҙамсыһы ниндәйҙер ят кешенең уның эргәһенә инергә теләүен әйткәс, аптырабыраҡ ҡалды. Көн дә кисләп бара, кем булыр икән?

— Исемен һораныңмы һуң?

— Юҡ, Роман Артемьевич. Мин уның дуҫы, ти.

Лапшин кеҫәһендәге наган һабын һәрмәп ҡуйҙы ла:

— Үткәр,— тине.

Ишектә Төлкөсураны күргәс, мейеһен бер-бер артлы ике уй телеп үтте: яҡшылыҡҡа килгәнме был әллә яманлыҡҡамы?

— О-оо, кемде күрәм! Ниндәй елдәр ташланы? Һаумы!

— Һаумы, Роман. — Төлкөсураның сырайы ҡараңғы ине, Роман һағайҙы. — Теге саҡтағы ярҙамың өсөн рәхмәт әйтергә килеп сыҡтым әле бына.

— Ултыр әйҙә. Һаман шул Белореттәме әле?

— Шунда инем, хәҙер бында, Роман,— Төлкөсура ауыр, күтәреп булмаҫлыҡ ҡарашын уға ҡаҙаны.— Шаярырға-фәлән уйламай ғына миңә тәүҙә кеҫәңдәге нага領ныңды сығарып бир әле.

Роман тәүҙә аптырағандай итте, шунан көсәнеп йылмайҙы.

— Ни һөйләйһең, Төлкөсура? Ниндәй наган ул?

— Ҡурҡма, мин һиңә тейергә килмәнем. Әгәр үҙең яуызлыҡ уйлап, атырға маташһаң, ҡарап тормам. Ҡабатлап әйтәм, наганыңды өҫтәлгә һал.

Роман үлтергес ҡараш алдында еңелде, наганын кеҫәһенән иплән кенә алды ла өҫтәлгә ҡуйҙы, үҙе артына сигенде.

— Ләкин, Төлкөсура... һөйләшеү ирҙәрсә булһын. Һин дә миңә наган күтәрмә, — тип, Роман креслоһына ултырҙы.

Төлкөсура, наганды алып, әйләндереп-әйләндереп ҡараны, салбар кеҫәһенә тығып ҡуйҙы.

— Уның миңә кәрәк булыуы бар, һин бүтәнде табырһың,— тип, иҙәндә бер йөрөп әйләнде лә Романдың ҡаршыһына килеп баҫты.— Беләһеңме, Роман, һинең урында бүтән кеше булһа, мин уны, ауылдаштарымдың ете ҡат тиреһен тунаған, тыуған еремдең ҡотон ебәргән өсөн аяғынан ағас ботағына аҫып ҡуйыр инем. Ҡурҡма әле һин, ниңә төҫөң ҡасты? Теймәҫкә булдым мин һиңә, әллә ниңә ҡулым күтәрелмәй... Бер кәңәшем бар: һин хәҙер үк йыйын да ҡараңғы төшөү менән бынан сығып һыҙ. Приказчигең менән лавкасың ҡулға алынған, улар конторала һаҡ аҫтында ултыра. Әгәр иртәнсәккә тиклем ҡалһаң, эшселәрҙең һине сүбәк урынына өҙгөләп ташлауы мөмкин. Ҡабат был яҡтарға аяҡ баҫмаҫҡа кәңәш бирәм,— ҡәбереҢ шунда булыуы бар. Икенсе юлы осрашһаҡ, аяп тормам. Ҡараңғы төшкәс, мин һине үҙем оҙатып ҡуям.

Сырайы ағарынған Роман аларған күҙҙәрен уға төбәне, саҡ-саҡ телен әйләндереп, ләкин асыу менән һораны:

— Атырға алып бараһыңмы?.. Мәшәҡәтләнмә, ошонда ғына...

— Алдашып һөйләшә торған холҡом юҡ. Хәүефһеҙерәк булһын өсөн оҙатам, юғиһә эшселәр күреп ҡалһа... Аңлайһыңмы? Йыйын.

Роман тәҙрәгә күҙ һалды, ҡараңғы төшөп килә икән. Тороп, өндәшмәй генә кейенергә тотондо. Ҡейенеп бөткәс, һораны:

— Минең атты эйәрләтмәҫһеңме икән?

— Ҡеше күҙенә эләкмәү өсөн, йәйәү генә китеүең яҡшы.

Роман, башын эйеп, саҡ ҡына уйланып торҙо, шунан тура ҡарап әйтте:

— Ҡөслө кеше һин, Төлкөсура, тик ғәйрәтеңде бушҡа әрәм итәһең.

— Уныһы — минең эш. Әҙерһеңме?

Роман ишеккә табан атланы. Өйҙәге хужалыҡты алып барыусы ҡатын уларға аптырап ҡарап ҡалды.

Ялан ситенә еткәс, Төлкөсура туҡтаны.

— Йә, Роман, мин ҡалам.

— Оҙатыуың өсөн рәхмәт,— тине Роман, боролоп ҡарамай ғына һәм ары атланы.

Төлкөсура кеҫәһендәге наганды алды, саҡмаһын тартып ултыртты, ҡулын юғары күтәреп, тәпене тартты. Роман, шып туҡтап, артына боролдо, шунан ҡапыл кире әйләнде лә алға ташланды.

— Ха-ха-ха-ха-ха!..— Төлкөсураның көлөүенә яҙғы яланғас урман шаңдап яуап ҡайтарҙы.

Урмансылар керпек тә ҡаҡманы был төндө. Приказчиктән кассаның, келәттәрҙең асҡыстарын алып, аҡса, он, ярма, сәй-шәкәр, тауар бүлештеләр; байтаҡ араҡы ла бар икән, уны эсеп, ҡыҙмаса булып алдылар. Таң атҡас, приказчик менән лавкасыны эткеләп-төрткөләп Норош буйына алып киттеләр. Төлкөсура:

— Лавкасыға теймәйбеҙме әллә? — тигәйне, эшселәр ғауға күтәрҙе.

— Донъялағы иң әшәке кеше!

— Ошаҡсы!

— Ялағай!

— Урыны йәһәннәмдә уның!..

Икәүһенең дә аяҡтарына таш бауланылар ҙа буйраҡланып, ҡотороп аҡҡан Норошҡа ырғыттылар. Шунан баяр йорто эргәһенә әйләнеп килделәр. Ҡешеләр, бәйҙән

ысҡынған эт шикелле, ярһығайны, уларҙың хәҙер күптән бирле йыйылып килгән үс быуалары йырылған. Бына улар бер һарайҙан кәрәсин мискәһен тәгәрләтеп сығарҙылар. Унан биҙрәләргә, күнәктәргә кәрәсин ауҙаралар ҙа баяр өйөнөң эсенә югерәләр, лавка, келәттәр, һарайҙарҙың стеналарына һибәләр. Ҡаратау артынан ҡояш күтәрелеп килгәндә, Ҡыйғыр яланындағы бөтә ҡаралтыларҙы ялҡын ялмап алғайны инде. Кешеләр ҡысҡырышалар, югерешәләр, зыу-ғәләмәт киләләр, береһенең ни эшләгәнен икенсеһе белмәй.

— Ағай-эне! Ауылдаштар!..

Төлкөсураның көслө тауышы уларҙы саҡ ҡына айнытты, әкренләп уның тирәһенә йыйыла башланылар.

— Артабан ни эшләйбеҙ?

— Әйт, Төлкөсура!

Төлкөсура ҡулдарына балта, ағасты этеп ауҙара торған һөңгө, ҡыуғын өсөн әҙерләнгән багурҙар тотҡан, ярһыуҙан һәм ялҡын типкененән биттәре ҡыҙарған, күҙҙәре асыулы йылтыраған кешеләргә аҙыраҡ һүҙһеҙ ҡарап торҙо.

— Был әле эштең башы ғына, ағай-эне! Хәҙер Уйылдандың көлөн күккә осорабыҙ! Унан — Өстамаҡҡа китәбеҙ!..

— Ҡиттек!..

— Емерәбеҙ!..

— Байҙарҙың арт һабаҡтарын уҡытабыҙ! — тип геүләне халыҡ.

Шарт та шорт килеп, геүләп, өйҙәр, келәттәр, бараҡтар яна, стеналар гөрһөлдәп ауып төшкәндә күккә утлы торонбаштар оса.

Бына ҡулына ни етте шуны тотҡан, ярһыған кешеләр, береһенең һүҙен икенсеһе бүлеп шаулаша-ҡысҡырыша Ҡаратауға юнәлде. Уларҙың араһында һыбайлылар ҙа бар. Төлкөсура ла Романдың атын яйлап ҡына менеп алған. Уның иң алдан ауылға елеп ингеһе, Уйылданды елкәһенән тотоп өйөнән сығарғыһы һәм урам уртаһына баҫтырып, бөтә халыҡ алдында атып үлтергеһе килә. Ләкин башлыҡ кешегә бүтәндәрҙән айырылырға яраймы ни? Теҙгенен ҡаты тотоп, бер нисә һыбайлы менән йәйәүлеләрҙең алдынан килә. Бына ҡасандыр, бынан утыҙ йылға яҡын элек, Ҡотлоғужа менән осрашҡан урын... Төлкөсура үткәндәрҙе хәтерләй генә башлағайны.

Иң арттағыларҙан берәү:

— Һалдаттар! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Төлкөсура алға күҙ ташланы — бер кем күренмәй, арттан күмәк ат тояҡтары тауыштары, бер үк ваҡытта:

— Турағыҙ!.. Атығыҙ!..— тип русса ҡысҡырыуҙар ишеткәс, Төлкөсура, ҡапыл ғына ни эшләргә белмәй, аптырап ҡалды, шунан атын ҡырҡа артҡа борҙо. Уйы шау-шыу ҡупҡан ергә сабыу, кешеләрҙе һалдаттарға ҡаршы күтәреү ине лә, халыҡ этешә-төртөшә юлдың ике яғындағы урманға һибелеп ҡаса башлаған, артта — атыш, ҡысҡырыш. Төлкөсура күҙ асып йомған арала хәлде самалап алды: ҡапыл аптырап, ни эшләргә белмәй туҡтап ҡалған халыҡты нисек тә булһа һалдаттарға ҡаршы борорға кәрәк. Тар урман юлында һыбайлыға ҡарағанда йәйәүле кешегә һуғышыу еңелерәк бит. Әгәр халыҡ уның артынан эйәрһә, һалдаттарҙы аттарынан һөйрәп төшөрөп, үҙҙәрен дөмбәҫләп ташлауы бер ни тормаясаҡ. Төлкөсура атынан һикереп төштө лә:

— Ағай-эне, иптәштәр! Минең арттан! — тип ҡысҡырҙы, наганынан һауаға атып ебәрҙе һәм шау-шыуға ҡаршы йүгерҙе.— Туҡмағыҙ һалдаттарҙы!..

Тәүҙә ҡаушабыраҡ ҡалған кешеләр берәм-һерәм уға ҡушылды, шунан яңынан дәрт һәм үс тойғоһо тоҡанған урмансылар, ҡулдарындағы һәр төрлө ҡоралдарын болғай-болғай, тар урман юлынан, тотоп тыйғыһыҙ ташҡын булып, һалдаттар өҫтөнә ябырылды. Төлкөсура йүгереп барған ыңғайына ҡылысын кемгәлер һелтәргә әҙерләнгән һалдатты эйәренән атып осорҙо; был иһә кешеләргә тағы ла ҡыйыулыҡ өҫтәне. Атлы һалдаттар ун бишләп кенә ине. Һәр һыбайлыға бер юлы әллә нисәмә кеше ташланды; уларҙы эйәрҙәренән һөйрәп төшөрә, тапай, иҙә башланылар. Арттағы ике-өс һыбайлы ғына кире боролоп ҡасып ҡотолдо. Ҡалғандары бик тиҙ арала ҡанға туҙҙырып ташланғайны инде. Ҡылыстарын, мылтыҡтарын һалдырып алдылар, үҙҙәрен елтерәтеп килтереп, атлай алыр сиктән үткәндәрен аяҡтарынан һөйрәп бер ергә йыйҙылар. Эшселәр араһынан да бер нисә яраланған кеше бар ине.

— Их, Романды эләктереп булманы! — тине берәү.

— Ул бында инеме ни?

— Иң артта ине, иң алдан ҡасты!

— Иҙҙек бит иҙмәләрен!..

— Туҡтағыҙ әле, Төлкөсура ҡайҙа?!

— Тѳлкѳсура! — тип ҡысҡырҙы берәһе. Яуап булмаған, эҙләргә керештеләр.

Ул артабан юл ситендәрәк, ҡулбашын тотоп, ыңғырашып ята ине. Тѳҫѳ ҡасҡан, кейеменең яурыны лыпылдап торған ҡан. Йәһәт кенә сисендереп ҡараһалар, ҡалаҡ һѳйәген пуля тишеп ингән. Ҡемдер күлдәген сисә һалып, шытырҙатып йыртты ла ағаһы ѳҫтѳнә эйелгән Бикморатҡа тоттороҙо.

— Мә, бәйлә.

Халыҡ һыбайлылар менән алыша башлағас та, Тѳлкѳсура арттараҡ ниҙер ҡысҡырына-ҡысҡырына аттарын бейетеп бер урында тапанған офицер менән Романды күреп ҡалды һәм күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, наганын алға һоноп, тешен ҡыҫып, шуларға ҡарай югерҙе. Наганында патрондар бѳткәйне уның; ләкин яҡшылыҡ менән ебәрә тороп та, һалдаттар алып кире әйләнгән Романға ҡарата нәфрәте был мәлдә шул тиклем кѳслѳ ине, алдында оло ғәскәр торһа ла, Тѳлкѳсура барыбер уның ѳҫтѳнә ташланыуҙан тыйылып ҡала алмаҫ ине. Ѳс-дүрт сажин ҡалараҡ, үҙҙәренә ҡарай югергән хәтәр ғиәфәттәге кешегә офицер наганын тѳҙәне. Тѳлкѳсура, ҡурҡыныс тойоп, юл ситендәге ағас артына боҫоу ѳсѳн ялтанғайны, яурын башына кемдер ҡыҙған осло сүкеш менән ҡундырғандай булды, сайҡалып китте, йығылмау ѳсѳн ҡайынға йәбеште. Ул офицер менән Романдың, аттарын бороп, кире сапҡандарын күреп ҡалды; улар артынан югерергә теләгәндәй ынтылыш яһағайны, йѳҙтүбән йығылды.

Ике һайғауға арҡыры ағастар бәйләп, ботаҡ-сатаҡ түшәнеләр ҙә, Тѳлкѳсураны шуға һалып күтәреп, ауылға юнәлделәр. Бер аҙ барғас, Тѳлкѳсура иҫенә килеп, күҙҙәрен асты.

— Ҡайҙа барабыҙ әле? — тип һораны ул хәлһеҙ тауыш менән.

Йәнәш атлаған Бикморат ағаһына эйелде.

— Ауылға, ағай.

— Саҡ ҡына туҡтап торһағыҙсы?

Туҡтап, уны ергә ҡуйҙылар. Тѳлкѳсура, аҙыраҡ күҙен йомоп ятҡас, бѳтә кѳсѳн йыйып, тороп ултырҙы, шунан аяғүрә баҫты.

— Роман менән офицер ысҡындымы?

— Уның урынына бүтәндәрен дѳмѳктѳрҙѳк!

— Их, эләктереп булманы! — тип үкенде Тѳлкѳсура.— Әйҙәгеҙ, Уйылданының кѳлѳн күккә осорайыҡ!..

Төлкөсура ҡабат үҙен күтәртмәне, бик ҡыйын булһа ла, ваҡыты-ваҡыты менән күҙ алдары ҡараңғыланып, тәнтеп китһә лә, ауылға үҙ аяғы менән ҡайтып ингеһе килә ине уның. Шулай ҙа ауыл осонда уның хәле бөттө, ике кеше ҡултыҡлап, Бикмораттың өйөнә алып киттеләр.

Ярһыған халыҡ Уйылдандың өйөнөң аҫтын өҫкә килтерҙе, келәттәрен ватып инеп, нимәһе бар — шуны өйҙәренә ташый башланы. Уйылдан үҙе Белорет яғынан һаман ҡайтып етмәй, юл ыңғайында Ҡыпсаҡ старшинаһына һуғылып, шунда эсеп ята ине. Ҡайһылары өйҙө үртәргә йыйына башлағас, икенселәре:

— Бөтә ауылды үртәргә итәһегеҙме ни! — тип, уларҙы тыйҙылар.

Үткән төн буйы йоҡламаған, көн буйы ығы-зығы килеүҙән арыған, хәлһеҙләнгән халыҡ кискә табан баҫыла төштө, берәм-һәрәм өйҙәренә таралыша башланылар. Ҡотдос, өйөнә ҡайтыуҙан элек, Бикмораттарға инде. Төлкөсура урындыҡта һуҙылып ята, сырайы ағарған, күҙ ҡараштары хәлһеҙ. Эргәһендә әле хәсрәттең ни икәнен белмәгән Илһамы ултыра. Төлкөсураның яраһын Рәхилә йыуып, таҙа сепрәк менән бәйләп ҡуйғайны.

— Их, яралап харап иттеләр бит...— тип үкенде Төлкөсура.— Халыҡты ҡабаттан йыйып алып булмаҫ инде.

— Хәҙергә, ҡорҙаш-ҡоҙа, ул хаҡта һөйләмәй тор,— тине Ҡотдос.— Бына мин үҙең өсөн борсолоп индем әле.

— Ниңә? Миңә ни була?

— Аҡылһыҙ кеше кеүек һөйләнмә, Төлкөсура. Роман һине шулай тыныс ҡына ҡалдырыр тиһеңме ни? Иртәгә үк тағы һалдаттар алып килеп етер. Кеше күҙенән ситкәрәк йәшерергә кәрәк һине. Һауығырһың, унан күҙ күрер. Улың өсөн борсолма, Рәхилә ҡарар.

Уның һүҙен Бикморат та хупланы.

Ат ектеләр ҙә Төлкөсураны төнөн урманға алып киттеләр. Ауылдан дүрт-биш саҡрымдағы Бөркөт ҡаяһы һыртындағы ҡуйы ағас араһында ҡыуыш эшләп, ашап-эсеренә биреп, килеп хәл белешеп торорҙарын әйтеп, Бикморат менән Ҡотдос ауылға кире боролдо.

## IX

Уйылдан әле артҡа, әле алға алан-йолан ҡарай, ләкин шомло, тып-тын ҡараңғылыҡта һис ни күрермен тимә. Юл тирәһендәге ағас олондары уға кеше һыны булып кү-

ренә, урманда ҡоро ботаҡ һынып төшһә, Уйылдан ялп итеп тауыш ишетелгән яҡҡа борола. Бына-бына төн пәрҙәһе артынан Төлкөсура килеп сығыр ҙа өҫтөнә ташланыр кеүек. Ат туҡтауһыҙ елеп барһа ла, ул Сәхиҙе эленән-әле:

— Атыңды ҡыуала! Ниңә яйлайһың! — тип ҡабаландыра.

Ныҡ көсөргәнештән, бара торғас, Уйылдандың бөтә тәне ҡалтырана башланы. Хатта тештәре тешкә теймәй. Ул, үҙен тынысландырыу өсөн, эстән генә ниндәйҙер һабаҡ уҡып маташа, ләкин бутала һәм, үҙенә-үҙе йәне көйөп, хәтәр һүгенә. Болот аҫтынан ай килеп сыҡҡайны, тағы терт итеп ҡалды ул. Тирә-яғына алан-йолан ҡаранды,— асыҡ урындан китеп баралар. Айҙың зәңгәрһыу яҡтыһы уға ҡояш яҡтыһынан да сағыу тойола. Үҙҙәре әллә нисәмә саҡрымдан күренеп торалар ҙыр һымаҡ. Туҡта, артта бер ҡарасҡы күренә түгелме? Әллә һыбайлы инде?

— Сәхи, артҡа ҡара әле, бер кеше сабып килгән һымаҡ.

— Китсе!..— Сәхи ялп итеп артҡа боролдо, төбәлеп ҡараны-ҡараны, һис ни күрмәне.— Бер кем дә юҡ бит.

Уйылдан уның ҡулынан дилбегәне тартып алды.

— Һиңә юҡ инде!..

Аяғүрә баҫып, атын сыбыртҡыларға тотондо Уйылдан. Исмаһам, анау урманға инеп ҡалырға кәрәк. Төлкөсура ҡыуып етә башлаһа, боҫор урын булыр. Их, бынау айы ҡайҙан килеп сыҡты!..

Урманға ла еттеләр, ай ҙа болот аҫтына сумды. Тирә-юнде баяғынан да хәтәр ҡараңғылыҡ солғаны. Ләкин Уйылдандың йөрәгендәге шом бөтмәне, тәне лә һаман дерелдәй. Хәҙер Төлкөсура аңғармаҫтан ғына ҡыуып етер ҙә өҫтөнә ырғыр кеүек.

— Уйылдан ағай, ул тиклем ҡыуалама әле. Атты сәсәтеп ҡуйһаң, ни эшләрбеҙ?

— Лыҡылдама! — Шулай тиһә лә, ҡайһылыр арала аҡылын йыйҙы Уйылдан. Ысынлап та, ат янып йығылһа, ҡайҙа бараһың? Ул дилбегәһен Сәхигә тотторҙо ла, хәлһеҙләнеп, сананың артына терәлде, күҙҙәрен йомдо. Алдында күкле-йәшелле осҡондар һикергеләгән, ниндәйҙер упҡынға осоп төшөп барған һымаҡ...

Таң атыуға, бәләкәй генә ауылға килеп ингәйнеләр, Уйылдан телен саҡ-саҡ әйләндереп ғыжылданы.

— Атыңды берәй ҡапҡаға бор...
— Туҡтайбыҙмы ни?
— Борол, тим!
Уйылдандың ниндәй ҙә булһа ышыҡҡа боҫҡоһо килә ине.
— Мосафирҙәргә ишек асыҡ, — тип күлдәк-ыштандан ғына ҡаршылаған хужаға алйыған, аларған күҙҙәре менән текәлеп торҙо, быуындары тағалып, ишек төбөндәге эскәмйәгә ултырҙы.
— Ҡем... ы-ы-ы... энем, урын һалып бирһәң, ятыр инем. Ауырыҡһынып торам.
Уға урындыҡтың стена яҡ ситенә урын рәтләп бирҙеләр. Уйылдан үҙенең тунын бөркәнеп ятты. Ләкин тәне ҡалтырау һаман үтмәй ине. Башын ҡалҡытып, берәй нәмә ҡатлап ябыуҙарын һораны. Уға юрған килтереп бөркәнеләр. Юрғанға, күрәһең, бала-сыға һыҡраһы һеңеп бөткән, танауҙы ярырлыҡ еҫ бәрелде. Тик өндәшер сараһы юҡ. Бынау ҡалтыраныу үтһен дә бер аҙ йоҡлап алырға ине. Боршаланып, ах та ух килеп ята торғас, ойоп киткәйне, күҙе алдына йә Төлкөсура, йә Сажидә килә лә баҫа.
Уяулы-йоҡоло ятып көн үткәрҙе Уйылдан, хатта сәй эсергә лә торманы. Яҡтыға баш ҡалҡытырға ла ҡурҡа ине. Күҙ бәйләнеү менән, Сәхигә ат егергә ҡушты. Дөпөлдәп һуҡҡан йөрәген баҫыу өсөн, хужанан һалҡын һыу һорап алып эсте лә санаға сығып ултырҙы.
Әүжәндә белешенең тирә-яғы бейек ҡойма менән уратылған ихатаһына инеп, артында таҡта ҡапҡа ябылғас ҡына, иркен тын алып ҡуйҙы ул. Белеше заводта мастер булып эшләй, бик иркен йәшәй ине. Ул таң һарыһы менән килеп төшкән Уйылданды әйҙүкләп өйөнә индерҙе.
— Төнө менән ҡайһы яҡтан киләһең? — тип һораны.
— Хәҙер шул төнөн генә йөрөмәһәң, көндөҙ юлы юлмы, — тине Уйылдан, сисенә-сисенә. — Ваҡ-төйәк алайым тип, Белореткә барғайным. Насар юлда эт күрмәгәнен күрелде. Санька, берәй нәмәң юҡмы? Әллә ни булды, бөтә тәнем ҡойолоп төшөп килә.
Белеше уның нимә һорағанын шундуҡ аңланы, ярты шешә араҡы килтереп ултыртты.
— Шул ғына инде, Вилдан.
— Етәр. Бөткәнсе ҡой.
Эсеп ебәргәс, Уйылдан бөтөнләй тынысланғандай булды. Урын йәйҙерҙе. Бына ул йомшаҡ урында ята, хәмер

рәхәт иттереп ас ҡарынды ҡытыҡлай, бөтә тәненә таралa. Тиҙ үк йоҡлап китте ул һәм көн буйы үлгән кеүек ҡыбырҙамай ятты. Белеше эштән ҡайтҡас уятҡанда, йән тиргә төшкәйне ул. Тәне бушап, еңеләйеп ҡалған, ҡыбырҙаһа, бөтә һөйәктәре ҡойолоп китер төҫлө.

Тороп, битен ыуалап, һаҡалын һыйпаштырып ултырҙы. Тышҡа сығып килеп, битен йыуҙы. «Бөгөн төндә ҡайтып етергә кәрәк»,— тип уйланы.

Өҫтәл артында һөйләшеп ултырғанда:

— Белореттә ни хәлдәр бар? — тип һораны белеше.— Завод эшселәре бик яман ҡоторона икән, тип ишеткәйнек.

— Әллә инде, мин ул-был хәбәр менән ҡыҙыҡһынманым.

— Беҙҙә быға тиклем әллә ни юҡ ине. Көнтән түгел шул Белореттән ике кеше килеп, ҡотҡо таратып йөрөгән. Өфөлә баҫылған прокламацияларҙы таратып киткәндәр. Халыҡ хәҙер эт шикелле ҡоторорға ғына тора бит. Бөгөн заводта шау-шыу булып алды, көнлөк хаҡын арттырмаһағыҙ, иртәгә эшкә сыҡмайбыҙ, тиҙәр.

— Белмәҫһең инде был замандың. Әллә ни хәлгә төшөрбөҙ әле, — тип көрһөндө Уйылдан. — Ана Лапшиндең эшселәре лә күтәрелеп бәрелергә әҙер тора. Халыҡ боҙолдо.

— Әйткәндәй, Белореттән килгән ҡотҡосоларҙың береһе башҡорт булған. Дөрөҫ булһа, уны һеҙҙең ауылдыҡы тип һөйләйҙәр. Кем икән, белмәйһеңме?

Белешенең был һүҙе шаңҡытты Уйылданды, ауыҙына ҡапҡан икмәген сәйнәмәйенсә туҡтап ҡалды. «Төлкөсура!» тигән уй мейеһен телеп үтте.

— Ниңә аптыраның, Вилдан? Беләһеңме әллә?

«Тимәк, Төлкөсура был яҡта йөрөй. Ни эшләргә?» Үҙен ҡулға алырға тырышты Уйылдан. Башына килгән ҡурҡыныс уйҙы кире ҡағырға теләп, белешенә:

— Ҡайҙан беләйем мин, юҡ хәбәрҙер ул,— тип яуап бирҙе.

Ашау, һөйләшеү ҡайғыһы киткәйне инде.

— Юл туңаҙығандыр инде, ҡуҙғалайыҡ,— тип атын ектерҙе ул. Ләкин ауылына ҡайтманы, Ҡыпсаҡ волосенә юл тотто. Ундағы старшина ла:

— Бер урыҫ менән мосолман кешеһе ауылдарға әллә ниндәй ҡағыҙ таратып, көфөр һүҙ һөйләп йөрөгән,— тигәс, бөтөнләй алйыған Уйылдан өс көн буйы баш ҡал-

ҡытмай бал һемерҙе. Дүртенсе көнөнә иҫерек көйө ат егергә ҡушты. Эскән баш менән, урядник саҡыртырмын, ауылда булһа, Төлкөсураны ҡулға алдырырмын, тип уйлай ине. Өйөнә ҡайтып ингәйне, уны ике бисәһе илап ҡаршыланы. Уларҙың өҙә-йолҡа һөйләгән хәбәренән ике нәмәне генә аңланы ул: Төлкөсура ауылда. Уның байлығын талағандар. Уйылдан сисенеп тә торманы, ат эйәрләтте һәм төнөн юлға сыҡты. Һис кисекмәҫтән өйәҙгә барып етергә, хәлде һөйләп бирергә, ҡоторонған халыҡты, һалдаттар саҡыртып, аҡылға ултыртырға, Төлкөсураны ҡулға төшөрөргә уйлай ине.

Стәрлегә үк барып етергә тура килмәне уға. Кинйәкәүгә етәрәк, ғайтаҡ һалдат, полицейскийҙәр менән Роман тап булды. Пристав үҙе лә килә ята икән. Уйылдан еңел тын алды. Төлкөсураның һәр саҡ күҙ алдында торған ҡурҡыныс шәүләһе артҡа сигенде.

* *
*

Көнө буйы һыҙланып, урынынан тормай ятты Төлкөсура. Баш осонда ғына ҡоштар һайрай, тышта аяҙ, йылы, йәҙҙың иң матур мәле. Уның шифалы һауаһын һулап, ҡоштар йырын тыңлап, рәхәтләнеп йөрө ине лә бит!..

Төнөн Бикморат килде, һөйләшеп ултырҙылар.

— Минең арҡала һиңә бәйләнеүҙәре бар, ҡустым.

Бикморат ауылға һалдаттар, полицейскийҙәр килеп тулыуын, ике-өс кешене ҡулға алыуҙарын, ҡалғандарҙы ҡорал менән ҡурҡытып ҡыуғынға ебәреүҙәрен һөйләне.

— Өй беренсә һине эҙләйҙәр. Беҙгә килеп бөтә урынды тентеп ғөттөләр. Мин һине Белорет яғына сығып киткәндер ул, тинем. Миңә лә ҡыуғынға китергә тура килер инде, ағай. Әгәр бармаһаң, иртәгә үк ҡулға алабыҙ, тинеләр. Ҡайным — Ҡотдос ҡорҙашың килеп йөрөр.— Бикморат, ғәйепле кеше кеүек, башын түбән эйҙе.

— Ярар, ҡустым, барып ҡайт. Былайға киткәс, ҡаршы тороп, уларҙы әле генә бер ни ҙә эшләтеп булмай инде. Тик бер нәмәне онотма, ҡустым: быныһы әле ирекле тормош өсөн көрәштең башы ғына. Уны яулап алмайынса тынысланырға ярамай. Ҡайғырма, ҡустым, мин шәбәйермен дә осоп та китермен, тиккә генә Бөркөт ҡаяһы һыртында ятмайым бит,— Төлкөсура көлөмһөрәне, сәләмәт ҡулы менән ҡустыһын ҡосаҡлап алды, шырт һаҡал төгө баҫҡан битенән үпте.— Тағы бер үтенесем бар,

ҡустым. Киленгә әйт, минең малайҙы ауырһынмай ҡараһын. Сажидәмдән ҡалған берҙән-бер ҡомартҡым бит...

Төлкөсураға әкренләп хәл керә башлағайны инде. Ул, Бикморат ҡайтып киткәс, төрлө уйҙарға тарып ятты ла тышта таң зәңгәрлеге тимгелләнеү менән ҡыуышынан сыҡты. Тирә-яҡ тып-тын, таң еле иҫеп үткәндә ағас ботаҡтары бер-береһенә тейеп, әкрен генә шыптырҙашып ҡуя. Урман эсе яңы шытып сыҡҡан йәш үлән, шартлап ярылыр сиккә еткән ағас бөрөләре, ылыҫ еҫтәре менән тулы. Төлкөсура ипләп кенә атлап Бөркөт ҡаяһына табан йүнәлде. Унда байтаҡ йылдарҙан бирле булғаны юҡ ине. Ҡаяның осло морононданғы өй дәүмәле таш өҫтөнә ул, һөҙәк яҡтағы киртләстәргә баҫып, һаҡлыҡ менән генә күтәрелде һәм уның алдында таң зәңгәрлегенә мансылған хозур донъя асылды. Тирә-яҡта — иге-сиге күренмәгән зәңгәр урмандар, түбәндә — ярһыу Норош зәңгәр тулҡындарын ҡыуалай. Бына түбәндәге әрәмәлектә сут-сут-сут, түр-рр тип бөгөнгө иртәлә тәүге ҡош тауышы ишетелде. Әйтерһең, был бүтәндәренә иртәнге «эшкә» тотоноу өсөн бойороҡ булды: тәүҙә береһе, унан икенсеһе үҙ тауышы, үҙ көйө менән уға ҡушылды һәм, күп тә үтмәй, бөтә тирә-яҡ иҫ китмәле йыр-моңға күмелде.

— Ана ул! Ана!..

— Атмаҫҡа! Терелəй алырға!..

Ошо тауыштарға һиҫкәнеүҙән, Төлкөсура, тертләп, саҡ түбәнгә ҡолап төшмәне; артына әйләнеп ҡараһа, бер өйөр ҡоралды һалдаттар уға ҡарай йүгерә.

Туҡта, анау арттан ҡысҡырынып һыбай килгәндәре Роман менән Уйылдан бит! Их, бына хәҙер ике генә яһаулы ҡорал булһын ине Төлкөсураның ҡулында!

Һалдаттар ҡая өҫтөндә сурайып ятҡан өй дәүмәле таш эргәһенә үк килеп еткәйеләр инде, юғары менер урын эҙләп, йүгерешеп йөрөйҙәр. Бына Уйылдан менән Роман да сабып килеп етте.

— Эләктеңме, каторжан! — Быныһы Роман тауышы.

— Хәҙер ҡайҙа барырһың икән, кафыр! — Уйылдан йөҙрөгөн төйөп шулай ҡысҡыра.

Ана, һалдаттар һөҙәк яҡтан үргә юрмалашып күтәрелә башланы. Юҡ, дошмандары ҡулына тере көйө бирeләсәге юҡ Төлкөсураның! Уның күҙҙәренә мыҫҡыллы йылмайып, түбәнһетеп ҡабат ҡарай алмаясаҡ улар!

Ҡайһылыр арала уның күҙенә Сажидәһе, ҡыҙы салынып ҡалғандай булды; мейеһен: «Илһамым япа-яңғыҙ

ҡалырмы икән ни?» — тигән уй ҡыйып үтте. Тик уны был мәлдә хәтәр аҙымдан тыйырлыҡ көс юҡ ине.

Төлкөсура таң зәңгәрлегенә мансылған матур донъяға бер күҙ ташланы ла ҡот осмалы бейеклектән түбәндә ажғырып-шаулап аҡҡан йылгага ырғыны.

* *
*

Төлкөсура ҡаяһының аҫтында талығыу белмәҫ Норош, тулҡындарын ярға сайпылдырып, ятыу һәм сыбай урындарҙа шым ғына, шарныларҙа шаулап-ярһып аға ла аға. Һыртта — мәңге йәшел ҡарагайҙар. Улар араһынан сыйҙым-сыйҙым ҡара биҙәкле аҡ күлдәк кейгән ҡайындар, йәшел еләнле уҫаҡтар, егет ҡуйынындагы ҡыҙ һымаҡ, оялсан ғына, шым гына ҡарап ултыра.

Кеше үҙен уратып алған ошо тәбиғәт күренешенә һоҡлана, дәртләнеп, һөрәнләп ебәрә:

— Аһа-һа-һауyy!..

Уның тауышы алыҫтарға китә һәм, мәғрур урманды йырып үтә алмайынса, кире ҡаҡлығып, шаңдау булып үҙенә ҡайта. Кешегә был әле генә һөйләнгән тарих шаңдауы һымаҡ тойола. Кеше китә башлаған еренән туҡтай, ҡаяның морононда уҡ ятҡан өйҙәй ҙур таш яғына күҙ һала, унда бөркөт ҡарашлы, ҡурҡыу белмәҫ кешенең күкрәк киреп баҫып торғанын күргәндәй була...

Бына быға са талгын ғына иҫкән ел көсәйә төштө, ағастар баш сайҡай, шаулай башланы. Әйтерһең, быға тиклем шым ғына ултырған урман терелде, телгә килде. Кеше урман шауына ҡолаҡ һала һәм ошо шау-геүләү араһынан бер тауышты айырым асыҡ ишетә:

— Мин — мәңгелек! Мәңгелек урман мин!

Кеше, уйсанланып, һыу ағышына ҡаршы — ауылы яғына атлай.

*Беренсе китап бөттө.*

Малеевка — Аҡлан.
1973—1974.